// Ағиҙел

Өфө,
октябрь
2013

10(1086)

ӘҘӘБИ-НӘФИС ҺӘМ ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ ЖУРНАЛ
ЛИТЕРАТУРНО-ХУДОЖЕСТВЕННЫЙ
И ОБЩЕСТВЕННО-ПОЛИТИЧЕСКИЙ ЖУРНАЛ

Ойоштороусылары:

Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте,
Башҡортостан Яҙыусылар берлеге,
Редакция коллективы.

Учредители:

Правительство Республики Башкортостан,
Союз писателей Республики Башкортостан,
Коллектив редакции.

1923 йылдың март айынан башлап сыға.
Башҡорт телендә айына бер тапҡыр баҫыла.
Издается с марта 1923 года.
Выходит один раз в месяц на башкирском языке.

АҒИҘЕЛ ● АГИДЕЛЬ

***Баш мөхәррир***

Әмир ӘМИНЕВ

***Мөхәрририәт:***,

Рауил БИКБАЕВ,
Наил ҒӘЙЕТБАЕВ,
Рәмил ЙӘНБӘК *(баш мөхәррир урынбаҫары)*,
Марат ҠӘРИМОВ,
Фәнил ҠҮЗБӘКОВ *(бүлек мөхәррире)*,
Ноғман МУСИН,
Риф ТОЙҒОНОВ,
Ғайса ХӨСӘЙЕНОВ,
Рәшит ШӘКҮР,
Сабир ШӘРИПОВ *(бүлек мөхәррире)*,

***Редакция хеҙмәткәрҙәре:***

Гөлназ Ҡотоева *(яуаплы сәркәтип)*,
Юлай Янбаев *(баш мөхәррирҙең хужалыҡ эштәре буйынса урынбаҫары)*,
Гүзәлиә Тутаева,Тәнзилә Сәлихова (корректорҙар),
Рәйсә Ҡамалетдинова, Айһылыу Мофазалова *(компьютерҙа йыйыусылар)*,
Роза Шәйнурова *(компьютерҙа нәшергә әҙерләүсе)*,
Зөлфиә Биктимерова, Рима Нәзифуллина *(бухгалтерҙар)*.

Журнал Элемтә, мәғлүмәт технологиялары һәм масса коммуникациялары өлкәһендә күҙәтеү
буйынса федераль хеҙмәттә 2009 йылдың 14 авгусында теркәлде.
Таныҡлыҡ ПИ № ФС77-37206.

Журнал редакцияла компьютерҙа йыйылды һәм биттәргә һалынды.
Баҫырға ҡул ҡуйылды 01.10. 2013. Офсет ҡағыҙы. Форматы 70х100 1/16.
“Times” гарнитураһы. Офсет ысулы менән баҫылды.
Шартлы баҫма табаҡ 15,6. Иҫәп нәш. табаҡ 18,1.
Тиражы 3 141 экз. Һатыуҙа хаҡы ирекле. Заказ № 2.0159.13.

**Беҙҙең адрес:** 450001, Башҡортостан Республикаһы,
Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 2, 4-се ҡат.
«Ағиҙел» журналы редакцияһы.
**Наш адрес:** 450001, Республика Башкортостан,
г.Уфа, проспект Октября, 2, 4-й этаж.
Наш адрес в Интернете: Agideljurn@mail.ru.
http://agidel-rb.ru.

Баҫма Матбуғат һәм киң мәғлүмәт коммуникациялары буйынса федераль
агентлыҡтың финанс ярҙамында сығарылды.
Выпуск издания осуществлен при финансовой поддержке
Федерального агенства по печати и массовым коммуникациям.

Башҡортостан Республикаһының Өфө полиграфкомбинаты
дәүләт унитар предприятиеһында баҫылды.
(450001, Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 2).
Отпечатано в Государственном унитарном предприятии
Республики Башкортостан Уфимский полиграфкомбинат.
(450001, г.Уфа, пр.Октября, 2).

Банкыла беҙҙең реквизиттар: журнал «Агидель» ИНН 0274014887
р/с 40602810200830000004, к/с 30101810600000000770
филиал ОАО «Урало-Сибирский» банк г.Уфы, БИК 048073770

**© «Ағиҙел», 2013 (10,1086)**

# БЫЛ ҺАНДА:

ШИҒРИӘТ

**Гөлфиә Юнысова.** Бер һүҙҙән. Шиғырҙар. ..................................5
**Гөлнара Хәлфетдинова.** Уттан бер саҡҡымын. Шиғырҙар. ......14
**Фәрит Суфияров.** Тыуған ерҙә. Шиғырҙар. ...............................21

СӘСМӘ ӘҪӘРҘӘР

**Иҙрис Ноғманов.** Сыбай ҡашҡа. Повесть-ҡисса. ....................24
**Әмир Әминев.** Һуңлаған бүләк. Повесть. ..................................96

БЕҘҘЕҢ ЮБИЛЯРҘАР

**Зәйтүнә Шәрипова.** Ғүмер үә ғилем баҫҡыстары
*(Академик Зиннур Нурғәлинға – 85 йәш).* ....................................140

БЕҘҘЕҢ КАЛЕНДАРЬ

**Ризван Хажиев.** Иңдәрендә ине ил хәстәре
*(Партия һәм дәүләттең күренекле эшмәкәре*
*Фәйзрахман Заһафурановтың тыуыуына – 100 йыл).* Очерк. ....144
**Рәмил Йәнбәк.** Юғары рухлы әҙип
*(Әнүәр Бикчәнтәевтың тыуыуына – 100 йыл).* ............................159
**Мостай Кәрим, Рафаэль Сафин, Әхиәр Хәким.** Шағир
хаҡында замандаштары *(Муса Гәлиҙең тыуыуына – 90 йыл).* ......161

ТЕРЕ ХӘТЕР

**Нурия Килмөхәмәтова.** «Минең ҡәҙерлеләрем...»
Иҫтәлектәр. Башы. ..................................................................168

ӘҘӘБИ-МӘҘӘНИ МӨХИТ

# В НАШЕМ НОМЕРЕ:

ПОЭЗИЯ

**Г. Юнусова, Г. Хальфетдинова, Ф. Суфияров.** *Стихи.*

ПРОЗА

**И. Нугманов.** Белолобый конь. *Быль-повествование.*
**А. Аминев.** Запоздалый подарок. *Повесть.*

НАШИ ЮБИЛЯРЫ

**З. Шарипова.** Судьбоносные ступени жизни и научной деятельности *(85 лет академику Зиннуру Нургалину*).

НАШ КАЛЕНДАРЬ

**Р. Хажиев**. Жил заботой о родине *(100 лет со дня рождения видного государственного деятеля Ф. Загафуранова). Очерк.*
**Рамиль Янбек.** Творец высокой духовности *(100 лет со дня рождения А. Бикчантеева).*
**Мустай Карим, Р. Сафин, Ахияр Хаким**. О Мусе собратья по перу *(90 лет со дня рождения Мусы Гали).*

ЖИВАЯ ПАМЯТЬ

**Н. Кильмухаметова**. Премудрости моих дорог. *Воспоминания. Начало.*

ЛИТЕРАТУРА, КУЛЬТУРА...

---

**Телефондар:**
Баш мөхәррир — 277-76-88 (факс)
Баш мөхәррир урынбаҫары һәм яуаплы сәркәтип — 274-89-65
Баш мөхәррирҙең хужалыҡ эштәре һәм подписка буйынса урынбаҫары —292-77-60 (факс)
Шиғриәт һәм сәнғәт, тәнҡит, публицистика бүлектәре —277-87-73
Проза бүлеге — 277-87-50
Бухгалтерия — 277-78-90 (факс)

● Редакция фекере авторҙар фекере менән тап килмәҫкә лә мөмкин.
● Редакцияға килгән ҡулъяҙмалар рецензияланмай һәм кире ҡайтарылмай.
● Журналда сыҡҡан яҙмаларҙы күсереп баҫҡанда «Ағиҙел»дән алынғанлығын күрһәтеү мотлаҡ.
● Нәшриәт ғәйебе менән киткән етешһеҙлектәр өсөн редакция яуап бирмәй. Улар хаҡында 223-76-62 телефоны менән хәбәр итергә кәрәк.



**Гөлфиә
ЮНЫСОВА**

## *Бер һүҙҙән*

*Ебәк кенә хистәремдә
Фекерҙәр — мәрйен сылбыр.
Күҙ алдымда ялтлап китте,
Сыңлап китте бер шиғыр.*

*Бер һүҙеңдән өркөп ҡасты
Шул илаһи мәлдәрем.
Өҙөлдө ебәк ептәрем,
Ҡойолдо мәрйендәрем.*

## *Нисек өйрәтһен?*

*Ҡоштарҙа ла бер иш түгел
Осош, көнкүреш, зауыҡ.
Шуға бөркөт балаһына
Ҡаяларға осоу серен
Нисек өйрәтһен тауыҡ?!*

## *Шарты бар*

*Сәм — кешегә этәргес көс,
Илгә маҡсатҡа ҡәҙәр.
Шарты бар, көнсөллөк менән
Туғанлашмаһа әгәр.*

*Гөлфиә Юнысова (Иҙелбаева, 1948) Әлшәй районы Һарыш ауылынан, БДУ-ны тамамлаған. Республика матбуғатында, 1978 — 1999 йылдарҙа «Башҡортостан ҡыҙы» журналының баш мөхәррире булып эшләне. 1990 — 1993 йылдарҙа Рәсәй Федерацияһының халыҡ депутаты, 1999 — 2003 йылдарҙа Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы — Ҡоролтай депутаты, ике тиҫтәгә яҡын шиғри йыйынтыҡ авторы. Һәҙиә Дәүләтшина исемендәге премия лауреаты.*

## Өс эт

*Майлы һөйәк ташланы ла*
*Ике эт араһына,*
*Ҡарап тора, сәбәкәйләп,*
*Уларҙың талашына.*

*Һөйәк онотолдо. Эттәр*
*Һуғыша ҡанға туҙып.*
*Һөйәк ташлаусыға ҡыҙыҡ,*
*Һөсләтә һаман ҡыҙып.*

*Һуғышсылар туҡтап ҡалды,*
*Уртаҡ дошманды күреп,*
*Һәм ҡапыл һөсләтеүсегә*
*Ташланды улар өрөп.*

*Ә уныһы ситкә ҡаса:*
*— Ах, эттәр! — тип үкереп.*
*Аҡбай һөйәкте тиҙ генә*
*Бирә уға килтереп.*

*Сыйнап нимәлер аңлата*
*Ҡурҡҡан иргә Алабай.*
*— Һин беҙҙән дә этерәкһең,—*
*Тип кенә әйтә алмай.*

## Әйтеү, күреү генә етмәй

*«Ут» тип әйтеү —*
*Телде яндырмай.*
*Шишмә күреү —*
*Һыуһын ҡандырмай.*

## Яңылышҡан бар

*Яҙ хаҡында дәртле йыр ишетеп,*
*Инде яҙ еткән, тип һаташҡан бар,*
*Асыҡ ишектәрҙә йоҙаҡ күреп,*
*Асҡыс яратырға маташҡан бар.*

## Ауыр хәл

*Урманға килде Фарман,*
*Фарман бигерәк яман:*
*— Ағастарҙы һатырға!*
*Кейектәрҙе атырға!*

*Ә айыуға ваҡыт еткән*
*Өңгә инеп ятырға.*

*— Урман һинеке түгел! — тип,—*
*Һаҡлап, ныҡыраҡ күмел! — тип*
*Нисектәр аңлатырға?!*

## Үрмәләүсе еңелерәк

*Төҙ ҡайынға һыйынмай, тип*
*Ҡарамағыҙ уға көлөбөрәк, —*
*Кәкрәйеп үҫкән ағастарға*
*Үрмәләүсе күпкә еңелерәк.*

## Шәүлә

*— Кем шәүләһе ҙурыраҡ? — тип*
*Ҡарай инек үлсәшеп.*
*Бала саҡ — ғәҙеллек иле:*
*Бер кем еңмәне ул саҡта*
*Хәйләләшеп, көсләшеп.*

*Шәүлә бит — кәүҙәгә ҡарап, —*
*Был хәҡиҡәтте ул осор*
*Ныҡыраҡ аңлағанбыҙ,*
*Хәҙер киреһен әйтһәләр,*
*Күп осраҡта, күрәләтә,*
*Ышанып алданабыҙ.*

## Япраҡтар

*Ел иҫкәс, аҫҡы ботаҡтан*
*Япраҡтар осто пырлап.*
*Өҫкөләр уларға ҡарап*
*Нисек шаулаша хурлап.*

*Ҡыш өсөн бит һәр кем тигеҙ,*
*Эй, бер ҡатлы япраҡтар! —*
*Үҙҙәре ни һис өҙөлмәҫ,*
*Мәңге осмаҫ һымаҡтар.*

## Бармы икән?

*— Йылан йылыҡҡанмын, — тиһең*
*Күпме йыл ҡуйыныңда.*
*Һин дә ҡатнашҡанһың икән*
*Хыянат уйынында.*

*Былдай хәлде, төңөлгәнде*
*Кисереүҙәре ҡыйын.*
*Бармы икән һуң донъяла*
*Йыланһыҙ ғына ҡуйын?*

## Дөрөҫ кеше

*— Иллә уңдым яңы күршемдән! — тип*
*Сәрбиямал апай һүҙ башлай.*
*Шундай ихлас, дөрөҫ кеше инде,*
*Кәрәкмәһә, һис тә алдашмай.*

## Хөрмәтем арта

*Кемдер ап-аҡ намыҫыңды*
*Ярата ҡараларға.*
*Кемдер, дауалаған булып,*
*Тоҙ һала яраларға.*

*Кемдер, ғәйбәтеңде иләп,*
*Сәсә бар тарафтарға.*
*Көндән-көн хөрмәтем арта*
*Шуға битарафтарға.*

## Нимә әйтәйем тағы?

*— Иң күңелһеҙ — ул ниндәй таң?*
*— Нурланып атмағаны.*
*Бәхетһеҙ йән йөрәгенә*
*Урындар тапмағаны.*

*Насар: ваз кискән эшеңдең*
*Тағы ҡабатланғаны.*
*Нимә әйтәйем тағы?*
*— Иң ҡурҡыныс әҙәм кем ул?*
*— Үҙен яратмағаны.*

## Күңеленә күрә — көнө

*Ҡурҡаҡтарҙың бар булмышы —*
*Дер ҡалтырай.*
*Эскерленең эсе серек,*
*Тыш — ялтырай.*

*Ваҡсыл ҡайҙа йәшәмәһен,*
*Ваҡ ҡаласаҡ.*
*Алсаҡтарҙың тирә-яғы*
*Нурлы, алсаҡ.*

*Һәр бер кеше үҙ донъяһын*
*Үҙе ҡора.*
*Ниндәй донъя ҡора ала,*
*Шунда тора.*

## Намыҫ

*Күп нәмәләр шартлы был донъяла:*
*Бейеклектәр шартлы, киңлектәр.*
*Шартлы хатта бәхет төшөнсәһе,*
*Матурлыҡтар, аҡыл, тиңлектәр...*

*Ә намыҫтың бына үлсәме юҡ,*
*Һәм юҡ сағыштырыр төшөнсә.*
*Бары тик ул һаҡлай күңелдәрҙе*
*Саф, юғары, яҡты көйөнсә.*

## Ҡайын миндеге

*Урман еҫтәре таралды:*
*Ҡулымда — ҡайын миндек.*
*Һәр япрағы йәшел йәйҙән*
*Ебәрелгән хат кеүек.*

*Оҙаҡламай быу борҡотоп,*
*Ләүкәлә сабынырмын.*
*Арыуҙарҙан, яныуҙарҙан,*
*Шиктәрҙән арынырмын.*

*Көҙгөлө тиҫтә йылдарға*
*Йәш булып сағылырмын.*
*Уға ҡарап, аҡ ҡайындай,*
*Бер ҡыҙҙы һағынырмын.*

## Аҡыл һәм холоҡ

*Аҡыллы, тип аҡыл юйма,*
*Холҡон һынап тороп тор,*
*Кешеләрҙе яҡынайтҡан —*
*Аҡыл түгел, холоҡтор.*

## Елгә осорма!

*Һәр һүҙ ғәзиз милләт теле өсөн,*
*Һүҙ — оло көс һәр бер осорҙа.*
*Ҡайҙан ел иҫкәнен аңлатам тип,*
*Һүҙҙәреңде елгә осорма!*

## Ҡурҡам бит

*— Тып-тыныс ҡына ятмай,*
*Ниңә өрәһең, Аҡбай?*
*— Ҡараңғы төндө күрәм,*
*Ҡурҡам бит — шуға өрәм.*

## Ҡәртәле юл

*— Ниңә, ҡустым, бик бойоҡһоң,*
*Ниңә күңелең китек?*
*— Ҡәртәләр күп бит юлымда,*
*Һис булмай алға китеп.*

*— Ҡәртәләргә йыш абынғас,*
*Барыр юлың түгелдер.*
*Аҙашып йөрөйһөңдөр һин*
*Баҡсаһында кемдеңдер.*

## Мөхәббәт менән иҫәпләш?

*Мөхәббәтте  һатып алып булмай,*
*Был турала яҡшы белә һәр кем,*
*Әгәр инде иҫәпләшмәгәндә,*
*Бик ҡиммәткә  төшөүе лә мөмкин.*

## Хыялбай

*Хыялбайҙың  йәне-тәне*
*Өҙлөкһөҙ яраларҙа:*
*Сөнки күктән күберәк ҡолай*
*Башҡаға ҡарағанда.*

## Тоҙло күл

*Йәйен — һыуы тоҙло күл,*
*Ҡыштар еткәс — боҙло күл.*
*Уны хатта сабаҡтар ҙа*
*Төйәк итмәй, кит түгел.*

*Карап һыймай үҙенә,*
*Тулҡын ҡаҡмай йөҙөнә.*
*Шул көйө маҡтанған була,*
*Туғанмын, тип, диңгеҙгә.*

*Буй ҡапларлыҡ төбө юҡ,*
*Ел-дауылда өнө юҡ.*
*...Бер уйлаһаң, белеп булмай:*
*Туғандарҙың кеме юҡ.*

## Беләһеңме?

*— Һине яҡлармын, — тиһең,—*
*Һәр саҡ һаҡлармын, — тиһең,*
*Тик һәйбәт беләһеңме һуң,*
*Кемдәрҙән яҡларыңды,*
*Нимәнән һаҡларыңды?!*

## Этлек шатлык килтерһә...

*Күҙҙәрендә бәхет яна,*
*Күңелкәйе ҡанатлана.*
*Этлек эшләү уңышынан*
*Онотолоп, эй шатлана.*

*Был бәхеттән ағыу яуа,*
*Был ҡанаттан — ҡара һауа.*

## Инерция

*— Һис тырышлыҡ һалмай ғына,*
*Үҙемдең тойоуымса,*
*Киләм һымаҡ юлдарымдан*
*Инерция буйынса,*
*— Үргә көс түкмәй менеүҙе*
*Һис тә булмай төшөнөп.*
*Бармайһыңмы һин яңылыш,*
*Тау түбәненә төшөп.*

## Хаҡы бар

*Атаң даны менән*
*Маҡтанма, —*
*Һинең өлөшөң юҡ*
*Ул данда.*

*Һин данланһаң илдә*
*Бер саҡты,*
*Атаңдың был данға*
*Ҙур хаҡы.*

## Ғашиҡтар

*Киләсәк хаҡында һөйләй*
*Ғашиҡтар тәү осрашҡанда.*
*Телдәрендә — тик үткәндәр*
*Ташлашҡанда.*

## Ғәжәп

*Һөйөүҙән ҡалған яралар —*
*Мәңге төҙәлмәҫ ҡутыр.*
*Ә шулай ҙа, бына ғәжәп:*
*Һөйөп ташланған йәрҙән дә*
*Ятыраҡ кеше юҡтыр.*

## Айлы этюд

*Күләүектә йөҙгән ай шәүләһе*
*Ел иҫкәнгә дер-дер ҡалтырай.*
*Күреп күктә тыныс ысын айҙы:*
*— Күктә йөҙө. Ниңә минең кеүек*
*Ҡалтырамай һуң? — тип аптырай.*

## Көнләшеү

*Көнләшеүҙең эстәрендә*
*Ярыш ҡомары көйрәй.*
*Старт алһа, бындай ярыш*
*Ут-ялҡын булып дөрләй.*

*Юлындағы бар нәмәне*
*Көл итә, яндыра ул;*
*Иң саф изге хистәрҙе лә*
*Күмергә ҡалдыра ул.*

## Көҙгө янында

*Көҙгө ел һағыш-моң тарата,*
*Һағыш-моң көҙгөгә ҡарата.*
*Көҙгөлә — сал сәстәр, моңһоу йөҙ,*
*Бында ла еткән шул әрһеҙ көҙ.*

## Гөлдәр араһында

*Ҡайһы гөлгә ҡояш кәрәк,*
*Ҡайһыһы үҫә ҡарҙа.*
*Тау гөлдәре, баҡсаныҡы*
*Үҫмәй ҡыр-яландарҙа.*

*Һәр береһенең үҙ холҡо бар,*
*Һәр береһенең — үҙ төҫө.*
*Гел яҙмышын фәлсәфәләп*
*Башҡайын ватмай кеше:*
*Кем һоҡлана сәскәһенә,*
*Кемгә таңһыҡ хуш еҫе.*

## Уйланыу

*Яҙ етмәйсә тамсы булып*
*Тамдың ни, тамманың ни.*
*Кеше йәрен «минеке» тип*
*Яндың ни, янманың ни.*

*Бысраҡ шешәгә таҙа һыу*
*Һалдың ни, һалманың ни.*
*Ҡара уйҙы аҡ төҫтәргә*
*Мандың ни, манманың ни.*

## Бер маҡтансыкка

*— Бер хата ла яһағаным юҡ! — тип*
*Ауыҙ һыуы ҡорой маҡтанып,*
*Хата аҙым яһап буламы ни*
*Баҫҡан урынында тапанып?!*

## *Юғалған фекер*

*— Иң асығын мин әйтәм, — тип*
*Тороп бастым уҡталып,*
*Тик фекерҙәрҙе йыйғансы,*
*Башым бөттө буталып.*

## *Һорау — яуап*

*— Нимә ул тормош? — тиһеңме,—*
*Һиңә нисә йәш әле?*
*Яуабын үҙең табырһың,*
*Ҡартайғансы йәш(ә)ле.*

## *Үҙеңә күрә — хәлең*

*Аҙна һайын ғашиҡ булыуыңа*
*Ихлас әрнеп, көйөп йөрөүең,*
*Теләгеңә күрә — ысынбарлыҡ,*
*Йөрәгеңә күрә — һөйөүең.*

## *Көлә белһәң...*

*Тымыҡ күкте йәнләндереп*
*Шарҡылданы балҡып йәшнәү.*
*Үҙ-үҙеңдән көлә белһәң,*
*Һис күңелһеҙ түгел йәшәү.*

## *Йонсоу көндә*

*Көндәрҙең дә рәте китеп тора,*
*Һоро болоттарҙың, йә, ни йәме?!*
*Аҙ булһа ла күңел асылыр тип,*
*Алһыу күҙлек кейеп алдым әле.*

## *Төштәр*

*Төштәр күреп йоҡлай Аҡбай,*
*Имеш тә, ул турғай тотҡан.*
*Морондарын ялап ҡуя,*
*Әйтерһең дә, ҡабып йотҡан.*

*Буҙ турғай ҙа серем итә*
*Дим ярында, сүҡ ҡайында.*
*Сыр-сыу тулы көндән арып,*
*Төш күрәлер, моғайын да.*

*Төш аралаш сырҡ-сырҡ килә,*
*Сырҡылдамай — өрмәҫ инде.*
*Эт төшөнә кергән төштәр*
*Ҡош төшөнә кермәҫ инде.*



**Гөлнара**
**ХӘЛФЕТДИНОВА**

## *Уттан бер саткымын*

*Күпме урман кәрәк,*
*Кәрәк күпме утын*
*Һүндермәй тоторға*
*Мейестең утын.*
*Тирә-яҡ донъяны*
*Гел йылы тоторға*
*Йоҡа туҙ бармай ул,*
*Тиҙ һүнә ҡатырға.*
*Утынын әҙерләп*
*Өйгәндәй урмансы,*
*Мин дә мәж киләм*
*Күңелем булғансы.*
*Уйҙарҙы һайлайым,*
*Барлайым һүҙҙәрҙе*
*Яҡтыраҡ итергә*
*Йөҙҙәрҙе, күҙҙәрҙе.*
*Усаҡты һүндермәй*
*Көлдәге ҡуҙҙары.*
*Шул ҡуҙҙай йәнһаҡсы*
*Милләтем ҡыҙҙары.*
*Мин дә бер саҡҡылыр*
*Шул ҡуҙҙан сәсрәгән.*
*Усаҡ бит һүнмәгән,*
*Меңәр йыл йәшәгән.*

*Гөлнара Хәлфетдинова (1978) Әбйәлил районы Хәмит ауылында тыуған. «Ҡыңғыраулы ғына яланда» тигән шиғри йыйынтыҡ авторы. Рәми Ғарипов исемендәге премия лауреаты. Әлеге көндә «Башҡортостан ҡыҙы» журналы редакцияһында эшләй.*

*Урмандар ҵҫә ул,*
*Табыла утыны.*
*Ҡояштан тыуған бит*
*Уралдың ҡатыны.*
*Боҙҙарҙы иретер*
*Көсөбөҙ йөрәктә!*
*Усаҡтар яңыра*
*Берҙе тын өрһәк тә.*
*Йәп-йәшел урманды*
*Шаулатам күңелдән.*
*Утынһыҙ булырға?*
*Тамырһыҙ түгел дә...*
*Гөлт итеп янһам да*
*Яңынан терелә́м,*
*Был һәләт тыумыштан,*
*Һомайҙан бирелгән.*
*Усаҡты яңыртып,*
*Утындар ырғытам,*
*Күңелде яҡтыртып,*
*Донъяны йылытам.*

## ***Ихтыярым, беләм, самалы...***

*Эй, Хоҙайым, миңә ихтыяр бир,*
*Ихтыяр бир миңә, иман бир.*
*Әллә ниңә, һаман әллә ниңә*
*Йөрәгемә хистәр командир.*

*Эй, Хоҙайым, миңә сабырлыҡ бир,*
*Сабырлыҡ бир миңә, түҙем бир.*
*Кем белә һуң, бәлки, бәхетемдең*
*Күҙен быуыусы ла үҙемдер?*

*Хиджәб киймәй, намаҙ уҡымай, тип*
*Ҡарайһыңдыр, беләм, шикләнеп.*
*Хыялда бар, алдамайым, ышан,*
*Күңелемдә ята бикләнеп.*

*Үҙ-үҙемә асҡыс таб(а) алмайым,*
*Ихтыярым, беләм, самалы.*
*Күҙ йәштәрем тышҡа сыҡмаһа ла,*
*Йөрәгемә тып-тып тамалыр...*

*Эй, Хоҙайым, миңә иғтибар бир,*
*Зинһар өсөн, ҡуйма онотоп!*
*Яҡындарымды ла ҡалдырма һин —*
*Кемдәр өсөн торам йән атып!*

## *Уҡһыҙ йәйә*

*Уҡһыҙ ҡалған йәйә,*
*Уҡһыҙ йәйә.*
*Иҫенә килә лә төҙәйә,*
*Ҡулын йәйә.*
*Күпме хыялланған шул минутты*
*Сынбарлыҡта килеп кисергәндә,*
*Көткән тантананың ләззәттәрен*
*Татый алмай ғазап кисергәндә,*
*Бушлыҡ күреп зәңгәр һауаларҙа,*
*Үкенестәр — маҡсат урынында,*
*Саңҡ-саңҡ итеп бөркөт йән биргәндә,*
*Ҡып-ҡыҙыл ҡан ап-аҡ яурынында...*
*...Ымһындырмай хәҙер ул киңлектәр,*
*Асылһа ла күпме мөмкинлектәр,*
*Уҡ тигәне булған әллә ҡаҙаҡ,*
*Хыялдарын ергә ҡуйған ҡаҙап.*
*Уҡ тигәне булған икән ҡараҡ.*
*Нисек юл ҡуйған ул шуға,*
*Ҡайҙа ҡарап?*

*Уҡһыҙ ҡалған йәйә,*
*Уҡһыҙ йәйә...*
*Кем инде ул уҡһыҙ?*
*Яңғыҙ көйө?*
*Кершәндәре бүтән тартылмаҫ,*
*Хыял тәме бүтән татылмаҫ,*
*Уның уғы башҡа атылмаҫ,*
*Йәйә йәнә осһоҙ һатылмаҫ,*
*Алдаҡсы бер өмөт ярпыһына...*
*...Осоп ҡына киткән яртыһына*
*Эйәрер ҙә ине, бәлки,*
*Аяҡ-ҡулы уның бәйле*
*Үҙ-үҙенә.*
*Үҙе үҙен тотоп тора,*
*Отоп тора.*
*Йәндәренә үтеп кергән —*
*Кершән.*
*Шул быуауҙан ҡотолһа, ул*
*Биле турайып, уҡ буласаҡ.*
*Хыял арттарынан осоп*
*Юҡ буласаҡ таһа, юҡ буласаҡ.*
*Хыялһыҙ булһа ла әле,*
*Бар былай.*
*Анда-бында эшкә аша,*
*Эшкә барғылай.*
*Йәйә үҙен ана шулай*

*Юхалай.*
*Әй, шулай ҙа...*
*Ҡуй, ҡоторма,*
*Юҡ, малай...*
*Уҡаһы ҡойолмаһа ла,*
*Уҙы юҡ саҡта,*
*Атылырҙай була ҡай саҡ*
*Янған усаҡҡа.*

## *Ошо тойғо*

*Бер ҡасан да батша ҡыҙы булып*
*Ҡараманым хатта хыялда.*
*Уйымда ла кеше өлөшөнә*
*Инеп ҡуйыуымдан тыйылдым.*

*Бер ваҡыт та иң сибәре булып*
*Ҡараманым хатта хыялда.*
*Кемдәндер мин матурыраҡ булып,*
*Рәнйетермен һымаҡ тойолдо.*

*Кемдәндер мин байыраҡ та булып*
*Ҡараманым хатта хыялда.*
*Артығыраҡ аҡса күргән саҡта,*
*Ҡурҡып төштөм шунда, ҡойолдом.*

*Бүтәндәрҙән бәхетлерәк булып*
*Ҡараманым хатта хыялда.*
*Һәр саҡ ғәйеп тойҙом мин үҙемдә,*
*Гелән кемдәрҙәндер оялдым.*

*Яуаплы, ғәйепле һәм бурыслы*
*Һымаҡмын һәр йән эйәһенә.*
*Ҡурҡышынан йөрәк туҡтай ҡай саҡ,*
*Йәнемме ни, ул да көйә генә.*

*Ошо тойғо мине, ашай яҙып,*
*Гел баҫтыра бала сағымдан.*
*Минең йәнем, ғүмере күрмәһә лә,*
*Моңһоҙлоғон үлеп һағынған.*

* * *

*Ошо оло, иркен донъяларҙа*
*Минең өсөн иң илаһи әҫәр —*
*Ҡыҙым даһа — ҡаты сәтләүеккәй,*
*Бер ҡараһаң, ыуалырҙай гәлсәр.*

*Минең төҫөм, ғәзиз күҙ нурҡайым,*
*Аҡ ҡағыҙым минең алдымдағы.*

Низәр һалам, нимә яҙам унда,
Уҡый алмай, уйға ҡалдым тағы.

Ошо оло, сикһеҙ донъяларҙа
Минең өсөн иң илаһи һүрәт...
Эй, Хоҙайым, абай яһа мине,
Ҡыҙ баламды ҡәҙерләргә өйрәт!

## Рәхмәт

Рәхмәт,
Барлығыңды белеү — рәхәт.
Мин ҡурҡмайым көнгә ҡарарға.
Нисек бармын — шулай асыламын,
Теләмәйем махсус ярарға.

Рәхмәт,
Барлығыңды белеү — михнәт.
Михнәттәре татлы, үс киткес.
Һинең ҡараштарың — иретерлек,
Һинең тының — шундай үсерткес.

Рәхмәт,
Барлығыңды белеү — бөлөү,
Бөлөүҙәрем һиңә буйһоноп.
Ҡайғыртаһың даһа күңелемде
Ҡояштарҙан алда ҡул һоноп.

Рәхмәт,
Барлығыңды белеү — терелеү,
Арҡа менән тойоп тыныңды.
...Ситлектәрҙән ҡыуып сығарыуың
Бәхет ҡошоң булған ҡатыныңды...

Рәхмәт,
Барлығыңды белеү — сихәт,
Сихәт шулай осоп йөрөүҙәрем.
Рәхәт үҙем теләп шул ситлеккә
Ҡәйелеп тә килеп инеүҙәрем...

## Өшәнеү

Ондар булып яуырмын да
Һөттәр булып тамырмын —
Алдарымда, алдарымда
Өлөш кенәм — ҡамырым...
Ҡабартырмын, төйөрмөн,
Туҡмап-туҡмап көйөрмөн,

*Йөҙөн майлап яҙыр ҙа*
*Яратырмын, һөйөрмөн...*
*Күңелемә килмәһә,*
*Ҡатырырмын туҡмасҡа,*
*Ыңғайыма килмәһә,*
*Ыуалармын ыумасҡа...*
*Ҡулда ҡотом булғанында*
*Батыр булып балҡырһың,*
*Ҡулдарымдан килмәгәндә*
*Бахыр булып ялҡырһың...*

*...Йомро икмәк ҡасып менде*
*Һикегә...*
*Туҡтап ҡалдым, аптырап, бер*
*Килкегә...*
*Тәҙрә төбөнә һикерһә*
*Әпәкәй...*
*Илайыммы, итәйемме*
*Сәпәкәй?*
*...Өлөшөңә төшкән генә*
*Өшәнең —*
*Ысыныңдың ҡамыр ғына булыуынан*
*Өшәнең...*
*Йәне булған, йәме булған*
*Кешене*
*Бахыр итә, батыр итә алыуыңды*
*Төшөнөү...*
*Алдарымда, алдарымда*
*Өлөш кенәм — ҡамырым.*
*Ҡеүәтемдән, ҡөҙрәтемдән*
*Ҡурҡып киттем, ҡаңғырҙым.*

## Юғалттым күҙлегемде

*Мөхәббәтем осҡан, әсәй,*
*Ҡот ҡой әле йәнемә?!*
*Күңелдәрем ятһын йәнә*
*Хәләлем — һөйгәнемә...*

*Әрләмә, зинһар, әрләмә*
*Шулай әрнегәнемә.*
*Имдәр һалып ҡара әле*
*Әрәмәле йәнемә.*

*Аҙаштым, буғай, аҙаштым,*
*Алдаштым, алдаштырҙым.*
*Бәхет күргән күҙҙәремде*
*Тоттом да алмаштырҙым.*

*Алһыу күҙлегемде ярҙым,*
*Алып бәрҙем тирәсен.*
*Күрмәгәнде күрҙем шунан,*
*Күрәһемдер — күргәсем...*

*Күрмәгәнде күреүҙәре*
*Күргәндән ҡыйыныраҡ.*
*Яҡынайған һайын уға*
*Бәхетем ҡаса йыраҡ.*

*Әрләмә, зинһар, әрләмә,*
*Юғалттым күҙлегемде.*
*Көндәмлегемә бәрелгән*
*Минең үҙһүҙлегемде*

*Имләп ҡара әле, әсәй,*
*Бәлки, күҙемде йомоп,*
*Тағы ла күргәндәремә*
*Ҡайтырмын ҡулды һоноп.*

*Мөхәббәтем осҡан, әсәй,*
*Ҡот ҡой әле йәнемә?!*
*Көңөлдәрем ятһын йәнә*
*Хәләлем — һөйгәнемә...*

## *Төң булғас, йөрәк иламай...*

*Һинең һүҙгә һаранлыҡты*
*Беләм мин, күнеккәнмен,*
*Күҙ һалһаң, күрер инең дә*
*Йөрәктең күшеккәнен.*

*Тик тағы ла үҙ-үҙемә*
*Шәм булыу ғына ҡала.*
*Исмаһам, һүҙһеҙ күҙҙәрең*
*Яратып ҡараһа ла,*

*Яҡтырыр ҙа китер инем,*
*Төшөр инем бит ереп.*
*Өшөп тә ултырмаҫ инем,*
*Йөрәкте боҙға төрөп.*

*Төң булғас, йөрәк иламай,*
*Төң булғас — йөрәк тыныс.*
*Тик тынлыҡтың ҡолағына*
*Һиңә төшә... Ҡурҡыныс...*



**Фәрит**
**СУФИЯРОВ**

## *Тыуған ерҙә*

*Тыуған ерҙән яҙмыш айырмаһын,*
*Татып йәшәйем уның йылыһын.*
*Күкрәүҙәре булып күкрә әле,*
*Ташҡынына тиңдәш йырым һин.*

*Һоҡланам мин таңдар сафлығына,*
*Аҡҡан һыуҙар бирә тауышын.*
*Баҫыуҙарҙы, һөйөнөп, урап йөрөйөм,*
*Тулҡын күтәргәндә арышы.*

*Күкһел тауҙар тартты ҡарашымды,*
*Бер күреүҙә ғашиҡ итерлек.*
*Аҡҡош наҙы зәңгәр күлдәрендә,*
*Ҡарурмандар бында етерлек.*

*Иген ҡырҙарындай күңелең иркен,*
*Һыйҙыра ала шатлыҡ, ғазабын.*
*Турғай йырҙарына ҡолаҡ һалып,*
*Баҫыу түрҙәренә уҙамын.*

*Тыуған ерем тупрағына баҫҡас,*
*Мин хужаһы итеп хис итәм.*
*Миңә, игенсегә, ҡыуаныс ул,*
*Башаҡ шауын ҡырҙа ишетһәм.*

*Фәрит Суфияров (1939) Яңауыл районы Иҫәнбай ауылында тыуған. Өфө финанс техникумын, Алабуға дәүләт педагогия институтын тамамлай. Оҙаҡ йылдар Яңауыл төбәк яҙыусылар ойошмаһын етәкләй. БР-ҙың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Ғ. Соҡорой, Ф. Кәрим исемендәге премиялар лауреаты.*

## Тап төшмәһен әҙәм затына

*Төрләндерә тормош төрлөсәгә,*
*Ҡәҙерленең ҡалмай ҡәҙере.*
*Бөтәме ни көнсөл, хыянатсы,*
*Шәфҡәтһеҙҙәр, ҡаты бәғерле.*

*Мең йәшәрҙәй хәтәр ҡыланалар,*
*Ғәйепһеҙгә йәнде елкетә.*
*Күп кәрәкме әҙәм балаһына,*
*Метр ярым бары ер етә.*

*Ҡәнәғәтһеҙ, ҡанһыҙ ниндәй нәҫел*
*Юҡ-бар өсөн генә ярһыған.*
*Бар ғәләмде ҡулда тотор ине,*
*Әҙһенәләр, донъя тар һымаҡ.*

*Ҡеше шатлығына ауыр һулап,*
*Шөһрәт өсөн көнсөл һатыла.*
*Йәшәүендә ниндәй мәғәнә ҡала,*
*Тап төшөргәс әҙәм затына.*

## Ҡанатлана йөрәк

*Ҡосағыма алып сәскәләрҙе*
*Болон буйҙарынан ураным.*
*Бер мин генә түгел уҙыусылар*
*Йәй көнөндә Сулпан урамын.*

*Урам уртаһынан Беүә аға,*
*Ҡушҡайындар баҫҡан ярына.*
*Изге сәғәтенә мин юлыҡтым,*
*Шифаларын бирҙе йәнемә.*

*Яр баштарын төрөп, бөҙрә талдар*
*Аҡҡан һыуға ҡарап уйлана.*
*Томан пәрҙәләрен тартып, таңдар*
*Һандуғастар менән уяна.*

*Күп ерҙәргә оҡшаш уртаҡлыҡ бар,*
*Матурлығы башҡа төҫлөрәк.*
*Баҫҡан үләне лә йомшағыраҡ,*
*Шишмә тауышы сыға көслөрәк.*

*Күкһел урман ҡулын һуҙып тора,*
*Ауылына яҡын үҙәне.*

*Ҡоштар кеүек бер талпынып ҡуйҙы,*
*Ҡанатланды йөрәк, түҙмәне.*

*Онотторҙо мәшәҡәттәреңде.*
*Юлдарыма сыҡҡас, һөйөндөм.*
*Бөтә гүзәллекте ер тыуҙырған,*
*Йәшел күкрәгенә һыйындым,*
*Ысыҡ һыуҙар менән йыуындым.*

## Ҡайын һағышы

*Юл буйында яңғыҙ ҡәбер тора,*
*Ҡайын үҫкән уның янына.*
*Йәйен йәшел бәрхәтенә төрә,*
*Аҡ юрғанға ҡышын ябына.*

*Баш осона килеп ҡоштар һайрай,*
*Еләҫ елдәр ҡаға ҡанатын.*
*Ҡара ҡайғы, һары һағыш йотоп,*
*Ҡайын ғына баҫып тора тын.*

*Билдәһеҙ был ҡәбер шомландыра,*
*Юлдарыма ҡайҙан осраны.*
*Үләндәрҙә әсе күҙ йәштәре,*
*Ҡурғаш төҫлө ауыр тупрағы.*

*Кемдеңдер ул ғәзиз һөйөклөһө,*
*Тупраҡ тартҡан ҡайһы ерҙәргә.*
*Ҡәбер өҫтәрендә ҡайын үкһей*
*Дауылдарҙа, әсе елдәрҙә.*



Иҙрис
**НОҒМАНОВ**

# СЫБАЙ ҠАШҠА

**ПОВЕСТЬ-ҠИССА**

Ҡайнар һулышы менән өтөп барған томра көн ахырында, ҡояш офоҡ ҡырына ауышып, көнбатыш тарафтары алһыу-һарғылт төҫкә мансыла башлаған саҡта көтөү ҡайта. Беҙ – ауыл малайҙары өсөн ошонан да яуаплыраҡ мәл бармы икән? Юҡтыр. Ни өсөн тигәндә, иртәнге көн сәйеңде һөтләп эсеүең дә, артабан өҫтәлеңдә май-ҡаймаҡтың булыу-булмауы ла тап ошо мәлдән тора. Көтөү ҡайтҡанда йоҡлап ҡалдыңмы, иртәгәһен телеңде яндыра-яндыра үҙе әрем ише әсе, үҙе ғәләмәт тәмһеҙ, йөрәккә ятмаҫ ҡара сәй һемереүең – ҡотолғоһоҙ хәл. Өҫтәүенә, иҫ киткес ләззәттән күҙҙәреңде йома төшөп, ҡалын ғына ҡаймаҡ яғылған хәләл икмәгеңде ашауҙан да мәхрүм ҡаласаҡһың. Аңы бар кешегә, үҙ бурысыңды еренә еткереп үтәмәгәнлектән, ашаған икмәгең дә хәрәм тойола башлай. Ул һыныҡтың нисектер тәме лә, йәме лә булмай. Ә инде әсәй- өләсәйҙәрҙең туҡтауһыҙ һуҡраныуы хаҡында әйтеп тораһы ла түгел. Шуға күрә лә, бер нәмәгә ҡарамай, башҡа шөғөлөңдө, хатта осланып бөтмәгән мауыҡтырғыс уйыныңды ла ташлап, көтөү ҡаршыларға йүгерергә, юҡ, осорға кәрәк. Шул ҡәҙәре ашығыуҙың икенсе сәбәбе лә бар: мал-тыуарҙы ымһындырып, көтөү юлының уң яғында – көнбағыш, һул ҡырында һоло баҫыуы терәлеп ята. Саҡ ҡына һуңланыңмы... Баҫыу ҡарауылсыһы беҙҙең ифрат уҫал...

Шау-шыулы көтөү үҙе әле күренмәй, башы таҡыр түбәләстең арғы

---

*Иҙрис Ноғманов (Нөғәмәнов Ринат Мөҙәрис улы, 1952) Әбйәлил районы Әхмәт ауылында донъяға килә. Урындағы башланғыс белем усағын тамамлағандан аҙаҡ Ҡырҙас, Ишҡол һигеҙ йыллыҡ, Урал урта мәктәптәрендә уҡый. Өлгөргәнлек аттестатын Аҫҡар урта мәктәбендә ала.*

*Армиянан һуң Ҡырҙас мәктәбе интернатында тәрбиәсе була. Баймаҡ ауыл хужалығы техникумын тамамлай, Ҡырҙас мал һимертеү совхозына баш агроном итеп ҡайтарыла. 1979 — 1985 йылдарҙа Башҡортостан ауыл хужалығы институтында белемен камиллаштыра. Төрлө хужалыҡтарҙа агроном, баш белгес, бүлексә етәксеһе, инженер-ер төҙөүсе булып 25 йыл эшләй.*

*Дүрт китап авторы: «Ауыл хикәйәләре», «Әсәйгә бүләк», «Ғүмерлек һағыш», «Һаҡмарбаш». Ул — Ишмөхәмәт Мырҙаҡаев-Балапанов исемендәге премия лауреаты, райондың «Йәйғор» әҙәби берекмәһе етәксеһе.*

битләсендә. Уның ҡайһы тирәлә икәнлеген болот булып күтәрелгән саң-туҙан бағанаһына ҡарап ҡына самаларға мөмкин. Ә беҙ инде, өймәкләшә һалып, бирге яҡта көтөп тә торабыҙ. Көтөүҙе, ғәҙәттә, малайҙар ҡаршылай. Ниндәйҙер сәбәптәр менән малайҙары булмағандарҙың балитәкле күлдәктәрен елдә елберҙәтеп, тәңкәле толомдарын сайҡалта-сайҡалта ҡыҙҙары сыға. Эйе-эйе, беҙҙең ауылда ҡыҙҙар ҙа көтөү ҡаршылай. Хәйер, һәр ерҙәгесә, ауылыбыҙҙа балалары бөтөнләй юҡ ғаиләләр ҙә осрай. Ярай әле, ундайҙары күп түгел, шулай ҙа бар. Уларынан инде көтөүгә ҡаршы әбей-һәбей менән йәшләй генә тол ҡалып, яңғыҙ-ярым донъя көткән еңгәйҙәр бара. Һуңғылары миңә ысын күңелдән йәл...

Тыу бейәнең һимеҙ арҡаһына оҡшап ятҡан йоп-йомро ҡалҡыулыҡ ашаһынан тәүге хайуандың башы күренеп ҡалыуы була, әле генә зыҡ ҡубып шаярған баласағаның тауышы ҡапыл ғына баҫыла ла ҡуя. Көллөһөнөң йөҙөнә бер юлы ғына етдилек йүгереүҙең дә сәбәбе юҡ түгел. Өләсәйҙәр әйтеүенсә, мал көтөүе ҡаршыһында, кәрәкмәгәнгә юл ҡыйып, тегеләй-былай йүгерергә, һөрән һалып ҡысҡырышырға, бигерәк тә алағайымға иһаһайлап көлөшөргә һис ярамай икән. Ошолай йәмһеҙ ҡыланһаң, мал-тыуарҙың ҡото китә, имеш. Тәү ҡарауға яп-ябай һымаҡ күренһә лә, ана шулай яуаплы эш ул көтөү ҡаршылауы. Яуаплы ла, ғәләмәт ҡыҙыҡлы һәм мауыҡтырғыс та. Үҙ ғүмерендә бер тапҡыр булһа ла көтөү ҡаршылай сыҡҡан кеше аҙаҡ, үҙе лә һиҙмәҫтән, ошо эшкә тартыла ла тора. Ә инде ҡаршылап ҡарамағаны – үҙен күп нәмәнән күрәләтә мәхрүм итә.

Инәләренең тауышын әллә ҡайҙан уҡ ишетеп ҡойроҡ сәнсә-сәнсә сабышҡан быҙауҙарын көскә ҡайырып бикләгән һәлкәүҙәрҙең һуңғылары килеп өлгөрөүгә, көтөү башы тау түбәненә тәгәрәй һәм күптән көткән ҡыҙыҡлы тамаша башлана. Көтөү ҡайтыуын бер тамашаға һанауыбыҙ юҡҡа ғына түгел. Бына, үҙегеҙ баһалағыҙ...

Ғәҙәттә, иң алдан, бөҙрәләнеп торған ҡупшы өлтөк аҫтына йәшеренгән күҙҙәрен аҡайтып, ҡараштары ифрат яман, үҙе ғәләмәт ҙур кәзә тәкәһе юл башлай. Уның төрөк ятағаны ише кәкре, олатайымдан ҡалған суҡмар һымаҡ һәлмәк мөгөҙҙәре, һәр аҙымын ҡабатлап, тегеләй-былай сайҡала. Күрше ауыл сөннәт бабаһыныҡына оҡшап торған оҙон-һирәк һаҡалы ҡабырғанан иҫкән елгә елберҙәй. Ҡойроғо, былай ҙа ҡупырыш һынына тәкәбберлек өҫтәп, юғарыға сәнселгән. Ә ҡиәфәте һуң үҙенең, ҡиәфәте-е! Оло сиреү алдындағы ҙур командирмы ни! Юҡ, был маҡтансыҡ командирҙан да арттырып ебәрә.

Атлаған ыңғайға тояҡтары туҡтауһыҙ сырт-сырт килгән ваҡ-төйәк башҡа кәзәләрҙең береһе лә уны уҙып китергә баҙнат итмәй. Кәзә генәме, хатта бәғзе бер ҡорсаңғы башмаҡтар ҙа шөрләй үҙенән. Нәҫел тәкәһенең мөгөҙҙәре осло, үҙе уҫал. Ул баҡырышып уҙған ғәскәр хужаһы – көтөүсе Мәүлитҡол ағай тәкәһе. Шуның өсөн дә, күрәһең, үҙ баһаһын яҡшы белә...

Үҙҙәрен һауалыраҡ тотҡан кәзә халҡы артынса миңрәү һарыҡтар үтә башлай. Ваҡ ҡына аҙымдар менән улар йүгермәндәп килә. Ҡаты-ҡото асыҡ үләненә ышҡылып йышылған тояҡтары аҫтынан ойоҫҡоп туҙан күтәрелә. Күҙҙәре ярым йомоҡ, шунлыҡтан битараф күренгән һарыҡтар йонсоуҙары етеүҙән, гүйә, йоҡомһорап бара. Хәйер, юл башлаусы кәзә тәкәһе барында нимәһенә борсолорға уларға: йомро һуҡмаҡтары тип-тигеҙ итеп тапалған, тамаҡтары туҡ. Кәзә ҡайҙа – һарыҡ та шунда. Ҡыҫҡаһы, улар анһатҡа һалышыуҙың сигенә сыҡҡан. Шуның өсөн дә төптө аңра түгелдәр микән әле?..

Мал-тыуарҙың ыбыр-сыбыр, ваҡ-төйәге үтеп бөтөүгә, тарбаҡ тояҡтарын көскә һөйрәгәндәй, иҙелеп саңға әйләнгән тупраҡты һеңдерә баҫып, һалмаҡ үә дәрәжәле аҙымдар менән һыйырҙар шыуыша башлай. Сама белмәй күп ашауҙан уларҙың ҡорһаҡтары ҡабарып, һыртына сыҡҡан. Шул сәбәпле, ах та ух килеп,

күренеп торған ауырлыҡ менән тын алалар: бына-бына быуылырҙар ҙа ауып китерҙәр төҫлө. Мин үҙем уларҙың үтә ныҡ уһылдашҡандарына ҡарап бер аптырайһам, бер хайран ҡалам, ахырҙа ҡыҙғанып ҡуям. Бәғзе һыйырҙарҙың ифрат тиртешеп киткән елендәренә һыймаған һөт, атлаған ыңғайға, аҡ еп булып ергә саптыра бара. Шул аҡ ептән көлһыу тупраҡ өҫтөндә борғаланып ятҡан ҡара һыҙат-эҙ ҡала. Ә һауала ымһындырғыс йылы һөт еҫе аңҡып тора, һәм тап ошо мәлдә һин ныҡ ҡына асыҡҡаныңды тояһың.

Көтөүҙең иң ҡойроғонда, үҙҙәре төптән йыуан, үҙҙәре туҡыш мөгөҙҙәре янъяҡҡа тарбайып торған, бөҙрә маңлайлы, йылҡылдаҡ тиреле ғәләмәт дәү Сыбар үгеҙ күренә. Бар донъянан ҡәнәғәт үгеҙ алпан-толпан баҫып, ашыҡмай ғына килә. Ҡолас буйламаҫ ҡалын муйынлы ауыл бүгәйенең һөмһөҙ ҡарашынан беҙ ҡурҡып торабыҙ. Ә инде ер аҡтара-аҡтара үкереп ебәрһә-ә!..

Сәсеүлектәргә ҡағылмай ғына уҙып киткән мал-тыуар туғай иңләп таралыша башлауға, күмәкләшеп уларҙың артынан төшәбеҙ. Тап ошо мәл кешеләр ҙә, хайуандар ҙа бер-береһен ишетмәгән шау-шыу үҙенең иң юғары нөктәһенә етә. Һөткә һыуһап сарсаған быҙауҙар дыу килеп инәләрен таптырһа, уларына яр һалып баҡырышҡан бәрәстәр менән оло кәзә-һарыҡ ҡушыла. Былары ла ҡайһы аралалыр бер-береһенән күҙ яҙлыҡтырырға өлгөргән. Кешеләр ҙә тик тормай, һәр кем үҙ малын барлай, һай-һайтлап ҡысҡырыша. Көтөүсенең сыбыртҡы сартылдатып һөрән һалғаны ишетелеп китә, кемеһелер әсе һыҙғырып ебәрә, аяҡ аҫтында буталған эттәр өрә. Ҡыҙыҡ инде тыңлап торһаң. Шулай ҙа әлеге ҡыҙыҡ оҙаҡҡа бармай. Йәйге оҙон көн буйына йөрөп арыған хайуандар тиҙ арала кәртә-ҡураға таралышып бөтә. Бөтә, тиһәк тә, унда-бында берәм-һәрәм башмаҡ үгеҙ, тана-торпо күренгеләй. Ә мир үгеҙе бер ваҡытта ла кәртәгә инмәй. Уның урыны һәр саҡ урамда, уның өсөн шыйҙа кәртәң бар ни ҙә юҡ ни.

Бына бер килеп күп тауышлы мәәлдәшеүҙәр, мыҡырлашыуҙар, мөңрәү ҡатыш ыҙылдауҙар, тамаҡ йыртып баҡырыуҙар ҡапыл ғына баҫылып ҡала ла тирә-йүндә ғәжәйеп һиллек урынлаша. Хәҙер инде әсәй-өләсәйҙәрҙең, апай-еңгәйҙәрҙең биҙрә зыңлатып һыйыр һауыр мәле етә. Ифрат бәйләнсек ләпәк менән ҡанға туймаҫ серәкәйҙәрҙе өркөтөр өсөн ялан кәртә уртаһына кипкән тиҙәктән төтөнлөктәр һалына. Дымлы һауаға күгелйем төтөн менән бергә әскелтем көйөк еҫе таралған ошо мәлде мин үҙем, нишләптер, бигерәк яратам һәм көтөп алам. Йөрәгеңде елкендереп, бар булмышыңды ниндәйҙер һағыш ҡатыш татлы ла, йән иҙрәткес яғымлы ла, үҙенсә йылы ла хистәр солғап ала. Ошондай мәлдәрҙә һин, ауыл кешеһе, донъяла йәшәп ятҡанлығыңды ысын мәғәнәһендә тояһың һымаҡ һәм йәшәгән һайын йәшәйһе килә.

***

Өләсәйем, шыйыҡ төтөн эсендә кинәнестән күҙҙәрен йома биреп «һағыҙ сәйнәгән» Алаҡайҙың эйендеһен быҙауына тылҡатҡандан һуң:

– Әйҙә, бар, малҡай, – тип наҙлап арҡаһынан һөйҙө лә тыҡрыҡҡа ҡыуҙы, – бер аҙ ғына һәрмәнеп кил.

Үҙе һөт тулы биҙрәһен күтәреп аласыҡҡа йүнәлде. Тимәк, беҙҙең иртәнге көн сәйгә ҡушып эсер һөтөбөҙ ҙә, икмәккә һылап ашар ҡаймағыбыҙ ҙа буласаҡ.

Ни арала тиһең йоҡомһорай ҙа башлаған ала һыйыр, теләр-теләмәҫ кенә ҡуҙғалып, урамға сыҡты. Мин уның артынан эйәрҙем. Шул рәүешле түбән ос малайҙары күҙ терәп торған донъя тотҡаһы һәүкәштәребеҙҙе көн дә киске үрешкә алып сығабыҙ.

Киске үреш – ул үҙе бер кәрәмәт тулы серле донъя. Бында тулмаҫ орсоҡ ише тиктормаҫ малайҙар өсөн тулы азатлыҡ. Эйе, ысын азатлыҡ тәмен һин бары

ошонда ғына тояһың. Бында һиңә аҡыл өйрәтәм тип ҡолаҡ итеңде ашай-ашай йәнеңә тейеп тороусы ла, үҙ ихтыярын көсләп тағырға маташыусы ла, бойороусы ла юҡ. Үрештә бөтәһе лә бер тигеҙ, барыһы ла тиң хоҡуҡлы.

Киске Һаҡмар туғайында күңелле генә түгел, һәләк ҡыҙыҡ та. Мәңге туйыу белмәҫ һыйырҙар, көноҙон тығыныуҙарына ҡарамаҫтан, һутлы сирәмгә йәбешеп ятып ашаған арала, үҙебеҙ һәр төрлө уйын менән мауығабыҙ, башҡа саҡта баш етмәҫ мәҙәктәрен дә уйлап табабыҙ. Уйындан ялҡып китһәк, көстәрҙе һынамаҡтан, көрмәкләшеп тә алғылайбыҙ. Ҡайһы саҡ ябай көрәштән генә башланған көс һынашыу оло бәхәскә үк барып еткеләй. Әммә хәлдәрҙең ундайы һирәк була. Нигеҙҙә түбән ос малайҙары тыныс халыҡ һәм үҙ-ара ыҙғышҡа юл ҡуя һалып бармай. Ә бына инде үрге яҡтар килеп күренә ҡалһа... Эйе, үр яҡ малайҙары беҙҙең сикәгә ныҡ тейә.

Әле генә тын ятҡан туғай беҙ йыйылыуға кинәт уяна ла танымаҫлыҡ булып йәнләнә лә китә. Һирәк-һаяҡ, дөрөҫөрәге, иҫке яраларының һыҙлауы баҫылып торған араларҙа, үҙе ише мәлйеп бөткән ҡарт һыйырын ҡыуалап, өс һуғышта ҡатнашырға өлгөргән Әхтәм олатай ҙа Һаҡмар туғайына килеп етә. Ныҡ оло йәштә булыуына ҡарамаҫтан, олатай әле теремек, ғәжәп мәрәкәсел, йор һүҙгә һәләк әүәҫ. Мәлйеп бөткән, тиһәк тә, олатайыбыҙҙың әле йөрәге йәш. Шулай ҙа бәйһеҙерәк малайҙарҙың сиктән сығып, сама белмәй соролдашҡанын өнәп етмәй. Быны ул үҙенсә: «Нишләптер тауышҡа мейем ҡайнай ҙа китә», – тип аңлата. Ҡайнаһа ҡайнайҙыр мейеһе, ваҡыты менән бит бигерәк тә зыҡ ҡубып, юҡтан ғына һүҙ көрәштерергә тотонғанда, хатта үҙебеҙ ҙә бер-беребеҙҙең әйткәнен ишетмәй китәбеҙ. Шунан ҡарт кешенең башы ҡатмай ҡайҙа барһын. Һәм беҙ, ошоно аңлап, күпмелер мәлгә баҫыла төшәбеҙ. Әммә ләкин оҙаҡҡа түгел. Бер аҙҙан уйынлы-ысынлы бәхәстәр яңынан ҡайнай башлай.

Шулай ҙа маһир бабай, яу ҡырындағы шикелле, бында ла юғалып ҡалмай. Шашына башлауыбыҙҙы һиҙеп, ул беҙҙе янына йыя һалып ала ла башынан үткән берәй мәҙәген һөйләргә тотона. Уны бар донъяңды онотоп, йотлоғоп китеп тыңлайһың. Шуныһы ҡыҙыҡ: Әхтәм олатай үҙе етди һүҙ һөйләһә лә, күҙҙәре һәр саҡ хәйләкәр йылмайып тора. Башҡалар нисектер, ә мин үҙем ошоға гелән иғтибар итәм.

Бына бөгөн дә, бая башлаған «Шаҡ-шаҡалаҡ» уйыныбыҙ иң ҡыҙыу урынына етеп, йоҙроҡтары төйнәлгән малайҙар көҙгө әтәс ҡиәфәтенә инә барған мәлдә, олатайҙың үҙе йомшаҡ, үҙе әүрәткес тауышы ишетелде:

– Ҡарағыҙ әле, уландар, – тине ул, аҡ төшә башлаған күҙҙәрен ҡыҫа биреп, – бер фәһемле генә хикәйәт иҫкә төшөп тора әле...

Беҙҙең ҡолаҡтар ҡарп итте: хикәйәт тигәндә ни уны... Өҫтәүенә, фәһемле лә булғанда...

Көн аҙлыҡтырмай ҡабатланып торған уйын тип танау ҡанатыуға ҡарағанда фәһемле лә, ҡыҙыҡлы ла хикәйәт тыңлап ҡына ултырыуы биш артыҡ! Үҙем ҡыуаныстан хатта һикерәңләп ҡуйҙым. Ҡалғандар ҙа шатлыҡтарын йәшереп торманы. Ҡарттың ауыҙына теклəп тиҙ арала тын ҡалдыҡ.

– Һөйләп тә ишеттерер инем... Уйынығыҙ бигерәк ҡыҙыу, бүлдерһәм, килешерме икән, тием. Йәнә, тыңлап ултырғығыҙ ҙа килмәҫ һымаҡ...

Күренеп тора: бабай мутлашып маташа. Шулай ҙа мутлашыуы зыянға түгел! Бары беҙҙе тынысландырыр өсөн генә.

– Тыңлайбыҙ, олатай! Йә, һөйлә. – Иң әүәл үҙем телгә килдем. Шунда уҡ башҡалар ҙа минең һүҙҙәрҙе йөпләй һалды:

– Килә! Килә тыңлағыбыҙ!

– Уйынды ни уны аҙаҡ та уйнарбыҙ...

– Олатай, һөйлә! Һуғыш тураһында һөйлә!

– Шым ғына ултырырбыҙ, бына икмәк өҫтө... – Кемеһелер шул арала хатта ант килтерә башланы. – Хикәйәт тигәндә ул беҙ...

Әлеге йылы һүҙҙәрҙән олатайыбыҙ, әлбиттә, ифрат ҡәнәғәт ҡала һәм күҙ алдында етдиләнә төшә:

– Минең тирәләп кенә ултырышығыҙ әләйһәң. Яҡыныраҡ, яҡыныраҡ, юғиһә, самай ҡыҙығын ишетмәй ҡалыуығыҙ бар...

Ултырырға икән ултырырға. Беҙ, шау-шыулы уйыныбыҙҙы ташлап, Әхтәм олатайҙы түңәрәк эсенә алабыҙ. Эх, хәтфә үләнгә һуҙылып төшөп мажара тулы әкәмәт тыңлауҙары! Ә олатай әкәмәтенең был юлы ла мажара тулы булыуына беҙҙең тамсы ла шигебеҙ юҡ. Йыйын юҡ-барҙы ул һөйләп тә тормай. Шуға күрә лә әле генә бер-береһенең сәсен йолҡорға әҙер малайҙар күҙ асып йомған арала йән дуҫтарға әүерелә.

Ҡәнәғәтлеге йөҙөнә бәреп сыҡҡан олатай, сал һаҡалын матҡыған көйө, ниндәйҙер нөктәгә төбәлә лә бер талай уйсанланып ултыра, туғай буйынан сабышып уҙған ҡолондарға ҡарап ала. Ахырҙа, Һаҡмар ярында керт-керт утлаған аттар яғына күрһәтеп, беребеҙ ҙә көтмәгән һорауҙы ҡуя:

– Анауы бер ситтәрәк юшап торған яңғыҙ бурылдың ҡушаматын кем белә?

Беҙ һәммәбеҙ бер юлы баштарыбыҙҙы шул яҡҡа бора һалабыҙ. Һе, әйтте һүҙ: ул бурылдың ҡушаматын ауылда кем белмәй? Кемдер ҡапылғара һүҙ мәғәнәһенә төшөнөп етмәй албырғап китһә, кемдеңдер йөҙөндә сәйерһенеү ҡатыш үкенес ғәләмәте сағылып ҡала. Мин дә эстән генә үкенеп ҡуям: тапты шаҡ ҡатырыр нәмә...

– «Жиган» уның ҡушаматы! – Малайҙарҙың береһе һөрән һалды.

– Һи-и, шуны ла белмәҫкә... – тип ебәрҙе икенсеһе.

– Шулай шул, уныһын ғына бөтәбеҙ ҙә беләбеҙ. – Өсөнсөһө инде барыһы өсөн яуап бирҙе.

– «Жиган» – ул бөтөн ауылдың эш аты, – тинем мин дә тыныс ҡына, – йәйен күбә тартыуҙан бушамаһа, көҙөн-ҡышын утын-бесәнен дә ул ташый...

– Ә үҙенең көслөлөгө-ө!..

– Һыбай йөрөгәндә лә һәләк йомшаҡ...

– Эйе шул, арҡаһы йоп-йомро, эйәрең дә кәрәкмәй...

Дуҫтарым, минең һүҙҙәргә ҡеүәт биреп, кемуҙарҙан бурылды маҡтарға тотона. Сибек кенә аҡ сәстәрендә ҡояштың ҡыҙыл нурҙары сағылып уйнаған олатай, беҙҙең тынryслана төшкәндә сабыр ғына көтөп алғандан һуң:

– Шулай ҙа, уландар, һеҙ мәртәбәһен шул ҡәҙәре күтәреп ебәргән ошо аттың сығышы ҡайҙан икәнлеген барыбер берегеҙ ҙә әйтә алмаҫ, – тип көлөмһөрәй бирҙе. Күрәбеҙ: сәмгә теймәксе. Ә ниңә, сәмебеҙгә тейеүе урынлы ла. Ни өсөн тигәндә, маһайып булмай, бындайын, әлбиттә, беребеҙ ҙә белмәй. Беҙ кинәт шымып ҡалабыҙ: тәки шаҡ ҡатырҙы бит, ә, бабайың. Шаҡ ҡатыуы ярай, бына ояты... Шул тиклем даны таралған атыбыҙҙың зат-сығышы ҡай яҡтарҙан икәнлеген дә белмәй торсо әле. Кем нисектер, ә мин үҙем, кеше алдында наҙанлығымды күрһәтеп, бирелгән һорауға яуап таба алмай тороуыма нык ғәрләнәм һәм оятымдан ҡыҙарынып-бүртенергә генә торам. Был юлы ла...

– Ышанаһығыҙмы-юҡмы, балаҡайҙар, ул ат... ҡытай тоҡомло, – мәрҙәс, Әхтәм олатай минең ут булып янған сикәләрҙе күрҙе, буғай, мәлендә хәлемә керҙе. – Ҡытай дәүләте хаҡында ишеткәнегеҙ барҙыр бит?.. – Үҙенең шаян күҙҙәрендә йәштәрсә осҡон уйнап китте.

Дәү илебеҙҙең көнсығыш сиктәре буйында ятҡан Ҡытай дәүләте тураһында, әлбиттә, ишеткәнебеҙ бар, тенәүге көн, уҡыу ахырында ғына, география

дәресенән үткән инек. Беҙ инде буйтым тынысланабыҙ ҙа, үтә ҡыҙыҡлы хикәйәтте тын да алмайса тыңларға әҙер икәнлегебеҙҙе белдереп, шым ҡалабыҙ. Һәм яңылышмайбыҙ. Олатайыбыҙ беҙҙе бөгөн әллә ҡасанғы, хатта ки теге быуат башында булып үткән мауыҡтырғыс та, таң ҡалырлыҡ та ваҡиғалар шырлығына алып инеп китә...

***

Ул саҡта Әхтәмгә ни бары алты ғына йәш ине. Шулай ҙа бар ауылды тетрәткән яман көн хәтерендә ныҡ уйылып ҡалған. Олатайы әйтмешләй, «күсмә ҡоштар» китепятҡан көҙгө һалҡын иртәләрҙең береһендә урам буйлап, яр һала-һала, шәп ат менгән һыбайлы сабып уҙҙы.

– Вулыс түрәләре йыйын үткәрә-ә! Һәр өйҙән кәмендә берәр кеше мәсет ҡаршыһына йыйылырға-а! Тиҙ булырға-а!

Тиҙ булырға икән тиҙ булырға – шул арала мәсет янына һәр өйҙән берәр генә лә түгел, бөтә ауыл тиерлек йыйыла һалды. Быны ише йыйын төпкөл ауылдарҙа көн дә булып тормай. Шуның өсөн оноҡанда бер, уныһында ла ҡапҡорһаҡ түрәләргә кәрәк саҡта ғына уҙған ҡорға мотлаҡ барыу кәрәк. Олоһон да, кесеһен дә берҙәй ҡыҙыҡтырған тамашаны күрмәй ҡалыу яҙыҡ булыр. Яҙыҡ булмаған хәлдә лә, аҙаҡ үкенерһең.

Сүс бауы мәлһеҙ өҙөлөп сыҡҡанлыҡтан, төшөп китмәһен өсөн киндер ыштанын ике ҡуллап тотҡан Әхтәм еүеш танауын мыш-мыш тарта-тарта килеп еткәндә, ғибәҙәт йортоноң алды бәләкәйерәк баҙар ише ҡайнай ине. Аптырашҡан кешеләр төркөмдәргә бүленеп әңгәмә ҡора: кемдер бот сабып хафаланһа, янындағылар уны тынысландырып маташа. Маташыуын маташа, ә үҙҙәренең дә тулҡынланыуы йөҙҙәренә бәреп сыҡҡан. Бәғзе берәүҙәре барына ҡул һелтәгән дә битараф ҡиәфәттә ҡарап тора: йәнәһе, йыйындарҙың ундайын ғына күргән бар, был юлы ла уҙыр ҙа китер, ул ҡәҙәре нимәһе булыр тиһең. Шулай ҙа йыйылыусыларҙың күпселеге етди ҡиәфәттә һәм сабырлыҡ менән түрәләрҙең ниндәй яңылыҡ килтергәнен көтә. Майҙан баҫалҡы ғына гөж килә. Халыҡ араһында мосолмандарға хас тыйнаҡлыҡ үә әҙәп хөкөм һөрә.

Түрәләр оҙаҡ көттөрмәне. Бер мәл ғәм алдына, пар тәгәрмәсле «ҡуянарт» арбаға текә генә ултырып, еҙҙәре ҡояшта баҙлаған шәп сбруйлы, аҡ күбеккә төшкән оҙонтороҡ сөм-ҡара айғыр еккән икәү килеп туҡтаны. Күрер күҙгә шунда уҡ ташлана: уларҙың береһе – ҡупшы хәрби кейемдәгеһе – еп-ерән урыҫ, икенсеһе – семәрләп сигелгән уҡалы йәшел елән кейеп алғаны – хаҡ мосолман затынан ине. Саҡырылмаған ҡунаҡтар йылдам ҡуҙғалып, ни булырын көтәүелләүҙән шым ҡалған кешеләр ҡаршыһына баҫты. Күренеп тора: ныҡ ҡабаланалар.

– Йәмәғәт, иғтибар! – Күҙҙәрен ҡыртайта биргән мосолман тоҡомо сыйылдаҡ тауыш сығарҙы. – Беҙҙең ваҡыт яғы самалыраҡ, биғәйбә, ул ғына ла түгел, ифрат тар. Шул сәбәпле бына ошо хөрмәтле әфәндене бүлдермәй-өҙҙөрмәй генә тыңлап тороу кәрәк булыр.

Ыш-пыш килгән йәмәғәт еңелсә геүләп ҡуйҙы: ҡайҙан төшкән, әй, был әфәндене хөрмәтләһе? Һай, килештерә лә баһаң, сыйылдаҡ!

Шыҡһыҙ һонтор үә сикһеҙ ҡаҡса «әфәнде» йораты, барлыҡ яһалма шөһрәте менән болдор һикәлтәһенә баҫып, күнегелгән ҡул ишараһы яһауға, йәнә тынлыҡ урынлашты. Көлләһө берҙәй – әллә бер кәрәмәт көтөп, әллә мөғжизәле өмөт менән – уға төбәлде лә ҡатты.

– Кешеләр! – Һонтор, көсәнә биреп, урынһыҙға ҡысҡырып ебәрҙе. Тауышы былай көр генә икән, тикмәгә хәрби түгелдер... – Беҙ волость үҙәгенән. Үтә мөһим дәүләт эше менән йөрөп ятабыҙ...

Төпөш мосолман заты, башҡортсаны-татарсаны бергә бутай-бутай, тәржемә яһарға тотондо. Йәғни, ололар әйтмәксе, тылмас икән.

– Беләһегеҙме, кешеләр, оло бола алдында торабыҙ, – тип һүҙен дауам итте урыҫ. – Бола ҙур ғына түгел, дәһшәтле лә булмаҡсы...

Шулай тиеүе булды, тыңлап тороусылар өҫтөнән шом тулҡыны үтеп китте. Унда-бында артыҡ та, артыҡ булмаған да һүҙ ысҡындырыусылар табылды:

– Әрәсәй булһа, болармай ятмаҫ...

– Тағы кемгә тейҙе икән шойҡаны?..

– Тигенгә йөрөмәйҙәрҙер, тип уйлаған инем дә...

– Шулай инде, ябай халыҡ уларға көндәре төшкәндә генә хәжәт, ә бүтән саҡта иҫкә алғандары ла юҡ...

Быларын тылмас әллә ишетмәне, әллә, ишетһә лә, кәрәкһеҙ һананы – тәржемә итеп торманы. Әммә ләкин түрәһе алдында йәпәтәйләнеп алыуҙы кәрәкле тапты:

– Тауыш, ағай-эне! – тип халыҡты тынысландырған булды. – Әүәл ипле генә тыңлап торабыҙ, һорауҙар тыуа икән – һуңынан.

– ... Илебеҙҙең көнсығышында тыныс түгел, туғандар. Ҡыҫҡаһын әйткәндә, – япон ҡоторона! Ул еребеҙгә, хатта бөтөн дәүләтебеҙгә урынһыҙ дәғүәһен белдерә һәм яҡын-тирәһендәге беҙҙең биләмәләребеҙҙе баҫып алырға самалай. Кисәге көн бөтә ил буйынса хәрби хәл иғлан ителде. Уға ярашлы, һәр дүрт ихатаға бер һалдат иҫәбенән йәшерен мобпредписание алып килдек: ауыл ере өсөн шарт шундай. Үҙ исем-шәрифен ишеткән кеше бына ошо яҡҡа сығып баҫырға тейешле. – Ул кесерткәнле ҡойма буйындағы ышыҡҡа күрһәтте лә ҡулына таушалып бөткән дәфтәр бите алды.

Йәмғеһе ете ир-ат кәрәкле урынға сығып, тигеҙһеҙ сафҡа баҫыуға, һәр береһенең ҡулына тәғәйен һарғылт ҡағыҙ киҫәге тотторҙолар. Был баяғы «мобпредписание» тигәне ине. Ир заты, тәбиғәте буйынса, ошо булып ятҡан ҡот осҡос бәхетһеҙлекте тыныс ҡына ҡабул итергә тырышһа, ҡатын-ҡыҙ менән ҡыҙ-ҡырҡын араһында һыҡтау тауыштары ишетелеп ҡалды. Кемдер шул арала сырҡырап сығырға өлгөргән күҙ йәштәрен йәшертен генә һөртөп ҡуйҙы.

Әле аныҡ ҡына сәбәбе түгел, төплө һылтауы ла билдәһеҙ булған һуғышҡа алыныусылар төрлө йәштәрҙә ине. Тик шуныһы дөйөм: улар көллөһө лә тик ярлы ғаиләләрҙән. Әйтерһең дә, буйтым хәллеләрҙән һаналған әлеге ауылда төптө ярпы ғына йәшәп ята. Ә һуғышҡа эшкингән етешлеләр менән байҙар бөтөнләй юҡ иҫәбендә...

Бәхетһеҙлеккә юлыҡҡандар араһында Мөхәмәтша менән уның улы Фазыл да бар. Бына һиңә дүрт өйҙән бер кеше! Инде ҡырҡты уҙып, үҙ ғүмерендә байтаҡты күрергә өлгөргән булһа ла, ошо көтөлмәгән афәттән һеңгәҙәп, гүйә, телһеҙ ҡалған Мөхәмәтша ни әйтергә лә, ни ҡылырға ла белмәһә, егерме йәшлек Фазылдың нимә булып ятҡаны әле аңына барып етмәгән һымаҡ. Ул, әҙәмгә һанап, үҙен дә әрмеләргә саҡырыуҙарына маһайған кеүек түшен киргән дә әллә кем булып баҫып тора. Күрегеҙ, йәнәһе, ул да ир етте! Уға ла Ватанды һаҡлауҙы ышанып тапшыралар...

Вулыс әһелдәре, иҫәнлек-һаулыҡ һорашырға баштарына ла инеп сыҡмаған кеүек, хушлашырға ла «онотоп», нисек пәйҙә булғандар – шул рәүешле ҡапыл ғына күҙҙән юғалдылар. Эшем эйәләре артабан китте, ә кескәй генә ауылдың кешеләре үҙ хәсрәте, үҙ ҡайғыһы менән күҙгә-күҙ ҡарашып, аптыраҡ хәлдә торҙо ла ҡалды. Хатта, асылған ауыҙҙарын да ябырға оноттолар: өн булдымы бая булып үткәндәр, әллә ни бары яман төш кенәме. Юҡ, был төш түгел ине, ә өндөң оторо яманы.

Ҡурҡыныс тулы билдәһеҙ юлға икенсе көнөнә үк сығырға фарман бирелде. Өлөшөңә төшкәне шул булғас, нисек итмәк кәрәк: хәйерһеҙ яҙмыш ҡушыуы буйынса һуғышҡа эләккән ир-егет, былай ҙа наҡыҫ ризығынан өҙөп-йолҡоп, булмаған ҡашығаяғын, башҡаһын да ҡайҙан етте шунан табып, хәтәр сәфәрҙәрҙең иң хәтәренә әҙерләнде. Ауылдың алтын тотҡаһы һаналған Ноғман бей уларҙың һәр береһенә мул ғына итеп юллыҡ аҙыҡ-түлек бирһә, күрше-күлән бар хәленсә башҡа ваҡ-төйәк менән ярҙам иткән булды. Әле кисә генә бер ғәмһеҙ йәшәп ятҡан, ә иртәнге көн иңдәренә һалдат шинеле һалып, яурынына биштәр менән мылтыҡ аҫырға тейешле ауылдаштарын бөтә ауыл оҙата сыҡты.

***

Етенән ишелгән урыҫ сабатаһы сырмаған буласаҡ һалдаттар, көҙгө бысраҡта ласҡылдата баҫып, вулысҡа ҡәҙәре йәйәү барҙы. Уларҙы шунда уҡ, ашығыс рәүештә командаларға бүлгесләп, хәрби эшелонға тейәнеләр.

Мөхәмәтша менән Фазыл, йәнә лә уларҙың вагонына һуңғы мәлдә генә ниндәйҙер мөғжизә арҡаһында килеп эләккән ауылдаштары Лотфулла, бына инде нисәнсе көн (үҙҙәре лә иҫәбен юғалтты), һәлмәк сайҡалған үтәатма шыҡһыҙ вагонда өҙлөкһөҙ, шунлыҡтан ялҡытҡыс туҡылдашҡан тимер тәгәрмәстәр тауышына ҡолаҡ һала-һала китеп бара. Эшкә күнеккән әрһеҙ ауыл кешеләре ҡаҡ урындыҡ һаҡлап тик ятыуҙан тамам биҙһә, ҡала용ыҡыларға булды ни ҙә, булманы ни. Ошо, аҙағы нисек барып бөтөрө билгеһеҙ сәйәхәттән улар, гүйә, ләззәт табып, бер-береһе менән булып-булалар. Әҙәпһеҙ көләмәстәр һөйләп һаһылдашалар, юҡ нәмәнән дә ҡыҙыҡ табып көлөшәләр, әйтерһең дә, үлемесле һуғышҡа түгел, ә ҡайҙалыр күңел аса китеп баралар. Ҡыҙыҡ та инде әҙәм балаһы...

Ят мөхиткә өйрәнеп китә алмай аҙапланған ауылдаштар, артабан нисек тә айырылмаҫҡа тырышып, бер-береһенән күҙ яҙлыҡтырмаҫҡа һәм бергәрәк булырға һөйләшеп ҡуйҙы.

Сираттағы, шығырым тулы халыҡ ҡайнап торған, ҙур стансала үҙҙәренең ниндәйҙер Порт-Артур тигән ҡалаға китеп барыуҙарын белә алдылар. Һалдаттарҙың әлеге ҡаланы күреү түгел, ошоғаса уның тураһында ишеткәндәре лә юҡ: уңдырырмы, туңдырырмы Порт-Артур? Хәйер, вагондағыларҙы һалдат тип атауы ла әлегә шартлы ғына ине: уларға хәрби кейем дә, тәғәйен ҡорал да бирелмәгән. Бер эшелон булып алама ғына кейенгән ала-ҡола ярпы китеп бара. Әҙәмдәрҙең затлы кейемлеләре өйҙәрендә ҡалды...

Ҡором ҡатыш майға буялып бөткән паровоз, туҡтау белмәй, ыш-пыш килеп елә лә елә. Артынан һауала урғыла-ҡайнай ҡара төтөн эленеп ҡала. Күҙ алдынан, бер-береһен алмаштырып, болғансыҡ һыулы ҙур-ҙур йылғалар, ылыҫлы урман менән ҡапланған бейек тә, бөйөк тә тауҙар, быға тиклем күҙ күрмәгән, ҡолаҡ ишетмәгән ҡоролмалар, йоҡомһорап ятҡан ауылдар, шау-шыулы ҡалалар йүгерешеп уҙа. Хәрбиҙәр, күрәһең, ныҡ ашыға. Тәүлегенә ни бары ярты сәғәтлек ике привал яһап алалар ҙа – вәссәләм, аръяғына үҙ йүнеңде үҙең күрәһең. Тамам биҙҙерҙе был тәгәрмәс өҫтөндәге тормош! Хәҙер, баштараҡ битараф ҡыланып, бошоноу белмәй ышаһыҙ килгәндәрҙең һаны һиҙелерлек кәмей төштө. Шулай, нужа тигәнең һәр кемде аҡылға тиҙ ултырта. Бәлки, кешеләрҙе алыҫ булмаған һуғыш еҫе борсолорға мәжбүр итәлер...

Ниһайәт, сираттағы туҡталышта, булған ат-ужаңды үҙең менән алып, вагондарҙан сығырға ҡушылды. Таҡылдап оҙаҡ барыуҙан ялҡып бөткән кешеләр иркен һулап, тәмәке төтөнө ҡатыш ауыр еҫ аңҡып торған һаҫыҡ торлаҡтарынан тиҙерәк ҡотола һалырға ашыҡты. Ошо тынсыу вагондар күрәсәктәре алдында бер ожмах мөйөшө генә икәнлеген улар әле белмәй ине.

Талсыҡҡан тәндәрен яҙмаҡҡа кирелеп-һуҙылырға тотонған һалдаттарҙы шунда уҡ сафҡа теҙеп ҡуйҙылар. Эҥер төшөп килгән мәл. Аяҡ аҫтарында, ундабында шаҡырайып ҡатҡан ҡар осмоттары күренгеләй, һалҡындан былай ҙа өшәнгән тәнде ҡурыштырып сирҡаныс ел иҫә. Офоҡ буйынан тәгәрәп барған ифрат ҙур ҡыҙыл ҡояштың инде бөтөнләй йылытмаған нурҙары эс бошорғос һоро ҡаялар менән уратып алынған ҙур ғына таш ҡаланы яҡтырта. Шулай ҙа ни сәбәптән ҡояш шул ҡәҙәре ҡып-ҡыҙыл икән? Ғәҙәттә, оло ҡан ҡойош алдынан шулай була, тиҙәр, әллә ошоноһо хаҡмы?

Уң ҡулда, йәнәшәлә генә, сиге-ҡырыйы күренмәгән даръя булып ҡарағусҡыл ҙур һыу тулҡына. Был – диңгеҙ. Бында аяҡ баҫыусыларҙың күпселеге уны тәү тапҡыр күрә. Шуның өсөн дә күҙ күреме ерҙә күк көмбәҙе менән барып тоташҡан серле дарьянан, алдарында кинәт асылған башҡа ғәжәп тә, мәҙәк тә күренештәрҙән, сәйер ҙә, бер аҙ шомлораҡ та сит-ят мөхиттән ҡараштарын айырып ала алмайса аңшайышып тороуҙарын беләләр. Нимә көтә уларҙы был ерҙә: шаулап торған бөтмәҫ данмы, әллә юйылмаҫ меҫкен хурлыҡмы? Кем белә, яҙмыш кемгәлер, бәлки, туҫтаҡлап-туҫтаҡлап татлы дан туртаһын эсерер, ә кемгәлер хурлығынан да ауыҙ иттерер. Әлегә барыһы ла Хоҙай ҡулында, артабан ни булыры тик уға ғына билдәле. Әҙәми зат был гонаһлы донъяның бары күҙаллаусыһы ғына. Күҙаллаусыһы һәм Тәңре ҡушҡандарҙы бер һүҙһеҙ үтәргә тейешле ҡоло. Әммә ләкин Бөйөк Тәңре тарафынан булдырылған тәкәббер әҙәм шул Тәңреһенең өйрәткәнен тыңлағыһы, ҡушҡанын үтәйһе, әйткәнен ишетәһе лә килмәй. Уның күрәсәк бөтә бәләһе лә тап ошонда...

***

Бер мең туғыҙ йөҙ дүртенсе йылдың ғинуар айы баштары. Яңы килгәндәрҙе, буй-һынына ҡарап, аҡыл-фиғелен дә самалап, ҡайһыһын текә яр буйына теҙеп ҡуйылған дәһшәтле туптарға канонир сифатында, икенселәрен диңгеҙ ситендә моңайып эшһеҙлектән йоҡомһорап торған мөһабәт караптарға матрос итеп, өсөнсөләрен, нигеҙҙә ауылдыҡыларҙы, йәйәүле ғәскәр хеҙмәтенә тәғәйенләнеләр. Саң борхотоп йүгерергә һәм ит турағысҡа иң алдан барып инергә тейешле пехота өсөн талымһыҙ ауыл кешеһенән да шәберәге бармы һуң!? Әлбиттә, юҡ!

Тәғәйен урынға барыу менән өр-яңынан һалдат кейеме кейҙереп, ҡулдарына штыклы мылтыҡ тотторҙолар ҙа «сухпай» тип аталған бер нисә көнгә еткәндәй ризыҡ бирҙеләр. Еҙ төймәләре ҡояшта янып торған шинель кейеп, иңбашҡа бығаса төштәрендә лә күргәндәре булмаған ҡоралды аҫып алған беҙҙең ауылдаштар ҡапылғара бер-береһен танымай торҙолар. Бәхеттәренә күрә, улар был юлы ла бергә ҡалды. Пехотала. Башҡа урынға ҡуйыр өсөн уларҙың, буй-һындары тура килһә лә, фиғелдәре етеңкерәмәне, буғай. Шулай ҙа улар ошоноһона ла ҡәнәғәт ине: шөкөр, айырылғандары юҡ.

Аталы-уллы Мөхәмәтша менән Фазыл, уларҙың туғанына әйләнгән Лотфулла ла хәҙер, башҡалар менән бер ҡатарҙан, хәрби эш серҙәренә төшөнә. Мылтыҡтың һәм бүтән ҡоралдың төҙөлөшөн, уның менән нисек мөғәмәлә итергә өйрәнә, ҡарауыл хеҙмәтен үҙләштерә. Ауыл кешеһе, нимә-нимә, ә ҡарауылда һынатмай: уяу ҙа, сос та, тилбер ҙә. Шул рәүешле уйламағанда-итмәгәндә башланып киткән әрме хеҙмәте үҙ мәйеле менән дауам итә. Ауыр эшкә, һәр төрлө юҡсыллыҡҡа бәләкәйҙән өйрәнгән яҡташтар өсөн уның бер ҡыйынлығы ла юҡ һымаҡ. Тик ҡоттарҙы алып, рухтарҙы һындырырлыҡ итеп һөйләгән һуғышы ғына башланып китә күрмәһен...

***

Аҡылдан яҙыр сиккә етеп «Бөйөк Азия» ҡитғаһын төҙөү хыялы менән янған япон «эшмәкәрҙәре» хаҡында береһенән-береһе шомлораҡ, хәүеф тулы хәбәрҙәр көн яҙлыҡтырмай ишетелә тора. Остоҡ ҡына бер нисә утрауға оялап алған һуғыш суҡмарҙары, ысынлап та, Рәсәй тип аталған бөйөк илгә теш ыржайта, йоҙроҡ күрһәтеп янай. Хас та олпат бөркөттөң үҙенә ташланырға баҙнат иткән ҡарға. Оңҡот ҡарға, ярай, кәрәкләһен эләктерә лә йәһәтерәк ситкә тайыу яғын ҡайыра, ә былар... Өҙмәйҙәр ҙә, ҡуймайҙар ҙа тигәндәй, һуҡыр себен ише инеп киләләр.

Шулай ҙа әлегә асыҡтан-асыҡ һөжүмгә күсергә илбаҫарҙарҙың батырсылыҡтары етеңкерәмәй кеүек. Әллә инде уңай мәлен көтәләр. Әммә ләкин ошо рәүешле оҙаҡ дауам итә алмаҫы һәр кемгә, хатта хәрби эштә бөтөнләй томана кешегә лә, көн кеүек асыҡ ине. Һәм шулай килеп сыҡты ла.

1904 йыл 27 ғинуарының томанлы иртәһендә урыҫ флоты крейсеры «Варяг» менән канонер кәмәһе «Кореец» Корея иленең Чемульпо ҡалаһы янында япон эскадраһы тарафынан ҡамап алынды ла тиңһеҙ алышта ҡыйралып һәләк булды. Һүнмәҫ даны ғына тороп ҡалған «Варяг» йөҙәрләгән туптарҙан утҡа тотолоп, диңгеҙ упҡынына батырылһа, «Кореец» иһә шартлатып юҡ ителде. Ошо ваҡиғаларҙан һуң инде Рәсәй менән Япония араһындағы мөнәсәбәттәр ахыр сиккә етеп ҡырҡыулашты, һәм уларҙың халыҡ-ара хәлдәргә лә шойҡаны теймәй ҡалманы. Хәҙер килеп бөтәһе лә аңланы: оло һуғыш ҡотолғоһоҙ. Бихисап ҡорбан үә сығымдар талап итәсәк һуғышҡа ни бары бер аҙым ҡалды.

Рәсәйҙең йомшаҡлығын күреп, әллә шөрләгәнен һиҙә башлаған японадарҙың Корея менән Манчжурияны баҫып алыу нәфсеһе оторо көсәйҙе генә. Февраль айының һигеҙенсе көнөндә ахыр сиккә етеп һөмһөҙләнгән дошман караптары, иҫкәртеүһеҙ-ниһеҙ, Рәсәйҙең Порт-Артур ҡалаһында торған хәрби флотына һөжүм итте. Ошо көндән ысынлап ҙур һуғыш башланды.

Ляодун утрауында урынлашҡан Порт-Артур үҙе Ҡытайға ҡараһа ла, ике яҡлы килешеү нигеҙендә, Рәсәй унда үҙенең егерме меңлек гарнизоны менән Алыҫ Көнсығыш флотилияһын тота ине. Уныһы ла ҡыш миҙгелендә генә. Бына тап ошо хәл японадарға оҡшап етмәне һәм һуғыш башлар өсөн төп сәбәптәрҙең береһе булды. Ә сәбәбе бар урында һылтауы табыла...

Порт-Артурға ябырылған «көтөлмәгән» десант хаҡында ишетеп ҡоттары алынған Рәсәй хәрби етәкселеге тәү башта юғалып ҡалды һәм ҡапылғара ни ҡылырға ла белмәне. Тревога буйынса күтәрелгән частар араһында тәртипһеҙлек кенә түгел, ә ысын паника күҙәтелде. Ойошҡанлыҡ тигәнеңдән эҙе лә булманы. Ошоларҙан оҫта файҙаланған дошман баштан уҡ өҫтөнлөктө үҙ ҡулына алды. Алды һәм шаҡырайтып ныҡ тотто.

***

...Беҙҙең ауылдаштар хеҙмәт иткән уҡсы рота ҡаланан алыҫ түгел суҡайып күренгән бейек ҡалҡыулыҡ һыртында, алдан әҙерләп ҡуйылған окоптарҙан урын алды. Уларҙың бурысы – портты ҡоро ерҙән янаған дошман пехотаһы һөжүменән һаҡлау.

Әлеге позицияларҙан Порт-Артур ҙа, уға килгән-киткән юлдар ҙа, уны уратып ятҡан күкшел-һоро диңгеҙ ҙә ус төбөндәгеләй күренеп тора.

Тәү ҡарауға ғәләмәт дәһшәтле, еңелеү белмәҫтәй күренгән Рәсәй хәрби караптары башта, ни сәбәптәндер, ҡуҙғалғыһы килмәй, ойоп тороуҙарын белде. Командующий, имеш, шулай ҡушҡан: йәнәһе лә, дошман провокацияһына бирелеп, артабанғы бәрелештәргә юл ҡуйырға ярамай. Имеш, японадарҙың аҙ

һанлы десантын пехота көсө менән дә туҡтатырға була. Күптән түгел генә тәғәйенләнгәнгә күрәмелер, ҡала коменданты генерал Стесселдең, диңгеҙ десанты менән алышта төп ролде флот үтәргә тейеш, ә ҡалдыҡ-боҫтоҡ пехотаны беҙҙең йәйәүле һалдаттар ҡыйратыр, тигәненә ҡолаҡ һалыусы табылманы. Остоҡ мәғәнәһе лә, артыҡ файҙаһы ла булмаған иҫәпһеҙ-һанһыҙ кәңәшмәләр, ялҡытҡыс оҙаҡ ултырыштар үтеүгә ҡарамаҫтан, ана-бына ябырылырға әҙер баҫҡынсыларға ҡаршы тороу маҡсатында аныҡ ҡына бер нәмә лә эшләнмәне. Бәғзе һәләтһеҙ хәрби етәкселәрҙең баштарын бөтөнләй юғалтып, меҫкен хәлендә ҡалыу һөҙөмтәһендә, ай аҙаҡтарында инде Япония ихласлап һөжүмгә күсте.

Дошман ғәскәренең күпмелер өлөшө ярымутрауға аяҡ баҫыу менән, көслө шторм ҡубып, әлеге төркөмдө төп көстәрҙән айырҙы ла ҡуйҙы. Бына ул сит ерҙәргә ымһынып яҫҡынған ҡомағайҙарға емергес һөжүм яһау өсөн уңай мәл! Окоптарҙан һикереп сыҡ та томшоҡтарына тондор.

Ошоно көткән шикелле, күҙ асҡыһыҙ ғәрәсәт аҙна-ун көн буйына дауам итте. Гүйә, артабан ни эшләргә белмәй тик торған урыҫ сиреүенә тәбиғәт-әсәнең асыуы ҡабарған. Хурлыҡтың иң олоһона тарыған Рәсәйгә ярҙам итергә теләп, баҫҡынсылар менән үҙе үлемесле көрәшкә сыҡҡан һәм аяуһыҙ алыша. Ҡуйы томан менән туҡтауһыҙ ҡойған ямғыр ышығында еңел катерҙар дошмандың эре, шунлыҡтан ауыр ҡуҙғалған карараптарына яҡын уҡ барып, уларҙы торпеда утына тота ала ине. Япон эсминецтары ифрат йәтеш сәп сифатында, урындарынан ҡыбырлай алмайса аҙнанан ашыу торҙо. Быныӊ ише уңай мәлде күрәләтә ҡулдан ысҡындырыуға хатта траншеялар төбөндә боҫоп ятҡан һалдаттарҙың да йәне әсеп, һарыуы ҡайнаны. Өҫтәүенә, үлә-бата ҡоро ергә сығырға өлгөргән остоҡ ҡына япон частарын да юҡ итергә фарман бирелмәне. Бынауындай көс менән уларҙы тәүге атакала уҡ һытып үтергә була ине. Хәрби эшкә бөтөнләй ҡыҫылышы булмаған кешегә лә шуныһы асыҡ: беҙҙең командирҙар йә алдан уҡ ҡаршылыҡһыҙ бирелергә ҡарар иткән, йә үҙ-үҙҙәренә кәрәгенән артыҡ ышана. Ошо хаҡта һүҙ ҡуҙғатып, ризаһыҙлыҡ белдереүселәргә кесе офицерҙар:

– Молчать! Сказано, без приказа огонь не открывать! – тип екерә лә ҡуя. Саманан артыҡ осоноп киткәндәрҙең сикәһенә һуғып ебергә лә тартынмайҙар. Һере ҡолаҡтарҙы хатта урынында уҡ атып үлтереү менән янайҙар. Шул рәүешле, күҙ алдында ябай һалдаттың аңына һыймаҫ сәйер ҙә, йәмһеҙ ҙә хәлдәр булып ята. Командирҙарының битарафлығын күрепме, башта һөйләнеп маташҡандар ҙа аҙаҡ барыһына ҡул һелтәне: ни булһа шул булыр, ҡайһылай итергә һәм нимә эшләргә икәнлеген юғарыраҡ ултырғандар белмәй түгелдер әле. Шуның өсөн бит улар юғарыла, ә юғарынан, мәғлүм, алыҫыраҡ та, күпкә асығыраҡ та күренә...

Артыҡ иҫ китмәле ҡатмарлығы ла юҡ һымаҡ хәлдән шаңҡып ҡалған баш командующий, йәһәтләп Порт-Артур менән Манчжуриянан өҫтәмә көстәр килтереүҙе тәьмин итәһе урынға, оборонаны үҙ ағышына ҡуйҙы. Башҡа хәрби етәкселәр ҙә үҙҙәрен һатлыҡ йәндәрсә тотто. Йәғни окоптарҙа туңып ятҡан пехотаның да, яр буйын һаҡлаған артиллеристарҙың да, дәү караблдәрҙә эшһеҙ интеккән матростарҙың да киләсәге яҙмыш ҡосағына ташланған. Шул сәбәпле сәйер һуғыштың барышы алдан уҡ хәл ителгәндәй тойола ине.

Беҙҙең ауылдаштарҙың да фәтеүәһеҙгә соҡор һаҡлау ғына түгел, тиктомалға дуға бөгөп ятыуҙарына аҙнанан ашты. Көндәр бола тороуға ҡарамаҫтан, һыуығы әллә ни түгел. Ләкин оло ер кешеһе өсөн ғәҙәти булмаған еүешлек, туҡтау белмәй өҫтән һибәләгән ваҡ ямғыр үҙенекен эшләй: ныҡ өшөтә һәм теште-тешкә тейҙермәй ҡалтырата. Тағы бер аҙ ошолай ятһаң, пулянан үлмәгән хәлдә лә, төҙәлмәҫ куҡһәүгә әйләнеүең бар.

Шулай ҙа көн яманының да бер килеп ахыры етә бит ул. Һауа торшо арыуланып, ярһыу диңгеҙ тыныслана төшөүгә, ҡаршы яҡ караптары, томшоҡтарын ярға терәп тигәндәй туҡталдылар ҙа оло ҡорһаҡтарынан баштан-аяҡ ҡоралланған иҫәпһеҙ-һанһыҙ ғәскәр ҡойолторға тотондолар. Әлеге эште бер тамаша ҡарағандай күҙәтә ятҡан Рәсәй йәйәүле һалдаттарының йәне өҙөләр хәлгә етте. Шулай булмай, дошман, ана, етеп килә, ә уларҙың ошоғаса ҡаты-ҡото кимереп, йылымыс татыр һыу эсеүҙән башҡа эш күрһәткәндәре юҡ! Ғәжәп, тағы күпмегә һуҙылыр икән ошолай?..

***

Бер ниндәй ҡағиҙәһе булмаған мәғәнәһеҙ һуғыштың башланыуына һигеҙенсе көн тигәндә генә, бет һимертеп, үҙҙәренең бында ни өсөн ятҡанлығына аптырай башлаған һалдаттарҙы, ниһайәт, күтәрҙеләр ҙә дошман инде нығынырға өлгөргән плацдармды ҡыйыуһыҙ ғына атакалап ҡаранылар. Әммә ләкин баш-күҙ алып, үҙ көсөн тойорға өлгөргән, өҫтәүенә, урыҫ кешеһенә ҡарата сикһеҙ нәфрәт тойғоһо менән янған самурай тоҡомдары әлеге һөжүм ишаратын анһат ҡына кире ҡаға алды. Уларҙың күҙ асҡыһыҙ ғәрәсәткә тиң диңгеҙ артиллерияһы уты аҫтында ҡалған рәсәйлеләр йәһәтләп элекке позицияларына сигенергә мәжбүр булды. Оҙон-оҙаҡҡа һуҙмай, уларҙың артынан дошман пехотаһы ҡыуа төштө. Баштан уҡ тәүәккәл тотонған япон ғәскәре шулай итеп тиҙ арала Манчжурия менән Порт-Артурҙы тоташтырып торған берҙән-бер тимер юлды быуып, бөтә ярымутрау буйынса элемтәне өҙҙө лә ҡуйҙы. Ошо уңышһыҙлыҡтың тәүге һөҙөмтәһе булып Ҡытайҙың Люйшунь ҡалаһы тулыһынса ҡамауҙа ҡалды.

Ҡоро ер ныҒытмалары юҡ иҫәбендә, ә уңыштан ҡанатланған дошман нәҡ шунан яҡынлаша. НыҒытмалар өсөн тәғәйенләнгән аҡса эреле-ваҡлы түрәләргә торлаҡ төҙөү өсөн китеп бөткән. Хәйер, бынһы һуңынан ғына асыҡланасаҡ. Ә хәҙергә...

Ә хәҙергә, ялҡытҡыс оҙон төндәрҙең тағы береһе үтеп, яҡтыра барған мәлдә һис ахыры булмаҫтай тойола башлаған туктауһыҙ аҡ ямғыр, ниһайәт, баҫыла башланы һымаҡ. Ҡара ҡурғаш ише ауыр болоттар шыйығая төшөп, күк йөҙөндә урыны-урыны менән зәңгәр йыртыҡтар күренгеләп ҡала. Әллә ни алыҫ булмаған ҡыш еҫе аңҡып ҡуя: таң алдынан ҡырауытҡан ер өҫтө еңелсә туңа һәм көн йылыһына ирей ҙә иҙелеп ятҡан батҡаҡҡа әйләнә. Итекһеҙ кешегә ошо бытҡаны кисеп йөрөүҙәре үҙе бер афәт. Тау араларынан ағып төшкән шишмәнең ситтәре йоҡа ғына боҙ-шекәрә менән ҡаплана барһа, тоҙло диңгеҙ һыуы әлегә бирешмәй.

Ошондай иртәләрҙең сираттағыһында өшөгән аяҡтарын бер-береһенә ҡаҡҡылай биреп бруствер өҫтөндә торған һаҡсы, ҡото алынып, яр һалды:

– Горизонтта япон караптарын күрәм! Ғәләмәт күптәр!

Бар донъяны ҡәһәрләп окоп эсендә шоҡорайышҡан һалдаттар көтөлмәгән ошо хәбәрҙән шунда уҡ һикерешеп тороп, шешенгән күҙҙәрен ыуа-ыуа, талғын ғына тулҡынып ятҡан һарғылт диңгеҙгә төбәлде. Ысынлап та, ян-яҡҡа һибелеп шыйығая барған иртәнге томан эсендә, шомло өйөрмәләр булып, бихисап төтөн бағаналары күренә. Һаҡсы хаҡ: ауыҙҙарын асып торған һалдаттарҙың алдында эшкә ихласлап тотонорға йыйынып, һаҡлыҡ менән яҡынлашҡан ҡаршы яҡ эскадраһы ине. Етеп килгән, юҡ, хәҙер инде күҙгә ҡарап торған әжәлдең үҙҙәренә ҡарай шыуышҡанын күреп, күпте кисергән аңлыраҡтарҙың йөрәктәре жыу итте. Ә һуғыштың ни икәнлеген әлегә белеп етмәгән йәш һалдаттар, бар донъяларын онотоуҙан, асыҡ урынға уҡ сығып баҫты: оһо, ниндәй хайран ҡалырлыҡ күренеш! Бындайҙы көн дә күреп булмай... Әммә ләкин уларға шаҡ ҡатҡан көйө

оҙаҡ торорға тура килмәне. Ҡапыл ҡайҙалыр томан артында хасил булып, торған һайын көсәйә барған йән өшөткөс хәтәр сыйылдау күптәрҙе иҫтәренә килтереп, асылдарына ҡайтырға мәжбүр итте. Ләкин, үкенескә ҡаршы, барыһының да түгел. Эштең ниҙә икәнлеген һиҙеп алған уяуыраҡтар: «Спасайся, братва!» – тип ҡысҡыра-ҡысҡыра ҡотҡарғыс траншея эсенә һикерә башлау менән, ҡыҙыҡһыныуын еңә алмайынса аңшайып ҡалған Фазылды атаһы төртөп йыҡты. Үҙе уның өҫтөнә ҡаплана барып төштө. Ошоно ғына көткән тиерһең – эргәләрендә генә, саң-томан бағанаһы күтәреп, ауыр снаряд ярылды. Уның ҡолаҡ тондорғос шартлауынан һуң, боҫорға өлгөрмәй ҡалған бер нисә һалдат, киҫелгән ағас ише, ергә ауҙы. Уларҙы ер аҡтарып ярылған ғазраил үҙенең меңәрләгән ярсыҡтары менән ҡырып һалды. Шунда уҡ үлемесле яраланғандарҙың йәнгә талашып аҡырғаны ишетелде. Һуңғы һулышын алған кемдер шым ғына ыңғырашып ҡуйҙы.

Улын үҙ кәүҙәһе менән ҡурсып ятҡан Мөхәмәтшаның өҫтөнә онталған туң таш-тупраҡ ҡатыш баҙлаған тимер киҫәктәре яуҙы. Үлем көҫәгән киҫәктәрҙең арҡаһына бәрелеүен тойған атай, ғәзиз балаһын ергә һеңдерерҙәй булып, уға нығыраҡ һырыҡты. Шартлау тауыштары унда-бында йәнә бер нисә тапҡыр ҡабатланды ла, кинәт тынлыҡ урынлашты. Тонған ҡолаҡтарға ул тынлыҡ сәйер ҙә, бер аҙ шомло ла тойола.

Үлеләр ҡуптарылған тупраҡҡа яртылаш, йә иһә тулыһынса күмелгән килеш ятһа, тере ҡалғандар, берәм-һәрәм ҡыймылдашып, баштарын ҡалҡытты. Аяҡтарына баҫырға өлгөргәндәр, һүгенә-һүгенә, өҫтәрен ҡағыштырҙы.

Был мәлдә аҫта, бая ғына йоҡомһорап ятҡан диңгеҙ ярындағы урын-еренә еткереп эшләнгән нығытмалар араһында, артиллеристар йүгерешә ине. Йылы казармаларынан уларҙы, күрәһең, ер һелкеткән япон туптары ғына ҡыуалап сығара алды. Тәртипһеҙ шау-шыу араһында кесе командирҙарҙың аныҡ фармандары ишетелеп ҡалыуға, ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә, күнегелгән етеҙлек менән, яр буйында торған дәү туптарҙың өҫкө ябыуҙары, көбәк чехолдары сисеп ырғытылды. Һыңар күҙҙәрен өңөрәйтеп торған дәһшәтле пушкалар үлемесле алышҡа әҙерләнде. Ялтырауыҡ көбәктәр, дошман караптары күренгән юҫыҡҡа тоҫҡалған көйө, бер аҙға ғына ҡатып ҡалды. Ләкин оҙаҡҡа түгел: артиллеристар ут асырға команда көтә. Һәм уныһы оҙаҡламаны:

– Батарея-а-а! – Бына-бына сөгөн бөркөргә әҙер туптар янында торған, күрер күҙгә шөһрәтле генә офицер уң ҡулын өҫкә күтәреүгә, окоптағы һалдаттар, тулҡынланып та, ашҡынып та, артабан ни булырын көттө: йәһәтерәк ҡуҙғалһағыҙ ине, дошман етеп килә лә баһаң! – За-алпо-о-ом пли!

Тирә-йүнде һоро төтөнгә күмеп, биш туптың биш көбәгенән бер юлы ут бөркөлөүгә, аяҡ аҫтындағы ер һелкенеп ҡуйҙы, окоп ситтәрендәге тупраҡ ишелде. Окоптар буйлап әскелтем дары еҫе таралды. Төтөн күкшелләнә барып, шыйығая төшөүгә, барыһы ла алдан килгән дәү крейсерҙың палубаһын ялмап алған ялҡын телдәре һәм ойоҫҡоп һауаға күтәрелгән дөм-ҡара болот өйөрмәһен күрҙе. Кумулятив йәҙрә тейгән флагман карап дөрләй ине. Шул арала әле генә бер йән эйәһе булмағандай тойолған траншеялар өҫтөнән ҡыуаныслы ла, ғәйрәтле лә «ура» тауыштары яңғырап үтте.

– Ура-а! Эҙләгәнегеҙҙе таптығыҙмы, илбаҫарҙар!?

– Бына ошо була урыҫ һыйы!

– Боҫоп ятҡансы, әллә ҡасан уҡ шулай кәрәк ине...

– Давай, кәрәгенә бир самурайҙың!

– Белһен кемгә йоҙроҡ төйнәгәнен...

Окоп эстәрендә күңелле һөйләш менән ҡәнәғәт ауаздар ишетелеп торҙо, йәнле хәрәкәт күҙәтелде. Өмөтһөҙлөккә бирелеүҙән инде һүрелә барған күңелдәр

ҡабаттан күтәрелеп, алыҫ булмаған еңеүгә ышаныс ныҡлап тоҡанды: караптың иң ҙурын бер атыуҙа ҡыйратҡас, ҡалған ыбыр-сыбыры нимә ул...

Шулай ҙа ҡыуаныстары иртәрәк булған икән. Тупсылар баяғы эштәре менән бары ҡырмыҫҡа ояһына таяҡ ҡына төрттө. Баш крейсерҙарына һиҙелерлек зыян килтергән рус артиллеристары япон моряктарының асыуын ҡабартты. Улар, әлеге туптарҙың ҡайһы урындан атҡанын шунда уҡ шәйләп алып, барлыҡ ҡоралдарынан ут асты. Яр буйындағы меҫкендәрҙең өҫтөнә ҡорос һәм ҡурғаш ямғыры яуҙы. Ун ике дюмлыҡ снарядтар төшөп ярылыуҙан бар донъя тетрәнде. Ә ер үҙе өҙләкһеҙ ыңғырашып торҙо. Елкәләргә, сирҡандырып, еүеш тупраҡ ҡойолдо, ағыулы төтөн күҙҙәрҙе ҡырҡты, тын алыуҙары ауырлашты. Тиҙ арала ҡомло яр буйының аҫты өҫкә әйләнде, гүйә, һука менән һөрөп ташланылар.

– Улым, мынауы мәхшәрҙә минән күҙ яҙлыҡтырып ҡуя күрмә инде. – Эске тетрәнеүен һиҙҙермәҫкә тырышҡан Мөхәмәтша Фазылдың ҡулын ҡыҫты. Хас та бала сағындағыса ныҡ итеп, әммә наҙлы итеп. – Лотфулла ҡустым, һин дә башыңды һаҡла. Бергә-бергә булырға тырышайыҡ. Үҙебеҙҙе үҙебеҙ аямаһаҡ, бында беҙҙе кем ҡайғыртһын...

– Эйе шул, ағый, ни күрһәк тә бергә күрәйек, бер-беребеҙҙе ташламайыҡ. – Лотфулла ҡурҡыу тулы мөлдөрәмә ҡарашын ауылдаштарына төбәне. Быны күргән Мөхәмәтша уны тынысландыра һалды:

– Иң мөһиме, егеттәр, ҡурҡыуға юл ҡуймағыҙ.Ҡурҡышыңдан юғалып ҡалдыңмы, эш харап.

Күҙ алдында ҡоторонған утлы ғәрәсәт нисек башланып киткән, шулай уҡ ҡапыл тынды. Төтөн ҡатыш туҙан таралып, траншеялар өҫтөндә шом тулы һиллек урынлашыуға байтаҡ ваҡыт үткәс кенә, башын ҡалҡыта биргән тәүге һалдат хәрәкәткә килде. Унан икенсеһе, өсөнсөһө. Иҫтәрен йыйып, ҡыйыуһыҙ ғына ҡыймылдаша башлаған кешеләрҙең алдында ҡот осҡос күренеш асылды...

Ергә һеңешеп ятҡан пехота әллә ни ҙур зыян күрмәгән ине, ә бына артиллеристар... Әле бая ғына өр-яңы биш туп торған урын, ысынлап та, һөрөнтө ергә оҡшап ята. Аҡтарылып ташланған тупраҡ өҫтөнә йәнселеп йомарланған тимертомор ҡалдыҡтары һәм... эреле-ваҡлы ит киҫәктәре һибелгән. Эйе, яр буйы тураҡланған әҙәм ите, әҙәм ҡаны менән тулған. Уларына өҫтәлеп, бер ситтәрәк, күҙҙәре йомолорға ла өлгөрмәгән кәүҙәһеҙ баш тәгәрәп ята. Бына ул кешелек дошманы – ҡәһәрле һуғыштың йәнеңде өшөтөп, ҡаныңды ойотор күренеше! Бына уның ысын йөҙө һәм үҙгәрмәҫ асылы. Үҙенең аҡылыңдан яҙҙырып, рухыңды иҙгес булмышы менән һалдаттар алдында ята. Ҡарағыҙ, күрегеҙ һәм фәһем алығыҙ, кешеләр! Фәһем алығыҙ ҙа аҡылығыҙға ҡайтығыҙ!

Ҡарағыҙ, күрегеҙ, тиһәк тә, әлеге күренешкә оҙаҡ ҡарап торорға күптәрҙең йөрәге етмәне. Беҙҙең ауылдаштар ҙа шым ғына окоптарына боҫа һалдылар. Әйтерһең дә, булып ятҡан яман ғәмәлдәрҙән соҡорға ҡасып ҡына ҡотолорға мөмкин...

Ҡыйралыштан әле иҫенә килеп, һушын йыйырға ла өлгөрмәгән йәйәүле ғәскәрҙе шунда уҡ бер әҙерлекһеҙ атакаға күтәрҙеләр. Сәбәбе: баяғы шау-шыуҙы файҙаланып, Рәсәй позицияларынан алыҫ түгел ятҡан ауылға япон пехотаһы килеп тулған икән. Һалдаттарға ана шуларҙы бәреп сығарыу бурысы ҡуйылды. Алыш ҡыҫҡа, әммә ҡаты һәм ҡанлы булды. Ҙур юғалтыуҙарға дусар ителеүгә ҡарамаҫтан, рәсәйлеләр дошманды тиҙ арала ауылдан ҡыҫырыҡлап сығара алды. Яралыларына ҡул һелтәгән илбаҫарҙар әйләнеп ҡаһа ла, кире килеүҙәренә шик юҡ ине. Ике яҡтың да ялан тулып үлектәре ятып ҡалды. Шулай итеп, бихисап ҡорбандар хаҡына Порт-Артурға тылдан янаған хәүеф кире ҡағылды һәм күпмелер ваҡытҡа кисектереп торолдо. Ә күпмегә кисектерелгәнлеген берәү ҙә белмәй.

***

Атаһынан тотам да ҡалмай эйәреп йөрөгән Фазыл ошо ҡаңғырыҡта аяғына ярсыҡ тейеүҙән ауыр йәрәхәт алды. Эйе, эҫеһе-һыуығынан, аслығынан ҡурсый килһә лә, атай хәстәре уны һуҡыр йәҙрә ярсығынан аралай алманы.

Фазыл үҙ аллы ҡуҙғалырлыҡ хәлдә түгел ине. Уңай мәлен тура килтергән Мөхәмәтша менән Лотфулла уны ауыл осондағы бәләкәй генә ер өйгә күтәреп индерҙеләр. Атай кеше, сорлап аҡҡан ҡанды туҡтатмаҡҡа, ыржайып торған яраны үҙе быуып бәйләне. Яралылар ифрат күп ине, ә санитарҙар күренмәй. Мөхәмәтша: «Өлгөрә алмайҙарҙыр», – тип ярһыған күңелен йыуатырға тырышты. Билдәһеҙ ярҙамды көтә торғас, һуңға ҡалдылар. Урын таныш түгел, ҡараңғы – ҡайҙа барып төртөлә беләһең. Шуға күрә һыҙланыуы үҙәгенә үткән Фазылды лазаретҡа иртәгәһен таң менән алып барырға ҡарар иттеләр. Әммә, кеше ниәт итһә лә, тормош үҙенсә эшләй ҙә ҡуя бит ул...

Төн урталары яҡынлашҡанда, һуғыштан ҡоттары алынып, тырым-тырағай ҡасып бөткән ауыл кешеләре ҡайта башланы. Бер аҙҙан башҡорттар боҫоп ятҡан өйҙөң хужалары ла пәйҙә булды. Улар ҡурҡыштарынан хатта ҡыҫыҡ күҙҙәре упайышып торған, оҙайлы аслыҡтан яңаҡтары суҡайып, урттары урмайған нәфсел ҡарашлы ҡытай кешеләре ине. Берәүһе олораҡ, икенсеһе шаҡтай йәш ике ир менән бер ҡатын тупһа аша шым ғына атлап инделәр ҙә, ҡыртайышып, баҫҡан урындарында тапандылар. Мөсһөҙ сыра яҡтыһында уларҙың ахыр сиккә етеп ябыҡҡан йөҙҙәре ифрат йәмһеҙ, шунлыҡтан ҡурҡыныс күренә ине. Лотфулла ирекһеҙҙән: «Был ҡәҙәре лә шөкәтһеҙ булырҙар икән, – тип уйлап ҡуйҙы. – Былар берәй аулаҡта, яңғыҙ-ярым сағында тап булһалар...» Тексәйешеп торған һөмһөҙҙәр уға, бер мәлдә, үҙҙәренең йәнен юллап, арттарынан килгән Ғазраил ише тойола башланы. Ошо ауыр тойғонан хатта күңеле өшәнеп китте лә, йөрәге сәнсеп ҡуйҙы.

– Үтегеҙ, гаспадиндар. Үтегеҙ һәм үҙ өйөгөҙҙәге һымаҡ булығыҙ. Нимәһенә ҡатып ҡалдығыҙ? – Мөхәмәтша ағаһының саф башҡортсалап уйынлы-ысынлы өндәшеүе һәм тыныс-йомшаҡ тауышы уның хафаланыуҙарын баҫа төштө.

– Эйе шул, түрҙән уҙығыҙ, – тип ағай лаҡабын йөпләгән булды ул. – Торлағығыҙға һорамай-итмәй баҫып ингән өсөн үпкәләмәйһегеҙҙер бит.

Тегеләр, әлбиттә, башҡорт теленең бер һүҙен дә аңламаны. Шуның өсөн дә, ҡапыс күҙҙәрен селт-селт йомғослап, бер-береһенә ҡараштылар ҙа өндәшмәй тороуҙарын белделәр. Ахырҙа Мөхәмәтша эйәк ишараһы менән уларҙы өс тояҡлы өҫтәл янына саҡырҙы. Үҙе биштәренән дөм-ҡара икмәк килтереп сығарҙы ла, сама менән бүлгесләп, Лотфулла йәйергә өлгөргән сепрәк өҫтөнә һалды:

– Рәхим итегеҙ, әфәнделәр, – тип ихлас йылмайҙы.

Быныһын инде шунда уҡ төшөнөп алған өй хужалары, артабан һис инәлтеп тормайынса ғына, өҫтәлдәге һыйға йомолдо. Уларҙың алдарындағы ҡаты-ҡотоға ҡомһоҙланып ябырылыуҙарына ҡарағанда, күптән ауыҙҙарына тәғәм ризыҡ алғандары булмағаны күренеп тора. Кем белә, Рәсәй һалдаты шул рәүешле, үҙенә лә таҡа-тоҡа ризығы менән уртаҡлашып, бәлки, ошоғаса күргәне лә булмаған ҡытай кешеләрен ас үлемдән ҡотҡарғандыр әле...

«Меҫкендәр, ниндәй көнгә төшкәндәр, ә, – тип фекер йөрөттө уларҙы йәлләп киткән Мөхәмәтша. – Хәйер, илдәрендә инде тиҫтә йылдан ашыу бер мәғәнәһе лә, айышы ла юҡ, аҙағы күренмәгән өҙлөкһөҙ һуғыш бара, ана шул уларҙы ошо хәлгә ҡалдырғандыр ҙа. Шулай булмағанда, ҡытаймы һуң инде ас торор кеше...»

Тамаҡ ялғағандан аҙаҡ дуҫтарса «һөйләшеп ултырҙылар». Бындай ваҡытта телде төшөнмәүең аралашыуға ҙур кәртә була алмай: шөйлә генә итеп ым-ишара менән аңлаштылар. Бер аҙҙан хужалар, ҡулдарын болғай-болғай, үҙ-ара

лауылдашып алдылар ҙа ҡайҙалыр сығып киттеләр. Төн ахыры яҡынлашҡанда нимә йөрөтәлер уларҙы – уныһы бары үҙҙәренә генә билдәле ҡалды...

Теге өсәү күҙҙән юғалғас та, саман өйҙә эс бошорғос тынлыҡ урынлашты. Тынлыҡты ауыр һулаған Фазылдың ара-тирә ыңғырашып ҡуйғаны ғына боҙа ине. Улының шул рәүешле йән ғазабы кисереп ятыуын ишетмәҫ өсөнмө, Мөхәмәтша фәлсәфәүи әңгәмәгә төшөп китте:

– Бына һин, Лотфулла ҡустым, әле йәшһең, шунлыҡтан зиһенле, заманына күрә аңлы ғына кешеһең, миңә шуны әйт: беҙ, әллә ҡайҙа ятҡан Уралтау башҡорттары, ошолайтып, мең михнәт эсендә нимә өсөн ыҙа сигеп йөрөйбөҙ? Ни сәбәптән ер сите ергә килеп, бөтөнләйе менән сит-ят ил, уның кешеләре тип ҡан ҡоябыҙ? Ул ғына ла түгел, хатта, ғүмеребеҙҙе аямайбыҙ. Төшөндөрөп бирә алаһыңмы ошоларҙы?

– Раҫ әйтәһең, ағый. – Бер ни тиклем ваҡыт шым ултырған Лотфулла уфтанып ҡуйҙы, – мин дә шул уйҙамын: мәйтәм, Ҡытайҙың ниндәйҙер Манчжурияһына килеп ҡыҫылмаһа, Рәсәйҙең үҙ ере аҙмы? Әллә шунан башҡа хәстәре бөткәнме? Ул Люйшун тигәне шайтаныма кәрәк булдымы уға? Был бит күрәләтә донъя болғау һымаҡ килеп сыға ла баһаң. Болғағы бар ерҙә бола сыға...

– Урыҫ уны, үҙенсә ауҙара һалып, Порт-Артур тип атарға өлгөргән бит әле... – Ҡараңғы мөйөштән Фазылдың да тауышы ишетелеп ҡала. Күрәһең, һыҙланыуҙары баҫыла төшкән.

– Әрәсәй батшалығы уны, Ҡытайҙан һорап, егерме биш йылға ҡуртымға алған булған икән. – Теле асыла барған Лотфулла ауылдаштары белеп етмәгән урында үҙенсә аңлатып маташты. – Ана шуныһы японға оҡшап етмәгән дә инде. Тиктомалға ҡыҫылып ятҡаны кемгә оҡшаһын...

– Ә миңә ҡалһа, япундың яулап алып, Ҡытай ерҙәренә үҙе хужа булаһы килгәндер. Шулай булмағанда, ниməһенә шул ҡәҙәре күҙ йомоп ынтыла тиһең. – Улының әкренләп терелә барыуын күргән Мөхәмәтшаның күңеле күтәрелә башлап, тауышында еңеллек ауаздары ишетелеп ҡала. – Түрәләребеҙ аҙ ғына башын эшләтеп, тәүәккәлерәк булғанда, беҙ уларҙы...

– Тап шулай. Үҙенә тәтемәгән ер өсөн дәғүә белдереп, иғлан ителмәгән һуғыш асты, ҡәһәрең. – Лотфулла инде ҡыҙа бара. Уҡый ҙа, яҙа ла белмәгән томана наҙандың һүҙҙәре дөрөҫлөккә тап килә ине.

– Ғөмүмән, япун тигәндәре ғәжәп аҫтыртын зат икән, мәлғүн. – Мөхәмәтша үҙенсә һығымта яһап ҡуя. – Йә, ошонан, ҡайһы һуғышты ул иғлан итеп башлағаны бар? Гелән көтмәгәндә һәм мәкерле рәүештә. Ана был юлы ла...

– Эйе, әшәкелектең сигенә сыҡҡан, – тип Фазыл атаһын йөпләй.

– Шулай ҙа был тәңгәлдә бөтә халыҡҡа ғәйеп ташлау оло хата булыр ине. – Лотфулла әңгәмәгә дөрөҫ йүнәлеш бирергә ашыға. – Мәғлүм, ил башында торған башлыҡтар бар, ана шуларҙың аҡылы етмәгәнде, ябай кеше ни ҡыла алһын. Беҙҙең кеүек, уларҙың да халҡы бит баҫалҡы үә күндәм. Әйткәнде генә үтәп өйрәнгән...

Ул шулай һөйләнә-һөйләнә бөтөп барған сыраҡты яңыһына алмаштырыуға, тар бүлмә эсе шөйлә яҡтырып китте.

– Башҡаһын белмәйем, ә ҡурҡаҡ икәнлеге күренеп тора япундың. Ни өсөн тигәндә, үтә һаҡ ҡылана. – Сырайына белемсе ҡиәфәте сығарған Фазыл уйлағанын ҡыҫҡырып әйтте. – Хаҡ әйттегеҙ, командирҙарыбыҙ аҙ ғына зыялыраҡ булып, етеҙерәк эш иткәндәме, әллә ҡасан уҡ дөмбәҫләп ташлаған булыр инек үҙен. Былай итеп беттән таланып та ятылмаҫ ине.

– Тап шулай! Этйығышланып, әллә нимәләрен көттөләр бит. – Йоҙроҡтарын төйнәгән Лотфулла ихлас көйәләнә башланы.

– Беҙҙекеләр, ҡупырайышып, ябай халыҡ балаларын ҡанға батырырға ғына маһир.

– Ҡара, маҡтаулы янаралдарыбыҙ ысын хәрби эштә бөтөнләй һәләтһеҙ булып сыҡты. Артабан да былай барһа, әҙәм көлкөһөнә ҡалыуы ла оҙаҡ түгел. – Мөхәмәтша инде ысынлап бошона. – Ай-һай, һыным теймәй минең был һуғышҡа. Мәсхәрә менән генә барып осланмағайы, тиеүем.

– Уныһы шулай инде. Ярай ҙа үҙең иҫән ҡалһаң...

– Ҡитғанан ҡитғаға мәсхәрә йөкмәп ҡайтып барғансы, үлгәнең мең артыҡ.

– Үҙ ерем, үҙ илем тип баш һалһаң – тағы бер хәл...

– Ҡуйығыҙ, егеттәр, үлем тураһында һөйләмәгеҙ әле. Ни булһа ла, тик яҡшыға ғына юрайыҡ. – Мөхәмәтша уйламағанда башланып киткән әңгәмәгә ошо рәүешле нөктә ҡуйҙы.

Шинелдәрен арҡаларына һалған Мөхәмәтша менән Лотфулла, ятып толҡа тапмай, тышҡа сыҡтылар. Уларҙы уратып торған тауҙар бейеклегенәнме, болоттар ҡаплап алған күк ғәҙәти булмағанса тәпәш һымаҡ күренә. Әллә инде осло-осло тау түбәләренә уралып торған һәләк ҡуйы томан шул рәүешле күҙ быуамы, белмәҫһең. Ә шулай ҙа ялангас таш тулы үле ҡомлоҡ хөкөм һөргән ошо шыҡһыҙ донъя кешеләрҙе нимәһе менән ылыҡтыра икән? Башҡорт ирҙәрен тағы ла шуныһы ғәжәпкә ҡалдырҙы: төн уртаһы ауышҡан булыуға ҡарамаҫтан, тышта әле яҡты ине. Аяҡ аҫтындағын асыҡ шәйләп, абынып йығылыуҙан ҡурҡмайса, иркен йөрөргә була.

Текә ҡаяларҙы телгесләп уҙған шаулы йылға буйында, туҡтау белмәй, ниндәйҙер ҡош уһылдай. Уның йәмһеҙ тауышы былай ҙа болоҡһоған күңелдәрҙә оторо хәсрәт тойғоһо уята. Ниндәй сәбәптән шул ҡәҙәре уһылдай ул? Бәлки, ялан тултырып ятҡан мәйеттәрҙе күреп, буштан төшкән ризыҡ табылыуына ҡыуаналыр? Әллә, шул рәүешле, бер маҡсаты булмаған мәғәнәһеҙ ҡыйралыш ҡорбандарына зар йырлап, йыназа ғәмәле килтерәме?

Бәләкәй ауылдың арғы осонда һаҡсыларҙың мөңгөр-мөңгөр хәбәрләшкәне ҡолаҡҡа салына. Беҙҙекеләр, тимәк, йоҡлап ятмай. Ошо уйҙан, ауылдаштарҙың өшөгән йәндәрен иркәләп, эстәренә йылы йүгерә. Тормошта еңеүе менән еңелеүе сиратлап килә бит ул: күрһәтербеҙ әле беҙ һиңә күрмәгәнеңде, ялмауыҙ япун!

Яҡындағы һырт ашаһында ҡыштырлаған диңгеҙгә ҡушылып сыйылдашҡан аҡсарлаҡтар тауышы нисектер сәйерһендерә. Әкәмәт ҡоштар икән, төн уртаһы булыуға ҡарамаҫтан, төнәктәренә һаман ҡунмайҙар...

Ҡолаҡ һала торһаң, ҡыҙыҡ инде: тирә-йүндә ауаздарҙың ниндәйе генә ишетелеп ҡалмай. Бер һүҙ менән генә әйткәндә, был тирәлә ҡанлы һуғыш бара, тип уйламаҫһың да. Ә асылда Квантун өҫтөндә, шомло шәүлә булып, үтә хәүефле лә, тынысһыҙ ҙа, шул уҡ ваҡытта иртәнгегә нимә вәғәҙә иткәне лә билдәһеҙ ярым ҡараңғы төн хөкөм һөрһә, хаҡлы рәүештә үҙ сиратын даулаған көн яҡынлаша. Уңдырырмы, әллә туңдырырмы ул көндөң етеп килгәне?..

***

Ҡабат инеп ятыуҙарына оҙаҡ та үтмәне, бер мәлдә бар ғаләм сайҡалып киткәндәй тойолдо. Аңғанса булмай, ҡайҙалыр ер аҫтында тоноҡ гөрһөлдәү ишетелеүгә, иҫке өй ыңғырашып ҡуйҙы ла, уның тәпәш түшәменән тупраҡ ҡойолоп китте. Бындайын һис көтмәгән башҡорттар, йоҡомһорап ятҡан ерҙәренән һиҫкәнеп, күҙҙәрен асты. Быныһы тағы нимә булды? Күк күкрәй түгелме? Әллә... Әллә караптар йәнә ут астымы?

Юҡ, был күк күкрәүе лә, үлем көҫәгән туптарҙың ярылыуы ла түгел ине. Был,

барлыҡ гонаһлы бәндәләрен йотоп бөтөргә тырышҡан һымаҡ, ер үҙе тетрәнә, буғай. Тетрәнеү шулай ҙа оҙаҡҡа барманы. Ярты ҡитғаны бер итеп һелкендереп алды ла, нисек башланған шулай, ҡапыл ғына тынып ҡалды. Ауылдаштар йүгерешеп тышҡа сығырға ла өлгөрмәне.

Ни иткән төн булды һуң әле бөгөн: серемгә китеп барғандарында ғына йөрәктәрҙе ҡабындырып сыйылдыҡ һыҙғырыу тауышы ишетелде һәм артынса уҡ ҡайҙалыр алыҫ түгел снаряд ярылды. Мөхәмәтша менән Лотфулла башта, был юлы ни булғанын аңларға тырышып, урындарынан ҡуҙғалмайса яттылар. Ә инде рух ҡаҡшатҡыс оҙайлы сыйылдау йәнә ҡабатланғас, Мөхәмәтша түҙмәне, сығып урарға ҡарар итте. Туп быныһында яҡынғараҡ төшөп шартланы.

– Япундар! – Мөхәмәтша шунда уҡ атылып кире инде. – Етеп киләләр!

– Тиҙерәк командир янына һыпырта һалыр кәрәк! – Лотфулланың күҙҙәре түңәрәкләнде.

– Ә мин?! – Ҡараңғы мөйөштән Фазылдың ҡурҡыу ҡатыш ялбарған тауышы ишетелде. – Мин бит аяғыма баҫа алмайым, атай...

– Һине, улым, хәҙер килеп алырбыҙ. Ошонда, аулаҡта ғына ятып торһаң... – тине ҡаушай төшкән атай кеше. – Беҙ ни... оҙаҡламабыҙ ул, бошонма. Бына, йөрөткөс[1] кенә алып киләбеҙ ҙә...

Һауһаҡ икәү шунда уҡ сығып йүгерҙеләр.

Ауылдың бер осонда көслө атыш бара ине. Уңлы-һуллы йәҙрәләр ҙә төшөп ярылғылай. Ҡолаҡ төптәренән ышылдашып әллә ярсыҡтар, әллә аҙғын пулялар осоп үтә. Баш осонан, быҒаса ишеткәндәре булмаған оло тауыш ҡуптарып, ҡот осҡос деһерләү уҙҙы. Ҡайҙалыр, ышыҡ урында, өҙөк-өҙөк тыҡылдап, митральеза[2] тауыш бирә. Атыу-шартлау тауыштарына ярҙам һорап аҡырышҡан яралыларҙың аянысл ауаздары ҡушыла. Шул арала бер нисә өйгә ут ҡапты ла яҡынтирәне көндөҙгө кеүек яҡтыртып ебәрҙе. Ауыл урамы: «Банза-ай! Банза-ай!!!» – тип ажарланып оран ташлаған япон һалдаттары менән тулған ине. Әле генә тып-тыныс ауылда шул рәүешле, уйламағанда-нитмәгәндә, мәхшәрҙең үҙе ҡуптымы ни!

– Самурайҙар баҫып килә-ә! – Күҙҙәре аҡайып, ҡобараһы осҡан командир яй ҡуҙғалған һалдаттарҙың артына тибә-тибә екеренде. – Кисекмәҫтән сигенергә-ә!

– Ишетәһегеҙме?! Кемгә ғүмер ҡәҙерле – позицияларҙы ҡалдырырға! Тиҙ булығыҙ, инәгеҙҙе...

Мөхәмәтшаның тәне эҫеле-һыуыҡлы булып китте: нисек инде сигенергә, ә уның улы – Фазлетдины?! Ҡуҙғала ла алмаған көйө ул нисек итер? Ҡайҙа һуң быларҙың санитарҙары?! Йөрөткөс ҡулайламалары ҡайҙа?

Ләкин оҙон-оҙаҡ уйлап торор мәле түгел ине, шунлыҡтан Лотфулла менән икәүләп теге йортҡа кире саптылар. Юлың бер уңмаһа уңмай бит ул, ҡәһәрең, тап ошо ваҡыт, уларҙың юлын быуып, алыҫ түгел йүгерешеп килгән дошман һалдаттары күренде. Яралыны йөкмәгән килеш ҡасып ҡотолор әмәл юҡлығына инде асыҡ төшөнгәс, уны өй аҫтындағы тәрән баҙға төшөрөп йәшерә һалдылар. Улының шым ғына илағанын тойған атай кешенең ирекһеҙҙән күҙҙәре йәшләнде. Шулай ҙа ул, үҙен ҡулда тоторға тырышып:

– Балам, һин ошонда тауыш-тын сығармай ғына ятып тор. Беҙ, Алла ярҙамы менән, тиҙ арала урап килергә тырышырбыҙ. Эйе, тиҙҙән килербеҙ, оҙаҡламаҫбыҙ, – тип Фазылды тынысландырып маташты. – Әллә мин янында ҡалайым да ҡуйыйыммы?..

---

[1] *Йөрөткөс — носилка.*

[2] *Митральеза — тәүге пулемёттарҙың бер төрө.*

– Ҡуй, атай, минең өсөн борсолмағыҙ. Ятҡан урыным тыныс, ышаныслы күренә. Ә һеҙгә ротала булыуығыҙ хәйерлерәк. Юғиһә, алағайымға һатлыҡ йән дезертир иҫәбенә сығарып ҡуйыуҙары бар. – Башта хистәргә бирелеүҙән мәлйеп киткән Фазыл нисектер ҡыйыулана төштө. – Һәр баҙҙы тикшереп йөрөмәҫтәр әле. Бер минең арҡала өсөбөҙҙөң дә һәләк булыуыбыҙ ихтимал. Бар, китегеҙ. Хәйерлегә булһын...

– Шунда ла, ҡустым, абай ҡылан... – Сығып барышлай баҙ ауыҙында туҡтала биргән Лотфулла, артына боролоп, ҡараңғылыҡҡа ҡараш ташланы. – Япуны һымаҡ, ҡытайына ла ышаныс ана тора... Һаҡланғанды Хоҙай һаҡлар, ти...

Мөхәмәтша менән Лотфулла, өҫтәренә менеп килгән япон һалдаттарына тоҫҡап ата-ата, көскә ҡасып өлгөрҙө. Дөрөҫөрәге, дошман ҡулына эләгеүҙән уларҙы Хоҙай үҙе аралап ҡалды. Рәсәйлеләр, көн томраһында ҡойроҡ сәнсеп сәскәкләгән быҙауҙар ише, уйнаҡлашып табан ялтыратты. Ҡанатланып киткән самурай тоҡомдары, ауылда туҡталып та тормаҫтан, аҡыра-баҡыра уларҙың артынан ҡыуа төштө һәм, бер ниндәй ҡаршылыҡһыҙ, үткән көнгө позицияларына ҡәҙәр баҫтыра килде. «Банзай» ҡысҡырышып, аҡылдарын юйыр сиккә еткән оран һалыусылар беҙҙең яҡтан эре калибрлы туптар ҡаршы ут асҡас ҡына, асылдарына ҡайтып, туҡтала төштө лә теләр-теләмәҫ кенә кире сигергә мәжбүр булды.

«Көт, оҙаҡламай килеп етербеҙ» тиһәләр ҙә, ауылды ҡалдырып ҡасыуҙарына өс тәүлек ваҡыт үтте. Ошо өс тәүлек Мөхәмәтшаға өс йылдай тойолдо. Аҙым һайын балаһы иҫенә төшөүҙән йөрәге һыҡрап, уның өсөн бошондо. Йоҡоһо-йоҡо булмаған, тамағына аш бармаған атай кешенең өс көн эсендә ярты сәсе ағарҙы ла ҡуйҙы. Башҡа саҡта һөжүмгә күтәрелеүҙән ныҡ ҡына шөрләр ине, ә был юлы уны түҙемһеҙлек менән көттө. Көттө, әммә көтөп ала алманы: юҡ та юҡ ул атака тигәндәре. Ниməһенә шул ҡәҙәре һуҙмаҡ кәрәктер? Мөхәмәтшаның улын йолоп алырға тип ашҡыныуҙары шулай уҡ буш хыял ғына булып ҡалырмы икән ни?...

***

Борсолоуҙары йонсоу йөҙҙәренә бәреп сыҡҡан һалдаттар Изинджоу исемле ҡалҡыулыҡ һыртынан диңгеҙ өҫтөндәге хәлдәрҙе күҙәтеп ята. Рәсәй караптары, төлкөнән ҡасҡан ҡуян кеүек, бондар ышығына инеп йәшеренгәнлектән, иге-сиге күренмәгән тыныслыҡһыҙ бушлыҡ өҫтөндә япон эскадраһы хакимлыҡ итә. Эйе, япондар хәҙер үҙҙәрен ысын хужаларса тота. Тыныс ҡына ятҡан бухтанан берәй сит караптың, хатта бәләкәй генә катерҙың килеп күренеүе була, шунда уҡ ауыр туптарҙан ут асалар, йә иһә торпеда ебәрә һалып, уны батыра ла ҡуялар. Шул рәүешле, рәсәйлеләргә күҙ асырлыҡ та әмәл юҡ.

Ваҡ-төйәк катерҙарың нимә – ҡалын броня менән көпләнеп, флотта тиңе булмаған эсминец, Рәсәй дәүләтенең ғорурлығы ғына түгел, донъяла иң көслөләрҙән һаналған һыу өҫтө крепосы «Варяг»тың да аҙағы әлегесә барып тамамланған, тиҙәр. Шулай ҙа «Варяг» еңел генә бирелмәгән һәм диңгеҙ юлбаҫарҙары өсөн бик ҡыйбатҡа төшкән. Үҙе ҡыйратылып батҡансыға ҡәҙәр дошмандың бер нисә крейсерын йә етди зарарларға өлгөргән, йә башы-аяғы менән упҡын төбөнә ебәргән. Бына быныһы, исмаһам, ҡаһарманлыҡҡа тиң эш! Барыһы ла уның һымаҡ алышһа икән...

Көнсөл түрәләр ошоға нисек ҡарайҙыр, ә героик эсминецтың ҡурҡыу белмәҫ командиры контр-адмирал Руднев исеме хәҙер һалдат-матростарҙың теленән төшмәй.

Флотта ла, армияла ла уның хаҡында күп, оло ихтирам үә ғорурлыҡ менән гелән яҡшыны ғына һөйләйҙәр. Кисә генә бары үҙ матростарына билдәле «Варяг», әле килеп, легендаға әүерелә бара. Шулай булмағанда, уға арналған йыр сығарып

торорҙар инеме?! Ә йырҙары йыр ғына ла түгел, һәләк шәп икән. Дөрөç, беҙҙең ауылдаштарға әле уны үҙ ҡолаҡтары менән ишетергә насип иткәне юҡ. Хәйер, ниндәйҙер йыр ҡайғыһымы: араңдан берәүең хас дошман араһында ҡалып билдәһеҙлектә ятҡанда...

Киске эңер ҡыҙыллығы төшөп, төн яҡынлашҡан мәлдә, офоҡ ситен ҡара һөрөмгә буяған төтөн бағаналары йәнә ҡалҡа башланы. Был юлы улар теге көндәгегә ҡарағанда күпкә, хатта бик күпкә ишлерәк ине. Оҙаҡ көттөрмәй, тулҡынлы дарья йөҙөнөң һауа менән барып ҡауышҡан урынында ғәйәт дәү караптарҙың шомло ҡара шәүләләре хасил булды. Бөтә диңгеҙҙе басҡан һымаҡ килгән шәүләләр, әкрен-әкрен генә шыуышып, Порт-Артур нығытмаларына яҡынлаша.

Ошо мәл тирә-йүнде дәһшәтле дауыл алдынан ғына була торған эс бошорғос тынлыҡ солғап алды. Ҡарап ятыусыларҙың барыһы ла, эске тойомлау менән, үлем ҡурҡынысы яҡынлаша килеүен яҡшы аңлай, әммә уны туҡтатып, кире ҡағыр өсөн бер ни ҡыла алмай. Һуғышта хәлдең ошонан да аянıслыраҡы буламы икән?! Әжәл, ана, күҙҙәреңә туп-тура ҡарап килә ята, ә һин, быуар йылан ҡаршыһындағы арбалған өрәй ҡомаҡ ише, һеңгәҙәгәнһең дә ҡатып ҡалғанһың. «Нимә, рәсәйлеләр әллә, тәҡдиргә буйһоноп, еңелеү менән килеште ләме? Иртәрәк түгелме икән? Шайтан алғыры, шул ҡәҙәре көс барында, бер ниндәй ҡаршылыҡ күрһәтә алмайынса бағынып ҡалсы әле. Ояты ни тора, ояты!..» Баянан бирле өнһөҙ-тынһыҙ ғына дарья киңлегенә төбәлгән килеш ятҡан, йәне үртәлеүҙән тороп йүгерергә әҙер Мөхәмәтшаны ошондайыраҡ уйҙар борсоһа, уның йәнәшһендә тынып ҡалған Лотфулланың да хәл-торошо шул самараҡ ине.

Ҡайһы аралалыр, барыһын шаҡ ҡатырып, ҡаланың иçке өлөшөнән асыҡ һыуға табан оло баржа ҡуҙғалып китте. Уның борты яңы ғына килгән хәрбиҙәр менән шығырым тулы икәнлеген күрә ятҡандарҙың түбә сәстәре үрә торҙо. Күптәр, үҙ күҙҙәренә үҙҙәре ышанмаған һымаҡ, аптырашып бер-береһенә ҡараштылар: үәт, әй, хәлдәр! Ошо ҡәҙәре лә хәүефле мәлдә бер ниндәй ҡоралы түгел, хатта янында һағы ла булмаған йөк баржаһын яланғас диңгеҙгә сығарып ебәреү уйы кемдең башына килде икән, белергә ине?! Намыçы етеп, ҡайһы тинтәге биргән әлеге енәйәтсел фарманды? Барыһы бер юлы ысын йөрәктән «аһ» итте һәм траншеялар буйлап иңрәүгә тартым ауаздар үтте: ни булыр инде хәҙер? Бына ҡайҙа ул быуар йылан алдына күрәләтә ырғытылған меçкен ҡомаҡтарҙың иң меçкене!..

Аңҡы-тиңке фараздарға бирелеп оҙаҡ көтөргә тура килмәне. Тәүҙә баржа тирәләп ҡапыл ғына ғәйәт бейек һыу бағаналары ҡалҡып сыҡты ла, артынса гөпөлдәшеп ҡеүәтле снаряд ярылған тауыштар ишетелде: япон караптары ут асты.

– Күрҙегеҙме, снарядтарҙың береһе аша китте, икенсеһе барып етмәне, өсөнсөһө маҡсатына мотлаҡ етәсәк. Артиллеристар телендә был алым – «вилка» тип атала. Харап булды бахырҙар... – Һалдаттар араһынан ниндәйҙер белемсеһе ошо рәүешле һөйләнеп алды. Белемсенең һүҙҙәре раç сыҡты: әллә ҡайҙан сойорғотолған туптарҙың өсөнсөһө баржаның тап ватерлинияһына барып тейеүгә, палубала кинәт паника ҡупты. Әллә ярсыҡ элгеүҙән, әллә инде ҡурҡыштарынан аҡылдарын юйып, боҙло һыуға ташланыусылар күренеп ҡалды. Бер мәлде дошмандың ҙур булмаған һаҡсы катеры яғынан һыу ярып килгән аҡ һыҙат хасил булды. Теге белемсе йәнә телгә килде:

– Аһ, ҡәбәхәттәр! Торпеда ебәрҙеләр! Ҡарағыҙ, ана, торпеда атакаһы!

Йәйәнән ысҡынған уҡ ише атылып, меңәрләгән ҡорбаны артынан туп-тура баржаға осҡан үлемесле торпеданы тын алырға ла онотоп күҙәттеләр. Барыһының күҙ алдында, әжәле яҡынлашҡан йәндәрҙе һығып алмаҡ булып, Ғазраил үҙе ашыға! Быңдайына, әлбиттә, тыныс ҡына ҡарап тороуы мөмкин түгел, әммә ләкин ҡарамайса ҡайҙа бараһың...

Ғәйрәтле ҡорал оло баржаның ҡап уртаһына килтереп бәрҙе. Шунда уҡ, урғылып, мөһабәт ут көлтәһе күренеп китте, ҡайнап торған дөм-ҡара төтөн болото күтәрелде. Алты меңдән ашыу ғажиз йәнде тейәгән баржа урталай бүленеп, селпәрәмә килде лә ҡуйҙы. Әйтерһең, бер шырпы ҡабы. Траншеяларҙа ятҡандар ошо урында мәхшәрҙең нисегерәк булғанлығын үҙ күҙҙәре менән күрҙе. Бая ғына тулҡынлана биреп, тыныс ятҡан йәшкелт диңгеҙ кинәт ҡайнап китте һәм... ҡыҙғылт төҫкә керҙе: әҙәм ҡаны даръя булып аҡты. Өҙгөсләнеп-теткеләнгән йәнһеҙ кәүҙәләр, эркелешеп, һыу өҫтөндә сайҡалһа, тереләр йәшәү өсөн көрәшеп сәбәләнде. Ә аяу белмәҫ дошман йөҙөп ҡотолорға маташыусылар өҫтөнә пушкаларҙан да, митральезаларҙан да үлем яуҙырыуын белде. Быныһы инде кәрәкмәгән мәғәнәһеҙ ҡырылыш ине. Ни өсөн тигәндә, бер нисә минутта ҡанынды ойоторға һәләтле һалҡын һыуҙа кеше былай ҙа оҙаҡҡа түҙә алмай...

– Үәт ҡанһыҙҙар, ә! Эстәрендә йәндәре юҡтыр быларҙың! – тип ярһыны ҡаршыһындағы ҡот осҡос күренешкә тыныс күңел менән ҡарап тора алмаған Мөхәмәтша. – Яралы ҡорбаны менән йыртҡыстың-йыртҡысы шулай ҡыланмаҫ. Вәхшилектең дә сиге булырға тейештер бит...

– Ояттарын да, выждандарын да бөтөнләй юғалтҡан иманһыҙҙар! Валлаһи! – Эске әрнеүгә түҙеп торор әмәле ҡалмаған Лотфулла шығырҙатып тештәрен ҡыҫты.

Бер ни тиклем ваҡыт үтеүгә, ниһайәт, йәшеренеп торған Рәсәй караптары, алыҫтан атыусы яр буйы артиллерияһы менән берлектә, япон эскадраһы позицияларына ярайһы ғына көслө ут яуҙырырға тотондо. Крейсерҙарҙың икәүһен шунда уҡ ҡара төтөн солғап алһа, өсөнсөһөнөң блок-мачтаһы ауып төштө. Уларынан һуң йәнә бер нисә судноның палубаһында ла янғын башланды. Урыҫтарҙың «һөмһөҙ» ҡыланышына асыуы ҡабарған япондар утты шунда уҡ «теш ыржайтыусылар»ға күсерҙе. Күҙ асҡыһыҙ фәрәсәт эсендә ҡалып берәм-һәрәм сафтан сыҡҡан рус катерҙары, ҡыйралып, бата башланы. Улары ғынамы, башҡа ҙур кораблдәр ҙә байтаҡ зыян күрҙе. Шулай, ҡотҡарғыс бондар торпеданан ышыҡлаһа ла, һауа ярып килгән ун ике дюймлыҡ емергес снарядтарҙан һаҡлай алмай...

Ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә дөрләп күмергә әйләнгән теге баржаның һуңғы ҡалдыҡ-боҫтоғо, быҫҡый-төтәй, диңгеҙ төбөнә китте. Улары менән бер ҡатарҙан меңәрләгән ғүмер өҙөлдө, бихисап ир-егет ошо урында балыҡ еменә әйләнеп, мәңгелек төйәген тапты. Туп ярсығы йә йәҙрә тейеүҙән шунда уҡ йән биргәндәргә күпкә, бик күпкә еңелерәккә тура килгәндер. Ни өсөн тигәндә, тере тәнде шунда уҡ ҡурыштырып алыр боҙло һыуға ҡолап төшкән тереләр йәшәү өсөн даулашып ҡысҡырышты. Нимәгәлер өмөт иткән булып, ҡулдарын болғаны, йөҙөргә маташып сәбәләнде. Ләкин аяҡ-ҡулдары тартышып, тындары ҡурылыуҙан улары ла тиҙ арала һыу төбөнә китеп бөттө. Шулай итеп, оло баржа тулы кешене күҙ алдында упҡын йотто ла ҡуйҙы. Ҡалҡыу өҫтөнән хайран ҡалып күҙәтә ятҡандар, барыһы бер булып, тауыш-тынһыҙ ғына баштарын эйҙе. Урыҫтар араһында суҡынып ҡуйыусылар күренеп ҡалһа, мосолман ҡәүеме йыназа доғаһын ҡылып, бит һыпырҙы. Улар араһында Мөхәмәтша менән Лотфулла ла бар ине.

– Йә Хоҙа! Быңдайын үҙеңә түгел, хас дошманыңа күрһәтмәһен! – Лотфулланың күкрәген инҙрәү ҡатыш ялбарыу ярып сыҡты. – Ошоноң ише ғазаплы вафатыңдан һаҡлаһаң ине!

Ә Мөхәмәтша бер генә һүҙ өндәште: «Хаиндар!» Башҡа һүҙен ул таба алманы: күргәндәренән уның иҫ-аҡылы киткән ине.

Көтөлмәгән еңел уңыштан баштары әйләнеп, ҡан көҫәгән самурайҙар, хәҙер

инде яҙаһыҙ ҡаласаҡтарын асыҡ аңлауҙан, тыныс ҡалаға тура төбәп атырға тотондо. Емергес снарядтар тейеүҙән, ауыр гөрһөлдәшеп, өйҙәр ишелде, илкеһалҡы ғына төҙөлгән хәрби нығытмалар ҙа, услап һибелгән таяҡсалар ише, сәсрәп күккә осто. Шул емерек харабалар аҫтында ҡалып, хәрбиҙәргә ҡарағанда күберәген тыныс халыҡ ҡырылды. Тура тоҫҡап ҡалаға ут асырҙар, тип ошоғаса берәйһенең башына инеп сыҡһасы! Нәҡ шул сәбәпле күп кеше, йәнәһе, һуғыштан ҡасып, өйҙәрендә ултыра ине.

Шул рәүешле ҡытай менән урыҫтар ғына түгел, улар менән бергә бүтән ил, бүтән ҡитға кешеләре лә ит турағысҡа эләкте.

Йән өшөтөп, рухтарҙы һындырыр тетрәндергес мәхшәр оҙон көн буйына дауам итте. Һуғыш-ҡырылыш ҡомарына бирелгән дошман баш ҡалҡытып ҡарарға ла форсат бирмәй. Аҡтарылып ташланған ер өҫтө тәртипһеҙ туҙғып ятҡан мәйеттәр менән ҡапланды. Ул көндө снаряды ла, пуляһы ла ямғыр булып яуҙы. Мәғәнәһеҙ ҡыйралышта күпме ғүмер өҙөлгәне бер Тәңрегә генә билдәле. Иң аяныслыһы шул: булып ятҡан ошо ҡот осҡос ғәмәлде туҡтатыр өсөн рус әрмеһе бер нәмә лә эшләмәне тиерлек...

Шул хәтлем халыҡтың күҙ алдында себен урынына һеперелеп ҡырылыуын ифрат ауыр кисергән Мөхәмәтша менән Лотфулланың күңелдәре өшөп, йөрәктәре ярыла яҙҙы. «Әлдә хисле Фазлетдиным күрмәй ҡалды ошоно, юғиһә, ҡото осоп, ауырыуға һабышыр ине, – тип уйлап ҡуйҙы атай кеше бер мәлде. – Бигерәк кеше йәнле бит ул улым...»

Ғәйәт ҙур юғалтыуҙарға, һынған рухына ла ҡарап тормаҫтан, таңға ярты-йорто ғына тороп ҡалған пехотаны атакаға күтәрергә йөрьәт иттеләр. Бына ул Мөхәмәтша көтөп алған сәғәт! Ниһайәт, һуҡты! Былай булғас, тиҙҙән, бик тиҙҙән осрашып күрешерҙәр әле Фазлетдины менән. Башҡа саҡта аҙашҡан йәҙрә килеп тейеүҙән ҡото осоп ҡурҡҡан Мөхәмәтша әле уйлап та бирмәне. Нимәһенә ҡурҡып торорға? Был юлы ул ғәзиз балаһын ҡотҡарыр өсөн күтәрелде. Ә бала хаҡына бер нәмәнән дә ҡурҡмайһың. Хатта ки Әжәлдең үҙенән дә...

Күҙҙәренә аҡ-ҡара күренмәгән Мөхәмәтша менән Лотфулла дошман өҫтөнә айбарланып ташландылар. Бөгөн улар өсөн үҙ-үҙеңде аяп тороу тойғоһо бөтөнләй ят ине, шуға күрә һәр урында алдағылар рәтендә булдылар. Тилмереп көткән улын тиҙерәк күреү хаҡына утҡа ла ташланырға, һыуына ла инергә әҙер Мөхәмәтша айырата ажарлыҡ күрһәтте. Юлында тап булған яуыздарҙы йә атып йыҡты, йә штык осона алды, уларынан ҡалһа, мылтыҡ түтәһе менән тәгәрәтә һуға-һуға, ауылға беренселәрҙән булып бәреп инде. Инеү менән, ҡыҙыл тәреле биштәр артмаҡлаған йәп-йәш кенә санитарҙы эйәртеп, Фазылы янына ашыҡты. Ағаһынан күрмәксе йән аямай яҫҡышҡан Лотфулла уларҙан тотам да ҡалманы.

Кәрәкле урынға етеп баралар ине инде. Ауылдан бер яҡ ситтәрәк, әрәмәлек менән ҡапланған йырын эсендә, ҡолаҡтарына кемдәрҙеңдер яр һалып ҡысҡырышҡан тауыштары салынды. Лауылдашҡандарҙың телдәре урыҫтыҡы түгел, шунлыҡтан сит һөйләш ишетелгән урынға үтә һаҡ яҡынлаштылар. Тәпәш, сырмалсыҡ ҡыуаҡтарҙы ҡайырып асыуға, уларҙың алдында түбәндәге күренеш асылды: алыҫ түгел ярайһы ғына текә ҡая таш аҫтынан урғылып сылтыр шишмә баш ала. Сафтан-саф шул инеш янында үҫкән ағас төбөндә бер ҡытай кешеһе сәбәләнә. Уның ҡулдарын артҡа шаҡарғандар ҙа теге ағасҡа ҡуша бәйләп ҡуйғандар. Бирерәк, уға мылтыҡтарын тоҫҡап, өс япон һалдаты баҫҡан: күрәһең, атып үлтерергә самалайҙар. Японлар килеүселәргә арттары менән тора, шунлыҡтан әлегә уларҙы шәйләмәйҙәр. Ә ғүмеренең ахыр минуттары еткәнлеген асыҡ аңлаған ҡытай кешеһе, үҙ телендә лыбырҙай-лыбырҙай, тегеләргә ләғнәт яуҙыра. Хатта ынтылып биттәренә төкөрмәксе.

Беҙҙең һалдаттарға оҙаҡ уйлап торор ваҡыт юҡ ине. Мөхәмәтша күнегелгән һунарсы хәрәкәте менән винтовкаһын күтәрә һалды ла тәтегә баҫты. Дошмандарҙың береһе, киҫелгән ағас ише, шунда уҡ ергә ауҙы. Икенсеһен Лотфулла атып йыҡты. Барлыҡ нәфрәтен рус һалдаттарына сәскән өсөнсө самурай: «Банзай! Банза-ай!» – тип аҡыра-аҡыра, һағыраҡ ҡыланыуҙың ни икәнлеген дә онотоп, уларға ҡаршы ташланды. Әйтерһең дә, бер ҡоторған эт! Шул ыңғайға хатта атып ебәрергә лә өлгөрҙө. Мөхәмәтшаны Хоҙай араланы. Ҡолағы төбөнән генә пуля һыҙғырып үткән Мөхәмәтша икенсе атыуҙа тегенең аяғына тейҙерҙе. Еүеш ҡом өҫтөнә тәгәрәгән яуыздың ҡулындағы мылтығы әллә ҡайҙа осто.

Ҡоралһыҙ ҡалған самурай затын ҡулға тере килеш төшөрөү маҡсатында, яняҡлап ҡыҫымға алдылар. Алдың, көт! Ошо саҡ көтөлмәгән хәлдәрҙең иң көтөлмәгәне булды. Һөйәге зарарланыуҙан бауһыҙ һәленеп төшкән аяғын терәй ҙә алмаған япон һалдаты, йылан сослоғо менән борғаланып, шишмә ситендәге оҙон үлән араһына шыуышты. Ләкин күп бара алманы, үҙенең аяныслы хәлен аңлап, шунда ятҡан ташҡа арҡаһын терәне лә эҙәрләүселәргә ҡапыл йөҙө менән боролоп ултырҙы. Ҡан һауған ҡыҫыҡ күҙәре хәтәр ялтырап киткән яралының йөҙөндә мыҫҡыллы йылмайыу хасил булды. Ҡайһы аралалыр балтырына уралған сылғау эсенән хәнйәр килтереп сығарҙы ла, уны баш осона күтәргән көйө, ҡатып ҡалды. Мөхәмәтша: «Ҡурҡышынан был, ысынлап та, бер көйлөгә әйләнде лә ҡуйҙы шикелле. Шулай булмағанда ҡулдарына мылтыҡ тотҡан өс яугирға ҡаршы бысаҡ менән ҡаршы тороп маташыр инеме?» – тип уйларға ла өлгөрмәне, тегеһе әлеге шул «банзай»ын һөрәнләп ебәрҙе һәм... үҙ бысағын үҙенең эсенә ҡаҙаны. Сытыйманы ла! Ул ғына ла түгел, ябай бер эш башҡарған һымаҡ, бысаҡ һабын тегеләй-былай борғослап ҡуйҙы. Үҙенең мыҫҡыллы йылмайған йөҙөндә ҡәнәғәтлек билдәләре күренеп китте. Ҡыуа килеүселәр иҫтәрен йыйғансы, күҙҙәре самаһыҙ аҡайып ҡырын ауған япондың ауыҙ ситенән ҡара ҡан урғылды. Ярылған ҡорһағынан эсәктәре ҡойола башланы. Ғәжәп, ошо ҡот осҡос үлемдән һуң да уның йәнһеҙ сырайында йылмайыу ғәләмәте күрергә була ине...

– Эх, өлгөрмәнек. Үҙенә үҙе харакири яһаны, – тип боша бирҙе санитар.

– Нимә, нимә? Ни тигән харакири ул? – Лотфулла аңламаны.

– Үҙен самурайҙың ысыны һәм аҫылы һанаған япон һалдаты тере килеш әсир төшөргә тейешле түгел. Хаҡы юҡ. Шуға күрә, ҡаршы яҡ ҡулына эләкмәҫкә була, ул үҙен-үҙе үлтерә. Был улар өсөн хатта оло мәртәбә һанала. Бына шулай. – Санитар егет, ошо рәүешле, яп-ябай ғына итеп төшөндөрҙө лә бирҙе.

Оҙайлы булмаған, әммә ғәжәп ауыр тынлыҡ урынлашты. Тынлыҡты ҡурҡышынан ҡото алынған ҡытай кешеһе боҙҙо. Ул, ҡулдарын болғай-болғай ым-ишара яһап, үҙ телендә нимәлер аңлатырға маташа. Шул арала үҙе йә Мөхәмәтша менән Лотфулланы, йә санитарҙы ҡосаҡлап алырға өлгөрә, үҙе илау ҡатыш көлә лә көлә. Ахыры, ниндәйҙер мөғжизә менән генә тере ҡалғанлығына һаман ышанып етмәй. Ләкин беҙҙең һалдаттарға аҡылынан яҙыр хәлдәге әҙәмгә ҡарап, сөсөләнеп торор саҡ түгел, теләктәре лә, форсаттары ла юҡ. Уларға ашығырға кәрәк. Уларҙың маҡсаты – ауыл осондағы иҫке өйгә тиҙерәк барып етеү.

Алыҫлаша барыусыларҙың артынан эйәрә биргән ҡытай ире, үҙенә күрһәтеп:

– Чанлунь, лао[3]! Чанлунь! – тип ҡысҡырып ҡалды.

– Исеме шулай, ахыры, шайтандың, – йүгереп барышлай артына боролоған Лотфулла, үҙе лә аңғармаҫтан, ҡулын болғай ҡуйҙы.

Кәрәкле урынға тиҙ еттеләр. Ләкин, барыһын аптыратып, өйҙә лә, уның

[3]Лао — ҡартлас (ҡыт.)

баҙында ла бер кем булмай сыҡты. Тауыш-тын да ишетелмәй. Фазыл, өйҙөң хужалары менән бергә, ҡайҙалыр ғәйеп булған. Күпме генә тырышып ҡарамаһындар, уларҙың эҙенә төшкәндәй шипкерт таба алманылар. Ошо урында ысынлап ҡурҡыуға ҡалған Мөхәмәтшаның йөрәге жыу итте.

– Бәлкем, үҙебеҙҙекеләргә тап булғандыр, ә? – Лотфулла, ағаһының ҡара янған йөҙөн күреп, уны тынысландырмаҡсы итте. – Беҙ бында йөрөгәндә ул лазареттарҙың берәйһендә яталыр әле...

– Мин дә шулай уйлайым: беҙҙең һалдаттар табып алғандыр, – Мөхәмәтша инде һүнә барған өмөт утын ҡабат ҡабыҙып булаша һымаҡ.

– Әллә... Табылған хәлдә берәй билдә-фәлән ҡалдырырҙар ине. Беҙ санитарҙар араһында шундай яҙылмаған килешеү тип әйтәйемме, ҡағиҙә тиемме, бар. Артыңда әйтеп киткәндәй кеше юғында ниндәй ҙә булһа билдә йә ишара яһалырға тейеш. – Тәжрибәһеҙ шәфҡәт туғаны Мөхәмәтшаның әле генә морон төртә башлаған өмөтөн бер һүҙ менән селпәрәмә килтерҙе лә ҡуйҙы. – Бында ниндәйҙер ғиллә бар, братцы. Ай, күңелем һиҙә...

Ошо мәл, тәртипһеҙлек менән ҡыйралыш хөкөм һөргән тар урам ситләтеп урынлашҡан өскөл ҡыйыҡлы зауыҡһыҙ-тәпәш өйҙәр араһынан әләгә-йығыла килгән урыҫ һалдаттарының бер төркөмө күренде. Үҙҙәренең алдынан улар, этәтөртә, өс ҡытай кешеһен алып килә ине. Ҡулдары ҡайырылып бәйләнгән ҡытайҙар, алға бармаҫҡа була, аяҡ терәп ҡарыша.

Үҙҙәре бер төн үткәргән өй хужаларын шундуҡ танып алған Мөхәмәтша, хәбәрҙең иң ҡурҡыныслыһы яҡынлашыуын һиҙгән һымаҡ, ҡойолдо ла төштө: Фазылын тере килеш башҡаса күрә алмаҫмы икән ни шулай уҡ?! Бының булыуы мөмкин түгел! Мин бындайына ышанмайым! Минең улым тере һәм ҡайҙалыр йәшәп ята!

Ошо кисереүштәрҙән сикһеҙлеккә бирелә башлап, килеүселәргә ҡаршы атлаған атай кеше ҡытай ҡартының яғаһынан бөрөп алды:

– Ҡайҙа минең балам?! Баҙығыҙҙа ҡалған һалдатты ҡайҙа иттегеҙ? – тип үкерә-үкерә елтерәтергә тотонды. – Ниңә өндәшмәйһең, ҡарт ҡоҙғон?

Һирәк һаҡалы елгә елберҙәп торған таҡыр башлы ҡарттың нурһыҙ ҡыҫыҡ күҙҙәре ҙурайып китте. Әлеге ҡараштан кинәт асылына ҡайтҡан Мөхәмәтша бөтәһен дә аңланы ла ҡуйҙы: тимәк, ул һуңлаған... Үҙе шулай уйлаһа ла, үҙенең һаман ышанғыһы килмәй.

– Әйт, ҡайҙа Фазлетдиным? – Мөхәмәтша өнө-тыны сыҡмаған ҡартты бер ситкә сөрсөтә төрттө лә йәшенең түшенән алды. – Алып килегеҙ минең улымды! Йәнегеҙҙе алам, ҡәбәхәттәр! Үлтерә-әм!

– Тыныслан, һалдат. – Ҡаршыһында торған прапорщик Мөхәмәтшаның ҡатынҡы беләгенән тотоп, иңбашына ҡағылды. – Тыныслан һәм ныҡ бул, атай... Һинең... Һеҙҙең улығыҙ башҡаса юҡ...

Мөхәмәтша ошо йөрәк ярырлыҡ һүҙҙәрҙе көткән булһа ла, саҡ ауып китмәне. Ҡуш ҡуллап башын ҡыҫҡан көйө ергә теҙләнә төштө. Быуындары йомшап киткән Лотфулла сайҡалып ҡуйһа, башҡалар ҡараштарын ситкә борорға ашыҡты.

Шаңҡып байтаҡ ваҡыт ултырған Мөхәмәтша, ниһайәт, асылына ҡайта башланы шикелле: уратып торған һалдаттарҙы күҙҙән үткәрә барып, ҡарашын прапорщикта туҡтатты ла, ҡурҡыныс төштән тертләп уянған кешеләй, ҡапыл һикереп урынынан торҙо һәм үҙендә:

– Әлеге хәл нисегерәк булды икән, әфисәр әфәнде? Белһәгеҙ, һөйләп бирегеҙ әле, – тип ҡыҙыҡһыныр көс тапты. – Минең улым, ауыр яралы булһа ла, йәшәрлек ине...

– Аңлайым, булғанды йәшереп тороуҙың мәғәнәһе юҡ. Шуның өсөн, һалдат,

тураһын әйтәм. Улыңды бына ошолар... – Прапорщик, башлағанын әйтеп бөтөрмәйенсә, баштарын эйеп торған ҡытайҙарға төртөп күрһәтте. – Һөйәктәре, ана, тегендә...

– Н... ннисек, һө... һөй-йәктәре? – Мөхәмәтшаның теле тотлоҡто.

– Ашағандар...

– Быны ң булыуы мөмкинме, прапорщик? Юҡты һөйләйһеңдер...

– Аслыҡ, дорогой, аслыҡ...

– Аслыҡ тип... Ни эшләп минең баламды ашарға тейеш улар? Тиктомалға кешене кеше ашай аламы?

– Тиктомалға ашауын ашай алмайҙыр, ә бына аслыҡ мәжбүр итә, – һалдаттарҙың береһе һүҙгә ҡушылды, – аслыҡ ул, брат... усал ҡәйнәңдән былайыраҡ...

Шул рәүешле ҡыҙыҡ һөйләп, ул барыһын көлдөрмәксе ине, буғай, әммә мәрәкәһе ифрат урынһыҙ килеп сыҡты: көлөүсе кеше табылманы. Уңайһыҙ хәлгә төшкән һалдат шымып ҡалды.

Эйе, аслыҡ ғали йәнәптәре хөкөм һөргән урында башҡа һыймаҫ эштәр, зиһене теүәл кеше ышанмаҫлыҡ енәйәттәр эшләнә. Әсә – балаһына, бала әсәһенә ҡул күтәрә. Туған туғанын танымаҫлыҡ хәлгә етә. Аслыҡ кешене аҡылынан яҙҙыра, рухын һындыра. Шулай булғас, тота килеп сит-ят бер әҙәмде ашауы нимә ул? Был осраҡта ла ҡот осҡос яманлыҡ ҡылынған, ләкин, үлгәнде терелтеп булмағандай, үткәнде кире ҡайтарыуы ла мөмкин түгел...

Әле, үҙ ғүмерҙәрен аяп, инәлә-ялбара Мөхәмәтшаның аяҡ аҫтына тәгәрәгән әҙәм аҡтыҡтары бая, йырын эсендә, ана нимә менән булашҡан икән? Вәхшилектең иң ауырын ҡылған урындары теге Чанлунь тигәндәрен ҡурсалап ҡалған әрәмәлектән алыҫ та түгел. Их, белгән булһалар икән...

Ана бит нисек килеп сыҡты: ғүмерҙәрен ҡурҡыныс аҫтына ҡуйған Мөхәмәтша менән Лотфулла ҡытай кешеһен ҡурсып ҡалдылар, ә тегеләре уның ғәзиз улын...

– Нимәһенә аҡырыша әле шулар? – Йәне ныҡ үртәлгән Мөхәмәтша күтәрелеп урыҫ һалдаттарына ҡараны. – Әйтегеҙ, туҡтаһындар...

– Анауы ҡарты әйтә, беҙ ҡайтҡанда ул ҡанһырап йән биргән ине, ти, – һалдаттар араһында ҡытай телмәрен аҙмы-күпме төшөнгәне табылды.

– Тимәк... – Мөхәмәтша ауыр көрһөндө, – ә мин уйлаған инем – тере көйөнсә...

Мөхәмәтша егерме йыл дауамында иркәләп-яратып үҫтергән улының ҡалдыҡтарын күргәс тә таныны һәм, ғәжәп, нисектер йөрәге ярылмай түҙҙе! Ул, әлеге ҡалдыҡтар өҫтөндә башын эйгән килеш, ҡуҙғала алмайынса оҙаҡ торҙо. Һөйәлләнеп бөткән эшһөйәр ҡулдарҙы убырҙар, ни сәбәптәндер, теүәл көйө ҡалдырған. Инде хәрәкәтһеҙ ҡатып ятҡан һалҡын ҡулдар әле килеп ни ҡәҙәре яҡын, ниндәй ҡәҙерле ине.

Атай үҙен аҡылдан шаша барған кеше һымаҡ тойҙо: ҡапыл ғына күҙ алдары ҡараңғыланып китте лә, бар ғаләм зилзилә килеп, баштүбән түңкәрелде. Уның өсөн хәҙер артабан йәшәүҙең бер мәғәнәһе лә юҡ кеүек. Шул рәүешле бер көйләрәк булып, аңҡы-тиңке торған Мөхәмәтшаның ҡулынан кемдер мылтығын ҡапыл һыпыра тартып алды. Тирә-йүндәгеләр ниҙер аңлап өлгөргәнсе, ул ҡырлы штыкты ялтыр баш ҡарттың эсенә ҡаҙаны. Уныһы торған урынынан лырҡ итеп ергә ауҙы ла шунда уҡ йән бирҙе. Ҡалған икәүһенә уҡталып та, ғүмерҙәрен ҡыйырға өлгөрмәй ҡалған көтөлмәгән үс алыусыны кинәт иҫтәренә килгән һалдаттар йомарлап һалды. Мылтыҡты шаҡырайта тотҡан ҡулдарҙан көскә һалдырып алғандан һуң, ярһыуы сиктән ашҡан әҙәмде аяҡтарына баҫтырҙылар. Мөхәмәтша ҡаршыһында асыуынан сәсәргә етешкән, шулай ҙа бурысын еренә еткереп үтәүҙән ифрат ҡәнәғәт ҡиәфәттә йылмая биреп... Чанлунь тора ине.

***

Улының шауҙыр һөйәктәрен киндер туҡымаға төрөп алған Мөхәмәтша, уларҙы, йыназаһын урын-еренә еткереп, ер ҡуйынына тапшырырға ҡарар ҡылды. Нисек итһә итте, хатта рота командиры алдында теҙләнә төштө, әммә кәфенлек өсөн аҡ тауар ҙа таба алды. Уныһын командир ҡала һыҙатында урынлашҡан лазареттан алып килде, буғай. Ә Лотфулла ошо арала мәрхүмдең барлыюҡлы кәүҙәһе янынан китешмәне.

Ҡәберҙе хас мосолмандарса, ләхетен алып ҡаҙынылар. Белгән генә аят-доғаларын уҡып, йыназа ғәмәлен башҡарғандан һуң, мәйет ҡалдыҡтарын ҡәҙерләп кәфенләгәс, әҙер соҡорға төшөрөп һалдылар ҙа унан-бынан табып килтергән ярҡалар менән яптылар. Ҡыҙғылт төҫтәге ваҡ ташлы тупраҡ ләхет таҡталарына бәрелеп дөмбөрҙәгән һайын, Мөхәмәтшаның йөрәге һулҡылданы: ғәзиз баланды үҙ ҡулдарың менән күм дә әллә ҡайҙарҙа ятҡырып ҡалдыр инде йә…

Сәнскеле ят ҡыуаҡлыҡтар уратып торған аҡлан уртаһындағы яңғыҙ зыярат янында икәүһе генә ҡалып оҙаҡ ултырҙылар. Фазылдың инде араларында юҡлығына улар һаман булһа ышанып етмәйҙәр ине шикелле. Шулай булмағанда, аратирә ян-яҡтарына ҡараш ташлап ҡуйырҙар инеме? Уларға, күрәһең, йәш егет, ғәҙәтенсә, көләмәйләп ана-бына килеп сығыр төҫлө. Хәлбүки, үлгән артынан үлеп булмағандай, был урында мәңгелеккә ҡалырға ла мөмкин түгел ине. Һуңғы ҡат бәхилләшеп, китергә ҡуҙғалғас, атай кешенең ошоғаса нисектер быуылып торған күҙ йәштәре йылға булып аҡты ла китте. Уға ҡалҡынып ҡарамаҫҡа тырышҡан Лотфулла ла оҙаҡҡа түҙеп тора алманы, ныҡлап үкһергә тотондо. Барлыҡ хәсрәттәрен эстәренә йотҡан ирҙәр шул рәүешле шым ғына иланы.

Фазлетдиндың башын ошолай, ысын мәғәнәһендә бирәндәр ашаны. Ҡаршыңда торған аяуһыҙ дошман ҡулынан һәләк булғанда – тағы бер хәл. Исмаһам, һуғышып үлде, тигән даны ҡалыр ине. Ә бында улар өсөн, уларҙың киләсәге хаҡына ҡан ҡойоп, йән аямай йөрөгән һалдатты ошо ҡытай кешеләре… Бына нимәһе үкенесле. Үкенесле генәме, әлеге ҡот осҡос эш йәнеңде өтөп бара. Уһ, гонаһ шомлоҡтары!

Мөхәмәтша аҙна-ун көн дауамында асылына ҡайта алмай, иҫәңгерәп йөрөнө. Килке-килке Фазлетдины хәтеренә килеп төшөүҙән йөрәге жыу итеп ҡалһа, тәҡәт бирмәй туҡтауһыҙ күңеле һыҙлап торҙо. Улы төндәрен, бер йылмая биреп, бер ҡомһарылып, төшөнә керер булып китте. Әлеге баҫлыҡтырғыс төштәрҙе ул үҙенсә һәр ваҡыт яҡшыға юрарға тырышты. Шулай ҙа һиҙеп тора: улын, моңһоҙлоғо арҡаһында, әжәлдән ҡурсып ҡала алманы. Ошоға уның ахирәттә эсе бошоп, рухы рәнйейҙер… Изге рухыңды ризалыҡҡа ҡалдырып, йәнеңде тынысландырмаҡҡа ниҙәр генә ҡылайым икән һуң, балаҡайым?! Былай ҙа бит биш ваҡыт намаҙымдың һәр ҡайһыһын һиңә, тик һинең рухи шәрифеңә генә бағышлап барам. Күрәһең, былар ғына аҙ. Булдыра алһаң, тауыш бир, шипкерт яһа, һинең өсөн тағы нимәләр эшләй алам?..

Эй-й, өмөт тигәнең! Балаһын үҙ ҡулдары менән гүргә һалған ата уның нindәйҙер шипкерт яһауына һаман өмөтләнә…

Көндәрҙең береһендә, һис көтмәгән ерҙән, Чанлунь йәнә күренеп китте. Күренде лә ошонан һуң көн ҡалдырмай килеп урар булды. Баштараҡ Мөхәмәтша уға нисектер ытырғана биреп ҡараһа ла (ни тиһәң дә, улының башына еткән зат вәкиле), һуңға табан күнегә төштө. Ахырҙа Чанлундың теге оңҡоттар ише боҙоҡ әҙәм түгел икәнлеген күреп, тыныслана төштө. Аҙаҡ хатта дуҫлашып уҡ киттеләр.

Фазыл менән булған хәлде аҡыллы Чанлунь тәржемәсе аша былай аңлатты: кеше ашаусылар бөтә ҡытай иленә даны таралған «боксёрҙар» нәҫеленән булып

сыҡҡан. Үҙҙәрен «боксёр» тип атаусылар хөкүмәткә ризаһыҙлыҡ белдереп, уның сәйәсәтенә ҡаршы сыҡҡан яман тоҡом икән. Улар, имеш, үҙҙәренең фирҡәһенән башҡаһын, бүтән кешеләрҙе мөрхәтһенмәйҙәр. Ә сит илдән килгәндәрҙе күрә алмайҙар, ти. Уларға асыҡтан-асыҡ нәфрәт менән ҡарайҙар. Әлеге осраҡта иң аптыратҡаны шул: тыумыштан бер ваҡытта ла ит ашамаған «боксёрҙар» ана нимә ҡылып ҡуйҙы. Аслыҡ тигәнең уйын эшме? Баҡтиһәң, алйотланыр сиккә етеп, үҙ туғанын, хатта ки үҙ балаларын ашаусылар ҙа бар икән! Бына ул ҡәһәрле һуғыштың ысын йөҙө...

Эйе, был – һуғыш. Мәрхәмәтһеҙ һуғыш! Ул Мөхәмәтшаның да сиге булмаҫтай тойолған хәсрәттәрен тиҙ арала баҫты. Һулҡылдаған йөрәге йыш ҡына сәнсештереп ҡуйһа ла, хәҙер, тәүге мәлдәге шикелле, ныҡ өҙгөләнмәй. Әкрен-әкрен генә онотола барған кеүек. Береһенән-береһе хәтәрерәк күренештәргә, ҡырылып ятҡан кеше яҙмышына битараф ҡала алмайынса, һәр фажиғәне йөрәгенә яҡын алған бер ҡатлы башҡорт иренең күңеле ҡатып, бәғер тигәне ташҡа әйләнә бара һымаҡ. Хәйер, бер уныҡы ғынамы, ут эсендә йөрөгәндәрҙең барыһы ла шул хәлдә.

***

Ә был мәлдә Рәсәйҙең үҙен бөйөктәрҙең бөйөгө һанап түш һуҡҡан, ошоғаса еңелеү белмәгән ғәскәре ғәйәт ҙур юғалтыуҙарға килтергән туҡмаҡтарҙы бербер артлы ала торҙо. Сафтары һиҙелерлек һирәгәйгән сиреүгә яңынан-яңы һалдаттар килде. Килгән береһе тура тамуҡ утына эләкте. Иҫәпһеҙ-һанһыҙ ҡорбандарҙы ҡыҙғанып илаусы ла, йүнләп ерләүсе лә юҡ ине. Ҡайһы арала кеше ғүмерҙәре шул хәтлем осһоҙға әйләнеп өлгөрҙө – аптырарһың?

Ата-әсәләре ошо ир ҡорона яңы инеп килгән йәп-йәш кенә егеттәрҙе ниндәйҙер бер төптө ят ҡитға ерендә һөмһөҙ ҡоҙғондарҙың еме булып ятыр өсөн үҫтерҙеме? Сит ер, сит һыу тип баш һалған һалдаттарҙың өҙөлөп көткән яҡындары, кәләштәре, балалары алдында Рәсәйҙең башһыҙ башлыҡтары ни тип яуап бирерҙәр икән? Хәйер, аҡланып тороу улар өсөн хас түгел. Ундайына өйрәнмәгәндәр. Аҡланыу кәрәкмәй ҙә. Әлеге осраҡта иң анһат юл – барыһын да һуғышҡа япһарыу. Һуғыш бөтәһен дә иҫәптән сығара һәм юйып ташлай. Шул иҫәптән мәғәнәһеҙгә ҡыйылған йөҙәр меңләп кеше ғүмерҙәрен дә...

Епшек март аҙаҡтары яҡынлашып, көндәр инде шөйлә йылыға тарта башлаған мәлдә, әллә дошман минаһына, әллә үҙебеҙҙекенә эләгеп, «Петропавловск» броненосецы һыу төбөнә китте. Уның бортында хәрби һәләте менән айырылып торған ҡуш йөрәкле, үҙ дәүеренең данлыҡлы ғына сардары адмирал Макаров һәләк булды.

Рәсәй генералдарының, самурайға күрмәгәнен ҡоро ерҙә күрһәтербеҙ әле, тип лаф ороп, алдан маһайыуҙарына ҡарамаҫтан, илбаҫарҙар ер өҫтөндә лә шәп һуғыша белеүҙәрен күрһәтте. Улар август айының эҫе көндәрендә Ляоян эргәһендә, бар донъяны шаҡ ҡатырып, урыҫ армияһын бәргесләп алды. Рәсәй етәксе даирәләренең, әлеге еңелеү осраҡлы ғына килеп сыҡты, тип кәпәс һуғып иҫбатларға тырышыуҙарына үс иткәндәй, бер ай үтеүгә, сентябрь ахырында, Шахе йылғаһы үҙәнендә япондар урыҫты йәнә һыу эскеһеҙ итеп дөмбәҫләп ташланы.

Бөтә ошо хурлыҡлы – башҡаса һүҙе лә юҡ – еңелеүҙәрҙең барлыҡ ауырлыҡтарын бер үҙе генә күтәрә алмаған Порт-Артур ҡалаһы, ниһайәт, дошман алдында теҙ сүгеп, баш эйергә мәжбүр булды. Ҡоро ер ғәскәрҙәре менән етәкселек иткән генерал Куропаткин әфәнде үҙенең булдыҡһыҙ командующий икәнлеген ошо бәрелештәрҙә айырата күрһәтте. Ә Порт-Артурҙы, уның сигенеү белмәҫ һаҡсыһы, ҡаһарман генерал Кондратенко ҡул аҫтындағы һалдаттары менән бер

ҡатарҙан яу ҡырында ауғандан һуң, алдағыһын ҡайғыртыуҙан ялағайланып, ҡурҡаҡ әүермән Стессель япондарға алышһыҙ бирҙе. Әлеге аҙымын ул, башынан себен осороу маҡсатында, «кешеләрҙең ғүмерен һаҡлап ҡалыу» һылтауы менән аңлатып маташты. Бәлки, яу урынынан меңдәрсә саҡрым алыҫлыҡта, хәүеф-хәтәрһеҙ генә тәхетендә ултырған батша уны аңлағандыр. Ә бына үләт-һуғыштың һәммә ауырлығын, мәсхәрәле еңелеүҙәрҙең бар оятын үҙ иңендә күтәреп, хатта кем өсөн һәм нимә хаҡына ҡан ҡойғанын да белмәгән ябай һалдат аңлай алманы. Шул рәүешле, шәхси мәнфәғәтенән сығып, үҙен генә ҡайғыртҡан хәйләкәр һәм мәкерле Стессель улар алдында бары һатлыҡ йән булып ҡалды. Тап уның «эшмәкәрлеге» арҡаһында ғәскәри частарҙың командирҙарына ҡарата ышанмаусанлыҡ һиҙелә башлап, тарҡаулыҡ күҙәтелде. Шулай итеп, Рәсәй империяһы әкренләп, әммә ышаныслы рәүештә Манчжурия менән Кореяла ғына түгел, ғөмүмән бөтә Алыҫ Көнсығышта ҡасандар булған абруйлы йоғонтоһон юғалта барҙы. Ә инде 1905 йылдың ҡарһыҙ ыжғыр февралендәге ике йөҙ меңдән артыҡ аҫыл ир-егеттең ғүмерен өҙгән Мукден бәрелешендә ысын мәғәнәһендә ҡыйратылып, тар-мар ителеү Петербургтың мүкләнеп бөткән министрҙарын ғына түгел, батшаның үҙен дә, ниһайәт, уйға ҡалдырҙы. Улар тептеүәл өс ай, йәғни йәмле май айына ҡәҙәре «уйланды».

Был мәлдә бөтәһенә түҙем, өндәшмәҫ Рәсәй һалдаты еүеш окоптарҙа һаман михнәт сигеп, эт көнө күрҙе. Ахырҙа, ярты Ер шарын урап үткән һәм донъяла иң ҡеүәтлеләрҙән һаналған Балтик эскадраһы тар Цусима ҡултығында уйламаған ерҙән дошман засадаһына юлығып, тулыһынса ҡыйратылғандан һуң ғына, бөйөк батша үҙенең еңелеүен танырға мәжбүр булды. Уныһында ла теләр-теләмәҫ кенә. Ул, күрәһең, ниндәйҙер сәркәш сәүектең тотош бер филде еңә алыуына һаман ышанып етмәй ине. Ышанһаң-ышанмаһаң да, Балтик флоты бөтөнләйе менән тип әйтерлек юҡҡа сыҡты, ә ҡоро ер ғәскәрҙәре өлөшләтә ҡоралһыҙландырылды. Шулай итеп, үҙенең оҫта һәм йылдам эш итеүе өҫтөнә, алдан күрә белеүе менән «сәүек» ысынлап та дәү «фил»де бағындыра алды.

***

Ошо мәсхәрә өҫтөнә хурлыҡ килгән көндәргә тиклем байтаҡ ваҡыт бар ине әле. Ҡарға һаран ҡыш урталарында Мөхәмәтша менән Лотфуллаға ҡасандыр Порт-Артур тип аталған, хәҙер инде уның емерек диуарҙары ғына ятып ҡалған нығытма урынына йәнә бер тапҡыр барып сығырға насип итте. Был юлы барлыҡ хоҡуҡтарҙан мәхрүм ителгән ҡоралһыҙ әсир сифатында. Унда килтерелгән һалдаттарҙың маҡсаты әллә ҡасандан туҙғышып ятҡан мәйеттәрҙе йыйып алыу ине.

Көндәр ярайһы ғына һыуыҡ тороуға ҡарамаҫтан, диңгеҙ әле туңмаған. Күҙ күреме ерҙәргә йәйелеп ул, әйтерһең дә, хәсрәттәренән арына алмайынса ойой биргән дә тының ҡына тулҡынып-бәүелеп ята. Уның һыуы ла элеккесә үтә күренмәле түгел һымаҡ. Нисектер тоноҡланып, хатта ҡуйырып киткән кеүек. Ғәжәп, аңһыҙ һаналған һыуҙың да әллә аңы бармы? Диңгеҙҙең диңгеҙе әҙәми зат ҡайғыһына битараф түгел...

Ҡасан ғына әле хайран ҡалырлыҡ төҙөк, һәләк матур ҡала торған урында хәҙер бер бөртөк һау өй күренһәсе! Ҡайҙа ҡарама – кирбес ыуалсығы менән онталған таш өйөмдәре, күңелдәргә шом һалып торған ярым емерек диуарҙар. Бәғзе йорттарҙың ҡыйығы менән бер ҡатарҙан түшәме бүҫелеп, икенселәренең таш стеналары ауып төшкән, өсөнсөләренең урынында нигеҙҙәре генә ятып ҡалған. Бар ерҙә ҡағыҙ киҫәктәре, сепрәк-сапраҡ туҙып ята. Бәғерҙәрҙе иң иҙгәне – ошо зилзилә ятҡан емереклектәр араһында күренеп ҡалған уйынсыҡтар. Балалар

уйынсыҡтары. Тәү ҡарауға баштарҙа шундай фекер тыуып ҡуя: нәҡ ошо ерҙә, күптән түгел генә тормош ҡайнап торған урында, әйтерһең дә, ҡеүәтле ер тетрәү булған. Тетрәгән дә уҙған. Кире ҡайтарып булмаҫ эҙемтәләре генә ятып ҡалған. Ә асылда улай түгел. Ошо ҡот осҡос күренештең сәбәпсеһе кеше үҙе! Кемдер, ҡасандыр бар оҫталығы менән булған тырышлығын һалып төҙөгән ҡаланы күҙ асып йомған арала онтап ташласы әле. Ябай ауыл кешеләре булараҡ, бындайы Мөхәмәтша менән Лотфулланың баштарына һис һыймай. Ошонан, төҙөп ятҡан йорт-ҡуралдың яңылыш ҡына һыңар таҡтаһы ярылып китһә лә йәнең сыға яҙа, ә бында бөтөн бер ҡала аяҡ аҫтында ауып ята.

Емереклектәр араһында төрлө ҡиәфәттә ҡатып ҡалған мәйеттәр айырата йәндәрҙе өшөтә. Ҡайһыһы киҫәктәргә өҙгөләнеп, ҡайһыһы бөтөн килеш туңып ятҡан кәүҙәләргә тыныс ҡына ҡарап тороуы мөмкин түгел. Бигерәк тә уларҙы мөнйөп кинәнгән йолҡош эттәр ытырғаныс. Уҫлаптай эҙҙәргә ҡарағанда, әҙәм итенән ас бүреләр ҙә баш тартмайҙыр. Унаһы нимә, кем өсөн, ни сәбәптән баш һалғанын да белмәйсә шәһит киткән күпселек һалдат мәйеттәренең күҙ урынында ҡара соҡорҙар ғына өңөрәйеп тора. Уларын болот булып осҡан ҡарға менән ҡоҙғон соҡоп бөткән. Ул оңҡоттар араһында ниндәйҙер диңгеҙ ҡоштары ла күренеп ҡала. Балыҡ менән генә туҡланған ҡоштар ҙа әҙәм ите ашар икән. Хәйер, мәле етһә ашар ҙа. Ана, кешенең кешеһе үҙенең ишене... Ошоларҙың барыһына нисек итеп тыныс күңел менән ҡарап тормаҡ кәрәк? Һәм тереләр, алдарында булып ятҡан хәҡиҡәтте күрмәмешкә һалышырға тырышҡандай, әлеге күренештән йөҙ бора һала.

– Яҙ етеп, көндәр йылына башлау менән ни эшләр инде былар?.. – Мөхәмәтша ауыр кисереештәрҙән уфтана.

– Йәһәтләп йыйҙыра һалһалар... – Лотфулла ла көрһөнөп ҡуя.

– Р-разговорчики в строю! – Тырпай мыйыҡлы поручик, екеренеп, уларҙың һүҙҙәрен бүлдерә.

– Кәрәккән-кәрәкмәгәнгә боғаҙ йыртырға ғына маһир беҙҙең командирҙар. – Был юлы Мөхәмәтша танау аҫтынан мыңғырҙаны.

– Әйтмә лә...

– Рота-а, сто-ой! – Ҡупырыш поручик тәртипһеҙ саф менән килгән ҡоралһыҙ һалдаттарҙы туҡтатты. – Напра-а... во-о!

Ошонан һуң ул, эшлекле ҡиәфәттә, рота алдында торған ауыр, әммә кисектергеһеҙ мөҡәддәс бурысты ҡыҫҡаса төшөндөрөп үтте.

– Әфәнделәр! Беҙгә бөгөн Тыуған илебеҙҙе, ҡәҙерле үә бөйөк батшабыҙҙың абруйын һаҡлап ҡалыу хаҡына йәндәрен аямай, ғүмерҙәрен биргән ватандаштарыбыҙҙы лайыҡлы рәүештә ер ҡуйынына тапшырып, һуңғы юлға оҙатыу бурысы ҡуйылды. Япон ғали йәнәптәре беҙгә барлығы егерме дүрт сәғәт ваҡыт биргәҙе, һәм беҙ ошо еңелдән булмаған эште киләһе көнгә осларға тейешбеҙ. Һорауҙар бармы?

Һорауҙар булманы.

– Һы, Тыуған ил... Ҡәҙерле батша... – Битараф ҡиәфәттә торған Лотфулла ауыҙын мыҫҡыллы ҡыйшайтты. – Миңә шуны әйт әле, ағый: ҡасандан алып Ҡытай беҙҙең тыуған илгә әйләнде һуң?

Мөхәмәтша өндәшмәне.

– Ил именлеге өсөн түгел, серегән батшаның бер кемгә лә хәжәте булмаған шөһрәте, башҡа ҡап ҡорһаҡтарҙың именлеге тип баш һалды был байғоштар...

Мөхәмәтша, һиҙҙермәй генә, онотола барған Лотфулланың ҡулын ҡыҫты.

– Ҡарале, ҡустым, һин ул ҡәҙәре ныҡ шаулама, – тип уға эйелә бирҙе, – оҙон ҡолаҡтар етерлек бында, үҙең беләһең.

– Мин бит үҙебеҙсә...
– Йәпәтәйҙәр араһында беҙҙең телде аңлағаны юҡ тиһеңме?..
– Уныһы шулай инде, ағый. – Лотфулла йәнә көрһөнөп ҡуйҙы.

Көноҙон кеше ҡалдыҡтары, туң мәйет йыйыу менән булдылар. Башта йәшерен ытырғаныс, ниндәйҙер шөбһә менән тотонған һалдаттар тора-бара «күнегә» төштө, әйтерһең дә, ғүмерҙәре буйына ошо изге, әммә хөштөмһөҙ эш менән булашҡандар. Хәҙер улар йәнһеҙ кәүҙәләрҙе, урманда утын ташығандай, иңбаштарына күтәреп тә, ҡултыҡ аҫтарына ҡыҫтырып та, ҡарҙан өҫтөрәп тә алып китәләр. Ә был мәлдә башҡа тарафтарҙан да ҡорал һалған «үлек» командалары килә торҙо. Көн уртаһы ауышҡанда Порт-Артур тип аталған туғандар ҡәберлеге өҫтө ямғыр алдынан ҡымырйып киткән ҡырмыҫҡа иләүен хәтерләтә ине. Элекке ҡаланың элекке сиге буйлатып «хәүефһеҙлек» һаҡлау маҡсатында урынлаштырылған ике-өс һыҙат япон һалдаттары «ерләү командаһын» ат тештәрен ыржайтып, асыҡтан-асыҡ мыҫҡыллы йылмайыу менән күҙәтте.

– Ух, тыртайғандар, ә! – Нәфрәтен тыйып тора алмаған Мөхәмәтша уларға ҡарап тешен ҡыҫа. – Мәйеттәр өҫтөндә күрәләтә шулай ҡыланмаһағыҙ...

Ҡырлас тауҙар ышығындағы үҙәндә ҡаҙып әҙерләнгән ғәләмәт ҙур соҡор – йәмиғил әруахтарҙың буласаҡ дөйөм йорто ҡыйралыш урынынан апарыҡ алыҫ ҡына ине. Шунлыҡтан ул көндө «тыуған ил өсөн» ҡаһармандарса баш һалған яуҙаштарының да, былай ғына, абайламаҫтан ут аҫтында ҡалып ҡорбан булған башҡа ватандаштарының да кәүҙәләрен ер ҡуйынына «лайыҡлы» рәүештә тапшырып бөтә алманылар. Ҡаршыһына тып баҫып, «Япон ғали йәнтәре»нән йәнә бер нисә көн теләнселәргә тура килде.

Тәү башта мәйеттәр ниндәйҙер бер тәртиптә, ип менән теҙеп һалына барһа, хәҙер инде, тегеләр ныҡ ҡабаландырғанға күрә, тәртип ҡайғыһы китте. Туң кәүҙәләр соҡор төбөнә нисек етте шулай бырағытылды. Һуңынан арҡыс-торҡос өйөлгән үлек тауы арлы-бирле генә итеп күмеп тә ҡуйылды. Сәсе ойошоп, ауыҙынан сифатһыҙ хәмер еҫе аңҡып торған оҙон ҡара кейемле рухани, ҡулына алтын ялатылған ялтырауыҡ тәре тотҡан килеш, христианына ла, мосолманына ла, борҡан менән башҡаһына ла берҙәй, эс бошорғос итеп олой-олой, үҙенсә йыназа ҡылып маташты. Ҡыҫҡаһы, мәрхүмдәрҙең көллөһөн бер ҡатарҙан суҡындырҙылар ҙа туғандар ҡәберлеге өҫтөнә дәү ағас тәре ҡаҙап ҡуйҙылар. Шулай итеп, һуғыш ҡорбандарының ер өҫтөндә күренеп ятҡандары ғына «лайыҡлы рәүештә» ер ҡуйынына һыйына алды. Ә емереклектәр аҫтында ҡалғандары?..

Танһыҡлап кителгән яҙ етеп, йылы елдәр иҫә башлау менән, Порт-Артур ҡалдыҡтары өҫтөндәге түҙеп торғоһоҙ еҫтән тын алырлыҡ булмай башланы. Был таш диуарҙар аҫтында ҡалғандар үҙҙәре хаҡында иҫкәртә ине: тимәк, иттәре һөйәктәренән айырыла. Уның ҡарауы, хужаһыҙ ҡалып, ошо тирәлә көн иткән берәҙәк эт менән бесәй халҡына хөрриәт заманалар килде. Улар хәҙер тик әҙәм ите менән генә туҡланды...

***

Һуғышта еңелеп, ҡолағына ҡәҙәр хурлыҡ нәжесенә батҡан империяның ҡалдыҡ ғәскәрен оҙаҡлатмай таратып, һалдаттарҙы өйҙәренә ҡайтара башланылар. Ушылдашып оҙон-оҙон эшелондар өҫтөрәгән паровоздар, үҙҙәре бөрккән ҡара төтөнгә урала-урала, бер-бер артлы көнбайыш тарафтарға ҡарап ағыла. Улар киткән һайын, оло яланды тултырып үҙ сиратын көтә ятҡандар һаны күҙгә күренеп кәмей бара.

Мөхәмәтша менән Лотфуллаға ла мөҙҙәте етте, буғай: демобилизацияға әләгеүселәр исемлеге араһында уларҙың да исем-шәрифтәре бар. Демобилизация

тураһындағы фарманды үҙ ҡолаҡтары менән ишеткәс тә, күңелдәре уйнап китте лә, йөрәктәре урынынан ҡупты ла ҡуйҙы. Һағынырлыҡ та, зарығырлыҡ та шул. Ни тиһәң дә, ауылдарынан сығып китеүҙәренә йыл ярымдан ашыу ғүмер уҙған. Йыл ярым – әйтеүе генә анһат. Элекке һалдаттарҙың ошо хәйерһеҙ мәғшиәт киҫәксәһе тиҙерәк үтеп китеүен ни ҡәҙәре өҙөлөп көткәндәрен кем аңлар? Ихтимал, шул көнгә тарыған башҡа һалдат ҡыналыр...

Уйҙарға бирелеп ағас күләгәһендә ултырған Мөхәмәтшаның ҡапыл ғына Фазлетдины иҫенә килеп төшөүҙән йөрәге әрнеп ҡуйҙы. Шулай, бала ҡайғыһы онотолмаҫ инде ул. Бер ҡасан да! Бәғеренә ҡара ҡан һауҙырыр көндәре алда әле: ҡайтып етеп, әсәһенең күҙенә ҡарағас...

«Ҡайтыу хәбәрен ишетеп ҡайһылай ҡыуанған булыр ине, байғош. Ғәзиз һөйәктәрең сит-ят ерҙәрҙә ятып ҡала, әсәйеңдең ялбарыулы ҡараштарын нисек итеп кенә күтәреремен инде? Күтәрә алырмынмы? Күтәрә алған хәлдә лә, уның алдында ни һөйләп аҡланырмын? һағынып көткән ҡусты-һеңлеләреңә нимә тип әйтермен? Рухың рәнйеп ҡалмаһын ине, балам! Кисер мин тинтәкте, кисерә алһаң! Кисерә алмаһаң да, үпкәм юҡ. Гонаһһыҙ йәнең йәннәттә, мәңгелек урының ожмахтың иң түрендә булһын, яраббым!..» Бәхетһеҙ атай ирекһеҙҙән сырҡырап күренгән күҙ йәштәрен ең осо менән һөртөп ҡуя.

Оҙон үлән эсендә баш баҫып ут йотҡан Мөхәмәтшаның уйҙарын ҡайҙандыр атлығып килеп сыҡҡан Лотфулла бүлдерҙе лә бөтмәҫ-төкәнмәҫ хәсрәттәрҙән арындырҙы:

– Ағый, һине теге... Чанлунь таптырасы...

– Ҡайҙа ул? – Ағаһы һәленеп төшкән башын ҡалҡыта бирҙе.

– Эшелондың арғы осонда.

Урынынан теләр-теләмәҫ ҡуҙғалған Мөхәмәтша Лотфулла күрһәткән яҡҡа ыңғайланы.

Эшелон ҡойроғонда, мәж килеп, хәрби аттарҙы махсус вагондарға тейәп маташалар ине. Бер ситтәрәк, тимер рәшәткә буйындағы йыуан ғына ағас төбөндә, ауыҙы ҡолағына еткән Чанлунь баҫып тора. Беҙҙең яҡ атына һис оҡшамаған толпар етәкләгән ҡытай егетенең күтәренке кәйефе ҡоңғорт йөҙөнә бәреп сыҡҡан. Бынауындай заманда шул тиклем ҡыуанырлыҡ ниндәй сәбәбен тапты икән ул?

Чанлунь, Мөхәмәтшаны күреп ҡалыу менән, арғымағын рәшәткәгә көрмәне лә өтәләнеп уға ҡаршы атланы. Алдына килеп баҫҡандан һуң, йәпәтәйләнә биреп, еңелсә баш эйҙе. Күрәһең, дуҫтарса иҫәнләшеүе шул булды.

– Вәғәләйкүм-әссәләм! – Мөхәмәтша ҡулын күкрәгенә ҡуйҙы.

– Итём, трук. – Рәсәйлеләр менән байтаҡ ваҡыт аралашыу дәүерендә урысса шөйлә һупалай башлаған Чанлунь Мөхәмәтшаның еңенән тартты. – Итём.

Бар донъяға битараф ҡиәфәттә юшап торған ҡыҙғылт-һары ат янына килделәр. Аптырай төшкән Мөхәмәтша сәйер төҫтәге хайуанға һоҡланыу ҡатыш ҡараны.

– Хороший конь, да! – Аттың ҡеүәтле муйынынан һыпырып ҡуйған Чанлунь йәнә йылмайҙы. Йылмайыуы һәр ваҡыттағыса эскерһеҙ ине.

– Әйтмә лә, егет, дөлдөл шәп! – Һоҡланыуын йәшерергә тырышмаған Мөхәмәтша баш бармағын сөйҙө. – Во!

– Үәт, исмаһам, был арғымаҡ! –Эйәрә килгән Лотфулланың да күҙе ҡыҙмай ҡалманы. – Бындайын ҡулға төшөргәндәме-е...

– Башкир любит конь! – Чанлунь асыҡ ауыҙҙары менән ҡарап торған башҡорттарға алмаш-тилмәш ҡараш ташланы. – Башкир хочет конь?

– Башҡа бәләкәй аң кереп, арттан шыуа башлағандан ат өҫтөндә инде беҙ, – тип ҡәнәғәт йылмайҙы Мөхәмәтша, – яҡшы атың ғына булһын...

– Бири, трук. Он твой. – Чанлунь көтмәгәндә теҙген осон Мөхәмәтшаға тотторҙо. Ә унылы, эштең асылын аңлап етмәйсә албырғай төшөп, һорау тулы ҡарашын аңшайып торған ауылдашына төбәне.

– Атты, ағый, һиңә инселәмәксе, шәт? – Иҫен йыйырға өлгөргән Лотфулла хайран ҡалды. – Бүләк итергә уйлай, ахыры.

– Бүләк итергә? Аттымы? – Мөхәмәтша йоҡомһорап торған эре һөйәкле хайуанға тәү күргәндәге һымаҡ ҡарап алды. – Ә ҡайҙа ҡуяйым мин уны? Нисек итеп апҡайтып еткерәйем?

Әлеге һүҙҙәр уның ошо мөғжизә аттан ҡырҡа ғына баш тарта алмауына ишара ине. Нисек итеп баш тартмаҡ кәрәк бүләктең анауындайынан?!

– Әллә тәүәккәлләйһеңме, әй? – Лотфулла ағаһының ҡабырғаһына ҡағылды. – Дөлдөлдөң бының һымағын көн дә тотторор тормайҙар...

Ә бүләге ысынлап та дан ине. Бындайҙы Мөхәмәтша менән Лотфулланың да, башҡа ауылдаштарының да ике ятып бер төшөндә күргәне юҡ, валлаһи! Был толпарҙы күргән дошман көнсөллөктән ятып шартлар, ә дуҫ – хайран ҡалыр.

Ғәләмәт йыуан муйын, ҡеүәтле киң күкрәк, тубыҡҡа төшкән көмөш ял. Ә ҡалын ҡойроҡ менән ялбыр бәкәл сәстәре ергә тейгән. Шулай ҙа ер аҡтарыр көсө ташып торған малдың иң ғәжәп ҡалдырғаны – ҙур таба дәүмәллек тояҡтары ине. Хайуандың йылҡылдыҡ йоҡа тиреһе аҫтынан һәр мускулы, һәр тарамышы бүртеп тора. Бынылы инде – уның фәҡәт эш өсөн генә яратылғанына ишара. Өс-дүрт йәштәр самаһындағы айғырҙың яҫы маңлайын урталай ярып сыбай ҡашҡа төшә. Үҙенең моңһоу ҡарашы аҡыллы һәм мәғәнәле...

– Бери, лао, бери! – Шаңҡып ҡалған Мөхәмәтшаны һаман үҙенекен һөйләп ныҡышҡан Чанлунь асылына ҡайтарҙы.

– Бери, бери, тиһең дә ул... Бик ҡыуанып алыр инем...

– Мөхәмәтша ағый, зату алып ҡайтып еткерһәңме...

Икеле-микеле торған Мөхәмәтша Лотфулланың ошо һүҙҙәренән ауҙы ла төштө. Бер ҡатлыраҡ йылмайыу менән ул Чанлундың ҡатынҡы ҡулын ҡыҫты: ярай, тәүәккәлләнек әләйһәң, яҙған булыр, йәнәһе.

– Һин әйттең, мин тыңланым, ҡустым. Тәүәккәлләгән таш ярған, ти. Аптыраған икән, бик тә килеп сыҡмаһа ни, юлда берәй яҡшы кеше ҡулына тотторор ҙа китербеҙ. Исмаһам, Әрәсәйҙә тоҡомо ҡалыр. – Ҡапыл ғына йәнләнеп киткән Мөхәмәтша аттың арҡаһынан шапылдатып һөйҙө, туҙған кикелен ҡупшылаған булды, тоҡсайынан шәкәр киҫәге алып ҡаптырҙы. – Һин инде хәҙер минеке, Сыбай ҡашҡа, тыңлап ҡына йөрө. Әкренләп башҡорт кешеһенә күнегә башлаһаң да була. Башҡорт иле һиңә йылымыс Ҡытай түгел. Унда бөтөнләй икенсе тормош менән башҡа йәшәйеш.

Сыбай ҡашҡаға, күрәһең, яңы ҡушаматы оҡшап ҡалды, ул, барын да аңланым, тип ризалыҡ белдергән һымаҡ, башын сайҡаштырҙы ла бышҡырып ҡуйҙы.

Аттарҙы урынлаштырыу эше менән етәкселек иткән прапорщик мөғжизә Сыбай ҡашҡаға асылған ауыҙын ябырға ла онотоп ҡарап торҙо. Һушын йыйғас, шунда ла ҡапылғара вагонға индерергә ризалашманы.

– Эшелон начальнигынан айырым күрһәтмә кәрәк булыр, – тине, – беләһеңме, һалдат, штабс-капитанды?

Мөхәмәтшаға ҡалһа, прапорщик үҙ башынан себен осора кеүегерәк тойолдо. Имеш, ниндәйҙер бер ат өсөн эшелон башлығын борсоп йөрөмәһә. Ә уны, ҡайсаҡ үҙ-үҙен тота алмайса, ҡул аҫтындағыларҙы бер һелтәнеүҙә йыға һуғырға ла тартынмаған, самаһыҙ ҡыҙыу штабсты кем белмәй. Ошо уйҙан Мөхәмәтшаның әле генә дөрләп киткән өмөт ҡатыш дәрт ялҡыны һүрелә биреп ҡуйҙы: ай-һай, түрәнең ундайы рөхсәт итерме икән? Ҡаты ҡуллы, яман уҫал булыуы өҫтөнә, ул бит ифрат ҡормош та. Ә ҡормош әҙәмдәрҙе Мөхәмәтшаның ене һөймәй.

Начальникка Лотфулла менән икәүләшеп киттеләр.

Бәхеттәренә күрә, кәйефе күтәренке штабс-капитан, кеше менән иләмһеҙ ҡыланһа ла, һәләк ат йәнле булып сыҡты. Сыбай ҡашҡаны күргәс тә, ул, гүйә, телдән яҙҙы ла ҡуйҙы. Аттың ул яғына ла, был яғына ла сығып, нимәһендер ентекләп тикшергән шикелле ҡыланды. Үҙенең күҙҙәре ут булып яна. Күренеп тора: һоҡланыу ҡатыш көнләшә.

– Да-а, жеребец – не жеребец, а зверь! Чудо! – тип маҡтап алды ул ахырҙа. Быныһын ихлас күңелдән әйтте. – Ҡайҙан төшөрҙөң?

– Бүләк иттеләр.

– Бүләк ителгәнде уны алыу кәрәк. Буштан төшкән бит. Һис юғында илебеҙҙә тоҡом яңыртырбыҙ. – Инде бөтөнләй алсаҡланып киткән штабс артабан да хуш күңеллелек күрһәтте. – Тик әлегә хайуанды карантин вагонына урынлаштырып торорға тура килер, һалдат. Белмәҫһең, әллә ниндәй сире булыуы ихтимал.

Мөхәмәтша, ишеткәндәренә ышанып етмәгән һымаҡ, бер мәлгә аңшайып торҙо. Ахырҙа, ҡыуанысынан, әүәл өнәп етмәгән дәү штабс-капитанды ҡосаҡлап ала яҙҙы. Ярай әле, ваҡытында тыйылып ҡалды, юғиһә йә тиктомалға әрләнә, йә бар ғәм алдында көлкөгә тарый ине.

Тыныс холоҡло мөғжизә атты, элекке хужаһы ярҙамында, бер нисә өлөшкә бүлгесләнеп, һаулыҡтары икеле-микеле булған хайуандар өсөн тәғәйенләнгән вагонға индереп яптылар. Платформа таҡтаһына тәү тапҡыр аяҡ баҫыуына ҡарамаҫтан, Сыбай ҡашҡа ризаһыҙлыҡ белдереп тә, ҡайһы бер аттар кеүек үрһәләнә-үрпәсей ҡарышып та торманы. Чанлунға эйәреп, күндәм генә үҙенә тейешле урынға инде лә баҫты. Әйтерһең дә, ғүмере буйына ошоноң ише тишектошоҡ ағас вагондарҙа йөрөп күнегеп бөткән.

– Ну, служивый, ревизия-фәлән килеп сыға ҡалһа, икәүләп яуап бирәбеҙ. Уныһын алдан белеп ҡуй. – Офицер, көләмәйләп, бәхетле Мөхәмәтшаның арҡаһынан ҡаҡты.

Состав инде ҡуҙғалып китергә торған мәлдә Чанлунь – ғәжәп ныҡыш һәм үҙенекендә ныҡ торған ҡытай кешеһе – ауылдаштарға һәлмәк кенә ҙур тоҡсой тоттторҙо. Аптырашып киткән башҡорттарға ул:

– Галоян, трузья, галоян. – Чанлунь ауыҙын киң асып ишараланы. – Кушат, пажалыста, кушат.

Киндер тоҡсай эсендә, ысынлап та, Манчжурия ерендә игелгән ҡытай тарыһы ине. Үҙ тамағынан өҙөп, егет уны ҡайҙан алғандыр – уныһы сер булып ҡалды.

– Бик хуп. Башҡаһы юғында танһыҡҡа тары бутҡаһы ла бик ярап ҡалыр ул. – Ифрат ҡәнәғәт Лотфулла тоҡсайҙы вагон төбөнә ырғытты. Ә Мөхәмәтша алсаҡ йылмайып торған Чанлунға ғәжәпһенеү ҡатыш йылы ҡараш ташланы.

Ошо мәл хәрбиҙәрҙең моряк кейемендәге береһе үҙе дәртле, үҙе тантаналы йыр башлап ебәрҙе:

*Наверх вы, товарищи, все по местам!*
*Последний парад наступает…*

Уныһын шунда уҡ күмәк тауыш күтәреп алды:

*Пощады никто не жела-ает,*
*Врагу не сдаётся наш гордый «Варяг».*

Йөктөң һәр төрлөһө артығы менән тейәлгән состав ауыр һәм ғазаплы ыңғыраша-ыңғыраша шыуышып киткәс тә, ҡуйы-ҡара төтөн араһынан бер күренеп ҡалып, бер юғалып ҡулын болғаған берәү торҙо. Ул Чанлунь ине. Поезд тауҙар араһындағы боролошҡа инеп ышыҡланғас, ҡытай егете Мөхәмәтша менән Лотфулла өсөн дә, эшелондағы башҡалар өсөн дә мәңгелеккә күҙҙән юғалды. Хуш, Чанлунь, ҡурҡыу белмәҫ ир уҙаманы! Беҙ һине онотмабыҙ!..

***

Иртәнге йоҡоһонан арына алмайынса, шыйыҡ томанға төрөнөп ятҡан Омск ҡалаһына еткәнсе ул-был мажараға тарыманылар. Ялҡытҡыс та, йонсотҡос та оҙон юлда кем нимәгә маһир – шуның менән мәшғүл. Кемдер әллә булғанды, әллә булмағанды һөйләп сафсата һатһа, икенсеһе етди хәлдәрҙе лә кәмиткә әйләндерә лә ауыҙына инә яҙып ултырған вагондаштарын көлдөрөп ҡыуандыра. Эйе, тап ошондай мәлдәрҙә төрлө һүҙ оҫталары-кәмитселәрҙең баҙары арта. Уларҙы ашатмаһаң-ашатма, әммә ләкин һүҙҙән мәхрүм итә күрмә. Кешеләрҙең ҡай берҙәре шымтайып ҡалған да алыҫ булмаған киләсәк хаҡында хыялланып ултыра. Ә инде бәғзеләр – былары, күрәһең, бошоноу белмәҫ моңһоҙҙар – рәхәтлектең сигенә сығып йоҡо һимертә. «Ҡайһы ергә шул хәтлем йоҡламаҡ кәрәктер? – Йоҡоға талымһыҙ Мөхәмәтша уларға ҡарап аптырай.

Нимә менән көн үткәрергә белмәй аҙапланған һалдаттар араһында шулай уҡ матур ғына көйҙәр сығарғандары ла бар. Ана, йырҙың күрше вагондан ишетелгәне зилзилә ятып ҡалған Порт-Артур хаҡында. Уның, көйө кеүек, һүҙҙәре лә һәләк килешле һәм күңелгә ятып ҡына тора:

*Порт-Артур тигән таш ҡала*
*Күп ҡалаъа баш ҡала,*
*Һары диңгеҙ буйҙарында*
*Ҙур ҡаланан һанала...*

«Башҡорт моңон йөрәктәргә еткергәндәй итеп, шул ҡәҙәре лә зауыҡ менән саф башҡорт телендә йырлаған кем икән ул? Ул моңдан хатта, ана, урыҫтар ҙа шымып ҡалған. Берәй туҡталышта, уңайын тап килтереп, йырау менән танышырға кәрәк булыр...»

Мөхәмәтшаның күҙ алдына Һары диңгеҙ ярындағы ҡалала үткән дәһшәтле көндәр килеп баҫа. Мәлһеҙ ҙә, мәғәнәһеҙ ҙә һәләк булып, сит ерҙәрҙә ятып ҡалған улы иҫенә килеп төшөүҙән ул ауыр көрһөнөп ҡуя. Ә теге башҡорт егете, әле генә тыуа килгән йырға яңынан-яңы юлдар өҫтәп, һаман моңая:

*Япондар туп аталар,*
*Порт-Артурҙы ваталар,*
*Ҡайһы аяҡһыҙ, ҡайһы ҡулһыҙ*
*Ҡысҡырышып яталар...*

Тимәк, һалдат аяҡ-ҡулһыҙ көйө ҡысҡырышып ятҡандарҙы үҙ күҙҙәре менән күргән. Ул һүҙҙәрҙе кеше һөйләгәндән генә яҙып булмай. Ундайын яҙыу өсөн үҙеңә шаһит булыу кәрәк. Шаһит булыу һәм бер аҙ ғына булһа ла шағирлыҡ...

Баштарынан үткән ысынбарлыҡтан ижад ителгән бер аҙ һағышлы ла, шул уҡ ваҡытта булмыштарға дәрт-дарман өҫтәүсе лә йырҙы тиҙ арала бөтә башҡорт ҡәүеме отоп алып йырларға тотондо:

*Ирҙәр үлә, башын һала,*
*Бөтмәҫ дандары ҡала.*

«Һе, дандары ҡала, ти ҙә ул, ундай дандың кемгә хәжәте?..»

Шулай ҙа йыр шәп ине. Хатта, башҡорт телендә бер һүҙ белмәгән башҡа милләттәр ҙә, көйөн көйләп булһа ла, уға ҡушылды. Ә инде, ғәжәп, ҡайҙандыр табып эшләнгән һәм көтмәгәндә ишетелеп ҡалған ҡурай тауышы йырға бөтөнләй икенсе төҫ биреп, барыһын илһамландырҙы ла ебәрҙе. Бер кемгә билдәһеҙ ябай башҡорт кешеһенең уйынлы-ысынлы башлап ебәргән йыры, ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә, ватандарына ҡайтып барыусыларҙың һәммәһенең күңелен яулап өлгөрҙө. Уны шул арала һүҙмә-һүҙ отоп алған Мөхәмәтша менән Лотфулла ла, илһамланып китеп, башҡалар ыңғайына йырлап барҙылар.

...Ошоғаса Сыбай ҡашҡа тураһында иҫкә алып, һүҙ ҡуҙғатыусы тойолмағас, Мөхәмәтшаның күңеле тыныс ине. Әммә ләкин, Омск ҡырына етеп туҡталыу менән: «Аттарҙы ошонда төшөрөп ҡалдыралар икән», – тигән хәбәр ишетелеп китеүгә, уның йөрәге жыу итте. Арҡаһы буйлап сымыры һалҡынлыҡ үтеп китте: айырылышыу сәғәте һуҡтымы икән ни шулай уҡ? Ҡайғыһы мәңгелек, ә бәхете бигерәк сонтор ғүмерле булды ла баһаң Мөхәмәтшаның. Уның ише бәхеттең, кәйеф ҡырып, булғанынан булмағаны мең артыҡ...

Уның борсолоуҙары юш сыҡты: исемлектә бөтөнләй булмаған Сыбай ҡашҡаға аҡ халатлы мал табибы шунда уҡ бәйләнергә тотондо. Мөхәмәтша менән Лотфулла әле килеп шуны белделәр: баҡһаң, һуғыш аттары ла, ҡәҙимге һалдаттар кеүек, хәрби иҫәптә тора икән! Уларҙың да яҡты донъяға пәйҙә булған сәғәтенән алып нисек үҫеүе, ниндәй сирҙәр кисергәне, дауаларҙың ниндәйен алғаны хаҡында ентекләп яҙылған ҡағыҙҙары бар, имеш. Һәр береһенең! Дөкәмиттең ундайы бер Сыбай ҡашҡала ғына булмай сыҡты. Булырға һуң, ул бит хәрби ат түгел, яуҙа ла ҡатнашмаған.

Дәрәжәһе билдәле булмаған мал табибы, асыуынан күҙҙәре атылып сыға яҙып, эшелон башлығын ҡыҙған табала бейетергә тотондо:

– Штабс-капитан! Прививкаһыҙ аттарҙы дөйөм табунға ҡушыу ярамай икәнлеген белмәйһегеҙме?! Ярамай ғына түгел, был ҡәтғи рәүештә тыйыла! Ишетәһегеҙме, ты-йы-ла! – Ул аяҡ тибеп екеренде.

– Так точно-с, штабс-офицер әфәнде, тыйыла. – Тегеһе ҡыҙарынып-бүртенде. Күренеп тора:  бының ише ауыр һүҙ ишетеп өйрәнмәгән.

– Ни эшләп ул сағында тәртипте һанға һанамайһығыҙ? Күрәләтә башбаштаҡлыҡ ҡылаһығыҙ? Ни сәбәптән ветеринар талаптарҙы үтәмәйһегеҙ?

– Ни бит... һеҙҙең ғали йәнәптәре... Хайуанды әйтәм, бигерәк шәп... – Эш боҙған малай ише торған штабс телгә килде, – күҙҙе ҡыҙҙыра... Ныҡ ҡыҙҙыра.

– Ә шул күҙҙе ҡыҙҙырған шәп ат илгә берәй үлемесле инфекция керетһә? Бәлки, дошман уны юрый тейәп ебәргәндер...

– Так-с, һап-һау бит ул.

– Һап-һау, имеш, ҡайҙан беләһегеҙ уны? Бына күрәһегеҙме, ошоноң һымаҡ асыҡ ауыҙ командирҙар арҡаһында беҙ һуғышты отторҙоҡ... – Мал табибы, янында торған һалдаттарға боролоп, йөпләү көттө.

Быныһы инде бигерәк. Ниндәйҙер бер фельдшер йөраты үтә осоноп китте түгелме? Һуғышсан офицерҙың намыҫына тейә башланы...

– Эй, һин, тыл крысаһы! Минең хәрби үткәндәргә ҡағылаһы булма, юғиһә... – Ул аҡ халатлыға ҡаты ғына иҫкәртеү яһаны. Тегеһе үҙенең артығыраҡты ысҡындырғанын һиҙҙе, буғай, йомшара төшөп, аҡланғандай итте:

– Ҡыҙып киттем шикелле. Хәрби үткәндәр, әлбиттә, изге эш. Шулай ҙа, штабс-капитан, һеҙҙе яҡшылыҡ менән иҫкәртеп ҡуйыуҙы кәрәкле һанайым.

– Иҫкәрт, ләкин кәмһетмә...

– Әлегә оло ғауға сығармай торам. Ә һеҙ, атығыҙ менән бергә, хәҙер үк юҡҡа сығырға тейеш. Йәғни, өлкәнерәк начальствоның күҙенә салынмауығыҙ хәйерле, тимәксемен. Улар һеҙҙең хәрби үткәнегеҙҙе тейешенсә баһалай белмәҫ, – был юлы фельдшерҙың һүҙҙәрендә эскерһеҙ хәстәрлек ишетелеп ҡалды. Ул шаяртмай ҙа, ҡурҡытырға ла теләмәй ине.

Хәлдең ошолай үтә етди боролош алғанын әле килеп тулы мәғәнәһендә төшөнә башлаған  Мөхәмәтшаның оторо эсе бошоп китте: мөғжизә Сыбай ҡашҡа уға яҙмағанмы икән ни шулай уҡ?  Ҡайтып етергә лә артыҡ күп ҡалмаған ине бит, йә инде. Исмаһам, Силәбе тирәһенә тиклем... Туҡта! Ә ни эшләп мотлаҡ Силәбе? Ошонда уҡ төшөп ҡалғанда...

Унын мейеһен ҡапыл телеп үткән ауан хыял-уй, әлбиттә, хәтәр ине. Хәтәр, әммә тормошҡа ашҡандай. Шуға күрә тәүәккәлләргә кәрәк.

Мөхәмәтша йәһәтләп кәрәкле ҡағыҙҙарын йүнләне лә, барыһына ҡул һелтәп, ҡашҡаһын етәкләгән көйө, йәйрәп ятҡан Иртыш йылғаһының һөҙәк ярында, урманлы тауҙар артына китеп юғалған эшелонды ҡарашы менән оҙатып торҙо ла ҡалды. Унан алда Лотфулла менән икәүһе араһында ошондай һөйләшеү булып алғайны:

– Юҡ менән булаһың, ағый, аҡылға һыйған эшме? – тине аптыраған Лотфулла.

– Аҡылға һыямы был эш, юҡмы, мин инде ҡәтғи ҡарарға килгәнмен. Кире уйлаш юҡ. Ҡайырып маташма ла, – булды ышаныслы яуап.

– Берәүҙән икәү яҡшы: ул сағында мин һинең менән....

– Бына быныһы, ҡустым, кәрәкмәй. Себер ерендә, иртәгәһен ни булырын да белмәйсә, япа-яңғыҙы көйө бер тинтәктең тороп ҡалғаны ла еткән.

Уларҙы уратып алған башҡа һалдаттарҙың да өгөт-нәсихәте менән ҡурҡытыуҙары Мөхәмәтшаға бер нисек тә тәьҫир итмәне. Бала сағынан ат тип йәнен фиҙа ҡылырға әҙер ир ниәтендә ныҡ торҙо.

– Мин бит, ағай-эне, хәҙер үҙ илемдә. Ә илдә, үҙегеҙ беләһегеҙ, сәпсек үлмәгән кеүек, ир ҙә хур булмай, – тип үҙенекен һөрҙө.

Терәпес башҡорттоң ошо ҡаһарманылыҡҡа тиң тәүәккәллегенә хайран ҡалған аҡ халатлы штабс-офицер, ярылып торған хөрмәт йөҙөнән, Сыбай ҡашҡаның Мөхәмәтша һалдаттыҡы икәнлеген раҫлаусы танытма йораты яҙып тотторҙо. Әлдә шуға аҡылы еткән. Ҡуш башлы бөркөт төшөрөлгән түңәрәк мисәтле шул ҡағыҙ осмото яҡын киләсәктә йән атҡан атынан ҡолаҡ ҡағыуҙан да, башҡа әллә күпме бәләнән дә йолоп ҡаласаҡ әле...

***

Йөйөн-йөйгә тура килтереп һалынған, меңәрләгән табан аҫтында иҙгесләнеүҙән таштары шымарып бөткән буш перронда тегеләй-былай ҡарана биреп бер урында тапанған Мөхәмәтша оҙаҡ ҡына торҙо. Эшелондан төшөрөп ҡалдырған аттарҙы, деһерләтеп, өйөрө менән ҡайҙалыр ҡыуалап алып киттеләр. Сыбай ҡашҡа уларҙы күкрәк төбө менән кешнәп оҙатты. Кешнәүе ифрат моңһоу ине. Мөхәмәтшаның хатта күңеле тулыша биреп ҡуйҙы.

Киләсәге – михнәтле лә, рәхәтле лә көндәре ошо әҙәми затҡа бәйле икәнлеген күҙалланымы икән Сыбай ҡашҡа, үҙенең хайуан аҡылы менән? Күҙаллағандыр: «Беҙ: – һин һәм мин – хәҙер бер тәртә араһында, хужам, был яғына мин һинең ихтыярҙа», – тигән кеүек мөлдөрәп ҡараны ла ҡаҡса яңағын күндәм генә унын яуырынына терәне. «Бына булды,– тегеһе иркен һуланы, – артабан һиңә ышанырға була, малҡай. Аттың бындайы бер ваҡытта ла һынатмаҫ, ташлап та ҡасмаҫ». Башҡорт ире ат хәлен аңламай буламы! Мөхәмәтша, биштәрен асып, ҡашҡаға вагондаштары үҙ ауыҙҙарынан өҙөп биргән ҡара икмәк киҫәге менән шәкәр остоғо ҡаптырҙы. Эт күңеле бер һөйәк: кеше һәм ат, шул рәүешле килешеп, аҙмыштарын бәйләне.

Ҡайһы яҡҡа китергә? Ул, икеләнеп, юл сатында тора. Бая берәйһенән һорашып ҡалырға ла зиһене етмәгән. Анауы ҡаңғырыҡта ни. Бигерәк йөрәкһеп киткәйне шул. Хәйер, нимәһенә аптырарға, саҡ ҡына үҙеңдең башты эшләтеү кәрәк. Юҡҡамы ни атаһы уға, малай сағынан уҡ, көндөҙөн ҡояшҡа, аяҙ төндәрен йондоҙҙарға ҡарап барыр юлыңды самаларға була икәнлеген уңайы сыҡҡан һайын тәфсирләп өйрәтә килде. Урманда иҫ итмәҫтән аҙашып китәһең икән, аяҡ аҫтындағы ҡырмыҫҡа иләүенә йә иһә ағасҡа йәбешеп үҫкән мүккә, һис юғында

ботаҡтарға ҡарап кәрәкле юҫыҡты тоҫмалларға мөмкин. Ана бит, атай кешенең ҡасанғы биргән аҡыллы һабаҡтарының әле килеп, уйламағанда, кәрәге тейергә тора түгелме? Әйтерһең дә, бала йәнле үә хәстәрле ата улының бер килеп ошо хәлгә тарырын алдан күреп-белә алған. Хәйер, уның нимәһенә аптырарға.

*Ҡайҙа ла ғына бармай, ниҙәр күрмәй*
*Ир-егеткәй менән ат башы, –*

тип тиккә генә йырланмайҙыр. Тормош бит ул. 
Былдайы үҙен ир-егеткә һанаған һәр кемдең башынан үтеүе бар.

Ул мәлдәге улы хәҙер инде үҙе олатай булыр йәшкә етеүгә ҡарамаҫтан, атай кәңәше, атай һабағы бөгөн бик тә ярап ҡалмаҡсы. Эшләгәнең – иленә, өйрәнгәнең – үҙеңә, тип ҡалай ҙа дөрөҫ әйткән булған, ә! Әлеге һүҙҙәрҙе ул әйләнгән һайын, яйы сыҡҡан һайын ҡабатлар ине. Атайынан йүнле берәй нәмәгә өйрәнеп ҡала алдымы икән Мөхәмәтша?..

Таушалған шинелен иңенә һалып, ат етәкләгән һалдат юл ситендә аунап ятҡан тумрауға барып ултырҙы ла уйға ҡалды.

Тимәк былай: Манчжурия ере Урал тауҙарына ҡарата көндөң сығышында ята. Унда барғанда ҡояш гелән уң ҡулда торҙо. Хәҙер, тимәк, киреһенсә булырға тейешле. Әйткәндәй, Мөхәмәтша һуғышҡа киткәндә ҡара көҙ мәле ине, бөгөн яҙ ахыры етеп, йәй башы яҡынлаша. Был тәңгәлдә уйламаҫтан яңылышып ҡуйыуың да ихтимал. Хәйер, яңылышты төҙәтергә була. Ә төндәрен? Төнгө юлға ҡалырға насип итһә, шимал йүнәлешен күрһәтеп тороусы Тимерҡаҙыҡ йондоҙо бар. Тимерҡаҙыҡ – ул бөтә ғаләмдең кендеге, тиер ине атаһы мәрхүм. Кендек булғас, һәр саҡ бер урында, уны таный белһәң, яңылышмаҫһың. Шулай ҙа барлыҡ йондоҙҙарҙы ҡаплап киткән болотло төндәрҙә нисек булыр? Йә ярай, уныһын мөҙҙәте килгәндә хәл итер. Ундайын алдан юрамай тороуың хәйерле. Ә хәҙер анауы килгән затлы көймәләге кешеләрҙән һораштырып, юлдың ҡайҙа барғанлығын белеп алғанда...

– Һаумыһығыҙ, уҙамандар! Әйтә алмаҫһығыҙмы, был юл ҡайһы тарафтарға йә иһә ниндәй ауыл-фәләнгә илтә икән?

Ошондайын да кеселекле мөғәмәләнән иреп киткән хөштөмһөҙ әҙәм семәрле көймәһенән төштө лә ҡалын быялалы күҙлеге аша бер Мөхәмәшаға, бер Сыбай ҡашҡаға алмаш-тилмәш ҡарап торҙо. Күндерелгән сәләмде лә, бирелгән һорауҙы ла ишетмәгән шикелле:

– Нимә, ат һатыламы әллә, господин һалдат? – тип сәйер бәләкәс күҙҙәре менән уларҙың һәр ҡайһыһын бырауланы. – Айғыр шәп, ей богу!

– Юҡ, һатылмай.

– Белгең килһә, мин ат заводы хужаһы. Урынына икәүҙе бирәм.

– Һатылмай ҙа, алмашылмай ҙа...

– Өсәүҙе!

– Кәрәкмәй. Миңә юлды ғына өйрәтһәгеҙ...

– Тағы аҡса өҫтәйем. Алтындан йөҙ һум!

– Һеҙ нимә, әйткәнде аңламайһығыҙмы әллә?

– Аңлайым. Бик яҡшы аңлайым. Тик шуны бел, һалдат: аттың былдайы һинең ҡулда бары әрәм генә буласаҡ. Ә минең заводта ул илгә файҙа килтерер. Күп файҙа.

– Әйтеп торам бит, һатмайым, тип. Хатта бер йөк алтынға ла. – Асыуы ҡабара башлаған Мөхәмәтша, ҡулын һелтәп, һере ҡолаҡ янынан тиҙерәк китергә ашыҡты: мунса япрағы ише йәбеште бит!

Әммә тегеһе, уны шулай тиҙ генә ҡулдан ысҡындырырға теләмәйенсә,

артынан эйәрә килде. Ҡала яғынан күренгән ике һыбайлы полицайҙы шәйләп, ул туҡтала бирҙе лә уйға батты. Бер аҙҙан инде ат урлауҙа шикле һаналған Мөхәмәтшаны, ай-вайына ҡарамай, участокка алып киттеләр.

Эштең формаль өлөшөн башҡарғандан аҙаҡ, йәғни ул-был ҡағыҙҙарҙы тултырып, кәрәкле лә-кәрәкмәгән дә ҡултамғаларҙы алып бөткәс, баш түрә – эйәге ҡатланып торған ғәләмәт оло ҡорһаҡлы эшем эйәһе Мөхәмәтшаны үҙ янына, аулаҡҡа, саҡыртып индерҙе. Ҡашҡаһын һарайға индереп яптылар.

– Атты ҡайҙан алдың? – Түрә, ныҡ тирләгән ҡып-ҡыҙыл йөҙөн ашъяулыҡ дәүмәллек ҡулъяулыҡ менән һөртә-һөртә, тәүге һорауын бирҙе. Аҙағынан киҫәтеп ҡуйырға ла онотманы: – Дөрөҫөн әйт. Алдашһаң, үҙеңә зыян ғына яһайһың.

– Бүләк иттеләр, господин.

– Кем, сер булмаһа?

– Ҡытайҙар.

Ҡыҙыл урыҫ, ҡорт саҡҡан кеше һымаҡ, урынына һикереп торҙо. Шул ыңғайға, ҡорһағына эләктереп, өҫтәлде ауҙара яҙҙы. Өҫтәл өҫтөндәге графин иҙәнгә төшөп ыуалды. Оторо енләнеп киткән түрә:

– Бына нимә, мужик! Һинең менән уйын уйнап ултырырға минең ваҡытым юҡ! – тип өҫтәл һуҡты. – Үҙеңде тота белмәһәң, хәҙер ҡулға алырға бойорам!

– Ә мин уйнарға йыйынмайым, теләгем дә юҡ. – Һарыуы ҡайнай башлаған Мөхәмәтша тыныс булырға тырышты. – Бына ҡағыҙы.

Ҡаушай төшкән түрә ҡағыҙҙы ҡулына алды.

Ошонан аҙаҡ Мөхәмәтшаны оҙаҡ тотманылар. Һөмһөрө ҡойолған завод хужаһы уны аҫтыртын көнсөллөк ҡатыш екһенеү менән оҙатып ҡалды.

– Яҡшылыҡ менән бирмәһәң, башҡа юлын табырбыҙ... – тип, уртын сәйнәй-сәйнәй, үҙ алдына һөйләнгәндәй итте ул. Хужаны үҙенсә аңлаған бер ҡатлы Мөхәмәтша уға ҡул болғаны:

– Сәләм, приятель! Ауырға алма, ат үҙемә кәрәк.

– Да пшёл ты, подлый азият! – Тегеһе асыу менән төкөрҙө лә, ҡырҡа боролоп, үҙ юлына китте.

***

Ҡаланы сығыуы зиһенле Мөхәмәтша өсөн ҙур ҡыйынлыҡ тыуҙырманы. Ҡала тимәһәң, хәтере ҡалыр. Уның урта тирәһендә генә, һерәйеп, өс-дүрт ҡатлы бер нисә таш йорт күренә. Ҡалған яғында ҡайһыһы, янтайып бөткән, ҡайһыһы, оҙаҡ тороуҙан ярым сереккә әйләнгән, бәғзе берҙәре транса менән ябылған, ә байтағы бөтөнләй ҡыйыҡһыҙ, түшәм өҫтөнән йә тупраҡ, йә балсыҡ түшәлгән бер ҡатлы ағас өйҙәр. Эреле-ваҡлы өйҙәрҙең күпселегә уҫаҡтан. Быларҙы күргән Мөхәмәтша: «Эй йәшәйбеҙ ҙә инде, – тип эстән генә әсенде, – ҡарағайҙың кандауайы өҫтөбөҙгә ауып тора, ә беҙ өйҙө ауһаҡтан һалабыҙ».

Йорт-ҡуралар тирәләп кәкре шыйҙаларҙан арлы-бирле ике-өс рәт кәртә тотолған. Былары, күрәһең, баҡса өсөн. Бәлки, урыҫтың кәртүк тигәнен дә сәсәләрҙер әле. Сәсәләр шул. Ана, баҡсаларҙың ҡай берҙәрендә тәпке тотоп, уны тәрбиәләүселәр күренеп ҡала. Зауыҡһыҙ кәртәләр уртаһында туҙғыған аҙау бесән ҡалдыҡтары менән йүнләп өйөлмәгән тиреҫ тауҙары яҡын-тирәне йәмһеҙләп ята. Урам буйлашып унда-бында ҡорсаңғы быҙауҙар сәскәкләшеп үтә, сүплектә тибенгән тауыҡтар осрай. Бер ситтәрәк ялтырап ятҡан болғансыҡ һыулы быуа ишаратында ҡаҙ-өйрәктәр мәж килә. Ҡош-ҡортҡа ҡытлыҡ кисермәйҙәр икән былай...

Яҙа-йоҙа әтмәләп үтә атма ел ҡапҡалар алдына ҡуйылған эскәмйәләрҙә ҡарт-ҡоро йыйналып гәп һата. Улар, ҡаужып бөткән ҡул суҡтарын ҡаштары өҫтөнә

ҡуйып, сәйер ат етәкләгән мосафирҙы күрер-күрмәҫ ҡараштары менән оҙата ҡалалар. Ҡыҫҡаһы, Мөхәмәтшаның алдында ҙур ауыл йәйрәп ята. Шул ауылды тар тыҡрыҡтарҙа осраған кешеләрҙән һораша-белешә ыңғай ғына үтеп, еләҫ һауалы шыршы ҡатыш ҡарағай урманына барып ингән юлсы еңел һуланы. Шарлы урман буйлап барыуы уға ҡаланы үтеүгә ҡарағанда күпкә еңелерәк ине. Бар ғүмере урман эсендә үткәс ни...

Уҡ ише төҙ, ғәжәп һырғый ағастар араһына инеп юғалған шөйлә генә йомро юлға төшөүгә , ул атына менеп алды. «Әғүҙе бисмилла»һын әйтеп менде. Тәүге тапҡыр бит. Сыбай ҡашҡа ризаһыҙлыҡ күрһәтеп маташманы. Уйламаны ла. Тимәк, менгегә өйрәтелгән. Уның арҡаһы ашлыҡ тултырылған киндер тоҡ һымаҡ йоп-йомро һәм йоп-йомшаҡ. Эйәреңдең дә кәрәге юҡ.

Сыбай ҡашҡаның атлауы ҡатыраҡ булһа ла, уның ҡарауы, аҙымдары ырамлы ине. Ат башына менеүҙән малай, үҫмер саҡтары иҫенә төшөп ҡанатланған Мөхәмәтша күкрәк ярып килгән хистәренә юл ҡуймайса булдыра алманы. Башкөллө илһам тулҡынына сумған ир, үҙе лә аңғармаҫтан, урман яңғыратып йырланы ла ебәрҙе:

*Сыбай ҙа ғына ҡашҡа, баҫма ташҡа*
*Юлһыҙ ғына ерҙән дә үткәндә.*
*Был донъяла ауыр яңғыҙ башҡа,*
*Дуҫ-иш кәрәк донъя көткәндә.*

*Сыбай ҙа ғына ҡашҡа ҡырас ялын*
*Тауҙан ғына иҫкән ел тарай.*
*Алыҫ ергә китһәк, Сыбай ҡашҡам*
*Башҡынайын бороп бер ҡарай.*

Ана бит, онотолмаған икән башҡорт көйө! Әллә тыуған төйәгенә ҡайтып барыу шатлығынан, әллә бәгерен бөрөп алған һағыштан Мөхәмәтшаның күңеле тулышып китте. Үҙ йырынан үҙе илаһи хис-тойғолар ихтыярына бағына башлаған һыбайлы, һис кемдән тартынып тормайынса, күҙ йәштәренә ирек бирҙе. Ирмен тигән ирҙәргә ебеп тороу – килешмәгән ғәмәл, тиһәләр ҙә, ошо хайран ҡалырлыҡ ҡара урманда, һис кем күрмәгәндә, һәр төрлө кисерештәрҙән ҡатып бөткән күңелде аҙ ғына бушатып алыуҙың бер ғәйебе лә юҡтыр.

Моңдо моң әйҙәй. Бер илһамланған рух тиҙ генә тыныслана буламы? Мөхәмәтша йырҙың береһен ослап, икенсеһен башланы:

*Алыҫтарҙан, ай, күренгән*
*Ирәндеккәй тауҙын аҡ ташы.*
*Ҡайҙа бармай, ниҙәр күрмәй*
*Ир-егеткәй менән ат башы.*

Ниндәй хаҡ һүҙҙәр, ә! Ысыны шул да баһаң. Аҙмыш тигәндәре ир-егет менән ат башын ҡайҙарға ғына олаҡтырмай ҙа уларға мәғшиәттең нимәләрен генә күрһәтмәй?! Ауырлыҡтарҙың күтәрә алмаҫын, ҡыйынлыҡтарҙың иң ҡыйынын, башҡа михнәттәрен дә еңеп сығыр өсөн күпме ғәйрәт, ихтыяр көсө һәм рух ныҡлығы кәрәк. Быны ошоларҙың һәммәһен үҙ иңендә татып, үҙ башынан үткәргән генә белә. Бары ул ғына! Мөхәмәтша ана шундайҙарҙың береһе. Нужа тигән мөҙәррис уны күп нәмәгә өйрәтте. Шул иҫәптән – һүҙеңдә тора белергә лә. Ауыҙыңдан бер ысҡынған икән, мороноң тотош ҡан булһа ла, әйткәнеңдә ныҡ тор. Алдыңа ниндәйҙер маҡсат ҡуйғанһың, тимәк, уға ирешмәйсә туҡтап ҡалма. Һүҙеңде тота белмәйһең икән, ышандырып та торма. Морат-маҡсатыңа етә алмаҫтай булһаң, үҙ-үҙеңде лә, башҡаларҙы ла алдап маташма: оятҡа ғына ҡалырһың.

Мөхәмәтша үҙенсә шул әйткәнендә нык торор, башлағанын осламайса туктал-маҫ намыҫсан да, нығыш та башҡорт уҙамандарының береһе. Шулай булмаған-да, ер аяғы ер башы ерҙән, үлә-бата, ат алып ҡайтып килер инеме?..

*Ир-азаматы менгән аттың*
*Бәкәлдәре уның аҡ булыр.*
*Аҫыл егет ҡайҙа йөрөһә лә,*
*Ҡылъан эше уның хаҡ булыр.*

Мөхәмәтшаның да ҡылғаны хаҡ буласаҡ. Ул бит үҙе өсөн генә тырышып ятмай. Ошо мәлдә уға бөтә ауыл халҡы, юҡ, барлыҡ башҡорт ере ҡарап тора кеүек.

Киҫкен тойғоларға бирелеп киткән һыбайлы, ҡабырғаларын төйгөсләй-төйгөсләй, атын ҡабаландырҙы. Башта юрттырып китте, унан сабып та ҡараны. Ауыр кәүҙәлемен, тип тормай Сыбай ҡашҡа, барыһын да булдыра, барыһына ла шәп. Һай, мәрҙәс, малҡай!

Күпмелер үткәс, тыныслана төшкән Мөхәмәтша ярһып киткән атын тыя бирҙе, үндек өҫтөндә сайҡала-сайҡала, ойоп ҡына бара башланы. Үтәһе юлды иҫәпкә алғанда, артығын өтәләнеү килешмәҫ. Әкрен барһаң, йырағыраҡ китерһең, ти бит урыҫ туған, белмәй әйтмәйҙер әле...

Теге көн Омск стансаһында, эшелон ҡуҙғалып киткәс тә, Лотфулла: «Ағый, мә, был миңә ҡарағанда һиңә нығыраҡ кәрәк булыр. Беҙҙе бында хөкөмәт һыйынан өҙмәҫтәр, моғайын», – тип ҡытай тарыһы һалынған тоҡто ырғытҡан ине. Әле Мөхәмәтшаның шуны семтем-семтем генә итеп сәйнәп барған көнө. Кипкән борсаҡ ише ҡаты, шулай ҙа тәмле. Юҡтың көнөнән бара.

Туңы ҡайтырға өлгөрмәгән Себер еренә аяҡ баҫыуҙарына өс көн тигәндә, Мөхәмәтша менән Сыбай ҡашҡаға һәр төрлө һынауҙарын Тәңре үҙе ебәрә башланы һымаҡ. Хәйерһеҙ көндәрҙең береһендә уларға көноҙон бер кем дә, бер ауыл да осраманы. Кемделер тап итеп, әҙәм рәүешле ҡыйыҡ аҫтында төн үткәреүҙән тамам өмөтөн өҙгән Мөхәмәтша эңер төшөп, күҙ бәйләнә башлаған мәлдә иҫке ҡыуыш эсенә инеп ауырға мәжбүр булды. Теләйһеңме-теләмәйһеңме, төндө ҡалтырана-ҡалтырана ошонда үткәрергә тура килер. Башҡаса төнәк эҙләп йөрөр әмәле лә, хәле лә юҡ.

Ярай, аҙға ни ҡуян тиреһе лә түҙгән, бер төнгә нисек тә түҙермен әле, тип үҙен-үҙе тынысландырырға тырышҡан Мөхәмәтша, һирәк-һаяҡ осраштырған ҡайындарҙың береһенән ботаҡ һындырып, үткән йылғы ҡаҫтағы тишек-тошоҡ ҡыуыштың өҫтөнә япты. Йәйге көндө кем белә, ямғыр яуып ебәреүе бар. Аҫтына түшәкте лә ул ҡалын ғына итеп ҡайын миндегенән йәйҙе. Аҡлан уртаһындағы яңғыҙ сауҡаға сылбырлап ҡуйылған Сыбай ҡашҡа шунда уҡ һәрмәнеп ашанырға кереште.

Аты кертелдәтеп үлән сәйнәгән һайын, хужаһының буш ҡорһағы үҙен нығыраҡ һиҙҙерә бара: эсендә ас бүреләр олошамы ни. Юҡ, былай булмай. Ошо хәтлем үлән араһында, моғайын, ашарға яраҡлыһы юҡ түгелдер. Тик уларын танып белергә генә кәрәк. Ә белемдең ундай ғынаһы беҙҙә ваҡытында, артығы менән ине.

Мөхәмәтша инде йылына башлаған урынынан көскә һурылып тышҡа сыҡты ла шыйыҡ үләнле аҡлан ашаһында күренгән ҡыуаҡлыҡтар яғына атланы. Бына быныһы айыу ҡурайы, быныһы... андыҙ түгелме?! Шул! Хас та үҙебеҙҙәге – Һаҡмар буйындағы кеүек! Ана, хуш еҫле ерке үләне ҡаплап алған тумарлыҡ. Урындың ундайында әҙәми зат ризығына яраҡлы үҫемлек үҫмәй торған. Арыраҡ, урман ситендә яҡтырып күренгән асыҡтан эҙләп ҡарарға кәрәк.

Ҡатнаш ағаслыҡ ҡырына килеп сыҡҡан Мөхәмәтша, күҙ ҡырына таныш һабаҡ салынып ҡалыуҙан, аҙымдарын әкренәйтә төштө. Уның алдында, өйкөм генә йәтеш ҡыуаҡ булып, әтлек үләне үҫеп ултыра ине. Бына ул элек-электән, ҡот осҡос йотлоҡ йылдарында бихисап кешене ас үлемдән йолоп ҡалыр булған изге үҫемлек! Уның әлегә үҙе йомшаҡ-татлы, үҙе һутлы һабағы ғына түгел, тарбаҡланып үҫкән тос тамыры ла ашауға яраҡлы. Бәй, был яҡтарҙа, хатта, һарынаһы ла бар икән! Ана, әйтте бит, эҙләһәң табыла, тип. Былай булғас, Мөхәмәтша үлгәндә лә ас үлем менән үлмәйәсәк.

– Бисмилләһир-рахмәнир-рахи-им. Ризыҡтың яңыһы иҫке ауыҙға бәрәкәт булып керһен, амин. – Киртләс-оҙонса япраҡтарын һыпырып, ул нәфис-мурт үләнде айырым бер ләззәт менән сәйнәп йоторға кереште. Бына бит ҡәҙимге әтлек, үҙебеҙҙең Урал буйындағы кеүек.

Бер аҙ танһығын ҡандырғас, көпшәле һабаҡтарҙы ҡосағына йыя-йыя, ары атланы. Бара биргәс, кәрешкәһе сырмалып ятҡан оҙон күрәнлекте йырып үткән һуҡмаҡҡа тәл булды. «Айыу һуҡмағы! – тигән уй үтте башынан. Һағая төшөп, үҙ ихтыярынан тыш, ян-яғына ҡарана ҡуйҙы. – Хәйер, оҡшамаған да һымаҡ. Айыу булғанда, кәрәккән-кәрәкмәгәнгә һуҡмаҡтың ҡыртышын әйләндереп бөтөрөр ине, ә был тапалған ғына. Йоморайтҡансы».

Шулай ҙа абайлыҡ тигәнде онотмаған Мөхәмәтша йомшаҡ аҙымдар менән һаҡ ҡына баҫып һуҡмаҡ буйлап китте. Барған һайын ныҒыраҡ тапалып таҡырланған һуҡмаҡ уны бер аҙҙан таллыҡ эсенән күңелле йырлап аҡҡан шишмә янына килтереп сығарҙы. Селтер шишмә арьяғында кеше ҡулы менән йығылған ағастар, улары араһында ботаҡ өйөмдәре күренә. Бәй, бында бит кемдәрҙер ҡышҡылыҡ утын әҙерләп ята. Мөхәмәтша, күрәһең, уларға саҡ ҡына өлгөрмәй ҡалған. Муйыл ҡыуағы аҫтындағы усаҡ урынында быҫҡып ятҡан күмерле торонбаштар тап шул хаҡта һөйләй. Иртәнге көнгә типтер инде, урмансылар һалҡын һыу эсенә ярты шешә һөт менән бер нисә ҡабым һары май ултыртып ҡайтҡан. Артып ҡалған ризыҡтары булырға тейеш: Мөхәмәтша уларға үрелде.

– Һорауһыҙ ҡағылғаным өсөн ғәйеп итмәгеҙ, эй, ошо тәғәм эйәһе Хоҙай бәндәләре! Урлап алмайым, бары сараһыҙҙан ғына... – Ул тешкә үтерлек һалҡын һөттө ғолҡолдатып йотҡандан һуң, майҙы ла ҡабып ҡуйҙы һәм: – Һый-хөрмәтегеҙгә рәхмәт, – тип бата ҡылды.

Ошо яҙа-йоҙа ике-өс йотом аҙыҡ үҙәген өҙөп барған аслығын алдаштырып, нәфсеһен баҫҡандай итте. Ҡәҙерләп түш кеҫәһендә генә йөрөткән бер нисә бөртөк шырпыһы бар, сәйен дә ҡайнатып эсергә булыр ине, әммә, күпме тыҡшынып эҙләһә лә, башҡа һауыт-һабаны таба алманы. Шулай ҙа төнгөлөккә еткәндәй ҡоро-һары йыйып, ҡыуыш янына ут тоҡандырырға ҡарар итте. Эргәндә ялпылдап әшәк янған сағында нисектер күңеллерәк тә, йылы ла булһа, һәр төрлө хәүеф-хәтәре урап үтә кеүек бит ул.

Ятыр алдынан атына йәнә күҙ һалды. Уныһы, һыртына сыҡҡансы уҡ булмаһа ла, буйтым туйынған да юшап тора. Сарт-сорт янған утҡа ҡарап байтаҡ ултырғандан һуң, йыуан ғыналарын һайлап, ярым серек ҡайын олондарын өҫтәне. Бурһыған олондар таңға ҡәҙәре һүнмәй быҫҡырға тейеш. Ни тиһәң дә, ул бөтөнләйгә ят урман эсендә, алда нимә көткәнен ҡайҙан беләһең. Янында ялпылдап янған ут барында барыбер күңелгә тынысыраҡ. Ошолай уйлап әллә яманға юраны ла ҡуйҙы инде...

Мөхәмәтша йоҡо аралаш ишетелгән аңлайышһыҙ ығы-зығыға һиҫкәнеп уянды. Уянды ла әүәл, әллә баҫлығып аҙапланам инде, тип ҡуҙғалыр-ҡуҙғалмаҫ ятты. Шишмәне ҡаплап үҫкән шырлыҡ яғынан шатыр-шотор килеп ҡыу ағас һынған тауыш ишетелде. Ҡапылғара аптырап ҡалған ир, ни булып ятҡанлығын

аңларға тырышып, тауыш килгән яҡҡа төбәлде. Ләкин күҙгә төртһәң күренмәҫ йәйге ҡараңғылыҡта бер нәмә шәйләрлек түгел. Бары кемдеңдер, шырлыҡҡа һыймай енләнеп, тегеләй-былай йөрөгәнен төҫмөрләргә була. Бына, яман гөрһөлдәп, серек киҫкә ауҙы, артынса уҡ көрһөнөүгә тартым ауыр уһылдау ҡолаҡҡа салынды. «Айыу! – асылына ҡайтҡан Мөхәмәтшаның башына тәү килгән уй ошо булды. – Хәҙер генә атты өркөтә икән, ҡәһәрең! Ҡайҙан тәл булды, ауыртмаған башҡа тимер таяҡ?» Ул, табаны аҫтындағы ерҙе лә тоймай, йәһәтләп Сыбай ҡашҡаһы янына ашыҡты. Ғәжәп, уныһы ыжлап та бирмәй, йоҡомһораған көйө тик тора! Тиреһенә һыймағандай ер аҡтарып ҡыланған ғәйрәтле йыртҡысың уға бар ни ҙә юҡ ни. Шунда ла ниткән хайуан булып сыҡты һуң был? Айыу һынлы януарҙы ла һанға һанамаҫ ат булыр икән. Үҙ күҙҙәре менән күрмәһә, кеше әйткәнгә һис ышанмаҫ ине...

Мөхәмәтша иҫ китмәле тыныс атын ҡыуыш янына килтереп арҡанлай һалды ла, ашығыуҙан әләгә-йығыла йөрөп, һүрелә барған усаҡҡа ҡоро утын өҫтәне. Көтмәгән ерҙән көсәйеп китеп, ян-яҡты ҡапыл яҡтыртып ебәргән ялҡындан көҙөкләнепме,  айыу бер аҙ ваҡытҡа шымып ҡалғандай булды. Ләкин оҙаҡҡа түгел. Ошонан аҙаҡ ул, оторо ажарланып, таң беленә башлағансы, урманға һыймағандай, енен сәсә-сәсә ҡыуыш тирәһендә әйләнде. Күрәһең, уңышһыҙ мосафир уның төйәгенә саманан артыҡ яҡын килгән йә ауға сығыр һуҡмағына аяҡ баҫҡан. Ана шуға ризаһыҙлыҡ белдереп йөрөгән көнө. Әле килеп, хужаһы менән ҡуша атын да ботарлап ташлар ине, ялҡындан шөрләй, ялбырап яткан утҡа яҡын килергә баҙнат итмәй. Хатта төтөн еҫе лә ныҡ ҡурҡыта уны. Ҡыҫҡаһы, Мөхәмәтша, атынан айырмалы рәүештә, ифрат тыныcһыҙ төн үткәрҙе. Шунлыҡтан ул, аяҡ аҫты һил булыу менән, иртәнге ысыҡты кисеп, был тирәнән тиҙерәк китергә ашыҡты.

Төшкөлөккә яҡынлашҡан ҡояш аяу белмәй ҡыҙҙыра башлаған мәлдә Мөхәмәтша, уйламаҫтан, көрәк һаҡаллы дәү урыҫҡа тап булды. Уныһы, үҙенә яҡынлашҡан юлсыны шәйләмәй, ең һыҙғанып ағас тумырыу менән мәшғүл ине. Аҡ күлдәге тирләгән арҡаһына йәбешеп, аяғына сырмалған сабатаһы һыпырыла төшкән.

– Һау ғынамы, земляк! – Атынан төшөп, урыҫҡа ҡаршы атлаған Мөхәмәтша күрешергә тип ҡулын һондо. – Тәңре ҡеүәт бирһен үҙеңә.

– Зз... зздравствуй,.. м-мужик... – Көтмәгәндә, ер аҫтынан килеп сыҡҡан һымаҡ пәйҙә булған ят кешене күреүҙән, тегеһе башта ҡурҡып китте, унан асыҡ зәңгәр күҙҙәрен Мөхәмәтшаға төбәгән килеш ҡулын биреп, этенеп-төртөндө: – Р-рәхмәт. Ҡ...ҡайҙан былай? Йәғни ниндәй елдәр ташланы?

Уның ныҡ ҡаушағаны ағарынған йөҙөнә бәреп сыҡҡан ине.

– Бына, һуғыш елдәре ташланы. Һуғыштан ҡайтып киләм. – Мөхәмәтша, аҡ тештәрен йылҡылдатып, алсаҡ йылмайҙы.

– Ниндәй һуғыш ул? Ҡайҙа, кем менән? – Урыҫ, ысынлап, үткән яу хаҡында хәбәрҙар түгел, ахыры.

– Япон менән.  Әллә белмәйһең дә? – тине Мөхәмәша уйынлы-ысынлы, – арт һабағын уҡытырға инек тә, киреһенсә килеп сыҡты: ул беҙгә онотолмаҫ һабаҡ бирҙе. Бына шулай.

Ышанырғамы, юҡмы быға, тигән һымаҡ торған урмансы әкренләп иҫенә килә башланы, буғай, төпсөрләп һорашырға тотондо:

– Әле юлың ҡайһы тарафтарға?

– Башҡортостанға. – Мөхәмәтша был һүҙҙе айырым ғорурлыҡ менән әйтте. – Ишеткәнең бармы шундай ил хаҡында?

– Юҡсы. Ә ҡайһы тирәлә ул?

– Уралтау тигән мөғжизә урынды беләһеңме?
– Уныһын ишеткәнем бар.
– Ана шунда ята инде башҡорт иле.
Ете ят икәү ошо рәүешле байтаҡ ҡына һөйләшеп торғандан һуң ғына, баштары етеп, танышып алдылар. Урыҫтың исеме Митрофан икән. Ул, күптәнән күрмәгән ҡәҙерле ҡунағын ҡаршылағандай, өтөлөп йөрөп сәй йүнләргә керешә. Сәйнүге ҡайнап сыҡҡансы, булған ғына дәүләтен сығарып ашъяулыҡҡа теҙҙе. Ә дәүләте уның дөм-ҡара ярты икмәктән дә бер нисә бөртөк йомортҡа менән ҡаҡланған сусҡа майынан ғибрәт ине.
– Күреп торам, Мухаметка, ныҡ йонсоғанһың, давай, булмаһа, икәүләшеп сәй эсеп алайыҡ, – тип ихлас күңелдән әҙер табынға әйҙәне, – икәүләп эскән сәй тәмлерәк була ул. Юғиһә, гелән яңғыҙым да яңғыҙым. Тамам ялҡытты.
– Дауай! Мин ҡаршы түгел.
Мөхәмәтша Митрофандың хуш еҫе аңҡып торған «кипрәй» сәйен эсеп туя алмай бер булды. Шул ҡәҙәре лә танһыҡлар икән. Хатта үҙе уңайһыҙланып китте. Ә тегеһе, уның хәлен һиҙгән кеүек, ҡыҫтауын белде:
– Йә, тартынып ултырма, мосафир, барына етеш. Бына салонан ауыҙ ит. Белгең килһә, арыған кешегә сало көс бирә...
– Биғәйбә, ызнакум, беҙҙең ҡәүем өсөн сусҡа майы тыйылған тәғәм. Мин лутсы икмәккә ҡушып сәй эсәйем.
– Тимәк Салаватка тоҡомо инде? – тип ҡыҙыҡһынды ҡунағына ғәжәпһенә биреп ҡарап ултырған Митрофан көтмәгәндә.
– Эйе, Салауат тоҡомонан беҙ. – Сәй шөрпөлдәтеүенән туҡтаған Мөхәмәтша ҡалҡына бирҙе. – Уның тураһында беләһеңме ни?
– Белмәй һуң! Беҙҙең Емельканың уң ҡулы булған бит ул.
– Дә-ә, алпауыттарҙың ҡотон алғандар заманында.
– Ә атың һәләк шәп күренә. – Митрофан диләнкә ситендә үлән ялмаған Сыбай ҡашҡа яғына эйәк атты. – Мәйтәм, башҡорттарҙа әллә гелән шундайҙармы?
– Юҡ, был башҡорт аты түгел. Быныһын миңә ҡытай кешеһе бүләк итеп бирҙе.
– Һәм... һин уны Ҡытайҙың үҙенән алып ҡайтып киләһең?! – Урыҫтың күҙҙәре шар булды. – Бар бит, әй, ауан әҙәмдәр!
– Белмәйем, ауанлыҡмы был, әллә алйотлоҡмо?..
– Салаватканы ла, хәтәр ауан булған, тиҙәр. – Митрофан хистәргә бирелде.
– Ауан булмағанда аҙымдың анауындайына бара ла алмаҫ ине.
– Әллә барығыҙ ҙа шулай?
– Ауанлыҡ үә тәүәккәллек тигәнең артығы менән инде ул башҡортта. – Асыҡ йән мосафир ярылып торған ғорурлыҡ менән ҡупая бирҙе. – Шулай ҙа аҡыл хаҡында ла онотоп китмәйбеҙ...
Рәхмәт әйтеп, ашъяулыҡ артынан ҡалҡынған Мөхәмәтша тумрауға сабылған балтаға тотондо. Уның ҡолас ташлап һелтәнгәнен ҡарап торған Митрофан:
– О, һин ағас ботай ҙа беләһең икән! – тип мәрәкәләне.
– Ә кәк же, һинең һымаҡ, мин дә бит крәҫтиән балаһы.
– Эйе, нужа бабай күрмәгәнен күрһәтә крәҫтиәндең.
– Был ҡәҙәре утын нимәгә һуң һиңә? – Эшенән туктаған Мөхәмәтша ауып ятҡан ағастарға ымланы. – Бәлки, һатаһыңдыр?
– Һы, һатырһың һатмай ни. Һаттырып ебәрер беҙҙең ҡап ҡорһаҡ. Ошолай итеп бурысҡа алған икмәк хаҡын ҡайтара алһаң да шәп әле. – Митрофандың сырайы һытылды. – Алпауытыбыҙҙа көнләктә йөрөйөм, ә үҙем оҙон ҡыш буйына әрәмәлектән сытыр ташып яғам, башҡаса әмәл юҡ.

– Шулай, бынынһы – крәҫтиән өлөшөнә төшкән тағы бер бүләк. Яҙмыш бүләге. Ундай бүләктең кәрәге бер тин дә ул.

Икәүләшеп көлөшкән булдылар. Көлөүҙәре ихлас килеп сыҡманы.

Митрофандың тәҡдиме менән Мөхәмәтша уларҙа берәй төн ҡуна ҡалырға ҡарар ҡылды. Мунса төшкәндән һуң тәне еңеләйеп киткән ҡунаҡ бер нәмә белмәй йоҡланы ла ҡуйҙы. Был уның һуңғы осорҙа тәү тапҡыр әҙәм рәүешле ял итеүе ине. Иртәгәһен йылы хушлаштылар. «Ауан башҡорт» шул арала, күрәһең, Митрофан менән уның йыуантыҡ-сибәр ҡатынының күңелен яулап та өлгөрҙө. Ҡапҡанан сығып барышлай уға йәтеш кенә төйөнсөк тотторған мәрйә:

– Бына, юлсы, ныҡ асығып киткәнеңдә тамаҡ ялғарһың, – тип көрһөндө.

– Күберәген бирергә, күреп тораһың, үҙебеҙгә юҡ. – Митрофан, ғәйепле һымаҡ, йылмайып ҡуйҙы.

– Булғанына бәрәкәт, ызнакум. Изгелегегеҙҙе ғүмере онотмам, рәхмәт.

Хужа кеше һыбайлы башҡорт ауыл осона сығып күҙҙән юғалғансы ҡапҡаһы алдында баҫып торҙо. Бер ниндәй ауырлыҡ кәртәләре алдында туҡталып ҡалмай, осрар ҡыйынлыҡтарҙан да ҡурҡып тормайса, ерем, илем тип ер ситенән ат алып ҡайтып килгән кешегә һоҡланмайса ҡарау мөмкин түгел ине. Һәм Митрофан, ошо урыҫ ҡәүеме араһында һирәк осрар изге йәнле кафыр, уға ихлас күңелдән һоҡланып бөтә алманы. Мөхәмәтша ғүмерлеккә уның хәтеренә һеңеп ҡалды.

Ун-ун биш саҡрым ара үтеп, үтә күренмәле ғәжәп саф һыулы тау йылғаһының ташлы кисеүенә төшөү менән, ҡорғаҡһыған Сыбай ҡашҡа һыуға йомолдо. Тирләп-бешеп килгән Мөхәмәтша үҙе лә битен-башын сайып алды. Һыу һалҡынлығы уға дәрт-дарман өҫтәне, күңелен күтәреп ебәрҙе.

Оҙаҡ ҡына танһығын ҡандырған атының теҙгененән тотҡан көйө ҡаршылағы ҡабаҡ һыртына күтәрелеүгә, уның юлын ер аҫтынан ҡалҡып сыҡҡан ише ҡайҙандыр пәйҙә булған ике хөштөмһөҙ әҙәм быуҙы. Ойошоп бөткән оҙон-ялбыр сәс-һаҡалдары менән ахыр сиккәсә етеп туҙған кейемдәренә ҡарағанда, тиген кешеләр түгел. Быны шунда уҡ һиҙеп алған Мөхәмәтшаның башынан: «Ҡасҡындар! – тигән хәтәр уй үтеп китте. – Уларынан бөтәһен дә көтөргә була».

– Здорово, братан! – Тегеләрҙең һонтор кәүҙәлеһе, кинәйәле йылмайып, Мөхәмәтшаға яҡынлашты.

– Вот так встреча! – Икенсеһе, бөкөрөрәге, хатта ҡыуанып киткән булды: яҡын кешеһен осратҡан тиерһең.

– Һау ғынабыҙ әле, – ят әҙәмдәргә һыны теймәй ҡарап торған Мөхәмәтша руссалап яуап бирҙе.

– Һин кем? – тип ҡыҙыҡһынды уҫал ҡарашлы һонтор. – Ҡайҙарға юл тотош?

– Күрмәйһеңме ни, ул беҙҙең ҡотҡарыусыбыҙ ҙа баһаң. – Бөкөрө, ялағайланып, аҫтыртын хихылданы. – Беҙгә төшкөлөккә килтергән.

– Мин – Мөхәмәтша. Тыуған яҡтарыма юл тотам. – Ул эске тулҡынланыуын баҫырға тырышһа ла, ҡалтыранып киткән тауышы һағайып, шөрләй төшкәнлеген һата ине. – Һуғыштан ҡайтып барам.

– Ә дөлдөл шә-әп! Һай, шәп! – Убырлы ҡарсыҡҡа оҡшап торған бөкөрө Мөхәмәтшаның әйткәнен ҡолағына ла элмәгән кешеләй ҡыланды: ат янына килде лә уның тирләгән муйынынан шапылдатып һөйҙө. – Ҡайҙан төшөрҙөләр һине, хайуанҡай? Ә, урланылар, тиһеңме? Мин дә шулай уйлаған инем...

– Юҡ, ат урланды түгел, бына ҡағыҙы...

– Мужик, һин миңә шуны әйт әле: ҡыуана-ҡыуана тыуған яҡтарына ҡайтып барған кеше өсөн нимәгә ул арғымаҡтың быңдайы? – Һонтор аҫтыртын боҙоҡлоҡ менән Мөхәмәтшаны тупаҫ бүлдерә һалды. – Слушай, беҙгә бүләк ит тә ҡуй, ә. Исмаһам, мәшәҡәте булмаҫ...

Мөхәмәтшаның йөрәге жыу итте: Сыбай ҡашҡаны тартып алмаҡсы түгелме мөрәүәтһеҙҙәр? Һәм быны ниндәй юл менән башҡарыуҙы оҙаҡ уйлап тормаясаҡтар. Ана, күҙ ҡараштары ниндәй! Ҡомһоҙ һәм нәфсел. Бындайҙарҙан изгелек көтмә...

– Ник өндәшмәйһең? Ҡурҡышыңдан әллә телеңде йоттоңмо? – Ярамһаҡ бөкөрө йәмһеҙ итеп борғоланды, ә уның ошо ҡылығынан сикһеҙ ҡәнәғәт ҡалған һонтор урман яңғыратып көлгән булды. Көсәнеп сыҡҡан яһалма көлөү шомло ишетелде.

– Атты минең үҙемә бүләккә бирҙеләр, шул сәбәпле һеҙгә лә, башҡаһына ла тотторop ебәрә алмайым. – Мөхәмәтша элеккесә тыныслыҡ һаҡланы. – Беҙҙә бүләкте ҡайтанан бүләк итмәйҙәр.

– Бынағайыш, кемдә ул «беҙҙә»? – Һонтор ныҡ аптырап киткән булды.

– Беҙҙә – башҡорттарҙа.

– Ә-ә, һин башҡортмо ни әле? Мәңгелек туңғағынан айырыла алмаған чукча икән тиһәм... – Мәғәнәһеҙ һүҙҙән ҡыҙыҡ табып, йәнә һаһылдаштылар.

– Ул сағында һин, башҡорт, беҙҙе, бер гонаһһыҙ Хоҙай бәндәләрен, малын тартып алып, кеше таларға мәжбүр итәһең бит. Шуның менән енәйәткә этәрәһең. Ҡайҙа һинең оятың?

– Ай-бай, ҡылыҡһыҙ әҙәм икәнһең.

– Шулай шул, ярамаған эш менән булаһың, зёма.

– Үҙең аңлы ғына һымаҡ күренәһең...

Ике әшнә шул рәүешле туранан-тура кәмһетеүгә күсте.

– Кем була бит әле ярамаған эш менән... – Ҡаршыһында ҡотһоҙ ҡыланып торған ятаҡыл шөрҙөк кәмитселәренә Мөхәмәшаның йәне көйә башланы. Ә тегеләре оторо ояһыҙлана барҙы.

– Әһә, һөмһөҙләнеп ҡаршылыҡ күрһәтеүе етмәгән, был бит күрәләтә йәберләргә тотондо... – тине һонтор ярылып торған хаслыҡ менән. – Ә беҙ уға бер насарлыҡ та эшләмәгән...

Ошо ҡотолғоһоҙ ҡатмарлы хәлдән анһат ҡына сығып булмаясаған инде тамам төшөнөп алған Мөхәмәтша, кинәт тайшанып, ситкә һикерҙе лә, күҙенә тәү салынған тос ҡына күҫәкте эләктереп, тегеләргә ҡаршы баҫты. Шул әҙере һонторҙоң ҡулында хәнйәр ялтырап китте. Мөхәмәтша күҙ асып йомған арала, киҙәнә биреп, уның ҡаҡ маңлайына һуҡты. Ҡурҡыныс аҡайып киткән һонтор салҡан барып төшөүгә, бөкөрө йыртҡысҡа хас ҡомһоҙлоҡ менән теҙгенгә үрелде. Мөхәмәтша уныһына ла өлөш сығармаҡ булып уҡталған мәлдә, ҡайҙандыр үҙенең соңҡаһына килтереп тондорҙолар. Ул йығылып барышлай: « Аһ, ҡәһәрең, өсәү булғандар, ҡәбәхәт йәндәр!»– тип кенә уйлап өлгөрҙө лә, аңын юғалтып, билдәһеҙлек упҡынына ҡоланы.

Мөхәмәтша иҫенә килгәс тә, ҡапылғара ҡайҙалығын аңлай алмайса, зәп-зәңгәр күк көмбәҙенә төбәлгән килеш байтаҡ ятты. Уны ер аҫтынан килгәндәй ишетелеп ҡалған ыңғырашыу ауазы, һиҫкәндереп, асылына ҡайтарҙы. «Ат! Минең Сыбай ҡашҡам!» – Башына тәү килгән уй ошо булды. Һелкенгән мейеһе зәңкеп һыҙларға тотонған Мөхәмәтша сайҡала-сайҡала тороп баҫҡас та, үҙенән алыҫ түгел ағас төбөндә ҡанға туҙып ятҡан һонторҙо күреүгә аптырап китте. Уның ҡыл ҡыбырлатырлыҡ та хәле юҡ ине.

– Нимә, үлтерәһеңме мине хәҙер? – тине ул тыныс ҡына, әйтерһең дә, кеше йәнен ҡыйыу ғәҙәти бер эш.

– Юҡ инде, ерәнес әҙәм аҡтығына ҡағылып ҡулымды бысратаһым килмәй, тфү! – Мөхәмәтша йән асыуы менән уның өҫтөнә төкөрҙө.

– Әҙәм аҡтығы мин түгел. – Йөҙө сырыҡ һонтор сатнаған башын ҡыҫты. – Әҙәм аҡтыҡтары, ана, тегеләр. Мине, иптәштәрен, ташлап ҡасҡандар...

– Көллөгөҙ ҙә килешкән, – тине Мөхәмәтша нәфрәт менән.

– Миңә ышанһаң, атыңды табышырға ярҙам итер инем, – тип һыҙланыу аша шыңшыны һонтор, – тегеләргә үс итеп...

– Кәрәкмәй. Һинең һымаҡтарға ышаныуы ана тора... – Мөхәмәтша уның ярҙамынан ҡырҡа баш тартты.

– Һалдат, белгең килһә, мин ошолай итеп үҙ иркем менән йөрөп ятмайым. Беҙҙе Омск ат заводы хужаһы ебәрҙе. – Һонтор ошо урында Мөхәмәтшаны шаҡ ҡатырҙы. – Һине шунан алып эҙәрлекләй киләбеҙ.

– Ана нисек? – Әҙәми зат  мәкерлегенә һушы киткән мосафир китә башлаған еренән кире әйләнеп килде. Тегегә һынамсыл ҡарап торғандан һуң: – Хужаңа әйт, аты-уты менән бергә ҡаҙалып китһен. Ә мин һиңә барыбер ышанмайым. Беренсе уңайлы осраҡта уҡ һатасаҡһың. Кәкрене бары ҡәбер генә төҙәйтә ала...

Хәйерһеҙ урындан тиҙерәк китергә ашыҡҡан Мөхәмәтша ике яҡлы тойғолар кисерҙе. Юлбаҫарҙарҙың ҡулдарында бит бысаҡтары бар ине, ярай әле, һуйып китмәгәндәр. Үҙе лә дөмөгөр, тигәндәрҙер инде, тип һөйөнөп ҡуйһа, Сыбай ҡашҡаһының шулай мәғәнәһеҙ рәүештә ҡулдан ысҡыныуына көйөнөп бөтә алманы: аттың шундайын юғалтсы. Үкенес...

Мөхәмәтша, бара биргәс, инешкә төшөп, ҡан ҡатҡан күҙ-башын йыуҙы, ҡарһаланып һыу эсте. Теш ҡамашыр инеш һыуынан уның томаланған зиһене яҡтырып, шешенгән күҙҙәре асыла төшкәндәй булды. Ярай әле, бая айҡашҡандарында иңендәге биштәре нисектер тегеләрҙең күҙҙәренә салынмаған. Юғиһә күҙ терәп торған барлы-юҡлы ғына ризығынан да яҙҙырырҙар ине. Ә былай, шөкөр, бер көнлөк булһа ла тәғәме янында ҡалған.

Ғәмһеҙ алабарманлығы арҡаһында бәләгә тарып, эсе нығ бошҡан Мөхәмәтша юл ситендәге беленер-беленмәҫ  ятҡан һүрәпән генә һуҡмаҡтан китте. Оло юлда һин шикле кешеләр күҙенә әллә ҡайҙан уҡ салынып бараһың, ә былай ҡулайыраҡ та, ҡурҡынысһыҙыраҡ та. Байтаҡ ваҡыт бергә булырға өлгөрөп, күп кенә ауырлыҡтарҙы уртаҡлашҡан, инде күнегеп тә барған Сыбай ҡашҡаһы иҫенә төшөүҙән йөрәген үкенес тойғоһо быуҙы. Үкенеү  менән хәҙер ни ҡылмаҡ кәрәк, яҙмаған мал булды, күрәһең. Малдың яҙғаны ул ауыҙ шаҡарып керә, ә яҙмағаны ауыҙға ингән ерҙән...

Көн үҙәгендәге ҡояш ихласлап ҡыҙҙыра башлаған мәлдә, юлында биш-алты иҫке генә йорттан торған ярым ташландыҡ утар осраған Мөхәмәтшаны уҫлаптай кәүҙәле ялбыр ике эт абалап ҡаршы алды. Бына-бына ташланырға әҙер эттәрҙән шөрләй төшкән мосафир, таяғын йәтешләп тотоп, сараһыҙҙан алышҡа әҙерләнде. Хәл ҡул аҫтынан сығып киҫкенләшә барған мәлдә, урамдағы шаушыуҙы ишетепме, ситке өйҙөң ауыр ҡапҡаһы шағыр-шоғор асыла бирҙе лә, хасил булған ярыҡтан һап-һары сәсле көнйәлә баш күренде.

– Барсик! Тигр! Нельзя! – Йәһәтләп ҡапҡа тышына сыҡҡан ете-һигеҙ йәштәр тирәһендәге, аяҙ күк йөҙө ише асыҡ-зәңгәр күҙле, алһыу биттәре эре һипкелдәр менән сыбарланған, мөләйем генә ҡыҙ заты ярһый башлаған маһмайҙарын тыйҙы. – На место! Кому говорю.

Тырпай ҡолаҡтарын шунда уҡ шымырайта һалған тоҡомло эттәр, ялағайлана биреп, дегәнәк һырыған ҡойроҡтарын болғай-болғай, урыҫ ҡапҡаһы аҫтындағы күләгә урынға һыйындылар. Әлһерәп, шунда уҡ битарафҡа әйләнгән хайуандарҙың шул әҙере ҡыҙыл телдәре һәленеп төштө. Аңлы башҡа был улар төшөнсәһендә «Ярай, хужабыҙ, беҙ тынысландыҡ, ҡунағыңа башҡаса шойҡаныбыҙ ҡағылмаҫ, аръяғын үҙең ҡара» тигәнде аңлата ине.

Сәстәре ҡояшта еҙ булып янған һөйкөмлө балаға Мөхәмәтша бер сама

ҡыҙыҡһыныу ҡатыш күңел ятышлығы менән текләп торҙо. Башын ҡырын һалып, һыңар күҙен ҡыҫа биргән ҡыҙыҡай ҡасандан инде бала күрмәгән Мөхәмәтшаға ғәжәп яҡын булып тойолдо. Арҡаһынан тупылдатып һөйөп тә алыр ине әле, таныш түгел. Ят бауыр сабыйҙың ҡурҡып ҡуйыуы бар. Шунда ла, алсаҡ йылмайып, белешә һалды:

– Был ниндәй ауыл була, ҡыҙым?

– Егоровка тиҙәр беҙҙең хуторҙы, – тип сәрелдәне тегеһе.

– Ә стансаға тиклем алыҫмы икән?

– Егерме саҡрымлап булыр, – шуҡ ҡыҙыҡай һипкелле йөҙөнә ҙур аҡыл эйәһе төҫө сығарҙы, – олатайым шулай ти.

Ошо мәл яртылаш асыҡ көйө ҡалған ҡапҡа артынан ябығыуҙың сигенә еткән, ҡаҡса сырайы ҡыуарып, урттары урмайған ҡырыҫ ҡарашлы ҡарт килеп сыҡты. Ул, асыуын йәшереп тормайса:

– Настя, марш во двор! – тип остандаҡты ҡыуып ебәрҙе. Унан Мөхәмәтшаға боролдо, ялбыр ҡаштары аҫтына йәшеренгән кескәй күҙҙәре менән, гүйә, өтөп алды: – Нимә кәрәк һиңә, үткенсе?

Әлеге һынамсыл-ҡаты ҡараштан Мөхәмәтшаға әллә ҡалай булып китте. Тирле һырт буйынан эҫеле-һыуыҡлы тулҡын йүгереп уҙҙы. «Ҡарашы бигерәк ауыр, тиген әҙәм түгелдер был», – тип уйлап шөбһәләнә башлаған мосафир, эсәһе килеп тормаһа ла:

– Хужа кеше, бер йотом ғына һыу эсереп ебәрә алмаҫһығыҙмы икән? – тип ялбарғанын үҙе лә һиҙмәй ҡалды. – Ни эшләптер ныҡ сарсаттысы...

– Ә һин кем булаһың? – Сәйер ҡарттың ҡыҙыҡһыныуы арта төштө.

– Мин... Мине Мөхәмәт тиҙәр. Мөхәмәтша һалдат. Япон һуғышынан Уралтауға ҡайтып барған көнөм.

– Һуғыштан, тиһең инде? Һы, нимә етмәйҙер был Хоҙай бәндәләренә? Һуғышмайса ғына йәшәй алмайҙармы икән? – Һиҙелерлек йомшара төшкән сал бабай, артына боролоп, кемгәлер ҡысҡырҙы: – Ефросиня! Ишетәһеңме?

– Ни булды, ҡарт? – Бейек ҡойма аръяғынан кәрһеҙ ҡатындар тауышы ишетелде.

– Ныҡ сарсаған мосафирға эсер һыу сығар, – тине ҡарты, тупаҫ һәм тәғәнле итеп. – Юғиһә, урмандың һыуы бөткән, ти...

Ошо һүҙҙәрҙән Мөхәмәтшаға нисектер уңайһыҙ булып китте: әйтерһең дә, кемдәндер ҡасып, теләнселәнеп йөрөй. Ни бары бер йотом һыу ғына һораны. Уны әсенеү тойғоһо солғап алды: үҙебеҙҙең башҡорт булғанда, ай-вайыңа ҡарамай, өйөнә әйҙүкләй башлар ине, ә былар...

Ирҙән иҙелеп йәшәгәнлеге йөҙөндә сағылған ҡатын кәүшәйеп бөткән тимер көрөшкә сығарып ҡартҡа тотторҙо, ә уныһы Мөхәмәтшаға һондо. Әллә шишмә һыуына күнегеп бөткәнгә, әллә ризаһыҙлыҡ менән бирелгәнгә күрәме, һыу татыр һәм тәмһеҙ тойолдо. Ул йылымыс һыуҙы бер-ике уртлап йотто ла ҡалғанын аяҡ аҫтындағы үләнгә һипте.

– Спасибо, хозяин, угостил, – көләмһерәй биреп, көрөшкәне кире ҡайтарҙы. Йомоҡ тәбиғәтле ҡартлас күренеп торған ерәнеү менән уға ҡарап алды һәм, бармаҡ осона ғына элеп, буш һауытты янтайған ҡойма буйындағы кесерткәнлек араһына ырғытты. Аҙағынан хатта, быснаҡ әйбергә ҡағылғандай, ҡулдарын күлдәк салғыйына һөртөп ҡуйҙы. Әлеге кәмһетеүгә тартым сәйер ғәмәл Мөхәмәтшаның намыҫына тейеп, йәнен үртәне.

– Нимә, сиркәнәһеңме әллә? – тине ул, нәфрәтен йәшерә алмайса.

– Асыуланма, беҙ – староверҙар, йәғни һеҙҙең мәғшиәттән ситнәтелгән бәндәләр. Шуны бел: һинең өсөн ҡәҙимге һымаҡ донъя миңә бөтөнләй икенсе төҫтә. Беҙгә ят кеше ҡулы ҡағылған һауыт-һабаны ҡабат ҡулланыу ярамай.

– Ә ниңә һуң шуны... белә-күрә...

– Йола үә ғөрөф-ғәҙәт. Ҡыҫҡаһы, ҡанға һеңешеп бөткән. Башҡаса йәшәргә инде булдыра ла алмайбыҙ, теләгебеҙ ҙә юҡ.

– Иҫкелек ҡалдығы, тимәк.

– Ҡалай теләйһең, шулай аңла. – Нисектер йәл булып киткән бабай, һаубуллашып та тормаҫтан, ашыҡмай ғына ихата эсенә инеп юғалды.

– Үәт әй, була бит кешеләр, – тип ҡуйҙы Мөхәмәтша, уның артынан ҡарап. Таяҡҡа эленгән моҡсайын рәтләштереп, ары атланы. Йоҡомһорап ятҡан эттәр был юлы уны ғәмһеҙ-битараф ҡараштары менән оҙатты. Томһа картҡа хәтере ҡала биреп ҡуйған мосафир яҡындағы стансаға юлды һорашырға ла онотто.

Көтөлмәгән ерҙән шыпа йәйәү тороп ҡалғанлығына әсенеп бөтә алмаған Мөхәмәтша бөгөн туҡтау белмәй барҙы ла барҙы. Хәҙер уның, һаҡланыр ҡоралы булмаған һымаҡ, арҡаланыр аты ла юҡ. Ышаныс бары үҙ аяҡтарында ғына. Яҙҙыра күрмә шул аяҡтарҙан, йә Хоҙа!

***

Аҡшамдан һуң, эңер төшә башлаған мәлдә Мөхәмәтша, осраҡлы ғына, ҙур аҡлан ситендә моңайышҡан дәү ҡарағайҙар аҫтында йәшеренеп торған һунарсы өйөнә барып сыҡты. «Бына бит, бирәм тигән ҡолона – сығарып ҡуйыр юлына! Насип иткәс, төн үткәрер яйлы урыны ла табылды, – тип тиҙерәк торлаҡҡа инергә ашыҡты. Ошоғаса ҡайҙа аҙау кәбән төбөндә, ҡайҙа мүккә уралып ялбыр ағас аҫтында, ҡайсаҡ хатта соҡор-саҡыр ышығында өшөүҙән ҡырҡҡа бөгәрләнгән көйө ярты-йорто ғына йоҡлап төн уҙғарырға ғәҙәтләнгән Мөхәмәтшаға һунарсы торлағы ожмахтың бер мөйөшө булып тойолдо. Бында ышыҡ һәм йылы, хәүефһеҙ ҙә. Балсыҡ менән таштан сығарылған мейес башында аҙ ғына шырпы-тоҙо ла бар булып сыҡты, мейес янындағы йомро ағастан әтмәләнгән һике өҫтөндә һауыт-һаба күренә.

Ахыры, арыуы ныҡ еткән, ҡаҡ урындыҡҡа шинелен йәйеп, биштәрен баш аҫтына ҡыҫтырҙы ла... йоҡлап китә алмай оҙаҡ аҙапланды. Тегеләй әйләнде, былай әйләнде, оҙон-оҙаҡ итеп доғаларын уҡыны, әммә булмағас булмай икән, йоҡо тигәнең алмай ҙа ҡуя. Башында һәр төрлө уйҙар сыуалып иҫен китәрһә, күҙен йомоуы була, ҡаршыһына Сыбай ҡашҡаһы килә лә баҫа. Етмәһә, мөйөштәрҙең ҡайһыһындалыр, туҡтау белмәй, сысҡан ҡыштырлай. Шыҡһыҙ-буш өй эсендә шул ҡәҙәре оҙаҡ кимерерлек нимә тапҡандыр, белмәҫһең.

Онотолоп киткән мәлдәренең береһендә Мөхәмәтша үҙен ауылына ҡайтып еткән һымаҡ тойҙо. Имеш, ул сәскәләр менән сыбарланған Һаҡмар туғайы буйлап рыя ғына атлап бара. Ул үҙе бөтәһенә ғәмһеҙ булһа ла, бөтөн донъя уға ҡарата ғәмһеҙ түгел кеүек. Шулай шул, ана, ҡояшы ла, тулҡындарын йылкылдатып ятҡан йылғаһы ла, шул йылға буйлатып үҫкән ағастары ла, – ҡыҫҡаһы, уратып алған бар тәбиғәт уға ҡарап йылмая. Сеү! Ә тегендә ниндәй шәүлә күренеп ҡалды? Шәүлә тигәне әкрен-әкрен генә төҫмөрләнә барып, ниһайәт, ат һынына әүерелә. Бәй, Сыбай ҡашҡаһы ла баһаң! Уныһы матур бөгөлөп торған муйынын һона биргән дә, ҡолаҡтарын ҡайсылатып, Мөхәмәтшаға ҡаршы килә. Инде осраштыҡ тигәндәрендә генә, икеһенең уртаһында... тештәре ыржайып торған һонтор менән ҡот осҡос ҡиәфәткә кергән бөкөрөнөң һындары ҡалҡып сыға...

Баҫлығып ятҡан Мөхәмәтша ошо урында тертләп уянды. Уянды ла йәнә үҙҙәре йонсотҡос, үҙҙәре бәйләнсек уйҙарға бирелде. Был нимә, һаташыуымы? Әллә, ниндәйҙер ат тип, аҡылынан яҙа башлауы ошомо? Бер хәсрәт кенә булдың бит, малҡай: йоҡоһо йоҡо түгел, йүнләп ял да итеп булмай...

Ҡатыны менән балалары ни эшләп йөрөгән булалар икән ошо мәлдә? Нимә эшләһендәр, дүрт күҙ менән уны көтәләрҙер. Ә әсәһе инде көтә-көтә көтөк булғандыр. Бәлки, төңөлөп тә... Фу, һин! Иҫәүәнләнә барған башҡа нимәләр генә килмәй. Әсәйме һуң улынан төңөлөр кеше? Әлбиттә, әсәһе кеүек, башҡа яҡындары ла, көтөк булыуҙарына ҡарамаҫтан, бөтөнләйе менән төңөлмәгәндәрҙер.

Ошо уйҙан Мөхәмәтшаның күңеленә йылы булып китә.

... Лотфулла ҡусты, үҙенә имен-аман ғына ҡайтып етергә насип итһә, ағаһы тураһында, уның мөғжизә аты хаҡында күптән һөйләп бар ауылды шаҡ ҡатырғандыр инде. Шулай икән, уны, әлбиттә, ана ҡайта, бына ҡайтып төшә, тип күҙҙәрен талдырып көтәләрҙер. Башҡаса булыуы мөмкин түгел...

Хәйер, ауылда инде бесәнгә лә төшкән булырға тейештәр. Шуға күрә, бәлки, бер кемдә лә Мөхәмәтша ҡайғыһы юҡтыр. Эйе, тирләп-бешеүҙән ҡыҙара-бүртеп, билдән һуҡҡан үләнде кемуҙарҙан ярыша-ярыша сапҡан ауыл кешеһендә, ысынлап та, уның ҡайғыһы түгелдер – бесән осоронда һәр кемдең үҙ хәстәре.

Уяулы-йоҡоло иҙерәп ятҡан Мөхәмәтшаның матур төшкә тартым татлы уйҙарын тышта ишетелеп ҡалған дөңкөлдәү бүлде. Ҡапыл йөрәге ҡабынған ир тороп ултырҙы ла, йоҡо төйөлә башлаған күҙҙәрен ыуалаштырып, ҡараңғылыҡҡа төбәлде һәм, йәнде иҙеп көсәйә барған көҙөкләнеү менән, артабан ни булырын көтә башланы. Әүәл бер мөйөштә ишетелеп ҡалған тауыш өйҙөң икенсе яғына күсте. Ана, кемдер ишекте һаҡ ҡына тырнаны ла бүрәнәгә ышҡынып алғандай булды. Тағы айыумы? Бәлки, икенсе берәй яман заттыр. Урман эйәһе, йә иһә төн пәрейе. Ҡаҫта уйлы әҙәм булыуы ла бар...

Ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә әллә нәмәләр уйлап бөткән Мөхәмәтша бер утҡа ташланһа, бер туңды. Ниһайәт, бар ҡыйыулығын тупланы ла һаҡлыҡ менән бәләкәй генә тәҙрә уйымы янына килеп, тышҡа ҡараны... Бер нәмә лә күрә алманы. Һәрмәнеп барып ишек келәһен тапты. Уныһы ышаныслы бикләнгән ине. Шул арала әлеге сәйер ҙә, серле лә тауыштар баҫылған һымаҡ булды. «Китте, шәт, – тип иркен һулаған Мөхәмәтша быуынһыҙ килеш урындыҡ ситенә ултыра төштө, – ярай әле, анһат ҡотолдо...» Ҡотолдо, көт! Ана, теге йәнә ишек алдына килде шикелле. Аптыраған юлсы был юлы уның аяҡ тауыштарын ап-асыҡ ишетте: «Гөп... гөп, гөп... гөп». Унышына ҡушылып ярһыған йөрәге типте: «Дөп... дөп... дөп...»

Мөхәмәтшаға инде ял ҡайғыһы китте: йоҡлап ятыу түгел, тере ҡалһаң әле. Ул ҡалтыранған ҡулдары менән бая ингәс тә күреп ҡалған сыраларҙы һәрмәп алып, береһен тоҡандыра һалыуға, тәҙрә уйымынан ниндәйҙер аҡ тап күренеп ҡалды. Мөхәмәтшаның йөрәге алҡымына килеп тығылды: кеше ашап, тирә-йүндә барыһының ҡотон алған һары-ала айыу тигәндәреме икән ни? Мәгәр ул сағында ҡотолоу юҡ. Әҙәм итенә күнегеп алған януар уны тере килеш ебәрмәйәсәк. Тупһа алдында аҙна-ун көн һағалап ятһа ятыр, әммә ебәрмәҫ.

Үҙенә-үҙе йәл булып киткән Мөхәмәтша, бара-тора, ҡатыны һәм балалары, башҡа зат-ырыуы менән күңеленән генә бәхилләшеп үк бөттө. Шыбыр-шыбыр доғаларын уҡып, фани донъя менән хушлашҡан ирҙең ике күҙе өңөрәйеп торған тәҙрә уйымында. Унда кемдер тағы ялпылдап үтте. Ниндәйҙер ғәйрәтле йән эйәһе, ауыр көрһөнгән кеүек, уһылдап ҡуйҙы. «Еҫте һиҙә, мәлғүн, – тип бошондо Мөхәмәтша, – ысҡындырмаҫҡа уйлай». Бая сыраҡты тоҡандырып буш итте шикелле. Ҡараңғы-юҡта шым ғына ултырғанда... Ҡулында, исмаһам, ағас һаплы бәкеһенән башҡа, йүнле бер ҡоралы ла юҡ!

Ярабым! Бәләкәс кенә уйымдан кипсәлеп йөнтәҫ... ат томшоғо күренде! Күренде лә, бер тарғая биреп, бер таржайып, һауаны еҫкәштереп торҙо. Шунан

әүәл бышҡырып ҡуйҙы, ахырҙа зыңғырҙатып кешнәне лә ебәрҙе. Һаман бер ни аңлай алмай аҙапланған Мөхәмәтшаның тамам ҡото алынды. Бына уның әжәле! Ат сүрәтенә кереп алған да тәҙрә аша боғаҙына ынтылып маташа. Хәҙер... килеп инер ҙә йән генәһен «һә» тигәнсе һығып сығарыр. Уралтау ҡырлап аҡҡан Һаҡмар йылғаһы буйы башҡорто, ошо рәүешле, ҡолаҡ ишеткәне булһа ла, күҙ күрмәгән Себер шырлыҡтарына килеп әжәлен табыр, тип кем уйлаған инде, йә. Уның һөйәктәренең ҡайҙа ятҡанлығын бер кем белә алмаясаҡ хәҙер! Ыһ, япон самурайы үлтерә алмағанды... Донъя хәлдәренең ошонан да аяныслырағы буламы икән?!.

Әлеге уйҙан Мөхәмәтшаның тамағына ҡырлы таш ише төйөр килеп тығылды. Үкенес төйөрө. Уны йотоп та ебәреремен тимә, иркенләп тын алырға ла бирмәй. Ә теге томшоҡ бәләкәс уйымға кипсәлеп алды ла һаман тора, һаман еҫкәй. Шул рәүешле ул ниҙер көтә һымаҡ. Бәй, үҙенең ауыҙлыҡлы йүгәне лә бар икән! Бар шул. Әллә инде... Мөхәмәтша башына килгән уйға ышанмайса юғалып ҡалды: «Сыбай ҡашҡа!» Мәгәр ысынлап та шул икән, нисек килеп уны таба алған? Юҡ, ул түгелдер. Был бары татлы хыял менән матур төш кенәлер. Нисәмә йылға кисеп, күпме юл үтте Мөхәмәтша. Эт булғанда, бәлки, юллап табыр ҙа ине. Ә был...

Шулай ҙа ул, ҙур һаҡлыҡ менән томшоҡҡа яҡын килеп:

– Сыбай ҡашҡа... һинме әллә? – тип өндәшер көс тапты. Ат томшоғо уға ҡәнәғәт ҡуршылдап яуап бирҙе, һәм күкрәк төбө менән мырҡылдап кешнәгән тауыш ишетелде. Мөхәмәтшаның алдында ысынлап та Сыбай ҡашҡаның аҡ мороно ине.

Башта ныҡ ҡына шикләнһә лә, барлыҡ ҡыйыулығын туплап тышҡа сығыу менән, ҡараңғы-юҡҡа атты төҫмөрләгән ир барыбер үҙ күҙҙәренә ышанмағандай ҡатып торҙо. Ахырҙа, әсәһен һағынған сабый ише, кинәт уҡталды ла Сыбай ҡашҡаның муйынынан ҡосаҡлап алды.

– Сыбай ҡашҡам!!! – Шатлыҡ ҡатыш ярһыу ауаз йоҡоға талған һил урманды яңғыратты. – Атым минең! Аҡыллым минең!

Алйыр сиккә етеп ашҡыныуҙан бар донъяһын онотоп атты иркәләргә тотонған Мөхәмәтшаның, көтөлмәгән ҡыуаныстан, сикәләре буйлап күҙ йәштәре аға ине.

– Ҡалай итеп, ниндәй юлдар менән эҙләп таба алдың мине, мөғжизә малҡай, ә?! Йәй көндәрен әҙәм аяғы баҫмаған был төпкөлгә нисек килеп тарының икән? – Ир, ошолай һөйләнә-һөйләнә, ат тирәһендә булашты. – Шул арала эҫенә һалып та алдың, и бисара. Бисаң менән атыңа ышанма, тигән булалар тағы. Тәүгеһен белмәйем, ә бына әйтемдең икенсе яртыһына ағаңдың ышанысы кәмеп тора... – Хайуандың арҡаһын һыйпамаҡсы иткән Мөхәмәтша ҡулына ниҙер һуғылды. – Аһ, мөрәүәтһеҙ бәндәләр, шул арала эйәр һалырға өлгөргәндәр! Белербелмәҫ көйө арҡаһын һуҡтырһалар... Ә быныһы нимә тағы? – Ул тимер һалҡынлығы ҡағылып киткән әйберҙе ҡапшаны. Мылтыҡ! Тегеләр, тимәк, атты эйәрләгәндәр ҙә эйәргә мылтыҡ аҫҡан булғандар. Уларҙан нисектер ҡасып ҡотолған Сыбай ҡашҡа бөтә булған ошо ат-ужаны Мөхәмәтшаға алған да килгән. Бына хәҙер хәлдәрҙең осо осҡа буйтым ялғанды, һәм Сыбай ҡашҡа менән булып үткән мажараның асылы, өҙөк-йыртыҡ ҡына булһа ла, хужаһының күҙ алдына килеп баҫты. Шулай ҙа был нимә? Хоҙайҙың ҡоло юлына сығарып ҡуйғанымы, йә иһә көтөлмәгән бәхеттең үҙеме?

Бәхет тиһә лә, төн ахыры яҡынлашып, яҡтыра башлау менән атының һырт буйында ҙур ғына сей яра күргән Мөхәмәтшаның ҡыуаныс-шатлыҡтары һүрелә төштө. Дәү кәүҙәле мыҡты атҡа ҡәҙимге эйәр, әлбиттә, ярамаған да, килешеп тә етмәгән һәм уның арҡаһын өйкәй-өйкәй тишеп сығарған. Ә өйкәлгән урын тиҙ генә уңала һалып бармай, быныһын ат бете ир яҡшы белә.

– Яуыздар, ағас эйәр аҫтына үндек һалмайса әрәм иткәндәр малҡайҙы, – тип үрһәләнде хужа, – һыбай барҙың былай булғас, бармай ни...

***

Быуна нисәнсе көн инде Мөхәмәтша атын етәкләгән көйө генә килә. Сыбай ҡашҡаның йәрәхәте сит-ситтән әкренләп тартылып уңала барыуға ҡарамаҫтан, һыбай менергә әле иртәрәк. Шөкөр, аяҡ аҫтында файҙалы үләндәрҙең ниндәй генәһе юҡ, шуларҙың ярҙамы тейә. Айырата юл япрағының шифаһы баһалап бөткөһөҙ. Шишмә һыуында сайҡап алаһың да яраға йәбештерәһең дә ҡуяһың. Күрер күҙгә күрекһеҙ генә япраҡ, берҙән, асыҡ яраға әүәл инеп ҡалған бысраҡ менән шул бысраҡтан хасил булған үлекте һурһа, икенсенән, ҡабатлап сир эләгеүҙән ышаныслы һаҡлай. Бынан тыш, ул япраҡты хатта үҙеңә лә ашарға була. Үҙе, ғүмерҙәре ҡыҫҡа ҡымыҙлыҡ, балтырған, әтлек, ризыҡҡа яраҡлы бүтән күп үләндәр кеүек, тиҙ генә ҡата һалып та бармай. Юл япрағы яҙ башынан йәй ахырынаса йәшел һәм һутлы көйө ҡала. Танып белгән кеше өсөн торғаны бер табыш инде ул.

Мөхәмәтша тағы, һирәк-һаяҡлап булһа ла, талсыҡҡан тәнгә көс-ҡеүәт биргән туҡлыҡлы һарына ҡаҙып ашаштырғылай. Тик уныһы был яҡтарҙа үтә һирәк осрай икән. Уралтауҙағы ише булғандамы-ы! Ул сағында аслыҡтың ни икәнлеген дә белмәҫ ине. Хәйер, Мөхәмәтша әлеге хәленән дә һис зарланмай. Тәңре насип иткән тәҡдире, шөкөр, самаһыҙ ауырҙарҙан түгел. Ошоғаса ул быуынына төшкәндәй итеп ныҡлы асыҡҡаны ла, эт-ҡош тарафынан йәбер-золом кисергәне лә, үҙәгенә үткәндәй яфа-михнәтен күргәне лә юҡ. Ә бына үҙен, мин аңлымын, мин аҡыллымын, тип туҡмай-туҡмай күкрәк күгәрткән әҙәми заттың кәрәккәненә лә, күберәк кәрәкмәгәненә шойҡаны ҡағылып тора. Хәйер, тота килеп әҙәмдәрҙең көлләһөн бер бизмәнгә һалыу бигүк ғәҙел дә булмаҫ ине. Уларҙың да төрлөһө бар...

«Ашыҡҡан етмәҫ, бойорған етер» тигән мәргән әйтемде хәтеренән сығармаған Мөхәмәтша, тыуған яҡтарына тиҙерәк ҡайтырға ашҡынһа ла, ныҡ ҡабаланмай. Ҡабаланһаң, әҙәм көлкөһөнә ҡалырһың. Әле унаң үткән ғүмер, киләсәктәге билдәһеҙ мәғшиәт хаҡында уйланып, шыҡһыҙ тормош үә еңелдән булмаған йәшәйеш, донъя мәшәҡәттәре тураһында фекер йөрөтөр өсөн ваҡыты етерлек, хатта артығы менән. Китеп бараһың – уйлап бараһың. Һиңә бер кем дә, бер нәмә лә ҡамасау яһамай.

Йәнә лә ошо арала сараһыҙҙан башҡарылмай, дөрөҫөрәге, уҡый алмайса бурыс булып күбәйә барған изге ғәмәл – намаҙын яңыртып уҡырға тотондо. Йөҙөн ҡибла тарафтарына йүнәлтеп, ул әүәл үтәй алмай ҡалғандарына ихлас күңелдән ҡаза ҡыла. Шул рәүешле тәүлегенә биш тапҡыр ғәмәлен бүтәнсә ҡалдырмаҫҡа тырышып барған көнө. Һәр намаҙын урын-еренә еткереп үтәгәндән һуң, уның тулышҡан күңел шеше бушап, тынысһыҙлығын юғалта барған йәне урынына ултыра һәм киләсәккә өмөтө артыуҙан йәшәүгә ышанысы ла ныға.

Таш өҫтөнә һалынған йомортҡа бешеп сығырлыҡ хайран томра көндәрҙең береһендә Мөхәмәтша ҙур йылға ярына килеп терәлде. Нисек итеп аша сыҡмаҡ кәрәк даръяның быдайын, тип аптыраған юлсы бер уңға, бер һулға ҡаранып торҙо. Ниндәйҙер эске тойомлау йылғаның үренә әйҙәй ине. Ошо кире ҡаҡҡыһыҙ сәйер көскә буйһонған ир ағымға ҡаршы атланы.

Ҡай бер ҡая ташлы урындарҙа, оло һыуҙан байтаҡ ҡына алыҫлашып китһә лә, уны күҙҙән яҙлыҡтырмаҫҡа тырышты. Ярға яҡын тауҙарҙы, йырып сыҡҡыһыҙ шырлыҡтарҙы урап үтеүҙән күп кенә ваҡыты менән көсөн әрәм итте. Шул рәүешле яфаланып барыуына ярты көн тигәндә, Мөхәмәтша егеүле ылауҙар

эргәһендә өймәкләшкән кешеләр янына барып сыҡты. Был тәңгәлдә йылға һиҙелерлек тарғая һәм уның аша ғәләмәт йыуан ҡорос арҡандар тартып ҡуйылған ине. Кандауай бүрәнәләрҙән бурап, шул арҡандарға тағылған дәү ҡасмуй* тегеләй-былай йөрөп тора. Ә сират һыу буйы!

Атын етәкләгән көйө сираттың уртаһына килеп баҫҡан Мөхәмәтшаға кешеләр тәүҙә сәйерһенеп ҡараны. Уның ошоғаса күҙ күрмәгән атына күҙ төшөрөп, тел сартылдаттылар. Бәғзе берҙәре мәғәнәле итеп баш сайҡаһа, иң ат йәнлеләре Сыбай ҡашҡаны баш бармағын юғары сөйөп баһаланы.

– Был ниндәй йылға? – Мөхәмәтша тешһеҙ ауыҙын килбәтһеҙ йырып янында торған ап-аҡ башлы ҡартҡа мөрәжәғәт итте.

– Ишим тип атайҙар беҙҙең йылғаны, сынок, Ишим, – тине униһы ихлас мөғәмәлә менән. – Көн күргән йылғабыҙ инде...

– Тимәк, Ишем? Ә Тубылғаса күпме бараһы?

– Тоболғамы? Һи-и, Тоболға еткәнсе, брат, атлайһы ла атлайһы. Артығыраҡ булмаһа, өс йөҙ саҡрымдан да кәм түгелдер...

Йылға ситендәге таҡта майҙансыҡҡа яҡынлашҡан һайын, Мөхәмәтшаның тулҡынланыуы арта барҙы. Ни өсөн тигәндә, унда торған еҙ сәсле бәһлеүән әзмәүер кешеләрҙең барыһын да ниндәйҙер ҡағыҙ киҫәге буйынса ғына үткәрә ине. Ә Мөхәмәтшаның нимәһе бар? Ни ҡағыҙы, ни аҡсаһы тигәндәй. Ай-һай, ултыртырмы икән көймәһенә был әҙәм? Үтә ҡомағай күренә. Мөхәмәтшаның эсе бошоп китте. Хәйер, бик тә булмаһа, эйәргә эленгән мылтыҡты тәҡдим итеп ҡарар. Ошо уйынан уның болоҡһой башлаған күңеле бер аҙ тынысланғандай булды. Әммә ләкин алдан шикләнеүҙәре юш сыҡты ла ҡуйҙы.

– Үҙеңә – биш, атың хаҡы – ун, йәмғеһе ун биш тин көмөш, – тине ҡасмуй хужаһы, Мөхәмәтша уның ҡаршыһына килеп баҫҡас та.

– Һо-о! Ул ҡәҙәреһен ҡайҙан алайым. Юҡ минең аҡсам. – Ҡапылғара юғалып ҡалған юлсы йәпһеҙ һөйләнде, – бәлки...

– Накой миңә һинең бәлкийең! Кеҫәң буш икән, бында йөрөп тә ятма. – Ерән урыҫ уның елкәһенән эләктерҙе лә ситкә сөрсөтә төрттө. – Һинең ишеләр бында быуа быуырлыҡ. Барыһын да бушлай йөрөтә башлаһаң. Миңә лә ғаиләмде туйындырырға кәрәк. – Китте был, китте, туҡтатып алырмын тимә! «Холҡоң ваҡсыл, эсең тар икән, кәүҙәң ҙур булыу менәнме...» – тип үҙ алдына һөйләнеп ҡуйҙы хәтере ҡалған Мөхәмәтша

– Нимә, нимә? – Әзмәүер уға ажырайҙы.

– Бәлки, мылтыҡты алырһың, ә?

– Һин, чурка, әйткәнде аңламаныңмы әллә?...

Ҡаршы килгән кешеләр ағымын көскә йырып үткән Мөхәмәтша, иларҙай булып, эргәләге ҡалҡыулыҡ һыртына менеп баҫты. Тыныс ҡына аҡһа ла, ябай күҙгә күренмәҫ эске ғәйрәте ҡайнап ятҡан йылғаға ҡарап өмөтһеҙлөккә бирелде: бына-бына һытылып китә инде. Йөҙөп сыҡҡандай ҙа түгел, исмаһам, бигерәк ныҡ йәйелгән. Кинәт уның бар булмышын түҙеп торғоһоҙ һағыш ҡоршауы быуып алды. Һағыш тигәнең әкренләп асыуға әүерелде лә, шул асыу ир намыҫын ҡуҙғытып ебәрҙе. Баяғы мәғәнәһеҙ әҙәм аҡтығының яман ҡыланышы сәменә ныҡ тейгәйне: ниндәйҙер бер оңҡотҡа мах биреп, ошо ғына йылғаны ла кисә алмай тормаға. Унан былайырағын да күрҙе бит әле ул. Күрҙе һәм, тәүәккәл булмышы арҡаһында, һәр саҡ еңеп сыға килде. Был юлы ла, иншалла...

Сыбай ҡашҡа, күрәһең, тәрән һыуҙан да ҡурҡмаҫҡа өйрәтелгән ине – һис ҡарышып торманы. Киреһенсә, оло ҡәнәғәтлек менән йылғаға инде лә китте.

---

* *Ҡасмуй — паром.*

Һөҙәк йылға төбө әкренләп тәрәнәйә барҙы. Быуна һалҡынса һыу тубығынан булды, бот төбөнә етте, муйынынан һуҡты. Ошонан һуң йәнә бер-ике аҙым яһап өлгөргән Мөхәмәтша башынан аша дарьяға сумды. Ҡалҡып сыҡҡанында йәнәшәһендәге Сыбай ҡашҡа, ҡуршылдай биреп, талғын ғына йөҙә ине. Һай, мәрҙәс! Нисек тә ҡаршы яҡ ярға сығырға кәрәклеген аҡыллы хайуан шунда уҡ төшөнөп алған. Хәҙер инде, айырылып ҡуймаҫ өсөн, теҙген осонан тотоп ҡына барғанда... Аттың отҡор холҡона хайран ҡалған хужаһы, арҡаһындағы мылтығы ныҡ ҡына ҡамасау яһап, аҫҡа һөйрәүгә ҡарамаҫтан, уға артыҡ йөк булып көс төшөрмәҫкә тырышты.

Ат менән кеше башы бәләкәй генә ике суҡайсыҡ сүрәтендә дарья уртаһына яҡынлашҡанда, уларҙы ярҙағылар ҙа, паромда китеп барғандар ҙа шәйләп ҡалып, ҡысҡырыша башланы. Кемдер аҡылһыҙ ауанлыҡҡа бот сабып шаҡ ҡатһа, икенсеһе ҡеүәт биреп һөрән һалды. Өсөнсөләре инде ихлас күңелдән һоҡланып бөтә алманы: була бит, әй, ер йөҙөндә ғүмерҙең ҡәҙерен белмәгән сәмле кешеләр! Шуларҙың береһе, ана, һәммәһенең күҙ алдында. Хәйер, тамаша ҡылып тороусылар араһында булыпятҡанды көлкөгә һабаштырғандары ла табылды, шулай ҙа күпселек, тынык ҡына ҡарай алмайса, ниндәйҙер эске көсөргәнеш менән күҙәтте.

– Э-эй-й, мужи-ик! Һин нимә, аҡылың бөтөнләй зәғифләнде лә ҡуйҙымы әллә? – Төрлө ауазлы шау-шыу араһында ерәндең гөрһөлдәк-ҡалын тауышы айырым-асыҡ ишетелеп ҡалды. – Атыңды һыйлаған булһаң, ултырта ла сығара инем.

– Пшёл ты... знаешь куда! – тип ҡысҡырҙы уға йәне үртәлгән Мөхәмәтша. Ярай әле, ошо һүҙҙе әрмелә урыҫтарҙан отоп алған. Мәғәнәһен тулыһынса төшөнөп бөтөүен бөтмәй, шулай ҙа асыу килгәндә әйтә торған һүҙ икәнлеген белә. Паромдағылар эстәрен тырнап көлөргә тотондо.

– Һоғондорҙомо, әй? – тине береһе, ерәнгә бармағы менән төртөп.

– Шул кәрәк һин оңҡотҡа! – Икенсеһе үсәп алды.

Ҡалғандар ҙа, уңай мәлде ысҡындырмаҫҡа тырышҡан һымаҡ, тегегә әселесөсөлө һүҙҙәр яуҙырҙы. Ошонан аҙаҡ, ҡан дошманына ҡон ҡайтарған кешеләй, Мөхәмәтшаның ярһыған күңеле баҫыла төшкәндәй булды: бына бит тел ҡеүәһе ни эшләтә! Асыуыңды бер ваҡытта ла эсеңә йотма, үҙеңә зыян ғына яһарһың, тип өйрәтә ине командирҙары, ҡайһылай хаҡ әйткән булған, ә. Ана, бер нисә ҡәҙимге һүҙ менән барлыҡ асыуы сыҡты ла осто, хатта нисектер рәхәт булып китте...

Ошолай уйлап ҡәнәғәт ҡалған Мөхәмәтша артабан еңелерәк йөҙҙө.

– Дау-уай, Сыбай ҡашҡам! Бирешмә! Күп ҡалманы инде, хәҙер етәбеҙ. Һай, афари-ин! – Рух күтәренкелеге кисергән хужа атын ҡанатландырҙы. – Ана шулай, ниндәйҙер һөмһөҙ томшоҡ алдында меҫкенләнеп арзу ҡылмаға ни...

Сыбай ҡашҡа, гүйә, әҙәми зат теленә төшөнә бара – хужаһының ниәтен аңлаған һымаҡ, уҫлаптай тояҡтары менән йышыраҡ та, айбарланыбыраҡ та ишергә керешә. Талымһыҙ атының ялына сат йәбешкән Мөхәмәтша уға аяҡтары менән ярҙам итте. Баштараҡ ҡапыл сәсәп китеүҙән быуып ала яҙған ҡурҡыуы баратора онотолдо. Янында ошо толпар ише иң терәгәндәй дуҫың барында ҡурҡыу нимә ул?!

Бына, шөкөр, ул да ынтылған маҡсатына етте шикелле. Бер арала Сыбай ҡашҡаһының дағалы тояғы ташҡа һуғылып алды, һәм, күп тә бармаҫтан, ергә баҫҡан арғымаҡ атлап китте. Шул әҙере артына боролоп ҡараған Мөхәмәтша ҡасмуй хужаһына йөҙроҡ күрһәтте. Ҡыланышы хас та бер ҡатлы малайҙарса килеп сыҡты.

Ҡаршы яҡ ярға аяҡ баҫып, аҙ ғына тын алғас, Мөхәмәтша әүәл, Сыбай ҡашҡаһын мәртәбәләп, муйынынан ҡосто ла тупылдатып һөйҙө. Хас та элек сабыйын һөйгән кеүек. Ахырҙа шабырлап һыу аҡҡан кейемдәрен сисеп һығырға тотондо. Ҡапыл ғына ныҡ асығыуын тойған мосафир тоғона ҡулын тыҡты, ундағы ебегән тарынан ярты услам ғына алып ауыҙына ҡапты. Бүртенгән тары хәҙер үҙе йомшаҡ, үҙе әскелтем-татлы ине.

– Бына нисек итеп ашарға кәрәк булған икән был әкәмәтте: үҙе сәйнәмле генә, тәме лә бөтөнләй башҡа. – Мөхәмәтша, ҙур асыш яһаған кешеләй, үҙ алдына ҡәнәғәт һөйләнеп ҡуйҙы.

Шул арала уларҙы йылға буйында балыҡ тотоп кәсеп иткән малайҙар һырып алды.

– Үәт, исмаһам, арғыма-аҡ! – Һоғон йәшерә алмаған иң өлкәндәренең күҙҙәре ут булып янды. Күренеп тора – ат бете.

– Аттың быдайы менән йылғаны ғына түгел, диңгеҙҙең үҙен кисеп сығырға була! – Малайҙарҙың икенсеһе Сыбай ҡашҡа абруйын тағы ла күтәреберәк ебәрҙе.

– Күҙ тейҙерә күрмәгеҙ, малайҙар, минең атҡа, – тип йылмайҙы уларға ифрат ҡәнәғәт ҡалған Мөхәмәтша, – лутсы әйтегеҙ: балыҡ тотоламы?

– Э-э, дяденька, белмәйһең әле һин беҙҙең Ишимканы.

– Балыҡ лығырҙап ята бында!

– Иренмәһәң, тоҡлап тоторға була...

Малайҙар кемуҙарҙан йылғаларын маҡтарға тотондо.

– Шулаймы ни?! – Мөхәмәтша, уларҙың күңелен ҡайтармаҫҡа тырышып, ихлас аптыраған була. – Балығы һәләк тәмлелер инде, ә? Телеңде йоторлоҡтор. – тип эреле-ваҡлы малайҙарҙың һалпы яғына һалам ҡыҫтырып ебәрергә лә онотмай.

– Тәмле булмай...

– Бигерәк тә талғын ҡуҙҙа өтөп бешергәне...

– Беҙҙең Ишимка балығына балыҡ етәме...

Малай-шалай йәнә шаулашып алды. Шулай инде, һәр кемгә үҙ кейеме яҡын. Һаҡмар тураһында һораһалар, үҙең нимә тиер инең икән...

Арыраҡ уларҙың бер төркөмө яр буйында тулып ятҡан сытыр-соторҙан ут яғып ебәргән дә эшлекле рәүештә әле генә тотолған балыҡты әүеш-тәүеш итеп маташа. Мөхәмәтшаны, әйҙүкләп, шунда саҡырҙылар. Бер аҙ тоҙ һипкәндән һуң, әрекмән япрағына төрөп, үҙ һутында ғына ҡурылған балыҡ – аш-һыу ғилеменең иҫ киткес бер ҡаҙанышы бит ул! Әҙерләүе рәп-рәхәт үә еп-еңел, ә үҙе, күпме ашаһаң да, ашап туйғыһыҙ. Тел йоторлоҡ, тип нәҡ шундай ризыҡ хаҡында әйтелгән дә инде. Ошо уйҙан ирең, хатта, яңаҡ буйы ҡурышып, тамшана ҡуйҙы.

– Дяденька, әйҙә, әйҙә-ә! Тартынып торма улай, түрҙән уҙ, тамаҡтың ояты юҡ ул. – Өлкәндәргә оҡшатырға тырышып ятҡан сандыр малай, уның хәл-торошон һиҙгән һымаҡ, өтәләнеп китте.

– Ә ниңә, була ул. – Мөхәмәтша һис инәлтеп торманы, аҡ ыштандан ғына булһа ла, табынға рәхим итте. – Саҡырған ергә бар, ҡыуған ерҙән ҡас, тиҙәр беҙҙә, дауай, ауыҙ итәйек биргәненән, – тип һөйләнә-һөйләнә, төргәге күмергә әйләнгән балыҡтың елле генәһен ҡулына алды. – Минең дә бит, уландар, бала саҡ булды ҡасандыр. Беҙ ҙә бына ошолай күмәкләп йыйнала һалыр ҙа Һаҡмар йылғаһында мәж килеп балыҡ өтөр инек. Һай-й, ирәүән заманда-ар!

Нәфсене ҡуҙғытып хуш еҫ бөркөү өҫтөнә, боҫрап ҡына торған йылымыс тәғәм, ысынлап та, ифрат тәмле ине. Тәмле генәме, танһыҡҡа дан ине!

– Әйткән йылғағыҙ ҙурмы? Унда ниндәй-ниндәй балыҡтар йөҙә? – тип ҡыҙыҡһынды малайҙарҙың береһе.

– Һаҡмармы?! О-о, Һаҡмар – ул тәбиғәттең бер мөғжизәһе! Улмы... ул башҡорт ерендәге һыуҙарҙың иң матуры үә иң гүзәле. Йылғала батша балығы бәрҙе мыжғып ята. Урыҫса уны... ней, теге... хариус тиҙәр, бәлки, беләһегеҙҙер ҙә әле. Йәнә, бағры күп беҙҙә. – Һаҡмарҙа бағры күп, тип Мөхәмәтша, әлбиттә, бер аҙ шаштырып ебәрҙе. Бер аҙ ғына шылдырыуҙан зыян юҡ. Бәрҙе менән бағры балыҡтарының ни сәбәптәндер бер урында йәшәмәгәнлеге Себер малайҙарына ҡайҙан билдәле булһын. Ә бына Һаҡмарҙан ҡапма-ҡаршы тарафтарға ағып киткән ваҡ-төйәк шишмәләрҙә бағры балығы, ысынлап та, күп. Быныһы инде – тәбиғәттең йәнә бер серле мөғжизәһе.

– Ә беҙҙә... – Сандыр малай аҡыллы күҙҙәрен ҡунағына төбәне, – беҙҙә бәрҙе булған йылғала бағрыһы юҡ, һәм, киреһенсә, бағры бар урында бәрҙе булмай... – Ошо һүҙҙәре менән ул Мөхәмәтшаны шаңҡытты ла ҡуйҙы: бына бит, алдаша белмәгән ауыҙың хәбәр һөйләһә...

Шулай ҙа ул бер ни булмағандай дауам итте:

– Теге... ней... һеҙҙәге менән беҙҙәге улар, исемдәре бер иш булһа ла, төрлө балыҡтар, – тигән булды, – беҙҙәген борон замандарҙа, хәҙер ҙә батшаға ашатыр өсөн килеп алыр булғандар һәм алалар. Уралтау йылғаларының балыҡтарын бүтән яҡтыҡы менән сағыштырып та булмай. Айырма ер менән күк араһы! Ә һеҙ Башҡортостандың хозурлығын күрһәгеҙ! Торғаны ожмах инде... – Хистәргә бирелеп киткән Мөхәмәтша, ашаған ыңғайға тыуған яҡтарын маҡтай-маҡтай, байтаҡ нәмәләр һөйләп ташланы. Ҡай урынында арттырып та ебәрҙе. Бәлки, арттырмағандыр ҙа, үҙе лә белмәҫтән хаҡты бәйән иткәндер. Нисек кенә килеп сыҡмаһын, рус телен яҙа-йоҙа ғына үҙләштергән наҙан ауыл кешеһе оло ихтирам менән, хатта мөкиббән китеп, үҙенә баҡҡан урыҫ малайҙарына бәрҙенең – хариус, бағрының форель була икәнлеген төшөндөрөп бирә алды һәм ошоноң менән һәләк ҡәнәғәт ҡалды. Бына, ҡасандыр Түбә ҡасабаһынан килеп сығып, кыуартирҙа йәшәп киткән Семён ызнакумы өйрәткәндәрҙең дә кәрәге тейҙе. Кем уйлаған инде, йә. Ғасыр буйына йәшә – ғасыр буйына өйрән, тип белмәй әйтмәгән икән Семён дуҫы.

Буйтым һимеҙ, өҫтәүенә ҡылсығы ла самалы ғына балыҡ, тәме яғынан бәрҙе менән бағрынан күпкә ҡайтыш булһа ла, ас ҡорһаҡҡа үтә килеште. Мөхәмәтша уға нык тейенде. Шулай булмай, ҡасандан ауыҙына алғаны юҡ, танһыҡлап кителгән. Һуңынан ул, аҡ таштарға һуҙыла төшөп, йәнәшәлә йылҡылдап ятҡан инештән һыуһын ҡандырҙы. Поездан төшөп ҡалғаны бирле ошолай туйғансы ашағаны юҡ ине. Бына бит, бирәм тигән ҡолона...

Мөхәмәтша, инде яҡшылап кибергә өлгөргән кейемдәрен кейеп, бөтөнләй таныш та, яҡынлығы ла булмаған мосафирҙы ихлас күңелдән ҡабул итеп, рызыҡтары менән уртаҡлашҡан бер ҡатлы малайҙарға рәхмәтен уҡый-уҡый, ары ҡуҙғалды. Уға ашығырға кәрәк, үтәһе юлы аҙ түгел. Тегеләре уны ҡул болғап оҙатты. Эй-й, әле муйындарына ҡәҙәр гонаһҡа батырға өлгөрмәгән эскерһеҙ Хоҙай бәндәләре...

***

Йылға ярынан уҡ башланған һөҙәк үр биш-алты саҡрымға һуҙылды. Майшәм ише төҙ ҙә, ғәжәп һырғый ҙа ҡарағаслыҡҡа килеп ингән Мөхәмәтшаның ҡолағына салғы яныған тауыш ишетелеп ҡалғандай булды. Бынау ише урманда кемдең салғы тотоп йөрөүе бар? Тауыш килгән яҡҡа сама тартып бер аҙ үткәс, бөҙрә ботаҡтарға уралып торған зәңгәр төтөн төҫмөрләнде. Ә-ә, ана эш нимәлә. Ҡарағаслыҡ ҙур түгел икән. Уның ашаһында асыҡ урындар башлана. Шул асыҡты урталай ярып үткән үҙәк ҡабағында биленә хәтлем сисенеп ташлаған йөнтәҫ

бирәү ең һыҙғанып бесән саба. Унан алыҫ түгел ағаслыҡ ҡырында быҫҡыған усаҡ өҫтөнә йомро төплө сүлмәк эленгән. Күренеп тора: йүнсел әҙәм, эше лә бара, ашы ла бешә...

Бесәнсе янына барып туҡтаған Мөхәмәтша айырым ҡыҙыҡһыныу менән уға ҡарап торҙо, әммә тегеһе барыбер шәйләмәне: эшенә мөкиббән киткән ине.

– Здравствуй, лесной человек! – Мөхәмәтшаның көтөлмәгән сәләменән ныҡ һиҫкәнгән «йөнтәҫ» шул урында шып туҡтаны ла ҡуйҙы. Хатта сираттағы бер услам үләнде йығырға тип һелтәнгән салғыһы ла шул килеш ҡатып ҡалды. Ул, башын кәүҙәһе менән ҡуша әкрен-әкрен генә бороп, артына әйләнде. Әйләнде лә, ҡобараһы осоп, ҡурҡынған ҡарашы менән юлсыны ҡапшаны.

– Ну, яҡташ, ҡотто алдың бит, әй, – тигән булды шунан, ә үҙенең Сыбай ҡашҡаға төбәлгән күҙҙәре ут булып яна ине. Мутлыҡ сәскән күҙҙәрҙең ялтырап китеүен үҙенсә гөман иткән Мөхәмәтша:

– Нимә, оҡшаймы толпар? – тип йылмайҙы.

– Толпарҙың да ниндәйе бит әле! Ябай ат түгел был, ә әкиәт дөлдөлө! Оҡшамай һуң... – Һушына килергә өлгөргән «йөнтәҫ» Сыбай ҡашҡаны үлтергәнсе маҡтап ташланы. – Күпме йәшәп тә, бындайын ғүмеремдә күргәнем юҡ.

Ҡомһоҙ ҡарашын Сыбай ҡашҡанан айырып ала алмаған был әҙәмдең йылҡы малын яҡшы белгәнлеге шунда уҡ күҙгә ташлана.

– Мине Савелий тиҙәр. – Ул Мөхәмәтшаның ҡаршыһына килеп, ҡулын һондо. – Савелий Петрович.

– Мухамет-ша.

– Ҡайҙан килеп, ҡайҙа китеп барыш былай, Мухаметка?

– Ҡытай иленән Урал тауҙарына.

– Оһо! Ат менәнме?!

– Шулай тура килде...

– Ну шаянһың да икән, приятель? – Савелий яһалма шарҡылдап көлгән булды, – шаштырыуҙың да сиге була однако...

Башы-күҙе уйнап торған «йөнтәҫ» аҫтыртын ҡарашы менән һаман Сыбай ҡашҡаны ашаны: һоғоноп ҡына ҡуйыр ине, хәленән килмәй. Тик ошоно башына ул-был уй инеп тә сыҡмаған Мөхәмәтша һиҙмәне.

Сәй артына ултырғас, Савелий йонсоуы йөҙөнә сыҡҡан мосафирға бөгөн үҙендә ҡунып китергә тәҡдим яһаны. Күптәнән инде бының ише йылы һүҙ ишетеп, йомшаҡ түшәк күргәне булмағанлыҡтан, ошоно ғына көтөп ултырған мосафир, уйлап та тормаҫтан, ҡыуанып риза булды ла ҡуйҙы.

Йорт хужаһы Сыбай ҡашҡаны төнгөлөккә нығын итеп төҙөлгән оло аранға япты ла күгәнгә кәпәс дәүмәллек йоҙағын элеп ҡуйҙы. Күңеле тынысланған Мөхәмәтшаның иғтибарын шунда ишек алдындағы ағас сөйҙә элеүле торған тимер сылбырлы тышау йәлеп итте. «Ниндәй шәп итеп эшләнгән, ә. Ныҡ та, ышаныслы ла, – тип уйланы ул, күҙе ҡыҙып, – тышауҙың бындайы бер ваҡытта ла өҙөлмәйәсәк...»

Утлыҡ солансаһында йоҡларға ятҡан мосафир, йылдар ағышында ҡанына һеңешеп бөткән ғәҙәте буйынса, таң һыҙылып, ҡоштар уяна башлаған мәлдә тороп тышҡа сыҡты. Күтәрмәгә баҫҡан көйө серле лә, шомло ла тынлыҡҡа ҡолаҡ һалып торҙо. Еңелсә кешнәп гелән тауыш бирер Сыбай ҡашҡаның бөгөн нишләптер өнө-тыны ишетелмәне. Сәйер. Әлеге хәлдең тиктәҫкә түгел икәнлеген һиҙеп алған Мөхәмәтшаның күңелен өшөтөп, борсолоу ғәләмәте үтеп китте. Шул әҙере аран янына килеп еткән ат хужаһы ишек ярығына ауыҙын терәне лә:

– Сыбай ҡашҡа! – тип шым ғына өндәште. Ләкин ҡараңғы һарай эсендә шипкерт тойолманы. Ат юҡ ине. Шулай шул, ана, йоҙаҡ урынында, ә ишек күгәне

шаҡарып һурылған. «Урлағандар»! – Йөрәге жыу итеп ҡалған Мөхәмәтшаның башынан үткән тәүге уй ошо булды. Ул йәһәтләп йорт хужаһын уята һалды.

– Савелий ызнакум, тора һал әле, ат юҡ!

Тертләп киткән Савелий тороп ултырҙы ла, күҙҙәрен ыуалай-ыуалай, мәғәнәһеҙ һорауҙар яуҙырҙы:

– Ә?! Нимә тинең? Нисек юҡ? Ҡайҙа?

Уның тауышҡа туйтанлап килеп сыҡҡан йыуан ҡатыны иренә үпкә белдергәндәй иламһыраны:

– Тор, ана, ихатала кемдер йөрөй шикелле, тип әйтмәһәм – бер асыу. Сығып ҡарарға ирендең бит. Кеше алдында ояты ни тора. Хәҙер ни эшләйбеҙ инде, йә?..

– Сеү! Исмаһам, һин мыжыма, бисәкәй. Былай ҙа баш ҡатып торғанда. Бар, инеп ят урыныңа! – Савелий ҡоро һаламға ҡапҡан ут шикелле тоҡанып китте. – Ирең эшенә ҡыҫылма, тип күпме әйтергә була, ә?!

Хәләл ефете иргә ҡаршы ҡабат һүҙ әйтеп тороуҙы кәрәкһеҙ һананымы, әллә сираттағы туҡмаҡтан шикләндеме, шәрә арҡаһын ялтыратып, өндәшмәй генә төпкө өйгә инеп китте. Шулай ҙа артынан ишек ябылыр саҡта уның: «Әлеге шешәләш әшнәләреңдән башҡа кем булһын. Эйәләтмә шуларҙы, тигәнде ҡолағыңа элә беләңме...» – тигәне асыҡ ишетелеп ҡалды. Ҡатындың һуңғы һүҙҙәре Мөхәмәтшаны кинәт һиҫкәндерҙе:ниндәй әшнәләр хаҡына һүҙ алып бара был бисә? Уғрылыҡ әллә алдан уйлап эшләнелгән яман эш булдымы, тип һағайҙы ул.

– Ҡарале, Савелий, этең бит һинең һәләк уҫал. Өрмәй-итмәй генә ат ҡараҡтарын ни рәүешле аранға үткәрер икән? – Ул, ҡунаҡсыл өй хужаһын ҡапылғара һеркелдәтмәҫкә тырышып, бер ҡатлыраҡ ҡыланды, – бәлки, мәйтәм, таныштарың булғандыр...

– Ниндәй таныш? Бурҙар араһында минең таныштарым юҡ. Булмаҫ та! – Тегеһе оторо ярһып китте.

– Аптырағандан әйтәм инде...

– Үҙем дә, бына, аптырайым, Мухаметка. – Хужа ике ҡулын йәйеп, бот сапты. – Этемдән барыһының ҡото осоп тора. Ошоғаса малыма ҡағылғандары ла юҡ, мин дә кешенекенә ҡул һуҙмайым...

Савелийҙың һәр хәрәкәтендәге кеүек, һөйләгән һүҙҙәрендә лә яһалмалыҡ ярылып ята. Бынһын Мөхәмәтша шунда уҡ һиҙеп алды. Ана, күҙҙәрен ҡайҙа йәшерергә белмәгән яңы «ызнакум»ының ҡырын ғәмәлдә ғәйебе юҡ түгел икәнлеге ап-асыҡ. Әммә ҡоро һүҙ менән иҫбат итеп ҡара ошоно. Уғры ул, тип бер кем дә өҙөп кенә әйтә алмай, сөнки хужа ятҡан еренән бер ҡайҙа ла сығып йөрөмәне.

Оятһыҙ ялған алдында көсһөҙ икәнлеген аңлауҙан төшөнкөлөккә бирелә башлаған Мөхәмәтша, ярһыуын баҫырға тырышып, тегеләй-былай йөрөштөрҙө. Ҡабат-ҡабат асып, һарайҙы ҡараған булды, гүйә, ниндәйҙер мөғжизәгә өмөтләнә ине. Ул Сыбай ҡашҡаһының йәнә юғалыуына һаман ышанып етмәй һымаҡ. Әйтерһең, уныһы әле генә ҡайҙалыр сығып киткән дә быны-бына ихата тултырып килеп инер кеүек...

Үткән осраҡтағы кеүек, кәрәмәттең ҡабатланыуына өмөт бағлаған Мөхәмәтша менән ҡыланыштары ҡырҡа үҙгәреп киткән Савелий утар тирәһендәге әрәмәлектәрҙе кисеп, ҡыуаҡ араларын, шыйыҡ урманды байҡап ярты көн үткәрҙеләр. Әммә ләкин аттың үҙен түгел, эҙен дә таба алманылар. Ат ҡумырыҡҡа төшкән балта ише юҡ булды ла ҡуйҙы. Ярай, яҙмағас яҙманы инде, тип хәйерһеҙ яҙмышына күнгәндәй иткән Мөхәмәтша төш ауышҡанда урыҫ менән теләр-теләмәҫ кенә хушлашырға мәжбүр булды. Бара биргәс, күңелендә ауыр тәьҫораттар

ҡалдырған йортҡа боролоп, һаман ҡапҡа төбөндә тапанған яңы «ызнакум»ына ҡысҡырҙы:

– Ыслушай, ыстансаға юлды өйрәтһәң ине, ә.

– Уныһы тағы нимә була? – Савелий ауыҙын асты. Томаналыҡтың сигенә сыҡҡан икән был наҙан стансаның ни икәнлеген белмәй.

– Тимер юл буйында, поездар туҡталып китә торған урын.

– Ә-ә, беҙҙә юлдың тимере юҡ. Беҙҙә ям юлы ғына...

– Һә-әй-й! Һиңә хәбәр һөйләп торған мин алйот. – Мөхәмәтша әсенеп ҡул һелтәне: – Тфү, йәлсемәгерҙәр!

Эйелгән баш менән үтә бошонҡо кәйефтә сығып китһә лә, Мөхәмәтшаның өмөтө бөтөнләйгә өҙөлмәне: Сыбай ҡашҡаһы бер тапҡыр әйләнеп килгәнде, ниңә икенсегә килмәҫкә? Бәлки, был юлы ла...

Асыу ҡатыш әрнеүе алҡымына килеп тығылыуҙан ғәйрәтләнеп киткән Мөхәмәтша арыу-талыу белмәй атланы ла атланы. Шулай ҙа бөгөн ул килгән юлына әйләнеп йышыраҡ ҡарап ала, һәр төрлө тауыш-ауаздарға ҡолаҡ һалып оҙағыраҡ тора.

Яңғыҙ ҡалыуына бер нисә көн үтеүгә, күңел төпкөлөндә быҙлаған өмөт сатҡылары бөтөнләйгә һүрелде: был юлы әйләнеп килмәне уның аты. Эсе ныҡ бошҡанда моңайып китеп йыр һуҙҙы:

*Эскенәйем боша, йөрәгем яна*
*Тыуған илем ҡайтып күрмәгә.*

Йәндең эсен-тышҡа әйләндерер башҡорт моң-көйөнән болоҡһоуҙары бер аҙ баҫыла төшкән һымаҡ була ла ул, әммә оҙаҡҡа түгел. Бер аҙҙан күңел ғазабына әйләнгән үкенес тойғоһо йәнә йөрәген өйкәп, йәнен өҙгөсләргә тотона. Ҡайҙан тап булдың минең юлымда, әй, хайуан, тип үкенә биреп тә ҡуя. Осрамаһаң, белмәҫ тә, күрмәҫ тә инем үҙеңде, үкенесе лә булмаҫ ине.

Көн йылыһын һаҡлаған таш ҡыуышында йоҡларға ятҡан Мөхәмәтша сәйер ҙә, фәһемле лә төш күрҙе. Имеш, уның тал аттарға атланып йөрөгән малай сағы. Хәҙер инде мәрхүм бер нисә дуҫы менән ул ниндәйҙер аттарҙы ҡайҙалыр ҡыуып бара. Ҡулында әллә һалабаштан, әллә сүс бауҙан  ишелгән сыбыртҡыһы бар. Башҡаларҙа уныһы ла юҡ. Бына ул баянан бирле ыша бирмәй сабышып маҙаға тейгән ҡолонсаҡтарға сыбыртҡы йораты менән киҙәнмәксе итте. Ынтылыуы булды, араға өйөр айғыры килеп ҡыҫылды. Ажғырып торған аҫау айғыр, ғәжәп, ни сәбәптәндер арты менән ташланды. Йыуан да, һимеҙ ҙә арт һанын уйнатасойорғота, ул һаман яҡынлаша. Ҡурҡышынан ҡыбырлай ҙа алмаҫ хәлгә еткән малайҙы бына-бына иҙгесләп ташлай инде. Уҫлаптай тояҡтары күҙ алдында ялтйолт итеп ҡала. Абайлабыраҡ ҡараһа... Сыбай ҡашҡа ла баһаң!

– Сыбыртҡыңды ташла, Мөхәмәт! – тип ҡысҡырҙы шунда иң яҡын, иң тоғро дуҫы, – юна белмәйһең икән, балтаға тотонма!..

– Юна белмәйһең икән... – Ул сыбыртҡыһын йәһәт кенә ситкә ырғытты. Ә ярһыу айғыр шул әҙере тынысланды ла, бер ни булмағандай, һин дә мин китте лә барҙы...

Һаташып баҫлығыуҙан шыбыр тиргә батып уянған Мөхәмәтша уйға ҡалып ятты: «Нимә булды был? Юна белмәйһең икән, балтаға тотонма...Тынысһыҙ урынға тура килдеме? Бәлки, яйһыҙ ятҡандыр? Әллә Сыбай ҡашҡаһының ошо рәүешле ризаһыҙлыҡ белдереүеме? Шулайҙыр. Күрәһең, үҙен һаҡлап тота алмағанға үпкәһе ҙурҙыр. Әллә... Төшөңә мәрхүмдәр керһә, яҡшыға юра, ти торған ине өләсәһе, бәлки, атының иҫәбе табылырҙандыр. Йә Хоҙа, төшө юш сығып, барыһы ла һәйбәт булһын инде...

– Ә-әһә-һә-әй-й! Ҡайҙа һин, Сыбай ҡашҡа-ам? Кем ҡулындаһың ошо мәлдә-ә? Мин һине көтә-әм, ишетәһеңме-е?! – Оло яланға килеп сыҡҡан Мөхәмәтша, үҙен-үҙе тоймайса, ярһып ҡысҡырҙы. Ошо мәл, уға яуап биргәндәй, ҡайҙалыр уң ҡулда, шымтайып торған өйкөм ҡулҡы ашаһында, ҡыңғырау сыңы ишетелеп ҡалғандай булды. Һиҫкәнеп киткән Мөхәмәтша тауыш килгән яҡҡа боролоп ҡараны. Унда бер йән эйәһе лә күренмәй. Бынағайыш, ҡолағына әллә юҡ-бар тауыш салына башланы? Хәйер юҡ та, еҙ сыңы, ана, ҡабатланды. Шунда уҡ сауҡалыҡтың был яғындағы оҙон үләнле уйһыулыҡтан күмәк йылҡы сабышып сыҡты.

Ошо урында Мөхәмәтшаны түҙеп торғоноҙ һағыш быуып алды: Һаҡмар туғайында ла аттар ошолай иркенләп китеп йөрөр ине лә, киске томан араһынан еҙ ҡыңғырау тауыштары әллә ҡайҙарҙан ишетелеп торор ине. Ҡолондарын барлаған бейәләр һирәк-һаяҡ мырҡылдашып ҡуйһа, тегеләре инәләренә сырыҡ-сырыҡ яуап бирә... Һай, үткән ғүмер!

Яңғыҙ кешене күҙгә лә элмәгән йылҡы, үләне тәпәшерәк урынды һайлап, тыныс ҡына утларға тотондо. Фәҡәт төпкөл ауылдарҙа ғына була торған ошо елкендергес күренештән тамам йөрәкһегән Мөхәмәтша сыҙаманы, иренен бөрә бирҙе лә әсе итеп һыҙғырып ебәрҙе: «Фи-иу-у!» Аҙағынан, хыялый кеше һымаҡ, ҡысҡырып һөрән һалды:

– Ә-әй, ирекле малҡайҙа-ар! Минең ҡашҡамды күрмәнегеҙме-еү?

Уның баҙыҡ тауышын ишетепме, әрәмәлек араһынан ниндәйҙер әҙәм башы пәйҙә булды. Ялбыр бүрек кейгән баш ҡыҫҡа ғына ваҡытҡа суҡайып торҙо ла шунда уҡ юҡҡа сыҡты. «Ат ҡараусы булды, шәт», – тип уйлаған Мөхәмәтша баш күренеп ҡалған яҡҡа текләп күпме көтһә лә, уныһы башҡаса тойолманы.

Сыуалышлы уйҙарға бирелеп мөкиббән барған Мөхәмәтшаны ҡайҙалыр ишетелгән ат тояғы дөпөлдәгәне һағайтты. Ғәжәпһенә төшкән мосафир, туҡталып, тағы артына боролдо. Байтаҡ ҡына арауыҡта уға табан тышаулы ат саба ине. Уны ҡайырырға маташып, яңғыҙ һыбайлы сәбәләнә. Ләкин тегеһе, үҙенең ул яғына ла, был яғына ла сығып маташҡан һыбайлыға ыша бирмәй, туңҡанлап һаман алға барыуын белә. Енләнеп киткән һыбайлы, ахырҙа, бер нисә быуынлы сыбыртҡыһын эшкә ҡуша. Ул, уңлы-һуллы һелтәнеп, меҫкен аттың һырт буйын һыҙырырға тотона. Һис ҡыҙғанып тормай бешә генә. «Юна белмәйһең икән, балтаға тотонма...»

– Үәт мәғәнәһеҙ! Шулай итеп кеше мал көтә буламы? – тип үҙ алдына үртәлә Мөхәмәтша. – Бар бит ҡанһыҙ әҙәмдәр.

Яһилдың хайуанды ғазаплағанын күрмәҫ өсөн, ул ҡырҡа боролдо ла ары китте һәм... ҡапыл ишетелеп ҡалған сыңғыр кешнәүҙән шып туҡтаны: кешнәү тауышы таныш һымаҡ...

Шул урында Мөхәмәтшаның һулҡылдап ҡына барған йөрәге өлп итте лә ярһып туларға тотондо: нужәли... Ә ат, уны баҫтыра төшкән һыбайлы ла яҡынлашҡандан-яҡынлаша. Ял-ҡойроғо ҡаршы елгә ялбырап килгән хайуан тағы кешнәне. Кешнәүе был юлы күпкә әрнеүлерәк тә, һағышлыраҡ та ишетелде. Туҡта!!! Шул түгелме һуң?! Шул! Йә Хоҙа! Был тарафтарға тағы нисек килеп тарыған ул? Мөхәмәтша шул рәүешле ни уйларға ла, нимә ҡылырға ла белмәй торған арала, бер-береһе өсөн йән атҡан хәләл аты уның ҡаршыһына уҡ килеп туҡтаны ла, ауыр ушылдай-ушылдай, башын уның яурынына һалды. Ат тышаулы көйө оҙаҡ сабыуҙан аҡ күбеккә батҡан. Ул хәҙер мал йәнле хужаһының яҡлашыуына өмөтләнә һәм күкрәк төпкөлөнән ҡыҙғаныс өн сығара: ҡотҡар мине, йәнәһе, ошо яуызлыҡтан! Ә шул арала килеп еткән һыбайлы ажарланып аҡырҙы:

– Ебәр, инәнде... Нимәһенә тотоп тораһың кеше малын?

– Әфәнде, беренсенән: мин атты тотоп тормайым, ул үҙе килеп һыйынды. –

Эштең айышына төшөнә башлаған Мөхәмәтша мөмкин тиклем тынысыраҡ булырға тырышты.– Икенсенән: ышанаһыңмы-юҡмы, егет, был – минең ат.

Бер мәлгә баҙап ҡалған эре һөйәкле яшыҡ һыбайлы, упайып киткән күҙҙәрен кепесләтә-кепесләтә, ат менән кешегә алмаш-тилмәш ҡарап һағайҙы.

– То есть... Как-так һинең ат?.. – Иҫенә килә башлаған яшыҡ ир һуп бармағын һамай тирәһендә әйләндергеләне. – Һин нимә, мужик, әллә тегеләйерәкме?

– Күрмәйһеңме, нисегерәк һағынған. Һырығып килә. – Мөхәмәтша аттың еүеш муйынын ҡосаҡлап, айырым һөйөү менән маңлайынан һыйпаны. – Йә, әйт инде, ят хайуан шулай ҡылана аламы? Йылҡы көткән кеше, мәгәр ул намыҫлы ла икән, быныһын ғына белмәй булмаҫ.

– Аһ, шайтан! Хаҡты һөйләп тик тораһың түгелме, мосафир? – Юлында осраҡлы ғына тап булған кешегә ышҡынып-наҙланырға тотонған уҫлаптай атҡа хайран киткән һыбайлы күҙ алдында йыуашыны ла ҡуйҙы. Фекер төйнәп бер аҙ торғандан һуң: – Ә уның ысынлап та һинеке икәнлеген иҫбат итә алырһыңы? Мин, ярай, әйткәнеңә ышанырмын да ул...

– Кәк же итмәй? Хәҙер иҫбатлайбыҙ уны. – Мөхәмәтша ҡәҙерләп төрөлгән ҡағыҙҙарын түш кеҫәһенән сығарҙы. – Бына уның дәлиле. Ә быныһы – үҙемә дөкәмит.

Эйәренән төшә һалған һыбайлы ҡағыҙҙарҙы ҡулына алды. Күҙҙәрен ҡыҫа биреп, күренеп торған ауырлыҡ менән унда яҙылғандарҙы уҡыны. Был яҡтан, күрәһең, белеме лә, оҫталығы ла самалыраҡ ине. Шулай ҙа аҙағынаса уҡып сыҡты. Ахырҙа күтәрелеп  Мөхәмәтшаға ҡараған яшыҡ әҙәмдең йөҙ-сырайында аптырау ҡатыш үртәлеү ғәләмәте сағылып китте.

– Шайтан! – Ул яратҡан һүҙен ҡабатланы. Документтарҙы кире һондо, – Тимәк, ултыртҡандар. Кем бит әле – бер туған ағайың, шаҡшы! Эх, Савелий Петрович, кемдән-кемдән, әммә ләкин һинән көтмәгәйнем бындайын...

– Савелий тинеңме? – Таныш исемде ишетеп ҡалған Мөхәмәтша ҡабатлап һораны.

– Эйе лә. Минең ағайым... Ошо мөғжизәне ул элекке көн генә миңә килтереп һатҡайны. Күрәһең бит, яҙмаған булған.

– Ызнашит, ағайың икебеҙҙе лә алдаған...

– Нисек икебеҙҙе лә?

– Мин бит уға ҡуна төшкән инем. Ат уның һарайынан ғәйеп булды.

– Ана нисек! Тимәк, урландыны һатҡан! – Тегеһе тешен ҡыҫып, уртын сәйнәне. – Тфү! Ниндәй түбәнселек! Мәсхәрә! Ат ҡараҡтары затыбыҙҙа булғаны юҡ. Ә бында иң яҡын туғаның. Бына һиңә Савелий. Бына һиңә...

– Тыныслан, егет. – Мөхәмәтша уның арҡаһынан атайҙарса ҡаҡты. – Тормош – кәрәмәт, унан былайыраҡтары булғылай...

«Минең малай ғынамды, ана, кешеләр тотоп...» – тип әйтмәксе булғайны ла, әйтә алманы. Теле әйләнмәне. Урынһыҙға нимәһенә  ҡайғың менән һатыулашып торорға...

– Мин тынысланырмын да ул, мосафир, бына йән,.. ҡалған хәтер... – Эйәренә етеҙ генә менеп ҡунаҡлаған урыҫ башта ҡатыраҡ һуғылыуына ғәфү үтенгәндәй итте: – Ауыр һүҙ әйткән булһам, бирғәйбә, мин бит белмәнем.

– Ничаво, һүҙҙең ундайына ғына беҙ инде күнеккән. – Мосафир ҡәнәғәт ҡалды. – Үҙеңде лә бәхет ташламаһын.

– Ә атың шәп, туған. Уны берүк һаҡла, башҡаса юғалта күрмә. – Һыбайлы туҙан борхотоп, килгән яғына кире сапты.

– Яҡшы кеше әйткәстен, тырышырбыҙ. – Яҡшы кешене йылмайып оҙатҡан Мөхәмәтшаның күңеле күтәрелеп китте. – Әй, тукта, ызнакум, тышауыңды алып кит!

«Ызнакум»ының исемен һорашырға ла башы етмәгән мосафирҙың һуңғы һүҙҙәре һауала эленеп ҡалды. «Була бит, әй, әҙәмдәр! Бер туған ағай-эне, ә айырма – ер менән күк араһы», – тип уйлап ҡуйҙы һыбайлыны эске кисереш менән оҙатҡан Мөхәмәтша.

Сыбай ҡашҡа теге көн Савелий ихатаһында күргән сылбырлы тышау менән тышалғайны. Уныһы хайуан йән аямай сабыуҙан ышҡылып, сенсек ҡойҡаһын үтәнән-үтә телгән. Нисек итеп һеңерҙе ҡырҡмаған?! Һай, тиген аҫтыртын түгел икән Савелий тигәндәре! Харап итә яҙған, ә, малҡайҙы.

Ыржайып торған сей яранан һарҡып сыҡҡан ҡарағусҡыл ҡан тояҡ буйлап ергә тама. Бәкәл йөндәре ҡан ҡатыш тупраҡҡа ҡатҡан. Мөхәмәтша, ни саҡлы абай ҡыланырға тырышмаһын, ауыртыуға сыҙап тора алмаған аты тышауҙы һалдырғанда тыпырсынып ҡурш-һарш килде, тик тормай ыҙалатты.

– Йә, йә, малҡай. Шулай үҙеңә яҡшыраҡ булыр. Аҙға ғына түҙ инде. Хәҙер, хәҙер рәхәтлектең сигенә сығырһың. Бер ҡыйындың – бер рәхәте, тиҙәр беҙҙә... – Ошолай һөйләнә-һөйләнә, һыуланып шешенгән беше бауҙы сисеп маташҡан Мөхәмәтша кинәт һиҫкәнде: атының йүгәне юҡ түгелме һуң? Юҡ шул! Йүгәнһеҙ көйө ул артабан нисек итер?

Ҡапылғара аптырап ҡалған Мөхәмәтша оҙаҡ ултырманы. Боронғоса, тышауҙы аттың муйынына уратты ла алға әйҙәне. Малай саҡтарында улар шулай итәләр ине. Бына хәҙер килеп, әлеге ысулдың тағы кәрәге тейҙе. Олатаһының яйы сыҡҡан һайын: «Өйрәнгәнеңде хәтереңә һеңдерә бар, улым, кәрәге бер теймәһә – бер тейер», – тигәне бушҡа булмаған икән. Күҙ алдында йыуашып киткән Сыбай ҡашҡа тыңлаусан ҡиәфәттә, күндәм генә баҫып хужаһының артынан йыбырланы. Эйе, ныҡ һыҙланыуҙан ул йыбырлап ҡына бара ине.

Бер аҙ үтеүгә, аҡыллы хайуан ғәҙәти булмаған етәккә ҡәҙимгесә генә күнегеп тә алды. Ошоно күреп күңеле ирегән Мөхәмәтша, тәүәккәлләп, уның иҫке яра эҙе йәмһеҙләп торған арҡаһына менеп ултырҙы. Тышау-йүгәнде тегеләй-былай тартҡылап, атты ҡыуҙы. Уныһы, йөнтәҫ ҡолаҡтарын ҡайсыландырып, ипле генә алға барыуын белде. Бына бит, яйы сыҡты! Шулай ҙа ат малының һәр ҡайһыһы ла ошоноң ише йәпһеҙ «йүгән»де өнәп етмәй аптырата. Әлеге идара итеү ысулын бары аҡыллы аттар ғына тиҙ төшөнә. Аллаға шөкөр, Сыбай ҡашҡа шундайҙар иҫәбенән булып сыҡты. Юғиһә, атлы көйөнә йәйәү барыр ине әле. Мәрҙәс тә икәнһең, Сыбай ҡашҡа!

Мөхәмәтша сираттағы төндә урманда, ҡарағай мүгенә уралған килеш, серәкәй һимертеп аҙапланды. Икенсеһен бәләкәй генә ауылда йәшәп ятҡан яңғыҙ ҡарттың өйөндә ҡунып сыҡты. Өсөнсөһөн иһә, кинәт башланған йәшенле ямғырҙан ҡасып, ғәләмәт бейек ҡая таш аҫтында өңөрәйеп торған ҙур ауыҙлы мәмерйә эсендә кәкрәйеп үткәрергә тура килде. Хәйер, нужа бабай ҡыумаһа, шом сәсеп торған быны ише тау тишегенә ғүмере инмәҫ ине. Мөхәмәтша бала сағынан мәмерйәләрҙән ҡурҡа.

Нимәнән шикләнәһең – шул мотлаҡ килә бит ул. Мөхәмәтшаны ошо урында билдәһеҙ зат баҫты. Ғәҙәттәгесә, бөтмәҫ-төкәнмәҫ уйҙарға батып ятҡанында, мәмерйә төбөнән ата бесәй найылдағанға тартым ауаздар ишетелә башланы. Был нимә? Ниндәйҙер йәнлекме, әллә ошо үҙе һалҡын, үҙе ҡотһоҙ соҡорҙоң эйәһе-фәләнме? Ныҡ ҡына хәүефләнһә лә, ул, йылыҡан урынынан ҡуҙғалырға иренеп, мылтығын ҡосаҡлаған көйө ята бирҙе: найылдар ҙа бөтөр, ни эшләр тиһең.

Ошоғаса ишеткәне булмаған ят тауыштарҙың әтнәкәһен Мөхәмәтша, яҡтыра төшөп, таш ҡыуыштан сыға башлағанда белде: мәмерйә ауыҙында, уның юлын

быуып, бәләкәйерәк быҙау дәүмәллек һеләүһен ултыра ине. Тимәк, ошонда уның өңө бар, ә теге иләмһеҙ-ямаҡ тауыштарҙы кейектең ашарға таптырып дауланған ас балалары сығарған булған. Бына хәҙер бөтәһе лә асыҡланды. Асыҡланыуын-асыҡланды ла ул, ләкин нисек итеп бынан имен-аман ғына сығып китергә? Ай-һай, яман була бит ул сабыйын ҡыҙғанған инә һеләүһен. Ошо үҙе матур, үҙе аҫтыртын кейек тарафынан баштары ҡырҡып ташланған кешеләр хаҡында күп ишеткәне бар...

Мөхәмәтша улай итте, былай итте, ҡысҡырып тауыш бирҙе, таш һелтәне, һыҙғырып та ҡараны, әммә йәшел күҙҙәре бәзерәйеп торған ҡырағай бесәй урынынан ҡуҙғалырға уйламаны ла. Күрәһең, ул үҙе лә кеше менән аттан шөрләй ине. Ахырҙа, аптырағас, мылтығын алып һауаға дөмпөлдәткәндән аҙаҡ ҡына, һеләүһен шәүлә ише йәлп итеп ҡалды ла юҡ булды. Шунда ғына Мөхәмәтшаның иҫенә төштө: их-ма, яһауы бит һыңар бөртөк кенә ине! Мылтығы уның хәҙер мылтыҡ түгел, торғаны бер кәкре таяҡ ҡына, ташлап киткәндә лә була. Ташламаны: нужәли берәй урында яһаулыҡ табылмаҫ?..

Тыныслана төшөп күпмелер үткәс, Мөхәмәтшаға япа-яңғыҙ болан балаһы тап булды. Ул мөкиббән китеп ваҡ уҫаҡлыҡ араһында һәрмәнә ине. Бәләкәс кейек, яҡынлашып килеүселәрҙе шәйләп, ҡапыл ситкә һикерҙе лә, туҡта әле, былары тағы кемдәр, тигән һымаҡ, ҡатып ҡалды.

Ҡара, ниндәй матурлыҡ! Бындайын да илаһи зат булыр икән! Ошо матурлыҡтан ҡарашын айырып ала алмаған Мөхәмәтша атынан төштө, һаҡлыҡ менән уға яҡынлаша башланы. Ғәжәп, тегеһе урынынан ҡымшанманы ла, сөм-ҡара күҙҙәрен мөлдөрәтеп, кешегә ҡарап тороуын белде. Бына кеше ҡырағай кейектең маңлайына ҡағылды, йылҡылдаҡ арҡаһынан һыйпаны. Болан балаһы нәфис муйынын һона биргән дә һаман тора. Үҙе шул тиклем ҡәнәғәт, әйтерһең, күптәнге танышын осратҡан да иркәләнеп туя алмай. Моронға-морон терәшеп Сыбай ҡашҡа менән дә таныштылар.

– И-и, мәхлүк, ни сәбәптән ошолай бер үҙең генә йөрөп ятаһың? Инәң ҡайҙа һинең? – тип һөйләнде күңеле йомшарып киткән Мөхәмәтша. – Кеше тигәнен күргәнең дә юҡтыр, шәт. Әҙәми заттың мәкерлеге менән сикһеҙ нәфсеһе әле башыңа төшкәне булмағандыр, шуның өсөн уның хаҡында әле белмәйһеңдер. Белгән булһаң, былайтып тормаҫ инең...

Ошо урында Мөхәмәтшаның башынан ҡапыл ғына хәтәр уй үтте: аслы-туҡлы килгәндә... Ризыҡты Тәңре уның юлына үҙе сығарып ҡуйған. Кәм тигәндә берәй аҙнаға етер ине... Шунан, үҙ уйынан үҙе арынырға теләп, әллә оялып, ҡул һелтәне: ҡуй юҡты, гүзәллектең ошондайына ҡулы күтәрелә буламы. Күтәрелгән хәлдә лә, тамағынан үтмәҫ. Хәләл малың булғанда – тағы бер хәл...

*Аҙаштырған болан балаһылай,*
*Яңғыҙ башым ситтә интегә...*

Кәйефе күтәлеп киткән мосафир йырлай-йырлай ары ҡуҙғалды.

Көллөһөнә риза булып, шөкөр итә килгән Мөхәмәтшаға бары яман эт-ҡош осрамаһын да яһил әҙәм тап булмаһын. Ҡалғанын нисек тә итер. Аслығы менән һалҡынын да, башҡа ауырлыҡтарын да еңеп сығырға була, тик үҙ-үҙеңә ныҡлы ышаныс ҡына кәрәк. Ышаныс һәм рух ныҡлығы. Рухың ҡаҡшап, үҙеңә ышанысыңды юғалттың икән – эш харап. Шөкөр, Мөхәмәтшала тегеһе лә, быныһы ла етерлек кимәлдә, хатта артығы менән. Ни өсөн тигәндә, ул ҡанатланып-осоп тыуған яҡтарына, балалары һәм башҡа әҡрәбәһе эргәһенә ҡайтып бара. Ә тыуған төйәгенә ашҡынған башҡортто, бар, тыйып ҡара!

***

Һәр төрлө мажаралар менән тулы ала-ҡола көндәр бер-бер артлы уҙып, үтәһе юлы ҡыҫҡарған һайын, Мөхәмәтшаның тулҡынланыу ҡатыш һағыныуы ла оторо көсәйә бара. Уның һағыш тулы йөрәге осрашыу көҫәй. Эйе, осрашыуға күп ваҡыт ҡалманы, ул быны бар булмышы менән һиҙә. Юлдың инде үткәненә ҡарағанда үтәсәге күпкә, бик күпкә кәмдер. Ана бит, ҡара урман барған һайын йоҡара ла, шыйыға ла, ағастарҙың ылыҫлыһы күҙгә күренеп кәмей, япраҡлылары арта. Йәйге елгә наҙланып, сайҡала-сайҡала, юлсыны сәләмләп ҡалған мең гөлсәскәле болондар, күбәләге менән иңкеше, башҡа төрлө бөжәге мыжғып торған дәү-иркен туғай-асыҡтар йышыраҡ осрай. Мөхәмәтша әкренләп ожмахтың бер киҫәге – Урал тауҙарына, ғәзиз тупрағына яҡынлаша. Оҙаҡламай аҡ яллы диңгеҙ ише сал ҡылғаны сайҡалып торған, шул мәңгелек ҡылған араһында тос бүҙәнәһе бытбылдаған, көнөн-төнөн күҙгә салынмаҫ тартайы зарыҡҡан, йомрандары боҫоп ятҡан, һауаһында көйгәнәге менән мүктәргеһе кәйелеп уйнаған, бөҙрә болоттары араһында бөркөтө йөҙгән икһеҙ-сикһеҙ далаһы башланыр. Унан инде Яйыҡ йылғаһына етергә лә күп ҡалмаҫ. Ә Яйыҡтан Һаҡмар башынаса ҡул һуҙымы ара...

Һирәк-һаяҡ туҡталып, үҙенә лә, атына ла ял биргән араларҙа Мөхәмәтша төпһөҙ зәңгәрлеккә төбәлә лә татлы хыялдарға бирелеүҙән әҫәрләнеп салҡан ята. Сыбай ҡашҡаһын ул хәҙер бөтөнләй бәйҙә тотмай, сөнки эҫенеп алған аттың ҡыуһаң да янынан китмәҫен яҡшы белә. Үҙ ғүмерендә йылҡының төрлөһөн күргән ир ат малының шул ҡәҙәре лә тоғро юлдаш була алыуына ҡат-ҡат хайран ҡала.

Еңелдән булмаған сәфәре ахырына яҡынлашҡан һайын, Мөхәмәтша ла шуға инана бара: баҡтиһәң, фани донъяла ҡайсаҡ, аңһыҙ эт-ҡош менән ҡырағай урмандағы ажғырып торған януарға ҡарағанда, бәғзе бер әҙәми заттан һағыраҡ булыуың лазым икән. Кешеләрҙең һәр төрлөһө бар, һәм ышаныс тигәнең дә бөтәһенә берҙәй булырға тейеш түгел. Элек, ауылда йәшәп ятҡанында, уның был хаҡта уйлап та ҡарағаны булманы. Әүәле ауылдаштары менән яҡташтарына ул үҙенә ышанғандай ышанһа, хәҙер, утын да, һыуын да кисеп ҡайтҡандан һуң, нисек булыр? Ә ниңә, уларҙан бер ваҡытта ла бер тамсы зыян күргәне булманы. Артабан да күрмәҫ. Сабыйҙарса бер ҡатлы ябайлыҡ менән ышанған кешеләре уның ышанысын һәр саҡ аҡлай килде. Бынан ары ла аҡларҙар. Әммә ләкин башҡа яҡтарҙа улай уҡ түгел икән. Хатта бер Хоҙайға табынған бәндәләрҙең дә араһында төрлөһө осрап ҡуя: бер ҡатлылары ла, ҡатлы-ҡатлылары ла... Эйе, ғәләмәт күп төрлө икән Хоҙай бәндәләре! Тәҡдире ҡушып, әлеге сәфәренә сыҡмаған булһа, Мөхәмәтша, бәлки, ошо хәҡиҡәтте ғүмере ахырынаса белмәҫ тә ине. Нисек әле теге йырҙа:

*Ҡарағай ҙа үҫер, ай, йәм өсөн,*
*Бал ҡорттары осор бал өсөн.*
*Яман ирҙәр үлер, ай, мал өсөн,*
*Яҡшылары үлер дан өсөн...*

«Яҡшы ирҙәр үлер дан өсөн» тип ҡалай хаҡ әйтелгән, ә. Шулай ҙа уларҙың дан өсөн үлгәненә ҡарағанда, мал хаҡына йәнен бирергә әҙерҙәре күбәйә бара түгелме? Һәр хәлдә Мөхәмәтшаға шулай тойола. Бәлки, ул, һуғыш михнәттәрен артығы менән кисереп, ғәзиз балаһын үҙ ҡулдары менән гүргә һалған ир, күңеле ҡата барыуҙан яңылышалыр ҙа. Йәки бына тағы:

*Ҡара ла ғына урман, ҡараңғы төн,*
*Яҡшы аттар кәрәк үтергә...*
*...Заманалар ауыр, йылдар ябыҡ,*
*Дуҫ-иш кәрәк донъя күтәргә...*

Шулай, кәрәк саҡта менеп сыҡҡандай атың менән иң терәшкәндәй дуҫың булғанда ғына, мәғшиәт ауырлыҡтары беленмәйҙер. Беленгән хәлдә лә, япа-яңғыҙ сағындағы һымаҡ, ул хәтлем үҙәгеңә үткәреп бармайҙыр. Ә атһыҙ ҙа, дуҫһыҙ ҙа ҡалыуҙың нисегерәк икәнлеген Мөхәмәтша инде яҡшы белә. Белә һәм шундай һығымтаға килеп ҡуя: иш иткән кешең менән икәү араһында ысын дуҫлыҡтың булыуы мотлаҡ. Ә инде яһалма ҡыланған булып, бер-береңде алдай йөрөһәң...

Иҫ итмәҫтән ниндәйҙер йылға ярына килеп сыҡҡан Мөхәмәтша тегеләй-былай ҡаранып байтаҡ торҙо: Тубыл тигәндәре ошо түгелме икән? Эйе шул, ана, үрҙәрәк Ҡурған ҡәлғәһенең селт аҡ диуарҙары ялтлап күренә. Яраббым, һау булғас, ул бит әүәлге аҫаба башҡорт ерҙәренә аяҡ баҫты. Ә ни эшләп әүәлге булһын? Башҡорт кешеһе бында хәҙер ҙә юҡ түгелдер. Тиҙерәк уларҙың берәйһе менән осраша һалырға ла рәхәтләнеп үҙ телеңдә һөйләшеп ултырырға ине.

Ошо үҙе татлы булыуға ҡарамаҫтан, тормошҡа ашмаҫтай тойолған уйынан әүәл болоҡһоп, ахырҙа, ата-бабалар төйәгенә килеп етеүҙән рухланып, ҡанатланған Мөхәмәтша, тонйорап ятҡан йылғаның тарыраҡ урынын һайлап, Сыбай ҡашҡаһын алға әйҙәне. Уныһы, һис ҡарышып тормайса, һыуға инеп тә китте. Йылға, ҡарап тороуға тыныс күренһә лә, эске ағымы ғәжәп көслө булып сыҡты. Ул оҙон юл үтеп, ныҡ йонсоған кеше менән атты юнышҡы урынына әләктереп алды ла йәлпелдәтеп түбәнгә табан ағыҙҙы...

***

...Кем нисектер, ә минең үҙемдең – аламамы ул, яҡшымы – бер ғәҙәтем бар: тота киләм дә ниндәйҙер ҡыйынлыҡ йә иһә ҡурҡыныс хәл алдында япа-яңғыҙы тороп ҡалған берәү өсөн урынлы-урынһыҙға борсола башлайым. Хатта ул хәлдең миңә бер ниндәй ҡағылышы булмағанда ла. Ошо сәбәпле мин кеше һымаҡ тыныс ҡына ултырып кино ла, йәштәр сәхнәлә ҡуйған тамашаларҙы ла ҡарай алмайым. Үҙемде үҙем ашап ныҡ бөтөрөнәм, хатта кеше күрмәгәндә генә илап та ебәрәм. Бына әле лә башымдан, анауы ҡайнап ятҡан дарьяны кисеп, ер аяғы ер башы ерҙән нисек кенә ҡайтып етә инде Мөхәмәтша ағай, тигән бошонҡо уй үтте. Аяу белмәҫ япондар араһында йөрөгәнеңдә лә, урманда юлбаҫарҙарға тәл булғанында ла, шулай уҡ айыу менән һеләүһен баҫҡанда ла уның өсөн һис ҡурҡмағанды был юлы ни эшләптер ҡурҡа башланым: ҡайтып еткән еренән һәләк була икән ағайым. Ажар йылғаның берәй өйөрмәһе йотоп ҡуйһа... Шулай уйлайым да үҙем тағы: «Ярай әле, эргәһендә дан аты бар: юҡ-юҡ тигәндә лә бер иптәш. Шыпа яңғыҙы һымаҡ түгел дә. Ул хужаһын йәбергә лә бирмәҫ, кәрәк икән, бәләнән дә ҡурсыр», – тип үҙемеде йыуатам да тыныслана төшәм. Үҙем тынысланған кеүек булам, әммә күңелем тыныс түгел. Уларҙың һәр икеһенә эш менән дә, һүҙ менән дә ярҙам иткем килә. Тик ҡалай итеп? Мин бында, ирәүән генә йоҡомһорап ятҡан Һаҡмар туғайында, йәйрәп китеп һыйыр көтәм, ә улар әллә ҡайҙа. Улар уҫал да, мәкер ҙә Тубыл тулҡындарында ағып бара. Ана, бер батып китәләр, бер күренеп ҡалалар...

Мул һыулы Тубылдың ҡайҙа ятҡанлығын да яҡшы беләм мин. Белмәҫкә һуң, быйыл ғына география дәресенән үткән инек. Себерҙең тигеҙ киңлектәрен иңләп аға ул. Уның буйлап хатта эреле-ваҡлы пароходтар ҙа йөрөй икән. Йылғаның шундайын Мөхәмәтша менән Сыбай ҡашҡа нисек итеп аша сығырҙар инде? Их, шул караптарҙың берәйһе генә килеп, ярҙам ҡулы һуҙһа икән. Мин баянан бирле, ян-яғыма ҡаранып, уларҙы көтәм. Ләкин караптың үҙе күренеү түгел, тауышы ла ишетелмәй. Харап булалар икән. Хәйер, нимәһенә өҙгөләнәм әле, Тубылдан былайыраҡ Ишем йылғаһын йөҙөп сыҡҡандарын...

– Улым, тием... Һиңә әйтәм, улым.

– Ә... Әү, олатай...

– Ойоп киттең инде әллә?..

– Юҡсы... Мин былай ғына... Уйҙарҙан онотолоп...

Әхтәм бабайҙың үҙе йомшаҡ, үҙе йылы усы өшөй башлаған иңбашыма ҡағылыуҙан һиҫкәнеп, Тубыл ярҙарынан ҡапыл ғына Һаҡмар буйына әйләнеп ҡайттым. Малайҙар ауыҙ йырып хихылдашҡан була. Берәүҙең дуҫтары, имеш. Йоҡлап киткән был, тигән булаларҙыр инде. Йоҡлатырһың мине! Шундайын да ҡыҙыҡлы, шундайын да мауыҡтырғыс хикәйәт һөйләгәндәрендә йоҡлап ята торған ғәҙәтем юҡ. Ана, лупыш Мәүли генә ул әкиәт тыңлағанда ла, кино ҡарағанда ла, башҡа тамашаларҙа ла  иҫ белмәй йоҡлай ҙа китә. Хатта дәрес ваҡытында ла йоҡоһона баш була алмай. Шул тиклем дә ғәмһеҙ әҙәм булыр икән...

Малайҙарҙың иғтибарын ситкә йүнәлтмәк булып:

– Олатай, ә, олатай, артабан нисек? – тип ҡыҙыҡһына һалам. – Аша сыға алғандармы икән Тубылды тегеләр?

Мин яңылышмайым: әле генә ауыҙ йырып ултырған дуҫтарымдың көләс йөҙҙәре шунда уҡ етди төҫ ала, барыһы ла бабайҙың ауыҙына инә яҙып тын ҡала.

– Ә унығы, балалар, иртәнге көнгә ҡалып торһон. Ни өсөн тигәндә, ана, малдар инде туйынып, ҡайтыр яҡҡа ыңғайланы. – Аҡ төшә башлаған күҙҙәрен хәйләкәр ҡыҫа биргән олатайыбыҙ һаҡалы менән генә  ауыл яғына ҡарап ҡуҙғалған һыйырҙар яғына ымланы. – Беҙгә лә ваҡыттыр, тим. Һеҙҙе әсәйҙәрегеҙ орошһа, миңә өләсәйегеҙ көйөр.

Ризаһыҙлыҡ менән геү итеп ҡалабыҙ:

– Һөйләп бөтөр инде, олатай!

– Иртәнгегә тиклем түҙеп буламы...

– Иртәгә мейеңде ҡайнатмаҫҡа һүҙ бирәбеҙ.

– Ҡайтып еткәндәрме-юҡмы икәнен генә әйтһәң...

Уйға батҡандай ултырған олатай серле йылмайып ҡуя.

– Шул көйө генә әйткәндең ҡыҙығы булырмы? Тәмле нәмә күп булмай, уландар, киләһе кискә лә сығығыҙ үрешкә, шунда барыһын да белерһегеҙ...

Беҙгә олатай ҡуйған шарт менән ризалашыуҙан башҡа сара ҡалманы. Урындарыбыҙҙан теләр-теләмәҫ кенә ҡуҙғалдыҡ та күп, хатта кәрәгенән артығын ашауҙан эстәре күбеп, һырттарына сыҡҡан һыйырҙарыбыҙҙы ҡайтыу яғына ыңғайлаттыҡ. Бөгөн Әхтәм олатайҙың һыйырын да беҙ ҡайырабыҙ, ә ул үҙе кәкре һаплы таяғына таянған да рәхәтләнеп кенә бара. Рәхәтләнеп бара, тиһәм дә, улай уҡ түгелдер. Һуғыштарҙа алған иҫке яралары борсомай ҡалмайҙыр. Бушҡамы ни таяҡҡа таянып йөрөй.

***

Өйҙә беҙҙе, эшем эйәһе малайҙарҙы, көлгә күмеп бешерелгән бер һыныҡ сөсө икмәк менән әле генә һауылған һөт, уларҙың аҙағынан йылы юрған аҫтында йомшаҡ түшәк көтә. Их, ҡасан ғына төн үтер ҙә, унан оҙон көн уҙып, йәнә кис етә инде! Сыбай ҡашҡа тарихы барыбыҙҙы баш-тояғыбыҙ менән арбаны ла ҡуйҙы. Ни менән барып осланыр ул? Улын юғалтып ҡайтҡан Мөхәмәтшаны ҡатыны нисек ҡаршы алыр? Шуны һәләк белге килә. Ошоларҙы уйлап ята торғас, мин, әкрен-әкрен генә барып, айыртылған һөт ише күкшел-аҡ томан эсенә инеп китәм...

Уйыңда ни булһа, төшөңә лә шул керә бит ул. Мин бөгөн төшөмдә Мөхәмәтша һалдат менән Сыбай ҡашҡаны күрҙем. Улар бейектә-бейектә, ҡыйғасланып торған шыйыҡ болоттарҙан да юғарыраҡ, йым-йым итеп балҡыған йондоҙҙар араһында талғын ғына осоп баралар. Ғәжәп, ҡайһы аралалыр атҡа ғәләмәт ҙур ҡанаттар үҫеп сыҡҡан. Ҡанаттарын һәлмәк һелтәп, ул ҡайҙалыр алға ынтыла, гүйә, рәхәтләнеп Тубыл һыуында йөҙә. Уларға ҡаршы талпыныл-талпынып аяғы

яралы яңғыҙ торна осоп килә. Инде осраштыҡ тигәндә, торна ҡапыл... йәп-йәш кенә егеткә әүерелә. Бәй, Фазыл да баһаң! Ниндәй бәхет: яралы булһа ла, Фазыл да тыуған яҡтарына әйләнеп ҡайта алған! Эй, әсәһе ҡыуаныр инде...

Ерҙән күктәгеләргә ҡулын ҡаш өҫтөнә ҡуйған берәү ҡарап тора. Был, әлбиттә, – Лотфулла. Ҡыуаныстан ул ҡолағына еткәнсе йырылған ауыҙын йыйып ала алмай ҙа ҡуя. Яуҙаштарының шулай имен-аман ғына ҡайтып килеүҙәренә кем шатланмаҫ? Лотфулла ла шат. Улар бөгөн барыһы ла бәхетле. Дуҫтарым менән беҙ ҙә хәтфә сирәмдә теҙелешеп торғанбыҙ ҙа, һауаға ҡарап, ауылыбыҙ ҡаһармандарын сәләмләйбеҙ: хуш килдегеҙ, ауылдаштар! Яуап итеп тегеләр ҙә ҡул болғай, ә Сыбай ҡашҡа сыңғыр-сыңғыр кешнәп ҡуя...

Урам яҡ тәҙрәбеҙ ҡаршыһында ат кешнәгән тауышҡа уянып китәм. Бәй, әле генә күҙ алдымдан үткәндәр төш кенә булған икән. Бары матур төш. Булһын әйҙә! Төштөң ошондай матуры көн һайын күренеп тормай. Матур төш тә ҡайсаҡ болоҡһоған күңелде ирәйтә лә төшөнкө кәйефте күтәреп ебәрә бит ул. Шуның өсөн уға, матур төштө әйтәм, и-и, әкиәт, тип өҫтән-мөҫтән генә ҡарарға һис ярамай. Өләсәйем дә миңә һәр саҡ шулай өйрәтә.

Уф-ф, көн был тиклем дә оҙон булыр икән! Мин быуала һыу ҡойоноп ҡайттым да әле кәртүк баҡсаһында ҡый үләне утайым. Бер-икене тәпкеләп алам да күтәрелеп ҡайнар ҡояшҡа ҡарайым. Үләндәрҙең кәртүк һабаҡтары араһындағы вағыраҡтарын ҡул менән сүпләштерә бирәм дә йәнә зәп-зәңгәр бушлыҡҡа бағам: йәнәһе, ҡояш апай күпме ара үтте икән. Әммә уныһы, үәт ҡарышып алды бит, бер урында тик тора. Башҡа саҡта, бигерәк тә берәй ҡыҙыҡлы уйын уйнағанда, көнөң етмәй ҡала, ә бөгөн...

Шулай ҙа, күпме генә мыҙылмаһын, йәй миҙгеленең иң оҙай көнө лә бер килеп ахырына яҡынлаша. Яндырып барған ҡояш, ҡайнар һулышын һүрелтә барып, ниһайәт, офоҡ артына төшөп ышыҡланыуға, бар тереклек иркен һулыш ала. Мин дә иркен һулайым. Ошо мәлдә беҙҙең әлеге көнгәсә бер ваҡытта ла шул тиклем өҙөлөп көткәнебеҙ булмаған көтөүҙең башы күренә. Малайҙар, эңер ҡуйырып, томан йәйелә башланғансыға ҡәҙәр, йәнә киске үрешкә ашыға. Ашыға ғынамы – ашҡына! Элекке һымаҡ, бөгөн өләсәйҙәрҙән ҡат-ҡат ҡабатлатып тороу ҙа юҡ. Тамам арбаны ла ҡуйҙы ла баһаң Әхтәм бабай. Әйткәндәй, ана, үҙе лә күренде. Хәҙер, хәҙер ул үткән көн өҙөлөп ҡалған хикәйәтен дауам итер. Беҙ, сыр-сыу килешеп, уға ҡаршы йүгерәбеҙ.

Малайҙар араһында бөгөн шаярырға теләк белдереүсе юҡ. Остоҡ Шәйбәк кенә урынлы-урынһыҙға һикерәңләй башлағайны, башлыҡ уның ябыҡ ҡабырғаһына ҡаты ғына ҡағылып алыуы булды, уныһы ла аҡылға тиҙ ултырҙы. Хәҙер бер кемдең бер тауыш-тыны сыҡмай: олатайҙың мейеһе «ҡайнап» китмәгәйе. Ҡыҫҡаһы, әле беҙ үләндән тәпәш, иң тыныс һыуҙан да тын. Сәйер генә көләмһөрәгән бабайыбыҙҙың мөләйем йөҙөнә текләгәнбеҙ ҙә яртылаш тешһеҙ ауыҙынан талғын ғына ағылып сыға башлар хикәйәттең дауамын көтәбеҙ.

***

...Мөхәмәтша, ҡытай дуҫы Чанлунь менән бәхилләшкәндән һуң, эшелонға тейәлеүенә өс ай тула тигәндә, Сыбай ҡашҡаһын етәкләгән көйө ауылына ҡайтып инде.

Ә унан алда ул, урман-ҡырҙар гиҙеп бара торғас, үҙе лә аңғармаҫтан, Уралтау ҡуйынындағы элекке йәйләүҙәренә барып юлыҡты. Был тәүге ҡырауҙарҙан һуң үләндәр ҡыуарып, үҙенә лә, атына ла ашау яғы наҡыҫлана башлаған мәл ине. Ауылдарынан йәйәүле кешегә ике көнлөк юл арауығында йәйрәп ятҡан йәйге йорттарын ул шунда уҡ танып алды. Башта: «Хәйерһеҙ, саҡ яҙа китмәгәнмен

бит, ә. Ауылды йәнәшәләп үтеп барам да», – тип уйлап ҡуйһа, аҙаҡ, әле булып ятҡандар аңына барып етә башлағас, тәүҙә ҡыуанысынан балалар ише ҡыланып илай башланы, унан шарҡылдап көлөргә тотондо. Ситтән ҡарап торһаң, хас та тиле кеше инде. Ахырҙа ул, күкрәк ярып килгән хистәренә баш була алмайса, тойғоларын тыйып торор тәҡәт тапмай, урман яңғыратып йырланы ла ебәрҙе:

*... Уралҡайым, беҙҙе, ай, үҫтерҙең*
*Буйҙарыңда аттар уйнатып.*
*Һай, илкәйем, тыуған еркәйем!..*

Йәмле йәй көндәрен тормош гөрләп торған йәйләү инде бушап ҡалған да етемһерәп ята. Тирә-йүндәге көтөүлектәре тапандыға әйләнгән урындан ауылдаштары күптән түгел генә ҡайтҡан булырға тейеш. Күмерҙәре ыуалырға ла өлгөрмәгән усаҡ урындары, дәү ҡыуыштар эсенә түшәлгән үләндең хуш еҫ бөркөп шул килеш ятыуы, әле кибеп тә өлгөрмәгән һыйыр «коймаҡтары» ошоға асыҡ дәлил. Хис-тойғолары ҡайнауҙан ҡапыл йөрәкһеп киткән Мөхәмәтша ҡыуыштарҙың зауыҡ менән эшләнгән иң олоһона, иң күренеклеһенә инде лә байтаҡ ваҡыт моңайып ултырҙы. Ошо мәлдә ул ауылына нисек барып инерен күҙалларға тырышты: тәү осратҡаны кем булыр икән? Ауылдаштары уны танырҙармы, юҡмы? Танымай һуң, әлбиттә, танырҙар!

Үҙ хәлэтенә үҙе ышанмай килгән мосафирға тәүләп тап булғаны беләктәренә тырыздар аҫып, балан тирергә сыҡҡан бер төркөм ҡыҙ-ҡырҡын булды. Улар, Мөхәмәтшаның өмөттәрен селпәрәмә килтереп, ниндәйҙер януарҙан ҡоттары осҡан һымаҡ, сәрелдәй-сәрелдәй ҡасып китте. Аптырай төшкән Мөхәмәтша, ҡулдарын йәйә биреп, ылҡаһы ҡалмаған өҫ-башын байҡаны...

Уның һын-килбәте, ысынлап та, һырт биреп ҡасырлыҡ ине. Ахыр сиккә етеп ябығыуҙан ҡаҡ һөйәккә ҡалып, бит-башын ялбыр йөн баҫҡан ирҙең тышҡы ҡиәфәте ҡурҡыныс албаҫтынан бер ҙә кәм түгел. Ҡыҫҡаһы, торғаны менән тере мәйет. Шулай булыуына ҡарамаҫтан, ул һағындырған Һаҡмарына, тәпәй баҫҡандан аунап үҫкән еренә, ҡатыны менән балалары янына иҫән-һау килеш ҡайтып етә алыуына сикһеҙ бәхетле ине. Бәхетле һәм ошо бәхеткә һаман ышанып етмәй кеүек: ысынбарлыҡмы был, әллә бары хыялға тиң татлы төш кенәме? Өҫтәүенә, ул ниндәй шәп, шәп кенәме – дан өйөр айғыры алып ҡайтып килә. Тик... аһ, шул тиктәре булмаһа икән донъяның!

Тик Фазлетдинын ғына ҡалдырып ҡайтты. Сит-ят ерҙәрҙә ятҡырып ҡалдырҙы – шуныһы аянысл. Аянысл ғынамы, йөрәккә ҡара ҡан һауҙырғаны ошо. Уны тыуҙырған әсәһенә нимә тип әйтер инде?..

Өҫтөндәге кейеме ылбырап, алама септәгә әйләнгән Мөхәмәтша, салт аяҙ иртәләге ҡояш ише балҡып, урам буйынан уҙғанда осраған һәр кешегә ихлас күңелдән сәләм күндерҙе. Ә уларының күпселеге... уныураңҡырап үтергә тырышты. Бары күпте күреп, күпте кисергән ир заттары ғына, баш ҡағып, мосафир сәләмен ҡабул ҡылды. Күҙҙәре томалана барған Мөхәмәтша ошоноһона ла сикһеҙ ҡәнәғәт ине: тимәк, уны, танымаһалар ҙа, үҙҙәренеке тип ҡабул иттеләр.

Бәҫһеҙлектең сигенә сығып урындыҡҡа ауған Мөхәмәтша уяулы-йоҡоло көйө аҙнанан ашыу ятты. Ошо ваҡыт арауығында, иҫ йыйыу менән бер ҡатарҙан, көс туплаған ире янынан ҡатыны китешмәне. Ул, шәһит киткән балаһы ҡайғыһынан шым ғына күҙ йәштәрен түгә-түгә, мөсһөҙ ирен тәрбиәләне. Тәрбиәләне һәм аяҡҡа баҫтырҙы. Лотфулла һөйләгәндәргә әсәй кеше башта ышанып етмәгән ине, дөрөҫөрәге, ышанғыһы килмәгәйне. Ә инде үҙ ireң ауыҙынан ишеткәс, ышанмай ҡайҙа бараһың.

– Ярай, нығ бөтөрөнмә, Өмөкамал, хәҙер инде ҡалай итмәк кәрәк. Маңлайына яҙылғаны, күрәһең, шул булған балабыҙҙың. Ейәр ризығы менән күрәһе көндәре

тамам булғандыр. Илама ла, сеңләмә лә, улыбыҙ рухына ҡыйынлыҡ килеп, сөъәлы яңырыуы бар. – Уны йыуатып маташҡан Мөхәмәтшаның был мәлдә үҙ тамағына ҡаты төйөр килеп тығыла. Ул да бына-бына ҡатынына ҡушылыр ҙа илап ебәрер кеүек.

– И-и, балаҡай ғынам! Унын ниндәй генә сөъәлы булһын? Имамыбыҙ әйтә, иле-ере хаҡына баш һалғандар ахирәттә сижжин яуабы тотмай, ти. Әллә яңылышамы икән? – Өмөкамал, үкһей-үкһей, иренең күкрәгенә һыйына. – Бер гонаһһыҙ сабый һымаҡ ҡына ине бит, бахырҡайым. Тәнәй генә ине!

– Тотмайҙыр, тотмайҙыр яуапты. Мулла ағай белмәй әйтмәйҙер. Шулай ҙа илама, тәҡдирҙән аша атлап булмай, кем... Балаларҙың ҡалғандары иҫән-һау булһын. – Тегеһе, уның арҡаһынан һыйпай-һыйпай, йәшле күҙҙәрен ситкә бора. Шул рәүештә улар оҙаҡ ҡына ултыралар.

Ял иткән – ял иткән инде, бер аҙ ваҡыт уҙыуға, Мөхәмәтшаның ҡарала көйгән йөҙө күҙгә күренеп алһыулана төштө. Төпкә батышып һүнә барған күҙҙәре теремекләнеп, ҡараштары асыҡланды. Шулай итеп, оҙайлы үә аҙаплы сәйәхәттән ташлап киткән хәле уға йылдам кире ҡайтты. Һиҙелерлек йонсой төшкән Сыбай ҡашҡа ла был мәлдә буйтым ғына күтәрелеп алырға өлгөрҙө. Уның төҫһөҙләнеп ойошҡан ҡойто тиреһе элекке келәнлеге менән йылҡылдап китте. Шуныһы ғәжәп: ете ят ерҙә лә малҡай үҙен һис ситен итеп тоймай ине.

Әйтергә кәрәк, Сыбай ҡашҡа ифрат ҡеүәтле лә, аҡыллы ла булды. Бәғзе ауыл аттары урынынан ҡуҙғата алмаған йөктө ыһ та итмәй һөйрәр ине. Тәртә төбөң генә сыҙаһын. Айырыуса уның менән күбә тарттырғанда йәнең рәхәте: урынеренә һелкендермәй-йәнсемәй генә алып барып ултыртыр ине хайуан. Күбәлә уға етәк тә, һыбайлы ла кәрәкмәне, бары арҡанды бәйләп-ыҫҡындырып торһаң, ҡалғанына үҙ белдеге менән йөрөнө. Тик шуныһы: арҡан төтмәне үҙенә. Мөхәмәтша, атына арҡаланып, күбәне самаһыҙ эре итеп яһай ҙа һуңынан, арҡаны насар, тип зарлана.

Сыбай ҡашҡаһының үҙенә лә, эшенә лә һоҡланып бөтә алмаған Мөхәмәтшаның шулай ҙа килке-килке эсе бошоп ҡуя: аты бит айғыр малы, бейәләрҙе тойоп, ситкә тартылырға маташа. Ә инде ҡыш етеп, йылҡы тибенгә сыҡҡас, Ноғман байҙың өйөрөнә ҡарай ҙа зарығып кешнәй ҙә тора.

– Ноғман ағай, – тип ялынғандай итте Мөхәмәша, байҙы ихатаһы алдында осратып, – әллә минең айғырҙы, Сыбай ҡашҡаны әйтәм, үҙеңә алаһың да ҡуяһыңмы? Бер аранда япа-яңғыҙы тороп әрәм була бит, юғиһә.

– Нисек?.. – Ноғман бай, ҡапылғара ни тиергә лә белмәй, аптырап китте: ысынды һөйләйме был, әллә һынамаҡҡа әйтәме? Бәлки, шаярталыр? Мәрәкә һүҙ һөйләп, кешенең башын ҡатырыу тиһәң, уны ҡуш...

– Нисек тип... Һинең ҡулда булһа, аҙмы-күпме нәҫеле ҡалыр ине, ә былай бер фәтеүәһеҙгә...

– Һа-ай, Мөхәмәтша ҡусты, уй-ниәтеңде аңланым. Шулай ҙа, мәйтәм, тауарың үтә лә затлы, уңайһыҙ булмаҫ микән? – Ишеткәненә һаман ышанып етмәгән бай кеткелдәп көлгән булды.

– Уның нимәһе уңайһыҙ? Ризалыҡ менән үҙем бирергә торам да. – Ат хужаһы был юлы шаяртмай ине. – Әлбиттә, шыпа бушҡа түгел...

– Йә, әләйһәң. Атайым мәрхүм, үҙеңдә юҡ тип бер ваҡытта теләнселәп тә, тейер-теймәҫенә зарланып та йөрөмә, тип өйрәтер ине. Үҙең биргәс, мин риза. Әжеренә күпме һорамаҡсыһың ?

– Унынын үҙең ҡара, һин – бай.

– Эй-й, ошо беҙҙең халыҡты, һатыулаша ла белмәй бит. Бәйәне һатҡан кеше ҡуйырға тейешле. Әйбер һинеке, тартынып торма, әйт хаҡын.

– Алмашҡа берәй быуаҙ бейәңде бирһәң, шул еткән. Йыл да ҡолонлап торғанда, әҙме-күпме һуғым булыр ине, тиеүем.

– Икәүҙе алырһың. Бының ише хайуан уға ғына торорлоҡ. Хатта күберәгенә лә.
– Нимә итәйем мин икәүҙе?
– Ана тағы! Һай, бер ҡатлы әҙәм! Ҡуян ул тапҡан, ҡуйыр урын тапмаған һымаҡ килеп сыға инде. Үҙеңә кәрәкмәһә, башҡа сыҡҡан уландарың бар ҙа.
– Эй-йе шул...
– Барына урын табылыр ул, ҡустым, бына юғы аптырата. – Баҙарҙан ҡәнәғәт ҡалған Ноғман бай менән Мөхәмәтша шапылдатып ҡул һуғыштылар.
Шулай итеп, Сыбай ҡашҡа көтмәгәндә-уйламағанда Ноғман ҡашҡаһына әйләнде лә, тиҙ арала элекке исеме онотолоп та ҡуйҙы. Хәйер, хайуанды нисек атауҙары һәр нәмәгә исем-атама ҡушырға күнеккән әҙәми зат өсөн генә ниндәйҙер әһәмиәткә эйә булһа, аттың үҙенә барыбер ине. Исем алмашыуҙан уның бер ере лә кәмемәне лә, артманы ла, холоҡ-фиғеле лә үҙгәрмәне. Ҡушаматынан башҡа, барыһы ла элекке көйө ҡалды.

***

Ҡашҡаһы ни тиклем генә ҡатынҡы үә сыҙам булмаһын, Ноғман бабай уны бер ваҡытта ла ауыр эшкә екмәне: «Затлы айғырҙың шөғөлө башҡа, ул лашман булып, ҡара тиргә батып йөрөргә тейеш түгел», – тине. Әммә шуныһы: ҡышҡы селлә етеүгә, Ҡытай иленең сағыштырмаса йомшаҡ әҡлименә[4] яраҡлашҡан тоҡом Уралтауҙың шаҡылдап торған сатнама һыуыҡтары менән елеккә үткәрер әсе елле ыжғыр бурандарына бирешеп бара. Айырата иртәнге саҫҡауҙарҙа ул ныҡ өшөп-ҡалтырана ине. Шуның өсөн бөтмөр бай уны ҡыш көндәрен гелән ышыҡта, йылы аҙбарында тотто һәм башҡа аттарҙан айырым тәрбиәләне. Ҡыҫҡаһы, Хоҙайҙың ҡашҡа тәкәһе ише айырып ҡараны.
Ноғман ҡашҡаһының даны тиҙ арала әллә ҡайҙарға таралып өлгөрҙө. Йылҡысылыҡ менән көн иткән кешеләр, ҡан аралаштырып, нәҫел яҡшыртыу маҡсатында, ошоғаса күҙ күрмәгән, ҡолаҡ ишеткәне булмаған айғыр янына бейәләрен ер аяғы ер башы ерҙәрҙән алып килерҙәр ине. Шунлыҡтан нәҫеле ифрат күп ҡалды уның, һа-ай, күп ҡалды. Үҙе лә ысын-ысындан аҫыл зат булды шул...
Әхтәм олатай ошо урында һөйләүенән туҡтай ҙа уйсанланып ултыра: ахыры, артабанғыһына фекер төйнәй. Көмөрәйә башлаған йәтеш кәүҙәһен турайта, сал төшкән кәзә һаҡалын матҡый ҙа ниндәйҙер мәғәнә менән тамаҡ ҡырып ҡуя. Ошонан һуң тәрән йыйырсыҡтар менән бураҙналанған хәстәрле сырайы кинәт балҡып китә. Был – уның ары һөйләргә әҙер икәнлегенә асыҡ ишара. Олатайыбыҙ ошо мәлдә күҙ алдында үҙгәрә лә, гүйә, йәшлегенә, егет сағына әйләнеп ҡайта. Бына бер мөғжизә! Ниндәйҙер бер хәтирәләр ҙә кешене шул ҡәҙәре үҙгәртә алыр икән...
– Йәгеҙ, балалар, беҙгә ҡуҙғалырға ваҡыт түгелме икән?.. – Барыбыҙҙы иҫәңгерәтеп, ул көтөлмәгән ошо һорауҙы ҡуя: ә хикәйәттең аҙағы?! Ә үҙе һуң, үҙе! Бер ни булмағандай, ҡулын ҡаш өҫтөнә ҡилтерә лә тау артына яртылаш инеп йәшеренергә өлгөргән ҡояштың ҡыҙыл ярсығына ҡараш ташлаған була. Күҙҙәре үҙенең, ҡыҫыла биреп, кинәйәле йылмая:– ныҡ һуңға ҡалһам, өләсәйегеҙ ороша торған...
Үҙе шулай тиһә лә, олатай артабан беҙҙең күмәкләп ялына башлағанды көтә. Был хаҡта теле әйтмәһә лә, күҙҙәре әйтеп тора.
Ҡайһы арала тиһең, эңер шыйыҡланып, сирҡаныс ысыҡ та төшә башлаған. Һаҡмар үрендәге уйһыу урындан, таҡыр туғайҙы ҡаплап, төтөн ише томан йөҙә. Тиҙ арала ул туғайҙы ғына түгел, бар ғаләмде үҙ ҡосағына алыр ҙа һәммәһе-һәммәһе: утлап йөрөгән һыйырҙар менән аттар, йылға үҙәнендә ҡарайып күренгән

---

[4]Әҡлим — климат (бор.)

ректәр менән ҡабаҡ өҫтөндә өнһөҙ һерәйешкән ҡайындар, туғайҙы биҙәп ултырған сәскәләр, шул сәскәләр араһында аунашып ятҡан дуҫтарым да уның эсенә инеп юғалыр. Ҡаран тумарлығында баянан бирле һөрән һалған тартай һаман тыныслана алмай. Ғәжәп, нисек ялыҡмай ҙа, арымай ҙа икән ул? Беләһе ине: эсте бошороп, ни сәбәптән шул ҡәҙәре өҙгөләнә икән? Ә бына йылға аръяғындағы һоло баҫыуында ишетелгән бүҙәнә тауыштары, киреһенсә, сәбәпһеҙгә болоҡһоп киткән күңелдәргә күтәренке кәйеф ойотҡоһо һала. Алыҫта-алыҫта, ҡомһарылып торған көндөң сығышында, күк йөҙөн ялт-йолт телгесләп, шаян-серле ялағай уйнай. Уның шаңдағы ыңғайына, өҙөк-йыртыҡ деһерләгән тауыш ишетелеп ҡала. Минең күңелдә шунда уҡ яман шом ярала: япон илбаҫарҙары тағы һуғыш асмағайы...

Күпмелер шым ултырғандан һуң көләмһерәй биреп һүҙ яңыртҡан Әхтәм бабай барыбыҙҙы йәнә шаҡ ҡатыра:

– Ә, беләһегеҙме, Мөхәмәтша бит минең атайым ине... Шул рәүешле ул һуғыштан, өлкән ағайым урынына, ғәжәп ат алып ҡайтты.

Ана нисек! Бындайын инде бөтөнләй көтмәгәйнек кенә түгел, хатта ике ятып бер төшөбөҙгә кермәгәйне. Беҙ, әле генә ишеткәнебеҙгә ышанмаған һымаҡ, бер-беребеҙгә ҡарашабыҙ. Малайҙарҙы шаңҡытыуҙан күңеле булған олатайыбыҙ башымдан һыйпап, арҡамдан һөйҙө лә мине ахырғаса... һушһыҙ итте:

– Ә Ноғман апа, белгең килһә, һинең өлкән олатайың, йәғни атайыңдын олатаһы.

Әлеге һүҙҙәрҙән мин әүәл баҙап ҡалам, унан рәхәт булып китә, аҙаҡ уңайһыҙлана башлайым. Ни өсөн тигәндә, берҙән, был хәҙер маһая башлар инде, тип уйлауҙары бар. Икенсенән, быныһы тәүгеһенән күпкә мөһимерәк: беҙ бит барыбыҙ ҙа – бөйөк Лениндың эшен дауам итеүсе пионерҙар. Бөтәһенә лә билдәле: пионер кешенең яҡыны бай булырға тейеш түгел. Киреһенсә, байҙар менән иҙеүселәрҙе пионер күрә алмаҫҡа һәм дә улар менән аяуһыҙ көрәш алып барырға тейешле. Ә бында... олатаң бай, имеш.

Минең, ҡараштарымды ергә төбәгән көйө, икеле-микеле уйҙарға бирелеп ултырғанымды олатай күреп алды, буғай:

– Зирәк аҡылы өҫтөнә, ифрат киң күңелле, алсаҡ тәбиғәтле лә, ғәләмәт егәрле лә булды ул Ноғман ағай. Ҡыҫҡаһы, ғәҙел холоҡло изге йән ине, – тип өҙөлгән һүҙен ялғай һалды. – Аҙаҡ, егерме беренсе йылдың ҡот осҡос йотлоғонда, тап уның шәфҡәтлелеге арҡаһында ғына күпселек ауыл кешеһе ас үлемдән ҡотолоп ҡала алды. Ҡырылып бөтөүҙән халыҡты ул ҡотҡарҙы. Һуңынан үҙенең, бай булараҡ, мөлкәтен талап маташтылар. Әммә ләкин, күпме генә тентемәһендәр, тартып алырлыҡ байлығын таба алманылар. Сөнки юҡ ине байлығы. Ауылдаштарын үләттән йолоп ҡалыр өсөн һуңғы тиненәсә тотоноп бөткән. Эйе, егәрлелеге арҡаһында ул бай булды, һаран булманы. Ялҡау кеше бай була алмай. Шуның өсөн, бай тоҡомонанмын, тип кәмһенеү ярамай. – Быныһы инде миңә ҡағыла ине, шунда уҡ һиҙҙем.

– Колхоз ойошторола башлағас та, ағас һуҡаһына ҡушып, арбаһы менән санаһын шунда тапшырҙы. Шуға ла, күрәһең, бәлшәүиктәр ҡабат бәйләнеп йөрөмәгәндәрҙер үҙенә. Юғиһә, көн күрһәтмәҫтәр ине: бәлшәүик күндәм кешене яратты. Олатайың утыҙ дүртенсе йылдың йәйендә, һикһәнде үтеп, вафат ҡылды. Әле лә хәтеремдә: әжәл түшәгенә ауып, тамағына тәғәм үтмәй башлағанда, ҡурмас ҡыҙҙыртыр ҙа бөртөкләп кенә шуны сәйнәп ятыр ине, мәрхүм. Тештәре һапһау көйө ине. Ҡыҫҡаһы, Ноғман ағай ныҡлыҡ яғынан да, кешелеклек яғынан да аптырарлыҡ өлгө булды. Ундайҙар һирәк осрай. Ҡашҡаһы ла, эйәһенә торошло, аңлы ла, талымһыҙ ҙа ине...

Йылы һүҙ – йән аҙығы, әлеге һүҙҙәрҙән мин үҙемде бер сама үҫеп киткәндәй хис итәм.

Йоҡомһорай башлаған туғайҙың арғы осонда, борғоланып ятҡан Һаҡмар бөгөлдәренең берәһендә, күмәк аттар мырт-мырт килеп үлән ҡырҡа. Торған һайын ҡуйыра барған томан араһынан улар хәҙер күренмәй, бары ҡыңғырауҙарының сыңы ғына ишетелеп ҡала. Шулай ҙа мин күҙ алдына килтерәм: уларҙың араһында башҡаларынан нык ҡына айырылып торған икәүһе бар. Оҙон, ялбыр ялы кеүек, бәкәл сәстәре лә ергә тейә яҙып торған, йыуантыҡ-мыҡты кәүҙәле, таба ише яҫы тояҡлы, тәү ҡарауға үшәнерәк күренгән ул аттарҙың береһе – «Жиган» икенсеһе «Хулиган» исемле булыр. Кибеттә һатылған дағаларҙың береһе лә уларға ярамай – бәләкәйҙәр. Шуның өсөн һәр икеһен дә тимерлектә ҡулдан һуғылғандары менән дағалайҙар. Бүтән аттарҙың ҡамыты ла, ыңғырсаҡ-ышлыялары ла уларға нык тар. Йыуашлыҡтары үә аҡылы, шулай уҡ тәүәккәл холоҡтары менән дә улар үҙҙәре бер төрлө хайуандар. Ауыл халҡының булған ваҡ-төйәк йомошо менән барлыҡ ҡара эшенә гелән улар йөрөй, шунлыҡтан колхозға ваҡыттары ла ҡалмай. Мин шундай шәп аттарҙың олатайым айғыры тоҡомонан булыуына эстән генә ғорурланып ҡуям.

– Олатай, ә Сыб... әй, Ноғман ҡашҡаһы тарихының аҙағы ни менән барып осланды? – Ниһайәт, түҙмәнем, барыбыҙҙың да тиҙерәк белергә ынтылыуҙан тел осон ҡысытып торған һорауҙы бирергә баҙнат ҡылдым.

– Һи-и, Ноғман бай ҡулында ул кинәнеп ун йылдан ашыу йәшәне, уландар, – бабай күренеп торған ҡәнәғәтлек менән һүҙен дауам итте, – ян-яҡҡа туҙып китергә юл ҡуймайса, өйөрҙө уяу һаҡлаһа, бер һауынды ла яҙлыҡтырмай, бейәләрҙе мәлендә алып ҡайтыр ине. Уға ҡарап беҙ намаҙ ваҡытын билдәләй инек һәм яңылышмай торғайныҡ. Иҫ китмәле теүәл мал булды. Айғыр яҡын-тирәлә берәү ине, берәгәй ине. Йәл, йыртҡыс менән алышып һәләк булды. Нисегерәк, тиһегеҙме? Аҡрап башы етеп, ҡырпаҡ ҡар яуғас та әле, йылҡы малы, һауа торошона ҡарап, күпмелер ваҡыт Уралтау буйҙарының ҡауланы мул тибендәрендә ҡала ла бауыр аҫтынан ел үткәреп йөрөп ҡайтыр ине. Ана шунда өйөргә аслыҡтан аҡылһыҙланған уҫлаптай айыу һөжүм итә. Беҙҙең телдә уны шатун тип атайҙар. Шатун – ул ҡот осҡос януар. Ул кешенән дә, башҡаһынан да ҡурҡмай, шунлыҡтан һаҡлыҡ хисен юғалтҡан була. Шатунға әйләнгән айыу юлында осраған бер кемде лә, бер нәмәне лә аяп тормай. Шул иҫәптән – үҙен дә. Тере йән бит, мәлғүн, ҡыштың көнөндә барыбер астан үлерен беләлер инде.

Оло бейәләр ҡолон-ҡырҡмышты ҡурсаламаҡҡа уртаға ала һалып торған арала, Ноғман ҡашҡаһы шул ажғырып килгән януарға япа-яңғыҙы ҡаршы сыҡҡан булырға тейеш. Айыуҙың ниндәй ғибрәт икәнлеген белмәгән, шәт, бер тапҡыр күргәне булһа ла, көс һынашып ҡарағаны юҡ бит. Бәлки, белә-күрә лә ынтылғандыр, хәҙер нимә тип әйтәһең инде. Намыҫ тигәнең бәғзе айғыр малында ла була ул. Өҫтәүенә, өмөт бағлап, анауы һынлы бейәләрең ҡарап торғанда. Ә миңә ҡалһа, эш былайыраҡ торғандыр: ҡолоно менән бейәләрҙең береһе өйөрҙән ситтә тороп ҡалған да, айыу нәҡ уларға һөжүм иткән, ә өйөр айғыры ярҙамға ашыҡҡан.

Мин һеҙгә әйтәйем, ике аралағы алыш шул тиклем ҡаты ла, аяуһыҙ ҙа булған, ул урындағы ерҙең ҡыртышы аҡтарылып, ҡара тупраҡтың аҫты өҫкә әйләнгән ине, үҙем күрҙем. Әйтерһең дә, һуҡа менән һөрөп ташлағандар. Унынһы нимә, яҡын-тирәләге баҫырау йыуанлыҡ ағастар шырпы урынына сарпылып-йәнселеп бөткән, ҡан йылға булып аҡҡан да, ҡар өҫтөн ҡыҙылға буяп, тирә-яҡҡа һибелгән. Ҡайһы бер кешенең әйтеүенә ҡарағанда, йәнгә талашҡан йыртҡыстың үкергәне хатта ауылға ишетелеп торған. Шундай яман үкергән. Нисек эшләгәндер, әммә айғыр, ер тырнаған ажғыр бүгәйҙең маңлай һөйәген бер һелтәүҙә селпәрәмә килтерергә һәләтле уҫлаптай айыуҙы йыға алған: яйын тура

килтереп, мейеһен сәсрәтә типкән. Әммә ләкин ҡашҡа үҙе лә үлемесле яраланған. Ғәйрәте эсенә һыймаған йыртҡыс һул яҡлап уның бер нисә ҡабырғаһын һындыра һуҡҡан ыңғайға, йәнселгән һөйәктең ярсыҡтары йөрәк ярыһын телеп ебәргән. Шулай ҙа хайуан – бына бит көс! – урманда ятып ҡалмаған, ә аҡтыҡ хәлен туплап, өйөрө артынан ауылға ҡайтып етә алды. Ҡапҡабыҙ алдына ауып, беҙҙең күҙ алдында йән бирҙе ул. Уның йыртылып-өҙгөсләнеп бөткән ҡанлы кәүҙәһенә тыныс ҡына ҡарап тороуы мөмкин түгел ине. Шунда торғандарҙың барыһы тетрәнде. Күптәр, әллә атты ҡыҙғанды, әллә ошо ҡот осҡос күренештән йөрәге әрнене – хатта күҙ йәштәрен сығарып иланы.

Ярты Ер шарын үтеп, Ҡытай иленән Башҡортостанға килеп, сит-ят урындарҙа ете ят өйөр өсөн ғүмерен биргән малҡай шул ҡәҙәре йәл ине. Миңә ҡалһа, үҙен ғәләмәт аҡыллыға һанап йөрөгән әҙәми заттың араһында ла былдайҙар күп осрамайҙыр. Ирекһеҙләтеп, күрмәгән дә, белмәгән дә ил хаҡына баш һалған егерме йәшлек Фазлетдин ағайҙан ҡай ере кәм, йә. – Әхтәм олатайҙың кәрһеҙ тауышында йәшерен һағыш ғәләмәте ишетелеп ҡала: ул бына-бына һыҡтап ебәрер кеүек. Шулай ҙа ебей төшкән бабай үҙен ҡулға алыр көс таба һәм ғәжәп ҡиссаһын лайыҡлы рәүештә ослап ҡуя: – Бына шулай, балаҡайҙар, аттарҙың да араһында кешеләргә оҡшаш яҙмышлыһы була. Уларҙың да бәғзе берҙәре фани донъяла үҙенә күрә юйылмаç эҙ ҡалдырып китә. Беҙ, кешеләр, онотмаһын өсөн. Ноғман ҡашҡаһы ла, ана, үҙе һәләк булды, ә аçыл тоҡомо менән яҡты иçтәлеге тороп ҡалды. Эйе, ҡашҡа лайыҡлы йәшәне, бәсен төшөрмәй генә китә белде. Ҡайсаҡ шулай уйлап ҡуям: беҙҙе, әҙәм балаларын, һынамаҡҡа арабыҙға Хоҙай үҙе ебәрмәнеме икән уны?..

***

Ҡояш, ҡайһы арала тиһең, шыйыҡ монарға уралып күкшелләнә башлаған Уралтау артына боçорға өлгөргән, ә беҙ, арбалған йәндәр, нимәлер көткән һымаҡ, һаман урыныбыҙҙан ҡуҙғаламайса ултырабыҙ.

Ә был мәлдә ҡәнәғәт һыйырҙар, тәьçораттарҙан арына алмайынса аңшайышып йәшел сирәмдә аунаған хужаларын көтөп тә тормай, йәнә үҙҙәре генә ҡайтыу яғына ыңғайлаған. Томан эсенән улар беҙгә мөңрәшеп тауыш бирә, гүйә, әйҙәгеҙ, малайҙар, эйәреп ҡайтмаһағыҙ, әлегер үҙегеҙгә, тиҙәр. Кем белә, Сыбай ҡашҡа кеүек, бәлки, уларҙың да мейеһенә аң керә башлағандыр? Ә ниңә, һыйыр тигәс тә әллә...

Һүҙгә әүрәп донъяһын онотторға һыйыр кеше түгел. Уны ҡурала биҙрә тулы тәмле ризыҡ көтә, быҙауы һағына. Хайуан ихтыярына бирелеп, беҙ ҙә йылы урыныбыҙҙан ҡалҡынабыҙ. Ошо мәл баçалҡы ғына итеп ат кешнәгәне ишетелеп ҡала. Мин шунда уҡ танып алдым: был ҡашҡа тоҡомо «Жиган» тауыш бирә. Уның күкрәк төбөнән гөрһөлдәп сыҡҡан ҡалын да, бер аҙ һағышлы ла, әммә яғымлыйомшаҡ тауышын бөтәбеҙ ҙә таныйбыҙ. Ул беҙгә, ҡупая биреп: «Күрҙегеҙме, малайҙар, ишеттегеҙме минең олатай ниндәйерәк булған?!» – тигән һымаҡ тойола.

Инде аяҡ аçты яҙа-йоҙа ғына күренгән эңер эсенән Әхтәм олатайҙың моңло көйө ишетелә:

*Ай яҡтыһы яҡты була, тиҙәр,*
*Көн яҡтыларына етмәй ул.*
*Кеше илкәйҙәрен йәмле, тиҙәр,*
*Үҙ иленә һис тә етмәй у-ул.*



Әмир
ӘМИНЕВ

# ҺУҢЛАҒАН БҮЛӘК

## ПОВЕСТЬ

*Рәссам ағайым Рәшит Зәйнетдиновҡа*

Ҡасан башланды һуң әле барыһы ла? Шул йылда, шул йәштә, тип һис теүәл генә әйтә алмай. Сөнки Рәссам үҙен белгәне бирле һүрәт төшөрә. Бәлки, ул атай ҡаны менән кергәндер: атаһы ҡамыт, ыңғырсаҡ, арба, сана эшләгән, ҡалтағай, тәгәрмәс, дуға бөккән. Өйҙә лә бит шыңғырҙап торған ҡарағайҙан һалған, һарайҙары, келәттәре ныҡлы ине, тимәк, матурлыҡты тойған, күрә, аңлай белгән, көнкүрештә лә шуға ынтылған. Ә былай оҙон көндәр буйы тәҙрәнән тышҡа ҡарап торғанын яҡшы иҫләй Рәссам. Бигерәк тә иртә яҙлы, һуң көҙлө, сатнама һыуыҡ, әсе бурандар мәлендә... Үҙенә күрә күҙәтеү пункты ине бит тәҙрәләр уның өсөн. Ауыл осонан таҫма кеүек һуҙылып сыҡҡан арба юлы, арыраҡ тау теҙмәләре, иген баҫыуы, сабынлыҡ, һалам йә ҡабыҡ башлы бәләкәй йорттар, йылғаның теге ярындағы бейек тирәктәр. Әйткәндәй, һуғыш ваҡытында әлеге тирәктәрҙе ул немецтарҙы ауылға килеп инеүҙән һаҡлаған батырҙар итеп күҙ алдына килтерә торғайны.

Былар – уның донъяһы, ҡарар, өйрәнер мөхите, уларҙың барыһы ла ғәжәпкә ҡалдыра, һоҡландыра һәм күҙ алдында һүрәт рәүешенә инә башлай. Тора-бара тәбиғәт күренештәренә ат, һыйыр, кеше һындары өҫтәлә, һәр хәлдә, һүрәт менән «ауырыуы» ана шул тәҙрә аша ҡарап хыялланып тороуҙан башланғандыр, тип тә уйлай Рәссам бөгөн килеп. Бәлки, унан ғына ла түгелдер, башҡа көстәр, башҡа тәьҫораттар ҙа булғандыр, һы-ы, фәрештә ҡанаттары ҡағылыуы ла ихтимал.

Атаһын һуғышҡа алғанда уғата бәләкәй ине. Өс йәш, ни бары өс йәш, шуға ла уның киткәнен иҫләмәй. Күп тапҡырҙар, хәтерен көсәндереп-көсәндереп, атаһының йөҙ-ҡиәфәтен күҙ алдына килтереп ҡарағаны булды, әммә күҙ алдына баҫтыра алманы. Әсмә апаһының һөйләүе буйынса, фронтҡа китер алдынан,

*Әмир Әминев (1953) Ғафури районының Һабай ауылында тыуған. Өфөнөң 1-се интернат-мәктәбен, Мәскәүҙә А. М. Горький исемендәге Әҙәбиәт институтын тамамлай. «Ағиҙел» журналының баш мөхәррире.*

*БР-ҙың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, «Ҡытай-город» повестар һәм хикәйәләр йыйынтығы өсөн Рәсәйҙең Ҙур әҙәби премияһы лауреаты.*

иртә таңда, улар йоҡлап йөрөгән лапаҫ башына менеп, икеһен дә һөйөп төшкән. Апаһы битенә уның ҡытыршы усы ҡағылыуға уянған, ә ул – йоҡлап ҡалған, шунда уянһа, атаһын, моғайын да, хәтеренә һеңдерер ине. Бына шулай атаһын күрә алмай ҡалыуын Рәссам бөгөнгәсә үҙ тормошондағы иң аяныслы мәлдәрҙең береһе тип хисаплай.

Уҡырға ул алты йәшендә төштө. Мәктәп – өйҙәре янында ғына. Хәйер, төшмәҫ элек үк Әнүр ағаһының, Әсмә апаһының дәреслектәренән өйрәнеп һамаҡлап уҡый белә ине инде, ҡайһы бер шиғырҙарҙы, һөйләмдәрҙе ятлап та ала ине. Шуға ла апаһына эйәреп мәктәпкә барҙы, өйҙә яңғыҙы ҡалғыһы килмәне. Уҡытыусылары Зәйнәп апай аптырай, әсәһенә, бәләкәй ҙаһә, киләһе йыл башлар, тип ҡарай. Әммә әсәһе, ярай, иғтибарға алма, йөрөһөн, иң артҡы партаға ултырт та, ялҡһа, ташлар әле, тип яуаплай. Ул көн һайын апаһына эйәреп мәктәпкә бара, бергә ҡайта, яҙған, уҡыған саҡтарында бергә уҡый, һөйләй, һүрәт төшөрә, йырлай...

Бер мәл ныҡ иҫендә ҡалған. Уҡытыусыһы «беда» һүҙенең башҡортсаһын оноткан да әйтә алмай тора. Ул «бәлә» тип әйтеп һалды, сөнки тәржемәһен апаһының китабынан уҡығайны. Уҡытыусы аптырап, күҙҙәрен түңәрәкләндереп уға текләп ҡарай. Тап бына ошо ваҡиғанан һуң уҡытыусыһы уның исем-фамилияһын класс журналына өҫтәп яҙырға мәжбүр булды ла шикелле. Быға тиклем әллә ни иғтибар итмәгән мөғәллимә уның матур яҙыуын, һүрәт төшөрөүен дә күргәс, апаруҡ маҡтай башланы.

Бер көндө, район китап магазинынан һиңә төбәп алып ҡайттым, тип уҡытыусыһы ҙур ҡағыҙ битенә төшөрөлгән һүрәт күрһәтте. Уны был һүрәттең дәүлеге аптыратты, сөнки бындай форматтағы ҡалын ҡағыҙҙы уның быға тиклем күргәне юҡ ине. Йәнә рәссамдың ысын эше шаңҡытты – текәлде лә күҙен ала алмай ҡарап тик торҙо: шул тиклем тәбиғи, шул тиклем оҡшаған ысын ҡышҡа, – әйтерһең дә, ул үҙе тәҙрәнән тышҡа баҡҡан. Ышанмай, тотоп, ҡағыҙ өҫтөнән бармаҡтары менән һыпырып ҡараны, хатта эйелеп еҫкәне. Һүрәттең уртаһында – санаға егелгән ат, эргәһендә – өйкөм-өйкөм бейек ағастар, улар артында – ҡара урман. Уң яҡта тышы таҡта менән көпләнгән ике ҡатлы йорттоң һул мөйөшө күренә, йорттоң болдоро ла бар. Болдор башында ла, урамда ла ҡар ята. Тимәк, өйгә икенсе ауылдан кемдер килгән. Ләкин был кеше оҙаҡлап киткән – аты алдындағы бесәнен ашап бөткән, хужам ҡасан сыға инде, тип аптырап башын эйгән.

– Был, ысынлап та, миңәме? – тип һораны ул, уҡытыусыһының һүҙҙәренә ышанмайыраҡ, класташтары барыһы ла ҡарап, һүрәттең әллә ни ҡыҙығын тапмай, тәнәфескә сығып йүгергәс.

– Һиңә, һиңә, һин һүрәт төшөрәһең бит, кәрәк булыр. Был – ысын художник эше, дөрөҫөрәге, эштең фоторепродукцияһы. – Уҡытыусы ҡағыҙҙың артын әйләндереп уҡыны: авторы – Левитан, «Март» тип атала. Оҡшаймы?

– Оҡшай. Өйгә алып ҡайтһам яраймы?

– Ярай, һиңә килтерҙем бит. Стенаға беркетеп ҡуй.

Буласаҡ рәссам уны өйҙәренә йүгертеп алып ҡайтып, ике тәҙрә араһындағы стенаға энәләр менән ҡаҙап ҡуйҙы. Өйҙә сағында һүрәттән күҙен алманы, шулай итеп төшөр ине ул, тип хыялланды. Һәм үҙе тәҙрәнән күргән донъя һымаҡ ҡабул итте: һағыш, тиҙерәк оҙон һыуыҡ ҡыштың бөтөрөн көтөү, – әйтерһең дә, үҙенә ят фамилиялы рәссам уның шул тойғоларын белеп төшөргән...

Был ваҡиғанан һуң байтаҡ йылдар үткәс, ул, әлбиттә, Левитан тигән билдәле рәссамдың башҡа эштәрен дә күрәсәк, сәнғәт училищеһында, унан сәнғәт институтында уҡығанда өйрәнәсәк, Левитан исеме сыҡҡан һайын үҙенең бала сағындағы тәьҫораттарын иҫенә төшөрәсәк. Мәскәүҙәге атаҡлы Третьяков галереяһына килгән һайын «Март»тың төп нөсхәһе алдында сәғәттәр буйы баҫып

торасаҡ. Әлегә, ауылының башланғыс класында ғына уҡыған мәлендә, быларҙы ҡайҙан белһен, нисек күҙ алдына килтерһен? Әлегә ул һоҡлана, ғәжәпләнә һәм, бойоҡ ҡына баҫып торған арыҡ ат менән бергә, оҙон ҡыштың тиҙерәк үтеүен түҙемһеҙлек менән көтә – тышҡа сығып рәссам төшөргән ҡарҙа аунап уйнарға кейеме юҡ, шуға ла күп ваҡыт өйҙән тышҡа ҡарап ултырырға мәжбүр.

Ауырлыҡтар үҙ ауылында дүрт йыллыҡты бөтөп, 5-се класҡа Оло Ҡауарҙы ауылының ете йыллыҡ мәктәбенә барғас башланды. Көн һайын йөрөп уҡыйҙар, ара – 8 саҡрым. Иртүк, ҡараңғыла, өйҙән сығып китәләр, киске ҡараңғыла ҡайтып йығылалар. Сәғәттәре юҡ, шуға һуңлап та ҡуялар, ныҡ иртә килеп еткән саҡтары ла йыш. Ундай ваҡытта дәрес башланғансы партаға ятып йоҡлап алалар. Юлға ғына ярты көндәре үтә. Өҫтәрендә йүнле кейем юҡ, булғаны ла бер ҡат. Бигерәк тә ҡыштарын ҡыйын: һыуыҡ, буран, юлды юғалтып аҙашып та йөрөнөләр, бүреләргә лә осранылар. Ике ауыл араһында – ике йылға. Уларҙы яҙлыкөҙлө кисеп сығалар. Икмәк юҡ. Сумкаларында ике-өс бөртөк туңған бәрәңге...

Шулай бер кисләтеп кенә апаһы Әсмә менән дәрестән ҡайтып киләләр. Нишләптер башҡа балалар юҡ, икәү генәләр. Еҙемде сыҡтылар, апаһы йөкмәп сығарҙы, йәнә бер йылға – Мәндем. Ике йылға араһы ярымутрау рәүешендә – Мәндем уларҙың ауылы эргәһенән үткәс, боролош яһап, тирә-яҡтағы бер нисә ауылға электр уты биреүсе Һабай ауылы осондағы станцияға етәрәк Еҙемгә ҡушыла. Ике йылға аралығында – бейек тирәктәр, муйыл, ерек ағастары, бөрләгән, энәлек, ҡурай елəге, әлморон ҡыуаҡлыҡтары. Ауыл көтөүе лә ошонда сыға.

Ҡапыл эт тауышына оҡшаш олоу ишетелде. Тәүҙә ул аңғарманы, дөрөҫөрәге, ысынлап та, ауылдарынан был яҡҡа сыҡҡан берәй эт йөрөйҙөр, тип уйланы. Ә бына апаһы уның ҡулын ныҡ итеп ҡыҫты, шәберәк атла, артыңа боролма, тигәс, шикләнде. Етмәһә, апаһының тауышы ла ҡалтыранып, ҡарлығып сыҡты. Күп тә үтмәй, өс бүре шәйләнде – еңел юртып уң яҡтарынан киләләр. «Боролоп ҡарама, – тине апаһы йәнә, – шәберәк атла, Мәндемгә етә һалайыҡ». Шәп атлауҙан йүгереүгә күстеләр. Ә бүреләр һаман эҙәрлекләй. Апаһы ҡушмағас, ул артына боролмай. Күҙ ҡырыйы менән йыртҡыстарҙың йәнәшәләренән тиерлек баҫтырғандарын шәйләп килә. Шунан улар ҡапыл ғына ҡаршыларына сыҡтылар ҙа, юлдарын быуып, егерме метр самаһы алдарында туҡтанылар. Апаһы уның ҡулын йәнә ҡыҫты – усы ҡалтырана һәм дымлы ине. Бүреләр туҡтағас, улар ҙа туҡтарға мәжбүр булды. Апаһы: «Көш, көш, китегеҙ юлдан! – тип, ата ҡаҙҙы ҡыуған һымаҡ, бер нисә мәртәбә ҡабатланы ла: – Әсәй! – тип һөрәнләп ебәрҙе. – Әсәй, бүреләр!»

Шул саҡ аяҡ аҫтарына күктән һеткә лә, шыйыҡ томанға ла оҡшаған ап-аҡ нур көлтәһе төшөп ятты, әйтерһең дә, өҫтә ҙур машина йәки трактор фараһы тоҡанды.

– Әсмә, ҡара, юл ҡалай яҡты булып китте! – тип һөрәнләне ул, буш ҡулын алға һоноп.

– Ниндәй яҡты? Бер ниндәй ҙә яҡты юҡсы! Әйҙә, атлайыҡ, ҡаршыларына барайыҡ. Ҡурҡырҙар. Мин ҡысҡырам, һин дә ҡысҡыр. Әсәй! Эй, китегеҙ, китегеҙ юлдан. Эй, эй!

– Нишләп күрмәйһең, ана бит, күктән яҡтылыҡ төшә, беҙҙең юлды яҡтырта, юл күрһәтә, – тине ул, алдарында ятҡан яҡтылыҡты апаһының күрмәүенә аптырап.

– Бер нәмә лә юҡ, – тине апаһы, уға боролоп та ҡарамай, үҙе һаман уның ҡулын нығыраҡ ҡыҫты.

Ҡуҙғалыуҙары булды, алдарындағы яҡтылыҡ көлтәһе ҡапыл һүнде лә ҡуйҙы һәм тирә-яҡтары элеккесә эңер ҡараңғылығына сумды. Ул ғәжәпләнеп алға ҡараһа – бүреләр юҡ!

Оҙаҡламай Мәндемгә еттеләр. Апаһы йәһәт кенә итеген сисеп уға тотторҙо

ла, үҙен арҡаһына йөкмәп, йүгерә-йүгерә йылғаға инеп тә китте. Ҡабаланыуынан йылға уртаһында саҡ һөрләгөп йығылманы. Энеһен ҡырсынлы ярға арҡаһынан шыуҙырып төшөргәс, баҫтырып килмәйҙәрме тип, артына боролоп ҡараны, ашығып аяғына кейҙе лә туғанын етәкләп өйҙәренә ҡарай йүгерҙе. Хәлдәре бөтөп килеп кергәс, малай әсәһенә аяҡ остарына төшкән нур көлтәһе хаҡында һөйләгәйне, ул да, Әсмә апаһы һымаҡ, ышанмағандай итте. Хәйер, унда улы ҡайғыһы юҡ: һыҙланып-һыҙланып илаған ҡыҙының ҡаҙ тәпәйҙәре ише ҡып-ҡыҙыл аяҡтарын, үҙе лә илар сиккә етеп, ҡаҙ майы менән йәһәтләп ышҡырға тотонғайны.

Ә теге яҡты?! Илаһ атҡарған мөғжизәләр?..

***

Ҙур ғына рамға тартылған ҡытыршы киндерҙә – тотош ауыл. Шырпы ҡабы дәүмәлендә кесерәйтеп яһалған йорттарҙың төрләһө бар: ҡаптан саҡ ҡына ҙурырағы, әҙ генә бәләкәйерәге, һалам башлыһы, ҡабыҡ йә дранса менән ябылғаны, ике, өс, дүрт тәҙрәлеһе. Улар араһындағы кеше һындарын кем икәнен танырлыҡ, йөҙҙәрен төсмөрләрлек. Йорттарҙы бер-береһенән айырған кәртә-текмәләрҙе Рәссам «ҡормаҫҡа» булды: беренсенән, картина ныҡ сыбарланасаҡ, икенсенән, ул дәүерҙә (рәссамдың бала сағында) кеше үҙе менән күршеләре араһына бөгөнгө ише кәртә ҡормай йәшәне, йөрөшөп-аралашып, ут алышып көн итте. Шуға ла ошо ғәҙәтте, яҡшы ғәҙәтте, күрһәтергә ниәтләне ул. Ер шары барлыҡҡа килгәндә бер ниндәй ҙә сиктәр, бүлгеләнеүҙәр булмаған даһа – Барлыҡҡа килтереүсе Хоҙайҙың даһи аҡылы илә һәр кем тигеҙ яратылған.

Ауыл боролоп-бормаланып аҡҡан шаршылы Мәндемдең һул ярына ултырған. Йылғаның уң яҡ ярына бейек тирәктәр теҙелеп баҫҡан. Улар араһында – ауыл көтөүе йөрөй, арбалы ат китеп бара, уға өс малай, ҡойроғо һалынҡы эт эйәргән. Ауыл яғында – ваҡ ҡыуаҡлыҡтар, ерек, таллыҡ, бесән күбәләре... Киндерҙең «күге»ндә өйкөм-өйкөм болоттар йөҙә, болоттарҙы тегенән-бынан тишеп, ауыл өҫтөнә ҡояштың нур-энәләре ҡаҙала. Рәссам уйынса, күҙгә тартым мәл, август аҙаҡтары... Һәр хәлдә ул тәбиғәттең шул һил осорон күрһәтмәксе.

Быларҙың барыһы ла әлегә киндергә ҡәләм менән генә төшөрөлгән. Рәссам бына байтаҡ ғүмер инде уларҙы һаман урынлаштыра, яңыларын өҫтәй, юя, үҙен тулыһынса ҡәнәғәтләндерерлек форма-рәүеш табырға тырыша. Эйе, уның ҙур эш башлап тороуы. Еренә еткерә алырмы, юҡмы, илһамы етерме?..

Ауылдың ҡап уртаһында, кескәй генә магазин, мәктәп урынлашҡан урамдар киҫешендә ине уларҙың өйө. Хәйер, өйҙәре әле лә бар, тик унда бүтән кешеләр йәшәй. Реаль тормошта ата йортоноң ҡайһы тирәлә ултырыуы хәҙер мөһим дә түгел, ә картинала ул мотлаҡ уртала булырға тейеш, сөнки Рәссам өсөн ул донъя кендеге, ғаләм үҙәге, оло тормош һәм ижад юлына алып сыҡҡан һуҡмаҡ башы булды. Эйе, Рәссам бөгөн шулай уйлай. Бала сағында, аяуһыҙ оҙон булып тойолған ҡышҡы көндәрҙә, тәүге һүрәттәрен мәңге туң тәҙрә быялаһына, оло мейестең аҡ һыртына тап ошо йортта һыҙғыланы бит. Ҡулына эләккән китап, гәзит-журнал биттәренә хәрефтәр яҙҙы, уларҙағы һүрәттәрҙе, фотоларҙы ҡырҡып алып стенаға элде, торараҡ әсәһенең, ағаһы Әнүрҙең, апаһы Әсмәнең, һеңлеһе Флүрәнең «портреттар»ын ижад итте. Уны солғаған донъя бына шуларҙан ғибәрәт ине ләһә һуғыш осоронда, һуғыштан һуңғы йылдарҙа. Үҙен үҙе белгәндән алып күңел ғәмен һүрәт төшөрөү, тере һәм тере булмаған предметтарҙа төҫтәр,һынланыштар, линиялар, пропорциялар, симметриялар күрергә тырышыу биләгән булмаһа, нимә менән шөғөлләнер ине икән? Башҡа тиҫтер малайҙар һымаҡ көнө-төнө уйын менән генә мауығыр ине, моғайын. Ә былай үҙен

урамдан албырғатыр, әүрәтер шөғөлө булған. Көнкүрештәре ауыр, әммә өмөтлө ине. Ана шул өмөт: өйҙә тамаҡ туҡлығы, өҫтө бөтәйтеү, артабан уҡыу, ижад итеү ынтылышы дәрт биргән уға шул заманда. Әлбиттә, Рәссамдың тормошо, башҡаларҙыҡы менән сағыштырғанда, улай уҡ ауыр булмаған, шөкөр. Ижад башында айырым кешеләрҙең, коллегаларының, колхоз-совхоз, төрлө ойошмалар алдынғыларының портреттарын заказ буйынса яҙыу, район, ҡалаларҙа клуб, мәҙәниәт һарайҙарын биҙәү, билдәле шәхестәрҙең, атап әйткәндә, яҙыусы, артист халҡының портреттарын яҙыу, театрҙарға декорациялар эшләү һымаҡ хеҙмәттәре лә булды. Уҡығанда – каникул, эшләгәндә отпуск көндәре йыш ҡына шул кәсептәрҙә үтә торғайны. Бына хәҙер ул, күпме ваҡытты әрәм иткәнмен, көс-энергияны бушҡа түккәнмен, шул саҡтарҙа уҡ ошоноң ише ҙурыраҡ темаларға тотонорға кәрәккән, тип үкенеп тә ҡуя. Икенсе яҡтан ҡарағанда, ундай эштәр барыбер ҙә эҙләнеү, фекер төйнәү, үҙ-үҙеңде табырға тырышыу мәктәбе лә булған бит.

Һәр нәмәнең логик үҫтерелеше бар: бәләкәйҙән – ҙурға, ябайҙан – ҡатмарлыға, примитивтан – камиллыҡҡа. Туң быялалағы ҡаты һыуыҡ һәм ыжғыр ел һалған серле һыр-һүрәттәрҙе күрмәһә, шулар өҫтөнә үҙенең «эш»тәрен төшөрмәһә, ошо башлаған хеҙмәтенә килеп тә етә алмаҫ ине. Унан һуң, боронғо оҫталарҙың эштәрен өйрәнмәй, үҙ күҙең менән һынлы сәнғәт донъяһындағы төрлө формаларҙы, йүнәлештәрҙе, стилдәрҙе күрмәй, шулар менән мауыҡмай тороп үҙеңдекен табыу мөмкин түгел.

Заказ үтәп йөрөүенең икенсе сәбәбе лә бар ине. Ул да булһа – аҡса етмәү. Тәүҙә һөнәрселек һәм сәнғәт училищеларында, уларҙы тамамлағас ике генә йыл эшләп алды ла сәнғәт институтында уҡыны, өйләнде. Тәүге малайы тыуҙы. Ысынлап та, ғаилә хәле ауыр булған йылдар ине шул, нишләйһең. Кәләшенең эш хаҡы бәләкәй, балалар баҡсаһында тәрбиәсе, үҙенең барлы-юҡлы аҡсаһы – студент стипендияһы. Училище менән институт араһындағы ике йылды иҫәпләмәгәндә, туғыҙ йыл – шулай. Йәшәүҙәре ҡәйнәһенең ҡала ситендәге шәхси йортонда ине. Әммә ир кешегә ҡәйнә йортонда йәшәү психологик йәһәттән еңел булманы: төнгө дәрес әҙерләүҙәр, ижади эшләргә тырышыу, курсташтары, иптәштәре, туған-тыумасалары килгеләй, башҡаһы… Әммә барыһынан да бигерәк әлеге тойғо иҙә: ир башың менән үҙ мөйөшөң юҡ, һин кеше тупһаһында, һин бурыслы.

Башлап торған ошо эшенең – әлегә исеме лә юҡ – идеяһы институтта уҡыған сағында уҡ тыуғайны, ә ныҡлап тотоноуға үткән йыл тыуған яғына шәжәрә байрамына ҡайтҡанында «мәжбүр иттеләр» – осраҡлы ғына килеп сыҡҡан һәм бигүк күңелле булмаған һөйләшеү күңеленә студент сағында уҡ һалынған ҡуҙҙы терелтеп, идеяны киндергә күсереүҙе тиҙләтеп ебәрҙе.

Ҡатыны менән ҡайтҡайнылар ауыл Советы урынлашҡан, үҙәк булған күрше ауылда үткән был сараға. Тамаша ҡылып, тирмәләргә инеп, сәй-мәй ҡапҡылап, йәшлек дуҫ-иштәре, таныш-тоноштары менән күрешеп, һөйләшеп йөрөнөләр. Киске яҡҡа, бер ҡайтҡанда тип, үҙҙәренең ауылдарына ла етергә ниәтләнеләр апаһы Әсмә, һеңлеһе Флүрә менән. Дөрөҫөрәге, Рәссам үҙе өгөтләп алып китте тегеләрҙе. Ике йылға аша күрше ауылда ғына донъя көткән апаһының да, тағы бер ауыл аша арыраҡ йәшәгән һеңлеһенең дә, йортом, ирем, балаларым, тип өҙгөләнеүҙәрен еңеп, саҡ алып китте икеһен. Бала саҡтары үткән йортта күптән башҡа кешеләр йәшәй. (Ҡайтҡылағанда һуғылып йөрөгәне бар уларға.) Ихластан ҡаршы алдылар, өҫтәл йәһәтләнеләр. Былар үҙҙәренең дә күстәнәстәрен өҫтәп ебәргәс, мул табын хасил булды ла ҡуйҙы. Иҫтәлек-хәтирәләргә бирелеп,

иҫән, мәрхүм ауылдаштарын барлап байтаҡ ултырҙылар, ихатаға сығып мал һарайының мөйөшөндәге ни мөғжизә менәндер һаман һурып алынмаған имән бағананы алмашлап ҡосаҡлап апаһы менән һеңлеһе илашып та алды.

Иларлыҡ та шул: бала саҡтарында күпмегә үҫкәндәрен әлеге бағананың шыма юнылған яғына бысаҡ осо менән соҡоп, үлсәп барғандар – шуларҙы шәйләнеләр ҙә тамам һағышҡа бирелделәр.

Быларҙың бында ултырыуын әллә белеп, әллә белмәй, һалмыш бер ауылдаш егет килеп инде лә, хужаның саҡырыуын да көтмәй, өҫтәл артына килеп ултырҙы, бына һеҙҙе, ағай, художник тиҙәр, бөтөп барған ошо ауылың өсөн нимә эшләнегеҙ, тип йәмһеҙ һөйләнеп алды ла киттесе. Йәнәһе лә, бында иң беренсе сиратта аҡса кәрәк, ә һеҙҙең аҡсағыҙ юҡ. Рәссам тәүҙә килеште, хәбәрҙе шаяртыуға бороп ҡараны, әммә егет ултырған һайын ярһый барҙы, ярһый барҙы, аҙаҡтан, бушбоғаҙ икәнһегеҙ, һеҙҙең малярлығығыҙ кемгә хәжәт, тип туҙынып сығып китте. Артабан да кәмһетеп ултырыр ине – хужа уны эткеләп-төрткөләп сығарып ебәрҙе. Матур башланып шулай күңелһеҙ тамамланған байрамдан ҡайтҡас, байтаҡ уйланып йөрөгәндән һуң, үҙенә һүҙ бирҙе лә инде Рәссам: шәжәрә байрамдарын, «Һаумыһығыҙ, ауылдаштар!» кеүек осрашыу һымаҡ ҙур сараларҙы үткәреүгә, ысынлап та, байтаҡ аҡса кәрәк, ул уны, билдәле, таба алмай. Ә бына ҙур ғына картина бүләк итә ала бит? Ала. Ауылдың тирә-яғындағы таныулы берәй тәбиғәт күренешен, әйтәйек, пейзаж төшөрһә: Мәндем, Еҙем боролоштарын, Уҡлыҡаяны, Мағашты, Биштирәкте, Оҙон ятыу буйын... Ауылдаштарының, килгән-ҡайтҡан кешенең, ҡунаҡтарҙың күҙ алдында торһон әйҙә эленеп клубтың берәй стенаһында. Кемдең эше? Фәлән ауылдашыбыҙҙың, республиканың халыҡ рәссамының, дәүләт премияһы лауреатының эше...

Байрамдан ҡайтыу менән үк тотона алманы. Тегеһе, быныһы, институтта сығарылыш имтихандары, унан ҡабул итеү имтихандары, башҡаһы... Шулай ҙа тәүәккәлләне, һәм бына нисә ай инде ауылдаштарының өйҙәрен һәм үҙҙәрен ҡытыршы киндергә «күсерә». Теге иҫерек йәш ауылдашына рәхмәт, сәмен ҡуҙғатты, юҡһа, һаман йөрөр ине, бөгөн башлайым, иртәгә башлайым, тип...

Рәссам артҡа сигенеберәк, киндерҙәге ауылын йәнә күҙҙән үткәрҙе, шунан етеҙ хәрәкәттәр менән мольберты янына килде лә тюбиктарҙан таҡтаһына буяуҙар һығып сығара башланы. Тейешле төҫтәрҙе табыр өсөн береһен береһенә ҡушып иҙҙе. Оҙаҡ бутаны, үҙенә кәрәк ҡушылманы тапҡас, Аллаға тапшырҙыҡ, тине лә ҡылҡәләмен тәүәккәл генә киндергә төрттө...

Эше ырамлы барҙы. Шуға ла кәйефе күтәренке, ҡәнәғәтлеге бар. Институтта дәрестәре бөткәс, ҡайтып йәһәт кенә ашап ала ла китә оҫтаханаһына һәм көн яҡтыһы һүнгәнсе шунда. Эш барышында көйләп тә, йырлап та ебәрә. Сәғәттәр буйы киндергә ҡаҙалып баҫып тороп арып китһә, Әнүр ағаһы үлер алдынан бүләк иткән мандолинаны сиртеп ала. Эйе, шағир халҡы әйтмешләй, илһам ҡошо килде һымаҡ, өркөтөп ҡуйырға ғына ярамай...

Тыуған өйҙәре янында – атаһының портреты. Рәссам уның йөҙөн хәтерләмәй, фронттан һалған берҙән-бер фотоһы ғына һаҡланған, ниндәйҙер мөғжизә менән. Бөйөк Еңеү байрамына бағышлап атаһы иҫтәлегенә «Оҙатыу», «Алыш алдынан», «Хәтер» тип аталған триптихында Рәссам уның йөҙөн ошо берҙән-бер фотоға ҡарап яҙғайны. Натура ла бар ине: Ғәлимә апай – атаһының иң кесе һеңлеһе, төҫкә улар ике тамсы һыу һымаҡ оҡшашҡандар, тигәйне туған-ырыу. Бик оҡшатҡанһың ағайымды, тап шундай ине, тине аҙаҡ Ғәлимә апаһы. Әсәһе лә, эйе, һуғышҡа киткән саҡта тап ошо төҫтә ине атайың, тип һағышланды.

Әсәһе эре һөйәкле, оҙон буйлы, ҡырыҫ холоҡло, көслө характерлы, ифрат

тырыш булды йәш сағында. Колхоздың иң алдынғы ағзаһы – ударницаһы ине. Гел маҡталып ҡына эшләне. Һуғыш йылдарындағы фиҙәкәр хеҙмәте өсөн орден менән бүләкләнде. Көлтә бәйләгәндә ауылда ғына түгел, тотош колхоз буйынса ал бирмәй торғайны. Баҫыуға иң иртә ул бара, иң аҙаҡтан, әхирәттәре күптән ҡайтып өйҙәренә таралышҡас ҡына, ҡайта. Һөҙөмтәлә көлтә һаны башҡаларҙыҡынан байтаҡҡа күберәк сыға – хисапсы менән бригадир иҫәпләй ҙә, шулай ҙа буламы ни ул, тип аптырап, яңылыштыҡ шикелле, тип яңынан һанарға тотоналар икән.

Һуғыштан һуң байтаҡ йылдар үткәс, аяҡ-ҡулы һыҙлай башлағас, иҫәр булынған, ниңә шул тиклем йөрөлгәндер, тип көлә торғайны, әммә һис үкенмәне, немецты еңәйек тип эшләнек бит инде, тип тынысландыра ине күңелен. Бөгөн берәйһенә һөйлә, валлаһи, ышанмаясаҡ. Ҡырыҫыраҡ, дөрөҫөрәге, талапсан булды балаларына, бик иркәләмәне, әммә ғәҙел ине. Үҙендә булған әлеге яуаплылыҡты, егәрлелекте уларға – дүрт балаһына бирергә тырышты. Һәм маҡсатына иреште лә шикелле, һәр хәлдә ағаһы, апаһы, һеңлеһе эшсән булып үҫте. Тик ул ғына һүрәт төшөрә...

Бөгөн килеп шуныһына рәхмәтле Рәссам: әсәһе уның балалыҡ мауығыуына бер ҡасан да ҡаршы төшмәне, тыйманы, әллә ни маҡтамаһа ла, арҡаһынан ҡаға, күрше-фәлән керһә, ғорурланғандай итә торғайны. Ни тиһәң дә, урамда юҡты бушҡа ауҙарып йә һуғышып йөрөмәй, тәртип боҙмай, китап уҡый, дәрес әҙерләй, һүрәт төшөрә. Ә бит ул замандарҙа һүрәт төшөрөү тигән нәмә ауылда бөтөнләй ят шөғөл, хатта етди эш түгел һымаҡ ҡабул ителә – аңламайҙар, сәйер ҡылыҡ итеп ҡарайҙар. Ә дин, шәриғәт закондары кеше йөҙөн, кеше һынын төшөрөүҙе тыйғас, күпселек, бигерәк тә өлкән быуын, өнәмәй ҙә. Совет заманы, әммә был шауҡым кеше аңынан барыбер ҙә сығып бөтмәгәйне әле...

Иҙгән буяуҙарын киндергә һылап бөтөп кенә тора ине – артабан эшләргә теләге булһа ла, көн яҡтыһы бөттө – ишектә ҡыңғырау яңғыраны. Ул береһен дә көтмәй, осрашырға һөйләшкән-килешкән кешеһе лә юҡ, дипломниктары йөрөй башлауға ла иртәрәк, шуға ла аптырабыраҡ ҡалды. Ҡабалан берәй мәшәҡәт сығып, эшенән генә килмәһәләр. Ҡатыны, берәй көн эштән һуң барып иҙәнеңде йыуып, саң-туҙаныңды һөртөп, сәскәләреңә һыу һибеп ҡайтырмын әле, тип һөйләнә ине, шулдыр, бәлки.

– Мырҙам, ас, быңдалығыңды беләм, Әхмәт ағайың.

Ул Әхмәт Лотфуллиндың тауышын таныны.

– Асам, Әхмәт Фәтҡуллович, асам, Һеҙгә лә асмағас, – тине лә ашығып дөйөм ишеккә атланы.

– Керәйем әле, мәйтәм, быңдалыр. Йә, ниндәй эштәр ҡыраһың? Һуңғы арала һорашҡан-белешкән дә юҡ ни менән йәшәүеңде. – Тупһанан үтеү менән Лотфуллин уны һорауҙарға күмеп ташланы.

– Әйҙә үтегеҙ. – Рәссам тулҡынлана төштө, сөнки Рәсәй Художество академияһы академигы уға көн һайын кермәй. – Әллә ни эш ҡырған юҡ та, – тине шунан тартынып ҡына.

Әхмәт Лотфуллин уның оҫтаханаһын күп тапҡырҙар күрһә лә, һуңғы килгәндән һуң нимә үҙгәрҙе икән, тигән һымаҡ һынсыл ҡарашы менән бүлмә эсен байҡап сыҡты, шунан иҙән уртаһында ултырған мольберт алдына килеп баҫты ла киндергә оҙаҡ итеп текләп торҙо, ундағы һәр өйҙө, һәр йөҙҙө тигәндәй ҡапшаны, берсә артҡа сигенде, берсә яҡынайҙы, күҙен бер ҡыҫты, бер ҙур итеп асты. Шунан яй ғына ҡуҙғалып, стеналағы мандолинаны алып «Уйыл»ды сиртте. Музыка ҡоралын кире ҡаҙаҡҡа элеп, йәнә киндер алдына килде.

– Һәйбәт! Ҙур эш башлағанһың, ҡотлайым. Әллә ни ҡырған юҡ, тигән булаһың, ә үҙең ҡырып ятаһың. Бер генә ҡурҡыныс бар: плакатлыҡҡа бирелеп

ҡуйма. Һәр йорт, һәр йөҙ – индивидуаль. Деталдәрҙән ҡурҡма. Артҡы пландағы көтөүсе үҙе, көтөү, малайҙар, эт бик тә йәнле, тормошсан, ә тирәктәр өҫтөндәге болоттарҙы тағы ла ялбырыраҡ, тәртипһеҙерәк ит. Юҡһа, үтә һил, драматизм етешмәй.

Рәссам күңеленә май булып яғылды был һүҙҙәр. Әхмәт Лотфуллин фекере – ҙур фекер. Уға оҡшау, унан хуплау һүҙе ишетеү һәр кем өсөн үтә лә мәртәбәле. Маҡтауға һаран, ижадҡа үтә талапсан, хатта аяуһыҙ был ижад эйәһенең һәр кәңәше урынлы. Рәссамдар ҙурыраҡ, күләмлерәк берәй эш яҙһа, беренсе нәүбәттә, Әхмәт ағай ни әйтер, тип уйлай, уға күрһәтергә тырыша. Хуплаһа, һин дөрөҫ юлдаһың тигән һүҙ, өндәшмәһә – эшең насар, һәр хәлдә уйланып бөтмәгән тигән мәғәнә һалына.

– Үҙеңдең ауылыңмы?

– Эйе. Минең бала саҡтағы...

– Мәсет бар инеме?

– Бар ине, емерҙеләр.

– Емергәндәрен күрҙеңме?

– Юҡ, мин ул саҡта ауылда түгел инем. 60-сы йылдар башында...

– Ултырт һин ул мәсетте. Әүәле бөтә башҡорт ауылдарында ла мәсет булған. Ҡайһыларында хатта икешәр, өсөшәр. Йәнә. Ваҡыт төшөнсәһен бергә ҡуш, йәғни ауыл барлыҡҡа килгәндән алып бөгөнгө көнгә тиклем ниндәй ҙур ваҡиғалар булған – бөтәһе лә сағылыш тапһын. Ихтилалдар, революция, һуғыш, еңеү, мәктәп асыу, коллективизация, әйтәйек. Ана Глазунов, Налбандян ниндәйҙер кимәлдә шул форманы ҡуллана, үҙеңдең ике триптихың да шул стилдә бит. Хәйер, һиңә өйрәтәһе түгел, үҙең оҫта.

Рәссам өсөн был ҡыҙыҡ тәҡдим ине. Һуғыштан һуңғы йылдарҙағы ауыл тормош-көнкүрешен тап шул саҡтағы бала күҙлегенән генә ҡарау, ысынлап та, теманы бер аҙ тарайталыр, статистик формаға килтерәлер. Тик ауылда булған бар ваҡиғаларҙы ла бергә нисек сағылдырырға һуң? Бутҡа килеп сыҡмаҫмы? Уйларға кәрәк...

Әхмәт Лофуллин йәнә мандолинаны алды ла, «Ҡолой кантон»ды сиртә-сиртә, һаман киндергә ҡарауын белде. Шунан, ярай, еңгәң юғалтҡандыр, ҡуҙғалайым, тип ҡайтырға йыйынды. Ишектән сыҡҡанда һуҡ бармағын өҫкә сөйөп йылмайҙы. Тимәк, эшен хупланы.

***

Яҙлы-көҙлө ике һыу кисеп, ҡышҡы бурандарҙа аҙаша-аҙаша, һыуыҡта өшөй-өшөй Оло Ҡауарҙы ете йыллыҡ мәктәбен тамамлағас, ул халыҡ шағиры Мәжит Ғафуриҙың тыуған ауылы Еҙем-Ҡаран мәктәбенә һигеҙенсе класҡа барҙы. Ун биш саҡрым йәйәү йөрөргә. Әммә унда оҙаҡ уҡырға насип булманы уға.

Сентябрь уртаһының ҡоро эҫе бер көнөндә Юлыҡ менән Еҙем-Ҡаран араһындағы арҡанан китеп барһа, ҡаршыһына туҙан, сүп-сар өйөрөлтөп, дәү орсоҡ ише бәүелә-сайҡала, ағастарҙан да бейегерәк булып ҡара ҡойон килеп сыҡты. Халыҡта уны «шайтан туйы» тиҙәр... Балалығы үтеп етмәгәндер инде, унан ҡасаһы-тайшанаһы урынға, ҡаршы йүгереп барып, эсенә инде лә сумды. Инеүе булды, бер яҡтан хәтәр эҫе, икенсе яҡтан боҙҙай һалҡын һауа уны ҡыҫымға алды ла битенә үлән, һалам, тупраҡ, ағас ботаҡтарын килтереп бәрҙе. Танау-ауыҙына, күҙҙәренә, сәс араһына шундуҡ саң-туҙан тулды, төрлө яҡтан тартҡылаған көслө ел күлдәк-ыштанын өҙгөләргә, китап-дәфтәрҙәре һалынған сепрәк тоҡсайын тартып алырға маташты. Тыны ҡыҫылды, хәле бөттө. Әйтерһең дә, эсенән бөтә органдарын һурып алдылар.

Бер нисә минуттан... өйөрөлмәк ҡапыл бушап, күккә олғашҡан ҡара бағана, бәүелә-һелкенә, баҫыу буйлап шыуышып китеп барҙы. Аңына килә алмай байтаҡ сайҡалып баҫып торҙо. Ҡолаҡтары шаулай, ауыҙына тупраҡ тулған, сәстәре

сыра һымаҡ өҫкә тырпайып ҡатҡан. Мәктәпкә барыу тураһында уйларға ла түгел, кире боролоп, нисек кәрәк Һабай ауылына барып етеп, Әсмә апаларының ҡайны-ҡәйнәләренә керҙе. Керҙе лә иҫтән яҙҙы.

Температураһы күтәрелеп, күҙҙәре, ирендәре, танау эсе эрен менән ҡапланды. Ен ҡағылған, тип им-томға маһир Хәлибә әбейҙе саҡырып өшкөрттөләр, май менән тәнен ышҡынылар, үлән төнәтмәләре эсерҙеләр. Үҙгәреш тойолмаған, ат егеп, Еҙем-Ҡаран участка больницаһына алып барҙылар, ә унда, урын юҡ, тип алманылар. Һаташып, баҫлығып, үлем менән яғалашып ай буйы ятты ла ҡуйҙы ул апаһы менән еҙнәһе, ҡоҙа-ҡоҙағыйы ҡулында. Бик яйлап керҙе уға хәл. Бер сама булғас ҡына ауылына ҡайта алды – апаһы, еҙнәһе ат менән илтеп ҡуйҙы.

Ул йыл киренән мәктәпкә бара алманы. Уйланып, борсолоп, үкенеп, үҙен бер кемгә, бер нәмәгә яраҡһыҙ тип тойоп үткәрҙе шул көҙҙө, ҡышты, яҙҙы һәм бөгөн дә шул миҙгелде тормошонда иң бушҡа үткән көндәр тип әсенеп иҫкә ала.

Ә май аҙаҡтарында ауыл Советында секретарь булып эшләгән үгәй атаһы: «Йә, улым, һине күп ҡараным, күп ашаттым, етте, сығып кит. Ҡайҙа бараһың: ФЗО-ғамы, башҡа урынғамы, үҙең ҡара», – тип ҡулына мисәт һуғылған ҡағыҙ тотторҙо. Ҡағыҙға былай тип яҙылғайны: «Справка дана тому-то в том, что его отец погиб в Великой Отечественной войне, мать умерла от болезни».

Телдән ҡала яҙҙы ул быны уҡығас. Эйе, атаһы һуғыштан ҡайта алманы, ләкин әсәһе тере ләһә! Тере булғас, ниңә улай тип яҙырға? Әсәһе был хаҡта беләме икән һуң? Тимәк, әсәһе ризалығы менән шулай яҙғандар, тимәк, ул улының өйҙән китеренә күнгән...

Ул ҡағыҙҙы дүрткә бөкләп түш кеҫәһенә һалды ла өҫтөнә нимә кейгән – шул көйө сыҡты ла китте. Әсәһе менән хушлашыу ҙа юҡ. Хәйер, ул өйҙә түгел ине – әллә йомош менән ерәйһенә кергән, әллә элек йәшәгән ауылына киткән. Кеҫәһендә бер тин аҡса юҡ. Үгәй атай әҙерәк бирһә була бит. Юҡ, бирмәне. Егерменән ашыу саҡрымды йәйәү үтеп, Таҙлар тимер юл станцияһына көскә барып етте. Ярты көн поезд көттө. Кисенә килеп туҡтағас, вагондың сумаҙан, сумка ҡуя торған иң юғары һикеһенә менеп ятты – билеты юҡ, шуға ла, тикшерә ҡалһалар, тип йәшенде. Был хәйләне поезда ҡалаға барып ҡайтҡан ауылдаш малайҙар һөйләгәйне.

Өфөгә килеп төшкәс, вокзалда ҡунып йөрөнө. Университетта уҡыған Әнүр ағаһын эҙләп ҡараһа ла, таба алманы. Йөрөй торғас, 9-сы һанлы башҡорт интернатына барып юлыҡты. Тик директор, урын юҡ, тип бороп сығарҙы. Интернатта хужалыҡ мәшәҡәттәре өсөн ат тоталар икән, шул ат һарайы башында ҡунып йөрөнө бер килке. Интернатта тәрбиәләнеүсе бәхетле малайҙар уға икмәк киҫәктәре сығарып биргеләне. Нишләһен, урам гиҙҙе, һеләгәйен ағыҙып магазиндар, баҙарҙар янынан үтте. Өсәр тәүлек ауыҙына бер семтем ризыҡ эләкмәгән саҡтары булды. Әбей-һәбей, яшыҡлығын, меҫкенлеген күреп, икмәк һынығы һона, ҡунығыу – өй подъездары, парктағы эскәмйәләр.

Шулай ни эшләргә, ҡайҙа барып төртөлөргә белмәй ҡаңғырып йөрөгәндә, бер көн ямғырҙан ҡасып Сталин (хәҙерге Коммунистик) урамындағы «Мелодия» тигән музыка ҡоралдары магазинының тәҙрәләре япмаһы аҫтына кереп ултырһа, йоҡлаған да киткән. «Бында нишләп йоҡлап ултыраһың?», тигән талапсан тауышҡа тертләп уянһа, алдында милиционер тора. Ас яңаҡлы, кескәй генә мыйыҡлы, сөм-ҡара бөҙрә сәстәре фуражкаһының ситенән өлтәйеп сығып торған был ағай, һәр мөйөштә тигәндәй туҡтатып, документ тикшергән башҡа милиционерҙар һымаҡ, ул тиклем дә уҫал тойолманы уға. Шуға ла ярым башҡортса, ярым русса үҙенең кемлеген аңлатты. Милиционер тәмәке тоҡандырып, ҡабаланмай ғына тартты, тартып бөткәс, төпсөгөн ергә ташлап, үксәһе менән иҙҙе.

– Кем тинең, берәй документың бармы? Башҡортса ғына һөйлә, аңлайым.

Ул иҫке киң курткаһының – бер ҡайтҡанында Әнүр ағаһы ҡалдырып киткәйне – түш кеҫәһендә гәзит ярпыһына төрөп йөрөткән, әлеге ише милиционерҙарға көн дә тағатып күрһәткәнлектән таушалып бөткән справкаһын һондо.

Милиционер алды, тағатты, ҡабаланмай ғына уҡыны.

– Да, хәлең шәптән түгел икән шул, энекәш, – тине, тәрән көрһөнөп. – Атай ҙа юҡ, әсәй ҙә. Дөм етем. Һинең һымаҡтар күп хәҙер ҡалала. Һуғыш касафаты. Ҡайҙа ғына ҡуйып бөтөрбөҙ икән? – Ҡағыҙҙы бөкләп, кире ҡайтарҙы. – Әйҙә, исмаһам, тамағыңды туйҙырып ебәрәйем.

Милиционер уны бер ашханаға индерҙе лә алдына ҡыҙыл аш, макарон менән котлет, икмәк, компот ултыртты. Былдай тәғәмдәрҙе уның Өфөгә килгәне бирле, ай ғына барҙыр, беренсегә күреүе ине.

– Өфөлә туған-тыумасаларың бармы?

Ул юҡ тип баш һелкте. Ағайымды эҙләп ҡарағайным да таба алманым, тип һөйләп ултырғыһы килмәне.

– Ҡайһы райондан?

Ул районын атаны, тик ауылының исемен әйтмәне, әйтһә, алып барып ташлар, тип ҡурҡты.

– Мин һине детприемникка илтәм. Унда ашаталар, кейем дә бирәләр. Исмаһам, тамағың туҡ, өҫтөң бөтөн йөрөр. Тик ҡасма! Урамда йөрөп астан үлеүең йә шпананан туҡмалыуың бар.

Алып барам, тиһә лә, ул көндө бер ҡайҙа ла алып барманы. Милиция бүлегенә килтерҙе. Ул шунда өс көн йәшәне. Сығарып ашата ла кире бикләп ҡуя. Ошо өс көн эсендә генә лә үҙе һымаҡ әллә нисә малайҙы алып килделәр бүлеккә. Барыһы ла яйын табып ҡасып бөттө. Ә ул ҡасманы, сөнки барыр ере юҡ ине.

Өс көндән һуң уны ашарға йөрөткән әлеге милиционер, үҙе атаҡанса, Сутолока (Һыутамаҡ) йылғаһы буйындағы ике ҡатлы ҙур ғына ағас йортҡа алып килде. Йорттоң ихатаһы ҙур, сәнскеле тимер сыбыҡ менән уратылған, етмәһә, үтә күренмәҫлек ике ҡат таҡта ҡойма менән кәртәләнгән. Ихатала мунса, уйын, физзарядка яһау өсөн майҙансығы ла бар.

Проходнойҙа ике ир һәм йыуан кәүҙәле, көнбағыш башылай йоморо йөҙлө, һары сәсле, алтын тешле ҡатынға тапшырҙы уны милиционер. Милиционерҙың китеүе булды, былар өсәүләшеп бер-бер артлы асыулы һорауҙар яуҙыра башланы: «Кем, ҡайҙан, нисә йәш, атай-әсәйең бармы, урлашып эләктеңме? Хулиганһыңдыр әле...» Ирҙәрҙең береһе, ярай, йонсотмайыҡ, бер ҙә боҙоҡ балаға оҡшамаған, тигәс кенә туҡтанылар. Справкаһын күрһәткәс, тамам һүҙһеҙ ҡалдылар. Шунан йорттан бер ҡатынды саҡыртып, уға тапшырҙылар. Был ҡатын беренсе ҡаттағы бүлмәгә индереп, тарта-йолҡа машинка менән малайҙың сәсен алды, шунан мунсаға алып кереп йыуындырҙы. Йылымыс мунсанан сығыуға, күп йыуыуҙан элберәп бөткән ҙур трусик тотторҙо. Детприемниктан киткәнсе ошо трусик уның берҙән-бер эске кейеме булды.

Икенсе ҡаттағы бүлмәгә мендереп, әлеге тәрбиәсе, урының ошонда булыр, тип сыҡҡас, олораҡ малайҙар уны уратып та алды: «Кем, ҡайҙан, ниндәй детдомдан, бында нисек килеп эләктең, аҡсаң бармы?» Үҙҙәре ихахайлап көлөшә-көлөшә этәләр, төртәләр, башына сиртәләр. Унан «пионерға алыу» йолаһын башҡарҙылар. Түҙҙе, барыбер иламаны, тик ғәрлеге килде, көсһөҙлөгөнән ғәрләнде. Тәнендәге күк бер нисә көн ошо түбәнһетеүҙе хәтеренә төшөрөп торҙо.

Ашау яғы хөрт. Көн дә – һыуҙа бешерелгән шыйыҡ манный бутҡаһы. Йыш ҡына уныһы ла эләкмәй – олораҡ малайҙар алдарынан алып китә. Тәрилкәләр бушағас та, ашхана буйлап «Встать, сказать спасибо товарищу Сталину!» тигән ҡәтғи бойороҡ яңғырай. Хор менән «Спасибо товарищу Сталину!» тип ҡысҡыралар ҙа ашхананан сығалар. Әйтерһең дә, ул ашатып сығарған.

Бәләкәйерәктәр, сибектәр, йыуаштар төндәрен иҙән йыуа. Бының өсөн кухняла эшләүсе апайҙар батарея араларына ҡатҡан икмәк киҫәктәре ҡыҫтырып китә. Шуны ашап туйынған булалар. Өс балаға бәләкәй генә бер карауат. Иң бәләкәй малай карауатта йоҡлай, олораҡ икәү – түшәкһеҙ-ниһеҙ карауат аҫтында.

Ниһайәт, август баштарында уны детприемник начальнигына алып керҙеләр. Керетер алдынан йыуындырҙылар, кейемен рәтләнеләр. Шунда бер ир, һине мәғариф министры Сәғит Әлибаевҡа алып барырға ҡуштылар, тине лә үҙенә эйәртеп Совет майҙанындағы Хөкүмәт йортона алып китте. Ләкин министр урынында булмай сыҡты, үҙен алып килгән ағай секретарь ҡыҙҙан һорағайны, уны ашығыс рәүештә Мәскәүгә саҡырҙылар, тине лә уның урынбаҫары Скобелевҡа керергә ҡушты. Урынбаҫар уға оҙаҡ ҡына текләп ҡарап торҙо, кемгәлер телефондан шылтыратты: «Һиңә хәҙер бер малай килер, шуны үҙең сығып ҡаршы ал!» Трубкаһын һалғас, йәнә текләп баҡты, әйтерһең дә, тәртип боҙған малайҙы танырға тырышты. Шунан ашыҡмай ғына: «Мин һине йылға училищеһына ебәрәм. Директоры көтөп тора. Шунда уҡы, капитан булырһың», – тине лә өҫтәлендә ятҡан ҙур бер алманы тотторҙо.

Хөкүмәт йортонан сыҡҡас, уны алып килгән ир: «Бәхетең бар, беҙҙән бит күптәрҙе икенсерәк урынға ебәрәләр, – тип автобусҡа ултыртты ла кондукторға: – «Речное училище» туҡталышында төшөрөрһөң», – тип, үҙе ултырмай, китеп тә барҙы.

Шул мәл уның ҡолағына «Унда барма, һиңә унда барырға ярамай» тигән тауыш ишетелгәндәй булды. Кем тауышы, ҡайҙан килә – һис аңлай алмай, һәм, үҙе лә һиҙмәҫтән, әлеге тауышҡа буйһоноп, киләһе туҡталышта һикереп төштө лә ҡалды автобустан. Төшкәс, алан-йолан ҡаранып, башы һуҡҡан яҡҡа китеп барғанда, ҡапыл таныны: Әсмә апаһының тауышы ине бит! Әйтерһең дә, уны ауылынан ҡарап-күҙәтеп, ҡайҙа барған-йөрөгәнен белеп тора!

Тағы вокзалда, подъездарҙа йоҡлауҙар китте, аслыҡтан ҡырҡылды, берәҙәк малайҙарҙан туҡмалды, әллә нисә тапҡыр милиция тикшереүенә эләкте. Ундай саҡтарҙа хәйләһен табып йә алдашып ҡала, йә тәртип һаҡсылары үҙҙәре ебәрә.

Шулай ҡайҙа барып төртөлөргә белмәй йөрөгәндә, уны тағы бер милиционер туҡтатты ла баштан-аяҡ текәлеп ҡарап торҙо. «Нишләп ҡасып йөрөйһөң, ҡасандан бирле эҙләйбеҙ», – тип кеҫәһенән ҡағыҙ алып күрһәтте. Унда «Разыскивается мальчик 14 лет. Приметы – шрам на правой брови, верхней губе» тип яҙылғайны. (Уны ауылда саҡта эт тешләп, яраһы ҡыҙарып беленеп тора ине.) Милиционер уны етәкләп тигәндәй яңынан детприемникка алып барып тапшырҙы. Кисенә оло малайҙар, салага, тағы ҡасһаң, тип (йәнәһе лә, тәрбиәсе ярҙамсылары) һыу эскеһеҙ итеп туҡмап һалып ҡуйҙы...

Бер нисә көндән йәнә детприемник начальнигына саҡырттылар. Был юлы теге бик асыулы ине. Күп һөйләп торманы, Салауат тигән ҡала төҙөлә, шунда бараһың, унан бик ҡаса алмаҫһың, тине ҡәтғи генә. Шундуҡ бер ир тәрбиәсене саҡыртып, алып барыу бурысын аңлатты ла уның ҡарамағына тапшырҙы. Оҙаҡламай йәйәүләп тимер юл вокзалына төшөп тә киттеләр. Оҙатыусы уның быға ҡасҡанын белә, шуға ла уны үҙенән бер аҙым да ситкә ебәрмәй, ҡолағынан тотоп тигәндәй йөрөтөп, төҙөлөп ятҡан ҡалалағы ремесленный училищеға алып барып еткерҙе. Беренсе сентябрҙән малай шунда уҡырға тейеш. Детприемниктан уға бер тин дә аҡса бирмәй ебәрҙеләр, паек һымаҡ нәмә лә юҡ. Ә дәрестәр башланыуға бер аҙна ваҡыт бар – иртәрәк килгәндәр – уҡыу башланғансы ашатыу ҡаралмаған. Асыҡты, хәлһеҙләнде, башы әйләнде, теге ваҡыттағы ҡойон берәй мөғжизә менән бында килеп сыҡһа, был юлы, моғайын да, үҙе менән осортоп алып китер ине.

## Рәссам көндәлектәренән

*«Тәүге курстарҙа уҡығандарға натуранан төшөрөүгә кешеләр саҡырабыҙ. Дәрескә ҡатын-ҡыҙ, ирҙәр, хатта йәш кенә ҡыҙҙар, егеттәр килә. Бер нисә сәғәт дауамында бар группа алдында яланғас ултырырға тейештәр. Студенттар уларҙың йөҙөн килештерә лә, оҡшатмай ҙа. Әлбиттә, тик йөҙ оҡшашлығын биреүҙе генә талап итмәйбеҙ, беҙҙең маҡсат – кеше анатомияһын өйрәтеү, пропорция, яҫылыҡ, пространство – буласаҡ рәссам һынлы сәнғәттең был ябай атрибуттарын мотлаҡ белергә тейеш. Микеланджело мәйеттәрҙе ярып, кешенең эске органдарын, мускул туҡымаларын өйрәнгән бит.*

*Бер нисә сеанстан һуң группала эштәрҙе тикшерәбеҙ. Һәр студент үҙенең эше тураһында һөйләргә, аңлатырға тейеш. Әйтәйек, Андрей төшөргән һәр нәмәне (кеше фигураһы, хайуан, тәбиғәт күренеше, йәнһеҙ предметтар) оҡшатырға ынтыла һәм шуны әлеге һөйләшеүҙәрҙә гел яҡлай. Тормошта, тәбиғәттә шулай икән, рәссам шунан тайпылмаҫҡа тейеш, реаль тормоштан, тәбиғәттән дә бөйөк камиллыҡ юҡ. Тыуҙырыусы (создатель) шулай яралтҡан, тип бара. Икенсе егет, Ансар, киреһенсә, рәссам фотограф түгел, ул һәр нәмәне үҙенсә күрергә, күргәнен үҙенсә сағылдырырға тейеш, тип ҡаршы төшә. Был егеттәрҙең һәр ҡайһыһын яҡлап йә инҡар итеп, башҡалар ҡушылып китә. Һөҙөмтәлә фекерҙәр сарлана, бәхәс дискуссияһы культураһына өйрәнәләр. Һуңынан үҙем ослап ҡуям бәхәсте. Хәйер, был глобаль бәхәсте ослап булмай, ул һынлы сәнғәт тыуғандан бирле бара һәм мәңге барасаҡ.*

*Һынлы сәнғәттә портрет жанры иң ауырҙан иҫәпләнә. Танау, күҙ, ауыҙҙы дөрөҫ ултыртыуҙан ғына портрет хасил булмай, рәссам үҙенең эске ҡарашы, интуицияһы, һиҙемләүе менән яҙған кешеһен тоя, эске донъяһын тота белергә, булмышын, нимә менән йәшәүен, холоҡ-фиғелен, характерын тышҡы йөҙө, ҡиәфәте аша асырға бурыслы. Донъяла һәр кем индивидуаль, рәссам шәхестең ана шул индивидуаллеген тоторға тейеш, тимәк, эше лә индивидуаль булырға тейеш. Мәҫәлән, халыҡ шағиры Мостай Кәримде Тамара Нечаева, Әхмәт Лотфуллин, Юрий Ракша, Рәшит Нурмөхәмәтов һәм башҡалар яҙҙы. Ә ҡарағыҙ, һәр ҡайһыһы үҙенсә яҙҙы, йәғни һәр ҡайһыһының үҙ Мостайы. Нечаева шағирҙы романтик, нескә күңелле итеп күрә; Нурмөхәмәтов иһә, шағир урыны сәхнәлә, трибунала, ти һәм ҡулын күтәреп-болғап ялҡынлы сығыш яһауын кәүҙәләндерә; Лотфуллинда ул ифрат тормошсан, реаль, ер кешеһе, әммә уйсан, унда фәлсәфә, хатта трагизм бар; Ракшаныҡы – монументаль, дәү, аҡыл эйәһе, философ. Шуға күрә ҡурҡмағыҙ, кешене тыштан оҡшатып һүрәтләү мөһим түгел, ә эске булмышын, эске донъяһын, күңел драматизмын күрһәтеү мөһим, тим. Үҙем дә торғаны бер Хужа Насретдин инде – һин дә хаҡлы, ул да...»*

Исмәғил Искәндәров тигән рәссам менән күршеләш уның оҫтаханаһы. Ике ҙур бүлмәле фатир һымағыраҡ инде, ләкин фатир түгел, иң тышҡы ишектәре уртаҡ, бәләкәй генә коридорҙан әлеге ике бүлмәнең айырым ишектәре булған, рәссамдарға махсус төҙөлгән оҫтахана. Күршеһе менән күпселектә килгәндә йә ҡайтҡанда ғына тап булышалар, бер-береһенә ингеләп тә сыҡҡылайҙар. Заманында тәүҙә сәнғәт училищеһында, унан сәнғәт институтында бер осорҙа уҡыйлар, йыйылыштарҙа, иптәштәренең шәхси күргәҙмәләрендә, юбилейҙарында,

төрлө кисәләрҙә осрашып торалар, әммә ул, уның менән дуҫтарбыҙ, тип әйтә алмай. Дуҫ булыр өсөн, уға ҡалһа, оҫтахана күршелеге генә етмәй, күңел күршелеге лә, бәлки, башҡа ҡиммәттәр ҙә кәрәктер.

Институттағы дәрестәренең төшкә тиклем генә булыуынан файҙаланып, бында килеп, мауығып ҡына яҙып торғанда, уртаҡ тышҡы ишекте дөбөр-шатыр асты ла кем менәндер ҡысҡырып һөйләшә-һөйләшә килеп инде күршеһе. Ах, бында төртөлһәләр, эште өҙәләр инде, тип үртәнде Рәссам, сөнки һөйләшә башлаһа, оҙаҡ тороу ғәҙәте бар күршеһенең.

Шөкөр, кермәнеләр – уның көпә-көндөҙ бында ултырыуын Исмәғил башына килтермәгәндер. Ул юлдашы менән үҙенең яғына үтте лә ҡашығаяҡ рәтләй башланы, крандан һыу ағыҙып сәй ҡуйҙы, унан төргәктәр, пакеттар тағата башланы. Мольбертын күсергән, өҫтәл шыуҙырған тауыштар ишетелде. Тиҙҙән рюмка сыңы, ҡәнәғәт көлөү, хәбәр яңғыраны – ҡайҙалыр төшөрөп килеп, байрамды бында дауам итергә ултырыуҙары аңлашылды. Әммә, оҙаҡ та үтмәй, Исмәғил, уртаҡ бәҙрәфкә инеп сыҡҡас, уның ишеген тартты бит, хәйерһеҙ!

– Бәй, күрше, һин бындамы ни? – тине ул, тамам ғәжәпкә ҡалып. – Белгән булһам, давно төртөр инем дә. Былай ғына, былай ғына... Әтеү беҙ бер иптәш менән әҙерәк байрам итеп ултырабыҙ. Иптәш тигәнем – кампаньон, – Исмәғил һөйләнә-һөйләнә бүлмәгә үтте, мольберт алдына барып баҫты. – О-о-о, интересно һәм ҡыҙыҡ. Ҙур эш башлағанһың. Өндәшмәгән дә була бит әле. – Шунан ҡапыл йөҙө һүрәнләнде. – Районда арыу ғына шабашка эшләгәйнем дә, бөгөн шуның аҡсаһын барып алдыҡ. Күңел асыуҙың сәбәбе шул. Ярты йыл әрәмгә китте инде, нишләйһең, зато аҡсаһы булды. Ҡыҙыҡ һәм интересно, интересно һәм ҡыҙыҡ. Был инде Искәндәровтың шабашкаһы түгел, был – ижад. Может, берәй йөҙ грамм кәгерһең беҙҙең менән, ә?

– Юҡ, Исмәғил, рәхмәт, бөгөн түгел, икенсе ваҡыт.

– Ҡасан саҡырһаң да, һинең гел «икенсе ваҡыт» инде. Шабашникка керә булаһыңмы ни?

– Ҡуйсәле...

– Интересно һәм ҡыҙыҡ.

– Әллә инде. Башлап ҡына торам бит әле.

– Башлап торам, ти, бөтөп бараһың бит.

Исмәғил, уға бүтәнсә күтәрелеп ҡарамай, бесәй ише йомшаҡ ҡына баҫып сығып китте, әйтерһең дә, күләгә. Күп тә үтмәй, ҡуҙғалғандары ла ишетелде – әллә уның эшләп тороуын күтәрә алманы, әллә берәй ашығыс эштәре барлығын иҫтәренә төшөрҙөләр, белмәҫһең.

Исмәғилдең бергә уҡыу дәүеренән үк ниндәйҙер сәйерлеген тоя ул. Уҡыусылар дәрестә берәйһенең эшен хуплаһа йәки башҡаларға өлгө итеп ҡуйһа, әлегеләй төҫө үҙгәрә лә китә торғайны. Курс, диплом картиналарына ла нисектер битараф ҡараны, дөйөм хәбәргә ҡушылманы, өндәшмәҫ булды, уҡып бөтөп, төрлө кимәлдәге күргәҙмәләрҙә ҡатнашһалар ҙа, артабан исем-дәрәжә алһа, каталогтары, матбуғат биттәрендә ижадтарына бағышланған мәҡәләләр сыҡһа ла, күрмәмеш-белмәмешкә һалышты. Әллә ни аралашып та бармай, өйөрҙән ҡыуылған ҡарт ата бүре һымаҡ яңғыҙ йөрөй. Бәлки, уға ғына шулай тойолалыр, ҙурҙан ҡупҡанда ижад кешеһе барыһы ла яңғыҙ бит.

Күршеһе уның уй-фекерен бутап сығып китһә лә, Рәссам яйлап тынысланды, эшен һәүетемсә дауам итте. Өйҙәре эргәһенә әсәһенең, унан атаһының йөҙҙәрен яҙып бөттө. Әсәһенекен яҙыуы сағыштырмаса еңел булды, сөнки ул иҫән әле, үҙҙәрендә йәшәгәс, йөҙө һәр саҡ күҙе алдында. Атаһының фронттан һалған әлеге берҙән-бер фотоһы һаҡланған: трафарет атта байраҡ тотоп кавалерист формаһы

кейгән трафарет ҡыҙылармееҵ ултыра, ә баш урынында – тишек. Атаһы башын шул уйымға тыҡҡан...

Һуң ғына ҡайтып инде өйөнә Рәссам. Көнөнән бик ҡәнәғәт ҡайтты. Бындай осошло мәлдәр оҙаҡҡараҡ дауам итһә ине, тип теләне. Телевизорҙан яңылыҡтар тыңланы, ҡатыны менән гәпләште, үҙ ғаиләһе менән айырым йәшәгән оло улына шылтыратып хәл-әхүәлен белеште, гәзит, журнал ҡараштырҙы.

Йоҡоһонда сәйер төш күрҙе.

СССР-ҙың халыҡ рәссамы Борис Домашников үлергә ята, имеш. Йөрәгенә ашығыс операция талап ителә, юҡһа бына-бына туҡтаясаҡ икән. Эҙләйҙәр. Бер кемдеке лә кәрәкмәй, шуныҡын ғына алығыҙ, тип уның йөрәген таптыра. Был күренекле рәссамды, Дәүләт премияһы лауреатын, оло талант эйәһен республика һис юғалтырға тейеш түгел, тип еңел генә ризалаша Рәссам, килеп һорағастары. Уны машинала йәһәт кенә дауаханаға алып барып, Домашников ятҡан операция өҫтәле янына һалалар. Врачтар, медсестралар мәж килә, әҙерлек бара, уның йөрәген һурып аласаҡ билдәле хирург та шунда...

Шул саҡ ҡапыл палата тәҙрәһенән яп-яҡты нур көлтәһе бәреп керә лә уның өҫтөнә төшә һәм Әсмә апаһының күкрәктән сыҡҡан тоноғораҡ тауышы ишетелә: «Йөрәгеңде аслан бирәһе булма! Һин әле йәш, башлаған эшеңде тамамларға кәрәк, бөтә ауыл халҡы көтә». Ул бер аҙға аптырап ҡала, берсә илар сиккә еткән Домашниковҡа, берсә ҡулдарын уның өҫтөндә тотҡан хирургҡа ҡарай һәм апаһының әйткәндәре аңына барып етә – ысынлап та, ул нишләп йөрәген кемгәлер бирергә тейеш һуң әле? Бирһә – үлә, йөрәкһеҙ йәшәп булмай ҙа! «Юҡ, мин кире уйланым, бирмәйем, үҙемә кәрәк!» – тип операция өҫтәленән тора ла больницанан сығып китә...

Иртәнсәк радионан, иртәнге яңылыҡтарҙа, СССР-ҙың халыҡ рәссамы, Рәсәй Художество академияһының мөхбир ағзаһы, Дәүләт премияһы лауреаты Борис Домашниковтың 82-се йәшендә вафат булыуы хаҡында хәбәр иттеләр. Быны ишеткәс, ул тертләп китте лә ирекһеҙҙән йөрәген тотоп ҡараны: урынында. Шулай ҙа, йөрәкте әлдә бирмәгәнмен, Домашников урынына бөгөн минең исем-шәрифте әйтеп торорҙар ине, тип көлөмһөрәп ҡуйҙы...

***

Салауаттағы ремесленный училищела күпселектә 14-15 йәшлек малайҙар. Бөтәһе лә тигәндәй һуғыш балалары – етемдәр, төрлө балалар йорттарынан, ауылдарҙан килгәндәр. Хәрби тәртип: алтыла тороу, ихатала ярты сәғәт тирәһе иртәнге физзарядка, йыуыныу, кейенеү, строй менән ашханаға барыу, көнө буйы уҡыу, кисен – исемлек буйынса тикшереү һәм отбой. Ашатыуҙары һәйбәт, һәр хәлдә ауылдан сығып киткәне бирле йүнле ризыҡ күрмәгәнгәме икән, шулай тойола. Итле аш, майлы бутҡа, гуляш, котлет, теләгәнсә аҡ һәм ҡара икмәк, сәй йә компот.

Ә кейемдәре һуң?! Парад формаһы – күк ситса гимнастерка, йөндән туҡылған ҡара салбар, сөм-ҡара шинель, ҡара фуражка, яҫы ҡара ҡайыш, ҡара туфлиҙар. Көндәлек эш кейеме – йөн гимнастерка, ҡара йөн салбар, ныҡлы ботинкалар, йылы бушлат, халат.

Уҡыу – теоретик һәм практик занятиелар – уға еңел бирелде. Бәләкәйҙән һүрәт төшөрөү менән мауыҡҡас, һыҙма – ә бында ул төп предметтарҙың береһе – күптән белгән фән кеүек. Унан килеп станоктарҙа эшләү – оҫта ҡулдар эше, аңың-башың белгәнде деталгә күсереүе ауыр түгел.

Токарь һөнәренә оло ғына урыҫ кешеһе уҡытты. Ул балаларға көндәлек задание биргәндә чертежын иң беренсе нәүбәттә уға тоттора ла, йәһәт кенә өлгөһөн эшләтеп алып, башҡаларға күрһәтә. «Бына ул бөгөнгө заданиены эшләне лә, һеҙ

ҙә шуны башҡарырға тейешһегеҙ», – тип ҡара таҡтаға эшләнгән деталдең чертежын һыҙып ҡуя. Ул, ысынлап та, кинәнеп эшләй. Һәр чертежды аңларға, төбөнә төшөргә тырыша, һөҙөмтәлә станокта ҡырған деталдәренең барыһы ла теүәл килеп сыға. Мастер маҡтай, башҡаларға өлгө итеп ҡуя.

Бер дәрестә ул уҡыусыларға йоморо формалағы бер деталдең уртаһын табырға ҡушты. Ун бишләп малай оҙаҡ этләнде, төрлөсә ҡыландырып ҡараны, әйләндерҙе-тулғандырҙы, ләкин уның иҫәпләүе генә дөрөҫ булып сыҡты. Математик иҫәпләүҙәрҙең теорияһын белмәһә лә, интуицияһы систе әлеге ҡатмарлы мәсьәләне. Мастер уның башы эшләгәнен тағы бер күрҙе лә, шул дәрестән һуң үҙен генә ҡалдырып, һиңә уҡырға, артабан институтҡа инеп инженер булырға кәрәк, егет, тине.

Ә бер көндө ул уны өйөнә алып ҡайтты.

– Улым, – тип һүҙ башланы ул, ҡул-бит сайҡап аш өҫтәле артына ултырғас. – Бына беҙ Варвара Николаевна менән ошонда йәшәп ятабыҙ. Балаларыбыҙ булманы. Олоғайып та барабыҙ. Күреп тораһың, өйөм әлегә бына тигән, баҡсам бар, өс тәгәрмәсле мотоциклым, һыйыр, башҡа мөлкәт. Варвара Николаевна менән һөйләштек тә һине үҙебеҙгә ул итеп алырға булдыҡ. Атайың да юҡ, әсәйең дә.

– Әсәйем бар, бер туған ағайым, апайым, һеңлем, – тине ул.

– Как бар? – Иван Ивановичтың ҙур зәңгәр күҙҙәре йомороланып маңлайына һикерҙе, яңағы һәленеп төштө. – «Дело»ңда бит, атаһы һуғышта һәләк булған, әсәһе үлгән, тип яҙылған.

– Мине өйҙән сығарып ебәрер өсөн үгәй атай шундай справка яҙып бирҙе.

– Нисек яҙып бирҙе? Тере кешене үлгән тип яҙып буламы ни? Это ведь не так просто.

– Үгәй атай сельсоветта секретарь булып эшләй. Нимә яҙһа ла ярай, мисәт үҙ ҡулында.

– Да-а-а, дела. Ә беҙ һине, үкһеҙ етем тип, уллыҡҡа алырға ниәтләнгәйнек. – Иван Иванович үкенесле ҡараш менән ҡатынына һирпелде. – Бына нисек икән? – Шунан байтаҡ һүҙһеҙ ултырҙы. – Шулай ҙа уйла, улым, ниәтебеҙ ихлас, үгәй атайың шулай тип справка яҙып биргәс,һиңә унда хәҙер ишектәр ябыҡ, ҡайтып йөрөй алмайһың. Беҙҙәге тормош перспективалы. Бер нәмәгә лә мохтажлығыбыҙ юҡ. Аҙаҡтан, беҙҙән һуң, ошо донъя һиңә ҡаласаҡ.

– Юҡ, Иван Иванович, рәхмәт. Әсәйем, туғандарым бар көйө мин нисек һеҙҙең улығыҙ булайым, ти?

– Это верно. Өй-йорто бармы һуң әсәйеңдең? Бер ҙә уға ҡайтҡаныңды ла, туған-тыумасаларыңдың һиңә килгәнен дә күргәнем юҡ таһа.

– Әсәйем килә алмай, эшләй. Ағайым Өфөлә университетта уҡый, апайым күрше ауылда тормошта, һеңлем әсәйем, үгәй атай менән бергә тора.

– Улай икән. Да-а-а, дела.

Мастер ҙа, Варвара Николаевна ла тамам аптыраашта ҡалды, хатта ашауҙарынан да туҡтанылар. Ул тәғәмгә бөтөнләй ҡағылманы, сәйен генә эсте лә хушлашып ятағына ашыҡты.

Иван Ивановичтың йылы мөнәсәбәте, уй-ниәте тормошҡа ашмаһа ла, үҙгәрмәне. Ихтирамлы булып ҡалды, арҡаһынан да ҡағып киткеләне, кистәрен өйөнә лә саҡырғыланы, әсәһенең хәл-әхүәлен һорашҡылап торҙо. Бәлки, уйлар, ризалашыр, тигән өмөтө һаҡланғандыр?

Училищелағы ике йыл үтеп тә китте. Уҡыу һөҙөмтәләре буйынса уға Сталин портреты төшкән Маҡтау ҡағыҙы, 5-се разряд (иң юғары) хаҡында танытма тоттороп, төҙөлөп ятҡан Салауат ҡалаһының 18-се комбинатындағы ремонт-механика заводына эшкә ебәрҙеләр. Дөйөм ятаҡтан урын да була, тинеләр.

Ул эшләгән цех ҙур, төрлө-төрлө ҡеүәтле станоктар менән тулған. Уны токарь станогына беркеттеләр. Цехҡа кергәс тә ҙур ҡара таҡта эленгән. Таҡтаға көн һайын иртән эшкә килеүгә «Кисә станочник заданиеһын нисә процентҡа үтәне?» тигән баш аҫтында аҡбур менән яҙылған исемлек теҙәләр. Заданиены яҡшы үтәгәндәр – өҫтә, насарыраҡтар – аҫта. Егет көн дә әлеге исемлектә үҙ фамилияһын күрә. Ул гел генә йә өсөнсө, йә дүртенсе булып яҙыла, бер ҙә аҫҡа төшмәй, һәм егет, бында минең фамилиялаш бар икән, тип уйлай.

Уны төрлө станоктарҙа эшләтеп ҡаранылар, һәм ул ҡайһыһына күсһә лә, йәһәт үҙләштерҙе. Тиҙҙән уны цехтағы иң ҙур токарь станогына (Дип-500) тәжрибәле мастерға практикант итеп ҡуйҙылар. Әлеге станокта эшләнә торған ҙур заготовкалар өҫтә йөрөгән мостовой кран ярҙамында ғына ҡуйыла, сөнки улар ҙур һәм ифрат ауыр, эшкәртеүе лә еңелдән түгел.

Бер көндө цехҡа, бер деталде тишеп кереп, эсендә бик дөрөҫ размерҙағы, сфера формаһындағы ҡыуышлыҡ ҡырырға, тигән задание килде. Тәүҙә аңлайтөшөнә алмай йонсонолар, унан икенсе цехтан иптәштәрен саҡырҙылар, инженерҙар йәлеп ителде, бер нисә көндән сиселешен таптылар ҙа шикелле. Ләкин токарҙар был деталде көнөнә бер, уҙа барһа ике бөртөк – уныһы ла бик һирәк – эшләй алды. Сөнки ул сфераға бәләкәй генә тишек аша кереп, уның чертежда бирелгән размерын да, дөрөҫлөгөн дә тикшереү ифрат ҡыйын ине. Шуға күрә уны әйләнгән һайын планшайба тип аталған ҡоролманан тулыһынса алып, һүтеп (ул ике өлөштән тора), сфераның дөрөҫлөгөн һәм үлсәмен тикшереп, унан станокка яңынан ҡуйып эшләп бөтөрөргә тура килә. Быны өсөн цехтағы иң оҫта токарға ла бер смена ваҡыты кәрәк.

Практиканттың башына бик ябай, шул уҡ ваҡытта зирәк бер тоҫмал килде. Ҡәҙимге ҡайсыны япҡанда, тотҡостары менән бергә остары ла ябыла, асҡанда остары ла асыла. Асылғанда йәки ябылғанда уларҙың аралары бер үк. Ошо принциптан сығып, 4 мм ҡалынлығындағы ҡалайҙан үлсәү приборы яһаны. Уның бер яғындағы остарын асҡанда, икенсе яғы деталь эсендәге кәрәк конфигурацияны һәрмәй. Осонда – стрелка һәм шкала. Улар деталь эсендә булған размерҙы дөп-дөрөҫ күрһәтә.

Ҙур станокта саҡ эшләй башлаған егеттең был рационализаторлыҡ тәҡдиме эште шул тиклем тиҙләтте – улар мастер менән икеһенә бер сменаға 12 деталь етештерә башланы. Бер нисә көндән эшкә килһә, уларҙың станогы янында цех начальнигы, инженерҙар, мастерҙар йыйылған. Билдәле, ҡуйған «рекорд»тары хаҡында гәпләшәләр. Практиканҡа үҙенең ҡулайламаһын күрһәтергә, уның эш принцибын аңлатырға тура килде. Техник белгестәрҙең ҡайһылары баш сайҡаны, ҡайһылары өндәшмәне, береһе, молодец, егет, тип арҡаһынан ҡаҡты.

Шул көндән башлап уның фамилияһы өсөнсө, дүртенсе урындан гел беренсе булып яҙыла башланы. Әммә ул быныһ һаман үҙе икәнен белмәй, иртәнсәк әлеге таҡта янынан үткәндә, ҡара, минең фамилиялаш ағай һуңғы ваҡытта хәтәр шәп эшләргә тотондо бит, тип уйлай ине.

## Рәссам көндәлектәренән

*«Бөгөн йәштәр, шул иҫәптән беҙҙең студенттар ҙа, сюрреализм, авангардизм, башҡа «изм»дар менән мауыға. Күрәләр, табалар, бер-береһенә тараталар. Күптәре, бөгөнгө һынлы сәнғәт шулай булырға тейеш, тип уйлай. Әлбиттә, уларҙы белергә кәрәк, улар ҙа – кемдеңдер эҙләнеүҙәре бит. Ләкин уларға һуҡырҙарса табынырға ярамай. Сәнғәт әҫәре – рәссамдың үҙе тыуып-үҫкән тупраҡтан яралырға тейеш, шулай булмаһа, ул – абстракт һәм ерлекһеҙ. Көнбайыш Европа, Америка, Рәсәй*

*һ.б. һынлы сәнғәт мәктәптәре бар, белгестәр тарафынан улар юҡҡа ғына шулай квалификацияланмаған, йәғни һәр халыҡтың үҙ традициялары, материалы, мөхите, алымдары, теле, тарихы һәм улар башҡа халыҡ вәкиленә тап ана шулай булғаны өсөн ҡыҙыҡ та.*

*Бер заман, мин йәшерәк саҡта әле, эсперанто тигән тел уйлап сығарғайнылар. Төрлө телдәрҙән йыйылған ниндәйҙер уртаҡ һүҙҙәр венегреты инде шунда. Йәнәһе лә, ул телдә Ер шарындағы бөтә милләттәр ҙә берберенһен аңлап һөйләшә аласаҡ. Ләкин килеп сыҡманы, яһалма тел тарала алманы ер йөҙөндә, сөнки ул, ысынлап та, яһалма ине. Ерлеге, традицияһы булмағанға шулай берегеп китә алманы. Шуның ише, милли ерлектә тыуған һынлы сәнғәт кенә (бер һынлы сәнғәт кенәме икән әле?!) йәшәй ала. Әйтәйек, миңә боронғо гректарҙың, римляндарҙың үлемһеҙ сәнғәте менән бергә бөгөнгө Балтик буйы республикалары, әрмән, грузин, әзербайжан рәссамдарының әҫәрҙәре лә ҡыҙыҡ. Ана шул ерлекле булғаны өсөн ҡыҙыҡ һәм уларҙың көсө лә шунда. Мин уларҙың эштәре аша ошо халыҡтарҙың (Кабуладзе, Саръян, Салахов, Черленис) тышҡы йөҙ-ҡиәфәттәрен генә түгел, холоҡ-фиғелен, ғөрөф-ғәҙәттәрен, йәшәү рәүешен, темпераментын, тарихтарын күрәм. Башҡорт милли һынлы сәнғәте мин һанаған республикаларҙың һынлы сәнғәтенән һис тә ҡайтыш түгел. Бер нәмә лә юҡтан бар булмай – беҙҙең традициялар көслө, һәм шуларҙы дауам иткән талантлы рәссамдарыбыҙ бар. Әйтәйек, беренсе сиратта, әлбиттә, Әхмәт Лотфуллин, уға тиклем Ҡасим Дәүләткилдиев, халыҡтың ауыҙ-тел ижады нигеҙендә эшләгән йәштәр Жәлил Сөләймәнов, ҡыҙыҡ формалар тапҡан Әмир Мәжитов, Фәрит Ерғәлиев. Быны төп сәбәбе, миңә ҡалһа, башҡорттоң тәбиғәт балаһы булыуында, ижадына һутты тап ерҙән, тәбиғәттән, үҙен ураткан мөхиттән алыуында. Ул тамырһыҙ ҡамғаҡ һымаҡ тәгәрәп-осоп йөрөмәгән, Уралына ереккән, үҫкән, башҡорттоң ҡан тамырҙары ерҙең тамырына тоташҡан. Быны аңлатыуы, ҡабул итеүе ҡыйын, әммә ысыны шулай.*

*Рәссамдар союзының партком секретары булып эшләгән заманда Мәскәүҙәге ҙур бер сәйәси сараға арналған Бөтә Союз күргәҙмәһе үткәйне. Ҙур уңыш ҡаҙанды ул – ҡараусылар күп булды, үҙәк гәзиттәр, хатта «Правда» яҙып сыҡты, ил етәкселәре килде. Күргәҙмәне япҡан көндө Художество академияһында академия президенты менән Рәссамдар союзы идараһы етәкселеге ҡабул итеү ойошторҙо. Ҡабул итеүҙә Художество академияһының вице-президенты, Башҡортостан молодец, һынатманы был юлы ла, һәр ваҡыттағыса юғары кимәлдәге әҫәрҙәр күрһәтте, форсаттан файҙаланып, бер-ике кешегеҙҙе член-корлыҡҡа йәки академиклыҡҡа ҡабул итеүҙе һорай алаһығыҙ, киләһе президиумға ҡуйыр инек, тигән тәҡдим әйтте. Партком секретары менән республика союзы идараһы рәйесе аптырашып бер-береһенә ҡарашты, йәнәһе, ысын әйтәме, әллә шаяртамы – бындай хәбәрҙе һис көтмәгәйнеләр. Рәйес тиҙ аңына килде һәм, мөмкин, бына мәҫәлән, барыбыҙға ла билдәле пейзажист, халыҡ рәссамы Борис Домашниковты академиклыҡҡа күрһәтә алабыҙ, тине. Мәскәү, Ҡыҙыл майҙан, рустың аҡ ҡайындары, Рәсәй киңлектәре, сиркәүҙәр. Сәйәси-ижтимағи яҡтан да һүҙ тейҙерерлек түгел. «Эйе, килешәм, – тине вице-президент, итәғәтле генә итеп, – ул ҙур рәссам, тик һеҙ милли республика, ниңә берәй милли рәссамығыҙҙы күрһәтмәйһегеҙ, әйтәйек, Лотфуллинды? – тип һораны. – Ниндәй милли колорит, ерлек, халыҡсанлыҡ, монументаллек, ундайҙар Союз кимәлендә бик һирәк». Йәнә*

*аптыраштылар. Сөнки «оло ағай» вәкиленән ундай һүҙ ишетеүе сәйер ҙә, көтөлмәгәнсә лә ине. Үҙеңдекен күтәрһәң, ризалашмаҫтар, милләтселектә ғәйепләрҙәр, тип ҡурҡып бөткәндәр. «Улайһа, әйҙәгеҙ, Лотфуллинды – академиклыҡҡа, Домашниковты член-корлыҡҡа», – тине вице-президент. Мәсьәләнең шулай ярайһы уҡ еңел хәл ителеүе күңелдәренә май булып ятты.*

*Мәскәү һүҙендә торҙо: СССР Художество академияһының сираттағы президиумында Әхмәт Лотфуллин бер тауыштан – академик, Борис Домашников мөхбир-ағза итеп һайланды. Бына бит нисек, Мәскәү өсөн милли республика рәссамының ижады ҡыҙыҡлыраҡ булып сыҡты, дөрөҫөрәге, юғары баһаланды, милли сикләнгәнлек күрһәтмәне, киң күңеллелек күрһәтте. Тимәк, милли колорит юғары баһалана әле лә. Ә беҙ үҙебеҙ шуны аңлап етмәйбеҙ, һуҡырҙарса ситтекенә (кешегә күршенең тауығы ла ҡаҙҙай) табынабыҙ. Тыуған мөхиттән, тәбиғәттән, ерҙән айырылмаҫҡа кәрәк. Мин шуны студенттарға аңлатырға тырышам. Аңлағаны бар, аңламағаны, аңларға теләмәгәне бар. Ләкин нотоҡ туҡыуҙан төңөлмәйем – бөгөн булмаһа, иртәгә барып етер баштарына. Әлегә иң мөһиме – күңелдәренә шул орлоҡто сәсеп ҡалдырыу. Иртәгә һуң булыуы ихтимал...»*

Дөйөм ятаҡтағы бер бүлмәлә йәшәгән егеттәр кис һис өйҙә тормай: йә эргәләге кинотеатрға киноға йөрөй, йә ҡыҙҙарға бара. Оялсан холоҡло ул ғына бер ҡайҙа сыҡмай – эшенән ҡайта ла, подвалдағы душҡа төшөп йыуынғас, ашап ала һәм гәзит, журнал уҡый, һүрәт төшөрә. Бүлмәләш егеттәре берсә аптырай, берсә үҙҙәре менән барырға өгөтләй, хатта, әллә һинең берәй етешһеҙлегең бармы, тип көлә. Араларындағы иң ҡыйыу Динислам, ярай, бәйләнмәйек, ул профессор булаһы кеше, тип әйтһә генә туҡтайҙар.

Шулай ҙа бер кис әлеге Динислам да түҙмәне унын«бикләнеүе»нә – көн дә тигәндәй өгөтләгән Рәсүлгә ҡушылып, етте һиңә гәзит, журнал, китап араһында һаҫып ултырыу, әйҙә беҙҙең менән, бер һылыу ҡыҙ менән таныштырабыҙ, тип, ай-вайына ҡуймай, алып сығып китте. Күрше ятаҡтағы ҡыҙҙар бүлмәһенә барып керҙеләр. Рәсүл менән Динислам йөрөгән ҡыҙҙарҙы ул белә, ә бына өсөнсө ҡыҙҙы бөтөнләй күргәне юҡ. Һөйләшеүҙәренән шуны аңғарҙы: Өфөлә педучилище бөтөргән дә бында бер балалар баҡсаһына практика үтергә ебәргәндәр икән. Үҙе акварель буяуҙар менән иртәгәге дәрескә сәскә һүрәттәре төшөрөп маташа. Унын мәшәҡәтләнеүен күргән Динисламға ни етә ҡалды: «Йонсома улай, бына һиңә ярҙамға махсус рәүештә художник алып килдек, ул хәҙер бөтәһен дә эшләп бирер», – тип унын менән таныштырҙылар. Егет исемен атап ҡулын һуҙҙы, ҡыҙ ҙа үҙенең бәләкәй генә ҡулын биреп «Лимма» тине. Билдәле, ул шундуҡ ярҙамға ултырҙы, һәм, икәүләп тотонғас ни, эштәре ярайһы ырамланды.

Шул көндән алып унын ҡыҙ янына гел генә барғыһы килеп тора башланы. Һылтау бар: йәнәһе лә, дәрескә әҙерләнергә ярҙам итә. Бүлмәләш егеттәре, әйҙә киттек, тиеү менән алдан төшә хәҙер. Артабан яңғыҙ ҙа барырға ҡыйыуланып алды, һәм китте, әйләнде матур, инсафлы ҡыҙ менән мөхәббәт романы. Ял көндәре киноға баралар, йәш ҡала урамдары буйлап йөрөйҙәр. Ләкин иҫереп оҙаҡ йөрөргә мөмкин булманы – бер көндө военкоматҡа саҡырып ҡулына повестка тотторҙолар. Нишләһен, Лимманы менән хушлашты ла китте инде. Көтөргә, хатлашырға вәғәҙә лә бирешмәнеләр.

Ярты ай тигәндә Алыҫ Көнсығыштың легендар Спасск-Дальний ҡалаһына килеп төштө. ШМАС (школа младших авиационных специалистов) – авиацияның

кесе белгестәре мәктәбенә уҡырға алып килгәндәр булып сыҡты. Йәшәү урындары – ҡыҙыл кирбестән ҡырыҫ монументаль стилдә төҙөлгән ике ҡатлы ҙур казармалар.

Мәктәптә тәртип ҡаты: иртәнге сәғәт алтыла подъем. 45 секунд эсендә, хәрби формаңды кейеп, плацта стройҙа торорға тейешһең. Көндөң ниндәй булыуына ҡарамаҫтан, бер сәғәтлек иртәнге физзарядка, унан – карауатты йыйыштырыу, йыуыныу, иртәнге ашҡа теҙелеү. Ашхана – 3 саҡрымда. Юлға сығыр алдынан старшина сафта баҫып торған һәр һалдаттың яғаһын, ҡулдарҙың, итектәрҙең таҙалығын тикшерә. Таҙартылмаған итек йәки бысраҡ яға тапһа, тегене сафтан сығара ла таҙарынырға ҡуша, ә башҡалар уны көтөп баҫып тора. Унаһы әле ярай, ашханаға барып еткәс икәс, бөтә ротаны туҡтата ла, берәй курсантта юҡ ҡына ғәйеп табып, барыһын да кире казармаға йүгертә...

Был хәл ҡайһы бер көндәрҙә 3-4 мәртәбә ҡабатлана Ундай көндәрҙә, билдәле, аштары һыуынып бөтә.

Дәрестәр көнөнә алты сәғәт. Төрлө стендтарҙа, моделдәрҙә, киҫелештәрҙә реактив истребителдәрҙең деталдәрен өйрәнәләр. Дәреслектәр, уҡыу әсбаптары ҡулдарына бирелмәй, тик инструктор һөйләгән, аңлатҡан, күрһәткән лекцияларҙан конспект яҙып ултыралар. Дәрестәрҙән һуң конспекттарын шундуҡ йыйып алалар. Дәрес әҙерләгәндә ул конспекттарҙы кире тараталар. Һүрәттәрҙә, схемаларҙа, һыҙмаларҙа еңел йөҙгәнлектән, Рәшиткә былар ауыр түгел. Теоретик дәрестәрҙән һуң плацта строевой, спорт майҙансығында физик күнекмәләр башлана...

Бер көндө уны батальон командирына саҡырттылар. Командир уға былай тине: «Техниканы беләһең, яҡшы уҡыйһың, молодец. Арағыҙҙа уҡый алмағандар, командирҙар һөйләгәнде бөтөнләй аңламағандар ҙа бар, шуларҙың бер нисәһен һиңә беркетергә булдыҡ. Ярҙам ит».

Уға Урта Азия республикаларынан саҡырылған биш егетте биреп ҡуйҙылар. Ауылдыҡыларҙыр инде, күрәһең, улар: ауыл техникаһын ғына беләләр, уны ла арлы-бирле. Ул самоподготовка ваҡытында үҙе белгәнде, дөрөҫөрәге, инструкторҙар дәрестәрҙә һөйләгәнде был биш туңбашҡа өйрәтә-аңлата башланы. Байтаҡ хитланды. Улар белмәһә, командирҙар үҙенән талап итә, шулайтып өҫтөнә ифрат ҙур яуаплылыҡ алып ҡуйҙы.

Көтмәгәндә бының кире яғы ла килеп сыҡты – уға беркетелгән егеттәр тәртипкә өйрәнмәгән – уларға фәҡәт ваҡыт үтһен. Йыш ҡына берәмләп, ҡайсаҡ икешәрләп лазаретҡа инеп яталар. Лазаретта үткән аҙна-ун көндән йөҙҙәре тулыланып, кәйефтәре күтәрелеп сыға. Шулай бер ваҡыт казармаға инеп, үҙенең карауатына килһә, ни күрһен: бөтә түшәге буталып-туҙышып иҙәндә ята, матрас, мендәргә тултырылған һалам тирә-яҡҡа сәселгән. Бер ни аңламай, түшәген иҙәндән күтәреп, карауатына йәйҙе. Йыйыштырып бөтөүгә уны бер кабинетҡа саҡырттылар. Унда өҫтәл артында яман ыҫпай кейенгән йәш лейтенант ҡуҡырайып ултыра. «Пургенды ҡайҙан алдың?» – тип һораны ул инеү менән. Һорауын аңламаны, пургендың ни нәмә икәнен дә белмәй, шуға ла юғалып уҡ ҡалды. «Нимә ул пурген?» – тип һорауына лейтенант уҫал ҡиәфәттә: «Ҡайҙан алғаныңды барыбер беләсәкмен һәм ҡаты язаға тарттырасаҡмын», – тип яуапланы.

Баҡһаң, уға беркетелгән әлеге биш курсант, дәрескә йөрөмәү маҡсатында, шул пургенды эсеп «ағыулана»лар ҙа лазаретҡа инеп яталар икән. Тикшерә торғас, эҙҙәренә төштөләр барыбер, часта суд булып, һәр ҡайһыһын дүртәр йылға ултыртып ҡуйҙылар. Уны бүтән теге бүлмәгә саҡырыусы булманы – был эштә уның ҡатнашы юҡлығын аңлағандарҙыр.

Бер көндө, киске яҡҡараҡ, командирҙар бүлмәһенең асыҡ ишегенән бер

курсанттың ватман ҡағыҙына нимәлер төшөрөп маташыуын шәйләне лә, ҡыҙыҡһыныуын еңә алмай – бәй, яҡшымы, насармы, ул да һүрәт төшөрә бит – эргәһенә керҙе. Курсант Мәскәү Кремленең Спасск башняһы һүрәтен төшөрөп ултыра. Йөҙөн күргәс, хеҙмәткә килеүҙәренең тәүге көнөндә строй алдына баҫҡан рота командирының «Кем художник?» тип һорағаны һәм ошо егеттең алға атлағаны иҫенә төштө. Строй алдына сығыуын-сыҡты, ә бына башняны бөтөнләй ҡыйыш, кәп-кәкере итеп яһап тора. Пропорция тигән нәмә бөтөнләй юҡ. Һыҙманы яҡшы аңлағанлыҡтан, ул, түҙмәй, «художник»ка, тәүҙә башняның күсәрен төшөрөргә, унан ошо үҙәккә башняның башҡа өлөш-элементтарын пропорциональ рәүештә «йәбештерергә» кәрәк, тип аңлатты ла ҡәләм менән быны нисегерәк башҡарырға икәнлеген һыҙып күрһәтте.

Иртәгәһенә уны рота командирына саҡырҙылар. Оло ғына йәштәрҙәге офицерҙың тәүге һорауы: «Һин художникмы?» – булды. «Юҡ, – тип яуапланы ул, – просто бәләкәйҙән һүрәт менән мауығам». – «Ярай, аңлашыла, һиңә шундай задание: кем үҙен әҙ-мәҙ художник тип иҫәпләй, шуларҙы йыйып ал да Ленин бүлмәһен биҙә. Тиҙҙән армия буйынса Ленин бүлмәләренә смотр буласаҡ, шуға әҙерлән».

Уға «Есть!» тип яуаплауҙан башҡа сара ҡалманы. Был эш үҙенә лә ҡыҙыҡ, ҡулына, башына, фантазияһына эш тыуа, юҡһа, теләге ҙур яҙырға, ә мөмкинлеге юҡ. Ләкин ротала «мин художник» тигән башҡа курсант табылманы, теге егет тә уға ярҙамлашыуҙан ҡырҡа баш тартты. Үҙенең хәлен самалағандыр. Шулай ҙа эш башланды: етәксе-ойошторoccы итеп бер өлкән лейтенантты тәғәйенләнеләр, һәм бүлмәгә нимәләр кәрәклеген асыҡлағас, ул кәрәкле һәр материалды йәһәт кенә табып килтереп торҙо. Авиацияла техник мөмкинлектәр ҙур, яҡшы материалдарға ла һис ҡытлыҡ юҡ.

Эштәре әлеге лә баяғы Спасск башняһынан башланды. Уны иҙәндән 2,7 метр бейеклегендә итеп ҡороп, бөтә деталь-өлөштәрен йоҡа һәм шыма авиация фанерынан, төҫлө быялаларҙы бөртөкләп йыйып, йәбештереп яһанылар. Ҡыҙыл быялаларҙан эшләнгән йондоҙ эсенә бәләкәй лампочка ҡуйҙылар. Йөрөп торған стена сәғәтен Кремль башняһындағыға оҡшатып, циферблатын, телдәрен эшләнеләр, башня эсенә радио урынлаштырҙылар – иртәнге гимн хәҙер шундағы динамиктан яңғырарға тейеш. Башняның ике яғынан Мәскәүҙәге кеүек Кремль стенаһы ҡоролдо. Башняның бер яғында – Ленинға арналған стенд: уның барельефы, документаль фотолары, әйткән-яҙған ҡанатлы һүҙҙәренең теҙмәһе. Икенсе яғында – Политбюро ағзаларының портреттары. Ә аҫҡа, Кремль стенаһы артына, юлбашсының хеҙмәттәрен матурлап теҙеп һалып ҡуйҙылар.

Башҡа стеналар ҙа шул уҡ системала – ил символикаһы, армия төрҙәре, Варшава договоры, блокка ингән дәүләттәр исемлеге, башҡа төр сәйәси материалдар, үҙҙәре уҡыған ШМАС тураһында стендтар. Ленин бүлмәһе бейек булғанлыҡтан, түбәгә ҙур глобус элделәр, уның тирәләп бипелдәп тауыш сығарған антенналы ялтырауыҡ шарҙы – ил осорған беренсе яһалма юлдаш – әйләнеп йөрөрлөк механизм да ҡоролдо. Һырлы тояҡлы оҙон өҫтәл эшләп, өҫтөнә йәшел буҫтау йәйеп, уға гәзит, журнал, сәйәси әсбаптар ҙа һалғас, бүлмә тамам күркәм төҫ алды ла ҡуйҙы.

Оҙаҡламай, ысынлап та, генерал етәкселегендә ике полковник, өс подполковник, өс майор килеп төштө. Ҡаранылар, ғәжәпләнделәр, һоҡландылар, маҡтанылар. Комиссия ҡайтып бер нисә көн үткәс, ул биҙәгән бүлмә армия масштабында беренсе урынды алғанлығы тураһында шатлыҡлы хәбәр килде.

ШМАС-та уҡыу тамамланды. Сығарылыш имтихандарын бөтә предметтар буйынса ла ул «бишле»гә тапшырҙы. Отличник буларaҡ, артабанғы хеҙмәтенең ике йылын ҡайҙа үткәрергә теләгәнен белдереү мөмкинлеге бар. Әлбиттә,

Башҡортостанда, тип әйтә ала, тик республикала хәрби авиация частары юҡ, шуға ла: «Илдең ҡайһы нөктәһенә бара алам һуң?» – тигәс, бер нисә пунктты тәҡдим иттеләр. Уны Ленинград (Эрмитаж, Художество академияһы) һәм диңгеҙ авиацияһы ҡыҙыҡһындыра ине. Һәм ул: «Ҡара диңгеҙ!» – тип яуапланы. Йәшлек романтикаһы!

Тимер юлы вокзалына уны оҙатырға тип, ҡатынын, ҡыҙын эйәртеп, замполит килде. Татыу был ғаилә уны ниңәлер ярата ине, һәм үҙҙәренә ҡунаҡҡа ла алып ҡайта торғайнылар. Уңайһыҙлана, төрлө сәбәп уйлап сығарып бармаҫҡа ла тырыша ул, тик подполковник, ай-вайына ҡуймай, алып ҡайтып китә. Егет уларҙың өсөһөн дә вокзалда күргәс аптыраны, хатта юғалып ҡалды. Замполит һынлы замполит оҙатырға килһен әле, етмәһә, ғаиләһе менән – нисек ғәжәпләнмәҫһең! Кемгә әлегә һуң әле бындай иғтибар!

Алыҫ Көнсығыш алыҫ инде, поездарҙың һуңлауы ла минут йәки сәғәттәргә генә түгел, тәүлектәргә һуҙыла. Егет ултырып китәсәк поезд да тәүҙә дүрт сәғәткә тоҡтарланды, һәр хәлдә тәүҙә шулай тип иғлан иттеләр. Подполковник, ул тиклемде көтөп булмай инде, хат яҙырһың барып еткәс, тип хушлашырға мәжбүр булды. Уға нисектер еңел булып ҡалды: былай ҙа кешене көттөрөүенә ифрат ҡыйынһынып тора ине – әйтерһең дә, уның да ғәйебе бар поездың һуңлауында.

Дүрт сәғәттән һуң йәнә ике сәғәт ваҡыт үтте. Ул ағас эскәмйәгә барып ятырға мәжбүр булды. Йоҡлап киткән. Төн уртаһында: «Курсант шул, курсант шул!» – тип уның фамилияһын атап һөрәнләүгә уянып китте. Күҙҙәрен асһа, бер сержант һөрәнләй һәм тегеләй-былай йөрөгән кешеләр, эскәмйәләр араһынан алан-йолан ҡаранып уны эҙләй. Нишләһен, ҡалҡынып тауыш бирҙе инде. Тегеһе шундуҡ тигәндәй сумаҙанына килеп тә йәбеште: «Һине кире алып килергә ҡуштылар», – тине, ауыҙы йырылып. «Кем, нимәгә? Минең служба бында бөттө бит инде», – тине ул, тамам ғәжәпкә ҡалып. «Бер нәмә лә әйтә алмайым, приказ есть приказ. Дежурный саҡырып алды ла, ана, машина, елдер вокзалға, поезы китмәгән булһа, хәҙер үк бороп алып кил», – тине.

ШМАС штабына килгәс, ундағы дежур өлкән лейтенант шулай аңлатты: армия штабынан генерал шылтыратҡан: «Немедленно кире алып килегеҙ, уның артабанғы хеҙмәте минең ҡарамаҡта үтәсәк», – тигән.

Ул ваҡытта халыҡ-ара хәл бик тә сетерекле: Ҡытай Халыҡ Республикаһы менән Тайвань араһында һуғыш бара. Чан Кай Ши яғында – Америка Ҡушма Штаттары, халыҡ революцияһы яғында – Советтар Союзы. Ә беҙҙең генералға Ҡытайҙы Чан Кай Шиҙан ҡурсалау өсөн айырым армия булдырыу бурысы ҡуйылған булған икән. Ул генерал тап әлеге Ленин бүлмәләренең конкурсын үткәреүсе, дөрөҫөрәге, тикшереүсе булып сыҡты. Уларҙың ШМАС-ында үтә лә тырышлыҡ һалып йыһазлаған бүлмәһен бик оҡшатып, уның исем-фамилияһын блокнотына теркәгән булған. Шулай итеп, ул артабанғы хеҙмәткә Приморье крайының Черниговка тигән хәрби ҡасабаһында тороп ҡалды.

Әлбиттә, күңеле ҡырылды: Ҡара диңгеҙҙе лә күрә алмай, матрос кейемен дә кейәһе түгел...

## *Рәссам көндәлектәренән*

*«Беҙҙең профессиональ һынлы сәнғәт бик йәш. Күп нәмә өйрәнелмәгән, асылмаған. Шуға ла һәр йүнәлештә эшләгән рәссамға ихтирам менән ҡарарға тейешбеҙ. Бәлки, шулай яҙа-яҙа үҙебеҙҙең мәктәп, башҡорт һынлы сәнғәте мәктәбе, барлыҡҡа килер. Әйтәйек,*

*Американың, Францияның – Италия, Испания тураһында әйтеп тораһы ла түгел – үҙ мәктәптәре бар. Уларҙы бүтән ил, бүтән халыҡ, милләт сәнғәттәре менән бутап булмай: беҙ шуныҡы, тип ҡысҡырып торалар. Хәҙер тормош үҙгәрҙе, йәшәйеш бөтәйҙе, һәм көндән-көн тигәндәй үҙгәрә бара. Һынлы сәнғәт тә үҙгәрештәр кисерә: яңы алымдар, йүнәлештәр, формалар барлыҡҡа килә, һәм һәр рәссам быны тойорға, тоторға, тормоштан артта ҡалмаҫҡа тейеш. Реалистик йүнәлештән, нигеҙҙә, доброводьно тигәндәй баш тарттыҡ. Шул арҡала рәссамдар, бигерәк тә олораҡ быуын, юғалып ҡалды, йәштәр авангардҡа бирелде. Тормош үҙе – реаль әйбер, тимәк, һынлы сәнғәт шул реаллеккә нигеҙләнергә тейеш. Кеше анатомияһын белмәй, мускулдар системаһын өйрәнмәй, һүрәт (рисунок) төшөрмәй авангардҡа, төрлө «изм»ға тартылыуҙы мин ябай арифметика үтмәй тороп юғары математикаға тотонған кеше һымағыраҡ ҡабул итәм. Һәр нәмәнең башы, дауамы, ябайҙан ҡатмарлыға, бәләкәйҙән ҙурға үҫеү процесы бар. Шуға ла ҡатмарлыға, ҙурға еткәнсе ябайҙы, бәләкәйҙе белергә, үтергә кәрәк. Был – бер. Икенсенән, һынлы сәнғәтте, ғөмүмән, ижадты идеологик ҡыҫаларға индереү сикләнгәнлеккә килтерә.*

*Ҡалалағы ағас баштарын киҫәләр, һөҙөмтәлә ул ниндәй зәғиф ҡиәфәттә үҫә, бер ниндәй эстетикаһы юҡ, әйтерһең дә, бер йәнһеҙ түмәр. Урмандағы ҡырҡылмаған ағасты ҡара – һомғол, матур, күҙҙе ҡамаштыра. Сәнғәттә лә шулай. Идеология рамкаларына индерҙеңме, ул әҫәр булыуҙан туҡтай. Юҡһа, коммунистар власта саҡта, райкомда йәки обкомда ултырған йәш кенә бер инструктор күргәҙмәгә килә лә, нишләп улай түгел, нишләп былай түгел, тип теңкәгә генә тейә торғайны бит. Шунан һәр рәссам аҡланырға, үҙенең эшен «яҡларға» тотона. Төшөндөрөп ҡара ул әһелдәргә үҙеңдең бегемот түгеллегеңде! Һис аңлата алмайһың. Сөнки әһел аңларлыҡ кимәлдә түгел: системаның ҡоло, етмәһә, шыр наҙан, белекһеҙ. Ә амбиция, «мин үҙем беләм»лек үҙенән биш тапҡырға бейегерәк...»*

Бер уйлаһаң, ниндәйҙер сикләнгәнлек, хатта Әхмәт Лотфуллин иҫкәрткән плакатлыҡ та бар инде «Ауылым»да, тип йәнә, нисәнсе тапҡыр инде, икеләнә үҙе, эшен туҡтатып торған йә ял иткән, институт мәшәҡәттәре араһында әлеге картинаһын ҡапыл иҫенә төшөргән мәлдәрендә. Хәйер, ул хәтеренән сыҡҡаны ла юҡ, гел үҙе менән йөрөй. Бер бәләкәй генә ауыл, шул ауыл кешеләренең кескәй генә образдары, ҙурҙан ҡупҡанда, кемгә кәрәге бар? Глазуновта, Налбандянда – бөйөк эштәре менән тарихта ҡалған тарихи шәхестәр, халыҡ уларҙы белә, таный, ә бында – бер кем танымаған ябай ауыл кешеләре. Дөрөҫөн әйткәндә, картина ошо ауыл кешеләре өсөн генә ҡыҙыҡ буласаҡ: кемдеңдер ата-әсәһе, олатаһы-өләсәһе, үҙе, өйө, һыу ингән йылғаһы, еләк йыйған, бесән сапҡан туғайы, малы йөрөгән ике йылға араһы, һауаға олғашҡан тирәктәр.

Шик-шөбһәһе бер нисә көнгә эшен туҡтатып та тора, ҡулы бәйләнһә, тамам кәйефе төшә. Әммә эше уны алыҫ ебәрмәй, үҙенә бәйләгән һымаҡ артынан эйәреп йөрөүен белә, йә ауылдаш йәш егеттең асыу ҡатыш мыҫҡыллы һүҙҙәре иҫенә төшөп, намыҫына тейә лә, асырғанып, йәнә картинаһы алдына килеп баҫа.

Бына күршеләре Зәйнулла бабай. Ауылда уны «Тишек баш» тип йөрөттөләр – һуғышта яраланып ҡайтҡан, башында лепкәһе беленеп, тын алғанда бер ҡалҡып, бер төшөп һелкенеп торор ине. Бабай түбәтәйен сисә лә, эйелеп, уның ише малай-шалайға әлеге лепкәһен күрһәтә торғайны. Мәрәкә күреп, этешеп-

төртөшөп тотоп ҡарайҙар. Ай, иҫәр саҡтары, нишләп шулай йонсотҡандарҙыр инде оло кешене? Хәйер, үҙе лә бала йәнле, һәр нәмәгә иғтибарлы булды шул. Зирәк, аҡыллы ҡарттың ҡулы ифрат та оҫта ине. Уның сәсе еткәнен күрһә, саҡырып индерә лә, әйҙә, улым, бумалаңды алайым, тип үткер бәкеһе менән башын ҡыра һалып сығара. Бер уныҡын ғына түгел, бөтә урам малайҙарҙыҡын. Колхоздың һәр йыйылышында тороп һөйләй, ялҡынлы итеп, төшөндөрөп, ентекләп.

Ә бер мәл, Октябрь байрамы көнө, 7-се класта ғына уҡыған Әнүр ағаһы бөтә колхозсылар алдында доклад менән сығыш яһағас – председателдең йәки партком секретарының ваҡыты булманымы, нишләптер ағаһына ҡушҡандар – Зәйнулла бабайҙың телен шартлатып: «Был малайҙан кеше сыға!» – тигәне иҫендә ҡалған. Тимәк, бабай шул ваҡытта уҡ баланың һәләтен күргән. Ағаһы бит, ысынлап та, артабан ҙур кеше – шағир, маһир яҙыусы булып китте, диссертация яҡланы, абруйлы ғалим дәрәжәһенә етте.

Икенсе ут күршеләре – Ғайса бабай. Һуғыштан ҡайтҡас, ауылда тимерлек асты. Самауыр төҙәтте, һәнәк, көрәк, тырма йүнәтте, тәпке яһаны. Емерек көнкүреш, хужалыҡ әйберҙәрен тотоп килгән бер кешене лә бороп сығармаҫ ине. Ауыл малайҙарының уйнауы ла күпселектә ошо тимерлектә булды – бында төрлө формалағы тимер-томор, геүелдәп янған серле ут, уфылдаған һауа өрҙөргөс, ауыр сүкештәр, ҡалай, арба тәгәрмәстәре.

Торараҡ Ғайса бабай Мәндем йылғаһында һыу тирмәне ҡорҙо. Ауылдыҡылар ғына түгел, күрше ауылдарҙан да киләләр ине он тарттырырға был тирмәнгә. Шулай ҙа ҡарттың иң иҫтә ҡалған эше – ҡайҙандыр тапҡан чертеж буйынса скрипка яһауы булғандыр.

Гармундан башҡа музыка ҡоралын күрмәгән ауыл өсөн скрипка торғаны мөғжизә ине. Үҙе эшләгән скрипкала байтаҡ йылдар дауамында уйнап йөрөнө. Ул замандарҙан апаруҡ ғүмер үткәс, Әнүр ағаһы «Ғайса скрипкаһы» тигән хикәйә лә яҙҙы.

Бер уның ғына түгел, ғөмүмән, ауылдағы бөтә бала-сағаның, йәштәрҙең тормошонда, кеше булып формалашыуында тәрән эҙ ҡалдырған ул осор ҡарттары. Тәрбиәләгәндәр, әхлаҡи ҡанундарҙы, бер-береңә ихтирам һабаҡтарын төшөндөргәндәр, күрһәткәндәр, һәләттәрен абайлағандар, өмөт уятҡандар.

***

Бер көндө төштән һуң оҫтаханаһының тышҡы ишеген асып инһә, эстә шаулашҡан тауыштар ишетте. Тәүге уйы шул булды: моғайын, Исмәғилдә йәнә эсәләрҙер. Бер-береһен бүлдереп һөйләшәләр, бәхәсләшеп тә киткән һымаҡтар. Ул ишекте һаҡ ҡына япты ла, күрше ишетеп ҡалмаһын, ишетһә, йәнә керер, тип аяҡ остарына ғына баҫып үҙенең яғына ыңғайланы һәм асҡысын һаҡ ҡына йоҙаҡҡа тыҡты. Йоҙаҡ телдәре шартлап күсеүе булды, баҙарҙағы кеүек геү шундуҡ тымды, әйтерһең дә, быға тиклем шәп һөйләп торған радио йәки телевизорҙы ул кереүгә һүндереп ҡуйҙылар!

Аптырағандан, йәһәт кенә башын тығып эскә күҙ ташланы ла кире ябып ҡараны, әммә тауыш ҡабатланманы. Тимәк, уның килгәнен күршеһе барыбер ҙә һиҙҙе, һиҙҙе лә иптәштәренә шымырға ҡушты... Уға оҫтаханаһына кереүҙән башҡа сара ҡалманы. Шулай ҙа, үҙе лә аңламаған ниндәйҙер сәйер көскә буйһоноп, бүлмә эсен байҡарға тотондо. «Ауыл»ы мольбертында тора, өҫтәл, ултырғыстар, китап кәштәһе ҡусмәгән, Әнүр ағаһының скрипкаһы ла урынында. Ишек төбөндәге алмаш кейем-һалымы ла нисек ҡалдырған шулай элеүле тора. Быларҙы үҙе күҙҙән үткәрә, үҙе нимәгә шикләнеүенә аптырай. Барыбер кемдер кергән, кемдер йөрөгән һымаҡ бүлмәһендә. Исмәғил яғынан тауыш ишетелмәне, күрәһең,

килмәгән. Ышанмай, сығып тикшереп керҙе – ишеге бикле. Әллә һөйләшеү унда булмағанмы? Был хәл Рәссамды тамам ғәжәпкә ҡалдырҙы: ул тауыштарҙы ҡайҙан ишетте һуң? Әллә галлюцинация тигән нәмә башланамы? Алла һаҡлаһын.

Килеүенең фәтүәһе булманы, ҡылҡәләмен киндерҙәге йөҙҙәргә төртә, улар унан ялтана, борола, ҡараштарында мут йылмайыу сағылып ҡала кеүек, хатта бер-береһенең урындарын алыштырып баҫҡандар һымаҡ. Ауылдаштарының һәр ҡайһыһын үҙҙәренең өй, ихата тирәһенә урынлаштырғайны, хәҙер буталып, йомошҡа йәки ҡунаҡҡа кергәндәге ише, сит урамдарҙа, сит ихаталарҙа «йөрөп» яталар, гүйә.

Ваҡ-төйәген йыйыштырып, кейемен алыштырғансы уйы ҡолағына салынған сәйер тауыштар хаҡында ғына булды. Үҙ ишеген, унан уртаҡ ишекте бикләгәс тә берауыҡ тыңлап торҙо. Юҡ, һөйләшкән тауыштар бөтәнсә ишетелмәне.

***

...Ебәрелгән часҡа килгәс, ул ай самаһы реактив бомбардировщикта механик булып йөрөнө. Элекке хеҙмәт урынынан – Спасск-Дальний ҡалаһындағы ШМАС-тан хат килеүен хәбәр иттеләр. Уҡытҡайнылар: «Һеҙ эшләгән Ленин бүлмәһенә «Был Ленин бүлмәһен уҡыу отличнигы шул-шул курсант биҙәне» тигән гравировкалы таҡтаташ элеп ҡуйҙыҡ», – тип яҙылғайны. Хат килеүҙән оҙаҡ та үтмәне, һине үҙ эшеңә күсерәбеҙ, тип бер лейтенантҡа эйәртеп тә ебәрҙеләр. Лейтенант уны ике ҡатлы ҙур бинаға алып килде, һин хәҙер казармала түгел, ошо йортта йәшәйәсәкһең, тип бәләкәйерәк бүлмәне күрһәтеп, быныһы – йоҡо бүлмәһе, олоһо эш бүлмәң булыр, һиңә нимә эшләргә кәрәклекте аңлатырҙар, тине лә китеп барҙы.

Бәләкәй бүлмәлә – матраслы караоат, тумбочка, бер ултырғыс, ҙурында – ҙур өҫтәл, шкаф, ике ултырғыс, пианино. Бинаның бер яғында – офицерҙар клубы, икенсе яғында һалдаттар клубы урынлашҡан булып сыҡты. Унда – кино залы, спорт залы, бейеү залы, китапхана, бильярд, шахмат-шашка һ.б. бүлмәләр бар. Улар ҡасабала хеҙмәт иткән һәм йәшәгән хәрбиҙәр өсөн тәғәйенләнгән.

Ашауҙы уға офицерҙар туҡланған ашханаға – иң яҡшы иҫәпләнгән 5-се һанлы летчик-реактивчиктар диетаһына беркеттеләр. Уға хәҙер аэродромға ла, плацта стройҙа йөрөргә лә кәрәкмәй, «подъем», «отбой» бойоровҡтарына ла буйһонмай, тулыһынса ирекле режимда йәшәй.

Бөтәһе лә һәйбәт, хеҙмәт түгел, ожмах, тик бер әтнәкәһе бар: бирелгән-ҡушылған эштәрҙе шундуҡ, күпселектә төндә, иртәнге сәғәт һигеҙгә тиклем, башҡарырға тейеш булып сыҡты. Сәбәбе былай: летчиктар, нигеҙҙә, – йәштәр, осоу техникаһын, һауа бәрелеше тактикаһын, бомба ташлау серҙәрен, билдәле, көндөҙ өйрәнә. Иртәгәһенә иртәнсәк, ана шул иртәнге сәғәт һигеҙҙә, инструктор - командирҙар әлеге үткәрелгән дәрес һөҙөмтәләре буйынса йомғаҡлау, тикшереү ултырышы йыя. Ә был һөҙөмтәләрҙе инструкторҙар уға тик кисен, төрлө ҡағыҙ биттәренә төҫлө ҡәләмдәр менән һыҙғылаған рәүештә индереп бирә. Ул һыҙмаларҙы аңлауы, «сисеүе» бер этлек. Ул ошо төрлө ҡул эшләгән «шпаргалар»ҙы төнө буйы ултырып тушь, төҫлө ҡәләмдәр менән ҙур ватман ҡағыҙға күсерә (схемалар, диаграммалар, һандар һ.б.). Быны ул иртәнге сәғәт 8-ҙә үтәсәк әлеге кәңәшмәгә мотлаҡ өлгөртөргә тейеш. Өлгөрттө лә, бер ҡасан да һуңлағаны булманы. Һөҙөмтәлә командирҙарҙан гел «молодец», «рәхмәт» һүҙҙәрен генә ишетте.

Шулай ҙа уның көн тәртибен оҡшатмаған кешеләр ҙә табылды: йәш строевой офицерҙар уның көндөҙ йоҡлағанын күреп бәйләнәләр ине. Тик штаб начальнигының уларҙы иҫкәртеүе генә былдай ҡәнәғәтһеҙлектәргә сик ҡуйҙы.

Әлбиттә, уның хеҙмәт бурысы төнөн диаграммалар яҙыу, схемалар, исемлектәр төҙөү менән генә сикләнмәй. Клубҡа төрлө стендтар төҙөү, плакаттар, лозунгылар яҙыу ҙа уның өҫтөндә. Гарнизонда йөрөү ирекле, увольнительный мотлаҡ түгел. Клубта офицерҙар һәм сержанттар өсөн «Политическая карта мира» тигән бер йыллыҡ киске партия мәктәбе эшләй ине. Шунда йөрөп, мәктәпте «бишле» билдәләренә генә тамамлап ҡуйҙы.

Бер көн Черниговка урамы буйлап китеп бара. Юлдың икенсе яғынан ҡаршыға бер офицерҙың килгәнен шәйләмәй ҡалды. Шәйләне, тик ул уға һирпелеп ҡараманы – әйтерһең дә, офицер уға боролоп ҡарарға тейеш! – үтеп китте. Ҡарамаҫас ни, күрмәгәндер, тип уйланы ла һалдат тегеңә честь биреп торманы. Уны уҙып биш-алты аҙым атлауы булды, артынан ҡәтғи тауыш яңғыраны:

– Һалдат, туҡта, кил әле бында, нишләп үҙеңдән юғары званиелы кешегә честь бирмәйһең?

Боролоп ҡараһа… генерал! Ул юғалып ҡалды, телен саҡ әйләндереп:

– Ғәфү итегеҙ, иптәш генерал, уйға сумғанмын, – тигән булды.

– Ә нишләп пилотканда йондоҙ юҡ?

«Артын алға әйләндереп кейгәнмендер», – тип, баш кейемен ул йәһәт кенә бороп кейҙе.

– Йондоҙоң юҡ! – тине генерал, тағы ла ҡәтғиерәк итеп. – Ә погоныңдағы эмблемаң ҡайҙа булған?

Погонын һәрмәп ҡараһа, ысынлап та, эмблемаһы юҡ!

– Кем ротаһынан?

Иркен йөрөгәс ни, ҡайһы ротаға беркеткәндәрен дә белмәй, шунлыҡтан теленә килгән бер фамилияны атаны:

– Майор Филин ротаһынан.

– Хорошо. Я еще до тебя доберусь! – тине лә генерал үҙ юлы менән китеп барҙы.

Ул урамға сығыр алдынан ғына спорт залында бер мыҡты грузин егете менән көрәшеп йөрөгәйне. Пилоткаһындағы йондоҙо ла, погонындағы эмблемаһы ла шул айҡашҡанда төшкәндер, ахыры.

Үҙен ҡурсалап йөрөткән генералды быға тиклем яҡындан һис күргәне юҡ ине. Уйлай, кино кадрҙарын кирегә бороп ҡараған һымаҡ, хәтерендә аҡтарына торғас иҫләне: шул! Сөнки ошо ваҡиғанан һуң штабҡа саҡырыусы ла, формаһындағы етешһеҙлектәре, генералға честь бирмәгәне өсөн уны әрләүсе лә булманы. Ә нисек ҡурҡып йөрөгәйне бер нисә көн! Генерал һынлы генералға әләк тә ҡурҡма, имеш. Ул һиңә лейтенант йәки капитан ғына түгел. Тимәк, генерал уны танығанда ирҙәрсә ғәфү иткән, командирына еткермәгән.

## *Рәссам көндәлектәренән*

*«Һеҙ – буласаҡ рәссамдар, тим студенттарыма, был һөнәр, күптәр уйлағанса, бигүк ябай түгел. Юҡһа, беҙҙә йыш ҡына, лозунг йәки плакат, иғлан яҙған кешене, хатта төҙөлөштәге малярҙы ла рәссам тип ебәрәләр. Беҙҙең һөнәрҙе аңлап етмәүҙән, юғары ҡиммәттәрҙе түбәнһетеүҙән килә был. Әлбиттә, лозунг менән плакатты ла еренә еткереп яҙырға кәрәк, маляр ҙа стенаны йәки иҙәнде күңелен һалып буярға тейеш, әммә был һөнәрҙәрҙең ысын профессиональ рәссам – художник һөнәренән айырмаһы бик ҙур. Талантлы рәссам – тәбиғәттең кешелеккә биргән бүләге. Лозунгыны, плакатты әҙме-күпме әҙерлеге булған һәр кем яҙа ала, белем дә, боронғо оҫталарҙың ижадын, сәнғәт тарихын, кеше анатомияһын өйрәнеү ҙә кәрәкмәй. Миңә ҡалһа, ысын рәссам – йөрәгендә заман пульсын*

*һиҙгер тойған шағир, үҙе йәшәгән дәүерҙең мәҙәниәте өсөн оло яуаплылыҡ тойған философ, осор йылъяҙмаһын теркәгән яҙыусы, кешелек донъяһы тыуҙырған бар мәҙәни мирасты туплаған һәм шуны киләһе быуындарға тапшырыу миссияһын йөкмәгән аҡыл эйәһе.*

*«Ә нимә һуң ысын сәнғәт әҫәре?» – тип һорайҙар. Мин былай тип яуаплайым. Сәнғәт әҫәре, йәғни бына һеҙ киләсәктә яҙасаҡ картина,– үҙегеҙ генә ҡорған донъя. Ул донъя, ғәҙәттә, күңел осошо мәлендә яҙыла, ул һине тулҡынландыра, борсой, ғәжәпләндерә, зарыҡтыра. Әлбиттә, ул картинаның көн һайын яҙылмауы ла ихтимал. Вулкан да гел генә атып тормай, ул ер ҡуйынында көс йыя, массаһы критик хәлгә еткәс, йәғни ятҡан урынына һыймай башлағас, ер өҫтөнә бәреп сыға. Рәссам ижады ла ана шулай йыйылырға – ә йыйылыу матдәһе фекер, материал, форма, композиция, образ – шунан ғына йөрәгеңдән атылып сығып, киндергә төшөргә тейеш. Илһамлы осош мәлен ҡулдан ысҡындырмаҫҡа кәрәк. Әлбиттә, ҡасан килер икән, тип уны көтөп кенә йөрөргә лә ярамай. Аҡыл һәм күңел һәр ваҡыт эшләргә, эҙләнергә, сағыштырырға, һайларға бурыслы. Илһам ҡошо шул саҡта ғына киләсәк.*

*Студенттарымдың күҙҙәре яна, тын алыуҙары туҡтала. Әйтерһең дә, ошо дәрестә үк шөһрәтле әҫәрҙәр яҙалар ҙа, мин уларҙы бөйөктәр исемлегенә индереп тә ҡуям.*

*Мин йыш ҡына уларға Әхмәт Лотфуллиндың картиналары хаҡында һөйләйем, үҙем аңлағанса уның феноменын асырға тырышам. Лотфуллинды Лотфуллин иткән һыҙат – миллилек. Уның көсө халҡына яҡын булыуҙа, әҫәрҙәре халыҡтың тарихи үткәне, ҡайғы-шатлыҡтары менән һуғарылыуҙа.*

*Ул кеше өсөн, ауылы өсөн, ахыр сиктә халҡы өсөн яҙа, ҡайҙалыр сит илгә сығып күргәҙмә ойоштороу өсөн түгел. Һәм бер ҡасан да «шунда ҡатнашайым, бында ҡатнашайым» тип махсус яҙманы, колхоз яланында йөрөгән ат һымаҡ эшләне лә эшләне. Ҡатнашырға саҡырһалар – барҙы, саҡырмаһалар – инәлмәне. Тауҙай ҙур, аҫылташтай сағыу, һиммәтле шәхес. Мин студенттарыма, уның иҫе ҙур темаларға, күләмле картиналарға тотоноғоҙ, тип әйтә киләм, өлгө итеп тап уның ижадын килтерәм. Шул уҡ ваҡытта кемгәлер, хатта Әхмәт ағайға ла һуҡырҙарса эйәрергә тырышмағыҙ, үҙегеҙҙең юлды табырға ынтылығыҙ, тим. Кемдер тема-образды психологик яҡтан тәрән итеп асып яҙыу һәләтенә эйә, кемдер тышҡы яҡтан матур итеп эшләй, деталдәргә, төҫтәр гаммаһына иғтибарлы, өсөнсөләрҙең тағы бүтән бер отошло яғы бар. Һәм уларҙың барыһының да ижады йәшәүгә хоҡуҡлы. Тик халыҡҡа хеҙмәт итеү, милләтте күтәреү, уға файҙа килтереү маҡсатында хеҙмәт итһендәр...»*

Оло улы Таһир медицина институтына кергәйне. Бишенсе курсты башлағас, юҡ, минең һөнәр түгел был, ғүмер буйы кеше ауырыуында ҡаҙынып ултырырға, тип ташланы ҡуйҙы уҡыуын. Аптыраны, сөнки улынан был аҙымды һис көтмәгәйне. Арыу ғына шөғөлләнде, сессияларын ваҡытында тапшырҙы, стипендиянан ҡалманы, больницала медбрат булып эшләштерҙе... Өгөтләп тә ҡараны, юхалап та, асыуланып та, тик һис ыҡҡа килтерә алманы улын яңынан уҡырға барырға.

Ташлауы булды – армияға алып та киттеләр. Учебканан һуң үҙ теләге менән Афғанстанға киткән. Белмәй ҙә ҡалдылар. Хәйер, белгән хәлдә лә бер нәмә лә

эшләй алмаҫтар ине. Таһир үҙе лә атаһына был ниәтен хәбәр итеүҙе кәрәк тип тапманы шикелле. Оҙаҡ хат-хәбәре килмәй торҙо. Ҡурҡып бөттөләр. Сөнки унда ысын һуғыш бара, телевизорҙан көн һайын ике яҡлап та ҙур юғалтыуҙар тураһында хәбәр итәләр. Хәйер, ул рәсми мәғлүмәттәргә ышанмай ҙа, ысынында юғалтыуҙарҙың улар әйткәнгә ҡарағанда байтаҡҡа күберәк икәнен яҡшы тоҫмаллай. Борсоулы көндәр, йоҡоһоҙ төндәр башланды. Алыҫ илдә барған һәр яңылыҡты ҡалдырмай тыңланылар, ҡала, ҡышлаҡ исемдәрен, хәрби часть һандарын, уларҙың хәрәкәт итеү йүнәлештәрен, генералдарҙың фамилияларын ятлап бөттөләр. Төнгө һәр шылтыратыу, ишек ҡағыу уларға яфаға әйләнде. Үҙенән бигерәк ҡатыны бөтөрөндө, сөм-ҡара сәстәре араһында аҡ юлаҡтар күренде, маңлайына һырҙар ятты, нервылары керештәй тартылды.

Хәбәрләшеп торҙолар былай, әммә борсолоу кәмемәне. Һөҙөмтәлә ижади эше барманы, хатта бөтөнләйгә туҡталды. Әүәлгесә оҫтаханаһына бара, мольбертына киндер тарта, буяуын иҙә, тик яҙа алмай. Яҙған сағы ла була, тик эшенең йәне, ҡаны юҡ. Ҡәнәғәтһеҙлектән йәне көйә, асыуы килә, башлаған эшен ташлап ҡайтып китә лә аҙналар, айҙар буйы килмәй, килә алмай.

Шулай толҡа тапмай йөрөгәндә, апаһының оло улы, республика баҫмаларының береһендә эшләгән журналист: «Хәрби темаға берәй нәмә яҙып ҡара, борсолоу-һыҡраныуҙарыңды картинаға күсер, бәлки, бер ни тиклем ҡотола-арына алырһың рухыңды иҙгән уйҙарҙан», – тигән һүҙ әйтте. Тәүҙә иғтибарға алманы, һуғышты үҙ күҙең менән күрмәгәс, нисек яҙаһың, тип хисапланы йә, был тема мине үҙенән мәңге ысҡындырмаясаҡ, тағы ла үҙенә һурасаҡ, тип тә ҡурҡты. Уйҙарым тора-бара художестволы әҫәр формаһында хасил булып, шәхси кисерештәрем һуғышты дөйөм күрә алмау тойғоһона күсмәҫме икән, тип тә шикләнде. Тамыр бер, әммә олондан төрлө ботаҡтар үҫеп сыҡҡан һымаҡ, эстәге бошоноуҙың икенсе юҫыҡҡа әүерелеүе ихтимал. Эйе, тема бар, идея бар, үҙәк образды табырға мөмкин, тик ниндәйерәк сюжет төҙөргә лә композицион яҡтан нисек ҡорорға һуң? Моғайын да, Әсә образы (ана, ҡатыны нисек борсола) һәм тау-таш араһы, автомат йәки миномет кеүек ҡорал, ҙур планда һуғыштың мәғәнәһеҙлеген аңлаған, арыған, аптыраған һалдат йөҙө булырға тейештер.

Уйланып йөрөй торғас, өс быуын хәрбиҙәрен тасуирлаған бер картина яҙылды. Атаһы – Башҡорт атлы кавалерия дивизияһы яугиры, үҙе – Совет Армияһы һалдаты һәм Афғанстандағы улы, – йәнәһе лә, интернациональ бурыс үтәгән һуғышсы.

Горизонталь форматтағы картинала хронологик рәүештә теҙелһәләр ҙә, йәнһеҙ статик өс портрет тойғоһо юҡ мәгәр, сөнки улар әйләнә-тирәһендә – иптәштәре, хәрби техника, ҡорал, һәр ҡайһыһында – баталь күренештәр... һәм, әлбиттә, афғандарҙың нәфрәтле йөҙҙәре...

Асыуланып, асырғанып яҙҙы, көн дә килде оҫтаханаһына, туҡталыуҙың ни икәнен белмәне, әйтерһең дә, эшен ни тиклем тиҙерәк тамамлаһа, улы ут-фәрәсәт араһынан шул тиклем тиҙерәк сығасаҡ. Һәм, ғәжәп, яҙа килә, яҙа килә, күңеле һилләнә барҙы, йөрәгенә тынғылыҡ килде.

Алдан күрә белмәгән ил етәкселәре, генералдар ҡылған енәйәт был, тигән фекер төйнәлде. Империяның тарҡалыр алдынан булған агонияһы һымағыраҡ ҡабул итте ул сит ерҙә алып барған әлеге ҡан ҡойошто.

Эйе, эше арыу сыҡты һымаҡ. Яҙып бөткәс, күңелендә ниндәйҙер эске ҡәнәғәтләнеү, оҙаҡ йөрөткән бурысын ҡайтарған кеше һымаҡ тойҙо ул үҙен. Картина Бөйөк Ватан һуғышының юбилейы айҡанлы республика, зона, артабан Мәскәүҙә үткән күргәҙмәләргә ҡуйылды, абруйлы сәнғәт белгестәре тарафынан

ярайһы уҡ юғары баһаланды. Атап әйткәндә, уның өс дәүерҙе, өс быуын хәрбиҙәрен бер тема-идеяға берләштерә алған композицияһының уңышын билдәләнеләр.

Бәхеткә, улы иҫән-һау ҡайта алды мәхшәрҙән. Әммә ныҡ йонсоп, душмандар ҡулында байтаҡ ваҡыт әсирлектә ултырып, күңеле имгәнеп, һынып ҡайтты. Ярты йыл буйы үҙ-үҙен таба алмай йөҙәне. Көндөҙөн дә, төнөн дә йоҡланы, бер ҡайҙа сыҡманы, иптәштәре менән аралашманы. Тән яраһыҙ ҡайтҡанына шатлыҡ йән яраһынан йонсоғанына ҡайғырыу менән алышынды. Бер нисә тапҡыр һөйләшергә һүҙ ҡуҙғатып та ҡарағайны, асылдыра алманы улын. «Афған синдромы» тигәндәре шулдыр. Психикаһына зыян килмәһә ярар ине, тип борсолдолар. Йәнә ярты йылдан һуң ғына ул яйлап элекке, армияға тиклемге, хәленә ҡайта башланы.

Шулай итеп, улы килтергән (улы килтергәнме икән?) ҡайғы-хәсрәт уға картина «бүләк» итте...

***

Оҫтаханаһына инһә, йәнә тауыш. Был юлы, кемдәр икән, теге саҡтағыса үҙенең яғынан киләме, әллә Исмәғил бүлмәһенәнме, тип ишек төбөндә туҡталды. Нишләргә белмәй бераууыҡ торҙо, һаҡ ҡына үҙенең ишеген этеп ҡараны – әлбиттә, бикле, нишләп асыҡ булырға тейеш инде? Шунан, үҙенән-үҙе оялып, бәй, мин үҙ оҫтаханама ла инергә нишләп ҡурҡам һуң әле, тип асҡысын йоҙаҡҡа тыҡты. Эйе, Исмәғил йәнә күңел аса, үҙе генә түгел, ҡатын-ҡыҙ тауышы ла ишетелә. Апаруҡ ҡына «йылынып» алғандары һиҙелә, тимәк, байтаҡтан ултыралар. Үҙенә керҙе. Эш кейемен алыштырып, мольберты янына килһә лә, тотоноп китә алманы. Әллә стена ашаһында барған күңелле тауыштар ҡамасауланы, әллә фекерен туплай алманы. Хәйер, икеһе лә барҙыр, эшкә үҙенең әҙерлекһеҙ килеүе лә ихтимал. Тегеләй йөрөп, былай үтеп, телевизорын ҡабыҙып, юлда һатып алған гәзиттәрҙе ҡараштырып ултырҙы-ултырҙы ла ҡайтып китергә мәжбүр булды.

***

...Шулай Черниговкала һәүетемсә генә хеҙмәт итеп йөрөгәндә – хеҙмәтенә йыл ярым ваҡыт тиҙ уҙҙы – бер көн взводҡа яҡын ят кешеләр килеп, аэродромдағы реактив бомбардировщиктарҙы газорезкалар менән ҡырҡҡылырға тотондо. Барыһы ла аптырашта ҡалды. Офицерҙарҙан һораша-белешә шуны асыҡланылар: баҡһаң, был эш Генеральный секретарь Никита Сергеевич Хрущевтың туранан-тура бойороғо буйынса башҡарыла икән. Йәнәһе лә, был бомбардировщиктар хәҙер кәрәкмәй, мораль яҡтан иҫкерҙе, беҙҙең уларҙан күпкә камилыраҡ межконтиненталь ракеталар бар. Берәй агрессор беҙгә тығыла ҡалһа, шуларҙы ебәрәсәкбеҙ.

Һөҙөмтәлә авиация белгестәрен икенсе төр авиация – вертолет, граждандар авиацияһы һ.б. техник һөнәрҙәргә өйрәнергә ебәрә башланылар. Бер көн уға ла сират етте: штабҡа саҡырттылар ҙа, әгәр бында ҡалғың килһә, хеҙмәтеңде бында дауам итәһең, квартира бирәбеҙ, юғары хаҡлы эш менән тәьмин итәбеҙ, уҡырға теләгең бар икән, алдараҡ ҡайтарып, йүнәлтмә бирәбеҙ, тинеләр. Ул ҡайтыу яғын уйланы, сөнки иң ҙур хыялы – ҡайтып уҡырға кереү. Бар белеме – Оло Ҡауарҙы мәктәбенең ете класы, Салауаттағы һигеҙенсе, туғыҙынсы кластарға киске мәктәпкә йөрөүе лә ике йыллыҡ ремесленный училище. Был «белем» менән юғары уҡыу йортона инеп булмай. Художество училищеһына барырға мөмкин дә бит, тик ундай уҡыу йорто Өфөлә юҡ. Шунан Ҡазандағы училищеға хат яҙып, унда художестволы бүлектең барлығын асыҡланы. Яуап хаты килеү көнөндә үк был турала полк штабына кереп әйтте.

Күрәһең, унда шылтыратып үҙҙәре лә белешкән, аҙна самаһы ваҡыт үткәс, уны саҡыртып, училище менән элемтәгә кереүҙәре, унда ҡабул итергә мөмкинселектәре барлығын әйткәндәр. Ул ҡыуанып Ҡазанға йыйынды.

Ун алты көн тигәндә Ҡазанға поезд менән саҡ килеп етте. Художество училищеһын эҙләп тапты. Әммә ҡабул итеү имтихандары тамам, имеш, һуңлаған. Ҡабул итеү комиссияһына кергәйне, Оборона министерствоһының һорауы буйынса уны исемлеккә индереүҙәре тураһында әйттеләр. Ә уҡыу башланыуға ярты ай ваҡыт бар. Нишләргә, ул ваҡытты нисек, ҡайҙа үткәрергә һуң? Аҡсаһы ла бөттө.

Аптырап, ул училище директорына керҙе: бәлки, берәй сараһын табыр. Бәй, күп ҡалманы бит, уҡыуҙар башланғансы ремонт эштәренә ярҙамлаш, үтер ҙә китер ул ике аҙна, тип яуапланы теге. Алдағыһын уйлап-нитеп тормай, ярайһы уҡ ҡәтғи тонда һөйләшкән директорҙың был тәҡдименә ризалашты ла ҡуйҙы... Ә эш ауыр: уҡыу бинаһының, дөйөм ятаҡтың батареяларын, торбаларын алыштырыу бара. Ашамай эшләү ғөмүмән мөмкин түгел. Хәле бөтә, күҙ алдары ҡараңғылана. Эшләйҙәр, ә ашау ҡаралмаған. Былайтып ҡырҡылып йөрөгәнсе тип, ул ҡайтырға ҡарар итте. Ҡала военкоматына барҙы ла дежурный офицерға хәлен һөйләп бирҙе. Аңланы теге, һәм бер сәғәт эсендә Өфөгә тиклем поезға бушлайға билет килтереп тә тотторҙолар.

Өфөлә Әнүр ағаһын эҙләп тапты. Ул университетты тамамлаған, Дәүриә исемле иҫ киткес сибәр кәләш алған, аспирантурала уҡып йөрөй, шул уҡ ваҡытта университетта уҡыта ла икән. Йәшәүҙәре – бараҡтағы бәләкәй генә бер бүлмә. Ҡыуаныслы булды осрашыуҙары, һөйләшеп һүҙҙәре бөтмәне. Әлбиттә, уның киләсәге тураһында ла һүҙ сыҡты. Ағаһы, университетҡа инерһең, тине, Дәүриә еңгәһе берәй матур һәм аҡыллы ҡыҙ менән таныштырырға вәғәҙәләне.

Иртәгәһенә үк ағаһы уны университетҡа алып барҙы, үҙе эшләгән кафедраны, башҡорт филологияһын ғына түгел, башҡа факультеттарҙы ла күрһәтеп йөрөнө, атаҡлы тел белгесе Жәлил аға Кейекбаев менән таныштырҙы. Һәм Ҡазанға кире бармаҫҡа күндерҙе, туғыҙ класс белемең бар, бер йыл эсендә унынсыны бөтөп, имтихан бирерһең дә университетҡа керерһең, тине. Сит ер – сит инде, бергә булайыҡ, еңелгә килер. Ағаһы, ҙурҙан ҡупҡанда, әлбиттә, хаҡлы ине.

Бер нисә көн торғас, ағаһы өйөндә ул үҙен артыҡ һиҙә башланы. Һүҙ ҙә юҡ, ихластар, уға ҡарата мөнәсәбәттәре яҡшы, һөйләшеп торалар, тик бүлмәләре үтә лә ҡыҫынҡы, етмәһә, бәләкәй малайҙары бар. Һәм ул, ҡуй, быларҙы ҡыҫырыҡламайым тип, үҙен аяҡҡа баҫтырған йәшлек ҡалаһы Салауатҡа ҡайтырға ҡарар итте. Унда армияға тиклем эшләп киткән комбинаты, йәшәп киткән дөйөм ятағы бар. Нисек тә бер башына урын табыр әле.

Иртәгә юлға сығам тигән төндә төш күрә. Малай сағы, һыу инергә килһә, Мәндемгә йәйғор төшкән. Йәшел, һары, зәңгәр төҫтәге шыйыҡ томан уртаһына килеп терәлгән, имеш, бер осо. Икенсе осо – Еҙемдә. Ике йылғаға һалынған күпер. Ул аптырап та, һоҡланып та ҡарап тора был мөғжизәгә. Тотоп ҡарай, төҫтәр араһына инеп китә һәм йөҙөнә ниндәйҙер йылы һауа ҡағылғанын тоя. Бер мәл аяҡтары үҙҙәренән-үҙҙәре уны йәйғор өҫтөнән алып китә. Йығылам, ҡолайым бит хәҙер, тип боролоп төшөргә итә, тик төшә алмай, ниндәйҙер көс уны алға, юғарыға атлата. Күтәрелгән һайын йылға бәләкәйләнә, алыҫая бара, ауылы ла, бейек тирәктәр ҙә йырағая. Ул тирә-яғына берсә ҡурҡып, берсә ғәжәпләнеп ҡарай, үҙе көйәнтә һымаҡ бөгөлгән йәйғор өҫтөнән һаман бейеккәрәк күтәрелә бара. Шунан иң бейек нөктәһенә менеп етеүе була, күктән бала сағында Оло Ҡауарҙы мәктәбенән ҡайтып килгәндә аралап-ҡотҡарып ҡалған нур көлтәһе аяҡтары осона килеп төшә. Нурҙың яҡтыһынан күҙҙәре сағыла хатта.

Бер аҙҙан нур көлтәһе юҡҡа сығa ла, армияға китер алдынан Салауатта күпмелер аралашып өлгөргән ҡыҙҙың һыны пәйҙә була. Ул тыйнаҡ ҡына йылмая ла шулай уҡ юғала. Егет уны ҡыуып етәйем тип алға ынтылып ҡарай, тик һын да юҡ, йәйғор ҙа таралып юҡҡа сыҡҡан. Ул, һыу инергә самалап, йәнә яр башында баҫып тора...

Төштән һуң китермен, тип хәл итте. Әнүр ағаһы менән Дәүриә еңгәһе эштәренә ҡуҙғалғас, улар менән бергә сыҡты ла Цыганская поляна тип аталған төбәккә, ҡыҙҙың әсәһе, ағалары йәшәгән яҡҡа, барып әйләнергә булды. Осратырмын, бәлки, тип уйламай ҙа, өмөт тә итмәй, бары тик Салауатҡа ҡайтҡас, һинең полянаңды күреп киттем бит әле, тип әйтергә генә ниәтләнә. Ул бында ла түгелдер, әлеге шул балалар баҡсаһында эшләп йөрөйҙөр.

Ағиҙел күперенән аҫта һыу ингән халыҡҡа ҡарай-ҡарай ҡабаланмай ғына китеп бара ине, ҡаршы килеүселәргә бәрелеп ҡуймайым тип ҡарашын алға күсерһә, үҙенән егерме – егерме биш метр самаһында ғына таныш һынды шәйләне. О, мөғжизә: теге ҡыҙ бит! Нишләп бында йөрөй, Салауаттан ҡайттымы икән ни? Ә ул, кисен дөйөм ятағына барырмын, тип ниәтләнгән булды. Яҙмыш уларҙы Өфөлә, күпер уртаһында, осраштырырға булған! Әммә ҡыҙ уны күрмәй, башын аҫҡа эйеп, ҡаты уйҙарға сумып килә. Тапҡырына еткәнсе өндәшмәҫкә ҡарар итте. Үҙе менән тиңләшкәс кенә, уға исеме менән өндәште. Ҡыҙ ҡурҡып башын күтәрҙе, стенаға бәрелгәндәге ише шып туҡтаны ла күҙҙәрен шар асып, уға төбәлде. Ирендәре дерелдәне, күҙҙәренән йәштәр атылып сыҡты. Шунан шым ғына: «Һин?» – тине лә, күҙҙәрен йомоп, ауа ла башланы. Бәй, был иҫтән яҙа бит – егет йәһәт кенә биленән ҡосаҡлап өлгөрөп, уны йығылыуҙан һаҡлап алып ҡалды. Ҡыҙҙың кәүҙәһе тамам ҡамырға әйләнгәйне. Хәҙер үҙенең күҙҙәренә йәштәр тығылды, һәм шул мәл уны нисек нык һағынғанын аңланы...

– Ҡайҙа китеп бараһың? – тине егет, бер аҙ тынысланғас. – Ә мин һиңә...

Аңына килһә лә, бер ни өндәшә алманы ҡыҙ. Башын уның күкрәгенә һалды ла үкһеп-үкһеп иларға тотондо.

– Йә, булды, илаҡ икәнһең дә, – тине, шаяртып.

– Һин? – Ҡыҙ башын күтәреп, ҡулъяулығы менән күҙҙәрен һөрттө. – Ҡайттыңмы?

– Ҡайттым, ҡайтып киләм. Бөгөн Салауатҡа китергә ине. Ә һин?

– Отпускыла. Оҙаҡламай бөтә. Миңә лә китергә кәрәк. Керәһеңме һуң беҙгә?

– Ниндәй ролдә керәм һуң?

– Егетем ролендә.

– Егетең юҡмы ни?

– Бәй, һин бит егетем. Бүтәне булманы ла. Әллә көткән ҡыҙың бармы? – Ҡыҙҙың йөҙөнә бер мәлгә күләгә ятты, әммә үҙен шундуҡ ҡулға алды ла, уның күҙҙәренә туп-тура ҡарап, һорауына яуап көттө.

– Ҡайтып ҡына килеүем бит, береһе менән дә танышып өлгөрмәнем әле, – тип көлдө ул.

– Ә киткәнсе?

– Ә киткәнсе – һин инең.

– Бына асыҡланыҡ та, – тип ихлас йылмайҙы ҡыҙ. – Тимәк, кермәйһең?

– Юҡ. Әлегә юҡ.

– Ярай улайһа.

Көлөштөләр. Егеттең күңелендә баштараҡ ниндәйҙер икеләнеү булһа ла – ни генә тимә, ике йыл ваҡыт үтте бит – ҡыҙға ышанды, шик-шөбһәләре юҡҡа сыҡты. Етди ҡыҙ, ул армияға киткәнсе осрашып йөрөгән саҡтарында уҡ еңел-

елпелеге юҡ ине. Кәүҙәгә тулыланған, хәрәкәттәре олпатланған, ҡатын-ҡыҙ нәзәкәте барлыҡҡа килгән. Әҙер кәләш.

Бер аҙ һөйләшеп торҙолар ҙа Салауатта осрашырға һүҙ ҡуйышып айырылыштылар.

Эшләп киткән заводына барҙы. Алдылар, йәшәгән дөйөм ятағынан бүлмә бирҙеләр, һәм ул, элекке эше, ғәҙәти эшсе тормошо менән йәшәй башланы. Бер йыл эшләгәс, уға отпуск, шуға өҫтәп Өфөнөң «Зеленая роща» санаторийына путевка бирҙеләр. Санаторийҙа ятҡанында ҡыҙҙың өйөнә барып, уға тәҡдим яһаны. Үҙе лә, әсәһе лә, туғандары ла ҡаршы килмәне. Һәм улар баш ҡаланың Карл Маркс урамындағы ЗАГС-ҡа барып, никахтарын теркәне. Ул йәш кәләшен Салауатҡа алып китте. Өс айҙан һуң йәштәргә бер бүлмәле фатир бирҙеләр. Таһирҙары тыуҙы.

Ул йыш ҡына Лиммаһын Ағиҙел күперенең ҡап уртаһында осратыр алдынан күргән төшөн хәтеренә ала һәм, ҡатынынан уңыуына ҡәнәғәт булып, уға рәхмәттәр уҡый. Бәхетле никахтар шулай күктә, йәйғор өҫтөндә яралалыр, ахыры, тип уйлай.

## *Рәссәм көндәлектәренән*

*«Мин студенттарыма, һеҙ талантлы, сөнки һәр кем һүрәт төшөрә алмай, ә һеҙгә ул һәләт бирелгән, тим. Аллаһы Тәғәлә һәләтте һайлап бирә, исемлек буйынса йә теләгәндәргә түгел. Шуға ла бирелгәнде ҡайтарырға, йәғни юғары сәнғәткә фиҙакәр хеҙмәт итергә, ғүмерегеҙҙе шуға бағышларға тейешһегеҙ. Тормоштоң күңелле, алдатҡыс мәлдәренән йыш ҡына баш тартырға, күп нәмәне ҡорбан итергә лә тура киләсәк, ана шул бирелгәнде аҡлар өсөн һөнәр оҫталығына, ябай һөнәрсенән профессиональ рәссамға тиклем ҡатмарлы, ауыр юл үтергә тура киләсәк. Ваҡыты еткәс, донъя һынлы сәнғәтендәге төрлө йүнәлеш, төрлө «изм»дарға китеүегеҙ бар, әммә тәүҙә академик белем, һөнәр алыу мотлаҡ, сөнки һөнәр нигеҙе шунда ята.*

*Ана, ҡарағыҙ, тим, театралдар көн дә уйнай, репетиция яһай, театрҙарға йөрөй, спектаклдәр ҡуя, ҡуйғас, ентекләп, берәмтекләп тикшерә, анализ яһай, бәхәсләшә. Вокаль факультет студенттары даими йырлай, уҡытыусылары уларға тауыштарын дөрөҫ ҡуйырға ярҙамлаша. Йәғни улар ҙа, һеҙҙең кеүек, ижад серҙәренә төшөнөргә тырыша, һөнәр оҫталығына өйрәнә. Һеҙҙең эш аудиторияла, йәйге пленэрҙа ғына бармай, быный менән генә һис сикләнергә ярамай, ҡала урамында йөрөгәндә, ауылға ҡайтҡанығыҙҙа, кешеләр менән һөйләшкәндә ҡыҙыҡ йөҙ-һыҙаттар, кешенең тышҡы һәм эске портреты менән ҡыҙыҡһыныу булырға тейеш. Шунһыҙ профессионализмға өлгәшеп булмай, тим.*

*Билдәле, ҡайһы ғына рәссамды алма, һәр ҡайһыһының теге йәки был портрет, күп кешеле картина яҙғанда әҙерлек заготовкалары бар. Мәҫәлән, Суриковтың «Боярыня Морозова», Репиндың «Запорожцы пишут письмо турецкому султану», Ивановтың «Явление Христа народу» тигән ҙур полотноларҙағы һәр образдың айырым портреты бар. Улар портрет жанры булараҡ айырым да ҡарала ала, дөйөм картинаның дә индивидуаль бер портреты булып тора. Бәғзе рәссамдар һынлы сәнғәт тарихында тап әҙерлек портрет эҫәрҙәре менән күберәк билдәле. Мәҫәлән, Леонардо да Винчи. Ниндәй һүрәттәр!*

*Әйткәндәй, Ивановтың әлеге шедеврын егерме йылдан ашыу яҙыуы һәм, уны күргәҙмәләр залына килтереп ҡуйғас, ҡарарға килеүселәргә бөтөнләй*

*ҙә иғтибар итмәй, картинаһына һуңғы мазок-штрихтар һалып тороуы – егерме йыл яҙғандан һуң! – хаҡында ла һөйләйем. Был факт аша мин студенттарыма, беренсенән, тотонған һәр эшкә ифрат оло яуаплылыҡ менән ҡарарға, икенсенән, камиллыҡтың сиге юҡ, тамамланым тигән эшкә лә нимәлер өҫтәргә була, тигән фекерҙе һеңдерергә тырышам. Ижадҡа шундай фанатик ҡараш-мөнәсәбәт булғанда ғына юғары художестволы әҫәрҙәр тыуҙырырға мөмкин.*

*Ҡыҫҡаһы, республика, рус, донъя сәнғәте тарихынан өлгөләрҙе, бороңғо һәм бөгөнгө билдәле күп рәссамдарҙың ижадтарын миҫалға килтереп студенттарға һөнәр серҙәрен аңлатырға, академик мәктәптең метод һәм йүнәлештәренә иғтибарлы ҡараш тәрбиәләргә ынтылам. Титандар, бөйөктәр ижады – үҙе ҙур мәктәп, ғүмер буйы өйрәнер төпһөҙ ҡойо. Ала, таба һәм үҙ ижадыңда файҙалана ғына бел...»*

Әрме хеҙмәтендә саҡта үҙен ремесленный училищела токарь һөнәре серҙәренә өйрәткән мастер Иван Ивановичты йыш ҡына һағынып иҫенә ала торғайны Рәссам. Салауатҡа ҡайтып заводында эшләй башлаған тәүге көндәрҙә барып күрергә һис ваҡыт таба алманы. Дөйөм ятаҡҡа урынлашыу мәшәҡәттәре, егеттәр менән күңел асыуҙар, Лиммаһы менән осрашыу шатлығынан иҫереп йөрөүҙәре визитты көндән-көн кисектерә килде, кисектерә килде. Унан, оло кешеләрҙе борсомайым, тип тә уйланы. Ләкин ҡасан да булһа барырға ине, көндәр үтә, ҡасан ҡайттың, тип һораһа, әйтеүе лә оят буласаҡ.

Ниһайәт, бер көн эштән ҡайтҡас ҡапҡыланы ла китте. Юлда магазинға һуғылып күстәнәстәр алды. Адресын белмәй, яҙып алмаған, яҙһа ла, мыңарсы, моғайын да, юғалтыр ине – өйөн таба алмай йөрөнө. Ҡала ситендәге шәхси ағас йорттар ифрат күбәйгәйне ул һалдат хеҙмәтен үтәп йөрөгән арала. Барыһы ла тигәндәй бер иш бейек ҡоймалы, тимер ҡапҡалы, йорт алдарындағы баҡсаларындағы ағас-ҡыуаҡлыҡтар урам исемен дә, йорт һанын да ҡаплап ултыра. Хәйер, адресын белмәгәс, Рәссамға уларҙың кәрәге лә юҡ. Байтаҡ йөрөгәс кенә тапты төҫмөрләп. Йорттары нисектер бәләкәйләнеп ҡалған, хатта сүккән дә һымаҡ, шифер башы йәшел мүк менән ҡапланған. Ҡоймаһы, ҡапҡаһы зәңгәргә буялған, йорттоң кәрнизе, фронтоны буялмаған, иҫке буяуы ҡубып, шаян ел йылға өҫтөн еңелсә тулҡынландырған һымаҡ ҡабырсыҡланып тора. Буяу етмәй ҡалыуы икеле, хәстәрлекле хужа булараҡ уны етерлек алырға тейеш, тимәк, йығылып төшөүҙән ҡурҡып өҫкә менмәгән.

Варвара Николаевна тәүҙә уны танымай торҙо. Рәссам исемен атағас, йөҙө ҡапыл яҡтырып китте, күҙҙәре маңлайына һикерҙе.

– Ҡалай үҫкәнһең, ысын ир-егет булғанһың бит! – тип һоҡланды, хатта, ул икәненә ышанмағандай, әйләнеп ҡарап сыҡты. – Аб-ба, Вань, ә Вань, смотри, кто к нам пришел?

– А кто к нам пришел? – Тәүҙә ҙур яҡтан хужаның иркә-шаян тауышы ишетелде, артынан, етеҙ, баҫып, үҙе лә килеп сыҡты. Сыҡты ла ҡулдарын йәйеп бер килке Рәссамға текәлеп ҡарап торҙо, унан ҡосағына йомдо. – Ошо арала ҡайтырға тейеш, ваҡыт етте, тип йөрөй инем. Килер, мәйтәм, ҡайтһа, мастерын ҡыуандырырға. Йә, нисек, иҫән-һаумы? Баһадир и красавец. Ҡалалағы ҡыҙҙарҙың йоҡоһо оса икән былай булғас. Армия егеттәргә файҙаға шул. Ә ниңә формаһыҙ? Әллә тегенән үк гражданскийҙа ҡайттыңмы?

Рәссам үҙенең арҡаһында уның ҡулдары ҡалтыраныуын тойҙо. Олоғайып киткәйне Иван Иванович. Һирәк аҡһыл сәстәре көл төҫөнә ингән, сәгер күҙҙәре эскә батҡан, былай ҙа бәләкәй булмаған танауы тағы ла ҙурайған төҫлө.

Рәссам күстәнәстәр һалған сеткаһын ҡәнәғәт йылмайып эргәһендә торған хужабикәгә тоттороп, аяғын, өҫтөн систе лә ҙур яҡҡа үтте, тәҡдим ителгән киң диванға сүгәләне.

– Йә, защитник отечества, һөйлә, ҡайһы тарафтарҙа булды хеҙмәтең? Хат яҙмаңың, дөрөҫөн әйткәндә, көткәйнем. Быныһы претензия рәүешендә түгел, былай ғына әйтеүем. Ваҡытың да булмағандыр.

Үҙенең хеҙмәт урыны, ниндәй хәрби частарҙа булыуы, ун көн элек кенә ҡайтыуы, элекке эшенә урынлашыуы хаҡында һөйләне Рәссам, һөйләү барышында хужа биргән башҡа һорауҙарға ла яуап бирҙе, хужаның үҙенең хәл-әхүәлен, тормош-көнкүрешен, эшләүен-эшләмәүен белеште.

Варвара Николаевна сәй өлгөрттө. Әңгәмә артабан инде өҫтәл артында өсәүләшеп дауам итте. Күңеле булып, ҡарттарҙың үҙҙәренең күңелен күреп, һуң ғына ҡуҙғалды Рәссам.

Икенсе барғанында өй кәрнизен, фронтонын бояп ҡуйҙы, хужалыҡтағы башҡа көс талап иткән эштәрҙе башҡарҙы, тимер ҡалай алышып, бер ял көнө егеттәр менән өй башын ябып киттеләр. Һәр барғанында тиерлек, әллә ҡулы эш белеүен күреп, әллә үҙенең олоғайып барыуын самалап, Иван Иванович Рәссамға училищела уҡығанда уҡ әйткән ниәтен ҡабатланы: әйҙә, улым бул, өйҙө һиңә яҙайыҡ, һин инде үҙеңдеке иҫәпләрлек ҡул тигеҙҙең. Рәссам гел генә уңайһыҙланып, баш тартып, яуапты һуҙа килә, һуҙа килә. Күрәһең, Рәссамдың ризалашыуына мастерҙың тәүге мәлдәрҙә ниндәйҙер өмөтө һаҡланғандыр, үҙенең алданып йөрөүен һиҙгәс, бер барғанында терһәгенән тотоп алдына ултыртты ла мәсьәләне ҡабырғаһы менән ҡуйҙы:

– Ниңә һаман хәл итмәйһең, нимә ҡамасаулай, нимә тота? Берәү булһа, күптән ризалашыр ине, ә һин... – тип күҙҙәренә текәлде.

Рәссам юғалып ҡалды, сөнки быға тиклем мастерҙың һорауҙарынан гел ялтанып йөрөнө, йөрөй торғас, төңөлөр, был мәсьәләгә ҡул һелтәр, тип уйлай ине.

– Иван Иванович, булмай, нисек инде?.. – Ул һүҙ таба алмай туҡталып ҡалды. – Минән булмай, ғәфү итегеҙ.

– Була. Мин бит уны уйлап эшләйем, кисә, бөгөн башҡа килгән нәмә түгел. Һин армияға киткәнсе үк әйткәйнем. Ул саҡта йәш инең, айышына төшөнөп тә етмәгәнһеңдер. Ну, хәҙер оло кеше, армиянан йөрөп ҡайттың, алдағы тормошоңдо уйлай башларға кәрәк, өйләнерһең, балаң тыуыр, квартира ала алмай хитланырһың. Дөйөм ятаҡ холостой саҡта ғына әйбәт. Давай, хәл ит!

– Ни йөҙөм менән?.. Минең бит әсәй бар, үгәй булһа ла – атай, йәнә ағай, апай, һеңлекәш. Һатып алһам – бер хәл...

– Юҡ, нишләп һата, ти? Минең бер туғаным да юҡ. Үлеп бөттөләр. Варвараның Златоуста сыбыҡ осо бер һеңлеһе бар барлыҡҡа, ләкин Салауатты ташлап беҙҙең унда китергә ниәт юҡ. Минең өсөн сит тә, унан ят төбәккә һис күңел тартмай. Так что уйла ныҡлап һәм хәл ит. Бына хәҙер үк!

– Ҡуйығыҙ, Иван Иванович, ғәфү итегеҙ, ундай аҙымға бара алмайым. Намыҫым ҡушмай...

Һөйләшеү ауыр барҙы. Иван Иванович ҡәтғи яуап көттө, төрлө дәлилдәр килтереп, Рәссамдан ризалыҡ алырға тырышты, Рәссам иһә был аҙымға бармаясағын белдерҙе. Килешә алманылар. Билдәле, мастерҙың кәйефе ҡырылды, күҙҙәренә йәш төйөлдө хатта. Ауыр хушлаштылар. Барһам, тағы шул хаҡта һүҙ ҡуҙғатыр, тип ҡурҡып өс аҙна бармағандан һуң барғайны, быҙау ҙурлыҡ йылҡылдап торған суйын ҡара эт өҫтөнә саҡ һикермәне, ҡапҡаны тыш яҡтан көскә ябып өлгөрҙө. Оҙаҡламай болдорҙан ҡалын тауыш ишетелде:

– Кто там?

– Миңә Иван Иванович кәрәк ине.

– Они тут теперь больше не живут, уехали в  Златоуст. Теперь я здесь хозяин.

Йөрәге өҙөлөп төшә яҙҙы Рәссамдың, ауыр нәмә менән башына тондорғандағы ише шаңҡыны ла ҡуйҙы. Тимер ҡапҡаға ҡапланып, һаман  өргән эттең тауышын да ишетмәй торҙо ла торҙо. Тимәк, өйҙәрен һатып, Варвара Николаевнаның сыбыҡ осо һеңлеһенә киткәндәр. Унда барырға ниәт юҡ, тиһә лә, киткән булып сыға. Һәм Рәссам мастерҙың тәҡдименә риза булмауына үкенеп тә ҡуйҙы. Һәйбәт кешене рәнйетте,  ихлас, хәстәрлекле, оло йөрәкле Аллаһ бәндәһен... Хәйер, өй тиклем өйҙө ниндәй намыҫың менән бушлай алмаҡ кәрәк, алырға ла мөмкин, ләкин сит-ят кешегә ул булыуы...

Шулай донъя  ҡороп, һәүетемсә генә йәшәп,  заводында эшләп ятҡанда,  Әнүр ағаһынан  хат килеп төштө. Сәнғәт училищеһында быйыл һынлы сәнғәт бүлеге асыла, тиҙ арала килеп ет, ин шунда, тигән ағаһы ярайһы ҡәтғи тонда. Шул  уҡ көндө тигәндәй, быйыл бара алмамдыр, киләһе йылға килермен, тип яуап яҙып һалды. Ағаһы оҙаҡлатмаған яуабын, ҡәтғилеге асыуға күскән: ғүмер буйы заводта эшләргә йыйынаһыңмы ни, уҡырға кәрәк бит, ә ваҡыт үтә, ҡартайғас уҡый алмаҫһың, теләгең бөтөр, балаға ла батасаҡһың.

Әлбиттә, уҡырға теләге ҙур. Тик  ғаиләһе, йәш балаһы бар. Унан килеп, ҡайҙа барып төшә? Студенттарҙың дөйөм ятағында йәшәргә тейеш буламы? Яңғыҙ башы ҡайҙа ла һыйыр ине, өсәүләп бәләкәй бүлмәлә көн итеүе, ай-һай, ҡыйынға тура  киләсәк. Етмәһә, Лиммаһы икенсе балаға ауырлы.

Шулай икеләнеп, аптырап-алйып йөрөй торғас, Өфөгә барып сығырға кәрәктәр барыбер ҙә, тип, Таһирын күтәрҙеләр ҙә киттеләр ҙә барҙылар ҡәйнәләренә. Ҡайныһы, уның  атаһы шикелле, һуғышта һәләк булған. Лимманың өс ағаһы бар. Ике ағаһы өйләнеп башҡа сыҡҡан, береһе, кәләш алмағаны, ошонда йәшәй, шофер булып эшләй. Ҡариҙел буйлап бүрәнә һаллап төшөрөп,  ҡарағайҙан бына тигән йорт һалып кергәндәр.

Ҡәйнәһе улар килеүенә ифрат ҡыуанды.  Ейәнен тәүгә  күреүе.

Иртәгәһенә уның  артабанғы яҙмышында хәл иткес боролош  яһаған ваҡиға булды. Ҡәйнәһенең өйө бейек, түбә бейек булғас, мейес тә  бейек, мейес бейек булғас  – йүшкә лә бейек. Мейескә яғыр алдынан бәләкәй кәүҙәле ҡәйнәһенә ултырғысҡа баҫып йүшкәне асырға, ут янып бөткәс,  йәнә ултырғысҡа баҫып ябырға тура килә. «Ниңә шулай бейек ҡуйғандар икән һуң ул йүшкәне, аҫҡараҡ урынлаштырыу мөмкинлеге булманымы икән ни?» – тип аптыраны Рәссам. Ултырғыстан ҡолап төшөп аяғын йә ҡулын һындырып ҡуйыуы бар бит. Йәш түгел, етеҙлеге бөткән. Юҡ, бында нимәлер уйлап  табырға кәрәк. Баш вата торғас, килде бит бер фекер – рычаг! Урамдан шыма ғына оҙон таяҡ алып кереп (шофер улы районда үҙе эшләгән ойошмаларға ағас, утын, таҡта тейәп ҡайтҡанлыҡтан, төрлө оҙонлоҡтағы таҡта киҫәктәре, таяҡ, һайғау  ише «кәрәкмәгән» нәмәләр кузов төбөндә ҡайта икән), әлеге йүшкәне аҫта торған көйө аса, яба торған ябай ҡоролма – рычаг яһап ҡуйҙы. Уның эшләү принцибын күрһәткәс, ҡәйнәһе тәүҙә, шулай ҙа була икән, тигәндәй, аптырап торҙо, шунан үҙе эшләтеп ҡараны, башын сайҡаны ла әйтеп ҡуйҙы: «Башың эшләй, балам, һиңә  уҡырға кәрәк».

Хоҙай Тәғәлә үҙе әйттергән кеүек булды был һүҙҙәрҙе! Ә бит уның  уҡырға

барырғамы, юҡмы, тип ныҡ икеләнеп йөрөгәнен һәм Өфөгә килеүенең төп маҡсаты ла шул икәнен ҡәйнәһе белмәй ине. Ҡунаҡҡа килгәндәр, ейәнде күрһәтергә килгәндәр, тип кенә фаразлаған ҡәйнәһе тап өҫтөнә баҫты, һәм ул һүҙҙәр Рәссамдың икеләнеүҙәрен юҡҡа сығарҙы ла ҡуйҙы. Иртәгәһенә үк Салауатҡа ҡайтып фатирҙарын тапшырҙылар ҙа ҡәйнәләренә күсеп килделәр. Рәшит бөтә имтихандарҙы ла тик «бишле»гә тапшырып, сәнғәт училищеһының һынлы сәнғәт бүлегенә инеп китте. Шунан һуң Хоҙай юҡ тип ҡара!

***

Ауылдарында башланғыс кластарҙа уҡығанда уның һүрәт төшөрөүгә әүәҫлеген күреп, уҡытыусыһының Левитан картинаһын бүләк итеүен ғүмер буйы онота алманы. Бала сағының иң иҫтәлекле көндәренең береһе булып иҫәпләнә ул. Ысын рәсемдең ысын репродукцияһын беренсегә күреүе ине бит. Ул тәҙрә араһында ҡаҙаҡланған көйө байтаҡ торҙо уның ҡарашын иркәләп, әйҙәп, хыял уятып. Кис ятҡанда ла, иртән торғанда ла иң тәүҙә шуға ҡарар булды. Картина уны аптыратты, һоҡландырҙы, үҙе лә шуға оҡшатып төшөрөргә хыялланды. Уның тәьҫиренән шулай оҙаҡ сыға алмағандыр, шуғамылыр училищела уҡығанда натуранан төшөрөп, боронғо башҡа рәссамдарҙан да күреп үҙе лә ат һүрәте яһауға әүәҫләнде. Хәйер, ауылда колхоз аттары байтаҡ, ат һарайы ла булды – ауыл малайы ни уны көн дә күреп, атланып, егеп йөрөй һәм ауыл тормошоноң айырылғыһыҙ бер атрибуты иҫәпләнә.

Шулай уҡып йөрөгәнендә бер мәл Әнүр ағаһы килде лә, уның ватманға төшөргән һүрәттәрен барлап-ҡарап ултырғанда, ат һүрәтенә юлыҡты. Ат нисектер ауыр башын аҫҡа эйгән, мөштөм генә тора.

– Нишләп аттарың бик меҫкен ҡиәфәттә ул, күҙҙәрендә хәсрәт, әйтерһең дә, ҡорбан итергә килтереп баҫтырғандар?– тип һораны ағаһы. – Ат – ғорур хайуан, көслө. Әлбиттә, бойоҡ тороуы ла ихтимал – ял итә, йоҡлай, ашарына бөткән – ләкин һүрәт йәки картина – художестволы әҫәр бит, тимәк, уның юртҡандағы, һуҙылып сапҡандағы сағын сағылдырырға кәрәк. Тик торғанында ла ҡыҫылған пружина һымаҡ көсөргәнеште бирергә: хәҙер башын өҫкә сөйә лә һикерергә йә һуҙылып сабырға йыйына. Ул тап хәрәкәттә матур – һомғоллоҡ, көс-ҡеүәт символы. Бальзактың һүҙҙәре бар: донъяла онотолоп бейегән ҡатын-ҡыҙҙан, томоролоп сапҡан аттан да матурыраҡ күренеш юҡ.

Ул аптырап ҡалды, бер ни тип тә яуап бирә алманы. Сөнки ниндәйҙер кимәлдә был уның өсөн асыш та, һабаҡ та ине. Хәйер, быны торараҡ аңланы, бына бит ул бер үрнәккә табыныу, шунан сыға алмау нимәгә килтерә, тип уйланы.

Бер кисте остазы Әхмәт Лотфуллин һуғылды. Ғәҙәттәгесә, оҫтаханаһынан ҡайтып барыуылыр.

– Йә, эшең нишләй, барамы? – Ул ишек төбөнән үк һораша башланы. – Һеҙҙе, һәүректәрҙе, эткеләп-төрткөләп тормаһаң, һуҙылырға әҙер генә тораһығыҙ. – Шунан үҙе кинәнеп көлдө: – Былар һиңә ҡағылмай, арағыҙҙа шундайҙар ҙа бар. Башлағанды асырғанып тамамларға кәрәк, һуҙырға түгел.

Ул мольберт янына килде, байтаҡ текәлеп ҡарап торҙо, алыҫтанығраҡ баҡты, йәнә яҡын килде, стенанан мандолинаны алып, «Буранбай» көйөн сиртте, бүлмә буйлап йөрөнө. Ә үҙенең ҡарашы картинанан бер секундҡа ла айырылманы.

Остазының холҡон яҡшы белгәнгә күрә, ул унан уҙып фекерен һораманы – сәй ҡуйҙы, буяу-тюбиктарын йыйыштырҙы. Бына ул көйҙө сиртеп бөттө, ауыҙ

эсенән генә ниҙер мөгөрҙәп ҡуйҙы, мандолинаны элде лә тағы картина алдына килеп баҫты.

– Әнүр нисә йәштә үлде? – тип һораны.

– Илле икелә.

– Йәш киткән шул. Аҡыл ултырыр, емереп эшләр саҡ. Уның мандолинаһы тигәйнеңме әле?

– Эйе, үлер алдынан өс көн элек улы Салауат аша ебәргән.

– Белгән, һиҙгән, тимәк, китерен... Һиңә уның эшен дауам итергә ҡала,– шунан байтаҡ өндәшмәй торҙо ла хәбәрен ялғаны. – Мәсетте ҡуйғанһың. Сөнки әүәле мәсетһеҙ ауыл булмаған. Мәсетһеҙ ауыл – иманһыҙ ауыл. Иман булған, хәҙер генә юғалтып бөтөп барабыҙ. Граждандар һуғышы, тәүге трактор: НАТИ. Һуғыш еле лә бар, колхоз баҫыуында көлтә бәйләүсе ҡатын-ҡыҙ. Шул тирәне саҡ ҡына дәһшәтлерәк ит, болоттарҙы ҡуйырт, күк йөҙө аша драматизмды, трагизмды көсәйт. Лирика, романтика ла бар, һағыш, ностальгия. Илдә барған сәйәси, ижтимағи ваҡиғалар төҫмөрләнә. Әйбәт, әйбәт, осона яҡынаяһың. Ҙур эшең буласаҡ. Быны мин, Әхмәт ағайың, әйтәм, – ул ҡәнәғәт йылмайҙы ла уның арҡаһынан ҡаҡты. – Исеме бармы?

– Әлегә юҡ.

– Эшләп йөрө, уйлап йөрө. Хәйер, уйлама, башыңды уның менән ҡатырмай тор. Ниндәйҙер философик исем кәрәктер, мәғәнәле.

– Мин дә шулайыраҡ уйҙа.

– Табырһың, тыуғас исемһеҙ йөрөмәҫ, – остаз шулай тине лә, йәнә мандолинаны алып, сиртергә тотондо. Үҙе уйнаны, үҙе картинанан күҙен алманы.

– Ярар, еңгәң юғалтҡандыр, ҡайтайым, – тип йәһәт кенә ҡуҙғалды. – Нисә киләм, күршеңдә тап иткәнем юҡ. Бынан киттеме әллә?

– Китмәне. Күберәк заказдар буйынса эшләй шикелле.

– Ниндәй заказдар?

– Икенсе ҡалала, райондарҙа.

– Шабашка, тимәк. Ҡыҙыҡ һәм интересно. Интересно, әммә ҡыҙыҡ түгел. Йәше бара, етди темаларға тотонорға кәрәк ине.

Ишектән сыҡҡанда йәнә баш бармағын күккә сөйҙө. Уның эшенән ҡәнәғәт ҡалыуын шулай белдерҙе остазы...

***

Училищеның биш йылы үтеп тә китте. Уны «ҡыҙыл диплом»ға тамамлағас, «Гидравлика» заводының эстетика бюроһындағы өлкән инженер вазифаһына эшкә урынлашты. Коммунистар партияһы идеологияһына иғтибар көслө булғанлыҡтан, сәйәси плакаттар, лозунгылар, юлбашсыбыҙ Лениндың, Политбюро ағзаларының портреттарын күпләп яҙырға тура килде. Заводта, әлбиттә, профессиональ рәссамдар юҡ, быларҙы башҡарыу – уның иңендә. Көн оҙоно эш, шәмбе, йәкшәмбе көндәрендә лә ял юҡ.

Бер ҙур сәйәси байрам алдынан ул тотто ла административ бина фасадына 9х12 метр ҙурлығында Ленин портретын яҙып ҡуйҙы. Заводтың партком секретарының шатланыуы! Әйтерһең, үҙенең портретын элеп ҡуйғандар. «Бына хәҙер беҙҙең эш профессионально китте! – тип арҡаһынан ҡаҡты. – Райкомда, горкомда, һеҙҙә наглядный агитация насар ҡуйылған, тип әйтеп ҡараһындар». Сөнки даны Рәссамға түгел, уға! Ысынлап та, партияның район, ҡала комитеттарынан, хатта Өлкә комитетынан килеп ҡарап йөрөнөләр. Маҡтанылар, заводтың партия эшен башҡа ойошмаларға өлгө итеп ҡуйҙылар.

Үгәй атаһының үҙен ун биш йәше тулыр-тулмаҫтан өйҙән ҡыуып сығарыуын ул, әлбиттә, бер нисек тә онота алманы. Күңелендә мәңге уңалмаҫ яра булып, гел генә һулҡылдап тик йөрөнө. Ул, ниңәлер, быны бигерәк тә асҡа ҡырҡылған, урамда хулиган малайҙарҙан туҡмалған мәлдәрендә иҫенә төшөрөр булды. Әйтерһең, тормошоноң иң аяныслы көндәре өсөн тик ул ғәйепле. Хәйер, улай уйларға нигеҙ ҙә бар шул: ҡыуып сығармаһа, Еҙем-Ҡаран мәктәбен тамамлар ҙа, моғайын, Өфөгә килеп, берәй юғары уҡыу йортона инер ине. Стипендия алһа, тамағы ла ул тиклем ас йөрөмәҫ, аҡса туплап, кейемен дә рәтләр ине. Шуға ла тәүҙәрәк, унда мәңге ҡайтаһым юҡ, тип ант итһә лә, ҙурая килә, нигеҙҙә, Салауат һөнәрселек училищеһында уҡый башлағас – берәҙәк тормошо үтте – ҡараш-мөнәсәбәте йомшара төштө. Быға, бәлки, өйҙәрендә үгәй атаһы ғына түгел, әсәһенең йәшәүе лә булышлыҡ иткәндер.

Апаһы менән һеңлеһенең, ҡайт, әсәйем һағына, илай, һораша, ниңә миңә әйтмәй сығып киткән ул, берәй үпкәһе бармы әллә, тип хаттар яҙыуына, ҡайтҡылап йөрөгән Әнүр ағаһының әйтеүенә ҡолаҡ һалды ла бер ялында ҡайтты. Хәйләкәр бабаһы (ул уны бабай тип йөрөтә ине), ғәжәп, көтмәгәнсә йылы ҡаршыланы, хатта ҡосаҡлап уҡ алды, «улым»дан һалдырып хәбәре бөтмәне. Әйтерһең дә, араларында бер ни булмаған, нисә йылдар ҡайтып күренмәгәне лә иҫәпкә кермәй. Ә бына әсәһе, уны күргәс ҡыуанһа ла, аҙаҡ үҙен ғәйепле тойоп, нишләргә белмәй аҙапланды.

Ошонан һуң ул ҡайтҡылап йөрөй башланы. Йәйге ялда, эшкә төшкәс, отпускыларында бесән сабышты, утын әҙерләште. Бабаһы бер ҡасан да күңелһеҙ ваҡиғаны иҫенә төшөрмәне, һәр саҡ итәғәтле, ихтирамлы булды, уға исеме менән түгел, ә «улым» тип кенә өндәште. Ҡалаға ҡайтҡас, кистәрен йыш ҡына шул турала уйлап ята Рәссам. Ләкин бындай шикле йылы мөнәсәбәттең сәбәбен һис аңлай алмай. Ваҡиғаны онотоуы мөмкин түгел, ундай хәл онотолмай, хәтере тишек тиһәң, урта йәштәрҙәге ир булған, әллә был малай егет ҡорона инде, туҡмап ҡуймаһын йәки үҙен өйҙән ҡыуып сығармаһын, тип ҡурҡамы? Әллә ул төшөнөп етмәгән башҡа уй-ниәттәре бармы? Ҡаты күңелле кешенең тиҙ йомшарыуында бер сәбәп булмай булмаҫ.

Әсәһенең бабаһы менән аралары бигүк татыу булмағандыр. Рәссам ҡайтҡан-киткән арала уны күрһәтергә тырышмаһалар ҙа, һөйләшеү-аралашыуҙарынан шулай икәнлеген самалай ине. Һәм бер мәл һеңлеһе, бабайым беҙҙән китте, күрше ауылдағы, йәғни ауыл Советы урынлашҡан үҙәк усадьбалағы бер ҡатынға кергән, тип хат яҙҙы. Аңламаны Рәссам олоғайып барған кешенең был ҡылығын. Ҡайтҡас әсәһенән һорағайны: «Ҡыуманым, үҙе китте, ғүмер буйы, мөстән һыйыр һымаҡ, һәр ҡапҡаға төртөлдө лә йөрөнө, тапты инде асыҡ ҡапҡаны», – тине лә ҡуйҙы. Әлбиттә, еңел булмағандыр әсәһенә, ни тиһәң дә, өйрәнгән, күнеккән кеше. Күпләп мал тоттолар, бейәләре бар ине, унлап баш ҡорттары. Йыла һыҙырҙы, һалабаш һалды, бура бураны. Бабай сығып киткәс ни, уларҙың барыһын да яйлап бөтөрҙө әсәһе, яңғыҙына бөтөнләй ҙә ҡыйын була башлағас, ағаһы, апаһы, еҙнәһенең өгөт-тәҡдиме буйынса, Рәссам өйөн һатты ла үҙенә күсереп алды.

Күрше ауылдағы ҡапҡаға мөгөҙ төрткән бабаһын бер нисә йылдан әбейенең эскесе улы сәнсеп үлтереп ҡуйған. Имеш, икәүләп эскәндәр ҙә, нимәгәлер бәхәсләшеп китеп, өҫтәлдә ятҡан икмәк бысағын күкрәгенә ҡаҙаған.

Бабаһының тормошон шулай аянислы тамамлауына аптырамаlisten Рәссам. Әлбиттә, йәл, йәшәрлеге бар ине әле. Нишләйһең, һәр кемдең үҙ күрәһеләре...

***

1973 йылдың июль башы. Коммунистик урам буйлап китеп барһа (теп-теүәл 20 йыл элек, йәғни 1953 йылдың йәйендә, милиционер уны тотоп детприемникка алып киткән ерҙә), ҙур бер тәҙрәнән шаҡылдатҡан тауыш ишетеп, әйләнеп ҡараны – тәҙрәнән Рәшит Нурмөхәмәтов, ул саҡтағы Рәссамдар союзы идараһы рәйесе, уға ҡарап тора һәм, кер әле, кер, тип ымлай. Керһә:

– Һин документтарыңды институтҡа тапшырҙыңмы, юҡмы? – тип һорай. – Һине беләм, иртәгә үк документтарыңды, булған эштәреңде йыйып, сәнғәт институтына килтер, быйыл мин унда һынлы сәнғәт бүлеге асам, – ти.

– Уҡырға олоғайҙым бит инде, Рәшит Мөхәмәтбарыевич.

– Олоғайҙым, имеш. Нисә йәштәһең?

– Әйтеүе лә оят: утыҙ биш.

– Утыҙ биш оло була тиме? Ҡәҙерен белеп, самый уҡыр саҡ. Ана, Саяпов та килә. Ул да һинең тирә, буғай. Олораҡ булмаһа. Иртәгә сәғәт унда институтта көтәм.

Ул ҡайтты ла идара рәйесе менән булған һөйләшеүҙе ҡатынына еткерҙе. «Уҡырға теләгең ҙур, беләм, мин ҡаршы түгел», – тип яуапланы хәләл ефете. Барайыммы, юҡмы, тип һорамағайны ла, ә ул уның тел төбөн шундуҡ аңланы ла яуабын биреп тә ҡуйҙы. Ай, һиҙгер ҙә шул ҡатыны, уны аңлай.

Йүгереп йөрөп тигәндәй кәрәкле документтарын, булған ижади эштәрен йыйҙы ла институттың ҡабул итеү комиссияһына алып барып тапшырҙы. Мәле еткәс, тейешле имтихандарын тик «бишле»гә генә биреп, уҡырға инеп тә китте.

Институтты тамамлағанда диплом эше итеп «Атайым иҫтәлегенә» тигән триптих яҙырға ниәтләнде. Уртаҡ фекер, уртаҡ идея менән һуғарылған һәм өсөһөндә лә бер үк персонаждар буласаҡ өс картина. Өс дәүер, өс быуын. Тәүгеһе «Оҙатыу» тип атала. Өс йәшлек малай менән әсәһе атаһын һуғышҡа оҙата. Малай атаһының ҡулында. Яндарында – уны район үҙәгенәме, поезғамы илтергә тейешле атлы арба. Урталағы, йәғни триптихтың төп картинаһында, атаһы ат өҫтөндә, башҡа байтаҡ атлы яугирҙарҙың алғы рәтендә. Ҡаршыларында – дошманға ҡойон булып ябырыласаҡ эскадрон алдында ялҡынлы телмәр тотоусы, бойороҡ биреүсе командир. Өсөнсө картинала – бөгөнгө көн, сираттағы Еңеү байрамы, 9 май. Ул, Рәссам, бында инде еткән ир, эргәһендә – үҙенең кескәй улы, сал сәсле әсәһе. Улар стенаға элеүле хәрби формалағы атаһының ҙурайтылған фотопортретына текәлеп торалар.

Эскиздарын күрһәткәс, диплом етәксеһе Рәшит Нурмөхәмәтов оҙаҡ ҡына ҡарап торҙо. Уның ҡайһы бер аңлатмаларын өндәшмәй генә тыңланы, бер нисә һорау ҙа бирҙе. Шунан: «Эшең һәйбәт уйланылған, әммә мин дипломыңды бөгөнгө актуаль темаға – хеҙмәт темаһына яҙларға тәҡдим итәм. Аңлайым, һиңә был эшең бик ҡәҙерле, атайың алдындағы бурыс. Производствоны яҡшы беләһең, эшләгәнһең, тормош тәжрибәң дә ҙур, хеҙмәт кешеһе образын тыуҙырыу ҡыйын булмаҫ, ә быны... һуңыраҡ яҙырһың», – тине.

Ризалашырға тура килде – етәксе менән бәхәсләшеп тороп булмай. Ә ваҡыт аҙ ҡалғайны – диплом яҙырға бирелгән ваҡыттың яртыһы үткән. Үҙе белгән йыраҡ араларға торба үткәреүселәр темаһына тотондо ла «Трассовиктар. 720 км» тигән исем аҫтында яҙа ла башланы. Картина, көтөлмәҫтән – һәр хәлдә ул үҙе

һис көтмәгәйне – етәксе тарафынан да, комиссия тарафынан да юғары баһа алды һәм 40 йәшлек студент институтты йәнә «ҡыҙыл диплом»ға тамамланы.

Ә «Трассовиктар»ҙың яҙмышы бәхетле булды. Тәүҙә ил буйынса сәнғәт институттарының сығарылыш студенттарының Ленинградта үткән ҙур күргәҙмәһендә ҡатнашты, торараҡ башҡа ҡалаларҙа ойошторолған региональ, зональ күргәҙмәләргә ҡуйылды, шунан Мәскәү Күргәҙмәләр фондына һатып алдылар. Форсаты сығып, баш ҡалаға юлы төшкәс, эште фотоға төшөрөп алайым, исмаһам, тип күргәҙмәләр фондына инһә: «Һеҙҙең картинаны французлар һатып алды инде», – тип торалар...

Ай самаһы ваҡыт үткәс, Францияның иң ҙур күргәҙмәләр фондынан «Мөмкин булһа, һеҙҙең башҡа эштәрегеҙҙе лә һатып алыр инек» тип өйөнә шалтыраттылар. Башҡа эштәрен тәҡдим итеп торманы инде. Хәйер, үкенмәй, «балаларың» ситтә «йөрөгәнсе», эргәңдә булыуы яҡшы.

Бер көн оҫтаханаһына барһа – эстән йәнә ниндәйҙер тауыштар һарҡыла. Лабыр-лобор бәхәсләшәләр, бер-береһен бүлдерәләр, кемдер ҡысҡырған да һымаҡ. Тамам ғәжәпкә ҡалды рәссам, хатта, бурҙар йә малай-шалай керҙеме икән әллә, тип уйланы.

– Көпә-көндөҙ электр бағанаһы төбөндә сәптереп тора был малай. Уҡырға төшкән йылы булһа кәрәк. Янына барҙым да, улым, һин хәҙер ҙур малай бит, мәктәпкә йөрөйһөң, былай ауыл уртаһында хәжәт итеү килешмәй. Хәҙер һиңә кеше күҙенән ҡасыу фарыз, тим. Оялды, ҡыҙарҙы, башын эйеп китеп барҙы. Һуңынан, байтаҡ йылдар үтеп ауылға ҡайтҡанында инеп, һеҙ, ағай, миңә әхлаҡ тәрбиәһе биргәнһегеҙ, тип рәхмәт әйтеп сыҡты. Шуны онотмауын әйт әле!

– Ифрат тәрбиәле, инсафлы бала булды инде ул, – тип һүҙгә ҡушылды икенсе тауыш.

– Еңел уҡыны, отҡор, һәләтле ине. Апаһы Әсмә менән бер класта уҡынылар.

– Зәкиә апай балаларын ҡаты тотто.

– Ҡаты түгел, эшкә өйрәтте, бер ҙә урам буйында ел ҡыуып йөрөмәнеләр. Йөрөгәндәр, ана, эскегә бирелде, һуғышты, аҫылынды, ғаиләһенән китте. Ә быларҙың дүртеһе лә йә баҡса утай, йә өй йыйыштыра, йә ашарға бешерә, утын ташый ине. Өйҙә һәр ҡайһыһының тәғәйен эше булды.

– Әнүре һуң...

Хәбәрҙәре олораҡ ваҡиғаларға күсте, ауыл хәлдәренә барып ялғанды, ниңәләр, ситкә сығып киткәндәрҙе, үлгәндәрҙе иҫкә алдылар. Рәссам уларҙы берсә ҡыҙыҡһынып, берсә ғәжәпләнеп тыңланы. Байтаҡ ваҡыттан һуң, әллә ҡолағыма ишетеләме, әллә һаташа башланыммы, тип тән-кәүҙәһен ҡапшап ҡараны, шуҡлығына барып, ҡайҙа, быларҙы тотайым, фашлайым әле, тип ишекте ҡапыл асты. Ҡыштырҙау, кейемдәрҙең елберҙәүе, хатта ел, һауа тулҡыны үткән һымаҡ тойолдо, әйтерһең дә, кемдер унығ алдынан ғына ашығып үтеп китте. Ләкин бүлмәлә бер кем дә юҡ, барыһы ла үҙ урынында, бер нәмә лә күсмәгән, тик картинаһындағы ауылдаштарының йөҙөндә, ҡараштарында шаян мутлыҡ уйнай һымаҡ. Әллә уға ғына шулай күрендеме? Аҡылынан яҙа башламаһа ғына ярар ине лә эшләп бөткәнсе...

***

«Университет ректоры эҙләтә» тигәс, барҙы Рәссам. ВУЗ етәксеһе республиканың арҙаҡлы шәхестәренең, атап әйткәндә, рухи донъя әһелдәренең – яҙыусылар, шағирҙар, мәғрифәтселәр, ғалимдар – портреттары галереяһын булдырырға

ниәте барлығын белдерҙе, исемлектәрен дә бирҙе. Портреттар университеттың төп бинаһындағы филология, журналистика, тарих факультеттары урынлашҡан ҙур булырға тейеш икән. Ғәйәт етди эш ине был, шуға ла, уйлармын, яуапты аҙна-ун көн эсендә бирермен, тине. Был ҙур заказды үҙенең генә башҡарып сыға алмауын, берәй иптәш кәрәклеген дә аңлай ине. Композиция төҙөү, барлыҡ әһелдәрҙең портреттарын табыу, улар тураһында әҙәбиәт, иҫтәлек-хәтирәләрҙе уҡыу ғына ла әллә күпме ваҡытты аласаҡ. Йәғни әҙерлектең яҙыуға ҡарағанда ла оҙаҡҡараҡ һуҙылыуы ихтимал. Уйланы-уйланы ла үҙенән байтаҡҡа йәш, теремек һәм талантлы рәссам Георгийҙы йәлеп итергә булды. Иртәгәһенә уны табып хәлде һөйләп бирҙе, үҙенең уй-фекерҙәрен әйтте.

Портреттар эленеп торасаҡ коридорҙы барып ҡаранылар. Бина боронғо һәм иҫке стилдә булғанлыҡтан, коридор оҙон һәм тар ине, етмәһә ҡараңғыраҡ та. Байтаҡ уйланып йөрөгәндән һуң айырым портреттар вариантынан баш тарттылар ҙа әһелдәрҙе төркөм-төркөм эшләргә булдылар. Һөҙөмтәлә галерея тип уйлаған эш триптихҡа әйләнде. Триптих булғас, билдәле шәхестәрҙең йәшәү дәүеренә ҡарап, башта боронғо әһелдәрҙе, урта, йәғни төп картинала Октябрь түңкәрелешенә тиклемге һәм замандаштар, ә өсөнсөһөндә башҡорт ер-иленә килгән, уның тураһында яҙған бөйөк рус таланттары булһын, тигән фекер ҡулай күренде. Был осраҡта йәнә бер һорау тыуа: өс картинаны коридорҙа нисек урынлаштырырға? Триптих бер-бер артлы, бер-береһенә терәлеп торорға тейеш, шул саҡта ғына дөйөм әҫәр була. Һәм таптылар: баҫҡыстан менгәс тә ҙур ғына майҙан бар, ул коридорҙан байтаҡҡа киң, тимәк шундағы стенаға урынлаштырырға кәрәк! Үлсәнеләр – мөмкин, өсөһөн дә һыйҙырып була.

Ректорға инеп фекерҙәрен әйткәйнеләр, ул ҡаршы килмәне. Һәм эш башланды. Тәүҙә портреттарҙы ватман ҡағыҙға айырым-айырым төшөрҙөләр, шунан бер полотноға «йыйҙылар». Айырым этаптарҙа эш барышын ректор үҙе, уның вәкилдәре килеп ҡарап йөрөнө, республиканың Мәҙәниәт министрлығы ла ҡыҙыҡһынып торҙо. Ике йыл тигәндә триптихтың өс картинаһы ла тамамланып, тәғәйен урынға эленгәйне.

Әйтергә кәрәк, был хеҙмәт ҙур резонанс алды. Гәзиттәр яҙҙы, телевидение ҡат-ҡат күрһәтте. «Ер рухы» авторҙары Дәүләт премияһына тәҡдим ителде. Был оло еңеү ине.

Ярты йылдан һуң улар Георгий менән Академия театры өсөн «Йондоҙлоҡ» тигән ҙур картина, башҡорт автономияһының тәүге етәкселәренә бағышланған «Темәстә сәй эсеү» тип аталған олпат полотно, башҡа байтаҡ эштәр яҙҙылар. Ижади планда былар, әлбиттә, һөнәри ҡәнәғәтлек килтерҙе.

Шулай актив ижади эшләп йөрөгәндә, сәнғәт институты ректоры: «Һынлы сәнғәт бүлеген факультетҡа әйләндерәбеҙ, уҡытырға кил», – тип уны уҡытыусылыҡ эшенә саҡырҙы. Ризалашты. Тәжрибәһе юҡ түгел. Байтаҡ йылдар дауамында тупланған таһыл, аҡыл орлоҡтарын бер көн килеп сәсергә лә кәрәктер бит.

Институт ректорының был тәҡдименән бер генә көн элек төшөндә Әнүр ағаһын күргәйне. Имеш, мисәүгә егелгән береһенән-береһе һомғол күк ат менән фатирҙары алдына килеп туҡтаған. Ауыҙлыҡтарын сәйнәгән ярһыу аттарҙы саҡ тыйып: «Сыҡ, сыҡ!» – тип һөрәнләй. Йүгереп ихатаға сығыуы булды, кошовка санаға саҡырҙы ла дилбегәне уға һондо: «Тот!» Бер ни аңламаған Рәссам, ағаһы бойорғас ни, ҡайыш дилбегәне ҡулына алырға мәжбүр булды. «Мин өсөһөн дә тота алмайым, бер ат ҡына булһа...» – тип яуаплай ҡото осҡан Рәссам. «Тота

алаһың, ышанам, донъя дилбегәһе һиңә ҡала», – «Әнүр, булмай...» – «Юҡ, һин тейешһең!»

Дилбәгәне тотторҙо ла үҙе кошовканан еңел генә көрткә һикерҙе һәм ҡарбуран араһына инеп юҡ та булды. Уның төшөүен генә көткәндәй, аттар ярһып алға ырғылды...

***

Ниһайәт, картина яҙылып бөттө – һәр хәлдә Рәссам шулай тип иҫәпләне. Йылдан ашыу барған хеҙмәткә, әлбиттә, нимәлер өҫтәргә, нимәнелер алырға, ауылды ҙурайтырға, кешеләрҙе арттырырға була – камиллыҡтың сиге юҡ, ләкин уларҙың күплегенән йәки аҙлығынан эш яҡшырып китмәйәсәк. Уның «Ауыл»ы «Явление Христа к народу» түгел, ул үҙе лә Иванов түгел. Ваҡытында нөктә ҡуя белергә лә кәрәк. Шуға ла Рәссам бер көндө эшенең уң яҡ ситенә исем-шәрифен, яҙылыу йылын теркәне, артына ҡором менән «Республиканың халыҡ рәссамы, Дәүләт премияһы лауреатынан тыуған ауылыма бүләк» тип нарыҡлап яҙып ҡуйҙы. Хәҙер алып ҡайтып, клуб түренә элеү хәстәре ҡалды.

Әхмәт Лотфуллинды, Георгийҙы, деканаттан, кафедранан аралашҡан бер нисә иптәшен оҫтаханаһына саҡырҙы. Ут күршеһе Исмәғилгә лә шылтыраткайны – ҡайһылыр районға клуб биҙәргә киткән булып сыҡты. Килделәр, ҡаранылар, һоҡландылар, үҙ фекерҙәрен белдерҙеләр. Тегеләйерәк, былайыраҡ кәрәк ине, тигәне лә ишетелде. Ҡайһылары менән килеште, килешмәгәне, күңеле ҡабул итмәгәне лә булды. Шуныһы: хәҙер бер нәмәне лә үҙгәртә алмай ине, дөрөҫөрәге, үҙгәртергә һис теләге юҡ. Нисек тыуған – шулай тыуған инде. Уның үҙ фекере, үҙ принциптары...

Улы менән тыуған ауылдарына барғандар, имеш. Картинаһын да алғандар. Ләкин, ауылдарын тапмай, кире боролдолар. Боролғайнылар, машиналары һүнде лә ҡуйҙы! Таһир капотын асып тегеһен, быныһын борҙо. Барыһы ла урынында, бер нәмә лә төшөп ҡалмаған, һынмаған, тип яңынан тоҡандырып ҡараны. Тоҡанды, әммә ҡуҙғалып китә алманы, әйтерһең дә, тормозда ултыра йә артына көсө етмәҫлек нәмә таҡҡандар. Ҡуҙғалды, ләкин, һыртҡа менә башлағас, машина шыуышып ҡына барған кеүек тамам ййланы. Үҙе, ниңәлер, дерелдәй, һелкенә, хатта кеше тауыштары ишетелгәндәй була – ҡысҡырышалар, әрләшәләр ҙә һымаҡ.

– Тартмай, – тине Таһир аптырап, устарын рулгә һуҡты. – Хәйерһеҙ юлға сыҡтыҡ, ахыры, атай, – туҡтатты, кабинанан төштө, машинаһын урап йөрөп әйләнде, йән асыуы менән тәгәрмәсенә типте.

Рәссам да тышҡа сыҡты. Артҡа, ауыл яғына ҡараһа, бер төркөм кешенең ерек, муйыл ҡыуаҡлыҡтары араһынан китеп барғандарын шәйләне. Былай боролоп ҡарай-ҡарай йүгерәләр, әйтерһең дә, колхоздың йәшелсә-емеш баҡсаһынан ҡыяр, кишер урлап ҡасып барған малай-шалай. Иҫе китте Рәссамдың: кемдәр, ҡайҙа ашығалар? Йәшерәктәре алдан саба, олораҡтар, ҡарт-ҡоро, әбейһәбей арттан тәнтерәкләй. Ә әлеге картинаны яҙырға «мәжбүр иткән» иҫерек ауылдаш егет ҡулдарын һелтәп нимәлер ҡысҡыра, һөрәнләй, әллә ғәфү үтенә, әллә уны маҡтай, һис аңларлыҡ түгел.

– Таһир, ҡара, кемдәрҙер ауыл яғына китеп бара.

– Ҡайҙа? Бер нәмә лә күрмәйемсе, – аптыраны Таһир.

– Нисек күрмәйһең? Ана бит, бер көтөү булып ауыл яғына атлайҙар.

Таһир, тамам ғәжәпкә ҡалып, бер атаһына, бер ауыл яғына текәлде. Аптыраулы йөҙөнә ҡарағанда, ул, ысынлап та, бер нәмә лә шәйләмәй ине шикелле.

Шунда Рәссамдың башына үҙен дә ғәжәпләндергән уй килде: былар картинанан төшмәнеме икән? Сөнки шул арала – уларҙың ауылы ултырған ерҙән ҡуҙғалыуҙарына ун биш минут – шунса кеше ҡайҙан хасил булһын? Йәшенеп ятмағандарҙыр бит берәй соҡорҙа? Йәшенер соҡор ҙа, урман да юҡ. Шулай икән, картина ғына ҡала. Шунан багажникта ятҡан картинаһын тотоп ҡараны: рамы бар, ә киндере юҡ!

Аптырап торғанда, күктән аяҡтары осона нур көлтәһе килеп төштө. Ғүмеренең иң ауыр, сетерекле мәлдәрендә ярҙам иткән был мөғжизәгә Рәссам һәр саҡ тәү тапҡыр шаһит булғандай ғәжәп итә.

– Энем, картинаңды ҡалдыр ауылға. Һин уны бүләк итәм тип тәғәйен эшләнең бит, – тине Әсмә апаһы, үҙенең баҫалҡы, әммә талапсан тауышы менән.

Нур-көлтә мөрйәнән сыҡҡан төтөн һымаҡ таралып юҡ та булды.

Рәссам йоҡоһонан тертләп уянды, шомланып тирә-яғына ҡаранды. Юлға сығыр алдынан шундай төш күреүенә ғәжәп итте. Нимәгә ишара был?

***

Һыртты менеп еткәс, тыуған ауылын күрә алмай аҙапланды Рәссам. Барған саңлы юлдың уң яғынан – текә яр, Мәндем тегеләй, былай боролғанда, төптә генә ағып ятҡан һыу күренеп ҡала ла ватыҡ көҙгө ватыҡтары һымаҡ ялтлап китә. Йылға һайыҡҡан, тарайған, ә бала сағында ниндәй киң һәм тәрән ине. Йылғаның теге яҡ ярында ултырған бейек тирәктәр ҙә ул ҡәҙәре бейек тойолмай хәҙер, һирәгәйгәндәр, ҡартайып ауғандары, йәшен һуҡҡандары йә көтөүселәр яндырғандары ла шәйләнә. Туғай ҡаплап йөрөгән көтөү ҙә юҡ, бала-саға ла күренмәй.

Уң яғына ҡарап бара торғас, тамам онотолоп киткән, имеш. Йәнә алға ҡараһа, һыртты төшөп үк киләләр, ә ауылдары һаман күренмәй. Әллә оло юлдан иртәрәк боролдолармы?

– Таһир, дөрөҫ киләбеҙме? Ауыл һаман юҡ таһа, – тип һорарға мәжбүр булды ул, тамам аптырағас.

– Дөрөҫ, – тине улы тыныс ҡына. – Арыраҡтыр. Тағы бер һыртҡа менәһе бар түгелме?

– Белмәйем шул. Һырт ни, берәү ине ләһә. Артылдыҡ, ә ауыл күренмәй ҙә күренмәй.

Тағы бер ҡалҡыулыҡ булһа, Рәссам шатланыр ине лә, юҡтыр, бала сағында ул берәү ине. Хәҙер үҫеп сыҡмағандыр ҙаһа? Шаулап ултырған ереклек, муйыллыҡ өйкөм-өйкөм ҡыуаҡлыҡ рәүешендә ҡалған, улары ла – һыныҡ та ҡырҡыҡ, етмәһә, ваҡ, тәпәш. Ауыл, бәлки, ысынлап та, шул ҡыуаҡлыҡтар артындалыр?

– Ауыл юҡ, Таһир, – тине килә биргәс Рәссам – улынан бигерәк, үҙенә әйтте. – Ҡайҙа булған? Был ни хәл? Бер нәмә лә аңламайым. Күккә осоп китмәгәндер ҙәһә?!

Ысынлап та, бер өй юҡ, кәртә-ҡуралары, һарай-лапаҫтар, электр бағаналары, ҡапҡалар, трактор-машина паркы, ат һарайы, магазин, клуб – ҡайҙа? Улар урынында шаулап кесерткән сайҡала, картуф баҡсаларын кеше бейеклек алабута баҫҡан.

– Таһир, туҡтат әле! – Тамағы кипте, күҙҙәренә йәш тығылды. Ауырлыҡ менән кабинанан сыҡты, усын маңлайына терәп, йәнә ауылы ултырырға тейешле тарафҡа текәлде. Абына-һөрөнә алға атлап китте, ҡабаланһа, әйтерһең, йәнтөйәк тамам юғалғансы барып өлгөрә. Таһир машинаһын яйлап ҡына атаһы артынан эйәртте.

Элек урман булып үҫкән, хәҙер өйкөм-өйкөм һирәк ағаслыҡ булып ҡалған ағастарҙы үттеләр, ат һарайының өйөлөп ятҡан тиреҫлеге, ауыл түккән сүплек, колхоз келәте булырға тейешле урын да артта ҡалды, ә ауыл һаман юҡ та юҡ. Рәссам, ҡарашын алға төбәгән килеш, соҡор-саҡырға төшә-төшә, кипкән ағастарға абына-абына атлауын белде. Ҡыҫҡа үлән һарғайған, мал, кеше йөрөгән, ат арбаһы үткән саңлы юл-һуҡмаҡ юғалып бара, ике яҡлап бейек үләндәр үҫә. Тирә-яҡтың да йәме юҡ, – гүйә, үле, йәнһеҙ.

Ул ауыл ултырырға тейеш урынға килеп етте. Зәйнулла бабайҙар менән Хәбилә әбейҙәрҙең картуф баҡсаларының артҡы кәртәләре ауылға ингән тыҡрыҡты хасил итә торғайны. Үлән үҫһә лә, әүәле ат, арба юлы барлығы самалана, тик хәҙер кәртә юҡ, ике яҡлап кесерткән диңгеҙе генә сайҡала. Атлай торғас, ауыл уртаһына килеп юлыҡты. Уртаһы тип атап булмай инде хәҙер: уртаһы ла юҡ, сите лә – ҡола ялан.

– Таһир, ауыл юҡ, – тип шыбырҙай ул, улы үҙенән байтаҡҡа артта ҡалып машинала килһә лә. – Берәй ғәләмәт көс күккә күтәреп осҡанмы әллә? Бомба, снаряд төшһә, емереклектәр, соҡорҙары булыр ине. Кеше эҙе лә, машина, трактор эҙе лә, мал-тыуар тиҙәге лә, эт, бесәй ҙә күренмәй хатта.

Уның аҙымдары әкренәйҙе, аяҡтарын саҡ алыштырып баҫа башланы. Башында әллә күпме уй ҡайнашһа ла, аяҡтары уны үҙҙәренең йорто урынына килтерҙе. Башҡа йорттар кеүек, уларҙыҡы ла юҡ, таш нигеҙе генә ҡалған. Уныһына теймәгәндәр, күрәһең, алып китә алмағандар. Тәрән баҙҙарына әллә күпме тупраҡ ишелеп төшкән, буш шешәләр, пакеттар, иҫке аяҡ кейемдәре, сепрәк-сапраҡ, тап-топ ырғытылған.

Ихаталарында берҙән-бер «иҫән» ҡалған әйбер – аҙбарҙарының һерәйеп ҡалған һыңар бағанаһы. Рәссамдың йөрәге сәнсеп ҡуйҙы. Бағананы ҡосаҡланы ла, һығылып илап, тештәрен ҡыҫты. Эйе, улар: ағаһы, апаһы, һеңлеһе менән ошо имән бағанаға терәлеп баҫалар ҙа һәр ҡайһыһының буйын үлсәйҙәр ине. Һәр ҡайһыһы тиҙерәк үҫергә тырыша, ләкин Әнүр ағаһы: «Аяҡ ослама, үксәңде ергә тейҙер!» – тип ҡалын тауышы менән өндәшә лә бер ҡулы менән баштарына линейкаһын һала, икенсе ҡулына тотҡан бысаҡ менән бағанаға киртә. Шунан билдәләрҙе ҡарайҙар ҙа, мин үҫкәнмен, юҡ, мин күберәк үҫкәнмен, тип бәхәсләшергә керешәләр. Көн һайын үлсәнергә тырышалар, ләкин Әнүр ағаһы, кеше бер көн эсендә үҫмәй, бер айҙа ла үҫкәне һиҙелмәй, тип, уҡырға барған тәүге көндә генә үлсәй ине. Ә былар, уҡыуҙан бигерәк, үлсәнергә ашҡынып беренсе сентябрҙе еткерә алмай йонсойҙар...

Күпме хәтирәләргә, ваҡиғаларға шаһит был имән бағана! Дүрт баланың нисек үҫкәнен, уҙыша-уҙыша буй еткергәнен генә түгел, ихатала, ауыл урамында, башҡа ғаиләләрҙә ниҙәр барғанын да «күргән» бағана бит ул. Ыжғыр елдәр, көйҙөргөс эҫелек, күҙ асҡыһыҙ буран, ҡаты һыуыҡтарҙы кисергән. Аҙбар мөйөштәрендәге бүтән бағаналарҙы һурып алғандар, ә быға нишләптер теймәгәндәр. Тәрән ултыртҡанлыҡтан һура алмағандарҙыр инде.

Ул бөткән ауылы буйлап атлай. Тирә-яҡта шомло тынлыҡ, һауала ниндәйҙер әскелтем еҫ. Ҡарғалар ҡарҡылдай, һайыҫҡандар шыҡырҙай, күтөүе-күтөүе менән турғайҙар пырылдап оса. Уның аяҡ аҫтынан ваҡ ҡына йыландар, кеҫәрткеләр ҡаса, сиңерткәләр һикерә, әллә күпме күбәләк, бөжәк, ҡуңыҙ елпенә. Уның бала саҡ осоронда ауыл урамы ниндәй шау-шыу, шат һәм күңелле ауаздар, көлөү, ҡысҡырыу менән тулы була торғайны. Аттар кешнәй, һыйырҙар мөңрәй,

быҙауҙар баҡырыша, эттәр өрә, әтәстәр ҡысҡыра, тауыҡтар ҡыткылдай. Ә хәҙер? Хәҙер – ҡәбер тынлығы. Бер нисә йыл эсендә нindәй ҡот осҡос үҙгәреш!

«Ауыл» буйлап байтаҡ йөрөгәс, Рәссам әүәл өйҙәре ултырған урынға әйләнеп килде. Улы шунда ине.

– Нишләйбеҙ, Таһир? – тине, бағана янында тапанып байтаҡ һүҙһеҙ торғандан һуң. – Кире алып ҡайтабыҙмы? Клуб та, мәктәп тә юҡ бит. – Ул машинаның өҫкө багажнигында төрөүле ятҡан картинаһына ымланы.

– Алып ҡайтабыҙ инде, бында ҡайҙа ҡуяһың? Ауылдың иҫтәлеге булып, мастерскойыңда торор, – тип яуапланы улы. – Йә өйҙә...

Аптырап торғанда, күктән аяҡтары осона нур нөктәһе килеп төштө. Ғүмеренең иң ауыр, сетерекле мәлдәрендә ярҙам иткән был мөғжизәгә ул, һәр саҡ тәүгә шаһит булғандай, ғәжәп итә.

«Энем, картинаңды ҡалдыр ауылға. Һин уны бүләк итәм тип тәғәйен эшләнең бит», – ти Әсмә апаһы үҙенең баҫалҡы, әммә талапсан тауышы менән.

Нур-көлтә, мөрйәнән сыҡҡан төтөн һымаҡ, таралып юҡ та булды.

Рәссам йоҡоһонан уянғандай тертләп китте, шомланып тирә-яғына ҡараны.

– Юҡ, Таһир, ҡалдырайыҡ! – тине шунан өҙөп-өҙөп. Таһир аптыраны, шулай ҙа бер ни өндәшмәне. Картинаны өҫкө багажниктан сисеп алып, атаһына тоттorҙо. Рәссам уны полиэтиленға төрҙө, ваҡ ҡаҙаҡтар менән рамдың дүрт яғынан беркетеп сыҡты. Унан рамдың аҫҡы һәм өҫкө яғынан имән бағанаға ҡаҡты. Әлбиттә, ҡалын ғына булһа ла, был полиэтилен ғына картинаны мәңге һаҡлай алмай: ел өҙгөләр, ҡояш ашар, ямғыр сылатыр, мал-тыуар һөҙгөләр, тик күпме тора ала – шунса торасаҡ. Быяла менән ҡаплағанда килешер ине лә, тик ауыл юҡлығын кем уйлаған? Ишеткән-белгән булһа, Өфөнән үк быяла эсендә килтерер ине. Хәйер, белһә, килтереп тә йөрөтмәҫ ине.

Ауыр уй-кисерештәргә батып оҙаҡ баҫып торҙо ул ҡаҙаҡланған картинаһы янында. Эйе, тыуған төйәге юҡ, бынан ары бер ҡасан да булмаясаҡ, әммә ул уның макетын, план-һыҙмаһын эшләп ҡуйҙы, үҙе белгән, күргән, аралашҡан мәрхүм һәм иҫән ауылдаштарын бер ергә «йыйҙы». Ер аҫтында ятҡандарының рухы ҡәнәғәтлек кисерер, ер өҫтөндә йөрөгәндәре рәхмәт әйтер. Рәссам булараҡ, ошо ауыл кешеһе булараҡ, ул үҙенең бурысын үтәне. Хәйер, уны үтәп буламы икән? Юҡтыр. Сөнки ул бала сағынан алып бөгөнгө көнгә тиклем уларға мәңге бурыслы. Кеше иткәндәре өсөн...

Һыртҡа менделәр. Рәссам улына туҡтарға ҡушты. Ауыр ҡалҡынып, машинанан сыҡты. Унда, элекке ауыл урынында, Мәндем буйындағы бушлыҡта, картинаһы ағарып күренә. Уның тирә-яғында бер йән эйәһе лә юҡ. Йылға сөбөрләп кенә ағыуын белә, бейек тирәктәр ыңғыраша, ҡайҙандыр пәйҙә булған ҡара болот киҫәге уларҙың береһенең түбәһенә килеп ҡунған...

Ҡапыл картинаһы алдына бейектән әлеге нур көлтәһе килеп төштө лә уның тирә-яғын яҡтыртып ебәрҙе. Һөт кеүек аҡһыл томан араһынан Рәссам ауылдаштарының ҡыуаныслы йөҙ-ҡиәфәттәрен күргәндәй, шатлыҡлы ауаздарын ишеткәндәй булды. Уға ҡул да болғайҙар, хатта исеме менән ҡысҡыралар, саҡыралар. Нур көлтәһе, башҡа ваҡыттағы ише, тиҙ генә таралманы, йәйелеп, элекке ауыл урынын тотошлай һәм оҙаҡ яҡтыртып торҙо...

## ҒҮМЕР ҮӘ ҒИЛЕМ БАҪҠЫСТАРЫ

*(Академик Зиннур Нурғәлинға – 85 йәш)*

***Башҡорт ғилемендә милли булмышыбыҙҙы төрлө юҫыҡта: әҙәби фекер һәм әҙәби тел (дәүләт теле), социология һәм философия, сәйәсәт һәм мәҙәниәт, иң мөһиме, төрки халыҡтар этногенезын дөйөм күҙлектән өйрәнгән, ошо ҡатмарлы мәсьәләләрҙе заманалар ағышына ярашлы яҡтыртҡан ғалимдарыбыҙ, үкенескә, әллә ни күп түгел, әммә бар. Шуларҙың берәүһе һәм берәгәйе – З. Ә. Нурғәлин. Фән аҡһаҡалы бөгөн – филология фәндәре докторы, тарих фәндәре кандидаты, профессор, Башҡортостан Фәндәр академияһының почетлы академигы. Маҡтаулы исемдәргә, юғары наградаларға эйә. Егермеләп китап һәм монография, йөҙәрләгән ғилми һәм әҙәби тәнҡит мәҡәләләре авторы, республикабыҙҙың атҡаҙанған фән эшмәкәре, РФ-ның һәм БР-ҙың Яҙыусылар берлеге ағзаһы. Халыҡара Төрки академияһын ойоштороусыларҙың береһе лә, симпозиумдарҙа, конференцияларҙа ҡәрҙәш телле төрлө милләт ғалимдары араһында башҡорт менталитеты юҫығында йөкмәткеле докладтар һөйләүсе лә, Башҡортостан Мәҙәниәт фонды етәксеһе лә – ул. Редакцияның үтенесе буйынса БДУ профессоры ЗӘЙТҮНӘ ЯХЪЯ ҠЫҘЫ ШӘРИПОВА юбиляр уҙаман менән осрашты. Түбәндә – ғалим менән ғалимә әңгәмәһе.***

*– Һеҙҙең биографияғыҙ көтөлмәгән боролоштарға ифрат бай. Хеҙмәт юлын Әбйәлил районының Ташбулат ауылында ябай колхозсы – атбағар (конюх. –* ***Ред.****) үә һабансы булып башлайһығыҙ, сиҙәмселәр курсында комбайнерлыҡҡа уҡып ҡайтҡас, комсомол һабансылар бригадиры... Ун алты йәш тә тулмаған саҡта, әйеме?*

– Шулай, 1944 йылдың көҙө ине. Туңға баҫыу һөрөп йөрөгән ерҙән район үҙәге Асҡарға саҡырып алдылар ҙа күршеләге Байым ете йыллыҡ мәктәбендә башланғыс синыфтарҙы уҡытырға ҡуштылар... Ете йыллыҡ ҡына белемем менән. Баҙап ҡалманым мәгәр. Ситтән тороп Темәс педучилищеһын, артабан Магнитогорск, Силәбе пединституттарын тамамланым. Ун йыл дауамында төрлө мәктәптәрҙә уҡытырға, директор булырға, партия райкомында берауыҡ – пропагандист, йәнтөйәгемдә партком секретары ҡамытын кейергә лә насип итте.

*– Шулай тырышып- дәртләнеп эшләгәнегеҙ өсөн дә олораҡ быуын Һеҙҙең тормошто ярайһы яҡшы белә. Биографиягыҙҙың ҡайһы бер хәл-ваҡиғалары хатта легендаға әйләнеп киткән. Мәҫәлән, Темәскә уҡырға барыуығыҙ...*

– Хәҙер генә ул хәлдәрҙе һөйләү мәрәкә һымаҡ, асылда ҡыҙығы аҙ, ҡыҙғаныс ине шул... Һуғыштан һуңғы ҡыйынлыҡтар хәтергә мәңгегә уйылған. 1946 йыл... Темәс педучилищеһына уҡырға саҡырылғанмын. Ә өҫтә кейем үтә алама. Бер һалдат ағайҙың гимнастеркаһын, туфлийын һорап алып, сыҡтым юлға. Ялан аяҡ, ялан баш... Барғас ҡына кейермен тип, брезент туфлийҙы яурынға аҫып алғайным, һыңары юл буйында төшкән дә ҡалған. Нишләргә? Һыңар аяҡҡа йөн ойоҡ кейеп, таяҡҡа таянып барып керҙем училище бинаһына. Шуны мәҙәк итеп, килештереп-өҫтәп, үҙемә лә һөйләй хәҙер райондаштар. Икенсе йылына күрше ағай менән балыҡ һөҙөп, шуны һатып, салбар менән ботинкалыҡ аҡса йыйҙым. Һеҙ бая боролош тигәйнегеҙ. Ысынлап та, һәүетемсә эшләп йөрөгән ерҙән, йәнә көтөлмәгән боролош: 1953 йылда «Совет Башҡортостаны» гәзитенең Урал арьяғы зонаһына үҙ хәбәрсе вазифаһына тәғәйенләндем, сөнки матбуғатта ҡәләм сарларға керешкәйнем. Тәүҙә Баймаҡта йәшәнем ғаиләм менән, һуңынан гәзит аппаратына – Өфөгә алдылар. Баш ҡалала төпләнеү, әлбиттә, бөгөнгө заман рәүешенә сыныҡтырҙы ла инде. Әйткәндәй, әҙәби юҫыҡтағы тәүге мәҡәләм «Ағиҙел»дә баҫылды.

*– Һеҙҙең яҙмыш бары тик ижади хеҙмәттән һәм өҙлөкһөҙ уҡыуҙан туҡылған, тиергә мөмкин...*

– Ризамын. Карьера яһау өсөн түгел, үҙ теләгем менән дә, партия ҡушыуы буйынса ла... Белемемде камиллаштырырға тырыштым. Партия юғары мәктәбенең журналистика бүлеген тамамлағас, аспирантурала, Ижтимағи фәндәр академияһында шөғөлләндем, әйтәгүр, ҡайҙа ла әҙәбиәт, тарих менән ҡыҙыҡһыныуҙан төңөлмәнем.

*– Зиннур Әхмәҙи улы, Һеҙ оҙаҡ йылдар, хатта ки асылғаны бирле – 1968 йылдан алып Өфө дәүләт сәнғәт институтында (хәҙер академия) эшләйһегеҙ. Башта тиҫтә йыл ижтимағи фәндәр академияһын етәкләһәгеҙ, 1988 йылда вуздың ректоры итеп һайландығыҙ. 2000 йылдан бирле – гуманитар һәм социология фәндәре кафедраһы мөдире; йәмғеһе – ярты быуат*

*тиерлек ошонда. Педагогик эшмәкәрлегегеҙҙә иң иҫтә ҡалған ваҡиғаларҙы иҫләһәк?..*

– Күп инде ул. Шулай ҙа, юғары белемле, профессиональ ҡурайсылар әҙерләүҙе ныҡлап юлға һалдым, тип раҫлай алам. Хәҙер, ана, шағирса әйтһәк, ябай ҡурай донъяны урай. Бәғзе музыканттар, йырсылар, актерҙар, режиссерҙар яҙмышына ла ҡыҫылышым булды. Талантлы йәштәрҙе эҙләп республикабыҙ буйлап ҡына түгел, башҡорттар йәшәгән күрше өлкәләрҙә лә байтаҡ йөрөргә тура килде. 1989 йылда институтыбыҙҙа башҡорт традицион музыка ҡоралдары белгестәрен, тора-бара рәссамдар, драма режиссерҙары әҙерләү уҡыу планына өҫтәлгән, Рәсәйгә билдәле экспериментал ижади оҫтахана нығынған икән, ғүмерем бушҡа уҙмаған, хыялдарым елгә туҙмаған, тип маһайыуһыҙ әйтә аламдыр.

*– Хәтерҙә, һикһән йәшлек байрамығыҙҙа атаҡлы «Каруанһарай» төркөмө Һеҙҙе оло ғәм алдында «Сәхнә атайыбыҙ» тип ҡотлағайны....*

– Хаҡтары бар... 1988 йылдың аҙағында ректорлыҡҡа тәғәйенләнгәс тә, театр бүлегендә уҡып йөрөгән дүрт-биш егеткә, музыка ҡоралдары тоттороп һәм айырым бүлмә биреп, 8 Мартҡа концерт әҙерләргә ҡуштым. Бығаса гел сәхнәбеҙҙә ариялар, романстар һ.б. яңғырай торғайны. Был юлы егеттәр хатта педагогтарын аптыратырлыҡ, башҡорт йырҙарынан ғына төҙөлгән эстрада тамашаһын күрһәтте. Беҙгә иһә, төркөм ысын ансамбль булып ойошһон өсөн, инструменттар һәм автобус биреп, гастролдәргә рөхсәт юллап, егеттәрҙе артабанғы ижадҡа илһамландыраһы ғына ҡалды.

Ул осорҙа театр бүлеге педагогы Ғабдулла Ғиләжев менән йәнә бер һәйбәт аҙым яһаныҡ. Уның сығарылыш төркөмөнә ифрат талантлы йәштәр тупланғайны. Шуларҙы һис тараҡты килмәгәс, үҙҙәренән айырым йәштәр театры ойоштороға уйланыҡ. Мин көнө-төнө хөкүмәт юлын тапайым: бер йылға төркөмдө таратмаҫҡа рөхсәт юллап алдыҡ, тик улар үҙҙәренең йүнен үҙҙәре күрергә тейеш ине. Ректор булараҡ, ятаҡта түләүһеҙ йәшәттем, автобус биреп ҡуйҙым, һөҙөмтәлә гастролгә сығып, үҙҙәре көн итерлек аҡса «һуҡты» былар. Театрҙың баш режиссеры Ғабдулла Ғиләжев булырға тейеш ине, ниңәлер юғарынан икенсе кандидатураны хуп күрҙеләр.

*– Шундай мәшәҡәттәр менән мәшғүл булһағыҙ ҙа, әҙәбиәт-сәйәсәт өлкәһендә эҙләнеүгә лә форсат тапҡанһығыҙ. Мин иң әүәл 1992 йылда донъя күргән «Билдәлелек яҡтыһында» тигән китабығыҙҙы күҙ уңында тотам. Яңыса фекерләү, иҫке методологик принциптарҙан арынып, үҙегеҙ элек яҙған ҡайһы бер һығымталарығыҙға ла объектив баһа бирәһегеҙ был йыйынтыҡта. Репрессияға дусар ителгән яҙыусыларыбыҙҙың биографияларындағы билдәһеҙ сәхифәләрҙе ташҡа баҫыуҙан да туҡталғанығыҙ юҡ. Һуңғы осорҙа милли тел, дәүләт теле, әҙәби тел темалары буйынса айырыуса егәрлелек күрһәтәһегеҙ.*

– Баһағыҙға шөкөр. Быйыл ғына ике китабым сыҡты. «Дәүләт теле: цивилизациялы һәм милли беришлек» – «Китап» нәшриәтендә, ә «Башҡорт теле: дәүләт теленән әҙәби телгә» – «Ғилем»дә.

*– Һеҙҙең яҙғандар менән тәфсирле таныш булғанғалыр, Һеҙҙең оҙайлы ваҡыт архивта тәү сығанаҡтар менән эшләү, документтар аша уҙған*

*быуаттың 20 – 30-сы йылдарындағы шәхестәр яҙмышын, теге йәки был мәсьәләнең хәл ителешен тәрән белеү һөҙөмтәһелер, тип уйлайым.*

– Дөрөҫ тойомлайһығыҙ. Архив фондындағы тарихи документтарҙы ныҡышмалы өйрәнеүҙе дауам итәм. Айырыуса «Башҡорт әҙәби телен булдырыу һәм ғәмәлгә ашырыу» комиссияһының эш ҡағыҙҙарын, шуға ҡағылышлы барса ҡарар һәм күрһәтмәләрҙе ҡат-ҡат күҙҙән үткәрәм. Башҡортостанда яҙма әҙәби тел күренештәрен һәммә халыҡ мотлаҡ ҡулланырлыҡ нормалар рәүешенә килтереү, нормаларға закон төҫөн биреү, мәғлүм ки, ҙур бәхәс шарттарында бара. Ул хаҡта күп сурытырға мөмкин, хеҙмәттәремдә иһә был мәсьәлә ентекле яҡтыртыла. Тик әле өҫтәр инем: үҙем шул осорҙағы комиссия рәйесе Шәһит Хоҙайбирҙин позицияһын яҡлайым. Эйе, әҙәби тел һөйләшергә анһат, барлыҡ халыҡ аралашҡан тел үҙенсәлектәрен нормалаштырырға тейеш, бары ошо осраҡта ғына уны дөйөм халыҡ теле тип атарға ярай.

*– Был тема буйынса бәхәсләшергә лә булыр ине, тик әлеге әңгәмәнең сәбәбе башҡа, йәғни, юбилейса... Бөгөнгө көнгә әйләнеп ҡайтайыҡ әле. Ғиләһе шунда: «Зиннур Әхмәҙиевич – өлгөлө ғаилә башлығы» тигән данығыҙ әҙәби-мәҙәни мөхиттә күптән нығынған. Хәләлбикәгеҙ Ғәптиә ханымдың абруйы шулай ҙурмы?*

– Икебеҙҙеке лә (*йылмая)* самаһыҙ! 1947 йылда, ул Стәрлетамаҡтағы Уҡытыусылар институтын тамамлап Ташбулатҡа уҡытырға килгәс тә, бер күреүҙән күҙем төштө минең, ләкин өс йыл буйы бер-беребеҙҙе күҙләп йөрөнөк һәм 1950 йылдың ҡышында өйләнештек. Күҙ алдына килтерегеҙ: алтмыш дүртенсе йыл йәшәйбеҙ, апайығыҙҙың һис ҡасан да мине өйгә ҡайтҡанда йәмерәйеп ҡаршылағаны юҡ. Ҡайҙа ғына эшләһәм дә, ғаилә тылы ышаныслы: ике ул, бер ҡыҙ, бихисап ейән, ейәнсәрҙәр үҫтерәбеҙ бергәләп. Оҙаҡламай кинйә улым да хаҡлы ялға сыға. Шунан инде барыбыҙ ҙа пенсионер булабыҙ, тип көлөшөп тә алғылайбыҙ.

*– Зиннур Әхмәҙи улы, Һеҙ оҙайлы йылдар дауамында Башҡорт дәүләт университетындағы «РФ халыҡтары филологияһы (башҡорт теле һәм әҙәбиәте) өлкәһендә юғары квалификациялы белгестәр әҙерләүсе диссертацион совет ағзаһы булараҡ, башҡорт әҙәбиәте белгестәрен әҙерләүҙә бик тә әүҙем ҡатнашаһығыҙ. Тиҫтәләгән диссертанттың оппоненты булып, ғилми дәрәжә яҡлауына дәғүә иткән барлыҡ монографияларҙы ентекле уҡып, объектив баһалағас, оло ғилем юлына фатиха birҙегеҙ, бирәһегеҙ. Шулар исеменән дә Һеҙҙе һиммәтле юбилейығыҙ уңайынан ихлас ҡотларға рөхсәт итегеҙ. Әйтеүе генә анһат: алдағы йылда хеҙмәт стажығыҙ 70 һаны менән билдәләнә...*

– Рәхмәт. Ғөмүмән, башҡорт филологияһы хәҙерге осорҙа ҡанаттарын нығыраҡ йәйә. Киләсәктә лә яуланған бейеклектәрҙән тайпылмаһаҡ ине. Һүҙ ыңғайында «Ағиҙел» журналы уҡыусыларына тик яҡшылыҡтар ғына теләйем.

# Иңдәрендә ине ил хәстәре

**ОЧЕРК**

*(Партия һәм дәүләттең күренекле эшмәкәре Фәйзрахман Заһафурановтың тыуыуына – 100 йыл)*



*Фәйзрахман Заһафуран улы Заһафуранов 1913 йылдың 10 октябрендә хәҙерге Мәсетле районының Һөләймән ауылында тыуа. Вафаты – 1975 йылдың 5 сентябре, Өфө. Совет-Фин һәм Бөйөк Ватан һуғыштарында ҡатнаша. 1939 йылдан ВКП(б) ағзаһы. Башҡортостан юғары коммунистик ауыл хужалығы мәктәбен тамамлай. Башҡортостан коммунистик юғары уҡыу йортонда (1935 – 1937) уҡыта, Стәрлетамаҡ мәҙәни-ағартыу мәктәбе (1937 – 1940), Темәс педагогия училищеһы (1943 – 1945) директоры, 1945 – 1950 йылдарҙа КПСС-тың Баймаҡ район комитетының бүлек мөдире, секретары, беренсе секретары булып эшләй (1945 – 1950), 1940 – 1967 йылдарҙа Башҡорт АССР-ы Юғары Советы Президиумы Рәйесе. СССР Юғары Советы (1955 – 1959, 1963 – 1967), БАССР Юғары Советы (1951 – 1967) депутаты. Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ (1957, 1963), «Почет Билдәһе» (1949), Ҡыҙыл Йондоҙ (1940) ордендары менән наградлана.*

...Беҙ, Һөләймән ауылының бер төркөм егеттәре, Әй буйында йылым менән балыҡ һөҙөп йөрөйбөҙ. Ауылдан алыҫ ҡына «Зауыт ҡаштауы» тип аталған төбәктә балыҡ шәп эләгә. Етмәһә, йылымдың да еллеһен тапҡанбыҙ. Үҙе балыҡ тотмаһа ла, беҙҙең кеүек йәш-елкенсәккә биреп, «гәрнис»ен алып торған Ғафый ҡарттың 50 метрлыҡ йылымы ине был. Шуға ла балыҡ өләшкәндә: «Быныһы – һиңә, быныһы – йылымға» тигән лаҡап ауылда әле лә онотолмаған. Көн матур, аяҙ июль көгендә ҡояш йылмая, яҡындағы болонда салғы тауыштары сыңлай, арьяҡ талында ҡоштар сутылдай, яр аҫтына теҙелгән ояларҙы тирәләй ҡарлуғастар өйөрөлә.

Ҡапыл беҙ йылым менән сығасаҡ ташлы утрауға ҡаршы яр башына ҡара «Волга» килеп туҡтаны. Беҙ шыр ебәрҙек, сөнки йылым менән балыҡ тоторға ярамағанлығын яҡшы беләбеҙ.

– Ҡурҡмағыҙ, егеттәр, ҡурҡмағыҙ! – Машинаның асыҡ тәҙрәһенән Ғафый

ҡарттың яңғырауыҡлы тауышы ишетелде. Ул кабинаның ишеген асып, йәшел үләнгә төштө. Артынан ҡара сәстәренең уртаһынан ғына буйҙан-буйға сал йүгергән, урта буйлы, ҡалын ғына кәүҙәле, мөләйем йөҙлө, илленән уҙған ят ағай күренде һәм таяғына таянып, сатанлабыраҡ беҙҙең яҡҡа атланы. Беҙ ҙә, бәләнең баш осонан үтеп китеүен күреп, иркен тын алдыҡ һәм йылымды ярға тарттыҡ.

– Оһо, – тине ят ағай, һикерешеп ятҡан балыҡтарға төбәлеп. – Бәрҙеһе лә, борожо ла, ажауы ла, алабуғаһы ла бар бит. Былдай балыҡ Әйҙә генә булалыр ул!

– Ә һеҙ, ағай, үҙегеҙ ҡайҙан һуң? – тип һорай һалды кемдер, батырсылығы етеп.

– Мин дә, һеҙҙең һымаҡ, Әй һыуын эсеп үҫкән Һөләймән егете. Зағафуранов булам.

– Зағафуранов! – Беҙ өнһөҙ ҡалдыҡ. Уның беҙҙең ауылдан булыуын, Башҡорт АССР-ы Юғары Советы Президиумы Рәйесе икәнлеген күптән белһәк тә, тәүләп күрәбеҙ.

– Йә, ауылдаштар, – тип башланы Фәйзрахман ағай, беҙ ике биҙрәгә яҡын балыҡты яр башындағы йәшел сиҙәм өҫтөнә сығарып түккәс, – ҡайһығыҙ кем малайы була? Һеҙ йәштәрҙе мин әтейегеҙ буйынса ғына белермен инде ул.

Һәр ҡайһыбыҙ кем нәҫеленән, кем улы булыуы тураһында теҙеп алып киттек. Фәйзрахман ағай иһә тыныс ҡына тыңлап, беҙҙең атайҙарға үҙенсә баһа биреп ултырҙы. Ул арала усаҡ яғылды, балыҡ таҙартылып, ҡаҙанға һалынды. Үҙ-ара йылы әңгәмә оҙаҡ ҡына дауам итте, һәм беҙ балыҡ һурпаһын һемереп, йәнә йылымға тотондоҡ. Үкенескә ҡаршы, ауылыбыҙҙың арҙаҡлы ир-азаматын бүтән күрергә насип булманы миңә. Ул 1975 йылдың 5 сентябрендә, мин «Совет Башҡортостаны» гәзитенең Учалы яҡтарындағы үҙ хәбәрсеһе булып эшләп йөрөгәндә, донъя ҡуя. Үҙе үлһә лә, яҡты һәм үлән баҫмаҫ эҙ ҡалдырып китте ул.

Һөләймән ауылының Әй ярына терәлеп ултырған мәсетендә күп йылдар ислам диненә тоғро хеҙмәт иткән Насибулла мәзиндең Әхмәҙулла һәм Фәйзулла исемле улдары була. Әхмәҙулланан – Мостафа, Мөғәфә, Мортаза, Фәйзулланан – Зағафуран, унан Фәйзрахман донъяға килә. Әммә уның бала сағы фәҡирлектә үтә: биш йәшендә атайһыҙ, туғыҙ йәшендә әсәйһеҙ тороп ҡала. Ярай әле, малайҙы ике йыл алда ғына Мәләкәс ауылындағы Ҡорбанғәлегә икенсе бисәлеккә барған Зөләйха апаһы һыйындыра. Ләкин унда ла, 1921 йылғы аслыҡтан һуң, тормош шәптән түгел. Армиянан әле генә ҡайтҡан Мөғәфә ағаһы хәл белергә тип Мәләкәскә килә һәм оло мейес алдында йыртыҡ күлдәк-ыштан кейеп, әсе ҡатыҡ ашап ултырған, күҙҙәре йәшкә батҡан ябыҡ сырайлы Фәйзрахманды күреп, йөрәге әрней ҙә, апаһының ай-вайына ҡуймай, алып ҡайтып китә.

Ике йыл тигәндә Фәйзрахман, һуңлап булһа ла, мәсеттәге мәктәпкә йөрөй башлай. Дүрт йыл уҡый ул бында. Уҡытыусы Абдулла Таһиров, малайҙың зирәклеген, тырышлығын күреп, уға төп уҡыу программаһынан тыш та һабаҡ бирә, үҙ ҡанаты аҫтына ала. Фәйзрахман бигерәк тә математика дәрестәрен үҙ итә, мәктәпте тамамлағас, Благовещенск ҡалаһындағы хисапсылар курсына барып керә. Артабан ул Дыуан районының Иҫке Хәлил ауылындағы сельпола, Мәсетле районының кустпомсоюзында хисапсы булып эшләй. Уҡыуға көслө теләк инде егет ҡорона кереп, танауы еҫ белә башлаған Фәйзрахманға тынғы бирмәй. Тик ҡайһылай итеп Өфөгә китергә? Эшләп алған аҡсаһы ашарға, кейенергә лә етмәй, осон осҡа саҡ ялғап тора. Әллә хәллерәк йәшәгән Әхмәҙулла бабаһына барып ҡарарғамы?

– Ауыр һорау ҡуйҙың бит әле, улым, – ти Әхмәҙулла ҡарт, уны тыңлап бөтөргәс. – Бына Мортаза ла (Мортаза Әхмәҙуллин һуңынан хәрби училище тамамлай. Танкист. 1941 йылдың 7 ноябрендә Мәскәүҙә хәрби парадта ҡатнаша. Һуғыштан һуң Өфө ҡалаһының Орджоникидзе районы хәрби комиссары. «Славные сыны Башкирии» тигән 4 томлыҡ китаптың хәрби консультанты, полковник – **Р. Х.**), хәрби училищеға барам, тип теңкәгә тейә. – Ул бер аҙ уйланып ултырҙы ла һүҙен дауам итте: – Әллә, тим, ҡышлау үгеҙен һуйып һатырғамы икән?

Шулай итәләр, һәм бер айҙан ВЛКСМ-дың Мәсетле район комитеты йүнәлтмәһе менән ике туған егеттәр Өфөгә килеп төшә. Зағафуранов коммунистик ауыл хужалығы мәктәбенең комсомол бүлексәһенә урынлаша, ә Әхмәҙуллин Ульяновск танк хәрби училищеһына китә.

Уртаса буйлы, төҫкә сибәр, сөм-ҡара сәсле, һәр саҡ ыҫпай кейенеп йөрөгән Фәйзрахман белемгә ынтылышы, яҡшы уҡыуы, әүҙем йәмәғәтсе булыуы менән башҡа студенттарҙан айырылып тора, һәм, мәктәпте тамамлау менән, уны уҡытырға ҡалдыралар. Ләкин ил өҫтөнә ҡара һөрөм булып ҡанлы 1937 йыл яҡынлаша. Көндәрҙең береһендә Фәйзрахманды директор Буранчин саҡыртып ала.

– Илдә лә, республикала ла хәл ҡатмарлаша бара, – тип уратыбыраҡ башлай ул һүҙен. – «Халыҡ дошмандары» ишәйеп китте. Хаҡмы, нахаҡмы икәнен ҡарап тормайҙар, алалар ҙа китәләр. Белеп булмай, уларҙың беҙгә лә килеп етеүе ихтимал. Телең бигерәк тик тормай шул үҙендең: кем булыуына ҡарамай, тотаһың да туранан һалдыраһың. Эте бар, бете бар, тигәндәй, берәйһе өҫтөңдән яҙҙы ебәрҙе. Ярлы малайы тип тормаҫтар. Бәләнән баш-аяҡ. Әллә шау-шыу баҫылғансы Стәрлетамаҡта яңы ғына асылған мәҙәни-ағартыу училищеһына китеп уҡытып тораһыңмы? Ризамы?

Стена буйына теҙелгән ултырғыстарҙың береһенә арҡаһын терәп ултырған Фәйзрахман сәстәрен артҡа һыпырҙы ла борсолған йөҙөн үҙен ҡурсаларға тырышҡан директорға борҙо.

– Риза булмай ҡара, – тине ул уйсан ғына. – Тик шуныһы ғәжәп: беҙҙә лә хаиндар табылыр микән?

– Осоро шундай: аптырарға кәрәкмәй хәҙер.

– Ҡасан юлға?

– Иртәгә үк. Бына Мәҙәниәт министрлығы биргән йүнәлтмә.

Икенсе көндө егет яңы ғына өйләнгән йәш ҡатыны, шул уҡ комвуздың һуңғы курсында уҡып йөрөгән Баймаҡ ҡыҙы Маһикамалды етәкләй ҙә вокзалға төшә. Тәүге йылда ул Стәрлетамаҡ мәҙәни-ағартыу училищеһының комсомол ойошмаһы секретары булып эшләй, һуңынан уҡытырға күсә, артабан училище директоры итеп тәғәйенләнә. Йыл ярымда ябай уҡытыусынан директор дәрәжәһенә еткәс, Зағафуранов Стәрлетамаҡта насар эшләмәгән.

«Көндәрҙең береһендә, – тип хәтерләй ул йылдарҙа Стәрлелә уҡып йөрөгән яҡташыбыҙ, Абдулла ауылы егете Нурый Мирсаев, – директор беҙҙе коридорға теҙҙе лә уҡыу өсөн түләү кәрәклеге тураһында хөкүмәт ҡарарын уҡып ишеттерҙе. Беҙҙең күҙҙәр дүрт булды. Нишләргә хәҙер? Уҡырға түләү түгел, унда-бында эш табып, йәнде көскә аҫыраған көн. Минең кеүек үкһеҙҙәр өсөн ул ифрат ауыр. Шулай башты баҫып тәҙрә төбөндә торғанда, Зағафуранов саҡыртып алды.

– Мин дә һинең һымаҡ етем үҫтем, – тине ул, арҡамдан ҡағып. –Ләкин нишләйем, хөкүмәт ҡарарын үтәргә кәрәк. Хәлеңде лә аңлайым. Беҙ былай эшләйек:

уҡыуың тамамланырға күп ҡалмаған бит, шуға, бөтә яуаплылыҡты үҙ өҫтөмә алып, һиңә аттестат тоттороп ебәрәм (ул йылдарҙа диплом тигән нәмә юҡ ине). Тик ҡара, кешегә һөйләнеп йөрөмә! Ҡайтҡас уҡ РОНО-ға ин. Уның мөдире минең яҡташ. Эш табып бирер. Бына уға хат та яҙҙым.

Тиҙҙән мин Ҡорғат ете йыллыҡ мәктәбендә йыр дәрестәре алып бара башланым, пионер вожатыйы вазифаһын да үтәнем».

Йәше лә һалдат хеҙмәтенән үтеп барған Фәйзрахманды көтмәгәндә Ҡыҙыл Армия сафына саҡыралар һәм уҡсы полктың комсомол комитеты секретары итеп һайлайҙар. Шул килеш 1940 йылдың ғинуарында аҡ финдар менән башланған һуғышҡа барып керә һәм шунда күрһәткән батырлығы өсөн тәүге хәрби награда – Ҡыҙыл Йондоҙ ордены менән бүләкләнә.

Хәҙер һүҙҙе Фәйзрахман Зағафурановтың оло ҡыҙы Флүрәгә бирәйек. Ул медицина фәндәре кандидаты, 1963 йылда Башҡортостан медицина институтын тамамлағас, 22 йыл Өфө Күҙ ауырыуҙары ғилми-тикшеренеү институтында эшләй. Аҙаҡ Башҡорт дәүләт университетының кеше эшмәкәрлегенең хәүефһеҙлеген тәьмин итеү һәм тирә-яҡ мөхитте һаҡлау кафедраһында уҡыта.

– Фин кампанияһы бөткәс, 1940 йылдың майында, әтейем Стәрлетамаҡҡа ҡайтып төштө, – тип хәтер ебен тағата Флүрә Зағафуранова. – Электән дә һомғол кәүҙәле, киң яурынлы әтейем хәрби формала бейегерәк, ҡалҡыуыраҡ булып күренде. Баҫҡан урынымда күҙҙәремде таҫырайтып ҡаттым да ҡалдым, ә ул мине күтәреп алды ла иҙән буйлап бейене лә китте. Үҙе бейей, үҙе һуғышта отоп ҡайтҡан «Три танкиста» йырын йырлай. Эй рәхәт миңә уның йылы ҡосағында. Ҡысҡырып көләм, сәпәкәй итәм. Әсәйем иһә ниңәлер күҙ йәштәрен һөртә. Өйҙә күп торманы әтейем, ун көн тигәндә йәнә армияға китеп барҙы.

Бөйөк Ватан һуғышын Фәйзрахман Зағафуранов Одесса хәрби округының 173-сө дивизияһы 223-сө полкында ВЛКСМ комитеты секретары сифатында ҡаршылай. Фашистарҙың көслө баҫымы аҫтында ҙур юғалтыуҙарҙы үҙ елкәһендә татый ул. Мәскәү янындағы алыштарҙа кәрәген алған немецтар 1942 йыл баштарында һөжүмде туҡтата, фронт тын алып ҡала. Ошонан файҙаланып, Зағафурановты Горький хәрби-сәйәси училищеһының ҡыҫҡа ваҡытлы курсына ебәрәләр. Майҙа уны тамамлай һәм Дон менән Сталинград араһында һуғышҡан 169-сы танк бригадаһының 370-се батальонына хәрби комиссар итеп тәғәйенләнә.

Генерал-лейтенант Андрей Еременко етәкселегендәге Сталинград фронтының уртаһында ҡайнай уларҙың танк бригадаһы. 1942 йылдың 19 ноябрендә Көньяҡ-Көнбайыш һәм Дон фронттарының көслө контрһөжүме башлана. Икенсе көн уларға сентябрҙән ҡамауҙа һуғышып, Волга ярындағы ҡаланы дошманға бирмәгән Сталинград фронты ғәскәрҙәре лә ҡушыла. 23 ноябрҙә Калач-Советский районында Көньяҡ-Көнбайыш һәм Сталинград фронттары осраша, дошмандың 330 мең кешелек 22 дивизияһы ҡамауҙа ҡала. Алыштар тағы ла киҫкенләшә, сөнки көн һайын тәрән ҡар йырып алға барырға, ҡамау ҡулсаһын ҡыҫырға кәрәк, ә уны тик «Т-34» танкылары ғына булдыра. Рота политругы, өлкән лейтенант Фәйзрахман Зағафурановҡа ла эш етерлек. Әле бер взводҡа, әле икенсеһенә саба ул, егеттәрҙең рухын күтәреү өсөн ҡулынан килгәндең бөтәһен дә эшләргә тырыша: фронт хәбәрҙәре менән таныштыра, айырым яугирҙарҙың ҡаһарманлыҡтары тураһында һөйләй, ил һәм донъя яңылыҡтарын еткерә. Теге йәки был танкист яраланып госпиталгә оҙатылһа, танк рычагтары артына ултырған, пушка, пулеметтарға тотонған саҡтары ла аҙ булмай.

1943 йылдың 9 ғинуарында уның фронттағы һуңғы алышы була. Дон далаларына һибелгән сираттағы станицаны алыу атакаһы һүнеп ҡала. Алда барған

рота командирының да танкыһы яндырыла. Быны күҙәтеп торған Зағафуранов резервтағы һуңғы танк башняһына һикереп менде лә:

– Күрмәйһегеҙме, командирҙың машинаһы яна! – тип люкты асып ҡысҡырҙы. – Алға! Командирҙы ҡотҡарырға!

Ләкин экипаж ашыҡманы.

– Рота командирының бойороғо булмайынса бер ҡайҙа ла бармайбыҙ! – тип ҡырт киҫте танк командиры.

Бындай һөмһөҙлөк тыныс холоҡло, һалдаттар менән иркен һәм ябай һөйләшеүсе Зағафурановты сығырынан сығарҙы.

– Мин һиңә, рота командирының танкыһы яна, тип әйттем! – тип екереп ебәрҙе ул, кобураһынан пистолетын сығарып, командирҙың елкәһенә терәне. – Хәҙер үк машинаңды бор! Юғиһә...

Шунда уҡ танк водителе – рычагтарға, наводчик – пушкаға, радист – рацияһына, уҡсы пулеметына тотондо, һәм «Т-34» танкыһы, айыуҙай үкереп, Дон ярҙарында үҫкән ҡыуаҡтарҙы төбө-тамыры менән аҡтарып, боҙ ҡатыш ҡар киҫәктәрен сәсрәтә-сәсрәтә алға ырғыны. Танк башняһының тотҡаһына саҡ тотоноп барған Фәйзрахман: «Ниңә малай-шалай һымаҡ килеп мендем әле? – тип ыжғыр елдән битен тун яғаһы менән ҡаплап, үкенеп ҡуйҙы. – Үҙҙәрен генә лә ебәрергә мөмкин ине бит». Ләкин һуң ине, һәм танк алға барыуын дауам итте.

Ҡапыл яҡында ғына снаряд шартланы, һәм уның көслө тулҡыны Зағафурановты танк өҫтөнән йолҡоп алды ла ҡалын көрт өҫтөнә атып бәрҙе. Тәкмәсләп барып төшкән комиссар байтаҡ өнһөҙ ята һәм кискә табан ғына аңына килә.

– Суҡынмыштар, – тип эстән генә әрләне ул танкистарҙы, – әллә мине күрмәнеләрме, әллә күрмәмешкә һалыштылармы? Кем асыҡлай уны хәҙер?

Ул, аяғына баҫырға тип, ҡуҙғала ғына башлағайны, һул аяғының сәнсеп алыуына ҡысҡырып ебәрҙе лә йәнә көрткә сумды. Тик шунда ғына Фәйзрахман ҡан һарҡып торған һул сирағының салбар аша һерәйеп тороуын күреп ҡалды. Күрәһең, снаряд ярсығы сираҡ һөйәген аҡтарып бәргән, ләкин аяҡ бөтөнләй өҙөлмәгәйне әле. Ул ҡалтыранған ҡулдары менән салбар ҡайышын сисеп алды ла, яраһын сепрәк менән ҡушып бәйләгәс, яҡындағы таш һарайға шыуышты.

Иртәгәһенә төштән һуң ғына һарай эргәһенән үтеп барыусы икенсе часть һалдаттары, ыңғырашҡан тауышты ишетеп, яралы Зағафурановты табып алалар һәм госпиталгә оҙаталар. Табиптар снаряд ярсығы сәрпәкләгән сираҡты шунда уҡ киҫеп ташлай. Әммә оҙаҡ ваҡыт медицина ярҙамы күрмәй ҡан эсендә ятҡан яралы комиссарҙа гангрена башланғас, операция яһап, аяҡты тубыҡтан өҫтәрәк киҫеп алалар.

Февраль баштарында Фәйзрахманды поезд менән Магнитогорскиҙағы эвакуация госпиталенә алып китәләр. Уның өсөн ауыр, ғазаплы көндәр башлана. Юҡ, тән яраһынан һыҡтанмай ул. Яра ни булыр ҙа бөтәшер, ә бына күңел яраһынан нисек ҡотолорға? Һыңар аяҡлы һайыҫҡан һымаҡ һикергеләп йөрөгән ғәрип һалдаттың хәҙер кемгә кәрәге бар? Маһикамал шундай йәш, матур, сибәр. Үҙе кеүекте табыр әле, ә миңә ғәриптәр йортона юлланырға ғына ҡала. Әллә бөтөнләй күҙ көйөгө булып йөрөмәҫкәме? Шундай ауыр уйҙар борсой Фәйзрахманды, һәм ул үҙенең Магнитогорскиҙа ятыуын да, ҡайһы ере яраланыуын да һуғыш ваҡытында Стәрлетамаҡтан Иҫке Сибай ауылына күсеп килгән ғаиләһенә хәбәр итмәй, хаттарында госпиталдең номерын ғына күрһәтә.

Бер көн Молотов исемендәге колхоз парторгы Маһикамал Зағафурановаңы саҡыртып ала.

– Бына почтальон ниндәйҙер сәйер хат ҡалдырып китте, – тип ҡаршылай парторг йәш ҡатынды. – Адресы Магнитогорскиҙа ятҡан Фәйзрахмандыҡы, тик яҙыуы уныҡы түгел. Әллә бер-бер хәл булдымы икән?

Мәһикамалдың йөрәге «жыу» итеп ҡалды һәм ул хатты асып, күҙ йүгертте. «Мин ирегеҙ дауаланып ятҡан госпиталдың баш врачы булам, – тип яҙылғайны унда. – Өлкән лейтенанттың Дон фронтында һул аяғын снаряд ярсығы телеп үтә, һәм ампутация яһайҙар. Ләкин гангрена башлана. Беҙгә килтергәс, йәнә операция яһарға тура килде. Хәҙер яраһы уңалып килә. Тик шуныһы, Мәһикамал Лотфулловна: Зағафуранов өйөнә ҡайтырға теләмәй, минең кемгә кәрәгем бар, тип зарлана. Ирегеҙҙе алып ҡайтырға теләһәгеҙ, яҡын көндәрҙә килеп сығығыҙ. Тик тәүҙә үҙемә керегеҙ, сөнки Фәйзрахман Зағафуранов был хат тураһында белмәй».

Икенсе көн Мәһикамал таң һарыһы менән колхоз рәйесе Ибраһим Уйылданов егеп йөрөгән ат менән кашауайға етеһе менән барған ҡыҙы Флүрәне толопҡа төрөп ултыртты ла, ҡырпаҡ ҡарҙы ярып, Иҫке Сибайҙан 40 саҡрымда ятҡан Магнитогорскиға юлланды. Сана еңел, ат та шәп, башын алға һоноп, дуғаһындағы еҙ ҡыңғырауҙы сыңлатып, малҡай иҫкән елгә ҡаршы елә генә. Күңеле лә шатлыҡ менән тулы Мәһикамалдың бит алмалары тағы ла алһыуланып, күпереп торған ирендәре бер аҙ асылған, күҙҙәренән өмөт саткылары сәсрәп торған йәш ҡатын үҙе лә бына-бына ҡанаттарын йәйеп, осоп китер төҫлө. Әйтерһең, һуғыш ҡойононда зәғифләнгән ғәрип ирен ҡаршыларға түгел, ә туйға китеп бара. Йәнгел ауылында төн үткәреп, төш ауғансы госпиталь ҡапҡаһы төбөнә килеп тә туҡтаны.

Флүрә Зағафуранова иҫтәлектәренән: «Оҙон юлдан арып килгәнгәме, бесәнгә күмелеп йоҡлап киткәнмен. Күҙҙәремде асһам, алдымда ҡултыҡ таяғына таянған, йөҙөн һаҡал-мыйыҡ баҫҡан, арҡаһына тоҡсайға ҡуша бәйләнгән аяҡҡа оҡшаш ниндәйҙер әйбер аҫҡан ят ир тора. Ул, күҙҙәрен сылт-сылт йомоп, нимәлер әйтергә теләй, ләкин һүҙҙәрен ишетмәйем. Эргәһендәге әсәйем:

– Бына был әтейең була, – ти, шат йылмайып.

Күҙ алдыма өс йыл элек кенә фин һуғышынан орден тағып ҡайтҡан, киң күкрәкле, төҙ һынлы, гимнастеркаһына портупеялы ҡайыш быуған офицер килеп баҫты. Ул мине көслө ҡулдары менән күтәреп, иҙән буйлап бейеп киткәйне. Ә был – бөтөнләй икенсе кеше.

– Юҡ, был минең әтейем түгел! – тип сәрелдәп илап ебәргәнемде һиҙмәй ҙә ҡалдым. – Әтейемдең аяғы икәү ине лә баһа.

Атайым, күҙҙәренә тығылған йәштәрен һөртөп, ситкә боролдо.

– Ул саҡта һинең әтейең булмаясаҡ! – Әсәйем ҡапыл ҡырыҫланып китте. – Башҡаларҙыҡы булыр, ә һинеке – юҡ.

Тик аҙаҡ ҡайтып, мине мунсала йыуындырып, аяҡтарыма һәҙәпле туфлиҙар кейҙергәндә генә мин уның йомшаҡ ҡулдарын тойҙом, һәм уға булған ихтирамым, һөйөүем тағы ла арта төштө. Шуныһын да әйтәйем: әтейем бер ҡасан да һуғыш тураһында һөйләргә, һуғыш тураһындағы фильмдарҙы ҡарарға яратманы. Иҫке Сибайҙан Темәскә күсеп, Башҡорт педагогия техникумында директор булып эшләгән осорҙа ул йыш ҡына Өфөнән, арҡаһына йөкмәп, уҡыусылар өсөн дәреслектәр, дәфтәрҙәр, ә миңә печенье, перәниктәр алып ҡайтыр ине».

Темәстә ни бары йыл ярым ғына эшләп ҡала Зағафуранов: 1945 йылдың март урталарында КПСС-тың Баймаҡ район комитетының беренсе секретары Әхәт Биктимеров үҙенә саҡыртып ала.

– Ишетеп беләм, – тине ул, Зағафурановтың таяҡҡа таянған протез аяғын алға уратыбыраҡ ташлап, ишекте шар асып килеп кереүен күреп, ике ҡуллап барып күреште лә өҫтәл янына ишараланы. – Темәстә ярайһы ғына тәртип урынлаштырғанһың икән. Халыҡ та, техникум коллективы ла маҡтау һүҙҙәре генә әйтә һинең турала..

– Алдан ҡысҡырған кәкүктең башы тиҙ ауырта, тиҙәр, Әхәт Нуретдинович. – Фәйзрахман баҫалҡы ғына йылмайып ҡуйҙы. – Ашыҡмай торайыҡ әле.

– Саҡырыуымдың сәбәбе шул. – Биктимеров рәсми һүҙгә күсте. – Райком һеҙҙе, Фәйзрахман Зағафуранович, пропаганда һәм агитация бүлеге мөдире вазифаһына тәҡдим итмәксе. Шуға нисек ҡарайһығыҙ?

– Әлләсе. – Көтөлмәгән хәбәрҙән Фәйзрахман ҡалҡынып ҡуйҙы. – Бында килеүемдән ниндәй файҙа булыр икән? Район ҙур, ә мин сатан.. Йыш йөрөргә тура киләсәк бит.

– Мин һиңә, командировкаларға сыҡ, тип әйтмәйем. Райкомдың үҙендә лә эш баштан ашҡан. Урындарға сығам тиһәң, иҫке булһа ла машинабыҙ ҙа бар.

«Аҡһаҡ ултырмаҫ, һаҡау тик тормаҫ» тигәндәй, юҡ шул, Баймаҡҡа килгәс, яңы бүлек мөдире телефонға йәбешеп кенә урындарға күрһәтмә биреп ултырманы, күберәк халыҡ араһында булды, колхоз-совхоздарға йыш сыҡты, фронтовиктар менән осрашып һөйләште, ғаилә хәлдәрен һорашты, тол ҡалған һалдат ҡатындарына ярҙам итте, агитмасса эшен яйға һалыу, партия уҡыуҙарын ойоштороу, хөкүмәт ҡарарҙарын аңлатыу менән мәш килде. Бәлки, ана шул ябайлығы, егәрлелеге, һәр кем менән уртаҡ тел таба белеү маһирлығы арҡаһындалыр ҙа, Фәйзрахман Зағафуранов бер йылдан райкомдың кадрҙар буйынса секретары, 1948 йылда, Биктимеров пенсияға киткәс, беренсе секретарь итеп һайлана. Йәнә бер йылдан ул ВКП(б) өлкә комитеты ағзаһы, ә 1950 йылдың 12 мартындағы һайлауҙарҙа СССР Юғары Советының Милләттәр Советына депутат итеп һайлана. Өлкә комитет ағзаһы, депутат булыу шөһрәтле, әлбиттә. Тимәк, хеҙмәтеңде баһалайҙар, хөрмәт, ышаныс күрһәтәләр, ләкин ошо абруйҙың нисек яуланғанын Фәйзрахмандың үҙенән башҡа кем белгән дә кем татыған? Бөйөк Ватан һуғышы тамамланыуға бер нисә йыл үтһә лә, халыҡ икмәккә туйына алмай, өҫтөндә шул уҡ йөҙ ямаулы кейем, өйҙәр һалам түбәле, хужалыҡтарҙа бөтә тартыу көсө ат та үгеҙ. Шуға ла райком секретары, көн-төн тип тормай, районды бер осонан икенсеһенә сапты. Үҙенә лә, шоферы Нәжметдин Ишбаевҡа ла тынғылыҡ юҡ. Иҫке генә «Победа» машинаһын ҡабыҙалар ҙа юлға сығалар. Ҡайҙалыр иген тапшырыу планы өҙәлгән, малдар күтәртә башлаған, ҡайҙалыр енәйәт ҡылынған, трактор ватылған – бөтәһе өсөн дә райком секретары яуап бирә.

Бигерәк тә Сибай баҡыр иретеү заводының эше борсой уны. Һуғыш йылдарында ашыҡ-бошоҡ ҡына һалынған был предприятие яңы талаптарға яуап бирмәй, ә ил һаман күберәк баҡыр һорай. Заводты киңәйтмәй, яңы рудниктар, шахталар асмай, Магнитогорскиҙан Сибайға тимер юл, юғары вольтлы электр линиялары һуҙмай тороп, дәүләт заказы бер ҡасан да үтәлмәйәсәк. Һәм бына, КПСС-тың Баймаҡ район комитеты юллауы буйынса, СССР Министрҙар Советының 1943 йылдың 25 мартында, ниһайәт, Башҡортостан баҡыр-көкөрт комбинатын төҙөү башлана, бер үк ваҡытта «Башмедьстрой» төҙөлөш тресы ла ойошторола. Тимер юл да, электр линиялары ла нәҡ ошо йылдарҙа сафҡа инә.

– Баймаҡтарҙы байытыуға аҙ көс һалманың, яҡташ, – тип һүҙ ҡатты уға КПСС Өлкә комитетының беренсе секретары Сабир Ваһапов, Баймаҡҡа килгәнендә. –

Давай, республика өсөн дә эшләп ал әле! Юғары Совет Президиумы Рәйесе Ғилман Ниғмәтйәнов пенсияға китә, урынына кеше эҙләйбеҙ, һинән дә ҡулайлыһы юҡ һымаҡ.

– Ҡуйсы, Сабир Әхмәтйәнович. – Фәйзрахман ҡырт киҫмәксе булып ауыҙын асҡайны, ләкин, файҙаһы булмаҫын аңлап, телен тешләне. – Минең бит юғары белемем дә юҡ. Икенсенән, Ваһапов үҙ янына яҡташтарын йыя, тигән һүҙе булмаҫмы?

– Ул хаҡта ла уйланыҡ. – Сабир Ваһапов сабыр ғына аңлата башланы. – Килеп эш күрһәтһәң, Үҙәк Комитет эргәһендәге Юғары партия мәктәбенең ситтән тороп уҡыу бүлегенә инерһең. Икенсе һорауыңа килгәндә, уныһы проблема түгел. Беҙ кешенең ҡайһы төбәктән сығыуына ҡарап түгел, ә һәләтенә ҡарап алабыҙ. Әлбиттә, төп милләт вәкиле булыуы ла мөһим. Үҙәк Комитеттың күрһәтмәһе шундай. Һөйләүен һөйләрҙәр инде ул. Тел һөйәкһеҙ бит.

Йәй урталарында БАССР-ҙың Юғары Советы сессияһы 36 йәшлек Фәйзрахман Зағафурановты Президиум Рәйесе итеп һайлап та ҡуя. Һайлауын һайлайҙар ҙа, тик Өфөгә нисек күсенергә? Баймаҡтағы һымаҡ, әҙер фатир көтөп тормай баш ҡалала. Тәүҙә ул ғаиләһе менән хәҙерге «Йәшел сауҡалыҡ» шифаханаһы эргәһендәге ағас баракта йәшәй. Декабрь һалҡындары башланғас, Чернышевский урамындағы «Девон» ҡунаҡханаһын төйәк итә. Туҡай урамының 29-сы йортондағы ғүмеренең һуңғы көндәренә тиклем йәшәгән фатиры уға киләһе йылда ғына бирелә. Ул барына шөкөр итеп йәшәне, хәҙерге ҡайһы бер түрәләр кеүек, еврофатир, шәхси машина даулап йөрөмәне. Тик пенсияға сыҡҡас ҡына, ғәриплеген иҫәпкә алып, «Запорожец» еңел машинаһын һатып бирәләр.

– Уныһын да мең бәлә менән юллап алды, – тип хәтерләй ҡыҙы Флүрә. – Йәнәһе, уның киҫелгән аяғы ВТЭК талаптарынан өс сантиметрға оҙонораҡ...

Өфөгә килеүенең тәүге көндәренән үк Зағафуранов башы-аяғы менән эшкә сума. Әле 30-сы йылдар урталарында уҡ ҡабул ителеп, иҫкерә башлаған Башҡорт АССР-ы Конституцияһына үҙгәрештәр һәм өҫтәмәләр индерергә, Мәскәү менән дәүләт кимәлендә бәйләнештәрҙе нығытырға, үҙәктең автономиялы республикаларға ҡарашына сик ҡуйырға, урындарҙағы һәм башҡарма органдарҙың эшен яңыса ҡорорға, республика һәм район биләмәләренең сиктәрен аныҡ билдәләргә, социаль һәм иҡтисади үҫеш пландарын ҡабул итергә, бюджеттың үтәлешен даими тикшереп торорға... – эш тауыҡ сүпләһә лә бөтөрлөк түгел. Бер үк ваҡытта алыҫ һәм яҡын райондарҙан килгән кешеләрҙе ҡабул итергә лә, командировкаларға сығырға ла кәрәк.

Ошондай командировкаларҙың береһе тураһында хеҙмәт ветераны, элекке дәүләт хеҙмәткәре Маҡсат Әптекәев былай тип һөйләгәйне:

– Илленсе йылдарҙың көҙө ине. Матрай ауыл клубында (Йылайыр районы) депутат Фәйзрахман Зағафуранов менән осрашыу бара. Шул саҡ инәйем мине саҡырып сығарҙы ла: «Улым, олатайың бик ҡаты ауырып китте, – тип хәбәр һалды. – Берәй ылау табып, Юлдыбай дауаханаһына алып барырға ине». Мин бригадир Ғәйзулла ағайға мөрәжәғәт иттем. Ул, 10 саҡрымға колхоз рәйесенән башҡа ат бирә алмайым, унан һора, тине лә атын менеп китеп тә барҙы. Йыйылыш бөткәс, мин рәйес янына килдем. Ул Өфө ҡунағы менән һөйләшеп тора ине. Хәлемде һөйләп биргәс, Мазһар ағай кеҫәһенән ҡағыҙ, ҡәләм алып ниҙер яҙҙы ла миңә тотторҙо. Беҙҙең һөйләшеүҙе Зағафуранов та тыңлап тора ине.

– Энем, – тине ул, ягымлы йылмайып, – беҙ хәҙер Йылайыр аша Күмертауға сығабыҙ. Юл ыңғайында олатайыңды Юлдыбайға ҡалдырып китербеҙ. Бар, машина менән олатайыңды алып кил.

Юлда ул олатайым менән ихлас һөйләште, ҡайҙа эшләгәнен һорашты. Миңә лә һүҙ ҡуша, киләсәктә кем булырға теләүемде һораша. «Яҡшы һүҙ – йән аҙығы» тигәндәй, Фәйзрахман ағайҙың, «юғары»ла эшләүенә ҡарамай, ихлас һөйләшеп барыуымы, әллә изге күңелле, алсаҡ йөҙлө, күркәм кеше менән осрашып кәйефен күтәреүме, белмәйем, шул йылдан һуң олатайым бүтән дауаханалар буйлап йөрөмәне, 92 йәшенә тиклем йәшәне. Һуңғы көндәренә тиклем Зағафуранов ағайҙың үҙ машинаһында дауаханаға илтеүе тураһында һағынып тә, бер аҙ маҡтанып та һөйләр ине.

Социалистик Хеҙмәт Геройы, КПСС-тың Сибай ҡала комитетының икенсе, Мәсетле һәм Хәйбулла район комитеттарының беренсе секретары Ғилман Яҡупов иҫтәлектәренән:

– Бөйөк Ватан һуғышы тамамланһа ла, миңә йәнә йылдан ашыу һалдат йөгөн тартырға тура килде. Тик 1946 йылда ғына тыуған яҡтарға ҡайтып, Иҫке Сибай ете йыллыҡ мәктәбендә уҡыта башланым. Көҙ мине райкомға саҡыртып алдылар ҙа, ай-вайыма ҡарамай, ВЛКСМ район комитетының икенсе секретары итеп һайлап ҡуйҙылар. Эштең рәтен-сиратын да белмәйем. Шулай баш ватып ултырғанда, райком секретары Фәйзрахман Зағафуранов сатанлап килеп керҙе.

– Нимә, энем, балтаң һыуға төшкән һымаҡ, ҡайғырып ултыраһың? – тип һүҙ башланы ул. – Тәүҙәрәк шулай була ул, эштең ҡайһы ҡойроғонан тоторға ла белмәй аҙапланаһың. Әйҙә, бергәләп уйлашайыҡ, кәңәшләшәйек.

Эсемә йылы инеп китте, кәйеф тә күтәрелде. Икәүләп эш планын һыҙғылап ташланыҡ, ҡасан, ҡайҙа, ниндәй саралар үткәреү тураһында һөйләштек.

– Гел кабинетта бикләнеп ултырма! – тине ул хушлашҡанда. – Миңә лә ингеләп йөрө, белгәнемде өйрәтермен.

Районда инде шаҡтай танылып өлгөргән партия эшмәкәренең ошолай ябай һәм ихлас һөйләшеүе миндә тәрән эҙ ҡалдырҙы. Һуңынан КПСС-тың Сибай ҡала комитетының икенсе, Мәсетле район комитетының беренсе секретары итеп һайлағанда ла өлкә комитет вәкиле булараҡ Фәйзрахман ағай килгәйне.

Республикала юғары вазифа биләһә лә, яҡташтарын да онотмай Зағафуранов. 1951 йылдың 13 февралендә үткән һайлауҙарҙа мәсетлеләр уны БАССР Юғары Советына депутатлыҡҡа кандидат итеп күрһәтә. Шул көндәрҙә ул район Советы башҡарма комитеты рәйесе Йосопйән Фәхретдинов менән Һөләймәнгә лә һуғыла. Уларҙы Оло Ыҡтамаҡтан «Искра» колхозы рәйесе Яҡуп Һәҙиуллин алып ҡайта. Һуғыштан алда ғына ауыл уртаһында самандан һалынған клубта ул яҡташтары менән етеле лампа яҡтыһында оҙаҡ ҡына гәпләшеп ултыра.

– Гонаһ шомлоғондай, электр уты ла юҡ беҙҙә, – тип һуҡранып ҡуйҙы шул саҡ рәйес. – Әллә, тим, берәй әмәлен табып, ярҙам итәһеңме?

– Ләмәҙ йылғаһына электр станцияһын ҡороу проектын килтергәйнем дә ул, тик уның ҡеүәте самалы. – Эргәһендә ултырған район башлығына Фәйзрахман күҙ ҡыҫып ҡуйҙы.

– Ҡеүәтен бер аҙ арттырғанда, – тине Фәхретдинов, елкәһен тырнап, – һөләймәндәргә лә өлөш сығыр ине. Әйткәндәй, станцияның буласаҡ начальнигы Ғиззәт Ғибатов та бында ултыра бит. Ул да уйланһын.

Йәй Ләмәҙтамаҡ менән Һөләймән ауылдары араһына бағаналар ултыртыла, сымдар һуҙыла, өйҙәргә лампалар бороп ҡуйыла, ҡыш башланыр алдынан иһә уттар ҙа тоҡана. 50-се йылдар илебеҙ өсөн генә түгел, Башҡортостан өсөн дә оло һынылыштар, һәр төрлө үҙгәртеп ҡороуҙар, кадрҙар менән шаярыу, Мәскәү менән тәүге тартҡылашыу йылдары булып тарихҡа инеп ҡала. Үҙәктән алынған

күрһәтмә буйынса, Башҡортостан көтмәгәндә Өфө һәм Стәрлетамаҡ өлкәләренә бүленә. Йәнәһе, биләмәләре буйынса Башҡортостан ифрат ҙур, уның менән идара итеү ауыр. Ике өлкә ойоштороп, чиновниктар һанын арттырһалар ҙа, КПСС Өлкә комитетының беренсе секретары Сабир Ваһапов, Юғары Совет Президиумы Рәйесе Фәйзрахман Зағафуранов, Министрҙар Советы Рәйесе Вәли Нәбиуллин был башбаштаҡлыҡтар менән килешә алмай һәм КПСС Үҙәк Комитетына, СССР Юғары Советына хат артынан хат яуҙыра. Республика райондары һәм ҡалаларынан да Башҡорт АССР-ындағы өлкәләрҙе бөтөрөүҙе талап иткән мөрәжәғәттәр, йыйылыш, граждандар сходтарының ҡарарҙары байтаҡ йыйылып китә. «Ил төкөрһә, күл була» тиҙәр бит, илдә тоталитар режим хөкөм һөрһә лә, Мәскәү бындай ҡаршылыҡты көтмәй, ун бер айҙан өлкәләр юҡҡа сыға. Тик бер йылдан һуң Сабир Ваһаповты эшенән алалар, йәнәһе, Өлкә комитет секретары кадрҙар менән эшләмәй, уларҙы тәрбиәләмәй. Ауыл хужалығында ла эштәр насар, дәүләт пландары үтәлмәй. КПСС Үҙәк Комитетында Башҡортостан Өлкә комитетының отчеты тыңланылып, эше ҡәнәғәтләнерлек түгел тип табыла. 1953 йылдың декабрендә Үҙәк Комитеттың партия органдары бүлеге мөдире Евгений Громов етәкселегендәге төркөм Өфөгә килеп төшә. Улар араһында КГБ рәйесе, 1943 – 1946 йылдарҙа КПСС-тың Башҡортостан Өлкә комитетының беренсе секретары булып эшләгән Семен Игнатьев та була.

Ашыҡ-бошоҡ ҡына пленум йыялар. Коммунистарҙың ризалығын да һорап тормай, Сабир Ваһапов эшенән бушатыла һәм уның урынына С. Д. Игнатьев тәҡдим ителә. Пленум ағзалары ҡаршы сығып ҡараһа ла, тауыштарҙың яртыһын ғына йыйыуға ҡарамаҫтан, яңы секретарь «һайланып» та ҡуйыла. Өлкә комитетындамы, Министрҙар Советындамы, Юғары Совет Президиумындамы юғары дәрәжә биләгән башҡорт һәм татар ир-уҙамандарына яңы партия чиновнигы «Сода» (Фәйзрахман Зағафуранов), «Ваня» (БАССР Министрҙар Советы Рәйесе Вәли Нәбиуллин), «Захар» (КПСС Өлкә комитетының икенсе секретары Зыя Нуриев) тип кенә өндәшә. Башҡорт һәм татар мәктәптәрен ҡыҫҡартыу, милли телдә сыҡҡан матбуғат баҫмаларын ябыу нәҡ Семен Денисович дәүерендә башланып, артабан да дауам иттерелә.

1956 йылда Башҡортостанда сиҙәм һәм ҡалдау ерҙәрҙе үҙләштереү башлана, унан Фәйзрахман Зағафуранов та ситтә ҡалмай. Башҡортостандың көньяҡ һәм төньяҡ-көнсығыш райондарын биш бармағы кеүек белгәнгә, ул күп ваҡытын ошо төбәктәрҙә үткәрә. Әбйәлил районында «Урал», Хәйбулла яҡтарында «Хәйбулла» совхоздарын ойоштороу, уларҙы кадрҙар, техника менән тәьмин итеү, халыҡ инициативаһына дөрөҫ йүнәлеш биреү ҙә уның елкәһенә төшә. 1957 йылда Фәйзрахман Зағафурановтың бер-бер артлы Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордены һәм «Сиҙәм һәм ҡалдау ерҙәрҙе үҙләштергәне өсөн» миҙалы менән наградланыуы ла – бының асыҡ миҫалы. Һуңынан асыҡланыуынса, был яңылыҡтың хата булыуы тураһында ул ҡайҙан белһен?

КПСС-тың 1956 йылда үткән XX съезында И.В. Сталиндың шәхес культы фашлана. Ул съезда Ф. Зағафуранов та делегат булып ҡатнаша. «Доклад тамамланғас та, – тип яҙа съезд тураһында Мостай Кәрим «Өсөнсө тетрәү» тигән хәтирәһендә, – делегаттар, элекке шикелле, урындарынан ҡуҙғалманы. Албырғап ҡалғайнылар. Мин Фәйзрахман Зағафуранов эргәһенә килдем. Ауыҙ асып өндәшергә өлгөрмәнем, ул башын сайҡаны. Башҡортостан Юғары Советы Президиумы Рәйесе булып эшләгән сабыр холоҡло, киң ҡарашлы, аҡыллы кеше ине ул. Беҙ уның менән фекерҙәштәр ҙә, табындаштар ҙа. Эсендә ни барын ул ошо һүҙҙәр менән аңлатты: «Махмур булдым...»

Арҙаҡлы әҙип иҫтәлектәренән тағы бер өҙөк: «Башҡортостандың Юғары Советы Президиумы Рәйесе Фәйзрахман Зағафуранов менән беҙ яҡын иптәштәр инек. Партия съездарына, РСФСР Юғары Советы сессияларына күп тапҡырҙар бергә йөрөнөк. Уның һул аяғы бот төбөнән протез. Бер ваҡыт Кремль эсенән китеп барғанда ул әйтеп һалды:

– Ҡайҙа йөрөһәк тә, минең көйгә атлайһың. Ташлап китмәйһең, мин яй һылтыҡлайым бит. Йәлләйһең, ахырыһы, – ти.

– Йәлләмәйем, һинән алда барып өлгөрөр ерем юҡ. Тик шул ғына.

– Барыбер рәхмәт. Әммә ҡыҙғанма. Был йәһәттән мин үҙемде үҙем дә ҡыҙғанмайым. Киреһенсә, ризамын. Ниңә өндәшмәйһең?

– Уйланам.

– Мин дә тәүге мәлдә күп уйландым һәм шундай нәтижәгә килдем: мин фронт тамуғынан еңел ҡотолдом. Ике аяҡһыҙ, ике ҡулһыҙ йәки ике күҙһеҙ ҡалғандар аҙмы ни? Бейемәгән кешегә һыңар аяҡ та етә. Башым һау, ҡулдарым иҫән.

Ниндәй ябай фәлсәфә! Ул бар булмышы менән оло шәхес ине. Шуға күрә ғәриплеген иҫәпкә алмай, иҫән аяғының, ныҡлы рухының, асыҡ аҡылының ҡәҙерен белеп йәшәне».

Һуғышта һыңар аяғын ҡалдырып булһа ла имен-аман ҡайтҡанына шөкөр итеп, тыныс ҡына йәшәмәне Фәйзрахман Зағафуранов. Барына ла риза булып, «һин миңә теймә, мин һиңә теймәйем» тигән фәлсәфә менән указ, ҡарарҙарға ҡул ҡуйып, сессияларҙы ваҡытында үткәреп, теге йәки был закондарҙы «бер тауыштан» ҡабул иттереп һәм «бөйөк партия»ға мәҙхиәләр генә йырлап йәшәһә, ул Зағафуранов булмаҫ, халыҡ күңелендә тәрән эҙ ҡалдырмаҫ ине. Юғары Совет менән 17 йыл етәкселек итеү дәүерендә ул КПСС Өлкә комитетының өс беренсе секретарын, Министрҙар Советының шулай уҡ өс рәйесен башынан үткәрҙе. Бигерәк тә һауалы, тәкәббер партия әһелдәре менән эшләүе теңкәһенә тейгәйне уның. Эш тәртибен беләләрме, юҡмы, килә лә ҡыҫылалар йә телефондан күрһәтмә бирәләр.

Бөйөк Ватан һуғышының башынан ахырынаса ут эсендә йөрөгән Советтар Союзы Геройы генерал Таһир Күсимов та байтаҡ йылдар тыуған Башҡортостанына ҡайта алмай, зар-интизар булып сит яҡтарҙа хәрби хеҙмәтен үтәй. Ике хәрби академия (М. Фрунзе исемендәге һәм Генераль штаб) тамамлаған кеше Ҡубанда ла хеҙмәт итә, Кавказ тауҙарын да айҡап сыға, Урта Азияның ҡайнар ҡомдарын да тапай. Ете ят ерҙәрҙә хеҙмәт итһә лә, Башҡортостан үҙ батырын онотмай: ике саҡырылыш рәттән, 1947 – 1951 һәм 1951 – 1955 йылдарҙа, РСФСР Юғары Советына Башҡортостандан депутат итеп һайлана. Фәйзрахман Зағафуранов менән дә ана шул йылдарҙа танышып, дуҫлашып китә Таһир Күсимов. Юғары Совет Президиумы Рәйесе менән осрашыуҙарының береһендә генерал тыуған төйәккә ҡайтып төпләнеү хаҡында һүҙ ҡуҙғата.

– Кем тота, әйҙә ҡайт! – тип яуаплай Фәйзрахман. – Ана, Башвоенкоматта ла урын бушаған. Дөрөҫөн әйткәндә, Таһир, үҙебеҙҙең хәрби комиссар кәрәк беҙгә. Юғиһә, тоталар ҙа Мәскәүҙән халҡыбыҙҙың телен, тарихын, милли йолаларын, ғөрөф-ғәҙәттәрен, ғөмүмән, Башҡортостандың ҡайҙа ятҡанын да белмәгән солдафондарҙы ебәрәләр. Мәскәү яғын ғына ҡайырған прокурорҙар, милиция министрҙары баҫты. Башҡортостанды артабан үрләү өсөн трамплинға әйләндерҙеләр бит.

Мәсьәлә ыңғай хәл ителә, һәм тиҙҙән Таһир Күсимов Төркмәнстандан Өфөгә ҡайтып, Башҡортостан хәрби комиссариатын үҙ ҡулына ала. Әлбиттә, тура һәм

үҙ һүҙле, киҫкен ҡарашлы, ваҡыты менән «Чапай» булып та киткеләгән, «һайт!» тигәнгә «тайт!» тип тормаған генерал «обком малайҙары»ның һүҙенә ҡолаҡ һалмай, үҙенсә эшләүен дауам итә. Ләкин баш бирмәҫ хәрби комиссарҙың һәм уны ҡурсалаусы Зағафурановтың дошмандары ла йоҡлап ятмай, уларҙы «эләктереү» өсөн төрлө мәкерле юлдарҙы эҙләйҙәр. Нисек тә булһа республика алдында уларҙы фашларға, ятҡа ҡалдырып, эштән китергә мәжбүр итергә – көнсөл әҙәмдәрҙең бар маҡсаты шул. Үс иткәндәй, сүп өҫтөндәге сүмәлә һымаҡ, әмәле лә табыла.

Рамаҙан Өмөтбаевтың «Генерал Кусимов» тигән китабына мөрәжәғәт итәйек: «Шул йылдың көҙөндә республика хужаларының береһе (Фәйзрахман Зағафуранов тип уҡырға кәрәк. – **Р. Х.**) – партия, совет активы араһында абруй ҡаҙанған хөрмәтле бер эшмәкәр үҙенең 50 йәшлек тантанаһын үткәрә. Хөкүмәт һәм бюро ағзалары менән рәсми мәжлестән һуң уның өйөнә ғаилә дуҫтары, яҡындары йыйыла. Һис бер нәмә уйламаған ҡунаҡтар, юбилярҙы ҡотлап, оҙаҡ ҡына йырлашып-бейешеп ултыра. Мәжлес ойоштороусы менән республика хужаһының үҙ-ара мөнәсәбәте сиктән тыш насар булыуы арҡаһында, унда ҡатнашҡан бөтә кешеләр – республика интеллигенцияһының күренекле вәкилдәре – власть башында тороусыларға ҡаршы оппозиция тип иғлан ителә. Был кисәлә булыусылар барыһы ла «ҡара исемлек»кә индерелә, һәм уларҙың йыйылышын «милләтселек» күренеше итергә маташыу башлана. Уларҙың байтағын иң юғары инстанцияларға аңлатма бирергә саҡыралар. Әммә «милләтселек» еҫе сыҡмағас, ундағы табынды туған телдә алып барыуҙы, уйын-көлкөнө халыҡса ойоштороуҙы дәлил итеп күрһәтергә маташтылар. Өфө урамдарында туған телендә һөйләшеп йөрөгән ағай-энегә «милләтсе» тамғаһын баҫырға әҙер генә торҙолар».

Авторҙың үҙ ҡарашы: мин Урал аръяғы райондарында «Совет Башҡортостаны» гәзитенең үҙ хәбәрсеһе булып эшләгән йылдарҙа ла урыҫтарҙың беҙгә ҡарата түбәнһетеп ҡарауын елкәмдә тоя торғайным. Бер саҡ шулай, Белорет ҡалаһы урамдарынан автобуста китеп барғанда, бер иптәшем менән башҡортса һөйләшеп киләбеҙ. Ҡапыл галстук таҡҡан рус ағайы беҙҙең янға килде лә: «Хәҙер үк үҙ телегеҙҙә һөйләшеүҙе туҡтатығыҙ! Был һеҙгә Өфө түгел!» – тип һүҙ ҡушмаһынмы!

Мин түҙмәнем: «Пошел туда!.. – тип тегенең үҙенә ябырылдым. – Не забывайте, где находитесь! Это Башҡортостан, и никто не запретит мне говорить на своем языке». Күп тә үтмәне, беҙҙең янға бер төркөм урыҫ йыйылып китте. «Автобустан ырғытығыҙ басурмандарҙы!» – тип ҡысҡырышалар. Шул саҡ кешеләрҙе йырып, тос ҡына ҡуллы, ҡалын кәүҙәле танышым, Белорет металлургия заводының ҡорос ҡойоусыһы Шәрәфетдинов тигән ағай тегеләрҙең елкәһенән тотто ла автобустан төртөп сығарып ебәрҙе. Автобус юлын дауам итте.

– Шулай ҙа, – тип киҫәтте беҙҙе ҡорос ҡойоусы, – һаҡ булығыҙ, был бит – шовинистар ояһы.

1963 йылдың 10 октябрендә БАССР Юғары Советы Президимы Рәйесе Фәйзрахман Зағафурановҡа 50 йәш тула, һәм шул айҡанлы ул иң яҡын дуҫ-иптәштәрен Туҡай урамындағы фатирына ҡунаҡҡа саҡырып, ошо открытканы ебәрә: «Ҡәҙерле иптәш! Фәйзрахман Зағафурановтың илле йәше тулыу уңайы менән һеҙҙе 1963 йылдың 10 октябрендә ғаилә кисәһендә ҡатнашыуығыҙҙы һорайбыҙ. Зағафурановтар ғаиләһе, Өфө ҡалаһы».

«Ғаилә тантанаһына мин дә саҡырылғайным, – тип хәтерләй ул йылдарҙа

КПСС-тың Хәйбулла район комитетының беренсе секретары Ғилман Яҡупов. – Минән башҡа республиканың хәрби комиссары генерал Таһир Күсимов, партияның Өфө ҡала һәм Шишмә район комитеттарының беренсе секретарҙары Мәрүән Йәнгиров менән Нурис Яхин, мәғариф министры Фатима Мостафина, КПСС өлкә комитетының бүлек мөдирҙәре Абдулла Закиров менән Рамаҙан Өмөтбаев, БАССР Министрҙар Советы Рәйесе Сөләймән Сәйетбатталов, Өфө ҡалаһының Совет район Советы башҡарма комитеты рәйесе Хатип Әхмәҙиев, Орджоникидзе районының хәрби комиссары Мортаза Әхмәҙуллин, тағы ла бер нисә кеше бар ине. Байрам – байрам инде: унда эш, сәйәсәт тураһында лығырҙау юҡ. Рәхәтләнеп үҙ телебеҙгә һөйләшәбеҙ, йырлайбыҙ, юбилярҙы ҡотлап тостар күтәрәбеҙ, бүләктәр бирәбеҙ. Бүләк тигәндән, бөгөнгө һымаҡ, телевизор, ат, ҡиммәтле картиналар түгел инде, ә ябай өҫтәл сәғәтеме шунда, күлдәкме, галстукмы тигәндәй. Мәрүән Йәнгиров, мәҫәлән, Фәйзрахман ағайға Мәскәүҙән алып ҡайтҡан «Царь-пушка» һәйкәленең макетын, мин ҡул сәғәте бүләк иттек. Шулай тыныс ҡына уйын-көлкө менән үтте ул кисә. Мин ҡунаҡханаға туҡталғайным. Иртән, ғәҙәтемсә, киоскынан гәзиттәр алып ҡарай башланым. Ҡапыл СССР Юғары Советы Президумының Указы күҙемә салынды. Унда Фәйзрахман Зағафурановты икенсе Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән наградлау тураһында һүҙ бара ине. Мин шунда уҡ Зағафурановтарға шылтыраттым.

– Әйҙә, кил тиҙерәк! – ти был. – Һөйөнсөгә, кем әйтмешләй, бер һауыт та бер тауыҡ.

Барҙым гәзитте тотоп. Сәйен дә эстек, мәйен дә. Бер аҙ ултырғас, Маһикамал апай мине саҡырып алды ла:

– Хәҙер Нуриев менән Аҡназаров килергә тейеш. Уларҙың күҙенә күренмәүең хәйерле, – тине.

Мин йәһәт кенә кейенә башлағайным, Фәйзрахман ағай:

– Ҡайҙа бараһың? – тип туҡтатты. – Аҡъярға ҡайтырға иртәнге самолет китте бит инде.

– Аэропортта кискеһен көтөрмөн.

– Һин, давай, малайланма! Иҫәнғолға тиклем минең машинаны алып кит, ә мин һиңә Аҡъярҙан машина саҡыртырмын. Килештекме?

Кискә ҡаршы мин Аҡъярҙа инем инде. Рамаҙан Өмөтбаев әйтмешләй, теге ваҡыттағы кисә өсөн Өфөлә эҙәрлекләүҙәр булһа булғандыр, ләкин уның ялҡыны Хәйбуллаға барып етмәне. Ни әйтһәң дә, 520 саҡрым бит».

Кем белә, бәлки, ошо кисәнән һуң республиканың беренсе һәм икенсе «хужа»лары араһынан «ҡара бесәй» үткәндер. Сөнки, тураһын әйтмәһә лә, Зыя Нуриев, яйы тура килгән һайын, уға тапшырылған ошаҡтарҙы, ғәйбәттәрҙе Зағафурановтың ҡолағына төшөрөп торор ине. Бәлки, шул алыҫтағы шаңдауы булып 1967 йылдың 28 мартында КПСС-тың Башҡортостан Өлкә комитеты бюроһы түбәндәге ҡарарҙы ҡабул иткәндер: «КПСС-тың Башҡортостан Өлкә комитеты бюроһы ултырышының 46-сы протоколынан.

Ф. З. Зағафуранов иптәш тураһында.

1. Сәләмәтлеге ҡаҡшау сәбәпле, БАССР Юғары Советы Президиумы Рәйесе Ф. З. Зағафуранов иптәште, үҙенең һорауы буйынса, биләгән вазифаһынан бушатырға.

2. КПСС Үҙәк Комитетынан ошо ҡарарҙы раҫлауын һорарға.

КПСС Өлкә комитеты секретары З. Нуриев».

Ҡайһылай анһат һәм тиҙ! Ер емертеп эшләп йөрөгән һәм республикала оло

абруй менән файҙаланған 54 йәшлек һап-һау ир-уҙаманын, Юғары Совет сессияһын ғына түгел, хатта уның Президиумын да йыймай тороп, ҡапыл ғына тот та пенсияға ҡыу, имеш! Бөтәһен дә партия етәкләй, бөтәһен дә партия хәл итә, йәнәһе. Әммә, минеңсә, был ҡарар партия исеме аҫтына ышыҡланып, ҡайһы бер партия әһелдәренең үҙҙәренә оҡшамаған дәүләт эшмәкәрҙәренән ҡотолоу, үс алыу сәйәсәте булыбыраҡ яңғырай. Фәйзрахман Зағафуранов иһә, һәр төрлө интригаларға ҡарамай, артыҡ ҡабаланмай ҙа, әммә үҙ эшен еренә еткереп эшләй ине бит. Уның өсөн милли сикләнгәнлек тә ят күренеш ине, шуға ла урыҫына ла, башҡорт, татарына ла бер тигеҙ ҡараны, тигеҙ баһа бирҙе.

Көндәрҙең береһендә Юғары Совет Президиумы Рәйесе янына элекке осоусы-истребитель, Әлшәй районының Казанка һигеҙ йыллыҡ мәктәбе директоры Александр Фролов яңы мәктәп һалдырыуҙы юллап килеп инә. Фронтовиктар бит, һөйләшеп китәләр, кемдең ҡайһы фронтта һуғышыуын белешәләр. Баҡһаң, икеһе лә сталинградсы икән. Дошмандың 20 самолетын бәреп төшөрөүе тураһында ишеткәс, Фәйзрахман Зағафуранов:

– Бәй, бының өсөн Һеҙгә Советтар Союзы Геройы исеме бирергә тейештәр ине бит, – тип әйтә. – Бирмәнеләрме?

– Ҡайҙа ул, – тип күңелһеҙ генә яуаплай Фролов. – Ул ғына ла түгел, Һуғыш тамамланыр алдынан ғына мине пехотаға күсереп ҡуйҙылар.

Эш былай була: капитан Александр Фроловҡа Советтар Союзы Геройы исемен биреү тураһында награда ҡағыҙын ул хеҙмәт иткән 288-се авиация дивизияһы командиры генерал Смирнов өҫкә ебәргәс кенә, Венгрияның Секешфехервар ҡалаһы янында немецтар уның самолетын бәреп төшөрә, һәм ул фронт линияһын сығыу өсөн ун бер көн буйы дошман тылында йөрөй, мадъяр ауылдарында ҡасып ята. Ул саҡтағы ҡағиҙә буйынса, йәнәһе, самолеты бәреп төшөрөлгән осоусы дошман тылында өс көндән дә артыҡ йөрөргә тейеш түгел. Шуға ла Фроловтың документтары «юғары»ла «юғала», ә үҙе пехотаға оҙатыла.

– Д-а-а, – тип һуҙҙы кабинет хужаһы, өҫтәлдә ҡәләмен бейетеп. – Был эш, ысынлап та, ҡатмарлы икән. Шулай ҙа, иптәш капитан, документтарыңды яңынан әҙерләп килтер әле! Бәлки, берәй әмәлен табырбыҙ. СССР Юғары Совет Президиумы Рәйесе Ворошилов иптәш менән дә һөйләшеп ҡарармын.

Бер йыл үтә, һәм Бөйөк Еңеүҙең 20 йыллығы алдынан, йәғни 1965 йылдың 8 майында, СССР Юғары Советы Президиумы Указы менән Башҡортостанда йәшәгән Тамбов егете Александр Фроловҡа Советтар Союзы Геройы тигән маҡтаулы исем бирелә. Ленин орденын, Алтын Йондоҙ миҙалын һәм Указ грамотаһын тапшырырға Раевкала үткән район һабантуйына Фәйзрахман Зағафуранов үҙе бара. Күңеле нескәреп, күҙҙәренән шатлыҡ йәштәре эркелгән Герой Зағафурановты бөтә халыҡ алдында ҡосаҡлап ала һәм был исемдең нисек юлланыуы тураһында һөйләп бирә. Һабантуй майҙаны йәнә алҡыштарға күмелә, был юлы Фәйзрахман хөрмәтенә.

Мостай Кәрим һөйләй: «Фәйзрахман Зағафуранов яҙыусы ла, шағир ҙа түгел ине, әммә ул шиғри күңелле кеше булды. Үҙ фекере, үҙ аҡылы менән йәшәне, башҡалар ҡурайына бейемәне. Яҙыусылар, сәнғәт, мәҙәниәт, фән эшмәкәрҙәре менән йыш аралашты, уларға ҡулынан килгәнсе ярҙам итте».

Мостай Кәрим ошондай һүҙҙәрҙе башҡа икенсе бер дәүләт, хөкүмәт әһелдәренә, партия етәкселәренә ҡарата әйтте микән? Юҡтыр, минеңсә. Был баһа Мостай Кәримдең үҙенә лә ҡағыла һымаҡ. Эш шунда: уның «Яңғыҙ ҡайын» пьесаһы 1955 йылда Сталин премияһына тәҡдим ителә, һәм, Зағафурановтың саҡырыуы буйынса, спектаклде ҡарарға бер төркөм совет яҙыусылары Өфөгә

килә. Араларында Ҡаҙағстандан Сабит Моҡанов, Тажикстандан Мирас Турсун-заде ла була. Спектакль юғары баһа ала, ләкин Сталиндың шәхес культын фашлау башланғас, уның исемендәге премия ла бөтөрөлә. Әммә Мостай Кәрим буш ҡалмай: башҡорт әҙәбиәтен үҫтереүҙәге күренекле хеҙмәттәре өсөн уға 1963 йылдың 8 ғинуарында Башҡорт АССР-ы Юғары Советы Президиумы Рәйесе Фәйзрахман Зағафуранов ҡул ҡуйған Указ менән «Башҡортостандың халыҡ шағиры» тигән оло исем бирелә. Ошондай уҡ исемгә, Мәжит Ғафуриҙан һуң, 1959 йылда Рәшит Ниғмәти, 1964 йылда Сәйфи Ҡудаш та лайыҡ була.

Нишләйһең, бөтәһе лә һин теләгәнсә генә бармай бит был фани донъяла. Ваҡыты менән еңеләһең лә, хаталанаһың да. Заманаһы шундай ине, һәм бынан Ф. Зағафуранов та азат булмағандыр. Зағафуранов тураһында хәҙер нисек кенә тел сарламаһындар, Башҡортостандың беренсе етәкселәре араһында унан да изге күңелле, олоно ололай, кесене хөрмәтләй, ҡурсалай, һәр кем менән уртаҡ тел таба белгән, бөтәһенән элек халҡының киләсәген ҡайғыртҡан, йәштәрҙең яҡын дуҫы булған кеше табылдымы икән?

1950 – 1960 йылдарҙа башҡорт йәштәре Мәскәү һәм Ленинградҡа белем алырға ағыла башлай. Бөгөнгө арҙаҡлы ғалимдар, яҙыусылар, артистар, халыҡ хужалығының төрлө тармаҡтарында етәксе кадрҙарҙың биографияларына күҙ һалығыҙ: күпселеге шул йылдарҙа нәҡ ана шул ҡалаларҙа белем алып сыҡҡан. Кем уҡытҡан уларҙы, кем ярҙам иткән? Баҡтиһәң, Башҡортостан хөкүмәте уларҙы үҙ иҫәбенә уҡытҡан, стипендия түләгән. Ул йылдарҙа шундай ғәҙәт йолаға әйләнгән: республика етәкселәре Мәскәүгә партия съездарына, СССР һәм РСФСР Юғары Советтарының сираттағы сессияларына барамы – шунда уҡ унда уҡыған студенттарҙы үҙ яндарына саҡыртып ала, улар менән ихлас һөйләшә торған булған. Бынан, әлбиттә, Зағафуранов та ситтә ҡалмаған.

– Бигерәк тә Октябрь байрамы, Яңы йыл, Башҡорт АССР-ы ойошторолған 23 март, Май байрамдары беҙҙең өсөн оло байрамға әйләнә торғайны, – тип һөйләгәйне 1954 – 1959 йылдарҙа Мәскәүҙең Луначарский исемендәге дәүләт театр сәнғәте институты (ГИТИС) студенты, һуңынан Башҡортостандың һәм РСФСР-ҙың халыҡ артисы Шамил Рәхмәтуллин. – Ғәҙәттә, был байрамдарға йә Фәйзрахман Зағафуранов, йә Зыя Нуриев үҙе килер, беҙҙе байрам менән ҡотлар, күстәнәстәр һәм, стипендиянан тыш, 400-әр һум аҡса таратыр ине. Мәскәүҙә йәшәүсе һәм уҡыусы Башҡортостан кешеләренең яҡташтар йәмғиәте лә тап ана шул йылдарҙа ойошторолдо.

Ф. Зағафуранов, 1950 – 1967 йылдарҙа Башҡорт АССР-ы Юғары Советы Президиумы Рәйесе булараҡ, республика сәнәғәтен һәм ауыл хужалығын, иҡтисадын һәм социаль тормошон, сәнғәтен, мәҙәниәтен һәм әҙәбиәтен үҫтереү өсөн устарында ут уйнатып эшләне һәм йәшәне, республика тормошо менән янды һәм көйҙө. Бәлки, шуғалыр ҙа, уның табуты янында КПСС-тың Башҡортостан өлкә комитетының элекке беренсе секретары Сабир Ваһапов былай тигәйне:

– Фәйзрахман Зағафурановҡа тәүлектең теләһә ҡайһы сәғәтендә, хатта төндә йоҡоһонан уятып, республиканың теге йәки был районындағы хәлдәрҙе һорашып шылтырат, ул шунда уҡ тулы һәм аныҡ яуап бирер, ул ғына ла түгел, анализ яһар, ундағы проблемаларҙы хәл итеү өсөн үҙ фекерҙәрен әйтер ине. Уның менән эшләүе еңел дә, күңелле лә, фәһемле лә ине.

**Ризван ХАЖИЕВ.**

# ЮҒАРЫ РУХЛЫ ӘҘИП

*(Әнүәр Бикчәнтәевтың тыуыуына – 100 йыл)*



Юғары рухлы әҙип, романтик йөрәкле оптимист, йор һүҙле һәм алсаҡ кеше ине Әнүәр Бикчәнтәев. Ҡыуанысҡа күрә, миңә уны күреп белергә, хатта ярайһы уҡ яҡын аралашып йәшәргә насип итте.

Мин 1974 йылдың көҙөндә «Башҡортостан пионеры» (хәҙер «Йәншишмә») гәзите редакцияһында эшләй башланым. «Пионер» журналы менән беҙҙең партия һәм профсоюз ойошмалары бергә ине. Үҙен күберәк балалар яҙыусыһы һанағанғамы, Әнүәр ағай партия, профсоюз иҫәптәрендә беҙҙә торҙо. Йыйылыштарға ҡалдырмай, теүәл йөрөнө, әммә сығыш яһағанын хәтерләмәйем. Үҙен һәр саҡ илтифатлы, баҫалҡы тотто. Былай тормошта шаян да, мәрәкәсел дә булды. Шундай бер ҡыҙығы иҫтә ҡалған.

Кабинет ишеге әкрен генә асыла ла, шым ғына баҫып, башы түбән эйелгән Әнүәр ағай килеп инә. Күҙгә ҡарарға ҡыймаған ҡиәфәттә ул уң ҡулын һинең ҡулыңа килтереп һала.

– Кисерегеҙ, ғәйеплемен, – ти ағай иҫәнлек һорашыу урынына. – Бүтән улай итмәм. – Шунан киң йылмайып ебәрә. Күҙҙәре лә көлә. – Ә быныһы ғәфү иткәнегеҙ өсөн взятка. – Әнүәр Һаҙый улы кеҫәһенән бер ус көнбағыш сығарып, өҫтәлдә ятҡан ҡағыҙ битенә һала.

Беҙ быға өйрәнеп бөткәнбеҙ, сөнки һәр бүлмәлә ул шул уҡ мәҙәген ҡабатлай. Улай итмәһә, ниндәйҙер хилафлыҡ булыр һымаҡ.

Тәүҙәрәк мин, минең тиҫтер коллегаларым ағайҙың шаяртыуҙарына сәйерһенеберәк ҡараныҡ: бәләкәй саҡтан яратып, һоҡланып, көтөп алынған «Ҙур оркестр», «Бөркөт һауала үлә», «Илсе ҡыҙы», «Бәләкәй адъютант», «Бакенсылар иламай», «Нисә йәш һиңә, комиссар?» кеүек әҫәрҙәр авторы етди булырға тейеш кеүек... Баҡтиһәң, әҙип күңеле менән балаларса шуҡ та, мәрәкәсел дә икән.

Әнүәр Һаҙый улы Бикчәнтәев 1913 йылдың 4 октябрендә Өфө ҡалаһында хеҙмәткәр ғаиләһендә тыуа. Атаһы заманында Ырымбур ҡалаһындағы данлыҡлы «Хөсәйениә» мәҙрәсәһен тамамлаған була. Әнүәр үҙе лә 1928 – 1930 йылдарҙа ошо ҡалалағы татар педагогия техникумында уҡый, уны тамамлағас, Архангельск ҡалаһына эшкә ебәрелә. Ул 1931–1932 йылдарҙа ошонда ете йыллыҡ татар мәктәбе директорының уҡыу-уҡытыу эштәре буйынса урынбаҫары, Алыҫ Көнсығыштағы Мазанов районы Яңы Уфа ауылында уҡытыусы булып эшләй. 1933 йылда Өфөгә ҡайта һәм «Коммуна»

гәзите редакцияһына эшкә урынлаша. 1935–1936 йылдарҙа Ҡыҙыл Армия сафында хеҙмәт итә. Артабан «Йәш коммунар», «Водник Башкирии», «Швейник Башкирии» гәзиттәре редакцияларында әҙәби хеҙмәткәр була.

Бөйөк Ватан һуғышы башланыу менән, Әнүәр Бикчәнтәев үҙе теләп фронтҡа китә. Тәүҙә сәйәси эштә була, ҡамауҙа ҡалғас, отряд менән командалыҡ итә. Полк комиссарҙары курсын тамамлап, төрлө фронттарҙа һуғыша. 2-се Украина фронты, 27-се армия гәзиттәрендә хәбәрсе булып эшләй. Күрһәткән батырлыҡтары өсөн Хәрби Ҡыҙыл Байраҡ, Ҡыҙыл Йондоҙ, I һәм II дәрәжә Ватан һуғышы ордены, миҙалдар менән бүләкләнә.

Һуғыштан һуңғы осорҙа, 1945 – 1947 йылдарҙа, Әнүәр Һаҙый улы «Советская Башкирия» гәзите редакцияһында эшләй. Артабан ул тик яҙыусылыҡ, ижад менән генә шөғөлләнә. 1954 – 1956 йылдарҙа Әнүәр Бикчәнтәев А. М. Горький исемендәге Әҙәбиәт институты эргәһендәге Юғары әҙәби курстарҙа уҡый, бер үк ваҡытта ошо уҡ институттың ситтән тороп уҡыу бүлеген тамамлай.

Әнүәр Бикчәнтәев әҙәбиәткә оло тормош тәжрибәһе менән һәм журналист юлдары аша килә. Уның ижадының үҙенсәлеге – публицистик пафос менән тәрән психологизмдың айырылғыһыҙ берлектә бирелеүендә. Әҙиптең әҫәрҙәрендәге геройҙар һәм һүрәтләнгән ваҡиғалар ҡуйы тормошсан романтик буяуҙарҙа күрһәтелә. Геройҙар үҙ бәхетен халыҡ өсөн хеҙмәттә таба, улар матур, саф уй-тойғолар менән йәшәй, һәр төрлө батырлыҡтарға әҙер тора.

Яҙыусының Александр Матросов хаҡындағы «Бөркөт һауала үлә» (тәүҙә «Үлемһеҙлеккә хоҡуҡ» тип аталды) повесы уңышлы булды. Был әҫәр башҡорт телендә һәм рус телендә бер нисә тапҡыр баҫылып сыҡты, СССР-ҙың башҡа халыҡтары телдәрендә донъя күрҙе. Улай ғына ла түгел, башҡорт әҙәбиәте тарихында иң тәүгеләрҙән булараҡ, әҫәр Ҡытайҙа, Болгарияла, Польшала тәржемә ителеп баҫылды.

Уның үҫмерҙәр өсөн яҙылған «Ҙур оркестр» тигән повесы ла шундай уҡ уңыш яуланы. Ул да башҡортса һәм русса бер нисә тапҡыр ҙур тираж менән донъя күрҙе, бик күп телдәргә тәржемәләнде. Совет балалар әҙәбиәтенең иң яҡшы әҫәрҙәре рәтендә юғары баһа алды.

Әнүәр Бикчәнтәевтың өлкәндәр өсөн яҙылған «Ҡарасәй юлы», «Ожмах вәғәҙә итмәйем», «Аҡҡоштар Уралда ҡала» исемле романдары ла үҙ заманы өсөн күренекле ваҡиға булды, киң популярлыҡ яуланы. Ул шулай уҡ балаларға бер нисә яңы повесть ижад итте, публицистика өлкәһендә лә бик әүҙем эшләне.

Әҙәбиәттәге юғары ҡаҙаныштары өсөн Әнүәр Бикчәнтәев Октябрь революцияһы һәм «Почет Билдәһе» ордендары менән наградланды, «РСФСР-ҙың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре» тигән маҡтаулы исемгә, Башҡортостандың Ғ. Сәләм исемендәге (1967), Салауат Юлаев исемендәге (1974) премияларына лайыҡ булды.

**Рәмил ЙӘНБӘК.**

# ШАҒИР ХАҠЫНДА ЗАМАНДАШТАРЫ

*(Муса Ғәлиҙең тыуыуына – 90 йыл)*

## «Азамат»



1970 йылда Украинала Башҡорт әҙәбиәте көндәре уҙҙы. Хайран ҡалырлыҡ аяҙ аҙна, яҡты көҙ ине. Күк көмбәҙе, әйтерһең, ҙур көмөш ҡыңғырау, һауала осоп барыусы торналар тауышынан ул зыңғырлап тора. Днепрҙы мин йылдың төрлө миҙгелендә күргәнем бар, әммә уның был ваҡыттағы асыҡ зәңгәрлеге хатта күктең үҙе менән тиңләшә ала. Ошо мәшһүр даръяның буйҙарында аҙна буйына башҡорт һүҙе, башҡорт моңо яңғыраны.

Әйтергә кәрәк, ул замандарҙа әле украин әҙиптәренең, сәнғәт әһелдәренең һәм бүтән уҡымышлыларҙың Башҡортостанға ҡарата, хәтерҙәре йомшарып, хөрмәттәре кәмемәгәйне, һуғыш йылдарында беҙҙең тупрағыбыҙҙа төйәк табып, йән аҫрап ҡалған оло ижадсыларҙың исемдәре йыш телгә алына.

Павло Тычина, Максим Рыльский, Владимир Сосюра, Юрий Яновский, Петро Манч... Ҡайҙа барһаҡ та, хужаларҙың тәү әйткән һүҙе – сәләм, икенсеһе – рәхмәт, өсөнсөһө мөхәббәт булды. Хәҙер донъялар үҙгәрҙе. Яҡшылыҡты онотоу, яманлыҡты, берәм-берәм соҡоп сығарып, өҙлөкһөҙ хәтерләү ғәҙәткә инде, тормош ҡағиҙәһенә әйләнде. Кешеләр һәм халыҡтар ҡасандыр бер-береһенә эшләгән изгелектәр хаҡында иҫкә төшөрөргә тартыналар, оялалар һымаҡ. Ә теге йылдарҙа!.. Өҫтәлдәр тулы һый, йөрәктәр тулы һөйөү ине.

Һуңғы кистә Киевта Украина Яҙыусылар союзының рәйесе Олесь Гончар затлы рестарандарҙың береһендә беҙҙең хөрмәткә ҙур мәжлес үткәрҙе. Күренекле яҙыусылар, музыканттар, рәссамдар, артистар менән табындаш булдыҡ, һүҙ күп һөйләнмәне, әммә йыр күп йырланды. Украин, башҡорт, татар, рус көйҙәре бер-береһен алмаштырып торҙо. Күмәкләп ҡара-ҡаршы йырлашыу ҙа, яңғыҙ башҡарыу ҙа булды. Эргәмдә ултырған Олесь Гончар беҙҙең көйҙәрҙе шул тиклем йотлоғоп, онотолоп тыңлай, улар, гүйә, уны сәңгелдәктән бирле оҙата йөрөгәндәр.

Табын уртаһында ултырған Муса Ғәли бер мәл аяҡ үрә баҫты, ҡуш усы менән сал сәсен һыйпап, тамағын ҡырҙы. Минең һынағаным бар: табында ул тороп

*Күренекле башҡорт шағиры Муса Ғәлиҙең тыуыуына 90 йыл тулды. Ошо айҡанлы редакция ҡасандыр уның шәхесе, ижады тураһында замандаштары яҙған иҫтәлектәрҙе бирергә булды. Уларҙы беҙгә шағирҙың ҡыҙы Ләйлә тәҡдим итте. Улар, әлбиттә, ваҡытында республика матбуғатында сыҡты, әммә бөгөнгө көн уҡыусыһына шулай уҡ ҡыҙыҡ һәм фәһемле булыр, тигән уйҙабыҙ.*

***Редакция.***

сәсен һыйпанымы... Тимәк, йырлаясаҡ. Уйлауым рас̧ҡа сыҡты. Ул «Азамат»ты башлап ебәрҙе. Күрше-күләне менән һүҙгә мауығып, гөж килгән ҡыҙмаса ҡунаҡтар ҡапыл шымып ҡалды. Ошондайыраҡ ҡатнаш мәжлестәрҙә тәүҙә Муса йырына русса аңлатма бирә торғайны, был юлы әллә онотто, әллә кәрәк тапманы. Йырлаусының күкрәген ярып сыҡҡан моң, тулҡын-тулҡын булып, залға эркелде. Муса Ғәли бөгөн айырыуса илһам кисерә. Тауышы үҙенән-үҙе ағыла. Тыйырға теләһә лә, тыя алмас̧ ине. Уның иркендә түгел.

*Алыс̧тарҙан ғына, ай, күренә*
*Ирәмәлкәй тауҙың аҡ ташы.*
*Ҡайҙа ла ғына бармай,ниҙәр күрмәй*
*Ир-егеткәй менән ат башы.*

Йырсы туҡтағас та, йыр тынманы һымаҡ. Байтаҡ ара ул кешеләрҙе айнытмай әсир итеп тотто.

– Бөйөк йыр. Тәү тапҡыр ишетәм, – тине Олесь.

– Әйтәйемме ниндәй йыр был? Был йыр...

– Туҡта, әйтмә. Үҙем аңлағанымды һөйләйем.

– Йә.

– Ул бынан йөҙ йыл, бәлки, ике йөҙ йыл әүәл генә тыуғандыр. Әммә унда боронғо скиф далаларының ҡеүәтле ауазы бар. Ҡәҙимдә һалынған батырлыҡ ойотҡоһо бызырлай. Мин шуларҙы ишеттем. Ис̧ киткес инде: бер үк ваҡытта ул үҙенең тәү сығанағына әйләнеп ҡайтып, алыс̧ тарихтың төпкөлөн айҡай төс̧лө.

– Ғәжәп...

– Ғәжәп шул. Бөйөк әс̧әрҙәр, миңә ҡалһа, ғаләм менән бергә яралған да донъя күрергә үҙ ваҡытын, үҙ сиратын көтөп ятҡан. Мәле еткәс, кемдеңдер йәнен ярып, көнгә сыҡҡан. Йәнә ошоно һиҙемләнем: һеҙҙең халыҡ батырлығы, һуғышсанлығы менән дан тота, ләкин был йыр яуға өндәмәй. Оран һалыусы йырҙың был тиклем иркен тынлы, һуҙынҡы һәм биҙәкле булыуы мөмкин түгел.

Бына шулай асты үҙе өсөн беҙҙең «Азамат»ты Украинаның бөйөк кешеһе. Бына нимәләрҙе ишетте «ят ҡолаҡ». Йырҙы, ихтимал, яу юлдарын үтеп, иленә ҡайтып килеүсе яугир сығарғандыр. Әммә ул яуға ла саҡырмай, батырлыҡҡа ла өндәмәй. Ә бар булмышы батырлыҡҡа дан булып яңғырай һәм һағыш...

Мин Олестең һиҙгерлегенә, нескә зауығына һоҡландым:

– Рәхмәт, дус̧ым. Йырыбыҙҙы аңлап ҙурланың.

Ул, ғәҙәтенсә, тыйнаҡ ҡына йылмайҙы.

Иртәгәһен беҙ осоп киттек. Аэропортҡа оҙатырға Олесь Гончар, Борис Олейник, Дмитрий Павлычко, Иван Драч, Платон Воронько, тағы байтаҡ кеше килде. Муса Ғәли трапҡа менеп еткәс, түбәндән Олесь ҡысҡырҙы:

– Хушлашыу йыры итеп «Азамат»ты йырла әле, Муса!

Муса инәлтмәне. Траптың иң өс̧кө бас̧ҡысында тороп йырлап ебәрҙе:

*Алыс̧тарҙан ғына, ай, күренә...*

Күк йөҙө саф. Ерҙә һары нур уйнай. Донъя шундай аяҙ. Йыр һауаларға аша. Аша ла торыйҡ-торыйҡ торналар торҡолдауына ҡушыла.

*Ир-егеткәй менән ат башы.*

Стюардесса йырсыны салонға саҡыра. Ишек ябыла. Беҙ китәбеҙ. Беҙ китәбеҙ, йырыбыҙ ҡала. Хатта яманһыу...

**Мостай КӘРИМ.**

# Шағир хаҡында һүҙ

Кеше үҙенең тәбиғәте менән көҙгө мәлдә, ағастарҙан шаулап япраҡ яуғанда, айырыуса уйланыусан була. Ағастар үҙҙәре лә, үтеп киткән йәйҙе юҡһынып, тороп-тороп бер уйлана булыр. Урман буйында түшәлеп ятҡан япраҡтарҙы туҙғытып елдергән ел дә туҡтап уйланып китә төҫлө. Ҡояш та инде уйланып ҡалҡа, уйланып бата. Йыһандың бына ошо моңһоу миҙгелендә шағир бигерәк тә уйлана булыр. Үтелгән юлдар, хәүефле һәм еңеүле йылдар хаҡында, ауыр һынауҙарҙы үткән мөхәббәт һәм дуҫлыҡ хаҡында, йылдар буйына бөртөкләп йыйылған шиғырҙар хаҡында, ахыр килеп, тормоштоң мәғәнәһе һәм ҡиммәте хаҡында был көҙгө кистәрҙә уй йөрөтмәй булмаҫ шағир.

Әгәр ҙә инде шағир тигәнебеҙ ул Муса Гәли ҙә булһа, был уйсанлыҡтың бигерәк тә тәбиғи хәл икәнен күрмәй мөмкин түгел. Сөнки күренекле шағирыбыҙ Муса Гәлигә хас һыҙаттарҙың береһе – ул нәҡ ана шул уйсанлыҡ, моңсанлыҡ, тиһәм, яңылышмамдыр төҫлө.

Шағирҙың уйы ваҡыт-ваҡыт шиғыр-поэмаларын тыуҙырыуға беренсе ынтылыш биргән тыуған яҡтарына, ижад шишмәһенең башына әйләнеп ҡайта булыр.

«Бөйөк кешеләрҙән кемдер берәү әйткән: үҙегеҙ баҫып үҫкән үләндәргә бағығыҙ. Шулар бит донъяның бөтә алтындарынан да ҡәҙерлерәк. Бының шулай булыуын мин бөтә ғүмерем буйы тойҙом», – ти шағир үҙе, үткән ғүмерен иҫкә алып. Эйе, бының шулай булыуын беҙ уның шиғырҙарында асыҡ күрәбеҙ.

Муса Гәлиҙең шиғриәте – үҙ тыуған еренең мәрхәмәтле яҡтылығы менән яҡтыртылған, үҙ тыуған тәбиғәтенең күркәм биҙәктәре менән биҙәлгән шиғриәт.

*Мин диуана кеүек булам*
*ҡай саҡ,*
*Урмандарға китеп юғалһам.*
*Болан баҫҡан серле*
*һуҡмаҡтарға,*
*Моңһоу аҡландарға юл*
*алһам.*
*Мин диуана кеүек булып*
*ҡай саҡ*
*Тыңлап ятам ерем күкрәгән:*
*Тоймай ҡалһам, тимен, гөл*
*шытыуын,*
*Аңлай алмам тауҙар*
*тетрәүен.*

Был – шағирҙың һуңғы йылдарҙа яҙылған шиғырҙарының береһе. Был – минең кредом, ти шағир үҙе. Ә инде тормоштоң тәүге тәмен, тәүге әсеһен Муса Гәли Дим менән Өршәк араһындағы ҡара тупраҡлы далаларға һибелгән, ғәжәйеп үҙенсәлекле ауылдарҙың береһендә – Шишмә районының Иҫке Муса ауылында татыған. Ошонда уҡ уға мәктәп йылдарында «шиғыр ене» ҡағылған. Ошо ауылдың клубы сәхнәһендә ул аяғына кейгән яңы сабатаһы шығырлағансы дәртләнеп-елкенеп беренсе тапҡыр үҙ шиғырын уҡыған. Ул ваҡыттағы шиғырының мәғәнәһе, бәлки, сабата шығырҙауынан ары китә лә алмағандыр. Хәйер, эш сабаталамы ни!

Йомарлам май менән арыш сохарийы һалынған киндер тоҡсайын арҡаһына аҫып Өфө юлына сыҡҡанда әле 14 йәшлек малай шиғырҙы шиғыр иткән тылсымлы һүҙҙең ни икәнен күҙ алдына ла килтерә алмағандыр. Ул ваҡытта әле

(һәм һуңғараҡ та) ул малай күҙе күргән нәмәләрҙе генә шиғыр ҡалыбына һалыу менән мауыҡҡандыр. Ә ысын шағир иһә донъяны башҡасараҡ күрә, башҡасараҡ таный белә: ябай күҙгә салынмаған нәмәләрҙе тотоп алып, тылсымлы һүҙ менән балҡытып ебәрә икәнен, ысын шағир иһә хатта быуаттарҙы сәтләүектәй итеп бер-береһенә бәреп вата ла эсендәге ваҡиғаларҙың серен, хикмәтен эҙләй икәнен аңлау һәләтлеге шағирға тормош һәм ижад тәжрибәһе менән бергә килә.

Муса Ғәли, үҙе Дәүләкәндә башҡорт педагогия училищеһында уҡыған йылдарын иҫкә алып, бына нимә ти: «Һәр темаға, ваҡиғаға ҡул етте, йөрәк һәм аҡыл етеңкерәмәй ҡалды. Нәмәләрҙе тарҡатып ҡарау, анализлау һәм баһалау беҙҙең хәстәрлеккә инмәне лә һымаҡ. Шуға ла беҙ шиғриәттә йүгереп «ҡуян ҡыуҙыҡ», ә «ултырып аҡыл йыя» белмәнек. Тәжрибә беҙгә һуңыраҡ, замандың «утлы телмәрҙәре»н ишеткәс кенә килде».

Шулай итеп, ҡаршылыҡлы донъяны бөтә барлығы менән танып белеүгә дәһшәтле һуғыш юлдары аша килгән һалдат Муса Ғәли, шағир булараҡ, кешеләр рухына тәбиғәт аша инеп була икәненә төшөнә, «һәр үләндең үҙ телен табып һөйләшә», «Йыһандың иҫәпһеҙ төҫтәрен берәмләп күңеленә йыйырға ашыға». Ҡыҫҡаһы, үҙ кисерештәрен ул тәбиғәт кисереше аша һүрәтләп бирә. Сөнки тәбиғәттең ҡаршылыҡтар, драматизм менән тулы үҙ эске донъяһы бар. Шағирҙың бурысы тәбиғәттең тышҡы билдәләрен поэтиклаштырыуға түгел, ә иғтибар үҙәген уның эске донъяһында барған ҡатмарлы процесҡа йүнәлтеүҙә лә.

*Һин остоң алыҫ сәфәргә,*
*Болоттар ҡалды илап, –*

ти шағир бер шиғырында.

Шатланғанда ла, ҡайғырғанда ла үҙен шулай тәбиғәт менән бер бөтөн итеп хис итеү шағирға йыһанға бәйле ҙур фәлсәфәүи фекерҙәр, символик образдар менән эш итергә мөмкинлек бирә.

*Мең йәш йәшәнем мин ерҙә,*
*Шулай тоям бөгөн үҙемде, –*

ти икән шағир, беҙ быға ышанабыҙ. Сөнки ул үҙе булып ҡына түгел, ә ерҙең улы ла, хужаһы ла булып һөйләй.

Була шундай шағирҙар: ижадының билдәле бер мәлендә ниндәй көйҙө күңеленә һеңдереп алған булһа, тамсы ла ситкә тайпылмайынса, шул бер көйгә йырлап килә бирә. Һәм шуға ҡәнәғәт тә, минең үҙ көйөм бар, ти ул. Ихтимал, үҙенсә ул да хаҡлылыр. Муса Ғәли иһә ғүмер баҡый эҙләнә. Шиғри һүҙҙең, форманың яңы мөмкинлектәрен эҙләй. Ритм, интонация төрлөлөгөнә, символик образдарға, ассоциатив фекерләүгә ул әленән-әле ҙурыраҡ әһәмиәт бирә. Быны күрер өсөн шағирҙың һуңғы йылдарҙа яҙған «Тауҙар саҡыра», «Кояш еле», «Хәтер һыҡмаҡтары» поэмаларына һәм уҙған йыл «Ағиҙел» журналында баҫылып сыҡҡан «Франция көндәләге»ндәге шиғырҙарына иғтибар итеү ҙә етә. Әлбиттә, ассоциатив образдарға ҡоролған шиғриәттең тәү ҡараште артыҡ ҙур ҡыҙыҡһыныу уятмауы ла мөмкин. Була бит шундай дуҫлыҡ: ул йөрәккә ҡапыл ғына инмәй, ә әкренләп аҡыл аша инә. Ундай баҫалҡы дуҫлыҡ тоғрораҡ та, ғүмерлерәк тә була. Ваҡыт уҙыу менән уның мәғәнәһе лә тәрәнәйә, ҡәҙере лә арта бара. Муса Ғәлиҙең күп шиғырҙарына ҡарата ла мин шуны әйтер инем.

Хәтеремдә, «Ағиҙел» журналында уҙған йыл шағирҙың яңы шиғырҙары баҫылып сыҡҡайны. Уның оҫталығы тамам өлгөрөп еткәнлеген күрһәткән был шиғырҙар араһында айырыуса «Пушкин килә» исемле шиғыры минең күңелде биләп алды.

Көндәрҙең береһендә шағир көтмәгәндә йөрәге менән Пушкин ауазын ишетә. Пушкин һулышын тойғандай була.

*Ысҡындырмай тойғом*
*теҙгендәрен,*
*Өҫтәлемә күкрәк терәнем:*
*«Шиғыр менән һин самалап*
*ҡылан,*
*Пушкин килә!» – тине йөрәгем.*

Пушкин килә. Был изге минуттарҙың шағирға иртә лә түгел, һуң да түгел, ә тап әле килеүе бик тә ғибрәтле хәл. Тимәк, ижад дауам итә. Тимәк, шағирҙың әле шиғриәт майҙанында нәҡ ат уйнатыр сағы.

**Рафаэль САФИН.**

## Ил янмаһын өсөн ир яна

Күсәрҙән тайпылған донъябыҙ төрлө бола-боларыштан тетрәнгән заманда башҡорт шиғриәте йыл әйләнәһенә байрам артынан байрам уҙғара. Бер юбилейҙың ҡайнар һулышы һүрелеп өлгөрмәй, елдәй өйрөлөп, уға яңылары килеп ялғана, нәфис һүҙ байрамы ил-ҡәүем тантанаһына әйләнеп китә. Ҡыуаныслы хәл. Йыр-моңға, әҙәбиәткә ихтыяж, әҙиптәргә илтифат бар икән, милләтебеҙҙең күҙе йомоҡ түгел, күңел-зиһене асыҡ тигән һүҙ. Йәшәй халыҡ! Дауыт Юлтыйҙың 100 йыллығына арналған сәйәхәттә йөрөп, мин быға тағы бер тапҡыр ышандым. Туҡ буйҙарын төйәк иткән дәртле, зауыҡлы башҡорт туғандарыбыҙ әҙәбиәт-сәнғәт әһелдәрен иң яҡын бауырҙары күреп, һағынып, осрашыуҙы танһыҡлап ҡаршы алды, «зарыҡтырмағыҙ, йышыраҡ килегеҙ!» тип оҙатып ҡалды...

Һәр байрам-тамашаның үҙ мәғәнәһе, үҙ йәме. Дауыт Юлтыйҙың сыңлап өҙөлгән йырын дауам итеүсе бөгөнгө өлкән быуын әҙиптәренән берәүҙәренең һикһән йә етмеш биш йәше, йәнә өс шағирҙың етмеше тулыу айҡанлы үткән юбилейҙар әҙәбиәтебеҙ тормошоноң күренекле ваҡиғалары рәтендә.

Өс шағир тигәнем – үҙем күптән хөрмәт иткән Лоҡман-Хәким Ғиләжев, Ғилемдар Рамазанов, Муса Ғәли. Етмештәренең бер йылға тап килеүе, бәлки, осраҡлы хәлдер, ләкин мин бында символик мәғәнә лә күрәм. Улар бер оянан сыҡҡан, йәшләй ут-һыуҙарҙы кискән уртаҡ яҙмышлы яугирҙар. Абруйлы өс шағир – ғибрәтле өс яҙмыш, башҡорт әҙәбиәтенең өс рухи түбәһе.

Шуларҙың береһе – Муса Ғәли. Юбилей көндәрендә күренекле әҙиптең күп тармаҡлы ижадына байҡауҙы ғалимдар, тәнҡитселәр яһар, шиғыр-поэмалары, сәсмә әҫәрҙәре, көнүҙәк мәсьәләләргә ҡағылышлы сығыштары ентекләп тикшерелер, нарыҡланыр. Мин иһә уның тураһында байтаҡтан бирле уйлап йөрөгән ҡайһы бер фекерҙәрем менән генә уртаҡлашыуҙы үҙ өҫтәмә алдым.

Иң тәүҙә Муса Ғәлиҙең кешелек сифаттарын күҙ алдына килтерергә тырышам. Баҡһаң, ярайһы уҡ ауыр эш икән был. Инсандың һәр ҡайһыһы йомаҡ. Ә ысын шағир бер-ике һүҙ менән генә баһалар зат түгел инде ул. Миңә Муса Ғәлиҙең төрлө ваҡыттарын күҙәтергә тура килгәне бар. Бәләкәс кенә ҡыуаныстан да атҡа менгәндәй һөйөнгән, тиреһе ҡалын кеше ҡул һелтәп уҙырҙай үткенсе күңелһеҙлектән донъяһы емерелгән һымаҡ көйөнгән саҡтарын, илһамланып йырлаған, йыр йә Ҡөрьән сүрәләре уҡыған, телмәр тотҡан мәлдәрен... Бер ҡараһаң, ул көләс йөҙлө, йор һүҙле йәп-йәш егет ҡиәфәтендә. Ауырыу-сырхауҙары онотолған, иңбашына аҫыл ҡояш ҡунған. Икенсе күргәнеңдә, күҙҙәрендә тәрән эске

һыҙланыу, бар булмышында үшәнлек, төшөнкөлөк ишараһы. Ләкин күп тә үтмәй, ул баҫымсыҡ тәбиғәтле, олпат уҙаман, ихлас әңгәмәләш, һөйләшә-һөйләшә, уның зирәк фәлсәфәүи аҡылына, зауыҡлы, тәрән белемле кеше булыуына таң ҡалаһың. Икеләнмәйенсә әйтә алам: Муса Ғәли – беҙҙең иң уҡымышлы әҙиптәрҙән. Тарих төпкөлдәре, донъя айышы, төрлө илдәрҙең ижтимағи тормошо, мәҙәниәте – быларҙың күбеһенән ул хәбәрҙар, һәр береһенә уның айыҡ ҡарашы, үҙенсәлекле мөнәсәбәте бар.

Мал эйәһенә оҡшамаһа, яҙыҡ булыр, тигәндәй, юғары интеллектлы ижады ла шағирҙың күңел көҙгөһө, яныу-көйөүҙәренең, ҡылыҡ-фиғелендәге үҙгәрештәрҙең – ҡыҫҡаһы, рухи тормошоноң көндәлеге кеүек тәьҫир ҡалдыра.

Бына әле уның китаптарын ҡарап ултырҙым. Тәү уҡыуым түгел, әлбиттә, һәр йыйынтығы, шиғыр шәлкеме, поэмаһы баҫылып сыҡҡан мәлдә үк ҡулымдан үткән. Ҡайтанан уҡығанда иһә элекке фекерҙәрем тағы ла нығына, асыҡлана төштө. Бында тормош һулышы, ил башынан уҙған фажиғәле хәл-ваҡиғаларҙың, бәлә-ҡазаларҙың шауҡымы, лирик «көндәлек»тән ашып, замандың үҙенсәлекле йылъяҙмаһына әүерелгән.

Ҡайғы-хәсрәтһеҙ, вайымһыҙ, донъяһы теүәл кешенән шағир сыҡмай, тиҙәр. Борон-борондан халыҡ яҙмышын уртаҡлаған, илем, иманым тип йән атҡан, утҡа кергән шәхестәр генә үткер күҙле, саҡма һүҙле сәсән булып күтәрелгән. Муса Ғәли ҙә, үҙенең тиҫтер ҡәләмдәштәре кеүек үк, ғәрәсәтле ваҡиғалар ҡосағында сыныҡҡан, талантлы заман һандалында сүкелгән шағир. Уның ҡатмарлы, алмашыныусан хисле ижадында, һис яҙлыҡмайынса, затлы аҫалы балаҫтың буй ептәре кеүек һыҙылып үтеүсе ҙур граждандлыҡ тойғолары талпына. Улар күп ваҡыт бер-береһенә бәйләнеп, халыҡсан әйтемдәргә торорлоҡ шиғри юлдарҙа нығытыла.

«Яныр һүнә ғүмер – көл була, мең хыялың осоп ел була», – тигән раҫлау шағир йөрәген ителмәгән мораттар, юйылған өмөттәр өйкәгән саҡта тыуған булыр. Быҡың ише үкенеү, үҙ-үҙеңдән ризаһыҙлыҡ аһәңдәре уның фәлсәфәүи шиғырҙарында айырыта йыш осрай. Ә лириканың хосусиәте шунда ки: автор кисерештәре уҡыусы күңеленә лә ауаздаш булып сыға. Әйтәгүр, шундай уҡ хиресле тойғоларҙан ҡайһыбыҙ йонсомаған да, кемебеҙ йәненә дауа, ҡаҡшаған рухына таяныс эҙләп Тыуған ил тәбиғәтенә, ай-йондоҙҙарға мөрәжәғәт итмәгән. Тәбиғәт болоҡһоу күңелдәрҙе дауалай, сафландыра, йөрәккә дәрт, беләккә көс өҫтәй. Йәшел сауҡалар, күккә олғашҡан армыт-армыт тауҙар, шишмәләр сылтырауы, йәйғор биҙәктәре, йәшенле төндәр, һепертмә бурандар – барса был күренеш, тамашалар Муса Ғәли шиғриәтенең төҫөн-бәҫен, дөйөм айышын, моңон билдәләй. «Мин хыялда йылы ел булып ҡамыштарға ҡағылып иҫкәнмен, моңһоу йәмен зәңгәр күлдәрҙең бала саҡтан тойоп үҫкәнмен», – тиерлеге бар шағирҙың.

Ил яҙмышы – ир яҙмышы. Был хәҡиҡәттә Муса Ғәли: «Яу юлдарын кисеп шуны белдем: ил янмаһын өсөн ир яна», – тип тәрән мәғәнәле афоризм итеп күтәрә. Моғайын, уның ижад серҙәренең асҡысы ла ошолор әле. Баяғы ептәрҙең иң ныҡлыһы, иң сағыу төҫлөһө – ыҙғарлы һуғыш иҫтәлектәренә барып ялғана. Йәп-йәш көйө ғүмерҙәре ҡыйылған һалдаттар, яныр харабаға әйләнгән ҡала-ауылдар, ут ялмаған иген баҫыуҙары... Бына ниндәй хәтирәләр ҡағып тора шағир күңелен. Ул Тыуған илде ҡурсып һуғыш утында янған яугир дуҫтарын һағына, уларҙы илаһи заттар, әкиәт батырҙары итеп һынландыра, кеше ғүмеренең ҡабатланмаҫ мөғжизә булыуын раҫлай. «Юҡ, көл түгел, ерҙә хыял ҡалған, мираҫ ҡалған һеҙҙең ғүмерҙән», – тип фекер ебен типсеп ҡуя. Бөйөк Ватан һуғышын, уның миллион-

миллион ҡорбандарын онотторорға маташыусы, фронтовиктарға танау буйынан ҡараусы иҫһеҙ бәндәләр менән бәхәс аһәңен тоймай мөмкин түгел бында.

Күп тапҡырҙар һынағаным бар: фронтовик яҙыусыларҙың хатта ауыр холоҡлоһо ла һине таш ярырҙай ҡаты һүҙ менән рәнйетеп бармаҫ. Ижадына сағыштырғанда тамаҡ көсө баҙығыраҡ бәғзе ҡәләмдәштәребеҙгә хас бәғерһеҙлек, кешегә аяуһыҙлыҡ, торпайлыҡ юҡ уларҙа. Күбеһе юғары мәҙәниәтле инсандар, ысын зыялылар. Минең, миҫалға, Мөхәммәт Хәйҙәров йәки Ғилемдар Рамазановтың һай-һайлап дәғүәләшкәнен, кемделер битенән алғанын ишеткәнем дә, күргәнем дә булманы. Ә Хәким Ғиләжев? Ҡарамаҡҡа ҡырыҫыраҡ холоҡло тойолһа ла, заманында ике йыл бергә «Ағиҙел» журналында эшләп, уның ауыҙынан алама һүҙ сыҡҡанын, кешене кәмһеткәнен хәтерләмәйем. Иң ҡаты шелтәһе «Оятһыҙ!» булыр ине. Күптән осрашҡаныбыҙ юҡ, һуңғы йылдарҙа уны үҙгәрҙе, тиҙәр. Яҡшы яҡҡалыр, тип өмөтләнәм...

Муса Гәлиҙе әйтеп тораһы ла юҡ. Кешегә изгелек ҡылыу, хатта таш атҡанға аш атыу – уның ҡанындалыр, тип уйлайым. Ә бит бында ла фронт һабағы. Ярҙамсыллыҡ, бәлә-ҡаза килгәндә бер-береңде ҡурсалау – һалдат йолаһы, ысын ир-егеттәр заңы. «Ҡайғыларым китһә, йөрәгемде кеше ҡайғылары биләһен», – тигән юлдар уҡ шағирҙың ҡылыҡ-фиғеленә ишара.

Ләкин бынан, фронтовик әҙиптәр тешһеҙ икән, тип уйламаһындар. «Ҡырҡ алтынсы һалдат», «Йәшлек таңдары», «Ҡара һыуҙар», «Ҡыҙыл үләндәр» кеүек киң билдәле поэмаларҙа илбаҫар дошмандың, һатлыҡ йәндәрҙең, ғәрип рухлы, боҙоҡ әхлаҡлы кешеләрҙең нисек фашланыуын иҫкә төшөрһәк, шағирҙарыбыҙҙың нәфрәт уғы ҡайһы тарафҡа тоҫҡалыуын абайлау ҡыйын булмаҫ...

Муса Гәли – илгиҙәр шағир. Төрлө илдәрҙең тормошон, иҫ киткес мөғжизәләрен таң ҡалып күҙәтеү уның ижадын яңынан-яңы тәьҫораттарға, биҙәк-нағыштарға бермә-бер байыҡтыра. Ул битараф тамашасы түгел. Бында ла һуғыш хәтирәләренең шауҡымы көслө. Юҡҡамы ни яугир шағир:

*Ил гиҙеүҙәр үҙе бер*
*бәхеттер...*
*Һине көткән хөрмәт,*
*ҡәҙерҙәр бар.*
*Тик юлыңда ергә ҡарап*
*атла –*
*Үлән аҫтарында ҡәберҙәр*
*бар, –*

тип тарихҡа, әруахтар рухына абайлы булырға өндәй.

Һәр кемгә билдәле, юл йөрөгәндә күргән-кисергәндәр үҙ илеңдең хәлен донъя бизмәненә һалыу мөмкинлеген аса. Һынамышлайһың, сағыштыраһың, мәмләкәттәр, халыҡтар, төрлө ғөрөф-ғәҙәттәр, йолалар үҙгәрә, ләкин фажиғәләр ҙә, ғәм-өмөттәр ҙә оҡшаш. Кешелектең яҙмышы уртаҡ! Ошоно онотмаҫҡа кәңәш итә шағир.

Ярты быуатҡа һуҙылған ижад ғүмерендә Муса Гәлиҙең, илһамын тейешһеҙгә сарыфлаған мәлдәре лә булманы түгел. Улары – заман шойҡаны. Төп асылында иһә уның киң офоҡло, нескә хисле әҫәрҙәре тыуған ергә, тормошҡа ереккән. Ил янмаһын өсөн янып йәшәүсе шағирҙың үҙ халҡы менән ихлас шиғри әңгәмәһе дауам итә.

**Әхиәр ХӘКИМ.**

## ИҪТӘЛЕКТӘРГӘ БЕР КӘЛИМӘ

*Һуңғы йылдарҙа Зәки Вәлидиҙең тормошо һәм күп яҡлы эшмәкәрлеге хаҡында төрлө авторҙар күп кенә яҙҙы. Хәҙер инде беҙ мәшһүр шәхестең башҡорт тарихында тотҡан урынын ярайһы уҡ асыҡ күҙаллайбыҙ. Ә бына уның шәжәрәһен, туған-ырыуҙарының яҙмышын асыҡ ҡына белмәй инек, сөнки уның яҡын туғандары 20—30-сы йылдарҙа уҡ «юҡҡа сығарып» бөтөрөлгән. Был ғәрәсәттән Сара тигән һеңлеһе генә иҫән ҡалғайны.*

*Мин уны ире Абдрахман менән беҙҙең Ҡолғона ауылынан өс саҡрымдағы Һыртағас лесничествоһында эшләгән ваҡыттарынан алып беләм инем. Сара апай оло йәшкә еткәс тә һөйләшеп ултырғылаған ваҡыттар булды. Һәр һүҙен уйлап һөйләүсән, төплө фекерле, тормошҡа, кешеләргә үҙ ҡарашы булған башҡорт ҡатыны ине. Ярайһы уҡ белемле, йәш сағында башынан ифрат күп ауырлыҡтар кисергән ныҡ рухлы Сара апай, иң мөһиме, Зәки Вәлидиҙең туған-ырыуҙарының яҙмышын белгән һәм уларҙы ҡағыҙға төшөрөп ҡалдырған кешеләрҙең береһе.*

*Ҡыҙы Нурия иһә — Сара апай яҙып ҡалдырған һәм телдән һөйләгән иҫтәлектәрҙе һаҡлаусы. Уның Зәки Вәлиди һәм туғандарының яҙмышы тураһындағы мәҡәләләре республика матбуғатында ла өлөшләтә баҫылды.*

*Сара апай Зәки Вәлиди рухын дауам итерҙәй бынамын тигән балалар тәрбиәләп үҫтерҙе. Авторҙың улар хаҡында белешмә биреүе лә бик урынлы һәм фәһемле. Ғөмүмән, «Ағиҙел» уҡыусыларына иҫтәлектәр бик тә оҡшар, тим.*

**Ноғман МУСИН,**
**Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы.**



Нурия
КИЛМӨХӘМӘТОВА

# «МИНЕҢ ҠӘҘЕРЛЕЛӘРЕМ...»

*Яҙмаларымды ҡәҙерле әсәйем*
*Сара Әхмәтша ҡыҙы Вәлидова (Вәлиева)*
*иҫтәлегенә бағышлайым.*

Был бәйән – беҙҙең ғаиләнең генә түгел, ҡыҫҡаса булһа ла, бөтөн башҡорт халҡының да тормошо тураһында. Уйҙар ҡайнай, әйтәһе һүҙҙәрем дә күп, тик уҡыусымды ялҡытып ҡуймайым, тигән уй менән хәтерҙә ныҡ ҡалған ваҡиғаларҙы ғына байҡарға тырыштым. «Башҡорт халҡы – белемһеҙ булған, күсмә тормош ҡына алып барған милләт», – тип һөйләгәндәрен йыш ишеттем. Йөрәк әрнеп, бәхәсләшкән ваҡыттарым да булды. Йылдар үтә торҙо. Башҡорт халҡы ғүмер буйы белемгә, тәбиғәтте өйрәнеүгә ынтылһа ла, үҙенең ғөрөф-ғәҙәтен, ерен, телен һаҡлап ҡалыуға күпме тырышлыҡ һалһа ла, уны аң-белемһеҙгә һанауҙары зиһенде бызмырлата, йөрәкте һыҙлата ине.

Әсәйемдең нәҫеле ғүмер буйы халҡым тип, зыялы булайым тип, милләттәштәремә белем алырға ярҙам итәйем, халыҡтың тормошон еңеләйтәйем тип тырышҡан. Яҙмам бик йыраҡҡа, бынан 200 йыл элекке осорға, барып терәлә. Һүҙ башҡорттоң арҙаҡлы улы Зәки Вәлидовтың әсәһе – өләсәйем Өмөлхаят Мөхәммәткафи ҡыҙы Вәлидова (Сатлыҡова) һәм атаһы – олатайым Вәлидов Әхмәтша Әхмәтйән улы нәҫеле тураһындағы һүрәтләмәләрҙән башлана.

Шәйехзада Бабичтың шиғыры фекерҙәремә илһам өҫтәп торғандай.

*Ап-аҡ алтын йырҙарымды*
*Йырламайым данлыҡ өсөн.*
*Йырлайым алтын илем өсөн,*
*Үҙ тыуған халҡым өсөн.*

Тәүҙә Өмөлхаят өләсәйемдең атаһы Мөхәммәткафи Ҡотлозаман улының һәм уның балаларының тормош юлын асыҡлайыҡ.

## Мөхәммәткафи Ҡотлозаман улы

Имам-хатип Мөхәммәткафи Ҡотлозаман улы Сатлыҡов хәҙерге Ғафури районының Үтәк ауылында тыуа. Белемде билдәле Балыҡлыкүл мәҙрәсәһендә ала. Урыҫ телен белмәгән кешегә муллалыҡ указы алыу бик ауыр булған. Шуға күрә Мөхәммәткафи, урыҫ байҙарында хеҙмәтселектә йөрөп, уҡырға-яҙырға өйрәнә. Белемгә ынтылышы ҙур була – уҡыуын дауам итеү хыялы менән яна. Ғаиләнең матди хәле шәптән булмаһа ла, ул Бохара ҡалаһына китә. Бохара һәм Хиуа мәҙрәсәләрендә белем ала. Ауылға указлы мулла булып ҡайта.

Йәш егет дәртләнеп эшкә тотона. Ауыл халҡы уға бик ныҡ ярҙам итә. Бында беренсе мәсетте һала һәм мәҙрәсә төҙөтә. Үтәк һәм күрше ауылдарҙың балалары ошо мәҙрәсәлә һабаҡ ала башлай. Мөхәммәткафи Ямал исемле ҡыҙ менән ғаилә ҡора. Һигеҙ балаһы ла (биш малай, өс ҡыҙ)бик тәрбиәле, эшһөйәр, белемле булып үҫә. Дүрт улдары мулла була: Хәбибназар, Мөхәммәттайып, Мөхәммәттаһир –

Үтәктә, Мөхәммәтзариф – Ташбүкән ауылында (бөтәһе лә хәҙерге Ғафури районында), ә Ғабдрахман сауҙагәрлеккә тотона. Ҡыҙҙары өсәү, тигәйнем: Мәрзиә, Ғизелбанат, Өмөлхаят.

Мөхәммәткафи Ҡотлозаман улы төрлө яҡтан ғилемле булған. Фарсы телен яҡшы белә. Румиҙың шиғырҙарын ярата. Уҡыусы балаларға ла шул шиғырҙарҙы уҡый. Ғаиләлә балалар китапты иң ҡәҙерле рухи хазина итеп күрә. Сит яҡтарҙан төрлө баҫмалар алдырып, донъялағы ваҡиғаларҙы ла белеп йәшәй имам-хатип Мөхәммәткафи. Ул балаларына, ҙур белем биреү менән бергә, тормош мәшәҡәттәрен еңеп сығырға ла өйрәтә. Тирә-яҡтан килеп, күптәр унан һабаҡ ала. Мөхәммәткафи Ҡотлозаман улының вафаты – 1895 йыл, Үтәк ауылы зыяратында ерләнә. Ҡәберенә мәрмәр таш ҡуйылған. Ваҡыт үтеү менән ул таш икегә бүленеп ауғас, Үтәк халҡы ҡәберлекте таҙартып, ватылған таштың ике яртыһын бер-береһенә ялғап, нығытып, тәрбиәләп ҡуя. Ул ҡәбергә халыҡ әле лә йөрөй, доғалар уҡый. Мөхәммәткафи төҙөгән мәсет менән мәҙрәсәне Совет власы ваҡытында күсереп һалып, мәҙәниәт йорто итеп файҙаланалар.

Ауыл халҡы күңелендә Мөхәммәткафи биргән белем һәм тәрбиә әле лә онотолмай.

## Хәбибназар Үтәки

Мөхәммәткафи Сатлыҡовтың иң оло улы Хәбибназар Үтәки 1862 йылдың 12 сентябрендә (иҫке стиль менән) Өфө губернаһы Стәрлетамаҡ өйәҙенең Үтәк ауылында тыуған.

Хәбибназар Үтәкиҙең тормош юлына айырым туҡталып китәм, сөнки ул – ғалим, мәғрифәтсе, Зәки Вәлидиҙең остазы, тәрбиәсеһе, буласаҡ юлбашсыға ныҡлы белем, рух биргән шәхес.

Хәбибназар башланғыс белемде атаһының мәҙрәсәһендә ала. 1873 йылдан уҡыуын Стерлетамаҡта дауам итә. Ошонда ислам нигеҙҙәрен, логика, хоҡуҡ фәндәрен төплө өйрәнә. 1879 йылда күренекле мәғрифәтсе Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев ҡулы аҫтында урыҫ теле, математика фәндәрен үҙләштерә.

Хәбибназар, бик зирәк шәкерт, юғарыраҡ белемгә ынтыла. Ошо маҡсат менән, ата-әсәһенең фатихаһын алып, Ҡазан ҡалаһына юллана.

Бында Хәбибназарға сығышы менән Үтәк ауылы кешеһе Мостафа Әмирхан ҙур ярҙам күрһәтә. Ул Ҡазанда тиҫтәләгән магазин, ҙур булмаған тире эшкәртеү заводы тотҡан. Уның ярҙамы менән Хәбибназар «Мәржәниә» мәҙрәсәһендә Мәржәни хәҙрәткә дәрескә йөрөй. Уҡыу йортон тамамлағас, ошонда мөғәллим итеп ҡалдырыла. Остазы менән бергә фәнни хеҙмәттәр яҙа. Мәржәни хәҙрәттең бай китапханаһында күп ғалимдарҙың мираҫы менән таныша һәм һуңғы көндәренә тиклем хәҙрәттең яҡын дуҫы, ярҙамсыһы һанала.

Ваҡыт үтеү менән, Хәбибназар хәҙрәт насар күрә башлай, күҙлек кейеп йөрөргә мәжбүр була. Көнө-төнө китап өҫтөндә ултырған кешегә был хәл ҙур ауырлыҡ тыуҙыра. Ошо арҡала ул 1889 йылда тыуған ауылы Үтәккә ҡайта, имам-хатип һәм мөдәрис вазифаһына урынлаша. Яңыса уҡытыуҙы ойоштороп ебәрә. Мәҙрәсәнең даны тирә-яҡҡа тарала.

Уҡытыу эшен уңайлыраҡ итеү өсөн мәктәп биналары төҙөтә башлайҙар. Унда Ташбүкән ауылына илткән юлдағы ташты ҡулланалар. Эш башлар алдынан, 1893 йылда, Ҡазанда был таштарҙы тикшереп, яраҡлы тип табалар. Ете мәҙрәсә бинаһының барыһы ла тип әйтерлек ошо материалдан төҙөлә.

Хәбибназар хәҙрәт – күркәм холоҡло, тыныс кеше, халыҡ менән тиҙ уртаҡ тел таба. Һәр ваҡыт белем алырға өндәй. Халыҡтың ихтирамын яулай, уға таяныс була.



*Хәбибназар хәҙрәт Үтәки.*

Хәҙрәт йәштән үк төрки халыҡтарҙың үҙ аллы юлға баҫыуын көтә. Бының өсөн уҡытыу-тәрбиә йүнәлешендә күп эшләргә кәрәклеген аңлай. Мәҙрәсәлә донъяуи фәндәргә иғтибарын көсәйтә. Шәкерттәргә урыҫ телен өйрәтеүҙе кәрәк тип таба, хатта губернаторҙан шундай класс асыуға рөхсәт, аҡса юллап ала. Тик дини халыҡ быға ҡаршы төшә, һәм Хәбибназар хәҙрәт юллап алған аҡсаға Петровск ауылында урыҫ мәктәбе һалына. Бик тырыш, белемле шәкерттәрен хәҙрәт Троицк ҡалаһына үҙе алып барып уҡырға индерә. Һуңғараҡ уның ниәте бойомға аша: 1912 йылда мәҙрәсә эргәһендәге ирекле мәктәптә урыҫ телен уҡытыу өҫтәлә.

Мәҙрәсәләр заманы үткән, тип Хәбибназар хәҙрәт Үтәктә заман талабына яуап биргән ислам колледжы һәм агрономдар әҙерләүсе ауыл хужалығы мәктәбе асырға хыяллана. Ауыл халҡының көнкүрешен яҡшыртыу, йәшәү кимәлен күтәреү тураһында ла ҡайғырта. Картуф менән бер рәттән, еләк-емеш үҫтерергә өгөтләй. Ҡалаларҙан алмағас, сейә үҫентеләре алып ҡайтып, халыҡҡа тарата. Ул Үтәкте мәҙәниәт һәм фән үҙәгенә әйләндерергә тырыша, ләкин тормош үҙенекен итә: 1914 йылғы Беренсе Бөтә донъя һуғышы, 1917 йылдағы революциялар изге башланғыстарҙы юҡҡа сығара. Хәбибназар хәҙрәт ауылда йәшәһә лә, Рәсәй һәм донъя ваҡиғалары, сәйәсәт менән ҡыҙыҡһына һәм шөғөлләнә, мәҙрәсәләр өсөн ҡулланмалар яҙа. Петербургтан, Ҡазандан, Ырымбурҙан, Әстерхандан, Баҡынан, Ҡырымдан гәзит-журналдар алдыра. Уның бик бай шәхси китапханаһы була. Ташкенттағы китап магазиндары менән дә бәйләнеш тота. Тарихи мәҡәләләр, әҙәби әҫәрҙәр, фәнни хеҙмәттәр яҙа. Ислам тарихына арналған «Тарихтар асҡысы» хеҙмәтен төрөксә баҫтыра. Метафизика һәм физика китабына ғәрәп телендә аңлатмалар теркәй, Үтәктең, тирә-яҡ ауылдарҙың тарихын ҡағыҙға төшөрә.

Хәҙрәтте 1917 йылда Өфө Диниә назаратының мөхтәсибе итеп ҡуялар. Бер аҙҙан, сәләмәтлеге насар булғанлыҡтан, был эштән азат итеүҙәрен үтенә. Кире ауылға ҡайтып, һаулығы булмаһа ла, ятаҡан халҡына белем биреүҙе дауам итә. Бик ауыр осор була был: бер көн аҡтар килә, бер көн – ҡыҙылдар. Ошо буталыш ваҡытында ҡыҙылдар Хәбибназарҙы, аҡтарға ярҙам итеүҙә ғәйепләп, ҡулға алып, атмаҡсы була. Ауыл халҡы берҙәм сығып: «Атмағыҙ, күҙ терәп торған кешебеҙ бит», – тип уны үлемдән йолоп ҡала.

Хәбибназар Үтәки 1921 йылдың 25 июнендә вафат була. Был турала Зәки Вәлидигә атаһы Әхмәтша Вәлидов хат аша хәбәр итә: «Мәрхүм Юрматы илендә бер әүлиә кеүек хөрмәт күрҙе. Йыназаһына һәр тарафтан шул тиклем күп кеше йыйылды, һуңғы йылдарҙа, айырыуса совет осоронда, был ҡәҙәр бер йыназа ла булманы». Әхмәтзәки Вәлиди юғалтыуҙы бик ауыр кисерә. Ауыл халҡы, хәҙрәт менән бәйләнеш тотҡан һәр кеше тәрән ҡайғыра, уға арнап шиғырҙар сығара.

Хәбибназар хәҙрәтте үтәктәр һаман хәтерләй. Ауыл мәктәбендә уға арналған бай музей бар. Был музейҙы нәҡ үҙҙәренең теләге һәм көсө менән уҡытыусы Рауил Әнүәр улы Раҡаев һәм мәктәп директоры Ришат Дауыт улы Мәхмүтов ойошторған. Уларға нәҫелебеҙ исеменән ҙур рәхмәтебеҙҙе белдерәбеҙ.

Ғалим, мәғрифәтсе Хәбибназар Үтәкиҙең эшмәкәрлеге, тормош юлы аҙ өйрәнелгән. Ғалимдар ошо эшкә иғтибар итһә, киләсәк быуындар өсөн байтаҡ тәрбиәүи һәм ғилми һорауҙарға яуап табылыр ине.

# Мөхәммәттайып

Мөхәммәттайып аталарының мәҙрәсәһендә белем ала. Был бик тәрбиәле, эшһөйәр мулла Үтәк ауылында бихисап балаларға төплө белем бирә. Миңә тормошомда Мөхәммәттайып бабайҙың ҡыҙы Ғәфифә инәйҙең балалары менән аралашып йәшәргә тура килде. Ғәфифә инәйҙең үҙе менән әсәйем Сара, һирәкләп булһа ла, хәл белешеп йәшәнеләр. Торған урындары төрлө районда булғас, бик йыш осраша алманылар.

Хоҙай ярҙамы менән 60-сы йылдарҙан һуң күп туғандар Өфөлә йәшәне. Улар араһында Ғәфифә инәйҙең ҡыҙы Әминә апай, һуңынанраҡ икенсе ҡыҙы Нәжибә апай менән дә осрашып-күрешеп торорға мөмкинселек тыуҙы.

Ғәфифә инәйҙең тормошо ифрат фажиғәле. Тормош иптәше менән Учалы районында йәшәгән ваҡытта, 1937 йылда, Ямалетдин бабайҙы, «халыҡ дошманы» тип, һөргөнгә алып китәләр. Бабай әйләнеп ҡайта алмай, 1942 йылда вафат булып ҡала. Ниндәй сәбәптән үлгәне билдәле түгел.

Ямалетдин бабайҙы алып киткәндә Ғәфифә инәйҙең ҡулында дүрт бала ҡала: Нәжибә, Әминә, Нәжип, Фуат. Ғәфифә инәй бик белемле һәм дингә мөкиббән кеше булған. Хәбибназар мулланың ҡулында белем ала, һуңынан үҙе лә балалар уҡыта. Минең өләсәйем Өмөлхаят кеүек, үләндәрҙе дауа итеп ҡулланырға өйрәнә, кешеләрҙе дауалай. Ул иҫ киткес ярҙамсыл, иғтибарлы кеше була. Үҙенең балаларын да зыялы итеп тәрбиәләргә тырыша. Нәжибә апай менән Әминә апай уҡытыусы булдылар. Улдары Нәжип менән Фуат ағайҙар ҙа бик белемле ине. Әминә апайҙың улы Илдар – юрист, ҡыҙы Клара – иҡтисадсы. Барыһының да балалары уҡыуға тырыш, эшһөйәр, намыҫлы кеше булып йәшәй.

Мөхәммәттайып бабайҙың бүләһе Илдар Үтәк ауылы зыяратында ерләнгән ҡарт олатаһының ҡәберен әле лә тәрбиәләп тота. Ҡәбергә яңы мәрмәр таш ҡуя. Олаталарының тәрбиәлелеге, изгелеклелеге балаларының, ейәндәренең, бүләләренең йөрәгендә әле лә һаҡлана.

Тормош тигәнең – ғәжәп... Клара исемле сибәр ҡатын менән бер ойошмала эшләйбеҙ. Ипләп кенә бер-беребеҙ менән иҫәнләшәбеҙ. Ҡайһы ваҡыт һөйләшеп тә алабыҙ. Сит кеше менән ҡапыл ғына аралашып-асылып та булмай. Шулай ҙа минең күңел был ҡатынға бик тартыла. Был хәлдең сере бер-беребеҙҙе белгән мәлдән ике йыл үткәс кенә аңлашылды. Йәйҙең матур көнө. Ҡояш бөтөн донъяны йылыта, күңелем тыныс. Ял көнө ине. Ашыҡмай ғына йомоштарымды йомошларға Өфөнөң Коммунистик урамы буйлап иҫке универмаг яғына атлайым. Ҡаршыма һөйкөмлө, ап-аҡ яулығын сөйөп ябынған бер апай килә. Ара йыраҡ ҡына. Тик мин нишләптер шул апайҙан күҙемде алмайым. Эргәһендә кемдәрҙер бар. Мин уларға иғтибар ҙа итмәйем.

Бына апай минең тәңгәлгә етте. Ныҡлап тағы ҡарай төштөм. Өндәштем, сөнки был апайҙың йәнәшенән эштәге танышым – баяғы Клара килә. Туҡтаным. Клара ла туҡтаны һәм миңә: «Һаумы, Нурия Абдрахмановна. Таныш булығыҙ, был – минең әсәйем Әминә», – тине. Ә Әминә апай тураһында мин ғүмер буйы әсәйемдән ишетеп йәшәнем. Һөйләшә торғас, аңлашылды: Әминә апай әсәйемдең әсәһе яҡлап яҡын туған икән. Тормош мөмкинлек биргән һайын осрашып, ҡатнашып йәшәгәндәр. Шулай итеп, Клара менән беҙҙең бер-беребеҙгә тартылыуҙың, Әминә апайға йыраҡтан уҡ күҙ һалып, уға ынтылып атлауымдың сәбәбе аңлашылды. Шул осрашыуҙан һуң бер-беребеҙҙе юғалтманыҡ, туғанлыҡ ептәрен өҙмәнек.

# Мәрзиә инәй

Был нәҫелдең башҡа быуындарында ла халҡы өсөн янған, зыялы кешеләр күп. Үҙем белгән тиклем улар тураһында ла һөйләгем килә.

Имам-хатип Мөхәммәткафи Ҡотлозаман улының ҡыҙы Мәрзиәнең балаларының да тормошо бик фәһемле. Мәрзиә инәй Ғафури районының Яңғыҙҡайын ауылында йәшәй, ире мулла булған. Ҡыҙы Мәрйәм апай бик аяныслы яҙмыш кисерһә лә, барлыҡ ауырлыҡтарҙы еңеп, балаларын, туғандарын аяҡҡа баҫтырҙы һәм тәрбиәләне. Миңә лә, Хоҙай Тәғәләнең рәхмәте менән, уға яҡын йәшәргә, тәрбиә һәм фәһем алырға насип итте. Мәрйәм апай иҫ киткес изгелекле, белемле, тәрбиәле, дингә мөкиббән бирелгән кеше ине. Уның шулай туған йәнле булыуын ғәжәп ҡыла торғайным. Ул миңә былай тине: «Барлығы ике бала таптым, ә ете бала үҫтерҙем». Ул ғүмер буйы яҡындарының ҡайғыһын, мәшәҡәтен үҙенеке кеүек ҡабул итте һәм уларҙы ярҙамынан өҙмәне.

1937 йылда ире Хажиәхмәт Әмиров менән Мәрйәм апайҙы ла ҡулға алалар.

Ике балаһын – ҡыҙы Ләлә менән улы Миҙхәтте – балалар йортона ебәрәләр.

Хажиәхмәт бабай совет хөкүмәтенә ысын күңелдән хеҙмәт итә. Оҙаҡ ваҡыт мәктәп, техникум директоры вазифаһында эшләй. Шуға ҡарамаҫтан, уны «халыҡ дошманы» тип ун йылға хөкөмгә тарттыралар.

Мәрйәм инәй һорау алғанда ныҡ торған. Ниндәй ғәйеп таҡһалар ҙа, баш тартҡан. Үҙҙәренә кәрәк мәғлүмәтте ала алмағас, ярты йылдан ашыу ултыртҡандан һуң, уны төрмәнән сығаралар. Ҡайтыу менән, балаларын эҙләп табып, Урта Азияға китә. Яңы урында бик күп ауырлыҡтар кисерә. Ҡайҙа ғына эшләмәй ул. Улы Миҙхәттең броне булһа ла, үҙе теләп һуғышҡа китә. «Кешеләр һуғыштан еңеп ҡайтыр, мин уларға нимә тип әйтермен?» – ти ул. Үкенескә ҡаршы, фронтта һәләк була.

Мәрйәм апайҙың ҡыҙы Ләлә 1947 йылда Ташкентта Хоҡуҡ институтын тамамлай. Урта Азияның төрлө райондарында прокурор ярҙамсыһы, прокурор булып эшләй.

Хажиәхмәт бабайҙы аҡлап, һөргөндән ҡайтаралар. Ғаилә Башҡортостанға ҡайтыу юлын эҙләй башлай. Ниһайәт, 1957 йылда был бәхеткә өлгәшәләр. Ләлә апай Өфөлә төрлө юридик вазифаларҙа эшләй. 1959 йылда уны республиканың юстиция министры итеп ҡуялар. Был яуаплы вазифала хаҡлы ялға киткәнсе, барлығы 14 йыл эшләй.

Ләлә апайҙың улы Валерий Иҙрисов та, уның ҡыҙҙары Аида менән Лира ла әсәһе, өләсәһе юлын һайланы – хоҡуҡ белгестәре. Тормошта үҙҙәренең ныҡлы урынын тапҡан кешеләр, сөнки уларға ғүмер буйы Мәрзиә, Мәрйәм өләсәләренең доғалары ярҙам итеп килә. Миндә Мәрзиә инәйҙең доғаһы һаҡланған. Уны әсәйем Сара биргәйне.

*Шөкөр ниғмәт, шәһи дәүләт,*
*Яҡты иман бир.*
*Хоҙайым, донъялыҡта дәүләт бир,*
*Телемә зекер, тәсбих бир,*
*Күңелемә тәүфиҡ бир,*
*Әхирәттә йәннәт бир.*
*Аллаһу әкбәр.*

Ләлә апай, оло йәштә булһа ла, тормоштоң ҡәҙерен белеп, улы Валерийҙан ҡәҙер-хөрмәт күреп йәшәй. Күптән түгел уға 88 йәш тулды. Яҡын туғандарҙы эргәһенә йыйып, иҫтәлекле мәжлес үткәрҙе. Шундай ҙур урында эшләп, барлыҡ

ваҡиғаларҙың уртаһында ҡайнаған кеше булғас, һорауҙар биреп уны йонсотабыҙ. Ул – бик ҡәтғи кеше: «Мейемде ҡайнатмағыҙ, йөрәгемде әрнетмәгеҙ», – тип яуап бирә. Ул хаҡлы: шатлыҡлы көндәре лә, әрнеүле мәлдәре лә ғүмерендә күп булған шул.

## Ғизелбанат

Мөхәммәткафиҙың икенсе ҡыҙы Ғизелбанат бик уңған, сибәр, белемле була. Үҫеп еткәс, Ғафури районының Ташбүкән ауылы егетенә кейәүгә сыға. Ире мулла була. Ғизелбанат бик иртә донъя ҡуя. Өммөгөлсөм исемле ҡыҙы ҡала. Был баланы олатаһы Мөхәммәткафи үҙе үҫтерә.

## Өмөлхаят өләсәйем


*Өмөлхаят өләсәй менән Әхмәтша олатай.*

Был бүлекте Зәки бабайыбыҙҙың «Хәтирәләр»ендә өләсәйебеҙ Өмөлхаят тураһында яҙып ҡалдырған һүҙҙәренән башлап китмәксемен. «Әсәйем иһә, һаҡсы фәрештә кеүек, һәр саҡ янымда булды. Әсәйемдең иң ныҡ йәлеп иткән сифаты – күңелендә әҙәпкә өндәгән бихисап әхлаҡи шиғырҙар һаҡланыуы. Мин уны ғүмер буйы һис бер ваҡыт хатта кескәй генә лә гонаһ эшләмәгән һәм миңә ҡарата сикһеҙ изгелекле кеше итеп иҫемдә ҡалдырғанмын».

Әсәйем Сара Әхмәтша ҡыҙы ла ғүмеренең һуңғы сәғәттәренәсә үткән тормошон, бала сағын, атаәсәһен, туғандарын иҫкә алып ятты. Әсәйем вафат булғанға күп йылдар үтһә лә, уның һөйләгәндәре хәтергә ныҡ һеңгән. Һөйләгәндәренең күп өлөшөн яҙып барғанмын. Ошо яҙмаларыма таянып, хәтеремдә һаҡланғандарҙы файҙаланып, әсәйемдең әсәһе, йәғни өләсәйем Өмөлхаят Мөхәммәткафи ҡыҙы тураһында һөйләүемде дауам итәм.

Өмөлхаят өләсәйем Ғафури районы Үтәк ауылында 1871 йылда тыуа. Уның атаһы Мөхәммәткафи, Үтәк ауылының указлы муллаһы, фарсы телен яҡшы белгән. Өләсәйем Өмөлхаят бала сағынан ғәрәп, фарсы телдәрен өйрәнә. Хужалыҡта кәрәгер бар эште белеп үҫә. Ун алтыһы тулғас, уны Көҙән ауылы муллаһына – бик белемле, бик уңған Әхмәтша Вәлидовҡа кейәүгә бирәләр.

Ауылдаштарының, туғандарҙың хәтерендә ҡалғандарҙан: «Өмөлхаят абыстай тәбәнәк кенә буйлы, алһыу йөҙлө, бик аҡыллы, ғилемле ҡатын ине. Ул һөйләй башлаһа, тыңлап ултырғанда ҡоштар булып осҡо килә ине. Һөйләгәндә йыр менән көйләр ине», «...яҙып ҡуйған йыр-бәйеттәре лә булған. Әңгәмәләшкәндә тиҙ генә йә бәйет, йә йыр, йә шиғыр уйлап сығарған, йәғни сәсәнлек һәләте асылған».

Әхмәтша олатай менән улар бер-береһенә бик ихтирамлы булған. Үҙ-ара бик шым ғына, иплəп кенә һөйләшкәндәр. Тормоштоң йәмен, ҡәҙерен белеп йәшәгәндәр. Өләсәйем Өмөлхаят һәм олатайым Әхмәтша хәҙрәттең ун өс балаһы тыуған. Ошо балаларҙың алтыһы тере ҡалып, матур, белемле, тәрбиәле булып үҫкән. Бына улар: Әхмәтзәки, Ғәбделбарый, Ғәбделрәүеф, Ғәбделхәй, Сара, Зәкиә. Әсәйемдең хәтерләүе буйынса, барыһы ла бик туған йәнле булған, бербереһе өсөн өҙөлөп торған.

Әсәйем һөйләй торғайны: «1914 йылдан башлап, күп ваҡиғаларҙы яҡшы хәтерләйем. Уға тиклем булғандар иҫемдә бик үк ҡалмаған. Миңә 1914 йылда 8 йәш тулды. Ошо йылдың 1 марты (иҫке стиль менән). Яҙҙың бер сыуаҡ көнө. Яҙ иртәрәк килдеме икән, ҡар ныҡлап ирей башлаған. Оло йортобоҙҙоң алдында бәләкәй йорт бар ине. Иртә менән бәләкәй өйгә бик күп ҡыҙҙар йыйылған. Улар дәрескә килгән. Уларҙы минең әсәйем уҡыта. Ҡыҙҙар йыйылған да бит, тик әсәйем юҡ. Мин дә бер ни белмәйем. Ҡыҙҙар ҙа аптырашып тора. Улар төрлөсә шомланышып торғанда, бер ҡыҙ йүгереп килеп инде. «Һөйөнсө, ҡыҙҙар, һөйөнсө! Абыстайҙың ҡыҙы бар», – тине. Ҡыҙҙар һөйөнөп, балаға исем эҙләп, әсәйемдең тиҙерәк шәбәйеүен теләп, «Имтихан ваҡыттары етеп килә бит», – тип, уҡыуҙары туҡтап торғанға борсолғандай итеп таралышты».

Был ҡыҙыҡай әсәйемдең ун өсөнсө балаһы ине. Ул балаға Зәкиә тип исем ҡуштылар. Әсәйем ошо ун өсөнсө баланан һуң ғына уҡытыуын туҡтатты. Нисек өлгөргәндер. Йорт тулы бала, ҡатмарлы йорт-ҡура, килгән дәрәжәле кешеләрҙе ҡаршылау, аш-һыу бешереү (аш-һыуҙы ғаиләгә гел үҙе әҙерләр ине), балалар уҡытыу. Әсәйем ауыл халҡы өсөн гелән изгелекле булды. Дауахана юҡ. Кешеләр гел уға ярҙам һорап килә. Барыһына ла үҙенең тәжрибәһе еткәнсә ярҙам итә. Күп дауалау ысулдарын китаптан уҡый ине. Тибет табиптарыныҡы ла бар ине. Ул китаптар революционерҙар Зәки Вәлидиҙең беренсе китапханаһын яндырғанда юҡ ителгән. Ул йылдарҙа аслыҡ-яланғаслыҡ көслө ине. Изге күңелле әсәйем кешеләргә айырыуса кешелекле булды. Бер ярлы күрше ҡатын үлә. Уны төрөп ерләрлек сепрәк тә таба алмайҙар. Әсәйем үҙенең алмаш күлдәген биргәс, теге меҫкенде шул күлдәккә төрөп ерләйҙәр. Йәй көнө байрам ваҡыттарында күрше балаларын йәшел сиҙәмгә ултыртып, табаҡ-табаҡ аштар ашата ине.

Умарта ҡараған саҡтарҙа Ғәбделхәй ағайым менән балауыҙлы балды умартаһыҙ кешеләргә ауылдың осона тиклем сеүәтәләп ташый торғайныҡ.

1921 йыл бигерәк аяныслы булды. Ауыл буйлап башҡа яҡтарҙан килгән һоранып йөрөүселәр күп... Улар килеп инһә, һәр береһенә нимә булһа ла биреп сығара инек. Бигерәк тә тау яғынан хәле бөтөп килгән кешеләр күп. Ашты мулыраҡ бешерһәк, ауылда ауырыраҡ торған кешеләргә лә индереп бирә инек. Иң ныҡ хәтерҙә ҡалғаны – әсәйемдең һәр бер килгән кешегә асыҡ йөҙө. Йәш кенә көйөнә бала-сағалары күп, ҡыҙҙар уҡыта, биш ваҡыт намаҙын ҡалдырмай, өй эше, халыҡты дауалау, килгән-киткән кешене хөрмәтләү – һәммәһенә өлгөрҙө. Баҡсабыҙҙа төрлө емеш ешәк ағастары үҫә ине. Уларҙы тәрбиәләй, өлгөргәс, емештәрен йыя, уларҙы эшкәртә. Тәмле-тәмле бәлештәр бешергәне әле лә иҫемдә. Баҡсаларҙа картуф, ҡабаҡ, ҡыяр, башҡа йәшелсәләр тулып ятыр ине. Тирмәндә киптерелгән муйылды тарттырып, он итеп, һуңынан муйыл майы эшләр ине.

Атайым 1909 йылда әсәйемдең артынан килгән бер аҙ малды һатып, Көҙән ауылы халҡының ярҙамы менән хажға китә. Ярты йыл йөрөп, март айында ғына ҡайта. Барыбыҙға ла булдыра алған тиклем бүләктәр алып ҡайта. Миңә Ҡөрьән-Кәрим, тиҫбе алып ҡайтҡайны. Ул әле лә һаҡлана. Бөтә донъя мәшәҡәттәре, атайым киткәс, әсәйем өҫтөндә ҡала. Атайым «Хаж сәфәре» тигән китап яҙҙы. Ул китапты ҡулына эләктергән һәр мосолман бик кинәнеп уҡый.

Әсәйемдең төп маҡсаты балаларына дөрөҫ тәрбиә һәм белем биреү ине. Ир балаларының тыуған йорттан китеп белем алыуын хуп күрҙе. Тик оҙаҡҡа китеүҙәрен бик ауыр кисерә, өҙгөләнә, әрней. Өҙөлөп һағынып көтөп ала. Улар ҡайтҡас, ипле генә итеп ғаилә мәжлесе үткәрә. Ағайҙарым уҡыған ерҙәренән мандолина, скрипка, гармун алып ҡайта. Мандолина менән скрипканы үҙҙәре лә яһай. Атайыма күрһәтмәй генә ағайҙарым ошо инструменттарҙа уйнар ине. Һуңынан мин дә мандолинала уйнарға өйрәндем. Әсәйем улдарының музыка

ҡоралдарында уйнағандарын бик ихлас, кинәнеп тыңлар ине. Ағайҙарым бик зиһенле булды. Зәки ағайым үҙенән бәләкәй балалар менән уйнамаған, гел үҙенән олораҡ, белемлерәк балаларға тартылған. Уларҙың уйындары ла ябай булмаған, берәй һөнәр уйлап сығарып уйнар булғандар. Зәки ағайым Үтәк мәҙрәсәһендә уҡығанда Ер шары макетын эшләгән.

Ғәбделбарый ағайым бик белемле ине. Мәктәптә урыҫ телен уҡытты. Ғәбделбарый ағайым менән Ғәбделрәүеф ағайым Ҡазанда белем алдылар. Ғәбделхәй ағайым Ырымбур ҡалаһында Каруанһарайҙа уҡыны.

Мин башланғыс белемде ауыл мәҙрәсәһендә алдым. Ун дүрт йәшем тулғас, Зәки ағайым мине, артабан уҡытыр өсөн, Стәрлетамаҡ ҡалаһына үҙе янына алды. Ай ярым ғына уҡып ҡалдым. Миңә дәрестәрҙе Абдулҡадир Инан Сөләймәнов бирҙе. Зәки ағайымды Мәскәүгә Сталин саҡыртып алды. Шулай итеп, минең уҡыу туҡталды. Атайымдар мине кире ауылға алып ҡайтты. Был 1920 йылдың апреле ине.

Балалар үҫеп, атайым менән әсәйем тыныс ҡына йәшәп ятҡанда, атайымды алып китеп, өс айға төрмәгә ултырттылар. Зәки Вәлидиҙең атаһы, тип бер үҙен генә камерала тоталар. Суд «Башҡортостан еренән өс йылға сығарып ебәрергә» тигән ҡарар сығара. Әсәйем, атайымды ныҡ йәлләп, донъяһын ташлап, бергә китә. Верхнеуральскиҙа йәшәйҙәр. Мин ул ваҡытта Белорет районы Һаралы ауылы муллаһы Мәсәлим Вәлиевтың улы Вәлиев Абдрахманда тормошта инем. Атайым менән әсәйем Верхнеуральскиға (һөргөнгә китеп барғанда) Һаралы ауылына минең янға хәл белергә инеп сыҡтылар. Мине «Тау араһына, йыраҡҡа кейәүгә бирҙек» тип тә йәлләйҙәр ине. Һөргөнгә китер алдынан уларҙа Ғәбделбарый ағайымдың ҡыҙы Ғәфифә туғаным йәшәне. Әсәйем Ғәфифә туғаныма айырым хаттар яҙа ине».

Ғәфифә туғанымдың хәтирәләренән: «Минең өсөн донъяла иң яҡын кешеләрем олатайым Әхмәтша менән өләсәйем Өмөлхаят булды. Атайым үлгәс, өләсәйем мине үҙҙәренә алды. Шуға ла үҙемдең етемлекте һиҙмәнем. Иркәләрҙәр, наҙлы һүҙҙәр әйтеп, башымдан һыйпарҙар ине. Олатайым менән өләсәйемдең бер-береһенә асыуланышыу түгел, үпкәләшкәндәрен дә хәтерләмәйем. Өләсәйем бер ҙә генә тик ултырмаҫ ине. Гел эш менән мәшғүл ине. Ҡыҙҙар уҡытты. Уҡыған ҡыҙҙарҙың уны шул тиклем иғтибар менән тыңлауҙарын мин һоҡланып ҡарап тора инем. Рәхәт кенә йәшәп ятҡанда, бөтә донъяны ҡара болот ҡаплағандай, ауыл халҡын ҡайғыға һалып, кешеләрҙе һөргөнгә оҙатыу, мал-тыуарҙы тартып алыу башланды. Олатайым менән өләсәйемде Верхнеуральскиға оҙаттылар. Ҙур әнейем хаттарында шиғырҙар яҙыр ине.

*Верхнеуралдың урамын*
*Тапап туҙҙырып булмай.*
*Сит илдәрҙә ҡыйын икән,*
*Ғүмер уҙғарып булмай.*

Олатайым менән өләсәйемде һөргөндән алданыраҡ ҡайтаралар. Милиция хужаһы изгелекле кеше була. Ул: «Хөрмәтле Әхмәтша хәҙрәт, һеҙҙең бит бер ғәйебегеҙ ҙә юҡ. Илегеҙгә ҡайтығыҙ. Ҡабат ебәрһәләр, күп булһа тағы миңә ебәрерҙәр», – ти. Олатайым менән өләсәйем шатланып тыуған илдәренә юллана. Ҡайтҡан саҡта тағы әсәйем янына, Һаралы ауылына, керәләр. Ғәфифә апайымды үҙҙәре менән алып ҡайтып китәләр. Улар ауылға ҡайтҡас, халыҡ бик шатлана. Мөмкин тиклем ярҙам итәләр. Ике йыл үткәс, бәләкәй генә өй һатып алалар. Ситәндән үрелгән солан, ер иҙән. Элекке кеүек шатланып йәшәү бөтә.

Күҙҙәренән йәш кипмәй. Йоҡлай алмай йонсойҙар. Һөргөндә лә йоҡлай алмағандар, дарыу бирһәләр, эсмәгәндәр, үлтерер өсөн бирәләр, тип уйлағандар.

1937 йылдың июль айында өләсәйем, Ғәфифә апайымды етәкләп, Ишембай ҡалаһына бәләкәй ҡыҙы Зәкиә апайҙарға бара. Ир балаларының берәй хәбәрен ишетмәмме, тип уйлай. Ике-өс көн торғас, өләсәйем нимәлер һиҙенә, борсоу баҫа күңелен: «Ҡайтайыҡ, ниңәлер йөрәгем әрней», – ти. Йәйәүләп юлға сығалар. Сәлих ауылына килеп еткәс, ҡаршыға Көҙән ауылынан килгән ҡатын осрай.

– Абыстай, ҡайҙан ҡайтып киләһең? Кисә мулла абзыйҙы ҡара машинаға ултыртып алып киттеләр бит, – тигән.

Үкһеп-үкһеп илап, арығандарын онотоп, бер йүгереп, бер атлап, кире Көҙәнгә ҡайтып етәләр. Өй бикләнмәгән. Соландың ер иҙәненең яртыһына таш түшәлгән. Өләсәйем тирә-яҡҡа ҡарана. Олатайымдың арып өйгә сәй эсергә ингән булғаны күренеп тора. Самауырға һыу һалған. Сәй ҙә эсермәйенсә алып киткәндәр. Олатайым өләсәйемә тип бер киҫәк шәкәр тығып ҡалдырған. Уларҙың бер-береһенә булған хәстәрлелеген яҙып бөтөрлөк түгел. Әсәйем Сара ул ваҡытта Белорет районы Һаралы ауылында йәшәгән. Олатайҙы алып киткәнде ишеткәс, бер айлыҡ улын күтәреп, ун йәшлек ҡыҙын етәкләп, Көҙәнгә өләсәйем янына китә. Килеп етәләр. Өләсәйем ауыр хәлдә. Йөрәгенә сыҙай алмай, әрем ҡайнатып эсә. Эшләгән еренән өләсәйемдең ике улын – Ғәбделрәүеф бабай менән Ғәбделхәй бабайҙы ла алып китәләр. Олатайым Әхмәтша хәҙрәтте, уның ике улын – Ғәбделрәүеф менән Ғәбделхәйҙе атып үлтерәләр. Был ваҡиғанан алда, бик ҡаты ауырып, Ғәбделбарый тигән улы дауаханала үлә. Өләсәйем был ҡайғыларҙы күтәрә алмаҫлыҡ хәлгә ҡала. Ошо ваҡиғаларҙан һуң ул яңғыҙы бер аҙ теге бәләкәй йортта йәшәй. Көҙән халҡы булдыра алған тиклем ярҙам итә. Минең әсәйем тау яғында йыраҡта йәшәй. Атайым иһә һуғышҡа алына.

Бәләкәй ҡыҙы Зәкиә яҡыныраҡ, Ишембай ҡалаһында, йәшәй. Уның да ирен һуғышҡа алалар. Зәкиә апай дүрт бала менән бәләкәй генә землянкала тороп ҡала. Шуға ҡарамай, өләсәйҙе үҙе янына күсереп ала. Күпме ҡайғы күрһә лә, өләсәйебеҙ тормошто ярата. Үҙе ауыр хәлдә булһа ла, көс табып, кешеләргә ярҙам күрһәтеүен, изгелек эшләүен дауам итә. Зәкиә ҡыҙының балалары менән Ағиҙел буйына барырға ярата торған була. Унда пароходтарҙың йөрөгәнен оҙаҡ ҡарап тора. Бәлки, шул пароходтарҙың береһе менән үҙенең берәй балаһы ҡайтып килмәҫме, тип өмөт иткәндер. Ишембай ҡалаһының яҡты уттарына бик һоҡлана. Тормошоноң аҙаҡҡы сәғәттәренә тиклем динде хөрмәт итә, биш намаҙын ҡалдырмай. Ниндәй аслыҡ йылдар булһа ла, ураҙаһын тота. 1944 йыл улар йәшәгән землянка ишелеп төшә. Уларға бер бараҡтың кухняһын йәшәргә бүлмә итеп бирәләр. Шул йылда өләсәйҙең аяҡтары бөтөнләй йөрөмәй башлай. Ул ятып ҡына тора. Ғүмеренең аҙағы еткәнен һиҙеп: «Мин үләм инде, мине Көҙән ауылы зыяратына күммәҫтәр инде, ҡарап ҡуйған урыным булһа ла», – тип әйткән.

Ҡарап ҡуйған урындың аңлатмаһы бар. Беҙҙең Әхмәтша олатай йәшерәк ваҡытында Көҙән ауылы зыяратында үҙенең ғаилә ағзаларын һуңғы юлға оҙатҡанда тәрбиәләп ерләргә урын ала. Ул бүленгән ергә үҙе таш ташып, йәтешләп шул урынды кәртәләй. Зыярат эсендә зыярат барлыҡҡа килә. Унда олатайҙың әсәһе, апаһы, ағаһы һәм бер-ике яҡын туғаны ерләнә. Олатайым үҙенә һәм өләсәйемә урын ҡалдыра.

Зәки Вәлиди бабай үҙе мәрмәр таштар алып ҡайта. Шул таштарға, ғәрәпсә хәрефтәр менән сүкеп, исемдәрен һәм доғалар яҙа. Ул зыярат әле лә Көҙән халҡы тарафынан тәрбиәләп тотола. Беҙҙең нәҫел ул ерҙе бер изге урын тип һанай.

Форсат сыҡҡан һайын унда барабыҙ, доғалар тыңлайбыҙ, хәйер таратабыҙ. 1946 йылдың 16 мартында төнгө сәғәт 12-лә өләсәйебеҙ вафат була. Зәкиә апайым һәм уның балалары был минуттарҙа уның янында була.

Өләсәйем аҙаҡҡы минуттарына тиклем әсәйемде көтөп ятҡан. Буран сығып, әсәйем килеп өлгөрмәгән. Өләсәйемде тауыш-тынһыҙ ғына Ишембай районының Көҫәпҡол зыяратына ерләйҙәр. Әсәйем ғүмер буйы уны әрнеп иҫкә алып, доғалар уҡып йәшәне. Өләсәйебеҙҙең рухи көсө, балаларҙы, туғандарҙы яратыуы, эш һөйөүе, намыҫлылыҡ, яуаплылыҡ һыҙаттары әсәйем аша беҙгә лә күскән.

Өләсәйебеҙҙең балаларының балалары араһында билдәле ғалимдар, данлыҡлы уҡытыусылар, тәрбиәселәр, нефтселәр, урман хужалығы белгестәре, орденға лайыҡ төҙөүселәр, инженерҙар бар. Өләсәйем менән олатайым бер быуын элек йәшәгән кешеләр булһа ла, тоҡомдары, ауыл халҡы уларҙы онотмай.

Өләсәйемдең ҡәбере Ишембай ҡалаһы хакимиәте, мәктәп уҡытыусылары һәм уҡыусылары хәстәрлеге менән бик тәрбиәле. Унда һәр ваҡыт изге доғалар уҡыла.

## Әхмәтша олатайым

Өлкән быуын кешеләренең үткән юлына, йәшәгән ғүмеренә күҙ ташлаһаң, тәрәнерәк уйлап ҡараһаң, ғәжәпкә ҡалырлыҡ хәл-ваҡиғаларҙың, күренештәрҙең күп булыуына иҫ китә. Тормош күпме ҡайғы-хәсрәт һалһа ла, ҡағып-һуғып торһа ла, боронғо кешеләр ҡайһылай ныҡ булған, йәшәүгә ынтылышын һүрелтмәгән, бирешмәгән, тип һоҡланабыҙ, уларҙан фәһем алабыҙ.

Ҡулымда – олатайыбыҙ Әхмәтша Әхмәтйән улы үҙ ҡулы менән яҙып ҡалдырған доғалар. Ул доғаларҙы миңә әсәйем Сара Әхмәтша ҡыҙы Вәлиева (Вәлидова) бирҙе һәм ғүмер буйы һаҡларға ҡушты.

Мин әсәйемде һәр саҡ һорауҙар биреп йонсоттом. Күпме һөйләшһәм дә, күпме һорашһам да, олатайым ғаиләһенең тормошона, балаларының яҙмышына ҡағылышлы һорауҙарым һаман күп.

...1992 йылдың 7 феврале. Был кис һөйләшеп ултырған башҡа кистәргә бик оҡшаш та һымаҡ, әммә нәҡ ошо кис бик иҫтә ҡалған. Әсәйем һөйләй, мин тыңлайым. Өлгөргән тиклем яҙып барам. Әсәйем хәтирәләренең күп өлөшөн үҙе ғәрәп алфавиты менән яҙҙы. Шул яҙмаларҙы туғаныбыҙ, Көҙән ауылындағы Әхмәтзәки Вәлиди музейының директоры Кәрим Фәтҡулла улы Шәйәхмәтов, минең үтенесемде тыңлап, ғәрәп алфавитынан хәҙерге графикаға әйләндереп бирҙе.

Олатайым Әхмәтша 1860 йылда Көҙәндә тыуған. Уның атаһы Әхмәтйән исемле. Уны ауылда «Оҙон Әхмәтйән» тип йөрөткәндәр, сөнки ул буйсан булған. Әхмәтйән олатайым фәҡир йәшәй. Ул ҡырҡ йәшендә генә үлеп китә. Уның өс балаһы етем ҡала. Оло улы Шәйәхмәткә – туғыҙ, икенсе улы Әхмәтшаға – ете, ҡыҙы Хөснияmалға ун бер йәш булған.

Көҙән ауылынан йыраҡ түгел ҙур ерҙәр биләгән Ҡарасай тигән байға ағаһы Шәйәхмәт менән иген урырға йөрөгәндәр, сусҡа көткәндәр. Әсәйемдең хәтерләүе буйынса, олатайым унда хеҙмәт иткәндәре тураһында: «Сусҡа көтөүе рәхәт. Сусҡа ҡасмай», – тип көлөп һөйләгән. Олатайым оҫта итеп сабата үрергә өйрәнгән. Был кәсеп ғаилә өсөн бик файҙалы булған.

Олатайымдың бәләкәйҙән уҡырға теләге ҙур була. Ҡөрьән сүрәләрен ятҡа белә, тик яҙыша белмәй. Һуңынан, яҙырға өйрәнгәс, әрнеп шиғыр яҙа, барыбер мулла булам, тип үҙенә һүҙ бирә.

Егерме биш йәше тулғансы батша армияһында хеҙмәт итә. Армияла ныҡлап

яҙырға өйрәнә, рус телен үҙләштерергә тырыша. Русса белмәүе хеҙмәтендә ҙур ауырлыҡтар тыуҙыра. Хеҙмәтен намыҫлы үтәй, бик эшсән һәм яуапсыл була. Ошо сифаттарын күреп, уны командиры үҙенә ординарец итеп ала. Ординарец булып хеҙмәт иткәндә бик тырышып русса өйрәнә. Русса белмәгәнлек арҡаһында ныҡ йонсоғанлыҡтан, үҙенә тағы шулай тип һүҙ бирә: «Өйләнеп, ғаилә ҡороп, улым булһа, иң элек уны русса уҡырға, яҙырға, һөйләшергә өйрәтәм».

Хеҙмәттән ҡайтҡас, егерме биш йәштә булһа ла, белем алырға ҡарар итә. Ошо уй менән Ғафури районындағы Үтәк ауылы мәҙрәсәһенә урынлаша. Тырыш, белемгә ынтылышлы Әхмәтшаны уҡытыусыһы Мөхәммәткафи хәҙрәт бик оҡшата. Мулла булыр өсөн шәкерт русса яҡшы белергә тейеш. Шуға күрә Мөхәммәткафи хәҙрәт Әхмәтшаны урыҫ баярҙарына эшкә ебәрә, уға үҙенең ҡыҙы Өмөлхаятты кейәүгә бирә. Ошонан һуң Мөхәммәткафи хәҙрәт кейәүен Стәрлетамаҡ мәҙрәсәһенә уҡырға ебәрә. Был мәҙрәсәне тамамлағас, Әхмәтша муллалыҡ указы ала һәм өләсәйем Өмөлхаят менән үҙенең ауылы Көҙәнгә ҡайта.

Көҙәндә мулла булып хеҙмәт итә башлай, мәҙрәсә асып ебәрә. Был мәҙрәсәлә 200-ҙән ашыу бала тәрбиәләнеп белем ала. Мәҙрәсәгә балалар уҡытырға күп кенә мөғәллимдәр килә. Мәҙрәсәнең рәсми мөдире – олатайым... Балаларҙы яҡшы тәрбиәләр, уларға төплө белем бирер өсөн олатайым үҙенең дә белемен киңәйтә. Уның ҡулында ғүмер буйы китап була. Сит яҡтарҙан алдырған китаптар, киң билдәле гәзиттәр уҡый. Белемле, алдынғы ҡарашлы кешеләр менән, бик дәрәжәле дин әһелдәре менән ныҡлы бәйләнеш тота.

Олатайым ябай, изгелекле, абруйлылығына ҡарамаҫтан, шәкерттәренә һәм үҙенең балаларына ғәҙел уҡытыусы һәм атай була. Сиктән тыш тәртип ярата. Үҙ ғүмерендә бер тапҡыр ҙа ауыҙына әсе эсемлек алмай.

1909 йыл олатайыбыҙ хажға барып ҡайта. Юлда алты ай йөрөй. Олатайымдың хаж сәфәре ҡылырлыҡ әллә ни хәле булмағас, ауыл халҡы ярҙам итә. Өләсәйемдең артынан килгән малдарҙы ла тотоналар. «Атайымды һағынып, тәҙрәнән ҡарап илап торғанымды иҫләйем. Миңә ул ул ваҡытта өс йәш булған», – тип хәтерләр ине әсәйем.

Олатайым хажда йөрөгәндә өләсәйем балалары менән бик йонсоған. Олатайым ҡайтҡас, рәхәтләнеп донъя көтөргә керешәләр. Балалары ҡул араһына керә башлай. Олатайым «Хаж сәфәре» тигән китап яҙған һәм уны баҫтырып сығарған. Китабы ҡулдан-ҡулға йөрөгән, бик фәһемле булған. Оло йәштәге туғандарыбыҙ ул китапты күреп белә ине.

Олатайым менән өләсәйем балаларын тәрбиәләүгә сикһеҙ күп көс һала. Шуның өсөн балаларының барыһы ла ғүмер буйы белемгә ынтылыусан кешеләр булып үҫә. Донъя көткәндә бар эште лә үҙҙәре оҫта итеп башҡара. Олатайым ауыл халҡына, шәкерттәренә бик ихтирамлы һәм иғтибарлы булған. Кешенең ваҡтөйәк етешһеҙлектәрен күрһә лә, күрмәмешкә һалышҡан.

Олатайымдың ғаиләһендә китап уҡыуға ҙур әһәмиәт бирелә. Йорттарында – бик бай китапхана, мөмкинлек сыҡҡан һайын ул китапхананы яңы баҫмалар менән байытырға тырыша. Һуңынан балалары ситкә китеп уҡый башлағас, улар ҙа яңы китаптар алып ҡайтҡылаған. Әсәйемдең Ғәбделхәй ағаһы менән йәш аралары өс кенә йыл була. Улар бигерәк туғансыл үҫә. «Өйгә яңы китап ҡайтһа, кем элегерәк уҡырға тейеш?» Ғәбделхәй ағайым менән бәхәсләшеп бөтә торғайныҡ», – тип иҫкә алыр ине әсәйем.

Ана шул белемгә ынтылыш олатайымдың оло улы Зәкиҙе атаһынан ҡасып сығып китергә мәжбүр итә. Олатайымдың икенсе улы Ғәбделбарый бик иртә уҡырға-яҙырға өйрәнә. Сүрәләрҙе ятҡа белә. 1914 йыл һуғышҡа китә. Ауыр яра

алып ҡайта. Ҡайтҡас, Көҙән мәҙрәсәһендә уҡыта башлай. Өйләнә. Ҡатыны Мөнәүәрә исемле була. Балалар тыуа: Кәримә, Ғәфифә, Хәлимә, Мөхәммәт. Әлеге белемгә ынтылыш Ғәбделбарый бабайға һис тынғы бирмәй. Ауырыу, ҙур ғаиләле булһа ла, Ҡазанға юллана. Ҡазан университетына уҡырға инә. Ныҡлап ауырып китә һәм, сырхауынан аяҡҡа баҫа алмайынса, утыҙ биш кенә йәшендә Өфө дауаханаһында донъя ҡуя. Был өләсәйем менән олатайым һәм уның ғаиләһе өсөн кисерә алмаҫлыҡ тәрән ҡайғы була.

Ғәбделбарый бабайҙың икенсе ҡыҙы Ғәфифәне олатайымдар дүрт йәшенән үҙҙәре менән бергә йәшәтә. Зирәк була, иркә үҫә. Уның иҫтәлектәрендә шундай һүҙҙәр бар: «Тормошомдоң иң бәхетле, шатлыҡлы дәүере – олатайым менән өләсәйем ҡулында үткән ваҡыт. Үҙемдең ғүмеремдә уларҙан да изгелеклерәк кеше осратманым. Күпме кешегә изгелек эшләнеләр! Бер-береһенә шул тиклем иғтибарлы булдылар. Балаларына мөхәббәттәренең сиге юҡ ине. Бер көн беҙ Зәкиә апай менән (олатайымдың иң кесе ҡыҙы) соланда бейеп йөрөйбөҙ. Олатайым өйҙән сығып килә. Беҙ, уны күреп, туктап ҡалдыҡ. Олатайым шелтәләр, тип бик уңайһыҙланып торабыҙ. Ул беҙгә асыуланманы. «Бейегеҙ, балалар, бейегеҙ», – тип йылмайып сығып китте. Беҙ шатланып бейеүҙе дауам иттек».

Тормош гел ыңғай ғына бармай. 1921 йылда, бер сәбәпһеҙ, олатайымды Стәрлетамаҡ төрмәһенә ултырталар. Ике айҙан һуң, бер ғәйебе ле булмағас, ебәрәләр. Ул йылдар ауыр була. Ҡоролоҡ. Малға ашатырға бесән юҡ. Иген дә уңмай. Зәки улынан да бер хәбәр юҡ. Оҙаҡламай Зәки улының хәбәрен ишетәләр. Ул һирәкләп ҡайтып йөрөй башлай.

Әсәйемдең хәтирәләренән: «Зәки абзыйым ҡайтҡан. Мин урамда иптәштәрем менән уйнап йөрөйөм. Мине өйгә саҡырып индерҙеләр. Инһәм, иҙән уртаһында – атайым, әсәйем, Ғәбделхәй абзыйым. Ул бәләкәй һеңлем Зәкиәне күтәргән, Ғәбделрәүеф абзыйым, Ғәбделбарый абзыйым, Зәки абзый. Барыһы ла баҫып торалар. Зәки абзый беҙҙе теҙеп ҡуйҙы ла: «Мына, атай, әсәй, алты балаң да төгәл», – тине. Бергәләшеп йыйылыу беҙҙең ғаилә өсөн ошо көн булды. Башҡа былай тулы ғаилә осраша алманыҡ. Зәки ағайым ҡайтһа, күп ваҡыт Бөрйән яҡтарына китә ине».

Зәки бабай ситкә сығып киткәс, олатайымды тағын ҡулға алалар. Бөтөн малын, йортон тартып алып, Верхнеуральскиға ебәрәләр. Был турала алда әйткәйнем инде. 1937 йыл, өләсәйем өйҙә юҡ саҡта, олатайымды тағы ҡулға алалар. Тәүҙә Стәрлетамаҡ төрмәһенә килтерәләр, һуңынан Өфө төрмәһенә оҙаталар. Шул хәтлек изге кешенең, үҙ көсө менән уҡып, ғаилә ҡороп, мал табып, балалар уҡытып, бөтөн донъяға билдәле булырлыҡ балалар үҫтереп йәшәгән кешенең һуңғы көндәре шулай ауыр, ғазаплы булғанына йөрәк әрней. Әсәйемдең һөйләүе буйынса, мәсеттән ҡайтып килгәндә, йәшел үләнде ҡаплап, үҫергә ирек бирмәгән бер тап ятһа ла, эйелеп алып, ул тапты ситкә ташлар булған. Ә үҙенең өҫтөнә өйөлгән бысраҡ нахаҡты алып ташларға ул ваҡытта кеше табылмаған. 1937 йылдың 19 декабрендә бер ғәйепһеҙ олатайымды атып үлтерәләр. Беҙ, балалары, ейәндәре, уның ҡәберен дә белмәйбеҙ. Көҙән ауылы зыяратында ул үҙе һәм өләсәйем, яҡын туғандары өсөн төҙөгән ҡәберлек бар. Беҙ ул ҡәберлеккә барып йөрөйбөҙ, доғалар уҡытабыҙ. Олатайыбыҙ шунда яталыр, тип үҙебеҙҙе ышандырырға тырышабыҙ. Мәрхүм булыр алдынан тәне бик ныҡ ыҙа күрһә лә, йәне йәннәттәлер, тип ышанабыҙ. Ғүмер буйы үҙе белемгә ынтылып, балаларын уҡытырға тырышып, күпме етем баланың тамағын туйҙырып, уларға белем биреп йәшәгән кеше тураһында башҡа төрлө уйлау мөмкин түгел.

## Зәкиә апай

Зәкиә апайым иҫкә төшкән һайын, минең күҙҙәремә йәш тула. Тулмаҫлыҡ та түгел: әсәйемдең абзыйҙарының тормошон мин күҙәтә алманым, сөнки ул ваҡытта мин яҡты донъяға тыуып өлгөрмәгәнмен. Ә Зәкиә апайымдың тормошоноң күп өлөшө минең күҙ алдында үтте. Йәшәгән төйәгебеҙҙең аралары йыраҡ ҡына. Беҙ – Маҡар ауылында, ә Зәкиә апайҙың ғаиләһе Ишембай ҡалаһында йәшәй. Шуға ҡарамаҫтан, беҙ улар менән бәйләнеште бер ваҡытта ла өҙмәнек. Әсәйем менән Зәкиә апайҙың бер-береһенә булған мөнәсәбәте шул тиклем йылы ине. Улар бер-береһенә шул хәтлем ярҙамсыл булды. Йыраҡ торһалар ҙа, бер-береһе менән гел хат яҙышып йәшәнеләр. Әсәйем кейәүгә сығып, ата йортонан киткән көнгә тиклемге тормошон һәр саҡ Зәкиә апайға бәйләп һөйләр ине.

Зәкиә ғаиләлә иң бәләкәй, иң иркә бала булып үҫә. Өләсәйем уға өс йәшенә тиклем күкрәк һөтөн имеҙә, сәңгелдәктә генә йоҡлата. Өс йәшендә апай ныҡлап һөйләшә, бар нәмәне аңлай. Шуға ҡарамай, өләсәйем уны һаман сәңгелдәктә бәүетеп йоҡлата. Өләсәйемдең эше күп булһа, сәңгелдәкте бәүетергә әсәйемә ҡуша. Зәкиә апайым: «Сара апай бәүетмәһен, әсәйем бәүетһен», – тип мыжып ята торған булған. Ғәбделхәй бабайым: «Әсәй, бигерәк иркәләтәһең, насар холоҡло булып үҫер инде», – тиһә, өләсәйем: «Юҡ, ул насар холоҡло булмай, аҡылы бар бит уның», – тигән. Өләсәйемдең һүҙе шул тиклем хаҡҡа сыҡты: Зәкиә апайыбыҙ иҫ киткес аҡыллы, түҙем булды. Тормошта күпме ауырлыҡтар күрһә лә, бирешмәне. Донъялар бутала башлағас: «Зәкиәне урынлаштырып ҡалайыҡ», – тип, олатайым менән өләсәйем кәңәшләшкәндәр ҙә күрше Әрмет ауылы Һиҙиәт мулланың улы Сәғитйән тигән егеткә кейәүгә биргәндәр. Йәштәр матур ғына донъя ҡороп ебәрә. Сәғитйән еҙнә төрлө урындарҙа эшләй. Һуғыш башланыр алдынан Ишембай ҡалаһына килеп урынлашалар. Ул ваҡытта Әхмәтша олатайыбыҙҙы ҡулға алып, атып үлтерәләр. Өләсәйебеҙ бер яңғыҙы Көҙән ауылында ҡала. Өләсәй бер аҙ минең әсәйемдәрҙә тора, унан кире ауылына ҡайта. Һуғыш башланып китә. Сәғитйән еҙнәне лә һуғышҡа оҙаталар. Зәкиә апайым дүрт бала менән землянкала тороп ҡала. Өләсәйем Өмөлхаятты ла Көҙән ауылынан үҙенең торлағына күсереп алып килә. Ваҡыт үтеү менән, ул землянка ишелеп төшә. Фронтовик ғаиләһе тип, бер барактың кухняһын бүлмә итеп бирәләр. Сәғитйән еҙнә һуғыштан ҡайтҡансы ошо барак бүлмәһендә ғүмер итәләр. Өләсәйебеҙ Өмөлхаят ошо бүлмәлә вафат була. Әҙерәк ҙурайғас, Зәкиә апайҙың ғаиләһе шул баракта торғанда, мин дә ауылдан бер килеп киткәйнем. Шул хәтлек ауыр тормош хәтеремдә тәрән эҙ ҡалдырған, әле лә шул көндәрҙе онота алмайым. Зәкиә апай менән Сәғитйән еҙнәнең һуғышҡа тиклем дүрт балалары тыуғайны: Фәһимә, Зәйтүнә, Зинур, Әмир. Улар, йәй булһа, беҙгә, йәғни Маҡарға, киләләр... Йәйҙең бер көнөндә, кемгәлер эйәртеп, әсәйем мине Зәкиә апайҙарға Ишембайға оҙатты. Килһәм, Зәкиә апайҙар ул баракта йәшәмәйҙәр булып сыҡты. «Ҡайҙа һуң улар?» – тип һорашҡаныма, Ишембайҙан йыраҡ түгел Бурансы тигән ауылда йорт һатып алып, шунда күсеп киткәндәрен әйттеләр. Ни эшләргә? Бәләкәй булһам да, юғалып ҡалманым, теге ауылды эҙләп киттем. Асыҡтым, хәлем бөттө, үҙем һаман барам. Ауылды таптым: Ағиҙел буйлап һуҙылған бер урамдан тора икән. Ауылдың осона килеп керҙем дә «Зәкиә исемле апай» ҙы эҙләй башланым. Һигеҙ Зәкиәне таптым. Һигеҙенсеһе – ауылдың арғы осонда йәшәгәне минең апайым, имеш. Улар ғәжәпкә ҡалды, ә минең шатлығымдын сиге юҡ. Шунда нисек аҙашып, юғалып ҡалмағаныма әле лә аптырайым.

Һуғыштан һуң Зәкиә апай менән Сәғитйән еҙнәнең тағы өс балаһы донъяға

тыуҙы: Рәйес, Ғәлиә, Разия. Ете баланы ла тырышып, оло мөхәббәттә ҡарап үҫтерҙеләр, һәр береһен эшкә өйрәттеләр, белем бирҙеләр. Апайым был донъянан әсәйемдән алдараҡ китте. Әсәйем өсөн уның вафаты аңлатып бөтөргөһөҙ юғалтыу булды. Ер йөҙөндә бер генә бөртөк бер туғаны ине шул.

Әсәйемдең әрнеп яҙған шиғыры:

*Һандуғасҡай һайрай, кәкүк саҡыра,*
*Ағиҙелкәй аға баш өҫтәреңдә.*
*Был матур ергә мәңгелеккә яттың,*
*Яныңда ята бит йән дуҫтарың да.*

*Сәскә кеүек иркә бала булып үҫтең,*
*Ысын мөхәббәт таптың үҙеңә.*
*Ауыр тормоштарҙы еңеп сыҡтың,*
*Тик һаҡлай алманың ғүмереңде.*

*Ҡалды донъяң, ҡалды балаларың,*
*Ҡалды туғандарың илашып.*
*Ҡалды ғүмер иткән йәмәғәтең,*
*Бер туҡтамай ҡоя күҙ йәшен.*

*Әй рәхимһеҙ тормош, ни ҡылаһың,*
*Башҡайҙарға хәсрәт яуҙыртып,*
*Моң илатып беҙҙе, моң йырлатып,*
*Йөрәктәргә ҡандар һауҙыртып?*

*Ағас ултыртырбыҙ, гөлдәр сәсербеҙ,*
*Туғаным, һинең ҡәбереӊ өҫтөнә.*
*Япраҡтар ярһа, ҡоштар һайраһа,*
*Нурҙар сәсер улар ҡәбереӊ эсенә.*

Шулай, теләгән бала булып тыуып, иркә үҫеп, тормош ҡороп, ауырлыҡтарға бирешмәй нур сәсеп йәшәне беҙҙең Зәкиә апайыбыҙ. Зәкиә апайҙың балалары менән әле лә бер туғандар һымаҡ йәшәйбеҙ. Ҡатнашабыҙ, кәрәк саҡта – берберебеҙгә ярҙам итешәбеҙ. Ғәлиә исемле ҡыҙы Өфөлә йәшәгәс, уның менән бигерәк тә яҡынбыҙ. Ул, Зәкиә апайға оҡшап, шул тиклем туғансыл , ярҙамсыл.

## Ғәбдерәүеф бабай

Олатайым менән өләсәйемдең өсөнсө улы – Ғәбдерәүеф. 1896 йылғы. Башланғыс белемде олатайымдың мәҙрәсәһендә алған. Дүрт йәшендә уҡырға өйрәнә. Олатайымдың мәҙрәсәһен тамамлағас, Ҡазан ҡалаһындағы «Ҡасимия» мәҙрәсәһенә китә. Унда белем алыуҙы дауам итергә Ғәбдерәүеф бабайға Зәки ағаһы кәңәш бирә һәм урынлашырға ярҙамлаша.

«Ҡасимия» мәҙрәсәһен тамамлағас, Стәрлетамаҡ ҡалаһындағы Уҡытыусылар әҙерләү техникумында уҡый. Уҡыуы бөтөү менән Көҙәнгә ҡайта ла «Заготскот» конторahында бухгалтер булып эшләй. Уға тиклем өйләнә. Тормошо олатайымдың йортонда үтә. Һуңынан үҙенә өй һалып сыға. Балалары – Нажиә, Роза, Зәйтүнә, Айһылыу, Арыҫлан. Көҙәндә йәшәгән ваҡытында Ғәбдерәүеф бабай ауыл халҡына бик ярҙам итә. Ярлы халыҡ өсөн ашхана аса, күберәк унда балалар туҡлана.

Ғәбдерәүеф музыканы бик яратҡан. Үҙе эшләгән скрипкала, мандолинала

уйнап, ҡушылып йырлай торған булған. Уға ҡушылып башҡа ғаилә ағзалары ла йырлаған. Халыҡ уның сығыштарын яратып, клубҡа йыш саҡырған. Унда улар беҙгә бик яҡын туған Фәтҡулла бабай менән бергәләп йырлағандар.

1931 йыл тормош тағы ҡатмарланып китә. Ғәбдерәүеф бабайҙы эштән сығаралар, бөтөн мал-тыуарын тартып алалар. Ул ауылдан сығып китергә мәжбүр була. Тәүҙә – Петровскиҙа, Өфөлә, һуңынан Борайҙа йәшәйҙәр. Бихисап ауырлыҡтар кисерергә тура килә уларға. Бабайымдың бәләкәй генә эш хаҡына шундай ҙур ғаилә көн күрә. Был ауырлыҡты ла еңеп сығырҙар ине – 1937 йылдың 29 июлендә Ғәбдерәүеф бабайҙы ҡулға алалар. Ғаилә уның ҡайҙа икәнлеген дә белмәй. Бөтә ауырлыҡ Мәстүрә инәйгә төшә. Нисек булһа ла йәшәрбеҙ, туғанырыуға яҡыныраҡ булырбыҙ тип, Ишембайға ҡайталар. Аталарынан бер хәбәр юҡ. Юллай торғас, аталарының 1937 йылдың 30 декабрендә бер ғәйепһеҙгә атып үлтерелеүе, һуңынан аҡланыуы тураһында документ алалар.

Ғәбдерәүеф бабайҙың ҡыҙы Роза менән ғүмер буйы аралашып йәшәнек. Беҙҙең ғаилә өсөн дә Роза апай бик яҡын һәм ҡәҙерле ине. Уҡытыусы булғас, ул Маҡар мәктәбенә лә килгеләне. Йәштән үк сәстәре ағарғайны. Ап-аҡ сәсле Роза апай Маннанов еҙнә (ғүмер буйы шулай тип өндәштек) менән беҙгә килеп керһә, оло шатлыҡ ҡуба ине. Беҙҙең ғаилә өсөн был ваҡиға – оло ғорурлыҡ та, сөнки беҙҙең Маҡар мәктәбендә Роза апайҙы ифрат хөрмәтләнеләр!

Роза апайҙың шәхсән хәтирәләренә мөрәжәғәт итәйек. Роза апай иҫтәлектәрен «Башҡортостан» гәзитендә йыш ҡына баҫтыра торғайны. Шул мәҡәләләрҙең береһенә, 2009 йылдың 11 февралендә сыҡҡанына баш һүҙҙе «Башҡортостан» гәзитенең журналисы Динә Арыҫланова яҙған:

«Яңы йыл алдынан Ишембай ҡалаһында йәшәүсе, «Башҡортостан» гәзитенең генә түгел, бөтә башҡорт матбуғатының яҡын дуҫы, хеҙмәт ветераны, Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы Роза Рәүеф ҡыҙы Маннанованан хат алдыҡ. Туғыҙынсы тиҫтәне ваҡлап, ҡарттарса талғын ғына тормош менән йәшәп ятыусы Нәжип ағай менән Роза апай элеккесә республика гәзит-журналдарынан айырылмай, яңылыҡтар менән ваҡытында танышып-белешеп, ҡыҙыҡһынып бара.

Өҫтәлдәренең бер ситендә дарыу-энәләр өйөлөп ятһа, икенсе яғында мотлаҡ «Башҡортостан», «Йәшлек», «Аҙна» гәзиттәре, «Һәнәк», «Башҡортостан ҡыҙы» журналдары сират көтөп ята. Ошоға ҡәҙәр Роза Рәүеф ҡыҙы гәзитебеҙҙе даими алдырып уҡыусы ғына түгел, ә геройы ла, лауреаты ла, авторы ла булды.

«Олоғайҙыҡ шул, бәлки, башҡа мәҡәлә яҙырға мөмкинлек тә булмаҫ, хәл дә етмәҫ. Ошоноһон төҙәтеп, кеше уҡырлыҡ итеп баҫтырып сығарһағыҙ, бик рәхмәтле булыр инем», – аманат әйткәндәй үтенеп яҙған хатты ҡулға алғас, бер аҙ моңһоу ҙа, ҡыйын да булып китте. Башҡорт халҡының арҙаҡлы шәхесе Зәки Вәлидиҙең ике туған һеңлеһе ул Роза апай. Бөйөк шәхестең исемен мәңгеләштереү, музейын экспонаттар менән байытыу буйынса байтаҡ эш башҡарған тынғыһыҙ уҡытыусы республикабыҙҙың төрлө мәктәптәрендә йәш быуын алдында иҫтәлектәре менән йыш сығыш яһаны, әле лә саҡыралар, осрашыуҙарға бармай ҡалғаны юҡ. Телефон аша ғына хәбәрләшеп торһаҡ та, Роза апайҙың һаман да элеккесә көр тауышы, уҡытыусыларға хас булғанса һәр һүҙҙе уйлап, еренә еткереп һөйләүе, ихласлығы һис тә үҙгәрмәгән. Апайҙың уй-һағыш менән тулған сираттағы мәҡәләһе «Көтөп алған миҙгел» тип исемләнгән. Алдағы миҙгелдәрегеҙ ҙә сыуаҡ, йылы булһын. Һеҙҙең ижад емештәренән киләсәктә лә ауыҙ итергә яҙһын, сәләмәтлек, уңыштар һеҙгә!»

Йылдың аҙағын көтөп еткерә алмайым. Юҡ, декабрь айы минең тыуған айым түгел. Атайымдың ағаһы Зәки Вәлидов тап ошо һалҡын ҡыш айында донъяға

килгән. Ғаиләбеҙ, туған-тыумасаларыбыҙ яҙмышын һындырған ҡара ҡайғылы ай ҙа ул декабрь. 1937 йылдың 26 декабрендә олатайҙарым Әхмәтша һәм Хәбибрахмандар Өфө төрмәһендә хөкөмгә тарттырылып, атып үлтерелгән. Баҡыйлыҡҡа күскәндәрҙе иҫкә алыуҙың сауаплы эш икәнлеген аңлайым. Донъяға оло ғалимды бүләк иткән олатайым менән өләсәйемдең, туғандарымдың әсе яҙмышы әле булһа ҡайғыларҙы яңырта, һис кенә лә онотолмай. Ҡыҙы Иҫәнбикә әйтеүенсә, сит ерҙе үҙ иткән Зәки ағайым туғандарының ыҙаланып һәләк булыуҙарын ишеткәс, төндәр буйы йоҡламай үкһеп илаған, ҡурай уйнауын, йырлауын ташлаған.

Ете йәштән етем ҡалып, сабата үрергә өйрәнгән олатайым «продукция»һын баҙарға сығып һатҡан, Верхотор ауылы байҙарының сусҡаларын көткән, әрмелә рус телен белмәүе арҡаһында төрлө йәберләүҙәргә дусар булған. 80 йәшендә лә бәхет күрә алмай һәләк булған олатайҙы күҙ алдыма килтереп, йәлләүемдән сикәм буйлап күҙ йәштәрем йүгерә... Өләсәйем Өмөлхаятты, вафат булғас, Көҫәпҡол зыяратына ерләргә лә рөхсәт итмәгәндәр – аҡылға һыйырлыҡ түгел! Зәкиә апайым, Сәғитйән еҙнәм, бер бабайҙы иптәшкә алып, мәйетте бәләкәй арбаға һалып, ҡараңғы төшкәс, йәшерен рәүештә ошо зыяратҡа килтереп ерләйҙәр. Баш осона бер ағас түҙлеге ҡуялар. Сүбидәй менән Иҫәнбикә тыуған яҡҡа бер килгәндәрендә зыяратҡа барып, Ҡөрьән уҡып, хәйер таратып ҡайттылар. 1937 йылда ҡулға алынған атайымды декабрь айында аҡлайҙар. Әммә уны ла 1938 йылдың ғинуарында аталар.

Бына шундай ҡайғылы ваҡиғаларҙы әлегә тиклем күңелемдә йөрөтәм.

Мин 1942 – 1948 йылдарҙа Ишембай ҡалаһы эргәһендәге ауыл мәктәптәрендә уҡыттым. IV класты тамамлағас, уҡыусыларыбыҙ ҡалалағы 3-сө башҡорт мәктәбенә V класҡа уҡырға килә ине. Беҙ, башланғыс класс уҡытыусылары, йыш ҡына ошо мәктәпкә методик берекмәгә йыйыла торғайныҡ. Ул саҡта мәктәп директоры булып эшләгән Рәсәй мәктәптәренең атҡаҙанған уҡытыусыһы Мәфтүхә Ғиниәт ҡыҙы Нагаеваны күптәр хәтерләйҙер. Ҡасан да булһа бер саҡ ошо мәктәп Зәки ағайымдың исемен йөрөтөр, тип кем уйлаған? Хәҙер ул – Зәки Вәлиди исемендәге 2-се Республика башҡорт гимназия-интернаты. Ишек алдына ғалимдың таш һыны ҡуйылған. Йыл һайын ошонда оло шәхестең тыуған көнөндә фәнни-ғәмәли конференция үткәреүҙе һәйбәт йолаға әүерелдерҙеләр. Һуңғыһы Ғаиләгә социаль ярҙам йылы сиктәрендә «Атай даны – ҙур мираҫ» тигән темаға арналды. Балаларҙың әҙерлекле, белемле сығыштарына кинәнеп, хайран булып ултырҙым. Ғөмүмән, Зәки Вәлидиҙең тормошона, көрәш юлына арнап кисәләр, осрашыуҙар үткәргән бөтә мәктәп етәкселәренә, уҡытыусыларға ихлас күңелдән ҙур рәхмәт әйткем килә. Халыҡ өсөн бик йөкмәткеле тапшырыуҙар ойошторған тележурналист Гәүһәр Батталованың профессионаллегенә бөтә туғандарыбыҙ менән һоҡланабыҙ. Шәхестәрҙе һаҡлай ҙа, ҡәҙерләй ҙә белергә кәрәк шул, замандаштарым.

Ошо көндәрҙә Салауат ҡалаһының 16-сы мәктәбе уҡыусылары мине осрашыуға саҡырҙы. Юл буйына 1948 йылғы ваҡиғаларҙы иҫкә төшөрөп, хәтирәләрҙе яңыртып барҙым. Шул осорҙа, бер ауылға барышлай, юлда ағас ҡаҙыҡтар күреп, аптыраушта ҡалғайныҡ. «Ошо ерҙә ҡала була», – тип аңлаттылар. Алтмыш йыл эсендә элекке ҡаҙыҡтар урынында иҫ китмәле матур, заман һулышын тойоп үҫкән ҡала ҡалҡып сығыр, тип кем уйлаған? Мәктәптәге музей күңелдә матур тойғолар ҡалдырҙы. Ҡала күләмендә Зәки Вәлиди тормошона арнап ойошторолған фәнни конференция юғары кимәлдә үтте.

Шәхестең сәйәси, ғилми эшмәкәрлеге тулы яҡтыртылды. Мәктәп директоры

Александр Васильев, музей етәксеһе Мәрйәм Әсәҙуллинаға оло хеҙмәттәре өсөн рәхмәтебеҙҙең иге-сиге юҡ. Шуныһы ҡыҙыҡ та, ҡыҙғаныс та тойолдо: улар оло шәхестең туғандары барлығын белмәгәндәр. Барыһы ла осраҡлы килеп сыҡҡан. Ярай әле, эҙләнгәндәр, башҡа музейҙарға мөрәжәғәт иткәндәр, тип шатланам. Аллаға шөкөр, Зәки ағайыбыҙҙың тоҡомдары бар әле, емертеп эшләйҙәр, донъя көтәләр, ә беҙ, ололар, үкенесле хәтирәләр, яҡты иҫтәлектәр менән йәшәйбеҙ.

Роза апайыбыҙ 2012 йылда (туҡһанынсы йәш менән барғанда) вафат булды. Ауырыуы көслө булһа ла, тормош мәшәҡәттәренән ситтә ҡалмай, туған-ырыуҙың хәл-әхүәлдәре менән ҡыҙыҡһынып йәшәне. Ғәбделхәй бабайыбыҙҙың ҡыҙы Флүрә апай ныҡлап ауырып киткәс, Роза апай бар ғаиләһе менән Өфөгә Флүрә апай янына килде. Хоҙайға рәхмәт, ул көндө мин дә Флүрә апайҙың хәлен белергә барғайным. Күмәкләп йыйылғанға бик шатландыҡ. Флүрә апайҙың ҡыҙы Гүзәл матур итеп һый әҙерләп ебәрҙе, фотоға төшөрҙө. Рәхәтләнеп һөйләшеп, илашып, көлөшөп, ваҡыттың үткәнен һиҙмәй ҙә ҡалдыҡ. Ошо осрашыу Роза апай менән һуңғыһы булды. Ул бар туғандарыбыҙ өсөн бик аҡыллы, дәрәжәле апайыбыҙ ине. Оло йәштә булһа ла, атаһының үткән тормошон ентекләп өйрәнде, район, республика күләмендәге гәзиттәрҙә баҫтырып сығарып, туғандарға Ғәбдерәүеф бабайыбыҙҙың тормошон тәрәнерәк өйрәнергә мөмкинлек бирҙе. Ниндәй генә кәмһетеүҙәр, ҡыйынлыҡтар күрһәләр ҙә, Ғәбдерәүеф бабайҙың балалары намыҫлы, белемле, кешелекле, изгелекле булып ҡалды.

## Ғәбделхәй бабай

Минең әсәйемә Ғәбделхәй бабай бигерәк тә яҡын була, сөнки уларҙың йәш аралары – өс кенә йыл. Улар аяҡҡа баҫҡандан алып бергә уйнай. Үҫеп, ҡул араһына керә башлағас, донъя мәшәҡәттәрендә ата-әсәгә ярҙам күрһәтеүҙә лә бергә башҡаралар. Бергәләшеп китап уҡыйҙар. Уҡыған китаптарының йөкмәткеһен бер-береһенә һөйләйҙәр. Бергәләп йырлайҙар. Ғәбделхәй бабай башланғыс белемен, оло абзыйҙары кеүек үк, олатайыбыҙҙың мәҙрәсәһендә ала. Артабан уҡыуын Ырымбур педтехникумында дауам итә. Техникумды уңышлы тамамлап, ҡулына диплом алғас, тыуған ауылы Көҙәндә уҡыта башлай. Ырымбурҙа уҡыған сағында олатайымдың исемен үҙенә фамилия итеп ала, йәғни Вәлидов фамилияһын Әхмәтшинға әйләндерә. Көҙәндә уҡытҡан дәүерендә үҙенең ауылында тыуып үҫкән бик сибәр, аҡыллы Фатима тигән ҡыҙға өйләнә. Олатайым өйләнеү тураһында һүҙ ҡуҙғатһа: «Йә Фатиманы алып бирәһегеҙ, йә бөтөнләй өйләнмәйем», – тип харап ҡәтғи яуап ҡайтарыр булған.

Әсәйемдең көндәлегендә Ғәбделхәй бабайҙың йыры теркәлгән.

*Аршын ғына ярым ҡарҙар яуған,*
*Бәләкәй генә ат юл башлар.*
*Йәшләй генә һөйгән йәрҙе*
*Кем диуана булһа, шул ташлар.*

Саф мөхәббәт нигеҙендә татыу ғаилә ҡорола. Мөхәббәт емеше булып матур-матур балалар тыуа: Фәүзиә, Шәүкәт, Салауат, Флүрә, Лилиә. Ғәбделхәй бабайға тыныс ҡына эшләп, балаларын үҫтерергә мөмкинлек бирмәйҙәр. Уны йыл һайын тип әйтерлек бер ауылдың мәктәбенән икенсе ауыл мәктәбенә күсереп йөрөтәләр. Был ғаилә өсөн бик ҙур ҡыйынлыҡтар тыуҙыра. Шуға ҡарамай, 1934 йыл ситтән тороп белем алыу өсөн Өфө пединститутына инә. Күсеп йөрөүҙәре һаман дауам итә. Сәбәбен бер кем дә аңлатмай. Иң тәүҙә улар Көҙәндә йәшәй, унан һуң Белорет районы Сермән ауылына, Учалы районының Туңғатар ауылына, шул уҡ

районды Мулдаҡай ауылына күсерелә. Нисек кенә булһа ла, ҡыйынлыҡтарға ҡаршы тороп, тырышып йәшәп ятҡанда, ғаилә өсөн ҡот осҡос хәл тыуа: 1937 йылдың 27 авгусында уҡытыусылар конференцияһында Ғәбделхәй Әхмәтшин сығыш яһап торғанда... НКВД вәкилдәре килеп инә лә уны ҡулға ала. Ғәбделхәй бабай һыуға батҡан кеүек юҡ була. Ошо ваҡиғанан һуң Фатима инәйемдең балалары менән күргән михнәттәрен яҙып та, һөйләп тә бөтөрлөк түгел. Аслыҡтан, һыуыҡтан Ғәбделхәй бабайымдың кесе ҡыҙы ауырып китә һәм мәрхүмә була. Ҡалған балаларын Фатима инәйебеҙ әҙәм күтәрә алмаҫлыҡ көс һалып тере ҡалдыра, ҡарай, кеше итә. Барса балалары ла күренекле, намыҫлы шәхес булып таныла.

Тик аталарының ғына хәле бар ғаиләгә тыныслыҡ бирмәй: йөрәктәре һыҡтай, төштәренә керә. Улар, атайыбыҙ терелер, тигән ышаныс менән йәшәй. Ғүмер буйы көтәләр, эҙләйҙәр, юллайҙар, органдарға хат яҙалар. 1956 йыл «Атайығыҙ ғәйепһеҙгә 1937 йылдың 7 декабрендә атып үлтерелгән» тигән хәбәр алалар.

Ғәбделхәй бабайымдың балалары шул тиклем тәрбиәле, миһырбанлы, илгәҙәк булып үҫә. Һәр береһе эшләгән урынында халыҡҡа намыҫлы хеҙмәт итте.

Әсәләре Фатима инәйгә уларҙың ихтирамы үлсәп бөтөрлөк түгел ине. Фатима инәй үҙе шиғырҙар ятатты, ваҡыты булһа, күңелендәге ҡайһы бер хистәрен ҡағыҙға теркәп бара ине.

*Эй, рәхимһеҙ яҙмыш, ниҙәр ҡылдың,*
*Башҡайҙарға хәсрәт яуҙырып?*
*Бер йыуатһаң беҙҙе, мең илаттың,*
*Йөрәктәргә ҡандар һауҙырып.*

*Йыраҡ ҡына ерҙән, ай, күренгән*
*Төлкө башы тиһәм, таш икән.*
*Сылтырап та аҡҡан шишмә тиһәм,*
*Күҙҙәремдән аҡҡан йәш икән.*

*Маҡар буйҡайҙары бигерәк йәмле,*
*Уның бер туғайы андыҙлыҡ.*
*Был донъяла ике ауыр хәл бар:*
*Береһе – үлем, береһе – яңғыҙлыҡ.*

Фатима инәй балаларында туғандарына ҡарата иҫ киткес ихтирам тәрбиәләгәйне. Шуның өсөн беҙ ғүмер буйы мөмкинлек булған һайын осрашып, ҡатнашып йәшәргә тырыштыҡ. Флүрә апайыбыҙ балалар табибы ине. Беҙҙең нәҫелдең барлыҡ балалары тип әйтерлек уның наҙлы ҡулдары, йөрәге аша дауаланып үҫте. Фатима инәй ныҡ оло йәштә донъя ҡуйһа ла, уның вафатын балалары, туғандары бик ауыр кисерҙек. Әсәйем, үҙе ауыр хәлдә булһа ла, Мейәскә барып, доғаларын уҡып, ихлас тәрбиәләшеп, Фатима инәйҙе һуңғы юлына оҙатты. Фатима инәйем Мейәс ҡалаһында мосолман зыяратында ерләнгән.

Тормош дауам итә. Фатима инәй менән Ғәбделхәй бабайҙың ейәндәре, атаәсәһенә, олатай-өләсәйҙәренә оҡшап, зат-ырыуы өсөн йән атып йәшәйҙәр.

*(Аҙағы бар.)*

## Аксаков көндәрендә

Өфөлә Рәсәй Яҙыусылар берлегенең күсмә пленумы үтте. Уны инеш һүҙ менән Башҡортостан Республикаһы Премьер-министры урынбаҫары *Лилиә Ғүмәрова* асты һәм сарала ҡатнашыусыларға Президентыбыҙ Р. З. Хәмитовтың ҡотлау хатын уҡып ишеттергәс, Рәсәй Яҙыусылар берлеге идараһы рәйесе Валерий Ганичевҡа Башҡортостан Республикаһының Почет грамотаһын тапшырҙы. В. Н. Ганичевтың йөкмәткеле сығышынан һуң бер-бер артлы илебеҙҙең төрлө төбәктәренән делегаттар – билдәле шағирҙар, яҙыусылар һәм әҙәбиәт белгестәре һүҙ алды. Башҡортостандан Яҙыусылар берлеге идараһы рәйесе Риф Тойғоновтың, шулай уҡ халыҡ шағиры Рауил Бикбаевтың телмәрҙәре (улар «Ағиҙел» журналының киләһе һанында баҫылаcаҡ), йәнә Башҡортостан Республикаһының Аксаков фонды рәйесе Михаил Чвановтың отчеты тыңланды.

М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрында уҙған тантаналы кисәлә, Башҡортостан Президенты Р. З. Хәмитовтың С. Т. Аксаков исемендәге әҙәби премияларҙы биреү тураһындағы указын үтәп, БР Дәүләт Йыйылышы – Ҡоролтай Рәйесе урынбаҫары Рафаэль Зиннуров Рәсәй Федерацияһының Балалар фондына нигеҙ һалыусы һәм уның етәксеһе, Баллыҡ ғилми тикшеренеү институтын ойоштороусы, проза әҫәрҙәре өсөн Рәсәйҙең Дәүләт премияһы лауреаты, Рәсәй Белем биреү һәм тәбиғәт фәндәре академияһы академигы Альберт Лихановҡа Аксаков премияһын тапшырҙы.

Пленумда ҡатнашыусылар XXIII халыҡ-ара Аксаков байрамының уртаһында булды. Дүрт көнгә һуҙылған сарала улар, төркөмдәргә бүленешеп, Свято-Никольский ҡорамында Сергей Аксаковтың иҫтәлекле урынына, Аксаков исемендәге баҡсала әҙиптең һәйкәленә сәскәләр һалыуҙа, М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт университетындағы Аксаков уҡыуҙарында, мәшһүр яҡташыбыҙҙың йорт-музейына экскурсияла, артабан Башҡорт дәүләт академия драма театрында уҙғарылған тантаналы кисәлә ҡатнашты. Байрам программаһына ярашлы, Өфө, Бәләбәй, Ҡырмыҫҡалы райондарында ла Аксаков иҫтәлегенә арналған фольклор байрамдары гөрләп уҙҙы.

...Башҡортостандың Мәҙәниәт министрлығы, Республика Халыҡ ижады үҙәге, Ҡырмыҫҡалы районы хакимиәте күренекле мәҙәниәт, сәнғәт эшмәкәрҙәренең, мәғрифәтселәрҙең шәжәрә ағасын төҙөү конкурсы

йомғаҡтары буйынса шәжәрә байрамы ойошторҙо. Сарала мәҙәниәт министры Әминә Шафиҡова, район хакимиәте башлығы Фәнзил Сынғыҙов, БР Дәүләт Йыйылышы – Ҡоролтай депутаты З. Исмәғилева, Германиянан, Белоруссиянан, Мәскәү, Санкт-Петербург, Екатеринбург ҡалаларынан, Ырымбур, Һамар өлкәләренән Халыҡ-ара Аксаков көндәренә йыйылған ҡунаҡтар, шулай уҡ күренекле шәхестәрҙең шәжәрәләрҙә телгә алынған туғандары ихлас ҡатнашты. Конкурста Башҡортостанда йәшәгән бөтә милләттәрҙең дә ғаилә династиялары менән танышыу ойошторолдо, ә байрам аҙағында иң яҡшы шәжәрә төҙөүселәргә бүләктәр бирелде.

## Тағы бер әҙәби музей!

Әбйәлил районының Әлмөхәмәт ауылында ғалим Ким Әхмәтйәнов, яҙыусы, дәүләт эшмәкәре Рамаҙан Өмөтбаев, шағир Рәмил Ҡол-Дәүләт рухына бағышланған әҙәби музей асылды. Оло тантанаға Өфөнән дә яҙыусылар саҡырылғайны.

Башҡортостан Яҙыусылар союзының идара рәйесе урынбаҫары Фәрзәнә Ғөбәйҙуллина, Башҡортостандың халыҡ шағиры Ҡәҙим Аралбай, «Башҡортостан» гәзитенең баш мөхәррире Нияз Сәлимов, яҙыусылар Әсхәл Әхмәт-Хужа, Ринат Камал, Әхмәр Үтәбай, Салауат Әбүзәр, Гөлназ Ҡотоева Ким Әхмәтйәновтың, Рәмил Ҡол-Дәүләттең (Рамаҙан Өмөтбаев Өфөлә ерләнгән) ҡәберҙәренә зыярат ҡылып, сәскә һалғандан һуң, Рамаҙан Өмөтбаев исемен йөрөткән Әлмөхәмәт урта мәктәбендә музей асыу тантанаһына йүнәлде.

Музей мәктәпкә төкәтмә итеп һалынған. Рәсми рәүештә уның ишеген тәүләп асыу хоҡуғы район хакимиәте башлығы Рим Сынғыҙовҡа, Ким Әхмәтйәновтың тормош иптәше Рәйфә ханымға, Рамаҙан Өмөтбаевтың улы Рауилға, Рәмил Ҡол-Дәүләттең апаһы Әнисә Хафизоваға бирелде. Шулай итеп, музей эшләй башланы! Өс шәхестең тормош юлына арналған йөкмәткеле стендтар, уларҙың шәхси әйберҙәре, фотоальбомдар бер кемде лә битараф ҡалдырманы. Киләсәктә ул яңы экспонаттар, материалдар менән тулыланыр, әлмөхәмәттәр өсөн генә түгел, ошо тарафтарға юлыҡҡан кешеләргә лә илһамлы рухиәт шишмәһе булып хеҙмәт итер, тигән теләктәр әйтелде уның нигеҙен ашатлап үтеүселәр тарафынан.

Мәктәп директоры Шафиҡ Хәмитов ошо изге эште аҡтарып сығарырға ярҙам иткән ауылдаштарына рәхмәтен белдерҙе.

Район хакимиәте башлығы Рим Сынғыҙов тиҙҙән һәр йортҡа һыу инә башлаясағы, Сибай – Әлмөхәмәт юлына киләһе йыл асфальт түшәү ҡаралыуы хаҡында әйтте. Тантаналы сара ауыл клубында дауам итте.

«Милләттең даны һан менән түгел, унан сыҡҡан шәхестәре менән билдәләнә, – тине Рамаҙан ағайҙың улы Рауил Өмөтбаев. – Башҡортостанда өс олуғ шәхес сыҡҡан ауылдар һирәк. Бөгөн беҙ хөрмәтләгән Әлмөхәмәт улдары илем, телем, халҡым тип йәшәне һәм үҙҙәре лә халыҡ хөрмәтенә лайыҡ». Рауил Өмөтбаев

мәктәпкә китаптар бүләк итте. Фәрзәнә Ғөбәйҙуллина Башҡортостандың 200-ҙән ашыу әҙибенең сәләмен еткерҙе. «Был шәхестәрҙең өсөһө лә миңә яҡын, – тип башланы һүҙен Башҡортостандың халыҡ шағиры Ҡәҙим Аралбай. – Ким ағай менән БДУ-ла осраштым. Ул минең курс эшемдең етәксеһе булды. Рамаҙан ағай телде яҡшы белгән яҙыусы ине. Уның менән аралашып йәшәргә насип булды. Рәмил ҡусты иһә 40 йәшен дә тултыра алмай яҡты донъянан китте. Өйрәнсек осоро тойолманы беҙгә, сөнки ул шағир булып тыуғайны. Был шәхестәрҙең барыһы ла – башҡорт әҙәбиәтенең ғорурлығы».

Артабан Әсхәл Әхмәт-Хужа, Ринат Камал, Әхмәр Үтәбай, Гөлназ Ҡотоева сығыш яһаны, шиғырҙарын уҡыны. Сибай ҡалаһы хакимиәте башлығы урынбаҫары Илгиз Хәйруллин менән Баймаҡ районы хакимиәте башлығы урынбаҫары Радмир Иҫәнбаев та өс әҙип хаҡында йылы тойғолары менән уртаҡлашты. Байрамды Резеда Юлдашева, Фәриҙә Уйылданова, Таңсулпан Мусина, Садиҡ Шаһыбалов, Хәлил Фәтихов башҡарыуындағы моңло йырҙар, Радик Хәлиловтың йөрәк елкендергес бейеүе, Дәүләт Ҡадировтың ҡурай моңо биҙәне. Кисә һуңында район хакимиәте башлығы Рим Сыңғыҙов һөйөнөслө хәбәр еткерҙе: районда шағир Рәмил Ҡол-Дәүләт исемендәге премия булдырыласаҡ.

Икенсе көн яҙыусылар Ишҡол урта мәктәбендә әҙәби осрашыу үткәрҙе. Күҙгә-күҙ ҡарап ихлас аралашыу, шиғырҙар тыңлау, яҙыусыларҙан иҫтәлекле бүләктәр алыу онотолмаҫ булып хәтергә уйылды.

## Хәйерле юл, «Ҡуңырбуға»!

Белорет ҡалаһының үҙәк китапханаһында «Ҡуңырбуға» йәмәғәт ойошмаһының сираттағы күсмә семинары уҙғарылды. Унда Белорет, Әбйәлил, Учалы райондарында ижад итеүсе яҙыусылар һәм һәүәҫкәр композиторҙар ҡатнашты. Семинарҙың көн тәртибенә ойошмала 2013 йылда башҡарылған эштәр буйынса ҡыҫҡаса отчет һәм Әнисә Аҫылғужина менән Мәрйәм Сәлмәнованың ҡулъяҙмаларын тикшереү ҡуйылды. Ойошма тарафынан башҡарылған эштәр менән уның идара рәйесе Мәүлит Ямалетдин таныштырҙы. Егерменән ашыу кеше ҡатнашҡан семинар ултырышында Әнисә Аҫылғужинаның хикәйәләрҙән һәм нәҫерҙәрҙән төҙөлгән ҡулъяҙмаһы Башҡортостан Яҙыусылар союзының проза секцияһына, Мәрйәм Сәлмәнованың кескәйҙәргә арналған шиғырҙарҙан төҙөлгән ҡулъяҙмаһы балалар әҙәбиәте секцияһына тәҡдим ителде. Семинарҙың икенсе өлөшөндә яҙыусылар менән композиторҙар Белорет ҡалаһының китап һөйөүселәре менән осрашып, уларға үҙҙәренең йыр-моңдан туҡылған ижади күстәнәстәрен бүләк итте.

## Ҡарасауғлан иҫтәлегенә

Башҡортостандың халыҡ шағиры Ҡәҙим Аралбай менән шағирә Сулпан Миңлебаева Төркиәлә Ҡарасауғлан иҫтәлегенә бағышланған XII халыҡ-ара шиғриәт кисәләрендә ҡатнашты. Әзербайжан, Ҡаҙағстан, Ҡырғыҙстан, Төркиә һәм Рәсәй Федерацияһы өлкәләре – Алтай һәм

Яҡут республикаларынан шағирҙар саҡырылған был сара Тарсус ҡалаһында үтте. Ә Тоҡат ҡалаһында үткән сараларҙа шағирә Рәсимә Ураҡсина уңышлы сығыш яһаны.

## «Аҡ торналар» тантанаһы

Дағстанда донъяға билдәле Рәсүл Ғамзатовтың тыуыуына 90 йыл (1923 – 2003) тулыуына арналған тантаналар үтте. Ағымдағы йыл республикала Рәсүл Ғамзатов йылы тип иғлан ителгән һәм һәр мәктәптә, урта белем биреү һәм юғары уҡыу йорттарында, ижади ойошмаларҙа мәшһүр шағирҙың ижадына арнап дәрестәр, осрашыуҙар, фестивалдәр, конкурстар үткән. Әйткәндәй, бындай саралар бер Дағстанда ғына түгел, Рәсәйҙең күп төбәктәрендә, шул иҫәптән йәй башында баш ҡалабыҙ Өфөлә лә уҙғарылды. Киң илебеҙҙең барлыҡ өлкә, республикаларынан, Мәскәү, Санкт-Петербург, башҡа ҙур ҡалаларҙан, Мысыр, Ираҡ, Иран, Алжир, Сүриә, Вьетнам, Әрмәнстан, Украина, Белоруссия, Тажикстан, бүтән яҡын һәм алыҫ илдәрҙән килгән әҙиптәр, тәржемәселәр, халыҡ шағирының дуҫтары йыйылды. Иҫтәлекле юбилейҙа Башҡортостандан тәржемәсе Илгиз Кәримов менән яҙыусы Әмир Әминев ҡатнашты.

Саралар 8 сентябрҙә, Рәсүл Ғамзатовтың тыуған көнөндә, Тарки тауҙағы шағир ҡәберенә баш эйеүҙән һәм гөлләмәләр һалыуҙан башланды. Артабан ҡунаҡтар ҡала тарихы музейында юбилейға махсус асылған бай йөкмәткеле күргәҙмәне ҡараны. Күргәҙмә шағирҙың әҫәрҙәре, төрлө йылдарҙа төрлө кешеләр менән төшкән фотографиялары менән биҙәлгәйне. Йыйын ҡунаҡтары шағир исемен йөрөткән милли китапханала шиғриәт бәйгеһендә ҡатнашты. Һәр ҡунаҡ, шулай уҡ Дағстандың йәш шағирҙары, рус һәм авар телдәрендә үҙҙәренең шиғырҙарын уҡығас, комиссия уларға баһа бирә барҙы. Бәйгелә 20-гә яҡын шағир ҡатнашты, һөҙөмтәлә билдәле Рәсәй шағирәһе Лариса Кондакова еңеүсе тип табылды. Тажикстандың халыҡ шағирәһе Зөлфиә Атауллоева – икенсе, Сыуашстандың халыҡ шағиры Валерий Турғай өсөнсө урынды яуланы. Еңеүселәргә Рәсүл Ғамзатовтың юбилей уңайы менән сығарылған китаптары, аҡсалата премиялар бирелде. Әлеге бәйгенән тыш, «түңәрәк өҫтәл» артында Рәсүл Ғамзатовтың, шулай уҡ башҡа шағирҙарҙың әҫәрҙәрен рус теленә тәржемәләү, ғөмүмән, бөгөнгө көндәге тәржемәләр хаҡында оло һөйләшеү булды. Эйе, СССР тарҡалғандан һуң тәржемә мәктәбе лә юҡҡа сыҡты; республикала – төп ете тел, бер-береһен аңламайҙар, үҙ-ара аңлашыу өсөн мотлаҡ рус теленә ауҙарырға кәрәк. Проблема, әлбиттә, ҙур һәм ул бер Дағстанда ғына булһа икән…

Бөйөк шағирҙың ғүмерлек музаһы – хәләл ефете Патимат Ғамзатова исемен йөрөткән һынлы сәнғәт музейындағы күргәҙмәне ҡарау ҙа шулай уҡ бер кинәнес булды. «Изгелек һәм именлек шағиры» тип аталған был күргәҙмә лә билдәле әҙиптең оло юбилейына бағышланған һәм республиканың төрлө быуын рәссамдары эштәренән ҡуйылған. Һынлы сәнғәт, графика, декоратив-биҙәү эштәре, әлбиттә, нигеҙҙә, шағир

образына арналған. Әүәл музейҙы Патимат үҙе етәкләһә, хәҙер директоры – кесе ҡыҙҙары Сәлихәт Ғамзатова.

Кисен А.-П. Салаватов исемендәге Ҡумыҡ дәүләт музыкаль-драма театрында шағирҙың «Горянка» поэмаһы буйынса ҡуйылған спектакль күрһәтелде.

Икенсе көнө иртәнсәк М. Горький исемендәге Рус дәүләт драма театры янындағы шағир һәйкәленә сәскәләр һалғандан һуң Ленин комсомолы исемендәге паркта «Аҡ торналар» – Рәсүл Ғамзатов көндәре рәсми башланды. Тантанала республиканың, Рәсәйҙең төрлө төбәктәре, ижади союздар, мәҙәниәт ойошмалары етәкселәре, төрлө илдәр вәкилдәре сығыш яһаны һәм 27-се тапҡыр үткәрелгән «Аҡ торналар» фестивален асыу иғлан ителде. Шағирҙың оҙаҡ йылдар йәшәгән йортон ҡарау, «Ғамзатов дуҫтарының форумы» шулай уҡ онотолмаҫ тәьҫир ҡалдырҙы.

М. Горький исемендәге Рус драма театрында ҙур әҙәби-музыкаль сара – Р. Ғамзатов көндәренең иң мәртәбәле программаһы – уның шәхесен, донъя әҙәбиәтендә тотҡан урынын билдәләгән кисә булды. Сәхнәнән Дағстан президенты Рамазан Абдуллатипов, Чечня Республикаһы етәксеһе Рамзан Ҡадиров, Көньяҡ Осетияның элекке президенты Александр Дзасохов, Удмуртия президенты Александр Волков, Татарстан Дәүләт Советы рәйесе Фәрит Мөхәммәтшин, Дағстандың тәүге президенты Муху Алиев, Сәлихәт Рәсүл ҡыҙы, Дағстандың Яҙыусылар берлеге идараһы рәйесе, халыҡ шағиры Магомед Ахмедов, «Завтра» гәзитенең баш мөхәррире Александр Проханов, Мәскәү Яҙыусылар ойошмаһының беренсе секретары Владимир Бояринов, Дағстандың халыҡ шағиры Фазу Алиева һ.б. һүҙ алды. Сығыш яһаусылар мәшһүр шағирҙың бөйөк ижады хаҡында һөйләне, кешелек сифаттарына туҡталды. Һуңынан Дағстан ғына түгел, тотош Кавказ республикаларының һоҡланғыс сәнғәтен сағылдырған бай йөкмәткеле концерт булды.

Тантаналар 10 сентябрҙә шағирҙың йәнтөйәгендә – Хунзах районының Цада ауылында дауам итте. Ауылға етәрәк ҙур ялан уртаһында ике стеланы бергә ҡушып, ос яғына күктәрҙе иңләүсе аҡ торналар тубын сағылдырған мөһабәт мемориаль комплекс асылды.

## Өс ҡулъяҙма хупланды

Башҡортостан Яҙыусылар союзы идараһы шиғриәт секцияһының сираттағы ултырышында өс ҡыҙҙың – Таңсулпан Рәсүлдең, Зимфира Абушахманованың, Гөлнур Ҡыуатованың – шиғри ҡулъяҙмалары тикшерелеп, Тамара Искәндәриә, Рәмил Йәнбәк, Тәнзилә Дәүләтбирҙина, Мөнир Ҡунафин, Лариса Абдуллина, Гөлназ Ҡотоева йәш ижадсыларҙың тәүге ижад емештәренә ентекле анализ яһаны. Өс ҡулъяҙма ла ыңғай баһа алды.

## Ай-һай, Ғәйетбай!

Арыҫлан Мөбәрәков исемендәге Сибай башҡорт дәүләт драма театры үҙенең яңы сезонын премьера менән асты. Был юлы тамашасыға драматург Наил Ғәйетбайҙың «Эңер төшкәндә» драмаһы күрһәтелде. Спектаклде сәхнәгә Башҡортостандың халыҡ артисы Азат Нәҙерғолов ҡуйған.

Ҡаланың «Сулпан» дәүләт балалар театры ла үҙ сезонын Наил Ғәйетбайҙың халыҡ эпосы «Урал батыр» буйынса яҙылған пьесаһы менән асты. Был тамашаның да режиссеры – Азат Нәҙерғолов.

Иртәгәһенә театр ошо уҡ авторҙың «Себеш мажаралары» әкиәтпьесаһы буйынса режиссер Сәлих Әфләтүнов ҡуйған спектакль менән дә ҡыуандырҙы.

## Хикәйәләрең шәп, Ркаил!

Зәйнәб Биишева исемендәге Башҡортостан «Китап» нәшриәте «Ҡәрҙәшлек кәштәһе» серияһында татар әҙибе Ркаил Зәйҙулланың «Йәшел сирәмдә һары керәндил» исемле китабын башҡорт телендә сығарҙы. Ркаил Зәйҙуллин – Татарстан Республикаһының Ғабдулла Туҡай исемендәге дәүләт премияһы һәм Татарстан комсомолының Муса Йәлил исемендәге премияһы лауреаты. Ул поэзия һәм прозала, шулай уҡ драматургия һәм публицистика өлкәһендә лә әүҙем эшләй.

Яңы китаптың – хикәйәләр йыйынтығының исем туйы әҙәби-музыкаль кисә төҫөн алды. Унда нәшриәт директоры И. Йәндәүләтов, баш мөхәррир З. Ҡарабаева, мөхәррир Р. Камал, тәржемәсе Ғ. Ғәлимова, саҡырылған ҡунаҡтарҙан Мар. Сәлим, Ә. Әминев, С. Шәрипов, М. Ҡунафин, М. Закиров һ.б. сығыш яһаны. Сараны республикабыҙҙың күренекле һәм йәш артистары концерт номерҙары менән биҙәне. Һуңынан әҙәбиәт һөйөүселәргә татар әҙибе автографлы китаптарын бүләк итте.

## Китаптың исем туйы

М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетында Татарстандың халыҡ шағиры, Ғ. Туҡай исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Роберт Миңнуллиндың Башҡортостан кешеләре хаҡындағы «Әй, ғәзиз яҡташтарым!» тип аталған китабының исем туйы булды.

Кисәне университеттың проректоры профессор Венер Шәйәхмәтов асты һәм яҡташыбыҙҙы уникаль китабы менән ҡотлап, рәхмәт белдерҙе. Артабан Ҡәҙим Аралбай, Ирек Кинйәбулатов, Хәсән Назар, Гөлфиә Юнысова, Факиһа Туғыҙбаева, Ләйсән Кәшфи, Марсель Сәлимов йылы һүҙҙәр, шағирға арнауҙар менән сығыш яһаны. Фәнүнә Сиражетдинова, Иҙрис Кәлимуллин һ.б. күренекле сәхнә оҫталары, университет һәүәҫкәрҙәре сараны музыкаль яҡтан илһамлы биҙәне.

Университетта Р. Миңнуллин ижадына арнап ғилми-ғәмәли конференция ла уҙҙы. Унда Башҡортостан, Татарстан, Сыуашстан, Мари-Эль, Мордва республикалары педагог-ғалимдары, студенттар ҡатнашты.

**Ҡотлайбыҙ!**

*Башҡортостан Республикаһы Президенты Указына ярашлы, яҙыусы, йәмәғәт эшмәкәре* ***Мәрйәм Сабирйән ҡыҙы БУРАҠАЕВА*** *Салауат Юлаев ордены менән бүләкләнде. «Ағиҙел» журналы коллективы, мөхәрририәте үҙенең күптәнге авторын юғары бүләккә лайыҡ булыуы айҡанлы ихлас күңелдән ҡотлай.*